Рәшит Шәкүр

# АРҘАКЛЫ БАШҠОРТТАР

Башҡортостан: 450 йыл Рәсәй менән бергә

Рәшит Шәкүр
Арҙаҡлы башҡорттар

Ғилми-биографик очерктар
Тулыландырылған 2-се баҫмаһы
Башҡортостан Республикаһы
Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде
КИТАП
ӨФӨ — 2005

УДК 82.-94=512.141 ББК 92 Ш 91
Рәшит Шәкүр
Ш 91 Арҙаҡлы башҡорттар. Ғилми-биографик очерктар. Тулыландырылған 2-се баҫмаһы. — Өфө: Китап, 2005. — 376 бит.
ISBN 5-295-02098-3

Энциклопедик пландағы очерктар һәм мәҡәләләр йыйынтығына республикабыҙҙың, милләтебеҙҙең рухи һәм матди үҫешенә ҙур өлөш индергән тарихи шәхестәр — башҡорт халҡының дәүләт, йәмәғәт һәм хәрби эшмәкәрҙәре, ҡаһарман яугирҙар, ғалимдар, шағирҙар һәм яҙыусылар, сәнғәт оҫталары хаҡында ғилми-биографик материалдар тупланды.

УДК 82.-94=512.141 ББК 92
ТП - 2005
ISBN 5-295-02098-3
© Шәкүр Рәшит, 2005

Авторҙан

Илдең, милләттең рухи көсөн, ҡеүәтен, кешелек донъяһында тотҡан урынын иң элек уның бөйөк кешеләре, оло аҡыл эйәләре, илем, халҡым тип йәшәгән ҡаһарман рухлы заттары билдәләй. Ә халыҡ үҙенең данлыҡлы улдарын һәм ҡыҙҙарын белергә, улар менән ғорурланырға, һәр быуын улар өлгөһөндә тәрбиәләнеп, фәһем алып үҫергә тейеш. Был йыйынтыҡҡа илаһи башҡорт донъяһы күгендә балҡып торған аҫыл заттарыбыҙ — атаҡлы тарихи шәхестәр, мәшһүр дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, хәрби уҙамандар, хеҙмәт, фән һәм мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт, халыҡ ижады өлкәһендә ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән, рухи һәм матди донъябыҙға оло мәртәбә килтергән милләттәштәребеҙ хаҡында ғилми-биографик очерктар тупланды. Ул, әлбиттә, һис кенә лә, хатта яҡынса булһа ла, тулылыҡҡа дәғүә итә алмай. Бында әлегә ни бары дүрт тиҫтәнән артыҡ биография индерелде. Ә беҙҙең ошо махсус рубрика аҫтында сығарырға ниәтләнгән исемдәр әле хәҙер үк йөҙ илленән артып китә. Был оҙаҡ йылдар буйы ең һыҙғанып эшләүҙе талап иткән ғилми-ижади бурыс.

Китапта ғилми-биографик очерктарҙы хронологик тәртиптә урынлаштырыу маҡсатҡа ярашлыраҡ тип табылды. Сөнки һәр бер шәхес — үҙенең бар булмышы менән үҙ тарихи дәүеренең вәкиле. Китап эсенә тупланған был биографик очерктар тарихи эҙмә-эҙлелек, тарихи үҫеш панорамаһын күҙ алдына килтерергә, халыҡ яҙмышының шәхестәр яҙмышы аша үткән бербөтөнлөгөн төҫмөрләргә булышлыҡ итә.

Башҡорт хан*
(XII быуат)



Башҡорт хан.
А. Галин һүрәте.

Башҡорт — рус кенәзлектәренең сәйәси ваҡиғаларында әүҙем ҡатнашыусы ҡыпсаҡ ханы. Унын исеме рус йылъяҙмаларында[1] бер нисә тапҡыр иҫкә алына. Сығышы буйынса ул Аҙау һәм Ҡара диңгеҙҙәр ҡушылдығында йәшәгән ишле ҡыпсаҡ ырыуынан; унда Урал башҡорттары менән тамырҙаш башҡа ҡәбиләләр һәм ырыуҙар ҙа ингән. Башҡорт ханы урҙаһының 20 мең кешеһе булған[2]. XII быуаттың 50-се йылдарында Башҡорт Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйында иң көслө ҡыпсаҡ ханына әүерелә. 1151 йылда хан Ростов-Суздаль кенәзе Юрий Долгорукий, Чернигов кенәздәре Изяслав һәм Владимир Давыдовичтар менән берлектә бөйөк Киев кенәзе Изяслав Мстиславичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан. Юрий Долгорукийҙың ғәскәре Киевты алыр өсөн Днепрҙың уң ярына сығырға йыйына. Быныӊ өсөн улар, уңайлы урын эҙләп, йылға буйындағы Заруб ҡалаһына килә (хәҙер Монастырск утары, Киев өлкәһенең Зарубинцы ауылынан 1,5 саҡрым төньяҡтараҡ. — Авт.). Долгорукий ғәскәре сафындағы ҡыпсаҡтар эйәр-өпсөндәре, яу-яраҡтары менән Днепрҙа сирҡаныс ала һәм тиҙ генә йылғаны йөҙөп тә сыға. Шул саҡта ғына Юрий Долгорукий ғәскәренә йылғаны һалдарҙа йөҙөп сығырға мөмкинлек тыуа. Улар ҡыпсаҡтар менән берлектә Изяслав полктарын Василев (хәҙер Киев өлкәһендәге ҡасаба. — Авт.) ҡалаһына тиклем сигендергән. 1151 йылдың 5 майында Изяслав һәм Юрий ғәскәрҙәре Рутец йылғаһы янында бәрелешә. Ян-яҡтан һаҙлыҡ һәм Бәләкәй Рутец йылғаһы ҡамасаулағанға күрә, Долгорукий полктары үҙҙәренең һан яғынан өҫтөнлөгөн файҙалана алмай. Ростов-Суздаль кенәзенең ғәскәрендәге хәрби тәртип емерелә. Башҡорт ханының уҡсылары ла дошманға уҡ ямғыры яуҙыра-яуҙыра сигенә. Яугирҙарҙың күбеһе болғансыҡ Рутец йылғаһында батып үлә,

бер өлөшө әсир төшә. Владимир Давыдович һәләк була, ә ҡатыны (йылъяҙмала исеме юҡ. — Авт.) Башҡорт ханына ҡаса һәм уға кейәүгә сыға.

1157 йылда бөйөк Киев кенәзе Юрий Долгорукий вафат булып ҡалғандан һуң, уның урынына Изяслав Давыдович Черниговский килгән. Ул бай Галич кенәзлеген баҫып алыу уйы менән яна. Тик яуға йыйынған арала Ярослав Галич менән Мстислав Волынскийҙың берләшкән көстәре Киевҡа яҡынлай һәм Белгородты (хәҙер Киев өлкәһенең Белгородка ауылы) баҫып ала. Был ҡала Киев ерендә әһәмиәте буйынса икенсе урында торған. Изяслав, дошмандарҙың көсө байтаҡ икәнен тойоп алғас, туғаны Святослав Владимировичты ҡыпсаҡтарға ярҙам һорарға ебәрә. Башҡорт үгәй улының килеүенә бик ҡыуана һәм, эштең нимәлә икәнен аңлағас та, Изяславҡа ярҙамға ашыға. 20 мең башҡорт яугиры Волгородҡа килгәндә, ҡала инде яуланған була. Башта Изяслав еңеүгә ышанһа ла, уның ғәскәре сафында Русҡә хеҙмәт итеүсе байтаҡ төрки халыҡтары дошман яғына сыға. Изяслав ҡаса, ә Башҡорт Юрьевҡа (хәҙерге Киев өлкәһендәге Белая Церковь ҡалаһы) сигенә.

1160 йылда Башҡорттоң Изяслав менән Чернигов ҡалаһына һөжүмдә ҡатнашлығына ишара яһала: тарихта был ваҡиғаға ҡарата «ҡыпсаҡтар шундай эш эшләргә, ауылдарҙы яндырырға, кешеләрҙе ҡулға алырға өлгөрҙө» тигән юлдар бар.

Тиҙҙән Изяслав менән Башҡорт хан Смоленск ерҙәренә үтеп ингән һәм бик күп ерҙәрҙе ҡола яланға әйләндергән. Хан ғәскәре 10 меңдән ашыу кешене алып китә һәм мул табышҡа юлыға.

1161 йылдың февралендә Башҡорт Изяслав Давыдовичҡа Киевты алырға ярҙам итә. Тик һуңынан улар уңышһыҙлыҡҡа осрай. Ҡаты яраланған Изяслав Киев монастырында вафат була.

XII быуаттың 60—70-се йылдарында рус кенәзлектәренең ҡыпсаҡтарға ҡаршы ойошторған һәләкәтле яуҙары Башҡорт урҙаһының да көсөн ныҡ ҡына ҡаҡшата. Бынан һуң Башҡорт көнбайыш ҡыпсаҡ ханы Көбәктең вассалы булып китә һәм 1184 йылда рус кенәздәренең ҡыпсаҡтар менән һуғышында ҡатнаша. 1184 йылдың 30 июнендә Башҡорт Көбәк хан менән бергә әсиргә эләгә һәм (В. Н. Татищевтың мәғлүмәттәре буйынса. — Авт.) ҙур түләү арҡаһында ҡотҡарыла. Рус йылъяҙмаларында артабан Башҡорт тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Уның ҡыпсаҡтарҙың Ҡоншаҡ хан етәкселегендә Русҡә ҡаршы яуында (1185 йыл, «Слово о полку Игореве». — вт.) ҡатнашыуы йәки Уралға күсеүе ихтимал.

Күп кенә тикшеренеүселәр (Н. А. Баскаков, Н. В. Бикбулатов. — Авт.) «Башҡорт» исеме ҡыпсаҡ берекмәһенең эре ырыу-ҡәбиләһе атамаһынан килеп сыҡҡан тип иҫәпләй. Был шулай уҡ ҡыпсаҡ халҡы формалашыуында боронғо башҡорт элементтары булыуын иҫбатлай һәм башҡорттарҙың рустар менән

тәүге бәйләнештәре тураһында һөйләй.

* Мәҡәләнең авторы И. Күсемов.

[1] Рус йылъяҙмаларының тулы йыйынтығы: 1-се том. 395-се бит; 2-се том. 501-се бит; 9-сы том. 213-сө бит; 38-се том. 150-се бит.

[2] Ипатьев йылъяҙмаһы, 1159 йыл.

* * *

Әҙәбиәт: Башҡортостан археологияһы һәм этнографияһы. Өфө, 1971. IV т. 248, 325-се биттәр; Кузеев Р.Г. Происхождение башкирского народа. М., 1974. 154, 456-сы биттәр; Хөсәйенов Ғ.Б. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. 194—196-сы биттәр; Баскаков Н.А. Тюркская лексика в «Слове о полку Игореве». М., 1985. 71—72-се биттәр; Бикбулатов Н.В. «Башҡорт» этнонимы. Өфө, 1987. 41-се бит; Плетнева С.А. Половцы. М., 1990. 104, 106, 115-се биттәр; Күсемов И., Күсемова Л. Башҡорттар һәм Боронғо Русь // Башҡортостан. 1992. 27 октябрь; Күсемов И. Ҡыпсаҡ ханы Башҡорт. Ағиҙел. 1993. № 4.

Ҡол Ғәли
(1170 йылдар тирәһе — XIII быуаттың тәүге яртыһы)



Ҡол Ғәли.
Ф. Ислахов һүрәте

Урал-Волга төбәгендә Болғар осоро яҙма әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихында иң мөһим урынды тотҡан, шиғриәтебеҙҙең шишмә башын хасил иткән берәгәйле поэтик ҡомартҡы бар. Ул — башҡорттар һәм татарҙар араһында телдән дә, ҡулъяҙма хәлендә лә (күп төрлө күсермәләрҙә. — Авт.) киң таралған, оҙон быуаттар буйы быуындан быуынға, ҡулдан ҡулға тапшырыла килгән, уҙған быуаттың 30-сы йылдары аҙағынан Ҡазан типографияларында айырым баҫма булып сыҡҡан, халыҡ араһында киң танылыу яулаған һоҡланғыс һәм илаһи мөхәббәт дастаны — «Ҡисса-и Йософ» (йәиһә «Йософ китабы», «Йософ үә Зөләйха»). Был бөйөк әҫәрҙең авторы — боронғо башҡорт һәм боронғо болғар шағиры, әйле ырыуы башҡорто Ҡол Ғәли.

Шағирҙың тормошо һәм ижады хаҡында үҙе йәшәгән дәүерҙә теркәлгән тарихи сығанаҡтар һаҡланмаған. Уның исемен, затын аныҡ ҡына күрһәткән мәғлүмәттәр күренекле башҡорт уҡымышлыһы, шағир һәм ғалим Тажетдин Ялсығолов әл-Башҡордиҙың XVIII быуат аҙағында — XIX быуат баштарында яҙылған «Тәуарихе Болғариә» тигән киң билдәле тарихи-әҙәби хеҙмәтендә әйле ҡәүеме башҡорттарының шәжәрәһе рәүешендә урын алған. Был әҫәрҙә Т. Ялсығолов, әйле ырыуы башҡорттарының шәжәрәһен килтереп, үҙенең ун һигеҙенсе быуын боронғо нәҫеллек ебе Ҡол Ғәлигә барып тоташҡанлығын раҫлай. «Тәуарихе Болғариә»гә индерелгән был шәжәрәне үҙ ваҡытында (1897 йыл) Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев «Әй башҡорттарының нәсәбнамәһе» тигән исем аҫтында үҙенең атаҡлы «Йәдкәр» тигән йыйынтығында баҫтырып сығарған. Беҙ уны «Йәдкәр»ҙең 1984 йылғы баҫмаһы буйынса килтереп үтмәксебеҙ.

Иң әүәл — әйле башҡорттарының Ҡол Ғәлигә тиклемге быуындарының ил башы, башҡорт ханы Иштәктән (йәиһә Истәктән) башланған өлөшөн күрһәтәйек: Иштәк — (уның улы) Бәкатун — Әйле — Туҡый хан — Айҙар хан — Сәйет хан — Әмир хан — Солтанморат хан — Сәлим хан — Илһам хан — Ғабдулла хан — Ғәлим бәк — Мирхажи — Ҡол Ғәли. Шәжәрәнең был өлөшөнән күренеүенсә, Ҡол Ғәлиҙең ата-бабаларының Туҡый хандан алып Ғәлим бәккә тиклем туғыҙ быуыны Болғар дәүләтендә арҙаҡлы хандар династияһын билдәләй. «Нәсәбнамә»лә боронғо Иштәк хан тураһындағы мәғлүмәттәр иғтибарҙы йәлеп итә:

«Иштәк йәки Истәк, был камил ир булды, Ҡәғбәгә барҙы, сыҡ-суҡ тәүәләр* ҡорбан әйләне, Тәүрат үә Инжилде камил белер ине, ғилемлектә тиңе юҡ ине. Был Иштәктән суҡ улдар булды. Төп йорто Аму даръяһында ине. Оло улы Тамъян, икенсеһе Үҫәргән, өсөнсөһө Күбәләк, дүртенсеһе Бәкатун, бишенсеһе Сарт, алтынсыһы Тырнаҡлы, етенсеһе Түбәләсле, һигеҙенсеһе Дыуан».[1]

Бер ыңғай әйтеп китәйек: Иштәктең «суҡ улдары», йәғни ете улының исемдәре һәммәһе лә башҡорттоң киң билдәле ырыу-ҡәбилә атамалары менән тап килә. Шул ете улдың бишенсеһе Сарт тип аталыуы иһә айырым бер әһәмиәткә эйә. Сөнки башҡорт араһындағы һарттарҙы тарихсы һәм этнографтарҙың, исеменең һәм элек йәшәгән ерҙәренең уртаҡлығына ҡарап, үзбәктәр менән бутап йөрөтөүҙәренә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға мөмкинлек бирә. Шәжәрә буйынса, Иштәктең төп йорто Аму даръяһында булып, уның улдары Уралда мәҡам тотмоштар, һарт башҡорттары иһә, Урта Азияла ҡалып, үзбәк менән аралашып, һуңғы быуаттарҙа Уралға, үҙ туғандары араһына килеп һыйынған булып сыға. Тимәк, артабан һарт тигәндә, башҡорттоң үҙенең һарт тигән ырыуы тураһында һүҙ алып барыласаҡ.

Әйле ҡәүемен Иштәктең дүртенсе улы Бәкатундан тыуған Әйле башлап ебәргән, тип күрһәтелә. «...Әйле. Атаһы (Бәкатун) йортонда, Миәс даръяһында, атаһы урынында илле йыл шаһ булып, туҡһан йыл ғүмере булып, Миәс даръяһында дәфен булынмыш»[2].

Ҡол Ғәлиҙең үҙе һәм үҙенән һуңғы нәҫел-нәсәплек ебе тураһында түбәндәгеләр билгеле.

Ҡол Ғәлиҙең атаһы Мирхажи, уның атаһы Ғәлим бәк, уның атаһы Ғабдулла хан булған. Ғабдулла хан Болғарҙа илле йыл ханлыҡ ҡылған. Әммә Ғәлим бәк заманында ханлыҡ һәләкәткә осрай. Болғар дәүләтен татар-монгол яуы баҫып ала. Ғәлим бәк тә, уның улы Мирхажи ҙа Кәшан ҡалаһында береһе мөҙәрис, икенсеһе имам булып тора. Вафаты — ул замандың Башҡорт йортона ҡараған Зәй тамағында.

«...Ҡол Ғәли. Харәзмдә ҡырҡ биш йыл мөҙәрис булып, Ҡытай ғәскәренән

ҡасып Үргәнескә килеп, унан Ҡырғыҙға, унан атай йортона, Зәй тамағына килеп, ...Бүләр ҡалаһын бина ҡылмыштар»[3].

Ҡол Ғәлиҙән Тажетдин Ялсығоловҡа тиклемге быуындар:

Ҡол Ғәли. Уның улы Мирғәли («Үргәнестә мөҙәрис булмыш, шунда вафат»), Мирғәлиҙең улы Миршәриф («Үргәнестә үә Хиуала алтмыш йыл мөҙәрис булып, Хиуала вафат булды»).

Уның улы Мирсәйет («дәүерендә унан ғалим һәм фазил әҙәм булманы, һис бер фән ҡалманы, һәр беренә бер хашийә әйтте»[4].

Уның улы Нурсәйет («Үргәнес, Хиуа үә Ҡонғратҡа егерме өс йыл хан булып, ҡыҙылбаштар[5] шаһы Наҙир шаһтың улдары үлтерҙеләр»).

...Сәйҙәш ибн Нурсәйет («Әй һыуының башында, Сәйҙәш тигән түбәлә, йорт яһап, ханлыҡ тотто, башҡорт хандары үлтерҙеләр»).

«Сәйҙәштең бер улы Ҡоштаймаç. Бынан Ҡоштаймаç әйлеһе булалыр.

Тенеш (Тыныш). Бының ике улы: Көҙөй, Ҡошсо. Былар дәхи[6] башҡорт хандары.

Көҙөй. Бынан Өфө өйәҙе көҙөй әйле башҡорттары».

Артабан: Яныш — Бабыш — Үлмәç хажи ибн Бабыш — Ғәбдерахман хажи — Ялынбай мулла — Ҡотлобулат мулла — Ейәнсура — Йәнтимер — Мәметҡол — Ялсығол хажи.

«Хәҙрәт Тажетдин бин хажи Ялсығол. «Çөбәтел ғажизин» исемле китапҡа «Рисаләи Ғәзизә» намында шәрех яҙмыш. Башҡорт йортонда дәстгир[7] китаптыр».

Тажетдин Ялсығолов үҙ ырыуының, йәғни әйле башҡорттарының нәсәбнамәһен ошондай һүҙҙәр менән тамамлай: «Беҙ ижтиһадыбыҙҙы сарыф әйләп, Әҙәм ғәләйһум заманынан алып был заманғаса тамам, һикһән бишенсе баба беҙ булдыҡ. Әй уландарым, һеҙ һәм яҙығыҙ!»[8]

Ҡол Ғәли, тимәк, башҡорттоң кешелек донъяһында меңәрләгән йыллыҡ тарих төпкөлдәренән килгән ырыу тармағының затлы уҡымышлылар һәм арҙаҡлы хандар династияһының бөйөк бер вәкиле. «Ҡисса-и Йософ» дастаны – башҡорт, даһийының төрки халыҡтар һәм, ғөмүмән, Шәреҡ рухи мәҙәниәте үçешенә индергән үлемһеҙ әçәре.

Поэма 1212—1233 йылдар эсендә яҙылып, Урал-Волга буйҙарын татар-монголдар баçып алыр алдынан (1236 йыл) тамамланған, тип фараз ителә. Авторҙың 45 йыл Харәзмдә мөҙәрис булып тороуы, яу ваҡытында ҡырғыҙҙарға ҡасып, аҙаҡ ата йортона — Зәй тамағына ҡайтыуы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе, ул йәшәгән дәүерҙәге башҡа ҡайһы бер исемдәр, ваҡиғалар менән сағыштырып ҡарағанда уның, тыуған ваҡыты 1174 йылдан алдараҡ булырға мөмкин тигән фараз[9] ышаныслыраҡ күренә.

«Ҡисса-и Йософ» поэмаһы — башҡорт, татарҙар араһында бөгөнгө көндә лә иң танылған әҫәрҙәрҙең береһе.

* * *

* Суҡ тәүәләр — күп дөйәләр.

[1] Өмөтбаев М. И. Йәдкәр. Өфө, 1984. 229-сы бит.

[2] Өмөтбаев М. И. Йәдкәр. 230-сы бит.

[3] Күрһәтелгән хеҙмәт. 231-се бит.

[4] Хашийә әйтте — аңлатма бирҙе.

[5] Ҡыҙылбаштар — фарсылар.

[6] Дәхи — йәнә, тағы.

[7] Дәстгир — ҡулдан төшөрелмәй уҡылған.

[8] Өмөтбаев М. И. Йәдкәр. 233-сө бит.

[9] Хусаинов Г.Б. Поэма «Кисса-и-Йусуф» Кул Гали: Поэтика. Проблематика. Язык произведения. Отв. ред. Р. 3. Шакуров. Уфа, 1988, 8-9-сы биттәр.

* * *

Әҫәрҙәр: Кул Гали. Кыйссаи Йосыф. Поэма. Казан, 1983; Ҡол Ғәли. Ҡисса-и Йософ, Өфө, 1993.

Әҙәбиәт: Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 190—197-се биттәр; Өмөтбаев М.И. Йәдкәр. Өфө, 1984. 229—232-се биттәр; Хусаинов Г.Б. Поэма «Кисса-и Йусуф» Кул Гали: Поэтика. Проблематика. Язык произведения. Отв. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1988. 124-се бит; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 1-се том. Урта быуаттар осоро. Өфө, 1991. 98— 127-се һ.б. биттәр; Кул Гали // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

## Ғилметдин Сәнжар Әл-Башҡорди
(XIII быуат урталары — XIV быуат аҙағы)

* * *

## Насретдин Әл-Насыри
(XIII быуат аҙағы — 1351)

Алтын Урҙа осоронда, бигерәк тә XIV быуат урталарынан, алыҫ ғәрәп иле Мысырҙа бер үк ваҡытта төрки телле фән һәм мәҙәниәт һиҙелерлек үҫеш ала. Һарайҙағы ҡаршылыҡтар, тәхет өсөн талаш-тартыш арҡаһында Урал, Волга, Яйыҡ буйҙарынан, Харәзмдән, Ҡырымдан бик күп ғалимдар, әҙиптәр Мысырға күсә. Үҙ сиратында Мысырҙа был дәүерҙә башлыса төркиҙәрҙән торған (уғыҙҙар, күберәк ҡыпсаҡтар) мәмлүктәр династияһы урынлаштырылған була. (Мәмлүк солтандары был илдә 1250 йылдан алып 1803 йылға тиклем хакимлыҡ итә.)

Боронғораҡ дәүерҙә башҡорттар донъя халыҡтары тарихында һиҙелерлек ҡатнашҡан халыҡ булғандыр, күрәһең. Болғар дәүләтендә әйле башҡорттарының хандар династияһы, Дәшти Ҡыпсаҡта Башҡорт хандың хаким булып тороуы, урта быуаттарҙа Иранда Ғазан хан тигән башҡорттоң генерал дәрәжәһенә өлгәшеүе, Болғар дәүерендә йәшәгән Яҡуб ибн Ноғман, Ҡол Ғәли, йәнә башҡа шөһрәтле исемдәр шул фекерҙе дәлилләй.

Алтын Урҙала урынлашҡан ҡыҫымға түҙә алмайынса йә башҡаса сәбәптәр арҡаһында Мысырға йыш ҡына башҡорттар ҙа барып юлыҡҡан. Улар араһында юғары ҡатлам мәмлүктәренән Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин әл-Насыри үҙҙәрен дәүләт эшмәкәрлеге, ғилем һәм шиғриәт өлкәһендә танытҡандар.

Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡордиҙың Мысырҙа әмир булып торғанлығы билдәле. Уның исеме Әл-Факиһи тигән ғәрәп ғалимының «Мәккә тарихы»нда 1284 һәм 1290 йылдарҙағы ваҡиғалар айҡанлы телгә алына. Тәүге осраҡта ул: «Мәккәнең башлығы Әбүнума менән Мысыр әмире Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди һүҙгә килештеләр, шул арҡала Әбүнума Мәккәнең ҡапҡаларын бикләтте һәм берәүҙе лә ҡалаға индермәне...»[1] — тиелгән. Бынан ары китапта ошондай мәғлүмәт бирелә: «Мысырҙан хажға килеүселәр каруанының башы — Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди ине».

* * *

Насретдин әл-Насыри хаҡында тарихсы Морат Рәмзиҙең ошондай һүҙҙәре бар: «Башҡорт Насретдин әл-Насыри үҙенең сығышы менән ән Наср ибне әл-

Ғәзиз мәмлүктәренән. Хеҙмәте буйынса юғары үрләп властка өлгәшкән, аҡыллы һәм юғары дәрәжәле әмирҙәрҙән булған. Назим менән дә, нәҫер менән дә яҙған»[2]. Ғәрәп әҙәбиәтселәре һәм тарихсылары уның шәхесен, ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлеген юғары баһалаған. Ибне Хажар әл Ғаскалани (1372—1449) үҙенең «Әддөрөр әл-камино» («Йәшерен ятҡан ынйылар») тигән китабында үҙе телгә алған исемдәргә ҡарата, «иң ҙур дан һәм иң яҡты шөһрәтлек белдерәм», тигән. Ә Насретдин әл-Насыриҙың замандашы Ибне Зәмләкәни «ул әҫәрҙәрен үҙенең тәбиғи оҫталығы буйынса, шиғыр ҡағиҙәләрен һаҡламаҫтан яҙа ине»[3], тигән.

Беҙҙең дәүерҙә хәҙерге Мысыр ғалимы Әмин әл-Холи, Насретдин әл-Насыриҙың үҙ дәүерендә күренекле ғалим, әҙип икәнлеген билдәләп, «уның замандаштары тарафынан юғары баһаланған шиғри һәм сәсмә әҫәрҙәре лә билдәле»[4], ти.

Башҡорт Насретдин әл-Насыриҙың алыҫ илдәрҙән һәм йыраҡ дәүерҙәрҙән беҙгә әлегә күркәм исеме һәм даны ғына килеп еткән. Бәлки, арабыҙҙан, ғәрәп теле, әҙәбиәте, тарих белгестәре үҫеп сығып, уның ижади мираҫының аҙмы-күпме һаҡланып ҡалған өлөшөн үҙ илебеҙгә һәм үҙ телебеҙгә ҡайтарыусылар ҙа булыр әле, иншалла.

Насретдин әл-Насыриҙың тыуған йылы аныҡ ҡына билдәле булмаһа ла, донъя ҡуйған ваҡыты хаҡында мәғлүмәт йылы, айы, көнөнә тиклем ҡағыҙға теркәп ҡалдырылған: шағир һижрә йыл иҫәбе меңән 752 йылдың сәфәр айы 13-сө көнөндә (миләди иҫәбе менән 1351 йылдың 11 апрелендә) Дамаск ҡалаһында вафат була.

«Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин әл-Насыри, — тип яҙҙы профессор Ә. И. Харисов[5], — үҙҙәрен тыуған ерҙәрендә түгел, ә ғәрәп илендә танытҡандар. Быға уларҙың мәмлүклеге һәм юғары ҡатламға күтәрелеүе сәбәпсе булған. Ләкин урта быуаттарҙа башҡорттар Ғәрәбстанға бер мәмлүклек юлы менән генә бармағандарҙыр, тип әйтеп була... Заманының уҡымышлыраҡ кешеләре өсөн Мысырҙың «үҙенә тартыу» көсө шаҡтай булыу менән бергә, Волга һәм Урал буйы тормошоноң «үҙенән этеү» көсө лә ярайһы ғына булған, күрәһең. Көнсығыш Европа, шул иҫәптән Башҡортостан һәм уның бер өлөшө ҡараған Болғар дәүләте, XIII—XIV быуаттарҙа монгол-татар иҙеүе аҫтында ыҙаланып йәшәне... Башҡорт ҡәбиләләренең һәм ырыуҙарының бер халыҡ булып ойоша башлау процесы, шулай уҡ башҡорт иленең ижтимағи-иҡтисади һәм мәҙәниәт йәһәтенән үҫеше быуылып торҙо. Бына шуның һөҙөмтәһендә Алтын Урҙа режимы хакимлыҡ иткән ике йөҙ йылдан артығыраҡ ҡараңғы дәүер эсендә Башҡортостандың үҙендә заманына күрә әҙме-күпме билдәлелек алған бер генә шәхес тә күтәрелә алмаған. Күп булмаған уҡымышлылар араһында ҡыйыуыраҡтары, дин белемендә үҙҙәрен көслөрәк һиҙгәндәре йәки ижад

ҡомарҙары «ташып барғандары» йыш ҡына үҙҙәре уҡыған Мысырға һәм башҡа ғәрәп илдәренә кире китергә йәки, уҡыуҙы тамамлағас, ғөмүмән шунда тороп ҡалырға мәжбүр булған».

Ә.И. Харисовтың «йәшерен ятҡан ынйыларҙы» алыҫ замандарға сәйәхәт итеп кенә түгел, йыраҡ илдәргә барып та эҙләү һәм табыу бурысы тора тигән һүҙҙәре бөгөнгө көн өсөн дә мөһим.

* * *

[1] Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 194-се бит.

[2] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 1-се том. Урта быуаттар осоро. Өфө, 1991. 170-се бит.

[3] Харисов Ә.И. Күрһәтелгән хеҙмәт. 195-се бит.

[4] Амин аль-Холи. Связи между Нилом и Волгой в XIII—XIV вв. Сокращенный перевод с арабского. М., 1962. 31-се бит.

[5] Харисов.Ә.И. Күрһәтелгән хеҙмәт. 196-сы бит.

* * *

Әҙәбиәт: Морат Рәмзи. Тәлфиҡ әл-әхбар... 1-се том. Ырымбур, 1907. 327-се бит; Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 194—197-се биттәр; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 1-се том. Урта быуаттар осоро. Өфө, 1990. 170—171-се биттәр.

Исмәғил Тасимов
(XVIII быуат)

Башҡорт халҡының тарихында XVIII быуат барыһынан элек Рәсәй империяһын дер һелкеткән милли-азатлыҡ хәрәкәттәре — береһенән-береһе дәһшәтлерәк баш күтәреүҙәр менән билдәле. Был хәрәкәттәр осоронда Алдар Исәнгилдин, Ҡараһаҡал (Миңдеғол Юлаев), Батырша (Ғабдулла Алиев), Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Юлай Аҙналин кеүек маһир етәкселәр һәм бөйөк юлбашсылар күтәрелеп сыға. Шул уҡ дәүерҙә бөтөнләй башҡа төрлө эшмәкәрлектәре – Ватан мәнфәғәте өсөн фиҙаҡәр хеҙмәттәре менән Исмәғил Тасимов, Туҡтамыш Ишбулатов, Нәҙер Үрәҙмәтовтар ҙа дан ҡаҙана. Уларҙың тәүгеһе бөтөн Уралға, Рәсәйгә атаҡлы мәғдән белгесе һәм сәнәғәтсеһе булып танылһа, икенсеһе, Туҡтамыш Ишбулатов, мәғдәнсе һәм сәйәсмән, Өфө өйәҙе башҡорттарынан 1767 йылда Екатерина II тарафынан раҫланған Уложенный комиссия депутаты булараҡ тарихҡа инеп ҡала. Ҡазан даруғаһы башҡорт старшинаһы Нәҙер Үрәҙмәтов иһә 1754 йылда империяла тәү башлап нефть ҡыуҙырыу заводы төҙөү эшенә тотона. Ғөмүмән, башҡорттар Уралдың минераль-сеймал байлыҡтарын үҙләштереүҙә ғәйәт ҙур һәм мөһим роль уйнай. Бик күп тимер, баҡыр ятҡылыҡтарын асыу тарихы башҡорт мәғдәнселәренең һәм белгестәренең исемдәре менән бәйле. Боронғо алтын табыусылар — соҡсондар дәүеренән килгән белем һәм тәжрибә лә быуындан быуынға тапшырылыр булған. Ниһайәт, XVIII быуатта башҡорттар араһынан ҙур бер төркөм мәғдәнселәр, мәғдәнсе йүнселдәр категорияһы, хатта мәғдәнселектең нәҫелдән нәҫелгә күсеше үҫеп сыға. Был ҡатлам үҙенең ғәйәт күп һанлы булыуы, эшмәкәрлегенең киң йәйелеүе һәм оҙайлы булыуы йәһәтенән ҡабатланмаҫ күренеш тип иҫәпләнергә хаҡлы. Шуны ғына әйтеү ҙә етә: Уралда, айырыуса ул саҡтағы Пермь өйәҙендә, мәғдән сәнәғәтселәре XVIII быуаттың тәүге яртыһында формалаша, уларҙың эшмәкәрлеге, быуындан быуынға тапшырылып, шул уҡ быуаттың аҙағына тиклем өҙлөкһөҙ дауам итә. Әгәр ҙә тәүге быуын мәғдәнселәр араһында башҡорт феодалы Тасим Маймәтов күренекле урында торһа, артабан был эште уның улы Исмәғил Тасимов дауам итә. Исмәғилдең улы Исхаҡ Исмәғилев (русса документтарҙа — Измайлов) атай-олатай һөнәренә тағы ла дан һәм шөһрәт өҫтәй. Тасим Маймәтовтың тыуған ере — элекке Өфө өйәҙе Уҫы даруғаһы Мул-Гәйнә олоҫоноң Ҡуян ауылы. XVIII быуаттың тәүге яртыһында Пермь мәғдән сәнғәтселәренең күпселеге нәҡ бына шул гәйнә башҡорттары була (улар менән бергә бер нисә рус мәғдәнсеһе эшләй). Уларҙың иҫәбе 360 кешегә етә. Күпселеге Ҡуян ауылы йүнселдәре. Был шөғөл Үрге һәм Түбәнге Йоҡ (Юг), Ягошиха, Мотовилиха, Пыскор, Анненский, Висим баҡыр

иретеү заводтары төҙөлөү арҡаһында алға китә. Гәйнә башҡорттары, Тасим Майметов һәм бөтөн ауылы менән мәғдәнселек эшенә тотонған Ҡуян ауылы халҡы, үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә ҙур-ҙур мәғдән ятҡылыҡтары табып, әлеге заводтарҙы сеймал менән тәьмин итеп торалар. Мәғдән ятҡылыҡтары табыуҙағы һәм эшкәртеүҙәге тырышлыҡтары өсөн Себер, Ҡазан һәм Ырымбур заводтары Баш идараһының башлығы В.Н. Татищев Ҡуян ауылы башҡорттарына 1796 йылдың 6 мартында махсус указ менән рәхмәт белдерә. Пермь мәғдәнселәренең был дәүерҙәге эшмәкәрлеген ошондай мәғлүмәт бик асыҡ күрһәтә: Үрге һәм Түбәнге Йоҡ заводтарын сеймал менән тәьмин итеүсе мәғдән ятҡылыҡтарының 234-е мәғдән сәнәғәтселәренең ҡулында була, шул уҡ ваҡытта ҡаҙна мәғдән ятҡылыҡтарының һаны 76-ға ғына етә. (Әйткәндәй, был осорҙа мәғдәнселек эшендә йәнә башҡорт ерҙәренең көнсығыш төбәгендә — Себер даругаһы Салйоғот олоҫонан Сәләй Боҫконовтың исеме лә шаҡтай киң билдәле була. Әммә мәҡәләнең төп геройы Исмәғил Тасимов булғанлыҡтан, һүҙ Пермь мәғдән сәнәғәтселәре эшмәкәрлеге тураһында барасаҡ.) Илленсе йылдарҙа Ҡуян ауылынан Тасимовтар, Ҡолтайҙан Ҡолтаевтар, Ҡаҙмаҡтынан Ишбулатовтар эре мәғдән сәнәғәтселәре булып таныла. 1757 һәм 1759 йылдарҙа Пермь мәғдәнселәренең эшмәкәрлегенә ғәйәт ҙур йоғонто яһарҙай ваҡиға булып үтә: башта Йоҡ заводтары, унан һуң Ягошиха заводы ҡаҙнанан шәхси милекселәр ҡулына күсә. Үрге һәм Түбәнге Йоҡ заводтарына граф Иван Григорьевич Чернышев хужа булып ала. Әммә, завод хужалары менән мәғдән сәнәғәтселәренең мөнәсәбәттәре, заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итеү шарттары махсус килешеү менән нығытылған булыуға ҡарамаҫтан, граф Чернышев һәм уның баш приказчигы Федор Санников, закон менән иҫәпләшмәйенсә, бер ңисә йыл эсендә башҡорт мәғдәнселәренең Йоҡ заводтарын сеймал менән тәьмин итеүсе мәғдән ятҡылыҡтарын баҫып ала, өҫтәүенә ул ятҡылыҡтарҙағы 500000 бот мәғдәнде лә үҙләштерә. Исмәғил Тасимовҡа, мәғдәнсе гәйнә башҡорттарының мәнфәғәттәрен яҡлап, көслө һәм тәкәббер батша вельможаһы, уның оятһыҙ, яуыз приказчигы менән ҡара-ҡаршы тороп ауыр көрәш башларға тура килә. Бына ғәжәп — оҙаҡ йылдар буйы барған был көрәштә башҡорт мәғдәнселәре еңеп сыға һәм, ниһайәт, улар үҙҙәренең мәғдән ятҡылыҡтарын ҡайтарып алыуға, граф Чернышевтан күргән зыяндың бер өлөшөн түләтеүгә өлгәшәләр. Документтарҙан күренеүенсә, 1765 йылдың 24 февралендә башланған был көрәш 1770 йылдың 21 авгусында Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре өсөн еңеү менән тамамлана. Башҡорт мәғдәнселәре тарихында быны һирәк осрай торған күренекле ваҡиға тип иҫәпләргә була торғандыр. Был хаҡта ентеклерәк туҡталып үтәйек булмаһа.

Граф Чернышев менән Санниковтың баш-баштаҡлыҡтары арҡаһында

башҡорт мәғдәнселәренең йөҙәрләгән мәғдән ятҡылыҡтары, байтаҡ ерҙәре, Исмәғил Тасимовтың үҙенең генә лә ун мәғдән ятҡылығы ҡулдан китә. Уларға граф Воронцов заводтарына беркетелгән мәғдән ятҡылыҡтарында эштәрен дауам итеп, финанс йәһәтенән саҡ осон осҡа ялғап көн итергә тура килә. Юғарынан, Берг-коллегиянан, килгән комиссиялар, ғәҙелһеҙлекте, законһыҙлыҡты күрә тороп, бер нисек тә ярҙам итмәйҙәр. Хатта бер мәл Йоҡ заводтарындағы баш-баштаҡлыҡты тикшерергә генерал-прокурор кенәз Вяземский ҙа килә. Санниковтың яуызлыҡтарын үҙ күҙҙәре менән күрә күреүен, әммә ҡайтыуына уның үҙе өҫтөнән шул уҡ Санников Петербургка пасквиль* яҙып ебәрмәһенме! Белә ул нисек эш итергә. Граф Чернышев иһә мәсьәләне йомоп ҡалдырыу яғын ҡайыра. Ниһайәт, Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре исеменән Берг-коллегияға 1765 йылдың 24 мартында Йоҡ заводтарының хужалары тарафынан баҫып алынған баҡыр ятҡылыҡтарын һәм унда сығарылған мәғдән хаҡын ҡайтарып биреүҙе үтенеп һораған ғарызнамә барып төшә. «Табаҡ та ғына табаҡ» алты бит ҡағыҙға ентекләп яҙылған был хатҡа бер ыңғай тарих, әҙәбиәт, сәнәғәт белгестәренең дә иғтибарын йүнәлтеү урынлы булыр. Сөнки Өфө өйәҙе Уҫы даруғаһы Мул-Гәйнә олоҫо Ҡуян ауылы башҡорттары мәғдән сәнәғәтселәре Исмәғил Тасимов һәм Яҡуп Аҙнағолов (документта — Яков Аднагулов) тарафынан оҙон-оҙаҡ яҙылған был ғарызнамә киләсәктә XVIII быуат башҡорт эш ҡағыҙҙарының аҫыл бер өлгөһө булараҡ та ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр, моғайын. (Ә бит был ғына ла түгел: Исмәғил Тасимовтың Берг-коллегияға яҙған алда ҡараласаҡ тағы бер хаты һәм уның үҙенең Рәсәйгә тау эшенә нигеҙ һалыусы булып танылыуы милләтебеҙҙең аҡыл һәм талант ҡеүәһен бермә-бер күтәреп тора түгелме һуң!) Бер йыл үтеүгә, был ғарызнамәгә яуап итеп, Себер, Ҡазан һәм Ырымбур заводтары Баш идараһы кәнсәләре Берг-коллегияға, йәнәһе, граф И.Г. Чернышевҡа мәғдән ятҡылыҡтарын үҙләштергәне һәм башҡорттарҙан алынған мәғдән өсөн түләү һалыныуы тураһында рапорт бирә. Әммә, мәғдәнселәрҙең талабы дөрөҫ тип табылһа ла, рапорт, асылда, күҙ буяу өсөн төҙөлгән тигән фекер уята. Тасимовҡа мәсьәләне тамам хәл иткәнсе тағы дүрт йыл ярым буйы власть органдарының ишектәрен шаҡырға кәрәк була. Инде килеп 1770 йылдың 21 авгусында Екатерина II Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәренә 70 000 һум аҡса бүлеү тураһында, Берг-коллегияға төбәп, указ сығара. Был документта әйтелеүенсә, Сенатта граф Иван Чернышев менән мәғдән сәнәғәтселәре араһындағы бәхәс буйынса ҡаралған эш, йәнәһе, уларҙың үҙ ирке менән 70 000 һумға килешеүе менән тамамланған булып сыға. Екатерина II был сумманың 20 000 һумын мәғдән сәнәғәтселәренә ошондағы Берг-коллегиянан, 50 000 һумын Екатеринбургтағы баҡыр эштәре иҫәбенән түләргә бойора. Ун көн үтеүгә, 1770

йылдың 31 августында, Берг-коллегия Исмәғил Тасимовҡа 20 000 һум аҡса биреү тураһында документ төҙөй. Был документҡа (хәҙергесә әйтһәк, протоколға) мәғдәнселәр яғынан йәнә Әбдесәләм Өсәйенов, Мортаза Мерәсов, Аҡбаш Бикбулатов, Хәлил Илсекәев (документта яңылыш — Илепеев), Илмәкәс Ырыҫов, Төймөсә Мерәсов, Арыҫлан Ырыҫов ҡул ҡуйған, йәғни был кешеләр Исмәғил Тасимов менән бергә эшләгән мәғдәнселәр була.

Указ сығарылған сығарылыуын, әммә уға хатта батша үҙе ҡул ҡуйған булһа ла, был аҡсалар рудасыларҙың кеҫәһенә тиҙ генә килеп кергән, тиһегеҙме? Ах, шулай килеп сыҡһа икән дә бит. Исмәғил Тасимовҡа алаһы аҡсаларын әле тағы һигеҙ йыл көтөргә тура килә.

Әммә шуныһы мөһим: 1770 йылда Йоҡ заводтары яңынан ҡаҙна ҡарамағына күсерелә. Ун йылдан, 1780 йылда, Ягошиха заводы ла ҡаҙнаға алына. Заводтар өсөн баҡыр мәғдәне етештереүҙә элекке тәртиптәр аяҡҡа баҫтырыла, был иһә мәғдән сығарыусыларҙың хәлен еңеләйтеүгә булышлыҡ итә.

Пермдәге башҡорт мәғдән сәнәғәтселәренең күпме сеймал сығарыуы тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә уҡыусы өсөн ҡыҙыҡлы булыр. 1771 йылдан алып 1777 йылға тиклем улар заводтарға йыл һайын 340 меңдән алып 960 меңгә ҡәҙәр, 1777—1785 йылдарҙа уртаса 5-әр йөҙ мең бот сеймал тапшыра. 700 мең ботҡа еткән йылдар ҙа була. Артабан мәғдән сығарыу кәмеүгә табан китә. 1788—1792 йылдар эсендә, дөйөм алғанда, 1 миллион 170 мең 308 бот мәғдән сығарыла. Архив материалдарында Исмәғилдең улы Исхаҡ Измайловтың 1793 йылда мәғдән сығарыу эшен дауам итеүе тураһында мәғлүмәттәр бар.

Исмәғил Тасимов һәм мәғдәнсе гәйнә, йәғни Пермь башҡорттары, фәҡәт ошо мәғдән сығарыу эшмәкәрлеге менән дә тарихта ғәйәт ҙур һәм маҡтаулы урын алырға хаҡлы. Әммә Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре тотош Рәсәй империяһы алдында быуаттарҙан быуаттарға ҡалырлыҡ тағы бер хеҙмәт күрһәтә, шуның менән Исмәғил Тасимовтың исеме Рәсәйҙә һәм, әлбиттә, Башҡортостанда тау эшенә нигеҙ һалыусы булараҡ ил һәм милләтебеҙ тарихында күркәм урын ала.

Ә эш шунан башлана. XVIII быуаттың 50-се йылдарында Рәсәйҙә тау эштәре өлкәһендә юғары белем биреүсе уҡыу йорто асыу, илдең үҙендә тау сәнәғәте өсөн белгестәр әҙерләү мәсьәләһе өлгөрөп етә. Әммә был мәсьәлә тиҙ генә хәл ителмәй. Тау заводтарында етештереүҙең төп вазифалары һаман да немец белгестәре ҡулында ҡала. Ошондай шарттарҙа 1766 йылда билдәле ғалим академик И.Г. Леман, Тау училищеһы ойоштороуҙың мөһимлеген раҫлап, шул уҡыу йортонда уҡытыу программаһын билдәләп, махсус яҙма төҙөй. «Патриотические мысли о том, какую пользу развитию горного дела может оказать учреждение Горного кадетского корпуса» тигән был яҙмаға ла иғтибар

бирелмәй. Шул уҡ осорҙа инде замандаштарына киң билдәле башҡорт мәғдән сәнәғәтсеһе Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре үҙ халҡы араһынан белгестәр әҙерләү маҡсатында үҙҙәре иҫәбенә Уралда, Йоҡ заводтары янында кадет корпустары тибында Тау училищеһы асыу идеяһы менән йәшәй башлайҙар. Теләк һәм ниәттәр, әлбиттә, бик ҙур була: беренсенән, башҡорт балаларына таусылыҡ өлкәһендә махсус әҙерлек алыу өсөн юл асылырға тейеш, икенсенән, башҡорттарҙың заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итеү генә түгел, бәлки үҙҙәре лә завод хужалары булып китергә ҡулдарынан килмәҫлекме ни! Өсөнсөнән, ошо башланғыс уларға мәғдән етештереүҙе артабан да киңәйтергә, ҡаҙна ҡарамағындағы мәғдән ятҡылыҡтарын ҡулға төшөрөргә мөмкинлек бирергә тейеш.

Ошо уй-ниәттәр менән ҡанатланып, үҙенең улдары Исхаҡ һәм Мөхәммәтрәхим, компаньон туған-тыумасаһы, ырыуҙаштары, электән бергә иңгә-иң терәп эшләп килгән бүтән мәғдәнселәр менән кәңәшләшеп килешкәндән һуң 1771 йылда Берг-коллегияға, Тау училищеһы асыу кәрәклеге һәм шул училище өсөн үҙҙәре сығарған мәғдәндең һәр бото иҫәбенән берәр полушка (тиндең дүрттән бер өлөшө) аҡса бүлергә риза булыуҙары тураһында белдереп, ғариза (челобитный) яҙалар. (Һуңынан Тасимов һәм уның иптәштәре 1792 йылға тиклем йыл һайын Тау училищеһы файҙаһына аҡса күсертеп тора.) Берг-коллегияның президенты М.Ф. Соймонов башҡорт мәғдән сәнәғәтселәренең башлап ебәргән ынтылышын хуплап ҡаршы ала. Хат Сенатҡа барып етә. 1773 йылдың 21 октябрендә Сенат, ошо ғаризаны нигеҙ итеп, Екатерина II-гә доклад менән мөрәжәғәт итә. Башҡорт мәғдәнселәренең башланғысы хаҡында был документта бына ниҙәр әйтелә:

«Башкиры Измаил Тасимов и его товарищи через Берг-коллегию в 1771 году о поставке руд на Юговские медеплавильные заводы и об отдаче им казенных рудников в содержание изъяснили между прочим, что хотя они опытом и научаются и в горную экономию вникают, но, дабы промысел сей усовершенствовать, а горную экономию упрочитъ и через то, как себя и потомков своих, так и для общества сделаться сколько возможно более полезным, имеют свою нужду в руководителях. А потому просят о заведении офицерской школы на том же основании, на каком учреждены кадетские корпуса. На содержание предполагаемой школы они соглашались жертвоватъ по полушке с пуда добываемой ими руды, что составляет около 2250 руб. в год».

Шул уҡ 1773 йылда, ниһайәт, Екатерина II Рәсәйҙә тау эштәре буйынса юғары уҡыу йорто — Тау училищеһы асыу тураһындағы указға ҡул ҡуя. Әммә ул, башҡорттар һорағанса, Йоҡ заводтары эргәһендә түгел, ә Санкт-Петербургта асыла. Уны башҡорт сәнәғәтселәре иҫәбенә тотоу ҙа хуп күрелә,

әлбиттә, ләкин уларҙың балаларына был уҡыу йортона инеп уҡыу хыялы ғына оҙаҡ ваҡыттар тормошҡа ашмай. Тасимовтың үҙенең улдарының да Тау училищеһына кереп уҡыу теләге татлы бер хыял ғына булып ҡала. «Мәрхәмәтле» батша властары аң-белемгә һәм киң эшмәкәрлеккә ынтылған башҡорт уҙамандарын бына шулай төп башына ултырта.

Академик Ғайса Хөсәйенов яҙыуынса, Исмәғил Тасимов ҡартайған көнөндә бер йыуаныс тапты: үҙ ваҡытында уға ярҙамлашҡан руслашҡан башҡорт уҡымышлыһы Ҡарамышевтың улы Алексей, Мәскәү дәүләт университетын тамамлап, Тасимовтың ошо училищеһына инеп уҡыны, аҙаҡ шул уҡ уҡыу йортонда химия фәненән уҡытты, ғилем донъяһында танылыу алып, Рәсәй һәм Швеция Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты дәрәжәһенә өлгәште. (Әйтергә кәрәк, Алексей Ҡарамышев Рәсәй Фәндәр академияһының башҡорттар араһынан сыҡкан тәүге ағза-корреспонденты түгелме икән әле.) «Аҙағыраҡ, — ти Ғ.Б. Хөсәйенов, — Петербург Тау училищеһы Тау институтына әүерелгәс, башҡорт балаларына бер нисә урын бирелде. Тик уларҙы Тасимов үҙе генә күрмәне»**.

1873 йылда, Петербург Тау училищеһының 100 йыллығын байрам иткән көндәрҙә, Исмәғил Тасимовтың исеме ҙур хөрмәт менән иҫкә алына. Әммә шуныһы ғәжәпкә ҡалдыра: үҙҙәрен белемле, мәғрифәтле тип иҫәпләгән рус белгестәре, башҡорт Тасимовтың тарихи эшмәкәрлеген юғары баһалаһалар ҙа, уның уҡымышлы оло фекер эйәһе булыуына һис кенә лә ышанырға теләмәйҙәр. Институтты тамамлаған тау инженеры А.Н. Алексеев Тасимовҡа бағышлап яҙған шиғырында йәнәһе, һоҡланып, ошолай ти:

Сто лет тому назад тогдашний горный мир
Приятно изумил безграмотный башкир.

Икенсе бер белгес, почетлы академик, профессор Д.И. Соколов иһә хатта: «Кем белгән, төтөнлө ауылда йәшәгән ярым ҡырағай башҡорт Тау корпусының нигеҙенә тәүге ташты һалһын әле бына», — тип яҙа.

Был һүҙҙәрҙе, йөрәккә барып тейһә лә, иҫкә төшөрөргә тура килә.

Исмәғил Тасимов та, уның дәүерендәге башҡорт йәмғиәте лә һис тә тома наҙан булмаған, әлбиттә. Исмәғил Тасимов менән уның компаньондарының хаттары башҡорттоң уҡымышлылығын да, һәләт һәм талаптарын да асыҡ күрһәтеүсе бер дәлил. Ә ул дәүерҙә башҡорт ижтимағи фекеренең юғары кимәлдә тороуын билдәләүсе документтар бихисап.

Шулай итеп, Исмәғил Тасимов исемен хәҙер Г.В. Плеханов исемендәге Санкт-Петербург Тау институтына һәм, ғөмүмән, Рәсәйҙә тау эшенә нигеҙ һалыусы,

XVIII быуат башҡорт мәғдән сәнәғәтселәренең атаҡлы бер вәкиле, арҙаҡлы тарихи шәхестәребеҙҙең береһе булараҡ ҡәҙерләп һәм ҙурлап иҫкә алабыҙ.

* * *

Сығанаҡтар һәм әҙәбиәт: Материалы по истории БашкирскойАССР. Том IV, часть первая. М., 1956. 8-се бит; Том IV, часть вторая. М., 1956. 323-сө, 328—330-сы, 598-се биттәр; Том V. М., 1960. 682-се, 683-сө биттәр; Ищериков П.Ф. Измаил Тасимов, зачинатель горного дела в России // Краеведческий сборник, № 2. Уфа, 1927; Муталов М.Г. Горный мир изумил башкир // Волшебные минералы. Уфа, 1988; Хөсәйенов Ғ.Б. Рудасы Исмәғил Тасим улы // Батырҙар ҡиссаһы. Өфө, 1986; Тасимов И. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; «Горная власть» и башкиры в XVIII веке. Автор-составитель Корепанов Н.С. Уфа: Гилем, 2005.

* Пасквиль — яла яғып, мыҫҡыл итеп яҙылған әҫәр.

** Ҡарағыҙ: Сығанаҡтар һәм әҙәбиәт.

Кинйә Арыҫланов
(1723—?)



Кинйә. Гравюра.
Королевский Г.М.

Башҡорт халҡының данлыҡлы улы, 1773— 1775 йылдарҙағы бөйөк Крәҫтиәндәр һуғышы юлбашсыларының һәм милли-азатлыҡ хәрәкәте идеологтарының береһе, Е.И. Пугачевтың тоғро көрәштәше, баш күтәреүселәр армияһының баш полковнигы Кинйә Арыҫланов сама менән 1723 йылдың йәйендә ул саҡтағы Өфө провицияһының Нуғай юлы (даруғаһы) Бошман Ҡыпсаҡ олоҫо Танып (хәҙер Башҡортостан республикаһының Мәләүез районы), дөрөҫөрәге, Нөгөш буйындағы Багра тауы итәгендәге йәйләүҙә арҙаҡлы башҡорт уҙаманы Арыҫлан Аҡколов ғаиләһендә донъяға килгән. Кинйәнең атаһы Арыҫлан батыр — башҡорт тарихында әһәмиәтле урын тотҡан бошман-ҡыпсаҡ ырыуының бейҙәр нәҫеленән, ырыуҙаштары араһында оло ихтирам ҡаҙанған аҡыллы һәм бай кеше булған. Профессор Әнүәр Әсфәндиәров асыҡлағанса, Кинйәнең шәжәрәһе легендар Бабсаҡ һәм Күҫәк бейҙәргә, киң билдәле героик шәхес Бошман бейгә һәм уның ата-бабаларына барып тоташа. Бына ул нәҫел ебе: (Лас бей – Ҡолһары бей — Атағай бей — Баби бей — Бабсаҡ бей — Күҫәк бей — Сиркә бей — Күсмәк бей — Босмаш (Бошман) бей — Борондоҡ бей — Аҡбулат бей – Һарыбайсал бей — Дәүләтҡол — Миңлеғол — Аҡкош (Аҡкол) — Арыҫлан — Кинйә абыҙ. Кинйәнең улы Һеләүһен (Һеләүек) мулла Кинзин — атаһы һымаҡ уҡ Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе, Е.И. Пугачев армияһының полковнигы.

Бошман-Ҡыпсаҡ ырыуын башлап ебәреүсе Бошман бей оло Иҙелдең, йәғни Волганың түбәнге ағымында татар-монгол баҫҡынсыларына ҡаршы оҙаҡ ваҡыттар буйы азатлыҡ көрәшенә етәкселек иткән ҡыпсаҡ батыры, арҙаҡлы тарихи шәхес. Уның тураһындағы мәғлүмәттәр үткән дәүерҙәге Рәшид эд-дин, В.Г. Тизенгаузен һымаҡ атаҡлы тарихсыларҙың хеҙмәттәрендә һаҡланып

ҡалған, һәм шуныһы мөһим, ул мәғлүмәттәр башҡорт халыҡ ижадында ла ҡабатлана.

Тарихи яҙмаларҙан күренеүенсә, Бошманды монголдарҙың Менгүхан тигән ханы һәм уның туғаны Бүсектең ғәскәрҙәре уратып алып, әсир итә. Фарсы тарихсыһы Джувейни әҫәрҙәрендә һәм «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр» тигән башҡорт риүәйәтендә әйтелеүенсә, Менгүхан, уны үҙ яғына ауҙарып, ғәскәр башлығы итеү ниәте менән, теҙләнеүен талап иткән. Батыр күнмәгән. «Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй», тип яуап биргән Бошман. Шулай тип бәйән итә риүәйәт. Джувейни яҙып ҡалдырғанса иһә, ғорур ил батыры, дөрөҫөрәге, ошолай тип яуаплаған булыр: «Мин үлемдән ҡурҡмайым. Теҙләнергә мин дөйә түгел». Яуыз хан Бошманды ҡылыс менән сабып үлтерергә бойорған. Башҡорт халҡы составында ғәйәт ҙур һәм күп һанлы ҡыпсаҡ ҡәүеменең аҫыл бер тармағы — бошман-ҡыпсаҡтар, тимәк, үҙҙәренең боронғо бабалары. Бошман бейҙең батырлығы менән дә ғорурлана алалар.

Кинйәнең атаһы Арыҫлан Аҡколов та ырыуҙың ырыҫын һәм намыҫын һаҡлап, башҡорт халҡының хоҡуҡтарын яҡлап йәшәгән арҙаҡлы бер зат булған. Уның, мәҫәлән, 1704—1722 йылдарҙа Ҡыпсаҡ олоҫтарының башҡа старшиналары менән бергә халыҡты йәберләүсе яуыз чиновниктарҙы язаға тарттырыуҙы талап итеп, бер нисә тапҡыр батшаға мөрәжәғәт итеүҙә ҡатнашҡаны билдәле.

Кинйә бала сағынан зирәк, аҡыллы, уҡырға әүәҫ, ғәҙел, ҡыйыу һәм тәүәккәл кеше булып үҫә. 1735-1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе булараҡ тарихта урын алған Юрматы олоҫо уҡымышлыһы Килмәк абыҙ Нурушев мәҙрәсәһендә белем һәм тәрбиә ала. Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау буйынса линия (кордон) хеҙмәтендә, батша армияһының хәрби походтарында ҡатнаша. Уҡымышлылығы, киң белемле булыуы арҡаһында халыҡ араһында уны Кинйә абыҙ тип атай башлайҙар. Өйләнеп, ата йортонан башҡа сыҡҡас, яңы ауылға нигеҙ һала. Уның үҙ исеме менән аталған был ауыл рәсми сығанаҡтарҙа тәү башлап 1770 йылда телгә алына. Кинйәнең, алда телгә алынған Һеләүһендән тыш, Ҡужәхмәт, Рәхмәтулла һәм Сәғит исемле улдары булган. Һеләүһендең улы — Абдрахман (1786 йылда тыуган), Абдрахмандың улдары — Мөхәммәтрәхим, Мөхәммәтҡол, Мөхәммәтшәриф, Мөхәммәтшафиҡ. Бынан тыш, Кинйә менән бер туған Юлбарыҫтың биш улы, Ирназарҙың Ҡотлоғәлләм исемле бер улы, Ҡотлоғәлләмдең иһә туғыҙ улы булып, улар барыһы ла Кинйә ауылында йәшәгән. (Әйткәндәй, Кинйә ауылы 1860 йылдан башлап Кинйәабыҙ ауылы тип йөрөтөлә.)

1763 йылдан алып Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанға тиклем Кинйә Арыҫланов Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫоноң старшинаһы вазифаһын башҡара.

Кинйә 210 йорттан, 1600—1700 кешенән торған үҙ олоҫоноң ғына түгел, ғөмүмән, башҡорт халҡының хоҡуҡтарын яҡлау эшендә ғәйәт ҙур тырышлыҡ һәм фиҙаҡәрлек күрһәтә. Бына Ырымбур дәүләт архивында һаҡланған документтарҙың береһе — 1769 йылдың ғинуарында уның энеһе Ҡотлогилде Абдрахманов менән бергә губерна администрацияһына яҙған мөрәжәғәте. Унда авторҙар хәрби сословиелағы башҡорттарҙың ауыр феодаль ҡыҫымдар арҡаһында бөлгөнлөккә төшөүҙәрен билдәләп, шуның өҫтөнә Ырымбур һәм Себер линияларында күп сығымдар талап иткән хәрби хеҙмәт үтеүҙәрен, ылау сабыуҙарҙы иҫкә төшөрөп, һис юғы, өҫтәмә рәүештә һалынған почта ташыу йөкләмәһенән азат итеү хаҡында үтенес белдерәләр. Шул уҡ йылда Кинйә Арыҫланов Ҡазан даруғаһы башҡорто, баш старшинаһы Шәрип Мерәковтың улы, поход старшинаһы Вәлиша Мерәковтың хеҙмәткә алынасаҡ башҡорттарҙан ришүәт алыуын фашлап, губерна властарына мөрәжәғәт итә. Вәлишаны фашлауҙа Шайтан-Көҙөй олоҫо старшинаһы Юлай Аҙналин һәм башҡа старшиналар Кинйәне яҡлап сығыш яһайҙар. Властар ришүәтсене хөкөмгә тарттырмаһалар ҙа, ришүәт алыуҙы туҡтаталар. Бынан һуң да Кинйә халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлап, ришүәтселеккә юл ҡуймау өсөн көрәш алып бара. Шуның менән ул, әлбиттә, Башҡортостандың бөтөн төбәктәрендә хөрмәт һәм ихтирам ҡаҙанған ил ағаһы булып танылa. Башҡорт халҡының колониаль иҙеүҙән ҡотолоуға ынтылышы, үҙенең ер-һыуҙарын һаҡлап, милли азатлыҡҡа өлгәшеү идеялары Кинйәнең дә йөрәк түрендә йәшәгәндер, әлбиттә. Дөйөм алғанда, башҡорт йәмғиәте Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында ошоға тиклем быуындан быуынға килгән азатлыҡ хәрәкәттәренең яңынан ҡуҙғалып китеүенә әҙер булған, халыҡтың түҙемлелеге сиктән ашҡан тип иҫәпләргә мөмкин.

Пугачев лагерына Кинйә 500 кешелек отряд менән 1774 йылдың 9 октябрендә барып ҡушыла. Бынан алда, 30 сентябрь — 1 октябрь көндәрендә Ырымбур янындағы Сәйет (Ҡарғалы) биҫтәһендә урынлашып, Ырымбурға һөжүм итеү өсөн ҡыҙыу әҙерлек барған мәлдә, Пугачев, аҙаҡ допрос алғанда уның сәркәтибе, Яйыҡ казагы Балтай Иҙеркәев күрһәтеүенсә, башҡорт старшиналарынан Кинйә Арыҫлановҡа, Әлибай Мырҙағоловҡа һәм Ҡотлогилде Абдрахмановҡа үҙҙәренең командиры менән бергә баш күтәреүселәргә килеп ҡушылырға өндәп (дөрөҫөрәге, фарман биреп), указ ебәрергә ҡуша. Шулай уҡ бүтән старшиналарға ла ошо хаҡта хәбәр итергә бойора һәм «быаның өсөн бөтөн урҙаға» (йәғни Башҡорт иленә) ерҙәр, һыуҙар һәм һәр төрлө иркенлектәр бирергә вәғәҙә итә («обещевал за то жаловать всю орду землями, водами и всякою вольностию»). Был һүҙҙәр Е.И. Пугачевтың артабан Башҡортостандың бөтөн төбәктәренә таралаcаҡ манифестарының текстарын хәтерләтеп торғанын күреүе ҡыйын түгел. Документтарҙан күренеүенсә, был указ бер юлы өс данала

күсереп яҙыла һәм уны башҡорттар араһында таратырға Өфө өйәҙе Айсыуаҡ (Айсуяк) ауылының муллаһы Яҡшый алып китә. Әммә тиҙ арала, шул уҡ октябрь айында, уның өс данаһы ла хөкүмәт агенттарының ҡулына эләгә һәм Ырымбур, Өфө, Көңгөр властарына илтеп тапшырыла. Указ Кинйәгә бөтөнләй барып юлыҡмаған да булһа кәрәк. Уның ҡарауы, Ырымбур губернаторы И.А. Рейнсдорп уны кисектермәҫтән, 7 октябрҙә, Хәрби коллегияға оҙата. Икенсе яҡтан, указ яҙылған көн, 1 октябрь, Пугачев ставкаһына старшина Кинйә Арыҫланов командаһынан алты һыбайлы башҡорт барып төшөү ваҡыты менән тап килә. Кинйә ебәргән һыбайлылар бөтөн башҡорт ғәскәренең, әгәр ҙә указ килеп етһә, баш күтәреүселәргә ҡушылырға әҙер булыуын белдерә. («...пришед к самозванцу, объявили свое усердие служить ему и сказывали, что вся их башкирская орда, буде он пошлет к ним свой указ, приклонится к нему».) Тарихсылар был документтың, йәғни указдың барлыҡҡа килеүен Кинйә Арыҫлановтың инициативаһы менән бәйләй.

Пугачев ставкаһына Кинйәнән бер көнгә алда шундай уҡ отряд менән тағы бер башҡорт старшинаһы — Яманһары Яппаров барып ҡушылған була. Шулай итеп, Крәҫтиәндәр һуғышы башланыуға, теүәл генә әйткәндә, 22-23 көн үтеүгә Пугачев лагерында 1000-дән артыҡ башҡорт ихтилалсыһы иҫәпләнә. Артабан, Ырымбурҙы осадала тотҡан осорҙа, айырыуса Кинйәнең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә, бында башҡорт һыбайлыларының хисабы 5000-гә барып етә, был иһә Пугачевтың Төп (Баш) армияһының 50 процент самаһын тәшкил итә.

Был урында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: Баязит Бикбай үҙенең «Арыҫлан» исемле очеркында, Иван Зарубин-Чиканың һорау алғанда биргән ошондай һүҙҙәрен килтерә: «Йорт башы Кинйә һәм уның менән биш мең башҡорт килде. Уны яуыз (йәғни Пугачев — Б.Б.) хөрмәт менән ҡаршы алды һәм уның менән килгән һәр бер башҡортҡа крепостан алған аҡсаны берәр һум таратты» («Пугачевщина», II том, 133-сө бит). Иван Зарубин телгә алған биш мең башҡорт, беҙҙеңсә, тәүге көндән үк түгел, бәлки ана шул Кинйәнең баш күтәреүселәр ставкаһына килеп, ойоштороу эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәреү һөҙөмтәһендә тупланғандыр тип иҫәпләргә булалыр. Ырымбурҙы ҡамауҙа тотҡан осорҙа Пугачевтың төп көстәре, ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, 2500 кешенән һәм 20 орудиенан торған тип иҫәпләнелә. Ихтилалдың тәүге этабында Өфө провинцияһында 77 башҡорт старшинаһы пугачевсылар байрағы аҫтына баҫа һәм бары тик 9 старшина ғына властарға тоғролоҡ күрһәтә. Старшиналарҙың күбеһенә Е.И. Пугачев полковник, баш полковник званиелары биреп, ҙур отрядтар, полктар менән командалыҡ итеүҙе йөкмәтә. Салауат Таймасовтың иҫәпләүҙәренән күренеүенсә, Пугачев полковниктарынан 234 кешенең 114-е рус, 70-тән артығыраҡы башҡорттар булған. Ә инде башҡорт

батырҙарынан һәм яу башлыҡтарынан Салауат Юлаевҡа — бригадир, Баҙарғол Юнаевҡа — фельдмаршал, Юламан Ҡушаевҡа генерал званиеһы бирелә.

Пугачевтың Кинйәне ҡабул иткән сағында уның, йәнәһе, «батша Петр III» булараҡ, үҙен Кинйәнән «танытыу» сәхнәһе булып ала. «Йә, Кинйә, мине танышһыңмы?» — тип һорау бирә Пугачев. Кинйәнең ни тип әйтергә лә белмәй тороуын күреп, Пугачев башҡорт старшинаһының ҡасандыр Петр III менән осрашыуы хаҡында, ысынлап та, кешене ышандырырлыҡ деталдәр уйлап таба. «Хәтерләйһеңме, мин һиңә кафтанлыҡ кармазин бүләк иткәйнем. Әгәр ҙә һиндә шуның бер остоғо һаҡланған булһа ла, мин таныр инем», — ти. Кинйә Пугачевтың унан ниндәй яуап көткәнен бик тиҙ аңлап ала һәм был юлы инде юғалып ҡалмай. «Эйе, һеҙҙең ғали йәнәптәре, хәҙер минең иҫемә төштө һәм һеҙҙе танышйым», — тип икеләнмәйенсә яуап бирә Кинйә. Был диалог Пугачевтың «ысын батша Петр III» булыуына ышандырыу өсөн әһәмиәтле булғандыр, моғайын. Әйткәндәй, бынан алда, ихтилал башланған көндә — 17 сентябрҙә Пугачев отряды Яйыҡ ҡаласығына барышлай Саған форпосына туҡталған саҡта, баш күтәреүселәр башлығы менән ҡаҙаҡ ханы Нуралиҙең илсеһе Зәбир араһында ла шундай уҡ һөйләшеү була. Зәбир муллаға Пугачев: «Падишаһты танышһыңмы?» — тип, асылда шул уҡ һорауҙы биреүгә, «Нисек танымаҫҡа! Мин һинең падишаһ икәнлегеңде күреп торам», — тип яуап бирә илсе. Инде бына Кинйә лә уның ышанысын аҡлай, ярандары алдында батша ғали йәнәптәре тип танылғанлығын белдерә.

Кинйә Арыҫлановҡа Пугачев тәүге көндә үк полковник званиеһы бирә һәм Төп (Оло) армия составындағы башҡорт, мишәр, ҡалмыҡ ғәскәренең (ул корпусҡа тиң булғандыр, моғайын) атаманы сифатында командалыҡ итеүҙе йөкмәтә. Башҡорт полковнигы ғәжәп ҙур активлыҡ менән ойоштороу һәм халыҡты ихтилалға күтәреү эштәренә тотоноп китә. Мәҫәлән, 17 октябрҙә «Падишаһ Петр Федорович» исеменән ул үҙенең дуҫы, Нуғай юлының Ҡырҡ өйлө олоҫо старшинаһы Әлибай Мырҙағоловҡа, үҙенең командаһы менән баш күтәреүселәр сафына баҫырға өндәп, хат ебәрә. Хатында ул ун бер старшинаның үҙ полктары менән ихтилалға ҡушылыуҙары тураһында хәбәр итә. Өс көн үтеүгә, 20 октябрҙә, хәҙер инде баш полковник Кинйә Арыҫланов башҡорт старшиналарына һәм полковниктарына шундай уҡ йөкмәткеле «исемле указ» менән мөрәжәғәт итә һәм был юлы пугачевсыларға «башҡорт милләтенән егерме өс старшинаның ҡушылыуы, шулай уҡ Яйыҡ казактарынан күп һанлы полктарҙың көн һайын килеп тороуы, уларҙың һәммәһенә лә ҙур ғына «жалунья» түләнеүе тураһында яҙа. «Хоҙайҙан һорағаныбыҙҙы Хоҙай үҙе бирҙе», — ти Кинйә. Аҙаҡ допрос ваҡытында күренекле пугачевсы, Яйыҡ казагы атаман Иван Зарубин-Чиканың яуаптарынан күреүенсә, Кинйә ҡулы аҫтындағы

башҡорт полктарының 5 мең кешеһенә Пугачев башта уҡ бирәр һум аҡса таратып сыға. (Ул заманда һум ғына түгел, тин дә ҡәҙерле булғандыр, күрәһең.)

Кинйәнең халыҡты ихтилалға күтәреү буйынса эшмәкәрлеге Башҡортостанда ғәйәт ҙур һөҙөмтәләргә килтерә. Быны, мәҫәлән, ихтилалды баҫтырырға ебәрелгән карателдәр экспедицияһы етәксеһе генерал-майор Василий Алексеевич Кар ҙа үҙенең 1773 йылдың 31 октябрендәге рапортында танырға мәжбүр. Башҡорттар, тип билдәләй ул, Кинйә Арыҫлановтың бөтөн Башҡортостанға тараткан яуызлыҡҡа өндәүсе хаттары арҡаһында бөйөк ҡуҙғалыш хәленә килделәр — («... от бежавшего в толпу с своими подчиненными башкирского старшины Кинзи Арсланова чрез рассеяние во всю Башкирию злодейских возмутительных писем в великой колеблемости находятся») һәм нәк октябрь айында үҙ ғәскәренең баш күтәреүселәр тарафынан тар-мар ителеүен башҡорттарҙың абсолют күпселектә баш күтәреүселәргә ҡушылыуы менән бәйләй. Ысынлап та, Стәрлетамаҡтан генерал Кар ҡарамағына ебәрелгән 2000 кешелек башҡорт командаһы, Кинйә Арыҫланов өндәмәһе менән килгән Ҡотлогилде Абдрахмановтың агитацияһы йоғонтоһонда, хөкүмәт ғәскәре өсөн ҡырҡыу бер моментта, Салауат Юлаев һәм Әлибай Мырҙағолов етәкселегендә баш күтәреп, пугачевсылар яғына сыға һәм, нигеҙҙә, шул сәбәпле Кар еңелеүгә дусар ителә.

1773 йылдың октябренән алып Кинйә Ырымбур эргәһендәге Бәрҙе биҫтәһендә урынлашҡан Төп армия составында һәр ваҡыт ғәскәрҙәр сафында була, Ырымбурҙы алыу өсөн алып барылған осада һуғыштарында үҙенә буйһонған полктар менән командалыҡ итә. Бер үк ваҡытта Башҡортостанда хәрәкәт иткән отрядтарҙың эшмәкәрлеген координациялай һәм, ғөмүмән, бөтөн башҡорт эштәре менән шөғөлләнә. Пугачевтың, башҡорттар менән бергә, мишәрҙәргә, татарҙарға, казактарға һәм башҡа халыҡтарға мөрәжәғәт итеп яҙылған манифестары ла уның ҡулы аша үтә. Киң белемле, бер нисә телдә, шул иҫәптән яҙма төркисә лә, русса ла иркен, грамоталы эш итә белеүе уның эшмәкәрлегенең айырыуса киң ҡолас менән йәйелеүенә, баш күтәреүселәр араһында ҙур абруй ҡаҙаныуына булышлыҡ итә. Ул Пугачевтың иң ышаныслы һәм иң күренекле арҡаҙаштарының береһенә, үҙ халҡының ысын юлбашсыһына әйләнә. Кинйә Пугачевтың иң яҡын кешеләренән торған Йәшерен совет составына керә, был совет күп йәһәттән, бигерәк тә ихтилалдың һуңғы осоронда, Хәрби коллегиянан да мөһимерәк кәңәш ҡороу органы була. (Был советҡа, Кинйәнән тыш, ғәскәри атаман А. Овчинников, дежурный Е. Давилин, полковниктар П. Перфильев һәм Ф. Чумаков, сәркәтип И. Творогов, Ҡарғалы татары Садиҡ Сәйетов һәм тәржемәсе Айҙар Баймәковтар керә.) Башҡорт юлбашсыһы Пугачевтың ирektәге һуңғы көнөнә тиклем уның тоғро

таянысы була. 1774 йылдың 9 сентябрендә Пугачевты батша властарына тотоп биргән һатлыҡ йән казактар үҙҙәренең яуыз ниәтен бойомға ашырғанда бары тик Кинйәнән генә һаҡланыу сараһын күрергә тырышалар.

Ихтилалдың тәүге осоронда Кинйәнең Төп армия составындағы ғәскәре күп кенә ғәскәр башлыҡтары өсөн үҙ көстәрен һынау мәктәбенә әйләнә. Салауат Юлаев та, Нуғай даруғаһы Боҙаяҙ ауылынан мишәр йөҙ башы Ҡәнзәфәр Усаев та иң элек Бәрҙелә, Кинйә ҡарамағында булалар. Ҡәнзәфәр Усаев бер ай самаһы писарь хеҙмәтен: үтәй, Салауат иһә башҡорт полкы составында һуғыш (Ырымбурға һөжүм) хәрәкәттәрендә ҡатнашып, батырлығы менән тиҙ арала дан ҡаҙана. Икеһенә лә полковник званиеһы бирелеп, Башҡортостандың төрлө төбәктәренә ихтилалға үҙ аллы етәкселек итеү өсөн ебәрелә. 1773 йылдың аҙағында башҡорт халҡы тулыһынса күтәрелә, ихтилал бөтә Башҡортостанға тарала («...обитающий в здешней Оренбургской провинции башкирский народ весь генерально взбунтовался»). Ошо осорҙа ихтилал инде башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, һуғышы төҫө ала.

1774 йылдың март аҙағында Ырымбур төбәгендәге Төп армия бер-бер артлы бер нисә ҙур еңелеүгә осрай. Был осорҙа Крәҫтиәндәр һуғышының яҙмышында Кинйә Арыҫланов айырыуса мөһим роль уйнай. Пугачев, мәҫәлән, 22 мартта Татищев ҡәлғәһе янында, 1 апрелдә Һаҡмар ҡаласығы янындағы һуғыштарҙа үҙенең армияһының төп көстәрен юғалтһа, Кинйә ни бары бер аҙна эсендә ике мең кешенән торған өр-яңы башҡорт командаһын ойоштороуға өлгәшә. Ташлы ауылындағы кәңәшмә ваҡытында Кинйә Пугачевты батша ғәскәренән бары тик Башҡортостанға китеп кенә ҡотолоп буласағына ышандыра. Уның тәкдиме Пугачевтың планы менән тап килмәһә лә, был хәүефле мәлдә берҙән-бер мөмкин булған ҡотолоу юлы тип табыла. Пугачев ни бары 500 кешелек кенә отряд менән Башҡортостанға, Урал армыттары араһына йүнәлә. Отряд хәҙер инде, ғәмәлдә, фәҡәт Кинйә Арыҫланов етәкселегендә хәрәкәт итә һәм, «урындан урынға күсеп, бик күп ,башҡорттарҙы үҙенә ылыҡтыра». («...проходя от места до места, собрали башкирцов множество».) Пугачев тәүге көндәрҙә Кинйә ауылына килеп, Кинйәнең өйөндә ҡасып ята. Ул арала Кинйәнең тырышлығы менән аҙмы-күпме яңы ғәскәр йыйыла. Шулай итеп, Крәҫтиәндәр һуғышының тағы ла киңерәк йәйеләсәк икенсе осоро башланып китә, һәм унда башҡорттар төп роль уйнай. Пугачевтың яҙмышы ҡыл өҫтөндә генә ҡалған был көндәрҙә Кинйәнең роле бермә-бер арта, асылда, ул тамам еңелгән ерҙән ихтилалды яңы көс менән дауам итеүҙе бойомға ашыра. Был хаҡта академик Ғайса Хөсәйеновтың «Кинйә абыҙ» тигән очеркында әйтелгән һүҙҙәр тулыһынса тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә:

«Әгәр Кинйә Арыҫлановтың Башҡортостанға, Урал эсенә китергә кәрәк

тигән төплө кәңәше ҡабул ителмәгән булһа, Крәҫтиәндәр һуғышы шул Ырымбур төбәгендә, бүтән бер нисә яу усағында ғына сикләнеп, һүнеп ҡалыр ине, моғайын.

Әгәр башҡорттар 1774 йылдың яҙында һәм йәйендә яңынан дәррәү күтәрелмәһәләр, Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе ҙур һәм дәһшәтле осоро ҡабынып та китә алмаҫ ине.

Әгәр Кинйә Арыҫланов ғәскәрһеҙ ҡалған Пугачевты йәшереп ҡотҡарып ҡалмаһа һәм яңынан ғәскәрле итешмәһә, ярты Рәсәйҙе үтеп сыҡҡан өҙлөкһөҙ яу-һуғышлы оло рейд булыр инеме лә, Пугачев бөйөк тарихи шәхескә күтәрелер инеме икән?

Һәр хәлдә, Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе, һынылышлы осорон башлап, яу сырағын бер мәл үҙ ҡулына алып, иң ғәрәсәтле янғынын ҡабыҙып ебәреүҙә Кинйә Арыҫлановтың роле ғәйәт ҙур».

Халыҡ яңынан яуға күтәрелә, һуғыш тағы ла ҙурыраҡ көүәт менән тоҡанып китә. Арттан килгән хөкүмәт ғәскәрҙәре менән һуғыша-һуғыша, Пугачев Башҡортостандың көньяғынан көньяҡ-көнсығышына табан хәрәкәт итә, Ҡыҙыл Мәсет (хәҙерге Мораҡ) ауылы аша үтеп, Воскресенск, Әүжән-Петровск заводтарында булғандан һуң, ике-өс аҙна Белорет заводтарында туҡтап тора. Был ваҡытта тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәгендә Салауат Юлаев үҙенең атаһы Юлай Аҙналин менән бергә Михельсондың каратель корпусына ҡаршы ауыр һуғыш хәрәкәттәре алып бара. Нуғай юлында полковник Ҡаранай Моратов отрядтары актив хәрәкәт итә. Пугачев ғәскәре лә казактар, завод эшселәре, башҡорттар, һалдаттар иҫәбенә артҡандан-арта бара. Вознесенск заводында саҡта Төп ғәскәрҙә Хәрби коллегия яңынан ойошторола. Башҡорт старшиналарына, завод эшселәренә, ҡорал менән иҙеүселәргә ҡаршы күтәрелергә саҡырып, башҡорт һәм рус телдәрендә яңы указдар яҙып таратыла. Указдарҙы халыҡ ҙур күтәренкелек менән ҡабул итә, һәр ерҙә Пугачевҡа ярҙам итергә әҙер торалар. Вознесенск заводында, мәҫәлән, ирек һәм ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе «падишаһты» икмәк-тоҙ менән ҡаршы алалар. Әүжән-Петровск заводында уны ҡаршы алырға бөтөн халыҡ менән руханиҙар образдар тотоп урамға сыға. Әүжәндә тағы 800 завод крәҫтиәне ҡушылып, айырым Әүжән полкы ойошторола, Д.М. Загуменов (Загуменный) тигән завод кешеһен Пугачев, полковник званиеһы биреп, полк командиры итеп тәғәйенләй. Белорет заводында Пугачев ғәскәре, башлыса баш күтәреүсе башҡорттар иҫәбенә, биш мең кешегә етә. Халыҡтың, бик күп юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, батша властарына ҡаршы берҙәм күтәрелеүе карателдәрҙең ҡот осҡос ҡанһыҙлығы, вәхшилеге, башҡорт ауылдарын утҡа тотоп, бер ғәйепһеҙ меңәрләгән кешеләрҙең ғүмерен ҡыйып, һәр ерҙә үлем сәсеп йөрөүҙәре лә булышлыҡ

иткәндер, күрәһең. Дөйөм алғанда, ихтилалдың был осоро, айырыуса киң масштаблы булыуы менән бергә, үтә күп ҡорбандар килтереүе менән дә айырылып тора. Империя һынлы империяның баштан-аяҡ ҡоралланған регуляр хәрби көстәренә ҡаршы торор өсөн, иҙеүселәргә ҡарата үс һәм нәфрәт тотоу менән бергә, шундай уҡ әҙерлек, шундай уҡ ҡорал, ойошҡанлыҡ, хәрби тактика ла кәрәк, әлбиттә. Ә был көйөнсә, изге ынтылыш менән күтәрелгән булһа ла, халыҡ хәрәкәтенең халыҡ фажиғәһенә әйләнеү хәүефе лә бар ҙа баһа. Тарихтың был аяныслы һабағын беҙҙең һәм, ғөмүмән, һәр халыҡтың һәр заманда ла иҫтә тотоуы мөһим, минеңсә.

Ихтилалдың трагик фазаға инеүе шунан да күренә: быға тиклем ғәскәрҙең базалары тип иҫәпләнгән заводтарҙы Пугачев хәҙер инде яндырып, юҡҡа сығарырға бойора, сөнки баш күтәреүселәр һәр тарафта ла төрлө яҡтан хөкүмәт ғәскәрҙәре менән уратып алынған була. Хөкүмәт ғәскәрҙәре менән Михельсон, Фрейман, Деколонг һымаҡ тәжрибәле башлыҡтар командалыҡ итә. Хәлдәр үтә ҡатмарлаша. Белорет заводында, Көньяҡ Уралдағы бүтән заводтарҙы ла, дошман ҡулына ҡалдырмаҫ өсөн, яндырырға тура килә. Бының иһә Пугачевты көтөп алған завод кешеләренә бер ҙә ҡыуаныс килтермәүен аңлауы ҡыйын түгел. Был иһә ихтилал етәкселәренең позицияһын ҡатмарлаштыра, көтөлмәгән ҡаршылыҡтар килтереп тыуҙыра.

Белорет заводынан Пугачев Магнит ҡәлғәһенә йүнәлә. 6 майҙа гарнизондың ҡаршылығын һындырып, ҡәлғәгә бәреп керә. Бында ул үҙе лә алғы рәттә һуғышып, картечь менән еңелсә ҡулы яралана. Икенсе көндә Төп ғәскәргә Йайыҡ ҡаласығы янында генерал Мансуров корпусы тарафынан ҡыйратылған полковник Афанасий Перфильев һәм поход атаманы Андрей Овчинников отрядтарының иҫән ҡалған өлөшө, барлығы 500 кеше, йәнә бер көндән 700 кешенән торған Иван Белобородов отряды килеп ҡушыла. Яһауыл Иван Шибаев та 300 кешелек отряд менән килеп етә. Магнит ҡәлғәһендә Пугачев башҡорт старшиналарын ҡабул итә.

8 майҙа Магниттан сығып, Пугачев Үрге Йайыҡ ҡәлғәһен урап үтә һәм Ҡарағай, Петропавловск, Степной ҡәлғәләрен, Подгорный, һәнәр редуттарын артта ҡалдырып, Троицк ҡәлғәһенә барып етә. 19 майҙа ҡәлғә баш һала. Әммә арттан Деколонгтың ҡыуып килгәнен белеп, ҡәлғәнән сығып, 10 мең кешелек ғәскәре менән 1,5 саҡрым ерҙә урынлаша. 21 майҙа нәҡ ошо урында ғәйәт оло һәм фажиғәле бәрелеш булып, Пугачев тағы ла еңелеүгә дусар була. Ғәскәрҙән 4 мең кеше яу яланында ятып ҡала, 70 кеше әсирлеккә эләгә, карателдәр баш күтәреүселәрҙең обозын, 28 пушкаһын ҡулға төшөрә. Пугачев бик күп арҡаҙаштарын юғалта, үҙе лә саҡ ҡотолоп ҡала. Әммә икенсе көндә үк йәнә 2 мең кешелек отряд йыйып, Лягушино ауылы янында Михельсон корпусы менән

бәрелештә тағы ла уңышһыҙлыҡҡа осрай. 2 майҙа Үрге Ҡыйғы ауылы янында Салауат менән Михельсон отрядтары араһында ҡаты бәрелеш башлана. Иң көсөргәнешле моментта Михельсон корпусының тылына Салауат командаһы менән берләшергә килгән Пугачев отряды һөжүм итә. Михельсонға баш күтәреүселәрҙе эҙәрләүҙе туҡтатып тороуҙан башҡа сара ҡалмай. Ә Пугачевтың һәм Кинйәнең 3 мең кешелек Салауат отряды менән килеп ҡушылыуы оло ваҡиғаға әйләнә. Нәҡ ошо ваҡытта Пугачев Салауат Юлаевты бригадир, Юлай Аҙналинды, «халыҡтың һорауы буйынса», Себер даруғаһының баш атаманы итеп күтәрә.

Алда — Красноуфимск. Хәҙер Пугачев Ҡазанға табан юл тота. Кинйә үҙенең командалығындағы башҡорт отрядтары менән Ҡазанды алыу өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнаша. Ҡазанды алыу менән башҡорт полктары Башҡортостанда көрәште дауам итеү өсөн тыуған яҡтарына ҡайтарыла. Башҡорт етәкселәренән Кинйә Арыҫланов менән казак Айҙар Баймәковты Пугачев, иң яҡын таяныстары күреп, үҙ янында ҡалдыра. Кинйә, әлбиттә, Пугачевтың ышанысын тулыһынса аҡлай, ихтилал идеяларына ул һуңғы көнөнә тиклем тоғролоҡ һаҡлай. 1774 йылдың 24 авгусында Царицын менән Ҡара Яр араһында, Солеников ватагаһы тигән ерҙә 15-20 мең кешенән торған Пугачев армияһы тулыһынса ҡыйратыла. Пугачев 160 кеше менән яу яланынан ҡасып ҡотола. Ҡара Ярҙан 17 саҡрым ерҙә Оло Иҙелдең һул яҡ ярына сығалар. Пугачевтың башында бер генә һорау: ҡайҙа барырға, нимә эшләргә? Бәлки, Кубангә, унан Персияға сығып китергәлер? Төрөкмәндәр араһында ла уның белештәре бар, ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫтар. Бәлки, Запорожье казактарына барып һыйынырғалыр? Әммә уның эргәһендәге һатлыҡ йән казак атамандары, үҙҙәрен ҡотҡарып ҡалыу өсөн, Творогов, Чумаков, Федульев, ҙур бәрелеш алдынан уҡ унан бер тотам да артта ҡалмаҫҡа тип килешеп ҡуйғандар. Заговорсыларға хәҙер үҙҙәренең яуыз ниәттәрен бойомға ашырыр өсөн уңайлы момент ҡына кәрәк. Аҙаҡ Творогов допрос ваҡытында үҙҙәренең бигерәк тә Кинйәнән ҡурҡыуҙары тураһында белдергән. Пугачевты заговорсылар, Кинйәнең яҡында булмауынан файҙаланыптыр, күрәһең, аяҡ-ҡулдарын бәйләп, 14 сентябрҙә Яйыҡ далаларындағы Бударин форпосына алып баралар, 15 сентябрҙә Ҡуш-Яйыҡ форпосына етеп, властарға тапшыралар. Ә Кинйә нәҡ ошо көндәрҙә хәбәрһеҙ юғала. Уның артабанғы яҙмышы хаҡында бер ниндәй ҙә документ һаҡланмаған.

Әммә халыҡ бәхете, Башҡортостандың азатлығы хаҡына ғүмерен фиҙа ҡылған ҡаһарман йөрәкле бөйөк көрәшсе, Крәҫтиәндәр һуғышының легендар геройы Кинйә Арыҫлановтың легендар исеме, быуындарҙан быуындарға күсеп, ил хәтерендә мәңгелек урын алған. Кинйә абыҙ... Был исем Алдар, Батырша, Салауат Юлаев исемдәре һымаҡ уҡ, ил, халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ символы

булып, һәр башҡорттоң йөрәк түрендә йәшәй.

* * *

2001 йылдың июлендә Көйөргәҙе районының Кинйәабыҙ ауылында шатлыҡлы ваҡиға булып үтте: бында Башҡортостан Республикаһы Милли музейының филиалы — Кинйә Арыҫланов музейы асылды. Унда Киңйә һәм уның ошо ауылда йәшәүсе данлы ейәндәре тураһында ҡиммәтле материалдар тупланған.


Кинйә абыҙ мавзолейы. Көйөргәҙе районында
элекке 1-се Кинйәабыҙ ауылы урынында асылған
тарихи-мәҙәни комплекс. 2003 йыл.
Скульпторы — Ө. Ҡобағошов.

Ауылға үҙ ваҡытында Кинйә абыҙ, йәғни старшина Кинйә Арыҫланов нигеҙ һалған, тип иҫәпләнелә. Бөйөк олаталарының нәҫел ебен хәҙер ҙә Арыҫлановтар фамилияһы дауам итә. (Ә инде Мәләүез районындағы Арыҫлан ауылы Кинйәнең атаһы Арыҫлан Аҡколовтың исеме менән аталған булырға тейеш.)

Илебеҙгә өс Советтар Союзы Геройы биргән бик һирәк ауылдарҙың береһе ул Кинйәабыҙ. Бына ул ҡаһармандарҙың исем-шәрифтәре: Ғәфиәтулла Арыҫланов, Сәлмән Биктимеров һәм Хәсән Ғайсин. Ғәфиәтулла Арыҫлановҡа иһә был юғары исем 1940 йылда, Советтарҙың Финляндияға ҡаршы һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн бирелә. Башҡорт халҡының данлы улы, танк полкы командиры урынбаҫары Ғәфиәтулла Арыҫланов, Бөйөк Ватан һуғышында оҙон һәм еңеүле юлдар үтеп, Будапештты алыуҙа ҡатнашып, 1945 йылда, Еңеү көнөнә һанаулы ғына айҙар ҡалғас, батырҙарса һәләк булды.

Арыҫлановтар нәҫеле, улар араһындағы атаҡлы кешеләр – айырым тикшеренеү, ҡыҙыҡлы бер документаль әҫәр темаһы. Музейҙа был йәһәттән дә

материалдар туплауҙы дауам итерҙәр, әлбиттә. Әлегә йәнә шуны әйтеп үткем килә: 2003 йылдың йәйендә, Кинйә батырҙың тыуыуына 280 йыл тулыу айҡанлы, элекке беренсе Кинйәабыҙ ауылы урынында Көйөргәҙе районы башлығы Әхәт Ҡотлоәхмәтовтың тырышлығы менән, скульптор Өлфәт Ҡобағошов проекты буйынса, тарихи-мәҙәни комплекс асылды.

Күренекле тарихи шәхес, башҡорт халҡының милли геройы Кинйә Арыҫланов образы әҙәбиәтебеҙҙә, сәнғәттә лайыҡлы сағылдырылды. Талантлы яҙыусы Ғали Ибраһимов «Кинйә» исемле өс китаптан торған роман ижад итеп, халҡыбыҙҙың тарихын художестволы үҙләштереү эшенә ғәйәт ҙур өлөш индерҙе. Режиссер Әмир Әбдрәзәҡовтың шул уҡ исемдәге күп сериялы телевизион фильмын тамашасылар ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алды. Халыҡ бәхете, ил азатлығы өсөн көрәшкә ғүмерҙәрен арнаған батырҙарҙың исемдәре беҙҙең һәммәбеҙ өсөн дә яҡын һәм ҡәҙерле.

* * *

Әҙәбиәт: Усманов А.Н. Кинзя Арсланов — выдающийся сподвижник Пугачева // Исторические записки Института истории АН СССР. М., 1962. Т. 71; Лимонов Ю.А., Мавродин В.В., Панеях В.М. Пугачев и пугачевцы. М.-Л.: Наука, 1965; 2-е. изд. Л., 1974; Бикбай Б. Арыҫлан // Һайланма әҫәрҙәр. 3-сө том. Өфө, 1971. 236—262-се биттәр; Документы ставки Е.И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений. М.: Наука, 1975; Ибраһимов Ғ. Кинйә: Тарихи роман. 1-се китап. Өфө, 1977; 2-се китап. Өфө, 1987; Ибрагимов Г. Кинзя: Исторический роман. Кн. 1-я. Уфа, 1982; Кн. 2-я. Уфа, 1988; Буганов В.И. Емельян Пугачев. М.: Просвещение, 1990; Гвоздикова И.М. Кинзя Арсланов: К творческому портрету // Известия Башкортостана. 1993. 16 июля; Әсфәндиәров Ә. Кинйә абыҙ // Башҡортостан. 1993. 16 июль; Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Хөсәйенов Ғ. Кинйә абыҙ // Ватандаш. 1997. № 1. 156—160-сы биттәр.

## ЮЛАЙ АҘНАЛИН
(1730—1798 йылдар тирәһе)

Башҡорт халҡының күп быуаттарға һуҙылған милли азатлыҡ көрәше тарихында яугир юлбашсы Салауат Юлаев менән бергә уның атаһы — арҙаҡлы ил ағаһы, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ҡаһарманы баш күтәреүселәр армияһының полковнигы, Башҡортостандың Себер даругаһы атаманы, старшина Юлай Аҙналиндың исеме ғәйәт ҙур һәм маҡтаулы урында тора. Юлай Аҙналин 1773 йылдың ноябрь аҙағында уҡ баш күтәреүселәр сафына ҡушыла һәм ихтилалдың һуңғы айҙарына тиклем Салауат менән йәнәш бик күп бәрелештәрҙә ҡатнаша, ғәскәр менән етәкселек итә, яугир улына һәр ваҡыт иң яҡын таяныс һәм ярҙамсы була. Ниһайәт, ихтилал баҫтырылғас, улы Салауаттың фажиғәле яҙмышын уртаҡлай: уларҙың икеһен дә 175-әр мәртәбә ҡамсы менән һуҡтыралар, танауҙарын ҡырҡалар маңлайҙарына ҡыҙған тимер менән «З», «Б», «И» (злодей, бунтовщик, изменник) тигән хәрефтәр баҫалар һәм Эстониялағы Рогервик (хәҙерге Палдиски) портына мәңгелек һөргөнгә ебәрәләр. Юлай ҙа, Салауат та яҡты донъя менән хушлашҡанға тиклем ана шул алыҫ Балтик буйында ғүмер һөрәләр.

Юлай Аҙналин ихтилалда ҡатнашыусылар араһында ҙур тормош юлы үткән оло йәштәге тәжрибәле кеше була. Ул сама менән 1730 йылда Өфө өйәҙе Шайтан-Көҙөй олоҫо Тәкәй ауылында тыуған. Был ауыл рәсми документтар буйынса 1648 йылдан бирле билдәле[1].

Ә инде Ю. Аҙналиндың тыуған йылына килгәндә, уның 1775 йылда Мәскәүҙә һорау алғанда күрһәткән мәғлүмәтенә таянырға мәжбүрбеҙ. Бында ул үҙе хаҡында 45 йәштәмен тип белдерә. Икенсе бер документ буйынса, шул уҡ йылда уға 46 йәш тип күрһәтелә[2]. Беҙ ҙә, шуға таянып, Юлайҙың тыуған йылы хаҡында яҡынса 1730-сы тигән версияға туҡталырға булдыҡ. Дөрөҫ, 1797 йылдың 19 майында төҙөлгән «Статьялы исемлек» тигән документта Юлай Аҙналиндың йәше 75 тип билдәләнгән. Әммә был ваҡытта тотҡондарҙың йәштәрен билдәләгәндә байтаҡ айырмалыҡтар урын алған. Сөнки уларҙың тәү башлап төҙөлгән исемлектәре юғалыу сәбәпле, мәғлүмәттәр, үҙҙәренән һорашып белешеү юлы менән һәм физик хәлдәренә ҡарап, сама менән асыҡланған булһа кәрәк. Был йәһәттән тарих фәндәре кандидаты И.М. Гвоздикованың: «Үҙенә 75 йәш тип әйтеүсе Юлайҙың йәше шик тыуҙырмаған, сөнки ул ҡаты ауырыған»[3], — тигән һүҙҙәрен иғтибарға алыу урынлы булыр. Ысынлап та, «Статьялы исемлек»тә Ю. Аҙналин хаҡында: «Ҡаҡшаған, аяҡтарында күптәнге зәңге ауырыуынан яралар бар» тип билдәләнеүе тотҡондоң ғәмәлдәгенән олораҡ йәштә булып күренеүенә ышандыра[4].

А.С. Пушкин үҙенең «Пугачев тарихы» әҫәрендә Юлай Аҙналинды «ҡарт боласы», ә икенсе рус яҙыусыһы, Ф.Д. Нефедов «бик арҙаҡлы шәхес» тип атай, Юлай хаҡында 1880 йылда уҡ әле ошолай тип яҙа:

«Аҫаба башҡорт, бай, аҡыллы һәм абруйлы кеше булған. Башҡорттар уға ихтирам менән ҡараған, ул бер рәттән бер нисә тапҡыр һайланып, олоҫ старшинаһы булып торған. Урындағы власть башҡорт старшинаһына ышаныс менән ҡараған. Уның рус хөкүмәтенә тоғро булыуына бер ниндәй ҙә шик төшмәгән. Бына шуға күрә, бөтөн сыуалыштарға һәм эҙәрләүҙәргә ҡарамаҫтан, Юлай үҙ урынында имен генә ҡала килгән. Етмәһә, 1768 йылда Ырымбур губернаторы кенәз Путятин узе Юлайҙы башҡорт командаһының старшинаһы итеп тәғәйенләй. Әммә башҡорт старшинаһы асылда бер ҙә ундай булмаған, ә үҙен хөкүмәткә тоғро кеше итеп оҫта курһәтә генә белгән. Юлайҙың күҙе алдында башҡорт ауылдары яндырыла, ил бөлгөнлөккә төшөрөлә. Эҫем заводын һәм завод ауылдарын һалдырғанда сауҙагәр Твердышев... уның ерҙәрен тартып ала. Үҙ Ватанын бөтөн йәне-тәне менән һөйгән ысын башҡорт Юлай быға тыныс күңел менән ҡарай алмай: ул үҙенең тойғоларын йәшереп, эстән ризаһыҙлыҡ һаҡлай һәм үс тота. Шундай кеше була Салауаттың атаһы»[5].

Очерк башлыса документаль материалдарға нигеҙләнгән, унда Юлай Аҙналинға шәхес буларaҡ дөрөҫ ҡылыҡһырлама бирелгән. Уның губернатор А.А. Путятин тарафынан олоҫ старшинаһы итеп ҡуйылыуы ла раҫ. Әммә бында дата мәсьәләһендә генә бүтән сығанаҡтар менән аҙ ғына айырмалыҡ (ике йылға тап килмәй) тураһында әйтеп үтергә мөмкин. Ырымбур губерна канцелярияһы документтарына таянып, И.М. Гвоздикова Юлайҙың 1762 йылда йөҙ башлығы (сотник), ә 1766 йылда старшина булыуы тураһында яҙа һәм, Путятиндың 1766 йылдан губернатор вазифаһын башҡарыуын иҫкә алғанда, Юлайҙы ла старшина итеп шул уҡ йылда тәғәйенләгәндәрҙер, тип фараз яһай[6].

«Юлай төплө ҡарашлы кеше, ул ғәҙеллек өсөн ҡурҡмай көрәшә. Аҫаба башҡорт ерҙәренең таланыуына юл ҡуйғаны өсөн төбәк хакимиәттәренә һәм башҡорт феодалдарына ҡаршы сыға», — тип яҙа Салауат Юлаев тормошо тураһындағы танылған китаптарҙың авторы, тарих фәндәре кандидаты В.В. Сидоров. Шуның менән бергә уның тормошонда, рус армияһының хәрби походтарында ҡатнашып, шул йәһәттән ҙур ғына тәжрибә туплау факты ла билдәле әһәмиәт ҡаҙана. Дөйөм алғанда, Юлай, һис шикһеҙ, үҙ дәүерендә алдынғы ҡарашлы, халыҡ мәнфәғәте өсөн эҙмә-эҙлекле көрәшеүсе оло бер шәхес була. Уның бала сағы башҡорт халҡының 1735—1740 йылдарҙағы бөйөк милли-азатлыҡ һуғышы дәүеренә тура килә. Ә инде А.С. Пушкиндың «ҡарт боласы» тигән һүҙҙәре Юлайҙың 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ла (Батырша яуында) ҡатнашыуын күҙ уңында тотоп әйтелгән булырға тейеш.

Юлай башҡорт халҡын бөлгөнлөккә төшөрөүсе закондыҙлыҡтарға, башҡорт ерҙәрен талаусыларға ҡырҡа ҡаршы сыға. Мәҫәлән, тарихи документтар аша ошондай факт яҡшы билдәле. 1759 йылдың 16 мартында Шайтан-Көҙөй ырыуы башҡорттарының аҫаба биләмәләрендә, Эҫем йылғаһы буйында, рус заводсыларына завод төҙөргә рөхсәт биреү тураһында ҡарар сыға[7], 1761 йылда завод сафҡа баҫа. Нәҡ бына шул ваҡытта завод өсөн Я.Б. Твердышевҡа һәм уның компаньоны И.С. Мясниковҡа яңынан башҡорт ерҙәренән 60 йылға ҡортомға биләмә биреү тураһында акт төҙөлә. Ул актҡа Себер даруғаһы Шайтан-Көҙөй олоҫо вәкилдәренән старшина Иштуған Мишәров командаһы башҡорттары Иҙрис Дәүәтәков, Алҡа Пулатов, Бикбулат Төкәев, Аҫҡар Ибраев һәм Ырыҫбай Шағанаев ҡул ҡуя[8]. Йәнәһе, «ышаныслы» тип исемләнгән был кешеләр араһында Шағанаев тигән башҡорттоң булыуы бер ҙә осраҡлы түгел. Сөнки был төбәктә уның атаһы Шағанай Борсаҡов башҡорт халҡы мәнфәғәттәренә зыян килтереүсе эштәре менән бик таныулы була. Юлай Аҙналинға уның һәм улдарының яуызлыҡтарына ҡаршы оҙаҡ ваҡыттар көрәшергә тура килә. Шағанай Борсаҡов 1743 йылға тиклем Шайтан-Көҙөй олоҫоноң старшинаһы булып тора, башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа батша властарына булышлыҡ итә[9]. Яйыҡ эштәре өсөн вазифаһынан бушатыла. И.М. Гвоздикова раҫлауынса, «был ваҡыт эсендә старшина вазифаһын Юлай Аҙналин атҡара»[10]. Юлай нәҡ бына ошо ожмахҡа тиң меңәрләгән дисәтинә башҡорт ерҙәрен алдашыу юлы менән рус заводсыларына ҡортомға биреүгә ҡаршы оҙаҡ йылдар буйы тынһыҙ көрәш алып бара.

Закон буйынса, «ерҙе һатыу йәки ҡортомға биреү тураһындағы килешеү башҡорт ырыуҙарының ерҙең юридик биләүселәре тип иҫәпләнгән бөтөн ағзалары менән төҙөлөргә тейеш»[11] булған. Юлай старшина булғас та, енәйәт һәм ялғанлыҡ менән килешә алмайынса, көрәште дауам итә һәм, башҡорттарҙың хоҡуҡтарын яҡлап, судҡа мөрәжәғәт итә. Әммә рус заводсыларының мәнфәғәтен генә яҡлаусы суд органдары, киреһенсә, Юлайҙың үҙен ғәйепләй, Юлайға һәм үҙ ерҙәре өсөн даулашыусы башҡорттарға 600 һумлыҡ штраф һала.

Башҡорт ерҙәрен талау, закондыҙлыҡ, халыҡтың хоҡуҡтарын һанға һуҡмау артабан тағы ла көсәйә. Бына 1770 йылдың 24 майында старшина Юлай Аҙналинға буйһонған Себер даруғаһы Ҡобау олоҫо Ҡобау ауылы башҡорттарының шул уҡ заводсылар И.Б. Твердышев менән И.С. Мясниковҡа Белорет һәм Ҡатау заводтары өсөн Ағиҙел, Йүрүҙән буйҙарындағы икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе һатыу тураһындағы Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән грамота. Был юлы ла Юлай закондыҙлыҡҡа ҡаршы тора алмағандыр, күрәһең. Ә хәҙерге бер нисә район биләмәһенә тиң ошо ерҙәр өсөн рус колонизаторҙары

башҡорт аҫабаларына күпме хаҡ түләгән тип уйлайһығыҙ? Барлығы — әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ — 560 һум. Ә бит хаҡлыҡ талап итеп судлашҡан өсөн Юлайға һәм уның менән бергә көрәшеүсе башҡорттарға һалынған штраф ҡына ла бынан 40 һумға артығыраҡ.

И.М. Гвоздикова үҙенең алда телгә алынған хеҙмәтендә Юлай Аҙналинды «намыҫлы, ришүәтселеккә һәм йәберләүҙәргә ҡаршы көрәшеүсе кеше итеп күрһәтеүсе» тағы бер миҫал килтерә. Башҡорттарға хәрби походтарҙа ҡатнашыу һәм линия хеҙмәтен үтәү бик ауырға төшкән. Шул сәбәпле хәрби хеҙмәткә йыйыусы командирҙар араһында ришүәтселек урын алған. Вәлиша Шәрипов тигән кеше асыҡтан-асыҡ ришүәт менән Себер даруғаһы башҡорттарының ризаһыҙлығын тыуҙырған. «Даруғаның бөтөн олоҫтары башҡорттарының вәкилдәре Юлай Аҙналин менән Тырнаҡлы олоҫо старшинаһы Яуын Сыуашев Өфө провинцияһы канцелярияһына Вәлиша өҫтөнән шикәйәт бирә. Юлай Өфөлә ришүәтсене фаш итеп сыға»[12]. Был ваҡиға 1771 йылда булған.

1770 йылдың йәйендә академик П.С. Паллас, экспедицияһы менән Шайтан-Көҙөй олоҫонда туҡталып, Юлай Аҙналин менән табындаш була.

1772 йылда Юлай 3000 кешелек башҡорт атлы ғәскәре составында бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылған Польша конфедераттарына һәм баш күтәргән Литва отрядтарына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Был хаҡта И.М. Гвоздикованың алда телгә алынған китабында (198-се бит) ошоларҙы уҡыйбыҙ: «Отряд Өфөнән 1772 йылдың ғинуар уртаһында сыға. Башҡорт яугирҙары Варшава, Вильно эргәһендәге һәм башҡа урындарҙағы һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Улар Хәрби Коллегияның 1772 йылдың 25 август һәм 1773 йылдың 17 июнь указдарына ярашлы рәүештә ике төркөм булып әйләнеп ҡайта. Юлай Аҙналиндың һуғыш яланында күрһәткән батырлығы һәм ғәййәрлеге махсус наградаға лайыҡ була... 1773 йылдың октябрендә Юлай, ғаиләнең ҡәҙерле ҡомартҡыһы итеп, Польшала күрһәткән хеҙмәте өсөн алған билдәне улына биргән». Был хаҡта Салауат Мәскәүҙә һорау алғанда ла һөйләгән. Әйткәндәй, Юлай Аҙналиндың Польша походында ҡатнашыуы Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» исемле тарихи романында (икенсе китап) ғәйәт сағыу эпизодтарҙа һүрәтләнә. Башҡорт тарихи романистикаһын үҫтереүгә ҙур өлөш индергән был күренекле яҙыусының документаль сығанаҡтар менән бик иғтибарлы һәм ентекле эш итеүен иҫәпкә алғанда, әҫәрҙәге ул эпизодтарҙы Юлай Аҙналиндың портретын тулыландырыусы материал тип баһаларға була. Романда тасуирланғанса, башҡорттарҙан тупланған өс мең яугирлыҡ ғәскәр составындағы алты полктың береһенә Юлай атаман була, ә корпусҡа Һыу-Танып иләүенең старшинаһы Ҡолой Балтасов командалыҡ итә. Башҡорт

корпусы ул саҡта әле генерал А.В. Суворов ҡулы аҫтындағы бригадир В.А. Кар* командаһына буйһондорола. Һөжүм иткән ваҡытта тупаҫ һәм үҙ һүҙле Кар башҡорт корпусына ныҡ ҡына ҡаршылыҡ күрһәткән бер ҡалаға төн уртаһында баҫып инеп, унда кем бар, һәммәһен ҡырып һалырға тигән әмер бирә. Юлай Аҙналин быға ҡаршы төшә һәм ҡаланы ҡамауға алып, көндөҙ инергә тәҡдим, итә. Сөнки, унынса, ҡараңғыла кемдең кем икәнен айырып булмаясаҡ, ғәйепһеҙ кешеләр ҙә ҡырыласаҡ. Кар менән Аҙналин араһында бәхәс ҡыҙған ғына саҡта улар эргәһенә Суворов килеп сыға һәм, мәсьәләнең айышына төшөнөү менән, Аҙналиндың кешелекле тәҡдимен дә, уның һөжүм итеү тактикаһын да хуплай. Алыш уңышлы һәм, иң мөһиме, ике яҡтан да бик аҙ юғалтыуҙар менән тамамлана. Юлай Аҙналин һәм йәнә бер нисә башҡорт яугиры, нәҡ бына ошо ваҡиға айҡанлы, батыр һуғышҡандары өсөн, хәрби миҙал менән бүләкләнә. (Юлай Аҙналин походта йөрөгән ваҡытында олоҫта старшина вазифаһын Салауат атҡара.)

1773 йылдың 17 сентябрендә дон казагы Е.И. Пугачев етәкселегендә Рәсәй империяһын дер һелкетәсәк бөйөк Крәҫтиәндәр һуғышы башланып китә. Батша властары баш күтәреүселәрҙе баҫтырыу өсөн, даими армия менән бергә, ҡеүәтле хәрби көс булып танылған башҡорт һыбайлыларын файҙаланыуҙы ла маҡсат итеп ҡуя. Өфө провинция канцелярияһы Башҡортостандың һәр тарафына «яуыз Пугачев һәм уның өйөрөнә ҡаршы башҡорт старшиналары тоғро ғәскәрҙәргә ярҙамға үҙҙәренән башҡорттарҙы ебәрһендәр» тигән бойороҡтар тарата. 1773 йылдың октябрендә Шайтан-Көҙөй олоҫона ла ошондай әмер килеп төшә. Ошо әмерҙе үтәү йөҙөнән Юлай, йөҙгә яҡын кешенән торған башҡорт отряды йыйып, Салауат етәкселегендә Стәрлетамаҡ пристаненә оҙата. Бынан һуңғы ваҡиғалар Салауаттың бер мең ике йөҙ кешелек йыйылма команда менән баш күтәреүселәр яғына сығыуы, Ырымбур эргәһендәге Бәрҙе биҫтәһендә торған Е.И. Пугачев ғәскәренә барып ҡушылыуы һәм тиҙ арала (ни бары бер ай самаһы ваҡыт эсендә) баш күтәреүселәр армияһында юғары ойоштороу, хәрби эшмәкәрлектә һәләт һәм батырлыҡ күрһәтеп өлгөрөү менән билдәләнә. 1773 йылдың ноябрендә Е.И. Пугачев үҙ армияһының иң йәш полковнигын, башҡорттарҙан яңы отрядтар ойоштороп, үҙ аллы хәрәкәт итер өсөн Башҡортостанға, дөрөҫөрәге, башҡорт иленең Себер даруғаһына, ҡайтарып ебәрә. Салауат ысын мәғәнәһендә халыҡты оло ихтилалға күтәрә һәм декабрь аҙаҡтарына ҙур ғәскәр туплай. Ошо осорҙа уға атаһы килеп ҡушылып, бик ҙур таяныс булғандыр, тип иҫәпләргә мөмкин. Был хаҡта Һатҡы заводы крәҫтиәндәренең «хөрмәтле әфәнде Юлай старшинаға» ҙур кеселеклелек менән заводҡа хәрби команда ебәрмәүен һәм уның тирә-яҡта йөрөүсе һәр төрлө «уғры төркөмдәрҙән» һаҡлауын һорап мөрәжәғәт иткән

рапортынан сығып фекер йөрөтәбеҙ[13]. Рапорт 1773 йылдың 18 декабрендә яҙылған, ә унын йөкмәткеһе Юлайға баш күтәреүселәр сафында бик ҙур вәкәләтлек бирелгәнлеге тураһында һөйләй. Ихтилалдың тәүге осоронда Салауат та, Юлай ҙа Эҫем заводына теймәйҙәр. Салауат уны бары тик 1774 йылдың 23 майында, хөкүмәт ғәскәрҙәре бик нык ҡыҫымға алғас ҡына, яндырырға мәжбүр була. Ул саҡта ла, ғәйепһеҙ ҡорбандар булмаһын өсөн, «халыҡты далаға сығарып ебәрә».

1774 йылдың апрель-май айҙарында был ваҡытта инде Пугачев армияһының полковнигы Юлай Аҙналин улы Салауат менән бергә Эҫем, Ҡатау заводтары тирәһендә хәрәкәт итә. Уларҙы Михельсондың язалау корпусы эҙәрлекләй, 8 майҙа Эҫем заводына яҡын Йырал ауылы эргәһендә ҡаты бәрелештәр була. 1774 йылдың 2 июнендә Салауат ғәскәре Үрге Ҡыйғы ауылы эргәһендә Пугачев ғәскәре менән осраша. Пугачев Салауатҡа бригадир дәрәжәһе бирә, ә Юлайҙы Башҡортостандың Себер даруғаһы баш атаманы итеп билдәләй.

1774 йылдың июль айынан һуң Себер даруғаһы Башҡортостанда ихтилалдың үҙәгенә әйләнә, ә Салауат менән Юлай баш күтәреүселәрҙең төп етәкселәре булып китә. Улар август һәм сентябрь айҙарында Себер һәм Уҫы даруғаларында хәрәкәт итә. Салауат был осорҙоң башында Йырал ауылында урынлаша. Ошонан тороп, Салауат һәм Юлай Ҡатау заводын октябрь айына тиклем ҡамауҙа тоталар. 1774 йылдың 10 сентябрендә Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаев Ҡатау заводы етәкселәренә һәм приказчиктарына тыныс юл менән, баш күтәреүселәрҙең шарттарына күнеп, Е.И. Пугачев хаҡимлығына буйһонорға өндәгән хат менән мөрәжәғәт итә. Был документта Юлай менән Салауаттың хатта һуғыш шарттарында ла ҡырҡыу мәсьәләләрҙе килешеү юлы менән хәл итеү, рус менән башҡорттоң үҙ-ара татыу йәшәү мөнәсәбәттәренән сығып эш итеүгә күренеп тора. Иҫке төрки (элекке башҡорт әҙәби) телендә яҙылған был хатта, мәҫәлән, ошондай юлдар бар:

«Әкәр сизниң кишиңиз бизкә тутулса, бизләр аны үлтүрмәйнчә һәм зарар тикүрмәйнчә сизкә ҡайтарамыз... Сиздин бизкә тутулмуш ики уруснын берсүн ҡайтардуҡ язу илә. Мусабай ҡайтуб килгәндин кизин мунда бизниң ҡулумызда ҡалғучи берәгүсин дә ҡайтарурмыз. Бизләр берү-берүбиз илә ыспурлашуб, берү-берүбизни белдүрүшиб турарға мүмкин дәгүлдүр. Көллүмиз дә бадишаһымыз Питр Фидрувич хәзрәтләриниң ҡолумыздыр...»[14]

1774 йылдың ошо уҡ сентябрь айында Салауат ғәскәре Борай олоҫоноң Тимошкин, Нөркә ауылдары эргәһендә хөкүмәт ғәскәрҙәре менән аяуһыҙ алышып, күп юғалтыуҙар кисерә. Башҡортостандың бөтөн тарафтарын карателдәр ҡамап ала. Ошондай шарттарҙа Юлай хөкүмәт ғәскәрҙәре менән һөйләшеү алып бара башлай һәм тиҙҙән «тоғро» старшиналар уны язалау

отряды командиры коллежский советник Тимашевҡа тотоп бирә. 25 ноябрҙә Салауатты тоталар. Оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған яуап алыуҙар башлана. Салауат та, Юлай ҙа үҙҙәрен ғәйепле итеп танымай. Аталы-уллы батырҙар үҙҙәренең бөтөн ғүмерҙәре менән халыҡ азатлығы өсөн көрәш идеяһына тоғролоҡ өлгөһө күрһәтәләр. 1775 йылдың 3 октябрендә уларҙы көслө һаҡ аҫтында мәңгелеккә каторгаға оҙаталар. 29 ноябрҙә каторжандар, күп меңләгән саҡрым ерҙәрҙе үтеп, Рогервик портына барып етәләр. Салауат менән Юлайҙың ҡалған ғүмере Балтик буйындағы ошо портта үтә.

Юлай Аҙналин — башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, Тыуған еренең азатлығы өсөн көрәшкән бөйөк шәхестәрҙең береһе. Уның исеме Ҡараһаҡал, Батырша, Кинйә, Салауаттар менән бер дәрәжәлә торорға тейеш.

* * *

* В.А. Кар — Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда генерал-майор, язалау ғәскәрҙәренең командующийы. 1773 йылдың 7—9 ноябрендә Ырымбур губернаһы Йөҙәй ауылы янында уның ғәскәре баш күтәреүселәр тарафынан тар-мар ителә. (Ҡарағыҙ: Документы ставки Е.И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений, 1773—1774. М., 1974. 379-сы бит.)

[1] Хисамитдинова Ф.Г. Башкирская ойконимия XVI—XIX вв. Уфа, 1991. 196-сы бит.

[2] Гвоздикова И.М. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү. Өфө, 1984. 199-сы бит.

[3] Шунда уҡ. 196-сы бит.

[4] Гвоздикова И.М. Подвиг старшины // Республика Башкортостан. 2005, 18 июнь.

[5] Нефедов Ф.Д. Движение среди башкир перед пугачевским бунтом. Салават — башкирский батыр // Башкирия в русской литературе. Т. 2. Уфа, 1964.

[6] Гвоздикова И.М. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү, 196—197-се биттәр.

[7] Материалы по истории Башкирской АССР. Том 4, часть 2-я. М., 1956. 576—579-сы биттәр.

[8] Материалы по истории Башкирской АССР. Том 4, часть 1-я. М., 1956. 246—248-се биттәр.

[9] Материалы по истории Башкирской АССР. Том 4, часть 2-я. 595-се бит.

[10] Гвоздикова И.М. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү, 199-сы бит.

[11] Гвоздикова И.М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 220-се бит.

[12] Гвоздикова И.М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 200—201-се биттәр.

[13] Документы ставки Е.И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений. 115-се бит.

[14] Башҡорт теле: Педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө, 1968. 9—10-сы биттәр. / Хаттың рус теленә тәржемәһен ҡарағыҙ: Документы ставки Е.И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений. 256—257-се биттәр.

* * *

Әҙәбиәт: Наш Салават. Уфа, 1973; Сидоров В.В. О судьбе последних пугачевцев-башкир // Вопросы истории. 1974, № 1; Асфандияров А.З. Юлай Азналин // Урал. 1977, № 1. 173—175-се биттәр; Шәкүр Рәшит. Юлай Аҙналин // Шоңҡар. 1995, № 5; Юлай Азналин // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Гвоздикова И.М. Подвиг старшины // Республика Башкортостан. 2005, 18 июня.

Салауат Юлаев
(1754—1800)



Салауат Юлаев бюсы.
Бронза, 1952.
Скульптор – Т.П. Нечаева.



Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле.
Суйын, гранит, 1967.
Скульптор — Төньяҡ Осетия һәм Башҡорт АССР-ының халыҡ художнигы, СССР-ҙың Дәүләт премияһы лауреаты С.Д. Тавасиев, архитектор — И.Г. Ғәйнетдинов.

Башҡорт халҡының тарихында айырыуса дан һәм бөтмәç-төкәнмәç мөхәббәт ҡаҙанған бөйөк шәхестәребеҙҙең береһе, батырлыҡ һәм ил мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, башҡорт милләтенең рухи ҡаһарманлыҡ символы. Милли герой, шағир-импровизатор, кешелек донъяһында милли-азатлыҡ хәрәкәттәренең һоҡланғыс етәкселәренең береһе.

Фәндә, әҙәбиәттә, сәнғәттә Салауат темаһы һис ваҡыт тамамланмаç илаһи бер темаға әйләнде. Уның хаҡында яҙылған әçәрҙәр һәм хеҙмәттәр бихисап. Исемен һәм образын башҡорт халҡы үҙ ижадында эпос геройҙарына тиң булырҙай бейеклектәргә күтәрҙе. Милләтебеҙ символы — дәһшәтле һыбайлы Салауат һыны тарихыбыҙҙың яңы боролошонда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында урын алып, башҡорт иленең ырыç, ҡот билдәһенә әйләнде. Салауат исеме — икһеҙ-сикһеҙ ғорурлыҡ, рухи күтәренкелек сығанағы, ул һәр ваҡыт алға әйҙәп тороусы көс, башҡорттоң ҡайнар йөрәк тибеше, мәңге һүрелмәç азатлыҡ рухы.

Һәр бер биография, күреүегеҙсә, геройҙың тыуған еренән һәм тыуған йылынан башлана. Тыуған еренә килгәндә, Салауат Юлаев әүәлге Ырымбур

губернаһының Өфө провинцияһы Себер даруғаһы Шайтан-Көҙөй йорто (олоҫо) (хәҙер Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Тәкәй ауылында арҙаҡлы башҡорт феодалы Юлай Аҙналин ғаиләһендә тыуған. Салауаттың атаһы элекке башҡорт ихтилалдарында ҡатнашып, халыҡ яҙмышы өсөн тәрән борсолоу кисереп йәшәгән кеше була. А.С. Пушкиндың уны үҙенең «Пугачев тарихы» китабында «ҡарт боласы» тип атауы бер ҙә осраҡлы түгел. Юлай аҙаҡ Крәҫтиәндәр һуғышы башланғас та Салауаттың иң яҡын таянысы, хәрби арҡаҙашы булып китә, артабанғы бөтөн ғүмерен уның ауыр яҙмышы менән уртаҡлай. Бөйөк батырыбыҙҙың әсәһе тураһында рәсми мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Фольклор материалдары буйынса, ул белемле ҡатын була (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа әйтелеүенсә, исеме Аҙнабикә). Салауат ғаиләлә, ғөмүмән, бик яҡшы тәрбиә ала. Уның бала сағы хаҡында XIX быуат рус яҙыусыһы Ф.Д. Нефедов бына ниҙәр яҙа: «Ғаилә, тәбиғәт һәм мәктәп Салауаттың тәрбиәселәре булдылар; шулар йоғонтоһонда уның көсө, һәләте үҫә һәм буласаҡ геройҙың характерына нигеҙ һалына. Халыҡ яҙмышына төшкән бәлә-ҡазалар тураһында ул үҙҙәренең өйөндә әсәһенең моңло йырҙарын, атаһының һөйләгән һүҙҙәрен тыңлаған; йәйге мәлдә, йәйләү киңлектәрендә, — башҡорттарҙың бәхетле заманалар хаҡында йәнә шул уҡ хикәйәттәре һәм хәтирәләре, бәһлеүәндәр һәм бөйөк ҡешеләр тураһында йырҙар һәм риүәйәттәр... Тәьҫирләнеүсән, дәртле һәм шиғри тәбиғәтле Салауат һәр нәмәгә ҡолаҡ һала, һәр нәмәгә ҡарата үҙ мөнәсәбәтен белдерә, тыуған тәбиғәт матурлығына һоҡланып таң ҡала...

Салауат әсәһен бик ярата, атаһына айырылмаҫ булып эйәләшә; атаһы ҡайҙа барһа — улы ла уның менән.

— Атай! Ана тегендә ҡарайып ятҡан нимә ул? — тип һорай Салауат, юлға яҡын ғына күренеп ятҡан күмер өйөмдәренә күрһәтеп.

— Был элекке ауыл урыны, — тип күңелһеҙләнеп яуап бирә Юлай. — Уны һин тыуған йылда яндырҙылар.

— Ә ни өсөн яндырҙылар? — тйип төпсөнә улы.

— Беҙҙекеләр ирек, башҡорттоң әүәлге хоҡуҡтары яғында торҙолар. Шуның өсөн яндырҙылар ҙа инде.

Малайҙың йөҙө ҡара янды, уның ҡара күҙҙәре ут булды.

— Ә бына бында, — тип күрһәтте уға атаһы йәнә бер яндырылған ауыл урыны эргәһенән үткәндә, — беҙҙекеләрҙең баштарын балта менән сабып өҙҙөләр, ә ҡайһы берҙәрен бағаналарға аҫтылар...»[1]

Артабан күрәбеҙ: яндырылған башҡорт ауылдарынан ҡалған күмер киҫәктәре Салауаттың халыҡты көрәшкә әйҙәүгә бер сара булып китә: «Салауат шул күмер киҫәген ауыл һайын күрһәтеп йөрөгән, бөтөн башҡортто аяҡҡа баҫтырып, ҙур ғәскәр йыйған», — тип бәйән ҡыла халыҡ легендаһы. 1773

йылдың октябрендә, 1200 һыбайлы алдында Е.И. Пугачев күтәргән ихтилалға ҡушылырға өндәп, ат өҫтөнә баҫып телмәр әйткән сакта ла Салауат нәҡ ана шул яндырылған ауылдарыбыҙҙың күмерен ҡулына тотоп, башҡорт азатлығы өсөн көрәштә мәңгелек тоғролоҡҡа ант итә. «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып» исемле атаҡлы ҡобайырында иһә ул, шул уҡ күмер киҫәген тәьҫирле поэтик образ кимәленә күтәреп, былай ти:

Ҡулыма алған был күмер —
Йортобоҙҙан ҡалған күмер ул,
Утҡа ташланған сабый балалай,
Һулҡылдап янған күмер ул,

Ҡулымды яндырған шул күмер
Эшебеҙҙә геуаһ булһынсы...

Салауаттың тыуған йылына килгәндә, был мәсьәләлә нигеҙҙә ике төрлө ҡараш йәшәп килә. Беренсеһе буйынса, Салауат 1752 йылда тыуған, тип иҫәпләнелә. Был дата 1797 йылдың 19 майында төҙөлгән Балтик портында тороусы каторга тотҡондары хаҡындағы «Статьялы исемлек»кә ҡарап билдәләнгән. (Унда Салауат — 45, уның атаһы Юлай Аҙналин — 75 йәштә, Ҡәнзәфәр Усаев 62 йәштә тип күрһәтелгән.) Ә инде Салауаттың тыуған айын, көнөн тарихсылар, йылдың уртаһына тура килтереп, шартлы рәүештә 16 июнь тип алған. (Был хаҡта миңә заманында хәҙер инде мәрхүм тарихсы-ғалим Әбүбәкер Усмановтан һорашып белешергә тура килгәйне.) Әйткәндәй, 1952 йылда Салауат Юлаевтың тыуыуына 200 йыл тулыуға арналған юбилей тантаналары нәҡ әлеге беҙ беренсе тип атаған версия буйынса уҙғарылды.

70—80-се йылдарҙа Салауаттың тыуған йылы мәсьәләһендә был ҡараш шик аҫтына алына башланы. Милли ҡаһарманыбыҙҙың биографияһын өйрәнеүсе күп кенә авторҙар уның хаҡында 1754 йылда тыуған булырға тейеш тигән фекерҙе төрлө яҡлап нигеҙләнеләр. Был йәһәттән иң элек Салауат Юлаев менән бәйле документаль сығанаҡтарҙы ентекләп өйрәнгән билдәле тарих белгесе Инга Гвоздикованың дәлилдәре айырыуса әһәмиәтле. Йәнә һәүәҫкәр тарихсы Ғәзиз Галиндың Салауат Юлаевтың тормошон, уның биографияһына бәйле мөһим даталарҙы асыҡлау һәм аныҡлау буйынса үҙ аллы тикшеренеүҙәре иғтибарҙы йәлеп итерҙәй булды. Төп фекер шуға ҡайтып ҡала: 1797 йылдың 19 майында төҙөлгән «Статьялы исемлек»тә Салауат Юлаевтың ғына түгел, уның менән бергә тотҡонда булғандарҙың барыһының да тиерлек йәштәре, тәүге сығанаҡтар менән сағыштырғанда, арттырылған булып сыға. Тәү сығанаҡтар, йәғни 1774—1775 йылдарҙа ҡулға алынғандан һуң һорау алыу документтарындағы мәғлүмәттәр менән сағыштырғанда, «Статьялы исемлек»тә

Салауатҡа — 2, Юлайға хатта 7—8 йәш өҫтәлгән. Ҡәнзәфәр Усаев иһә 1774 йылдың 4 авгусында үҙе хаҡында 36 йәштәмен тип күрһәтә, ә 1797 йылғы «Статьялы исемлек»тә уға 62 йәш тип күрһәтелә. Асылда иһә, ул тәүге сығанаҡ буйынса, 59 йәштә булып сыға. Күренекле пугачевсылар Иван Почиталин — 3, Емельян Тюленев бында 2 йәшкә олораҡ күренә. Ни сәбәптән шулай килеп сыҡҡан? Сөнки 1797 йылда әлеге «Статьялы исемлек»те төҙөгән саҡта ҡәлғә комендантының ҡулында каторгаға һөрөлгән пугачевсылар хаҡында элекке исемлектәр йәки башҡа төрлө документтар булмаған, ул яҙмалар «йә юғалған, йә онотолған, ә тотҡондарҙың йәштәрен 1797 йылда уларҙан һорау алғандағы яуаптарына һәм физик хәлдәренә ҡарап күрһәткәндәр»[2]. Оҙаҡ йылдар ҡаты каторга шарттарында йәшәгән; өҫтәүенә унда ебәрелер алдынан Салауат менән Юлай һымаҡ ҡаты язаланған тотҡондарҙың бер нисәшәр йыллыҡ йәш айырмаһы икеләнеү тыуҙырмағандыр. Шунан сығып, И.М. Гвоздикова, «Статьялы исемлек»тә һөргөндәге баш күтәреүселәрҙең йәштәре сама менән алынған, тип иҫәпләй һәм: «Пугачевсыларҙың 1774—1775 йылдарҙа һорау алғанда биргән күрһәтеүҙәре дөрөҫлөккә яҡын, уларҙы нигеҙ итеп ҡабул итергә кәрәк»,[3] — тигән һығымта яһай. Ә инде 1775 йылдың 25 февралендә Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алғанда Салауат, 21 йәштәмен, тип белдерә. Шул уҡ йылдың 2 октябрендә, Өфө провинция канцелярияһында Салауат менән Юлай тураһында төҙөлгән мәғлүмәттәр «Теҙмә»һендә лә Салауатҡа 21 йәш тип билдәләнә. Шул нигеҙҙә, беренсенән, Салауат 1754 йылда тыуған, тип раҫлау ышаныслыраҡ булып сыға. Икенсенән, йылдың миҙгеленә килгәндә, март һәм октябрь айҙары арауығына тура килә. Шуға күрә элегерәк билдәләнгән 16 июнь көнөн, шул уҡ урталыҡта булыуы арҡаһында, хәҙер ҙә шартлы рәүештә ҡабул итергә мөмкин. Салауат 1754 йылда тыуған тигән был икенсе ҡараш әлеге ваҡытта фәндә яҡлау тапты. 2004 йылда Салауаттың тыуыуына 250 йыл тулыу айҡанлы байрамдар ошо фаразға нигеҙләнеп үткәрелде.

Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: уҙған быуаттың икенсе, яртыһында рус тикшеренеүсеһе Р.Г. Игнатьев «Башҡорт Салауат Юлаев, пугачевсы бригадир, йырсы һәм импровизатор» тигән хеҙмәтендә: «Юлайҙың Салауат тигән улы булған, уға Пугачев болаһы алдынан 20 йәш була»,[4] — тип яҙа. Унан алдараҡ, 1880 йылда, рус яҙыусыһы Ф.Д. Нефедовтың «Пугачев болаһы алдынан башҡорт хәрәкәте. Башҡорт батыры Салауат»[5] тигән очеркында иһә Пугачев ихтилалынан саҡ ҡына алдараҡ ун һигеҙ йәштәге Салауат һыны күҙ алдына баҫтырыла. Ике автор ҙа руссаға тәржемәлә:

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел генә бүрке башында.

Салауаттың йәшен һораһағыҙ —
Батыр булған ун дүрт йәшендә, —

тигән йыр һүҙҙәрен килтерәләр.

Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романында Салауаттың ун дүрт йәштә бер үҙе айыу менән алышып, батырлыҡ күрһәтеүе әҫәрҙәге тотош бер бүлек өсөн нигеҙ итеп алынған.

Салауат хаҡындағы халыҡ йырында иһә шул уҡ строфа, заманалар үтеү менән үҙгәртелеп:

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Салауаттың йәшен һораһағыҙ —
Егерме лә ике йәшендә, —

тип йырлана. Хәйер, 1775 йылдың көҙөндә ул егерме икенсе йәше менән барған булһа, был урынлы һымаҡ.

Салауат ун алты-ун ете йәштәрҙә зирәк аҡыллы, урта буйлы, баһадирҙарса мыҡты кәүҙәле, ҡыйыу, тәүәккәл булып үҫеп етә. Ф.Д. Нефедов уның, бил бирмәҫ батыр, көслө һәм ҡеүәтле бәһлеүән булыуы менән бергә, уҡымышлылығы һәм тәрән белемлелегенә айырыуса баҫым яһап, бына нисек яҙа:

«Әммә Салауат физик көскә генә эйә булмаған. Ул — ғилем эйәһе һәм шағир. Ул Ҡөрьәнде һәм шәриғәтте белә, үҫмер алдында ҡарттар хөрмәт күрһәтеп баш эйә, уның исеме һәр кемдең телендә, уның уҡымышлылығынан муллалар ғына түгел, хатта ахундар үҙҙәре лә ғәжәпкә ҡала»[6]. Аҡыл һәм белем унда Хоҙайҙан, тиҙәр улар. Нәҡ ошо 16—17 йәштәр тирәһендә ул арҙаҡлы ил сәсәне Байыҡ Айҙар менән осрашып, уның үҙенә төбәп әйтелгән нәсихәттәрен тыңлай.

Салауатта, ти Ф.Д. Нефедов, поэтик тойғо бик иртә уяна. Ожмахтай тыуған Урал тәбиғәте, халыҡ тарихы, башҡорт батырҙары тураһында хикәйәттәр уның күңелендә илаһи хистәр тыуҙыра. Профессор Ә.И. Харисов һүҙҙәре менән әйткәндә, Салауат үҙендә башҡорт халҡының иң элек ике һәйбәт сифатын — уның героизмын һәм поэтик талантын кәүҙәләндергән. Ул милли әҙәбиәтебеҙ тарихында боронғонан килгән сәсәнлек, импровизаторлыҡ һәм бер үк ваҡытта, ҡауырый ҡәләм тотоп, яҙма рәүештә ижад итеү традицияларын дауам итеүсе, уларҙың юғары өлгөләрен тыуҙырыусы булараҡ урын ала.

Салауат ижады тураһында һөйләгәндә уның мираҫының яҙмышы мәсьәләһенә туҡталып үтмәйенсә булмай. Был мираҫ, билдәле булыуынса, ике өлөштән тора. Беренсеһе — уның шиғырҙары, икенсеһе — Салауаттың Крәҫтиәндәр һуғышы осорона ҡараған хаттары, фармандары, указдары,

күрһәтмәләре, бойороҡтары[7].

Салауаттың поэтик мираҫының күләме хәҙер 500 юлдан артып китте. Уны йыйыу, барлау, баҫтырып сығарыу эше – бер быуаттан артыҡ дәүер эсендә бер нисә быуын тикшеренеүселәр тарафынан алып барылған фиҙаҡәр хеҙмәт емеше. Был мәсьәләгә ентекләп туҡталып тормайынса, шуны ғына әйтеп үтәйек. Салауат шиғырҙарына һәм, ғөмүмән, уның поэтик ижадына тәү башлап XIX быуаттың икенсе яртыһында алда телгә алынған рус тикшеренеүселәре Ф.Д. Нефедов һәм Р.Г. Игнатьев етди иғтибар бирәләр. Ф.Д. Нефедов үҙенең хеҙмәтендә шағирҙың бер нисә шиғырының йөкмәткеһен русса проза теле менән һөйләп бирә. Р.Г. Игнатьев иһә, «1868 йылда мәрхүм Дәүләтшин әфәнде тәржемә итте» тигән иҫкәрмә менән, Салауаттың ете шиғырын, исемдәре урынына номерҙар ҡуйып, рус телендә баҫтырып сығара. Совет осоронда ул әҫәрҙәрҙе, һәр береһенә исемдәр ҡуйып, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти башҡорт теленә ҡайтарҙы. Салауаттың «Тыуған илем», «Уралым», «Яу», «Уҡ», «Егеткә», «Һандуғас», «Тирмәмдә» һәм «Зөләйха» тигән был ете шиғыры, шулай уҡ сәсәндәр хәтере аша беҙҙең дәүергә килеп еткән «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып» ҡобайыры 50—60-сы йылдарҙа барлыҡ баҫмаларҙа донъя күрҙе. Артабан был мираҫ йылдан-йыл яңы табыштар менән тулылана барҙы. Уларҙың ҡайһы берҙәре элек йә һуңғараҡ рус телендә сыҡҡан төрлө баҫмаларҙан алынды. «Ҡәҙерлеләй ғаиләм, һөйгән йәрҙәр...» әҫәре, мәҫәлән, Ф.Д. Нефедовтың алда әйтелгән мәҡәләһендә бүтән шиғырҙар менән бергә сәсмә формала урынлаштырылған. 1975 йылда профессор Ғайса Хөсәйенов уны, шиғыр ҡалыбына һалып, донъяға сығара. «Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып...» тигән йырҙы иһә билдәле рус фольклорсыһы В.П. Бирюков, Силәбе өлкәһе Ҡуншаҡ районының Ҡорман ауылында яҙып алып, 1949 йылда рус теленә шиғри тәржемәлә нәшер итә. Һуңғараҡ ул әҫәрҙе Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев башҡортсаға ҡайтара. «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға...» шиғырын тәү башлап 1945 йылда «Салауат батыр» йыйынтығында Әбүбәкер Усманов баҫтыра. «Сәстәреңдең толом сулпылары», «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...», «Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...» һымаҡ поэтик әҫәрҙәрҙе иң элек М.Х. Иҙелбаев 1979 йылда «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре» тигән йыйынтыҡҡа индергән.

Салауат Юлаев ижады — мең йыллыҡ башҡорт поэзияһы тарихында саф мөхәббәт, тыуған ил, халыҡ тойғоһо менән һуғарылған, илаһи көс, ҡеүәт аңҡып торған юғары шиғриәт өлгөһө. Шағир Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанға тиклем үк тәрән хисле лирик шиғырҙары һәм йырҙары менән танылған, тип фараз итә алабыҙ. Уның изге тыуған илебеҙгә мәңге бөтмәҫ йыр булып

яңғыраған «Уралым» шиғыры — нәҡ шундай әҫәрҙәрҙең береһе.

Ай, Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым!
Нурға сумған түбәһе
Күккә ашҡан Уралым!
Һине маҡтай йырҙарым,
Һине данлай йырҙарым.

Төнөн күккә ай ҡалҡһа,
Алтындай балҡый Уралтау.
Көндөҙ күккә көн ҡалҡһа,
Көмөштәй балҡый Уралтау...

Ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояшты
Һайрап ҡаршылай ҡоштарың,
Тонйорап батҡан ҡояшты
Һайрап оҙата ҡоштарың.

Ай, Уралым, Уралым,
Һылыу ҙа һылыу Уралым!
Һүҙем бөтһә лә телемдә,
Йырым бөтмәне, Уралым!

Был илаһи шиғри юлдар хәҙер, йырға һалынып, концерт залдарында яңғырай, башҡорт сәнғәтендә беҙ уны тыуған Уралыбыҙға арналған иң аҫыл йырҙарыбыҙҙың береһе тип ҡабул итәбеҙ. «Һандуғас», «Тирмәмдә», «Тыуған илем», «Зөләйха» — Салауаттың шулай уҡ дәһшәтле яуҙар ҡупмаҫ борон, ир-егет ҡорона ултырған тыныс бер дәүерҙә ижад иткән шиғырҙары:

Мин бахыр һине, Зөләйха, нығ һөйәм,
Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш эйәм.
Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,
Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф...

Ошо тиклем дә ихлас булыр өсөн талант ҡына түгел, ысынлап һөйә белеү ҙә зарурҙыр, моғайын.

Салауат саф йөрәген, бөйөк поэтик талантын халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә арнаны, ҡөҙрәтле поэтик һүҙе ижадында халыҡ мәнфәғәте өсөн үткер ҡоралға тиң ҡуйылды. «Салауат йыр йырлаһа, — тип яҙҙы Р.Г. Игнатьев, — кешеләр

һуғышҡа ҙур теләк менән барҙылар, яраланғандар һыҙланыуҙарын тойманылар, аслыҡтан һәм һыуыҡтан ҡурҡманылар, үлгәндә йөҙҙәрендә йылмайыу булды».

Күләм яғынан ҙур булмаһа ла, Салауат Юлаев шиғырҙары «тәрән фекерле, халыҡсан йүнәлешле һәм оригиналь поэтик йөкмәткеле булыуы менән ҡиммәт», был әҫәрҙәр «башҡорт әҙәбиәтенең аҫыл ҡомартҡыларын тәшкил итә»[8].

Салауат мираҫының икенсе өлөшө яҙма рәүештә һаҡланған документаль сығанаҡтарҙан тора. Уларҙың күпселеге төрки теленән руссаға тәржемәлә, ҡайһы берҙәре, Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙылған хәлдә, йәғни оригиналда, архив материалдары араһында урын алған. Шундай ҡулъяҙма сығанаҡтарҙан 1772, 1773, 1774 йылдарҙағы яҙма ҡомартҡылар билдәле. Мәҫәлән, Рәсәй Үҙәк дәүләт архивында Салауаттың 1772 йылда Шайтан-Көҙөй олоҫо старшинаһы вазифаһын үтәгән саҡта Өфө провинция канцелярияһына ебәргән рапорты табылған. Салауаттың 1774 йылдың 23 мартында йөҙ башлығы Иләтбай Илембаевҡа ғәскәргә кешеләр йыйыу тураһында ебәргән бойороғо шулай уҡ, уның автографы булараҡ, ҡиммәтле документ иҫәпләнә. Был төр сығанаҡтар Салауат Юлаевтың ижади мираҫында, XVIII быуат башҡорт әҙәбиәтенең публицистик өлгөләре булараҡ, мөһим әһәмиәт ҡаҙана. Бынан тыш, Салауаттың 1774 йылдың 7 майында Өфө төрмәһенән үҙенең туғандарына һәм иректәге иптәштәренә яҙған хаты тарихсылар һәм әҙәбиәт белгестәре өсөн берҙәй үк ҡиммәтле документ тип баһалана. Хат төркисәнән руссаға Өфө провинция канцелярияһы тәржемәсеһе Андрей Васильев тигән кеше тарафынан тәржемә ителгән. Шул хатты яҙып, Салауат үҙенең яуаплылыҡҡа тарттырылған көрәштәштәренең хәлен еңеләйтеү, ғаиләһен ҡурсалау өсөн тырышлыҡ күрһәтеп ҡарай, «уны фашлаусы дәлилдәр йыйыуҙа властарға булышлыҡ итмәҫкә, үҙенең ғәйебен тәрәнәйтерҙәй мәғлүмәттәр биреүҙән баш тартырға һәм, мөмкин булғанса, уның ғаиләһенең мәнфәғәттәрен яҡларға һорай»[9]. Хат тотҡонда ултырған батырҙың туғандарына барып етмәй, ә Өфө провинция канцелярияһына тапшырыла. Уның тәржемәһе, һорау алыу ҡағыҙҙары араһына теркәлеү арҡаһында, архив фондтарында һаҡланып ҡала.

Халыҡ батырының, телдән телгә күсеп, һуңғараҡ дәүерҙәрҙә ҡағыҙға теркәлгән тетрәткес көскә эйә йәнә бер әҫәре «Салауат телмәре» тип атала. Был телмәр 1773 йылдың октябрь аҙаҡтарында Пугачев яҡлы булып баш күтәргән башҡорт яугирҙары алдында башҡорт еренең азатлығы өсөн көрәшкә өндәүсе, рухландырыусы өндәмә рәүешендә әйтелгән.



Салауат Юлаевтың йөҙ башы Иләтбай
Илембаевҡа ғәскәргә кешеләр йыйыу тураһында
1774 йылдың 23 мартында ебәргән бойороғо.

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы Рәсәй тарихында халыҡ массаларының феодаль-крепостной иҙеүгә ҡаршы иң ҙур һәм иң дәһшәтле күтәрелешенә әйләнә. Башҡорттар был һуғышта казактар һәм Урал заводтарының эшселәре менән бергә төп көстәрҙе билдәләй. Ихтилал барышында башҡорттар араһынан тиҫтәләрсә ғәйәт талантлы хәрби эшмәкәрҙәр — ғәскәр башлыҡтары үҫеп сыға. Меңәрләгән башҡорттар пугачевсылар сафына баҫа, баш күтәреүселәргә 1773 йылдың сентябренән алып 1774 йыл аҙаҡтарына тиклем данлы батша армияһының заманы өсон сағыштырғыһыҙ яҡшыраҡ ҡоралланған ғәскәри берәмектәренә ҡаршы ҙур-ҙур алыштарҙа ҡара-ҡаршы тороп һуғышырға тура килә.

1773 йылдың октябрь урталарында, Өфө провинция канцелярияһының күрһәтмәһен үтәп, Шайтан-Көҙөй олоҫо старшинаһы Юлай Аҙналин үҙенең 19 йәшлек улы Салауат ҡулы аҫтында 100-гә яҡын һыбайлылар отрядын Стәрлетамаҡ пристаненә, кенәз Ураҡов һәм ҡырҡойлө-меӊ ырыуы старшинаһы Әлибай Мырҙағолов ҡарамағына ебәрә. Бында 1200 кешенән торған башҡорт отрядын туплап, Ырымбур тарафында (Бикҡол ауылы янында) Пугачев ғәскәрен баҫтырырға тейеш булған генерал Кар ҡарамағына оҙаталар. Юлда башҡорт отряды баш күтәрә һәм, Кар отрядына барып етмәйенсә, пугачевсылар яғына сыға. Салауат бер аҙ ваҡыт Кинйә Арыҫланов командалығындағы башҡорт

отрядында Ырымбур эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. Е.И. Пугачев уның ҡыйыулығын, батырлығын, хәрби оҫталыҡ сифаттарын юғары баһалап, полковник дәрәжәһе бирә. Ноябрҙә ул Салауатты, үҙ аллы хәрәкәт итеп, ихтилалдың яңы төбәктәрендә көрәште йәйелдереү маҡсатында, Башҡортостандың Себер даруғаһына ҡайтарып ебәрә.

Салауат, ҙур отряд туплап, 25 декабрҙә олоҫ үҙәге Сарапул ауылын, ғинуарҙа Красноуфимск ҡәлғәһен ала һәм уны башҡорт ерҙәрендә баш күтәреүселәрҙең терәк пункттарының береһенә әйләндерә. Ҡәнзәфәр Усаев, Илсеғол Итҡолов, Сөләймән Күсәкәев һәм Иван Кузнецов отрядтары менән берлектә Көңгөр ҡалаһын ҡамауҙа тота. Ошо һуғыш хәрәкәтендә ауыр яраланып, күпмелер ваҡыт тыуған йортонда дауаланыу сараһын күрергә тура килә. Февраль аҙағында, яралары уңалып бөтөр-бөтмәҫтән, Салауат ике меңлек отряд йыйып, яңынан Красноуфимск һәм Көңгөр тирәһендә хәрәкәт итә. Апрель-май айҙарында атаһы, Пугачев ғәскәре полковнигы Юлай Аҙналин менән бергә Эҫем, Ҡатау заводтары (Оло Ҡатау, хәҙерге Ҡатау-Ивановск) районында һуғыш хәрәкәттәре алып бара. 8 майҙа Йырал ауылы янында Михельсондың карательный корпусы отрядтарына ҡаршы һуғышып, ауыр юғалтыуҙар кисерә.

1774 йылдың 2 июнендә Үрге Ҡыйғы ауылы янында Салауат Юлаев өс меңлек отряды менән Е.И. Пугачевты ҡаршы ала. Пугачев Салауатҡа — бригадир, Юлайға атаман исеме бирә. Иртәгеһенә, 3 июндә, Пугачев һәм Михельсон ғәскәрҙәре араһында ҡаты бәрелеш була. Пугачевсылар күп юғалтыуҙар менән сигенергә мәжбүр була. Салауат тағы ла яралана. Пугачев ҡалған ғәскәре менән Уҫы ҡәлғәһенә табан йүнәлә. Салауат иһә юл ыңғайы Бөрө ҡалаһын алып, 18 июндә Уҫы янында йәнә Е.И. Пугачевҡа барып ҡушыла. Уҫыны штурмлағанда ҡаты яралана, артабан, 1774 йылдың көҙгө айҙарына тиклем, Башҡортостанда хәрәкәт итә. Уның отряды, асылда, Башҡортостанда батша карателдәренә ҡаршы тороусы төп көскә әйләнә. 18 сентябрҙә ул, мәҫәлән, өс меңлек ғәскәр башында, Йәлдәк ҡәлғәһе тирәһендә хәрәкәт итеп, Борай олоҫоноң Тимошкин ауылы янында, 22 сентябрҙә Нөркә ауылы эргәһендә подполковник И.К. Рылеев командаһына ҡаршы үтә ҡаты һуғыштарҙа («прежестокое сражение») булып, көслө ҡаршылыҡ күрһәтә. Салауаттың хәрби оҫталығына батша офицеры ғәжәпкә ҡала.

1774 йылдың 25 ноябрендә язалаусылар отряды Миңдеш ауылына яҡын урманда Салауаттың һәм уның дүрт яуҙашының эҙенә төшә һәм ҡулға ала. Салауат һәм Юлай өҫтөнән оҙаҡҡа һуҙылған тикшеренеү эштәре 1775 йылдың 6 июлендә генә тамамлана. Салауат тикшереү барышында бер генә тапҡыр ҙа үҙен ғәйепле тип танымай, бүтән пугачевсыларҙың өҫтөнән һөйләп, ғәйептәрен һатмай, яҡын кешеләрен һәр төрлө ғәйепләүҙәрҙән нисек тә арсаларға тырыша.

Был унының тотҡонға эләккәс күрһәткән тағы бер оло батырлығы, был юлы инде башлыса аҡыл көрәшенең һоҡланғыс бер өлгөһөнә әйләнә. Әлеге 1774 йылдың 7 майында яҙылған хатты ла ул ошо һорау алыу ваҡытында туғандарына ебәргән була.

Салауат менән Юлайҙы 1775 йылдың 15 июлендә сығарылған хөкөм ҡарары нигеҙендә, үҙҙәре айырыуса ҙур яуҙар алып барған урындарҙа, ҡамсы менән 175-әр тапҡыр һуҡтырып язалайҙар, танауҙарын ҡырҡып, маңлайҙарына һәм сикәләренә ҡыҙҙырылған тимер менән «З», «Б», «И» (злодей, бунтовщик, изменник) тигән хәрефтәр баҫып, шул уҡ 1775 йылдың 3 октябрендә көслө ҡарауыл аҫтында элекке Рогервик- (Эстониялағы хәҙерге Палдиски) ҡәлғәһенә ғүмерлек каторгаға оҙаталар. Каторжандар 29 ноябрҙә Рогервик ҡәлғәһенә барып етә. Салауаттың ҡалған сирек быуат ғүмере алыҫ Балтик диңгеҙе буйындағы ана шул эстон тупрағында үтә.

XX быуаттың 70-се йылдар башында табылған архив документтарынан күренеүенсә (Балтийск-Порт инвалидтар командаһы командиры майор Дитмарҙың ике рапорты)[10], Салауат Юлаев 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат булған. (Был табыш өсөн беҙ элекке Эстон ССР-ы Үҙәк дәүләт тарих архивы хеҙмәткәрҙәренә рәхмәтлебеҙ.)



Балтийск-Порт (хәҙерге Палдиски) ҡалаһының инвалидтар командаһы командиры майор Дитмар Эстляндия губерна идараһына 1800 йылдың 28 сентябрендә һәм 2 октябрендә Салауат Юлаевтың үлеме тураһында бер-бер артлы ҡулдан яҙылған ике рапорт ебәрә. Һүрәттә: шул рапорттарҙың береһенең (1800 йыл, 2 октябрь) фотокүсермәһе. Текст хәҙерге рус орфографияһында, ошолай уҡыла:

«В Эстляндское губернское правление.

Находящегося при Балтийской
инвалидной команде
майора Дитмара

Находящиеся в моем ведении каторжные невольники 12-ть человек, которые и состоят благополучно. Против прежде поданной таковой же ведомости убыло. Помре сентября 26-го дня Салават Юлаев. О чем сим донесть честь имею.

Майор Дитмар.

Октября 2-го дня 1800 года.
Балтийский Порт».

Салауат исеме халҡыбыҙ йөрәгендә мәңгелек урын алды. Салауат образы фольклорҙа, башҡорт, рус һәм башҡал яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә мәңгеләштерелде. Уның хаҡында романдар, йырҙар, хикәйәттәр, поэмалар, опералар, драма әҫәрҙәре ижад ителде, рәссамдар һәм скульпторҙар уны һынлы сәнғәттә сағылдырҙы. Башҡорт халҡы, үҙенең ҡаһарман яугирына арнап, илаһи йырҙар, көйҙәр, героик эпос ижад итте, халыҡ хәтеренән Салауат хаҡында бихисап легенда һәм риүәйәттәр яҙып алынды. Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» исемле тарихи романы (тәүге редакцияһы — 1929), яңынан эшкәртелгән баҫмалары — 1941, 1953 йылдар), Яков Протазанов төшөргән «Салауат Юлаев» фильмы (1941, «Союздетфильм» киностудияһы), Заһир

Исмәғилевтең «Салауат Юлаев» операһы (Баязит Бикбай либреттоһы) Салауаттың данлы исемен бөтөн донъяға танытты. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң иң күркәм урынында һыбайлы Салауаттың суйындан ҡойолған моһабәт һыны ҡалҡып тора (авторы — скульптор Сосланбәк Тавасиев, 1967). Башҡортостанда милли батырҙың тыуған районы, ҡала, урамдар, кинотеатрҙар, предприятиелар, йылға һәм океан караптары уның исеме менән аталған. 1919 йылдың сентябренән 1920 йылдың майына тиклем Петроград фронтында Айырым башҡорт дивизияһының сәйәси бүлеге төрки телендә «Салауат» тигән көндәлек гәзит сығарҙы. Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында 1943 йылда Салауат Юлаев исемендәге танк, Айырым башҡорт артиллерия полкы менән бергә, 2000 километрҙан артыҡ яу юлы үтте. Өфөнөң Салауат Юлаев исемендәге спорт клубы хоккей командаһы бөтөн Рәсәйгә билдәле. Салауат районының үҙәге Малаяҙҙа һәм шул уҡ районның Әлкә ауылында Салауат Юлаев музейҙары асылды. 1967 йылдан башлап БАССР-ҙың (1992 йылдан — Башҡортостан Республикаһының) әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә йыллыҡ Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары тапшырылып килә. Салауат Юлаевтың тормошон, эшмәкәрлеген һәм ижадын өйрәнеүгә һәм пропагандалауға совет осоронда Әбүбәкер Усманов, Әхнәф Харисов, Инга Гвоздикова, Виктор Сидоров, Ғайса Хөсәйенов, Мирас Иҙелбаев ҙур өлөш индерҙе. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре өр-яңы ғилми хеҙмәт — «Салауат Юлаев энциклопедияһы»н төҙөп сығарҙылар.

* * *

[1] Башкирия в русской литературе. Уфа, 1991, том 2. 87-се бит.

[2] Гвоздикова И.М. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү. Өфө, 1984. 195-се бит.

[3] Гвоздикова И.М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 196-сы бит.

[4] Башкирия в русской литературе. Уфа, 1991. Т. 2. 286-сы бит.

[5] Башкирия в русской литературе. Т. 2. 93-сө бит.

[6] Шунда уҡ.

[7] Салауаттың поэтик һәм публицистик мираҫының хәҙерге ваҡытта иң тулы баҫмаһын уның ижадын өйрәнеүсе М.Х. Иҙелбаев әҙерләп баҫтырып сығарҙы. Ҡарағыҙ: Салауат Юлаев: Шиғырҙар. Йырҙар. Рәсми ҡағыҙҙар. Өфө: «Китап», 1994. 152 бит.

[8] Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 270-се бит.

[9] Гвоздикова И.М. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү. Өфө,

1984. 101-се бит.

[10] Архивные документы о смерти Салавата Юлаева и Канзафара Усаева // Известия Академии наук Эстонской ССР, том 22. Общественные науки. 1973. № 4. 407—408-се биттәр.

* * *

Әҫәрҙәр, баҫмалар: Салауат Юлаев шиғырҙары, уның тураһында башҡорт халыҡ йырҙары һәм художестволы әҫәрҙәр. Өфө, 1953; Салауат Юлаев: Шиғырҙар. Йырҙар. Рәсми ҡағыҙҙар. / Төҙ: М.Х. Иҙелбаев. Өфө, 1994; Стихи. Переводы Б. Турганова // Библиотека всемирной литературы. Серия первая. Поэзия народов СССР IV—XVIII веков. М., 1972. 543-547-се биттәр; Салават Юлаев. Путь в бессмертье. Перевод Сергея Макарова. Библиотечка «Лилии». Челябинск, 2001; Салауат Юлаев. Жорыҡ жырлары (Поход йырҙары). Ҡаҙаҡсаға Берхаир Аманшин тәржемәһе. Алматы: Жазушы, 1983.

Әҙәбиәт: Злобин С.П. Салават Юлаев: Историческйй роман. М., 1941, 1953, 1984, 1994; Уфа, 1974, 2004; шул уҡ. Салауат Юлаев: Тарихи роман. Өфө, 1957, 1983; Наш Салават: Проза и поэзия. Уфа, 1973; изд. второе, дополненное. Уфа, 1982; шул уҡ. Салават: Исторический рассказ. Уфа, 1977, 1989; Лимонов Ю.А., Мавродин В.В., Панеях В.М. Пугачев и его сподвижники. М.-Л., 1965; Документы ставки Е.И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений: 1773-1774 гг. М., 1975; Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии. Сб. документов и материалов. Уфа, 1975; Гвоздикова И.М. Салават Юлаев: Исследование документальных источников. Уфа, 1982, Уфа: Китап, 2004; шул уҡ. Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү. Өфө, 1984; Салават Юлаев: Библиографический указатель. Уфа, 1982; Сидоров В.В. О башкире-певце и бесстрашном бойце. Уфа, 1983,1986; шул уҡ. Шағир һәм яугир Салауат. Өфө, 1985, 1990; шул уҡ. По следам Салавата. Уфа, 1988; шул уҡ. Салауат батыр ир ине. Өфө: Китап, 1995; шул уҡ. Был героем Салават. Уфа: Китап, 2003; Иҙелбаев М.Х. Юлай улы Салауат: Документаль роман. Өфө: Китап, 1994. Өфө, 1994; Салават Юлаев // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Тайжасов С. Восстание 1773—1774 гг. в Башкортостане. Уфа: Китап, 2000; Хамматов Я. Салауат. Һырдаръя: Тарихи романдар. Өфө: Китап, 2000; шул уҡ. Салават-батыр. Уфа: Китап, 2004; Аҫылғужа. Салауаттың йәше: Роман. 1-се китап. Өфө: Китап, 2004; Салават-батыр навечно в памяти народной: Сборник документов и материалов. Уфа: Китап, 2004; Идея свободы в творчестве Салавата Юлаева: Всероссийская научно-практическая конференция, посвященная 250-летию со дня рождения Салавата Юлаева (г. Уфа, 3 июня 2004

г.). Уфа: Гилем, 2004; Идельбаев М. Сын Юлая Салават: Документальный роман. Уфа: Китап, 2004; Энциклопедия Салавата Юлаева. Уфа, 2004; Батыр рухы менән осрашыу (Жива память о батыре). Автор-төҙөүсе Г. Ф. Әхмәтҡужина. Өфө: Китап, 2004.

## Мирсалих Биксурин
## (1819—1903)

Мирсалих Биксурин XIX быуатта Башҡортостандың мәғариф тарихында, фән һәм мәҙәниәт үҫешендә үҙенсәлекле эҙ ҡалдырған эшмәкәрҙәребеҙҙең береһе.

Мирсалих Мирсәлим улы Биксурин 1819 йылда Ырымбур ҡалаһында бөлгөнлөккә төшкән дворян ғаиләһендә тыуған. 1830 йылда Ырымбурҙағы Неплюев хәрби училищеһына уҡырға инеп, 1838 йылда, коллежский регистратор дәрәжәһенә лайыҡ булып, ҙур уңыш менән тамамлай. Башта Ырымбур сик буйы комиссияһында тәржемәсе вазифаһын башҡара. Тиҙҙән Неплюев кадетлыҡ корпусына ғәрәп, фарсы һәм башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телдәре уҡытыусыһы булып урынлаша, ғүмеренең төп өлөшөн ошо эшкә арнай. 1850-1869 йылдарҙа бер үк ваҡытта ҡаҙаҡ балалары мәктәбендә рус, ҡаҙаҡ, татар телдәрен уҡыта. 1860 йылдар уртаһында, тәржемәсе буларак, рус армияһының Урта Азияға хәрби походтарында ҡатнаша, Төркөстан делегацияһы составында, баш тәржемәсе сифатында, Санкт-Петербургка бара. Юғары хәрби звание – генерал дәрәжәһен алыуға өлгәшә. Фән, ғилем өлкәһендәге хеҙмәттәре, педагогик эшмәкәрлеге өсөн Рәсәй география йәмғиәтенең ағза-хеҙмәткәре һәм ошо йәмғиәттең Ырымбур бүлегенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлана, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Уның шәкерттәре араһында башҡорттоң һәм ҡаҙаҡтың атаҡлы мәғрифәтселәре М. Өмөтбаев һәм И. Алтынһарин һымаҡ оло шәхестәр бар. 1879 йылда отставкаға сығып, Ырымбур губерна канцелярияһында штаттан тыш махсус йомоштар чиновнигы бурысын үтәй башлай.

Атаҡлы башҡорт мәғрифәтсе ғалимы һәм шағир Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1887 йылдың 12 ғинуарында Өфөнән Ҡырымға барышлай, Ырымбурға килеп, остазы генерал Биксурин менән күрешеп, аҙаҡ, уға арнап, «Остаз Мирсалих Биксуринға» тигән шиғырын яҙа.

Ырымбур йортона керһәм, ул шәһрә,*
Ни булған инде, алһам чәнд бәһрә**.

Шул ғилем баҡсаһында һин сәрри әфраз,***
Ярҙамыңды курһәт беҙгә, серең ас, —

тип, М. Өмөтбаев М. Биксуриндың ғилемлелеген, уҡымышлылығын юғары күтәреп маҡтай, уға дан йырлай[1].

Мирсалих Биксуриндың ғилми-педагогик эшмәкәрлегендә айырыуса ҡиммәтле бер хеҙмәт бар. Уның төп нөсхәһендә тулы исеме ошондай: «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана с русско-персидско-татарскими словами, расположенными по предметам, разговорами и прописями». Китап ике мәртәбә нәшер ителә: 1-се баҫмаһы Ырымбурҙа, 1859 йылда; 2-се баҫмаһы Ҡазанда, 1869 йылда баҫылып сыға. (Тикшеренеүселәр уны, ғәҙәттә, ҡыҫҡаса «Начальное руководство...» йәки «Башланғыс ҡулланма...» тип йөрөтәләр.)

«Башланғыс ҡулланма...» — күп йәһәттән бик үҙенсәлекле хеҙмәт. Автор башҡорт, ҡаҙаҡ, татар телдәренең фонетик һәм грамматик төҙөлөшөн йыш ҡына ғәрәп, фарсы һәм рус телдәре менән сағыштырыу планында тикшерә.

Хеҙмәт был йәһәттән башҡорт һәм, ғөмүмән, төрки тел белемендә ҡәрҙәш телдәрҙе сағыштырма өйрәнеүҙең тәүге тәжрибәһе иҫәпләнә. Күргәҙмә материалдар сифатында М. Биксурин һәр телдең үҙенә генә хас фольклор һәм яҙма әҙәбиәт өлгөләренә мөрәжәғәт итә, китапта бер юлы ике һүҙлексә урынлаштыра. Һүҙлексәлә, башҡа телдәрҙең лөғәт өлгөләре менән бергә, башҡортса 53 һүҙ килтерелә, улар ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сағыштырыла. Ҡулланмала һорауҙар һәм яуаптар рәүешендә русса, фарсыса һәм төркисә текстар тәҡдим ителә. Китапта саф башҡорт телендә «Батыр батшаның әкиәте» тигән халыҡ хикәйәтенең баҫылыуы ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Иҫке ғәрәп имләһе менән яҙылған был хикәйәткә, профессор Ж.Ғ. Кейекбаев билдәләгәнсә, тел ғилеме күҙлегенән ҡарағанда «ниндәйҙер дәрәжәлә бөтөн башҡорт һөйләштәренең элементтары индерелгән»[2].

М. Биксурин «Ҡазан университетының ғилми яҙмалары»нда «Өс туған» тигән башҡорт әкиәтен баҫтырып сығара[3]. «Ике әҫәрҙең дә теле беҙҙең быуаттың 20-се йылдарында ғәрәпсә шрифт менән башҡортса яҙылған текстарҙан стиль яғынан да, лексик һәм грамматик йәһәттән дә әллә ни айырылмай. Был күренеш ниндәйҙер дәрәжәлә М. Биксуринды башҡорттоң яңы (милли) яҙмаһын башлап ебәреүселәрҙең береһе тип ҡарарға хоҡуҡ бирә»[4]. М. Биксуриндың «Башланғыс ҡулланмаһын академик А.Н. Кононов тәү башлап «башҡорт грамматикаһын билдәле дәрәжәлә системалы тасуирлаусы» хеҙмәт булараҡ баһаланы[5].

1870 йылда М. Биксурин мөхәррирлегендә башҡорт һәм татар йырҙары йыйынтығы[6] донъя күрә. Бында башҡорт йырҙары ғәрәп графикаһы менән төп нөсхәһендә һәм руссаға тәржемәлә баҫып сығарыла.

Был хеҙмәттәре һәм күп йыллыҡ эшмәкәрлеге М. Биксуринды талантлы ғалим-педагог, лингвист, фольклорсы булараҡ күҙ алдына баҫтыра. Үҙ

халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйыу эше менән ул йәш сағынан, 1840 йылдарҙа уҡ, ҡыҙыҡһына һәм башҡорттар араһынан тәүгеләрҙән булып башлап ебәрә. Башҡорт иленең төрлө төбәктәренән ул йырҙар, әкиәттәр, хикәйәттәр, легендалар яҙып ала. Уның тарафынан яҙып алынған фольклор материалдарының бер өлөшө ҡулъяҙма хәлендә хәҙерге Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге китапханаһында һаҡлана. М. Биксуриндың фольклорсылыҡ эшмәкәрлеге махсус өйрәнеүҙе, ул йыйған материалдар һәм, ғөмүмән, уның күп яҡлы ғилми мирасы айырым том итеп туплап, баҫып сығарыуҙы көтә.

М. Биксуриндың ижадында Төркөстан төйәгенә арналған тарихи-этнографик һәм публицистик хеҙмәттәре үҙенсәлекле урында тора. Рәсәй армияһы составында Урта Азияға походтарҙа ҡатнашыу һөҙөмтәһендә яҙылған былдай мәҡәләләрҙең бер өлөшөн ул, айырым йыйынтыҡ итеп туплап, баҫтырып сығара[7]. М. Биксурин яҙмалары Урта Азияның географияһы, тәбиғәт үҙенсәлектәре, унда йәшәгән халыҡтарҙың тормош-көнкүреше, хужалыҡ системаһы, ижтимағи мөнәсәбәттәре, матди һәм рухи мәҙәниәте буйынса күркәм бер әҙәби-тарихи ҡомартҡы һанала. Был китапҡа ингән мәҡәләләр, академик Ғайса Хөсәйеновтың баһалауы буйынса, «мәғлүмәттәр байлығы, зирәк күҙәтеүсәнлеге, практик тәҡдимдәре, энциклопедик киң ҡараштары менән хәҙер ҙә хайран итә»[8].

Атаҡлы мәғрифәтсе, педагог һәм ғалим Мирсалих Биксуриндың ишле ғаиләһендә дүрт ул, дүрт ҡыҙ тәрбиәләнеп үҫеүе тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Улдары Мирйософ, Мирәбүбәк, Мирмәхмүт, Миряҡуп, ҡыҙҙары Зөләйха, Хәҙисә, Фатима, Зөһрә исемле булып, өс улы Неплюев кадетлыҡ корпусын тамамлай һәм офицерҙар булып китә, бер улы — Мирйософ — ғилем юлын һайлап, Ырымбур Ғилми архив комиссияһының хәҡиҡи ағзаһы тигән дәрәжәле исем алыуға өлгәшә.

М.М. Биксурин, 84 йәшкә етеп, 1903 йылда тыуған ҡалаһы Ырымбурҙа донъя ҡуя.

Мирсалих Биксуриндың исеме башҡорт фәне һәм мәҙәниәте тарихында ғәйәт ҙур һәм маҡтаулы урында тора.

* * *

* Шәһрә — данлыҡлы, билдәле.

** Чәнд бәһрә — аҙмы-күпме емеш, өлөш.

*** Сәрри әфраз — ҡалҡыу, серле фекер эйәһе, бик ҙур ғалим.

1 Өмөтбаев М.И. Йәдкәр / Төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғ.С.

Ҡунафин. Яуаплы мөхәррире Ғ.Б. Хөсәйенов. Өфө, 1984. 88—91-се биттәр.

[2] Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы: Уҡыу ҡулланмаһы. Өфө, 1996. 31-се бит.

[3] Ученые записки Казанского университета. Вып. 3-й. 1861.

[4] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990. 46-сы бит.

[5] Кононов А.Н. История изучения тюркских языков в России: Дооктябрьский период. Л.: Наука, 1982. 256-сы бит.

[6] Записки Оренбургского отдела Русского географического общества. Вып. 1-й. 1870.

[7] Бекчурин М.М. Туркестанский край. Казань, 1872.

[8] Ғайсин Х. Биксурин генерал — башҡорт мәғрифәтсеһе // Ватандаш. 1996. № 2.

* * *

Әҙәбиәт: Батыр батшаның әкиәте / Рассказ о смелом царе Мирсалиха Бекчурина / Баҫырға әҙерләүсе, баш һүҙҙең авторы В.Ш. Псәнчин // Археография и лингвистическая текстология Южного Урала. Уфа, 1977. 139—144-се биттәр; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990. 41—48-се биттәр; Ҡунафин Ғ.С. Мәғрифәтсе һәм әҙип М. Өмөтбаев: Тормошо. Донъяға ҡарашы. Ижады. Өфө, 1991. 48—56-сы биттәр; Ғайсин Х. Биксурин генерал — башҡорт мәғрифәтсеһе // Ватандаш. 1996. № 2; Биксурин М.М. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Мифтахетдин Аҡмулла
(1831 —1895)



Аҡмулла.
Ә. Арсланов һүрәте

Аҡмулла... Был исем беҙҙең аңыбыҙҙа күптән инде ысын мәғәнәһендә халыҡ уйына, халыҡтың яҡты идеалдарына, хаҡлыҡҡа һәм ғәҙеллеккә, юғары шиғриәткә тоғролоҡ символына әйләнгән. Аҡмулла тигәнде беҙ бөгөн шиғриәт тип ҡабул итәбеҙ, һәм, башҡорт поэзияһының тарихы тураһында уйлаһаҡ, легендар Салауаттан һуңғы XIX быуат донъяһында иң элек ошо илгиҙәр шағирҙы күҙ алдына килтерәбеҙ.

Шағир һәм фекер эйәһе, мөғәллим һәм атаҡлы мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла үҙенең күренекле замандашы, шағир һәм әҙип, ғалим һәм энциклопедиясы М. Өтөтбаев менән бергә XIX быуат башҡорт әҙәбиәте тарихында, Башҡортостандың шул дәүер ижтимағи фекер үҫешендә ғәйәт ҙур урын тота. Ул үҙ халҡының рухи мәҙәниәте үҫешенә, башҡорт классик поэзияһына бик мөһим өлөш индерҙе. Башҡорт шағиры Аҡмулла, бөйөк әҙиптәргә хас булғанса, ҡаҙаҡ, татар, ҡарағалпаҡ һәм төрки телле башҡа халыҡтарҙың шиғриәтенә лә ғәйәт ҙур йоғонто яһаны. Ул үҙенең яҡты таланты менән ысын мәғәнәһендә шиғри мәктәп тыуҙырҙы һәм уның ижады Башҡортостанда XX быуат башындағы демократик поэзияның үҫеп китеүе өсөн бик мөһим әҙерлек ролен үтәне. Шуның өсөн дә профессор Әхнәф Харисов Аҡмулланы хаҡлы рәүештә «Туҡай менән Ғафуриға тиклем булған иң оло һәм бик күбеһенән юғары торған әҙип» тип атай.

Аҡмулланың тормош юлы, биографияһы шаҡтай ҡатмарлы. Ғилми әҙәбиәттә һәм архив материалдары нигеҙендә билдәләнгәненсә, буласаҡ шағир 1831 йылдың 14 (яңы стиль менән — 26) декабрендә элекке Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе, 12-се Башҡорт кантоны, Күлиле Мең олоҫоноң

(Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. (Миәкә районы Туҡһанбай һәм Сафар ауылдары 1991 йылда Аҡмулла исемендәге колхоз булып ойошто.) Атаһы Камалетдин Ишҡужа улы, әсәһе Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы — икеһе лә аҫаба башҡорттар. Туҡһанбайҙа хәҙерге көндә Аҡмулланың атаһы Камалетдин менән бер туған Ғилман Ишҡужа улының ейәндәре һәм күп һанлы ейәнсәрҙәре, ырыу тармағын дауам итеп, иҫән-һау йәшәп ята.

Мифтахетдин бәләкәйҙән бик шуҡ, теремек, тынғыһыҙ бала булып үҫә. Башланғыс белемде ул үҙенең тыуған ауылында, ә унан һуң күрше ауылда Лоҡман тигән башҡорт муллаһынан ала. Мәнәүезтамаҡ һәм Әнәс мәҙрәсәләрендә уҡый. 1850 йылдар уртаһында Стәрлебаш мәҙрәсәһендә бер аҙ белем ала, билдәле суфый шағир Шәмсетдин Зәкиҙең шәкерте була. Артабан, тыуған ауылына ҡайтып, кәләш алып, бер аҙ ваҡыт ата йортонда йәшәй. Әммә, бәхетһеҙлеккә, йәмәғәте йәшләй генә вафат булып ҡала. Мифтахетдин, шул сәбәпле булһа кәрәк, ауылында төпләнеп ҡала алмай. 1850 йылдарҙың аҙағында тынғыһыҙ тәбиғәтле йәш шағир атаһының (ул өйҙә юҡта) атын, тунын рөхсәтһеҙ алып, ил гиҙеп сығып китә. Башта Ырымбур тарафына йүнәлә, унан Яйыҡ, Миәс буйҙарына, Урал аръяғы далаларына юл тота. Башҡорт ауылдарында, ҡаҙаҡ йәйләүҙәрендә балалар уҡытып, алдынғы ҡарашлы мөғәллим, мулдәкә булып таныла.

Легендалар Мифтахетдиндең ошо ваҡыттан, йәғни ғилем эстәп өйҙән сығып киткәндән һуң, тыуған ауылы Туҡһанбайға ун ике — ун өс йыл үткәс кенә ҡайтыуы тураһында һөйләй. Һәм ысынлап та, шағирҙың 1974 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының археографик экспедицияһы хеҙмәткәрҙәре Ҡаңны-Төркәйҙән табып алып ҡайтҡан «Атайыма хат» тигән шиғырында һәм уның Туҡһанбайҙа табылған тулы вариантында тыуған ауылына ун өс йылда бер ҡайтыуы тураһында әйтелгән. Тимәк, был хаҡтағы риүәйәттәр ысынбарлыҡты сағылдыра. Шағирҙың Туҡһанбайға ҡайтыуы, фараз итеүебеҙ буйынса, 1872 йылға, йәғни Троицк төрмәһенән ҡотолоп сыҡҡан осорға тура килә. Шағир был юлы ла төрлө сәбәптәр арҡаһында ата йортонда тороп ҡала алмай. Атаһы, уның элекке баш-баштаҡлығын кисерә алмайынса, ара-тирә үпкәһен белдереп тә торғандыр, күрәһең. Аҡмулла йәнә ил гиҙеп сығып китә. «Атайыма хат» әҫәрендә был хәлде Аҡмулла үҙе түбәндәгесә аңлатып бирә:

Атаҡайым, килешмәне эшең артыҡ,
Беҙ ҡайттыҡ һеҙҙе һағынып, күңел тартып.
Ун өс йылда бер ҡайтып, күңел һынды,

Инде беҙгә тереклектән улгән артыҡ.

Үпкәм шул мөрәүәтһеҙ атабыҙға:
Анабыҙ ғәжәп хәл көтәбеҙгә.
Беҙ, бисара, доғасы инек барсабыҙға:
Үҙегеҙгә, ата-баба, жәддәгеҙгә*.

Атаҡайым, инде һеҙгә юҡ бутән һүҙ,
Был донъя малына туя алмай күҙ.
Ун өс йылда бер ҡайтып, уҙ итмәнең,
Инде һағынып ҡайтырҙай булманыҡ беҙ.

«Хат ебәрҙек Оренбург ҡалаһынан, ҡалаһында ғөләмәләр араһынан...» тигән һүҙҙәр менән башлана был шиғри хат. Күренеүенсә, өйҙән сығып киткәс, Мифтахетдин иң элек губерна үҙәге булған шул ҡалаға барып сыға, ә артабан ул йәнә Урал аръяғына, Троицк тирәһенә йүнәлә. Ғүмеренең ҙур ғына өлөшөн ул Башҡортостандың нәҡ Урал аръяғы райондарында, башҡорт һәм ҡаҙаҡ далаларында үткәрә. Үҙенең тыуған илендә атаҡлы башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсе булып дан ҡаҙанған Мифтахетдин, Әхнәф Харисов һүҙҙәре менән әйтһәк, ҡаҙаҡтарға ла бер үк мәғрифәт йырын йырлай, ғилемгә арҡыры төшкән иҫке ҡарашлы муллаларҙан көлә, байҙарҙы шелтәләй. Әҙип 1895 йылдың 8 (20) октябрендә, Ҡаҙағстандан тыуған яҡтарына ҡайтып килгән сағында, Миәс ҡалаһы менән Һарыҫтан станцияһы араһында фажиғәле һәләк була. Мифтахетдин Аҡмулла Миәс ҡалаһының мосолмандар зыяратында ерләнгән.

«Аҡмулла, Салауаттан һуң беренсе тапҡыр, — тип яҙҙы профессор Ә.И. Харисов, — үҙ халҡына, башҡорттарым тип ихлас күңелдән өндәшә, уны айырыуса бер ярһыныу менән мәғрифәткә, ғилемгә саҡыра». Туған халҡын мотлаҡ мәҙәниәтле итеп күрергә тырышыу, тормошта гел генә ана шул бөйөк идея менән янып йәшәү Аҡмулланың ғәжәп тәрән фекерле, аҫыл поэтикалы шиғырҙар яҙыуға килтергән. Был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәрен – беренсе ишетеү менән үк йөрәккә үтеп ингәндәрен – бөгөн дә үҙенең күңел һандығында һаҡлаусылар бар. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк...» — мәшһүр шағирҙың иң мөһим әҫәрҙәренең береһе. Был шиғыр 1930 йылдарҙа Көнбайыш Себер, хәҙерге Ҡорған өлкәһе башҡорттары араһында Закир Шакиров тарафынан элекке бер ҡулъяҙманан күсереп алынған. 1960 йылдар уртаһында иһә Марсель Ҡотлоғәлләмовҡа уның өс строфаһын республикабыҙҙың Учалы районы Аҙнаш ауылы ҡарты Дәүләтша Мөхәммәтшин һөйләп биргән. Әҫәр халыҡты аң-белемгә өндәү, саҡырыу пафосы менән әйтелгән һүҙҙәрҙән башланып китә:

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, укыу кәрәк,
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡур(ы)ҡкандай,
Эй туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк.

Шиғыр ысын мәғәнәһендә афористик ижад, классик шиғриәт үрнәге булараҡ та диҡҡәтте биләп тора:

Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,
Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.
Белемлелек — арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

Мифтахетдин халыҡ араһында тура һүҙле, үткер телле, саф күңелле шағир һәм мөғәллим булараҡ дан ала, һәр төрлө ҡул эштәренә оҫталығы менән дә хөрмәт ҡаҙана. Ул китаптар һәм ҡулъяҙмалар, столярлыҡ ҡоралдары тейәлгән, кейем-һалым өсөн дә айырым бүлкәһе булған арбаһына ат егеп, төрлө яҡтарға, төрлө тарафтарға барып сыға, Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан далаларының йә бер төбәгендә, йә икенсеһендә ғүмер итә. Халыҡҡа тоғро күңелле булғаны һәм яҡтылыҡҡа — белемгә өндәгәне өсөн уны Аҡ мулла тип атайҙар һәм был исем, ул ижад иткән шиғырҙар шиғриәт ҡәҙерен белеүселәр хәтерендә оҙаҡ йылдар буйы һаҡлана.

Аҡмулла — ысын мәғәнәһендә ҙур шиғыр оҫтаһы, үҙенең ижады менән тотош бер поэтик мәктәп тыуҙырған бөйөк әҙиптәрҙең береһе. Уның фекер тәрәнлеге, поэтик камиллыҡ йәһәтенән XXI быуат кешеһен дә таң ҡалдырырҙай бик күп әҫәрҙәрен күрһәтеп үтергә мөмкин булыр ине. Бына шундай строфаларҙың бер нисәһе:

Яҡшыны һүккән илә, заты китмәҫ.
Яман һүҙҙең күңелдән даты китмәҫ.
Саф алтынды нәжескә** буяу илә,
Нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ.

Йәиһә:

Ҡыйшыҡ уҡ, атҡан менән, туры китмәҫ,
Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ:

Ҡоторған эт һауа ҡарап өргән менән,
Асманда*** торған айҙың нуры китмәҫ, —

һымаҡ һоҡланғыс шиғри-фәлсәфәүи әҫәрҙәре кемдәрҙең генә зиһенен биләмәгән.

һин химар**** тип хурлағандың заты толпар булмаһын...
Йорто Болғар булһа булһын, йортто болғар булмаһын, —

ти Аҡмулла уға ғына хас тапҡырлыҡ һәм үткерлек менән.

Тура һүҙле, халыҡ ғәменә, ил фекеренә тоғро күңелле булғаны өсөн дә Аҡмулланың тормош юлы бик ауыр һынауҙар һәм ҡаршылыҡтар аша үтә. Ошо уҡ сифаттары арҡаһында ул 1867—1871 йылдарҙа ялған ялыу буйынса төрмәлә ултырып сыға. Ләкин һынмаҫ та, һығылмаҫ та тәбиғәтле ҡаһарман рухлы сәсән-шағир быны менән дә үҙ йәшәйешенән сигенеү генә түгел, үҙенең «раҫлау һәм кире ҡағыу, саҡырыу һәм өндәү поэзияһы» булған шиғырҙарында яңынан-яңы уй һәм фекер балҡыштарына өлгәшә.

Халыҡ араһында йәшәп, хеҙмәтсән халыҡтың ауыр, аяныслы яҙмышын йәне-тәне менән аңлап һәм тойоп, быуын-быуын сәсәндәр мираҫын, халыҡтың рухи ҡиммәттәрен, классик поэзия өлгөләрен бөтөн тәрәнлегендә үҙләштереп, Аҡмулла үҙ заманының төрки донъяһында һәр бер яңылыҡҡа уғата һиҙгер бер шағир һәм атаҡлы фекер эйәһе булып күтәрелә. Ул Урал-Волга төбәгендә һәм Ҡаҙағстанда XIX быуат шарттарында баш алған демократик мәғрифәтселек хәрәкәтен илһамланып күтәреп ала. Был хәрәкәттә башҡорттарҙан М. Аҡмулла һәм М. Өмөтбаев, татарҙарҙан Ҡ. Насыри һәм Ш. Мәржәни, ҡаҙаҡтарҙан И. Алтынһарин һәм Абай айырыуса күренекле роль уйнай.

Мәғрифәтселек тарихында Аҡмулла оло талантлы шағир булараҡ та, яҡтылыҡҡа, прогресҡа ынтылыусы мөғәллим сифатында ла ғәйәт яҡты эҙ ҡалдырҙы. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының мәғариф тарихында уның исеме балаларҙы туған телдә уҡытыуҙы ғәмәлдә хәл итеүсе эшмәкәр булараҡ та әһәмиәтле урын алды. Был хаҡта билдәле педагог Ә. Еникеев шулай тип яҙҙы:

«Хеҙмәтсән башҡорттар, татарҙар һәм ҡаҙаҡтар милли-азатлыҡ хәрәкәте барышында иҫке (ҡәҙим) мәктәптәрен заман талаптарына ярашлы итеп үҙгәртеп ҡороу талабын алға ҡуялар. Башҡорттарҙың, татарҙарҙың һәм ҡаҙаҡтарҙың был ынтылышын башланғыс мәктәптәр буйынса Уралда тормошҡа ашырыусы кеше була... Аҡмулла... мәктәптә балалар уҡытҡанда, балалар ниндәй телдә һөйләшәләр, шул телдә уҡытырға ынтылды. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ мәктәбендә ҡаҙаҡ телендә, башҡорт мәктәбендә башҡортса уҡытты»[1].

Аҡмулла — XIX быуат башҡорт әҙәбиәтендә иң ҙур мәғрифәтсе шағирҙарҙың береһе. Әҙиптең бик күп әҫәрҙәрендә унын мәғрифәтселек ҡараштары, халыҡ тормошонда яңылыҡҡа, донъяуи үҫешкә өлгәшеү өсөн аң-белемде, ғилем-һөнәрҙе хәл иткес көс тип раҫлаусы идеялары ғәйәт тәрән һәм үҙенсәлекле әйтеп бирелгән:

Күҙ һалып ҡарағыҙсы һәр тарафҡа,
Донъяла асылғандай тимер ҡапҡа.
Һин дә инде һөнәргә ынтыл, хәрәкәт ҡыл,
Талпынып, һөнәр өйрән быңдай саҡта.

Халыҡты мәғрифәткә саҡырыу, йәмғиәт үҫешендәге алға китеште аң-белем өлкәһендәге үҫеш менән бәйләү ул дәүерҙәге тарихи шарттарҙа, әлбиттә, алдынғы күренеш булған.

Халыҡ араһында Аҡмулланыҡы тип йөрөтөлгән йырҙар араһында ошондай бер строфа бар (уны беҙ 1984 йылда Учалы районы Һөләймән ауылы ҡарты Мостафа Әхмәтовтан яҙып алдыҡ):

Сәхрәләргә сыҡһам, эй, бер үҙем,
Һәр саҡ турғай булды ла юлдашым.
Һәр саҡ турғай һайрай, мин йырлайым,
Ағын һыуҙар булды ла күҙ йәшем.

«Ағын һыуҙар булды күҙ йәшем...» Донъяның ниндәй генә михнәттәрен күрмәк, ни ҡәҙәре яфаларын сикмәк кәрәк быңдай йән тетрәткес һүҙҙәрҙе әйтер өсөн! Әммә ул, ни генә күрһә лә, ниҙәр генә кисерһә лә, үҙ-үҙенә, үҙенең намыҫына һәр ваҡытта ла тоғро ҡала. Нахаҡҡа төрмәгә ябылып, «аһ ороп, ҡан йотоп, үлмәһәк то, үлгәнгә йәнәшәбеҙ» тип тотҡонлоҡта ятҡанда ла, үҙ баһаһын үҙе белеп, үҙ ҡәҙерен һаҡлап, «Мәканем — зиндан» исемле шиғри хатын ул:

Ҡат-ҡат сәләм мин мосафир Аҡмулланан,
Тура әйтеп, халыҡҡа яҙған хаҡ мулланан.
Бөтөн сәхрә эстәренә беҙҙән сәләм
Дошмандың ялаһынан пак мулланан, —

тигән һүҙҙәр менән башлап ебәрә.

Аҡмулланың ҙур күләмле был шиғыры — XIX быуат реалистик

поэзиябыҙҙың күркәм өлгөләренең береһе. Әҙәм балаларының ауыр яҙмышын, тормоштоң фажиғәле күренештәрен һүрәтләүҙә быға тиңләшерҙәй әҫәрҙе табыуы ла ҡыйындыр, моғайын.

Мәҡанем***** минең ятҡан — аты зиндан,
Һәр төрлө әҙәме бар яфа ҡылған.
Эсендә төрлө ғибрәт — хисабы юҡ,
Монафиҡ нисә төрлө — бар йыйылған.

Тимер менән ҡаҙаҡланған тәҙ(е)рәһе,
Ҡара таш ман уратылған бар тирәһе.
Урыҫтың тулып ятыр кенәгәһе...
Был урынға дошманыңды теләмәһен!

Эҫәрҙә ул үҙ хәлен, үҙенең аһ-зарҙарын да йә асыҡтан-асыҡ, йә кинәйә менән әйтеп бирә:

Мин дә бит быны теләп алғаным юҡ,
Ҡаҙаҡҡа көсләп кейәү булғаным юҡ.
Хоҙайҙың ҡылғанына сара бармы?
Йөрәгем яна уттай, дарманым юҡ.
Беҙ ҙә бит бер шаһбаздың балаһы инек,
Хәлфәнең дин өйрәткән таҙаһы инек.
Ғилемлек майҙанында ҡатар килгән
Дүртенсе, бишенсегә талаша инек.

Йәғни, күреүегеҙсә, ғилемлелек майҙанында һис юғы дүртенсе, бишенсегә дәғүә итерҙәй Аҡмуллағыҙ ни хәлгә төштө бына, тип аңғартмаҡсы шағир.

Бәләне күп күргән аҫыл заттар,
Ҡазанан тар-мар булған алтын таҡтар.*****
Дошмандың бәлә һалған ҡайғыһынан
Кителгән булат ҡылыс, мәрурд****** һаптар.

Һәр кемгә бер сәбәптән афәт булған,
Яҡшыға булһа тағы — нахак, булған.
Ҡарышҡан бер солтанға ҡаршы килеп,
Хибестә Имам Әғзәм вафат булған.

Нәҡ бына ошо шиғырҙа «аҡ йәне нахаҡ көйгән» Аҡмулла, «тәрәндән әйләндереп һүҙ ҡуҙғатыу» ниәте менән, үҙ фекерен күп ваҡыт үҙ аллы дүрт юллыҡтар рәтендә йөрөгән ошондай тәрән фәлсәфәүи афористик шиғыр өлгөләрендә нығытып ҡуя:

Бәндәне ризыҡ тигән ҡыймылдатыр,
Сәселгән ризҡы булһа, йөрөп татыр.
Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаç,
Кәрәк солтан булһын, кәрәк император.

Аҡмулла, үҙ заманы өсөн ысын мәғәнәһендә әхлаҡ-тәрбиә кодексы тыуҙырып, халыҡҡа ошо өгөт-нәсихәтен ҡанатлы шиғриәт саралары менән әйтеп биргән. Уның сәсәндәр теленән төшмәгән, Башҡортостандың һәр төбәгендә әле хәҙер ҙә көйләп яттан һөйләнелгән мәшһүр «Нәсихәттәр»енең төп өлөшө, «беренсе», «икенсе», «өсөнсө» тип, кеше өсөн иң кәрәкле сифаттарҙы (етегә тиклем) бер-бер артлы атап үтеүгә ҡоролған. Уның тәүге строфалары хәҙерге уҡыусыларҙың Аҡмулланы аҙмы-күпме белгән һәр береһенә лә яҡшы таныш:

Иң әүүәл кәрәк нәрçә — иман, тигән,
Ахирәт эштәренә инан, тигән.
«Хоҙай, кисер!» — тигән менән эш бөтмәйҙер,
«Иман шарты»н өйрәнмәһә — Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәрçә — күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өçтөнән аçты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа — күмел, тигән.

Артабан: өсөнсө ҡиммәт нәрçә — аҡыл, тигән, дүртенсеһе — шөкөр, бишенсеһе — әҙәп, алтынсыһы — сабыр, тигән һәм, ниһайәт:

Етенсе ҡиммәт нәрçә — ихлас, тигән,
Ихлаçһыҙҙың эше ҡабул булмаç, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас — юлдаш, тигән.

Был шиғри хикмәттәр Аҡмулла мираҫының мәңгелек ҡиммәттәрен һәм мәңгелек хәҡиҡәттәрен, ҡаҙаныштарын билдәләй. Уның ижадының тәрән образлылығы, кешелеклелеге, уның фекерләүенә хас диалектик әҙмә-әҙлелек шағирҙың иң яҡшы әҫәрҙәрен һоҡланғыс поэтик ҡомартҡылар, заманалар үткән һайын яңынан-яңы төҫтәр менән балҡып китерҙәй ынйы-гәүһәрҙәр рәтенә ҡуя. Аҡмулланың бәғзе шиғырҙары уның үҙ дәүеренән бигерәк беҙҙең бөгөнгөгә, быуаттар аша нәҡ хәҙерге дәүер кешеһенә төбәп әйтелгәндәй. Мәҫәлән, ошо уҡ «Нәсихәттәр» әҫәрендәге бына был тапҡыр һүҙле юлдар бөгөнгө көндә, беҙҙең донъяның аҫты өҫкә килгән хәүефле заманда үҙе үк киҫәтеү булып яңғырай түгелме:

Иң әүүәл паклау кәрәк эстең керен,
Эстә тулып ятмаһын һаҫыҡ эрен.
Аһ, дәриға! Эс таҙарһын, эс таҙарһын,
Булмаһа, файҙа бирмәҫ ҡоро белем.

Эйе, белем дә, аҡыллы һәм, йәнәһе, ғәҙел булып күренеү оҫталығы ла хаттин ашҡан бөгөн. Ләкин намыҫ ҡытлығы, оятһыҙлыҡ, эскерлелек, сәйәсәттәге бысраҡлыҡтар арҡаһында ыҙа сигә халҡыбыҙ. Э бит, ысынлпп та:

Бәдбәхеткә һүҙең үтмәҫ, ялынһаң да,
Әшәкегә — үҙең туҙан, яғылһаң да.

Шуны белә тороп, ниңә һуң беҙ әле һаман да мерәүәтһеҙ менән мерәүәт һаҡлайбыҙ, иблисте, бәдбәхетте иблис тип тә, бәдбәхет тип тә атамайбыҙ? Яуызлыҡҡа гел генә яҡшылыҡ менән яуап биреү үҙен аҡламай, сөнки иблистең тәбиғәте шундай, ул хатта:

Яҡшылыҡты яманлыҡҡа хисап итәр,
Уға һин күпме изгелек уйлаһаң да.

Эйе, Аҡмулла аҡылы, Аҡмулла һабаҡтары беҙҙең өсөн, бер яҡтан, башҡорт шиғриәтенең бүтән халыҡтарҙы ла таң ҡалдырырлыҡ юғары ҡаҙанышы, классик өлгөләре булһа, икенсенән, ул беҙҙең милли мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө, ул ысын мәғәнәһендә тормош һабағы, был ғәҙелһеҙ донъяла әҙәм балаларының яралы күңеленә йыуаныс һәм таяныс. Бындай изгелекле миссия бары тик халыҡ өсөн йәшәп, бар ғүмерен халыҡҡа хеҙмәт итеүгә арнаған ысын халыҡ шағирҙарының ғына өлөшөнә төшә.

Башҡортостан күгендә Аҡмулла йондоҙо Салауат, Вәлиди, Бабич, Мортазиндар йондоҙо менән бер тиң балҡый, был йондоҙҙар заманалар үткән һайын сағыуыраҡ була бара, улар ғаләм киңлектәренән үҙ ерендә үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыу ынтылышы менән йәшәгән халҡыбыҙҙың киләсәккә юлдарын яҡтыртып тора.

* * *

* Жәддә — өләсәй, ҡартәсәй.
** Нәжес — бысраҡ, әшәке.
*** Асман — күк йөҙө.
**** Химар — ишәк.
***** Мәҡан — урын.
****** Таҡ — тәхет.
******* Мәрурд — зиннәтле.

[1] Еникеев Ә. 1870—1897 йылдарҙа Башҡортостанда мәктәптәр һәм педагогик фекер // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1964. № 12. 54-се бит.

* * *

Әҫәрҙәр: Дамелла Шиһабетдин хәҙрәтнең мәрҫиәсе. Ҡазан, 1892; Аҡменла әфәнденең иншад итдеки мәнзуматы. Ҡазан, 1904; Өлеңдер жыйнағы. Алматы, 1935; Әҫәрҙәр. Өфө, 1981; Стихи. Уфа, 1986.
Әҙәбиәт: Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965; Шакур Р.З. Звезда поэзии: Мифтахетдин Акмулла. Жизнь. Творчество. Мировоззрение. Уфа, 1981. 2-е изд. 1996; Вилданов Ә.Х. Яҡтылыҡ йырсыһы. Өфө, 1981; Вильданов А.Х., Кунафин Г.С. Башкирские просветители-демократы XIX века. М., 1981; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990; Акмулла Мифтахетдин // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Буранғолов М., Ғәббәсова З. Аҡмулланың бүләһе // Күңелдәрҙе сирткән ҡылдар. Малаяҙ — Өфө, 1996. 89—100-сө биттәр; Шәкүр Р. Башҡорт милли шағиры Мифтахетдин Аҡмулла // Сал Урал. 1997, № 1 (төрөк һәм башҡорт телдәрендә).

Зәйнулла Рәсүлев
(1833—1917)



Зәйнулла Рәсүлев XIX быуат аҙағы — XX быуат башы башҡорт донъяһының айырыуса арҙаҡлы, милләтебеҙҙең рухи етәкесһе кимәлендәге олуғ шәхес булып күтәрелә. Уның исеме беҙҙең көндәрҙә лә халыҡ күңелендә йәшәй. Башҡортостандың күп төбәктәрендә уның тураһында һәр төрлө хикмәттәр, легенда һәм риүәйәттәр ғәйәт киң таралған. Был хәл бигерәк тә Зәйнулла шәйехтең изге бер зат, әүлиәлек, юғары рух эйәһе булыуы менән бәйле. Иң мөһиме: Хоҙайҙан бирелгән ошо илаһи һәләттәрен ул тулыһы менән ил һәм дин өсөн, мәғрифәт өсөн хеҙмәткә арнай, уны замандаштары үҙ халҡының рухи хакимы тип атай. Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһында ул нигеҙ һалған һәм үҙе уҡытҡан атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе Рәсәйҙең барлыҡ мосолман халыҡтары араһында дан ҡаҙана. З. Рәсүлев шәхесен академик В.В. Бартольд, башҡорттоң бөйөк ғалимдары һәм уҡымышлылары Ризаитдин Фәхретдинов, Әхмәтзәки Вәлиди юғары баһалаған.

Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев әл-Нәҡшбәнди 1833 йылда Башҡортостандың ул саҡтағы Троицк өйәҙенә (хәҙерге Учалы районына) ҡараған Шәрип исемле башҡорт ауылында тыуған. 1851 йылға тиклем ауыл мәҙрәсәһендә уҡый, 1859 йылда үҙҙәренең өйәҙ үҙәге Троицкиҙа белем алыуын дауам итә. Шул уҡ йылда Верхнеуральск ҡалаһына яҡын Аҡкужа ауылында мәсет төҙөтөп, вәғәздәр уҡый, 1859 йылда уставлы имам исемен ала. Сарҙаҡлы ауылында йәшәгән Абдулхәким исемле шәйех менән дуҫлашып, нәҡшбәндиә тәғлимәтенә ылығып китә.

Нәҡшбәндиә тәғлимәтенә эйәреүселәр өсөн, академик В.В. Бартольд билдәләүенсә, беренсе урында ислам (шәриғәт) ҡушҡанды мотлаҡ үтәү хәҡиҡәт юлына баҫыуҙың иң мөһим шарты иҫәпләнә, хәҡиҡәткә тулыһынса өлгәшеү фәҡәт бик һирәк кешеләргә генә бирелә[1]. 1869—1870 йылдарҙа Зәйнулла хәҙрәт Мәккәгә хаж сәфәренә барып, юл ыңғайы Константинополдә һәм Мәккә

ҡалаһында киң билдәле шәйехтәр менән осраша, уларҙың хеҙмәттәрен таратырға ризалыҡтарын ала. Ҡайтыу менән үҙ тирәһенә мөриттәр йыйып, нәҡшбәндиә тәғлимәтенең яңылыҡтарын таратыуға ныҡлап тотона. Әммә иҫкелек яҡлы шәйех-ишандар һәм муллалар, уны дингә тел тейҙерер «бидағ» һүҙҙәр һөйләүҙә, исламды боҙоуҙа ғәйепләп, өҫтөнә яла яғалар. Шул уҡ ваҡытта, йәнәһе, «билетһыҙ» (йәғни рөхсәтһеҙ) сәйәхәт яһаны, тип Миәс заводы жандарм полковнигы исеменә ялыу ебәрергә лә онотмайҙар. 1872 йылда шәйех Зәйнулла Өфөгә Диниә идараһы хөкөмөнә саҡырыла һәм, киҫәтеү биреп, өйөнә ҡайтарыла. Юлда батша властары уны, ҡулға алып, Златоуст төрмәһенә ултыртып ҡуя. Бында 8 ай ултырғандан һуң, 1873 йыл башында Эске эштәр министрының ҡарары менән һөргөнгә оҙатыла. Башта Вологда губернаһының Никольск ҡалаһында — өс, артабан Кострома ҡалаһында биш йыл полиция надзоры аҫтында йәшәй. 1881 йылда үҙ өйҙәренең Аҡкужа ауылына ҡайта. Бер йыл үткәс, икенсе тапҡыр хажға барып ҡайта. 1884 йылда Троицкиға күсеп, ғүмеренең аҙағына тиклем ошо ҡалала йәшәй. Бында бишенсе мәсеттең имамы булып тора. Мәсет менән йәнәш ҡаҙаҡтың Алтынһарин исемле бай мәғрифәтсеһе иҫәбенә мәҙрәсә һалына. Шәйех Зәйнулла Ғәбденнасир Ҡурсауи өлгөһөндә шәкерттәрҙе уҡытыуҙа Бохара схоластикаһын, дини фанатизмды кире ҡаға, мәҙрәсәлә донъяуи фәндәр өйрәтеү, шәкерттәрҙе киләсәк эшмәкәрлеккә әҙерләү, ғәҙеллек, кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләү, яңыса уҡыу-уҡытыу ысулдарын индереү мәсьәләләрен алға ҡуя. Һөҙөмтәлә ул ысын-ысынында башҡорт халҡының рухи етәксеһе булып таныла, Ҡаҙағстандың мәғариф тарихында, ҡаҙаҡ араһында аң-белем таратыуҙа әйтеп бөткөһөҙ ҙур роль уйнай. Зәйнулла Рәсүлевтең «Мәҡәләт Зәйниә» (1908), «Әлифиә» (1912) тигән китаптары бар.

Башҡорттоң бөйөк шәрҡиәтсе-ғалимы һәм дәүләт эшмәкәре Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Хәтирәләр» китабында «Атайымдың Троицкиға сәйәхәте» тигән кескенә бүлек бар. Унда Ә. Вәлиди Зәйнулла Рәсүлев хаҡында оло ихтирам тойғоһо менән иҫкә алған. Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһ һәр йәй һайын, бесән эштәре бөтөү менән, дуҫтарына һәм шәйехтәренә оҙон сәйәхәткә сығыр булған. Был сәфәр, Урал тауҙары аша үтеп, юрматының илсек тимер ырыуы, ҡарағай-ҡыпсаҡ, бөрйән, түңгәүер, туңғатар, тамъян, ҡатай башҡорттарының ерҙәренән үтеп, «Троицк ҡалаһындағы рухи етәксе Зәйнулла шәйехте барып күреү менән тамамлана».

«Был сәйәхәт ай ярымға һуҙыла. Һәр йыл һайын ҡабатланған сәйәхәттең өсөһөндә мин дә ҡатнаштым, — тип дауам итә Әхмәтзәки Вәлиди... — Һәр сәйәхәт минең фекер хаятыма ҙур йоғонто яһаны... Өсөнсө тапҡыр, 1906 йылда барғаныбыҙҙа, Зәйнулла ишан миңә ныҡ илтифат итте. Йәш булыуыма

ҡарамаҫтан, миңә төрлө һорауҙар биреп, яуабымды иҡҡәт менән тыңланы һәм йүнәлеш биреүсе һүҙҙәр һөйләне. Һәр хәлдә, төрлөсә һынап ҡараны...»[2].

Ошо рәүешле осрашыу насип була милләтебеҙҙең ике бөйөк рухи затына. Вәлиди фәһемле бер хәл тураһында ла бик ҡыҙыҡлы итеп һөйләй. Бер көн иртән, сәй мәжлесе ваҡытында, Зәйнулла ишан үҫмер Әхмәтзәкигә тағы бер нисә һорау бирә, яуабын тыңлағас, йыйылған барлыҡ кеше алдында: «Ал, улым, бәлки, берәй нәмә һатып алырһың », — тип ҡулына ун тинлек аҡса тоттора. Әхмәтзәки, әлбиттә, кибеттән үҙен ҡыҙыҡһындырған китаптар һатып ала. «Ун биш йәштә булыуыма ҡарамаҫтан, китапты дөрөҫ һайлауымды шәйех башҡа мәжлестәрҙә лә маҡтап һөйләне, — тип хәтерләй Вәлиди... — Мөхитебеҙҙә бик ныҡ хөрмәт ителгән был заттың маҡтау һүҙҙәре дәртләндереүсе бер көс булды». Әхмәтзәки Вәлидиҙең: «Шуның кеүек дәртләндереүсе хәл-ваҡиғалар булмаһа, бәлки, тормошом ғилемдән башҡа бер юлдарға йүнәлеш алыр ине», — тигән һүҙҙәре лә иғтибарға лайыҡлы.

Әхмәтзәки Вәлиди «Хәтирәләр»ҙең ошо уҡ бүлегендә Муллаҡайҙан Ғабдулла хәҙрәт, Ҡулбахтынан Ғәбделханнан хәҙрәт һәм Троицкиҙан Зәйнулла хәҙрәт кеүек эшмәкәрҙәрҙе «эскерһеҙ инсандар, әхлаҡ һәм кешелеклелек өлгөһө» тип атай.

Яҙмыш ҡушыуы буйынса, Әхмәтзәки Вәлидиҙең йәштән үк күреп, яратып, хат алышып, үҫеп еткәс йәрәшкән ҡатыны Нәфисә әсәһе яғынан мәшһүр Зәйнулла ишандың ейәнсәре була. Үкенескә ҡаршы, Совет хөкүмәтенең башҡорт азатлығын быуыуға йүнәлтелгән сәйәсәте арҡаһында Вәлиди 1923 йылда бөтөнләй сит илгә сығып китергә мәжбүр була. Күпме генә тырышып ҡараһа ла, һөйөклө Нәфисәһен үҙ янына алдыра алмай. Геноцид сәйәсәте был бөйөк заттарҙың шәхси яҙмышына емерткес ҡара көс булып барып инә. Әммә Башҡортостанда һәм башҡорт халҡының йөрәгендә Зәйнулла Рәсүлев, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек бөйөк һәм илаһи заттарҙың рухы мәңге йәшәй.

* * *

[1] Бартольд В.В. Сочинения. Том VI. Работы по истории ислама и арабского халифата. М., 1966. 118-се бит.

[2] Ә. Вәлиди Туған. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 44-се бит.

* * *

Әҙәбиәт: Шәйех Зәйнулла Рәсүлев. // Мусульманский мир. Род. 1, выпуск 1. 1917. Издание Российской Академии наук. Петроград, Восточная типография

«Аманат», 1917; Фәхретдинов Р. Шәйех Зәйнулла хәҙрәттең тәржемәи хәле. Ырымбур, 1917; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 2-се том. XIX—XX быуат башы әҙәбиәте. Өфө, 1990. 136—137-се биттәр; Насиров Р. Зәйнулла ишан // Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997; Расулев З. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Шаһимарҙан Ибраһимов
(1841—1891)

Үҙ иленән алыҫта фән, ғилем, ижад донъяһында шөһрәт ҡаҙанған башҡорттарҙан Шаһимарҙан Мерәҫ улы Ибраһимовтың исеме һәр йәһәттән дә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Үҙ заманының киң белемле, тәрән фекерле, талантлы бер эшмәкәре булараҡ ул XIX быуаттың икенсе яртыһында Төркөстандың рус һәм милли телдәрҙәге матбуғатын үҫтереүгә, ғилми баҫмаларҙы сығарыу эшен юлға һалыуға, ҡаҙаҡ, үзбәк, төрөкмән халыҡтарының этнографияһын өйрәнеүгә ғәйәт ҙур өлөш индерә, дипломатик хеҙмәттә һәләтле чиновник булып таныла. Иң ҡыҙыҡлыһы — Ш.М. Ибраһимов 1870 йылдарҙа үзбәк телендә Урта Азияла беренсе календарҙарҙы әҙерләп баҫтырып сығара, ҡаҙаҡ һәм үзбәк телдәрендә сыҡҡан «Төркөстан вилайәте гәзите»нең тәүге мөхәррире була.

Шаһимарҙан Ибраһимов 1841 йылда Ырымбур губернаһында тыуған. Башта Себер кадетлыҡ корпусында тәрбиәләнгән. Артабан хәрби кантонсыларҙың Омск Ярымбатальонында уҡып, төрки телдәренән тәржемәсе әҙерлеге алып сыға. Хеҙмәт юлын Петропавловск ҡала идараһында тәржемәсе эшенән башлай. 1868 йылдан шунда уҡ өҫтәл башлығы (столоначальник) вазифаһын башҡара. Ошо дәүерҙә ул ҡаҙаҡ халҡының арҙаҡлы этнограф-ғалимы Шоҡан Вәлиханов менән аралаша, уның ғаиләһенә яҡын мөнәсәбәттә була. Һуңынан ошо хаҡта ғәйәт ҡиммәтле иҫтәлектәр баҫтырып сығара. Шаһимарҙандың бер туған энеһе Шаһиморат Мерәҫ улы Ибраһимов (улар игеҙәктәр булғандыр, тигән фараз бар) шул уҡ йылдарҙа Шоҡан Вәлихановтың атаһы Сыңғыҙ солтанда хат йөрөтөүсе хеҙмәтен башҡара. 1870 йылдан алып ун бер йыл буйы Ташкентта Һырдаръя өлкә идараһында һәм Төркөстан генерал-губернаторының канцелярияһында фарсы һәм төрки телдәренән тәржемәсе булып тора. Шаһиморат Ибраһимов, үкенескә күрә, бик иртә — 1870 йылдың 3 февралендә үлеп ҡала.

Шаһимарҙан Ибраһимов та 1870 йылда Ташкентҡа күсә һәм, энеһе кеүек үк, Төркөстан генерал-губернаторы канцелярияһына фарсы һәм төрки телдәренән тәржемәсе булып урынлаша. Ошо ваҡыттан алып уның төрлө йүнәлештәрҙә емешле ғилми-ижади эшмәкәрлеге башлана. Уны алфавит, үзбәк телендә уҡыу китаптары, типография мәсьәләләре буйынса төрлө комиссияларҙың эшенә ылыҡтыралар, хеҙмәттәге йомоштарын үтәп, ул Петербургта, Фирғәнә өлкәһендә була. 1875 йылда иһә ялан штабының тәржемәсеһе сифатында Коканд походында ҡатнаша. Ш.М. Ибраһимов күп телдәрҙе белеүе, урындағы халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәтен, психологияһын бик тәрән аңлауы, киң ҡарашлылығы менән Урта Азия һәм Рәсәйҙең дәүләт идараһы даирәләрендә

ҙур абруй ҡаҙана. 1870—1878 йылдарҙа ул, алда әйткәнебеҙсә, ҡаҙаҡ һәм үзбәк телдәрендә нәшер ителеп, был ике халыҡтың матбуғат һәм ижтимағи фекер үҫеше тарихында мөһим урында торған «Төркөстан вилайәте гәзите»нең мөхәррире була. Был йылдар уның үҙ биографияһында ла (бигерәк тә ғилми-ижади) ғәйәт әһәмиәтле бер осорға әйләнә. 1878 йылдың 1 июлендә Ш.М. Ибраһимов Төркөстан генерал-губернаторы эргәһендә дипломатия хеҙмәтенең өлкән чиновнигы вазифаһына тәғәйенләнә. 1879 йылда сираттағы ял ваҡытында Германияға, Францияға барып ҡайта. 1880, 1881 йылдарҙа рустарҙың Бохараға ебәрелгән илселегенә етәкселек итә. 1882 йылдың 12 октябрендә, үҙенең һорауы буйынса, Ш.М. Ибраһимов хеҙмәттән бушатыла, әммә оҙаҡламай Төркөстан генерал-губернаторы канцелярияһының штаттан тыш чиновнигы итеп раҫлана.

Шаһимарҙан Ибраһимовтың биографияһында, бер яҡтан үкенесле булһа ла, бик фәһемле бер ваҡиға бар. 1885 йылда уны халыҡ мәғарифы ведомствоһы буйынса файҙаланыу хаҡында мәсьәлә күтәрелә. Әммә был тәкдимдәр билдәле миссионер Н.И. Ильминскийҙың ҡәтғи ризаһыҙлығын тыуҙыра. Ул инде изге Синодтың обер-прокуроры К.П. Победоносцев исеменә хат яҙа. Хатта әйтелеүенсә, Шаһимарҙан Ибраһимов үҙен ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, телдәрҙе яҡшы белеүсе эшлекле дипломат итеп таныта, шуның өсөн дә уны халыҡ мәғарифы эшенә йәлеп итеү хәүеф тыуҙыра. Шуның өҫтөнә ул Рәсәйҙә лә, Урта Азияла ла, Ҡаҙаҡ далаһында ла бик күп кешеләр менән таныш, бөтөн мосолман илдәренең, халыҡтарының һәм хөкүмәттәренең булмышын яҡшы белә, рус телендә һөйләшеү һәм яҙыу оҫталығы менән таң ҡалдыра, мәғрифәтселекте, кәрәк икән, либераль идеяларҙы күтәреп алырға әҙер тора, мөғәмәлә итеү һәм үҙ-үҙен тота белеүе, ҡыйыулыҡ, теләһә кем алдында ла дәрәжәһен төшөрмәүе менән айырылып тора. Ниндәй шәп характеристика! Әммә бөтөн парадокс бына шунда: нәҡ ошондай сифаттары өсөн Шаһимарҙан Ибраһимовты көнсығыш халыҡтарының мәғариф эшенә ылыҡтырмау сараһы күрелә лә инде. Мәкер ҙә, хәйлә лә булған шул колониаль сәйәсәттә.

Ш.М. Ибраһимовтың этнография өлкәһендәге тәүге хеҙмәте 1870 йылда «Туркестанские ведомости» тигән баҫмала донъя күрә. Был — уның тарафынан яҙып алынған 103 ҡаҙаҡ мәҡәле. 1871 йылда ул Оло Урҙа ҡаҙаҡтары араһында йыйған йомаҡтарын һәм яуаптарын, шул уҡ йылда Ҡаҙаҡ далаһындағы муллалар тураһындағы мәҡәләһен баҫтыра.

1872 йылда Ш.М. Ибраһимовҡа Коканд ханының өлкән улы Хан-Задәнең тәржемәсеһе сифатында Ташкенттан алып Кокандҡа тиклем сәйәхәт итеү насип була. Юлда ул көндәлек алып бара, аҙаҡ шуның өҙөктәрен баҫтырып сығара. Был юлъяҙма шулай уҡ этнографик характерҙағы күҙәтеүҙәргә бай булыуы менән әһәмиәт ҡаҙана. Шул уҡ йылда баҫылған «Ҡырғыҙҙар. Этнографик

очерк» (хәҙергесә: «Ҡаҙаҡтар...») тигән хеҙмәте ҡаҙаҡ халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, ҡалым, ҡыҙ әйттереү, ҡыҙ менән егетте йәрәштереү, туй йолалары, бала тыуыу, баланы һаҡлау менән бәйле йолаларҙы бик ентекләп теркәүе менән етди ғилми әһәмиәткә эйә. 1874 йылда Ш.М. Ибраһимовтың Хиуа төрөкмәндәре һәм ҡырғыҙҙары тураһындағы хеҙмәте донъя күрә. Дөйөм алғанда уның үҙе иҫән саҡта баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре ике тиҫтәнән артып китә. Шәхси архив материалдары Үзбәкстандың Үҙәк дәүләт архивында һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Санкт-Петербург бүлексәһендә һаҡлана.

1890 йылда Шаһимарҙан Ибраһимов Жиддә ҡалаһына (хәҙерге Соғуд Ғәрәбстаны) Рәсәйҙең генераль консулы итеп тәғәйенләнә. Үкенескә, 1891 йылдың йәйендә Жиддәгә барған юлда ваба ауырыуынан ваҡытһыҙ вафат була.

Оло талант эйәһе, күренекле мөхәррир һәм этнограф, яҡташыбыҙ һәм милләттәшебеҙ Ш.М. Ибраһимовтың ваҡиғаларға бай тормошон, ғилми мираҫын һәм мәҙәни эшмәкәрлеген башҡорт ғалимдарына ла ентекләп тикшерергә, хеҙмәттәрен үҙебеҙҙә баҫып сығарыу хәстәрлеген күрергә бик ваҡыт. Ундай шәхестәр, ысын мәғәнәһендә, халҡыбыҙҙың милли ғорурлығы, башҡорт рухиәтенең күркәм күренеше.

* * *

Әҙәбиәт: Письма Николая Ивановича Ильминского обер-прокурору св. Синода Константину Петровичу Победоносцеву. Казань, 1895. 176—177-се биттәр; Фетисов М.И. Зарождение казахской публицистики. Алма-Ата, 1961. 61-се бит; Лунин Б.В. Забытый средне-азиатский этнограф Шахимардан Мирясович (Иван Иванович) Ибрагимов. ОНУ. Ташкент, 1966. № 7. 38—49-сы биттәр; Гафуров С. Первый календарь на узбекском языке. Правда Востока, 1965, 20 ноября. № 272.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев
(1841—1907)



Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе иҫән саҡта уҡ күп яҡлы талант эйәһе, туған халҡына ғилем һәм мәғрифәт нурҙарын таратыуҙа бихисап хеҙмәт күрһәткән һоҡланғыс кеше һәм олпат шәхес булараҡ ҙур абруй ҡаҙана. Асылда XIX быуаттың һуңғы сирегендә – XX быуат башында Өфөнөң һәм ул саҡтағы Өфө губернаһының ижтимағи фекер тормошон шағир һәм публицист, тарихсы һәм этнограф, ысын мәғәнәһендә киң профилле филолог, телсе һәм тәржемәсе, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре М.И. Өмөтбаевтан башҡа күҙ алдына килтереүе мөмкин дә түгел. Ғүмеренең нәҡ ошо дәүерендә ул айырыуса емешле ижад итә һәм, шуның менән бергә, ил, халыҡ тормошо эсендә ҡайнай, уға күп кенә мөһим мәҙәни, ижтимағи ваҡиғаларҙың уртаһында булырға тура килә. Шул айҡанлы ул губернаның рус телендә сыҡҡан матбуғат сараларында башҡорт халҡының тарихы, теле, этнографияһы буйынса, фольклор хазиналарына, милләтебеҙҙең көнүҙәк мәсьәләләренә арналған мәҡәләләр менән сығыш яһай. Уның ғилми-әҙәби эшмәкәрлеге, бер яҡтан, үҙ туған халҡының фәнен һәм мәҙәниәтен үҫтереүҙә ҡиммәтле күренешкә әйләнһә, икенсе яҡтан, губернаның рус телле рәсми даирәләрендә, Урал — Волга буйҙарының рус мөхитендә ул үҙ милләтенең ысын илсеһе ролен үтәне. Хәйер, бөтөн ғүмерен халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүгә арнаған М.И. Өмөтбаев үҙе хаҡында: «Беҙ ғауамдың ходатайы» тиеүе менән бик хаҡлы ине, әлбиттә. Үҙ заманының матбуғат биттәрендә уның мәғрифәтселек эшмәкәрлегенә ҙур баһа бирелә, әҙип башҡорт тарихы буйынса киң белемгә эйә булыуы менән танылыу таба. Ә инде 1903 йылдың 11 июнендә «Уфимские губернские ведомости» гәзите уның хаҡында ошондай һүҙҙәр яҙып сыға: «Башҡорттарҙың Сәлим Өмөтбаев тигән 60 йәшлек үҙ шағиры бар. Ул тулҡынландырғыс һәм көслө стилгә эйә. Пушкиндың «Баҡсаһарай»ын бик һәйбәт тәржемә итте; Ҡазанда ла, Ырымбурҙа ла, Уралда ла, Өфөлә лә киң билдәле».

Мөхәммәтсәлим Ишмөхәммәт улы Өмөтбаев 1841 йылдың 21 авгусында (2 сентябрендә) элекке Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙе Йомран-Табын олоҫоноң (Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) Ибраһим ауылында башҡорт кантон башлығы ғаиләһендә донъяға килә. Мөхәммәтсәлимдең атаһы Ишмөхәммәт Ишемғол улы Өмөтбаев башҡорт йәмғиәтенең юғары- мәҙәниәтле, алдынғы ҡарашлы административ хакимиәт вәкиле булған, күп йыллыҡ хәрби хеҙмәте өсөн орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. Әсәһе Бәлхизә Балапан ҡыҙы шулай уҡ уҡымышлы, шиғри күңелле ҡатын була. Уларҙың ғаиләһендә ете бала яҡшы тәрбиә алып үҫә. Башланғыс белемде Мөхәммәтсәлим тыуған ауылы мәҙрәсәһендә ала. 1852 йылда атаһы уны Ырымбур кадетлыҡ корпусына уҡырға урынлаштыра. Ошонда һигеҙ йыл уҡыу осоронда М.И. Өмөтбаев рус, фарсы, ғәрәп, төрки телдәрен өйрәнә, каллиграфия, архитектура, һынлы сәнғәт, хәрби белем серҙәренә төшөнә, математика, география, тарих, әҙәбиәт буйынса яҡшы әҙерлек үтә. Корпуста көнсығыш телдәренән өлкән уҡытыусы булып эшләгән мәғрифәтсе-ғалим Мирсалих Биксуриндың буласаҡ әҙип һәм ғилем эйәһенә йоғонтоһо ҙур була. Аҙаҡ, 1878 йылдың февралендә, М.И. Өмөтбаев, уға арнап, «Остазым Мирсалих Биксуринға» тигән шиғыр яҙа, уны Ырымбур йортоноң ғилем баҡсаһындағы бер ҙур ғалим («сәрри әфраз») тип атай.

1860 йылдың авгусында атаһы Мөхәммәтсәлимде, кадетлыҡ корпусынан алып, тыуған яҡҡа ҡайтара. Ошо ваҡыттан М.И. Өмөтбаевтың хеҙмәт юлы башлана. Башта ул кантон идаралығының тәржемәсеһе вазифаһында Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә. 1864 йылда Ҡырмыҫҡалы олоҫо мировой посредниғы писары итеп тәғәйенләнә. 1869 йылда шул уҡ олоҫтоң старшинаһы итеп һайланып, ун йыл буйы ошо тынғыһыҙ вазифаны атҡара, халыҡтың хәлен яҡшыртыр өсөн бик күп тырышлыҡ күрһәтә, колониаль сәйәсәттең бер өлөшө булараҡ нәҡ ошо ваҡытта айырыуса киң ҡолас алған башҡорт ерҙәрен һатыуға ҡулынан килгәнсә ҡаршылыҡ күрһәтә. Артабан был тема уның поэтик ижадында ла сағылыш таба. 1879 йылда, Стәрлетамаҡҡа барып, мәҙрәсә янында асылған рус класында рус теле менән математика уҡытыусыһы булып урынлаша, ошо ваҡыттан алып, Г.С. Ҡунафин әйткәнсә, «мәҙәниәт һәм мәғрифәт донъяһына алыҫ сәфәргә юллана»[1]. Бер йыл да дүрт айҙан һуң, Өфөгә килеп, етем балалар приютында уҡытыусы-тәрбиәсе һәм мосолмандарҙың Диниә назараты (ул ваҡытта аталғанса, Ырымбур Духовный собраниеһы) канцелярияһында тәржемәсе булып эшләй башлай. Уны тиҙҙән окружной судҡа ла тәржемәселек эшенә ылыҡтыралар. Өфөлә М.И. Өмөтбаев ныҡлап әҙәби-ғилми ижад эшенә сума. Рәсәйҙең үҙәк һәм губерна гәзиттәрен, шулай уҡ төрки телендә сыҡҡан атаҡлы «Тәржемән» гәзитен алдырып уҡып бара, үҙе лә

матбуғат биттәрендә мәҡәләләр менән сығыш яһай. Ғилми йәмғиәттәр, һәр төрлө комиссияларҙың эшендә ҡатнаша. Рус һәм башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәре, төбәкте өйрәнеүсе Рәсәй яҙыусылары менән бәйләнеш тота. Ошонда уҡ, бер аҙ алға китеп, әйтеп үтәйек: 1894 йылдың сентябрендә Диниә назаратында мөфтөй Мөхәммәтйәр Солтанов һәм Ризаитдин Фәхретдинов арҡаҡлы илгиҙәр шағирыбыҙ менән сәй мәжлесендә табындаш була, унда күркәм һүҙгә дәрттәре асылып китеп, үҙ-ара шиғыр ҙа әйтешеп алалар. Башта Аҡмулла, «мөфтөй хәҙрәткә хитап итеп», «һүҙҙәрен үә өслүбен монасип килтереп», шиғыр һөйләй. Уның артынса, «һис көтөлмәгән бер ваҡытта», кәйефләнеп: Мөхәммәтсәлим шиғри һүҙҙе дауам итә. «Уның туҡтауына Аҡмулла, Аҡмулла туҡтауына Мөхәммәтсәлим... шиғырҙарын һөйләнеләр. Үҙҙәренең йәш ваҡыттарын хәтерҙәренә төшөрөп, бөгөнгө. ваҡыттарын һәм дә ниндәй мәжлестә булыуҙарын да онотоп ебәрҙеләр»,[2] — тип иҫкә ала аҙаҡ был мәжлес хаҡында Ризаитдин Фәхретдинов. Ул ваҡытта инде Аҡмулла талантлы сәсән-шағир булараҡ дан ҡаҙанһа, М.И. Өмөтбаев «төрлө мәжлес күргән... Мәскәү һәм Петербургтарҙа йөрөгән... мөфтөй Сәлимгәрәй менән таж кейеү байрамдарында ҡатнашҡан», шуның өҫтөнә «әҙәбиәт үә тарих менән етди шөғөлләнгән», рус әҙиптәре үә мөхәррирҙәренең тәржемәи хәленән хәбәрҙәр[3] мәшһүр бер зат була. Уны 1883 йылда Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенә ағза итеп һайлайҙар, шул уҡ йылда Мәскәүҙә Александр III батшаны тәхеткә ултыртыу тантанаһында ҡатнаша. 1886 йылда Өфөнөң 300 йыллығы, 1899 йылда А.С. Пушкиндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы юбилей комиссияларының ағзаһы була. 1887—1889 йылдарҙа ваҡеф (мөлкәт) эштәрен тикшереү комиссияһына эшкә саҡырылып, бер аҙ ваҡыт Петербургта, аҙаҡ Ҡырымда йәшәп, оҙайлы сәфәрҙә йөрөп ҡайта. Уға үҙ заманы өсөн мәртәбәле һаналған коллегия теркәүсеһе (1884), губерна сәркәтибе (1885), коллегия сәркәтибе (1889), титуллы кәңәшсе (1892) һымаҡ исемдәр бирелә. Ул йәнә III дәрәжә Изге Станислав ордены, көмөш һәм бронза миҙалдар менән бүләкләнә. Әммә, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, 1899 йылдың 21 авгусында барлығы 59 һум 40 тинлек пенсия менән отставкаға сыға. Өлкән йәштәге әҙип ғилми-ижади эшмәкәрлеген ауыр шарттарҙа дауам итә. Пенсияһын арттырыуҙы һорап, власть органдарына хаттар яҙып ҡараһа ла, үтенесе ҡәнәғәтләндерелмәй. 1904 йылдың 14 декабрендә, ниһайәт, батша ғали йәнәптәренең үҙенә хат менән мөрәжәғәт итә. Унда ошондай юлдар бар: «Отставкаға сыҡҡандан бирле мин йәшәү сығанағын үҙемдең тәржемәләремдә, проза һәм шиғри әҫәрҙәремде баҫтырыу юлы менән табам. А.С. Пушкин әйткәнсә, мин ҡышын утынһыҙ, йәйен еңел арбаһыҙ шағир булып йәшәйем». Әммә бынан һуң да әҙиптең матди хәле һис бер үҙгәрешһеҙ ҡала.

Талантлы ғалим-энциклопедист, мәғрифәтсе шағир, публицист һәм тәржемәсе М.И. Өмөтбаев 1907 йылдың 28 июнендә 66 йәшендә вафат була. Ул үҙенең тыуған төйәгендә – хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылының зыяратында ерләнгән. 1991 йылда, әҙиптең тыуыуына 150 йыл тулған көндәрҙә Ибраһим ауылында уның тормошона һәм ижадына арналған музей асылды.

XIX быуаттың икенсе яртыһы һәм XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә, башҡорт халҡының ижтимағи фекер тарихында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ижады — сағыу күренештәрҙең береһе. М. Өмөтбаевты М. Аҡмулла менән сағыштырып ҡараһаң, бик ҡыҙыҡ бер күҙәтеү яһарға мөмкин: характер һәм эшмәкәрлектәре менән улар икеһе бөтөнләй ике төрлө шәхес һәм әҙиптәр. М. Аҡмулла — тынғыһыҙ дала улы, илдән илгә күсеп йөрөп ижад итеүсе сәсән-шағир. Уның поэтик таланты ла, һәр ваҡыт тиерлек халыҡ алдында һөйләү, әйтештәрҙә ҡатнашыу мәнфәғәтенән сығып, импровизаторлыҡ йүнәлешендә сарлана, үткерләнә бара, М.И. Өмөтбаев иһә европаса йәшәү рәүешен ҡабул иткән, ауылдан сыҡһа ла, ҡалала төпләнеп, бер юлы бер нисә төрлө фән менән шөғөлләнеүсе ғалим һәм шағир. Уның башҡорт мәҙәниәтен, ижтимағи аңыбыҙҙы үҫтереүгә, рухи донъябыҙҙы байытыуға индергән өлөшө һәм хеҙмәте нәҡ ошо күп ҡырлы, күп төрлө эшмәкәрлеге менән баһалана ла.

М.И. Өмөтбаевтың күренекле хеҙмәттәре араһында «Фарсы нәхүе» («Фарсы грамматикаһы»), «Йыһаннамә», «Татар нәхүе» һымаҡ ҡулъяҙма китаптары булғанлығы билдәле. Уларҙың ҡайһы берҙәре, үкенескә күрә, һаҡланмаған. Ә бына әҙиптең 1897 йылда Ҡазанда баҫылған «Йәдкәр» исемле йыйынтығы — XIX быуат аҙағы башҡорт мәҙәниәтенең күркәм ҡомартҡыларының береһе. Ә инде уның әҙәби һәм ғилми ижадының иң мөһим өлгөләре беҙҙең дәүерҙә, 1984 йылда, шул уҡ исем аҫтында айырым йыйынтыҡ булып донъяға сыҡты. Китапҡа М.И. Өмөтбаевтың шиғырҙары, публицистик әҫәрҙәре, юл яҙмалары, тарихи-этнографик хеҙмәттәре, фольклор яҙмалары, тәржемәләре, шул иҫәптән А.С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһының тәржемәһе урынлаштырылған.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың поэтик мираҫы күләм яғынан бик үк ҙур түгел — уның беҙгә билдәле шиғырҙары дүрт тиҫтә самаһы. Әммә был мираҫ үҙенең ысын халыҡсанлығы, ил ғәмдәре менән һуғарылған булыуы йәһәтенән әҙәбиәтебеҙ тарихында мөһим урынды ала. «Өмөтбаев шиғырҙарының күҙгә ташланып торған үҙенсәлеге лә тап ана шунда — уларҙың башҡорт тематикаһына яҙылған булыуында, — тип яҙҙы был хаҡта профессор Әхнәф Харисов. — Ул иң характерлы шиғырҙарында үҙен шағир-тарихсы, шағир-этнограф итеп күрһәтә»[4]. Дөрөҫ, уның был төр шиғырҙары, образлылыҡҡа ҡарағанда, күберәк хәл-ваҡиғаларҙы теҙеп һөйләп биреүгә ҡоролған. Әммә

унының ижадында «Йомран иле», «Шикайәт», «Бында ерҙең ниғмәттәре» һымаҡ шиғырҙары тыуған ерҙе, халыҡ тормошон образлы тел менән һөйләп биреү йәһәтенән айырылып тора. «Йомран иле» әҫәрендә ул башҡорт шағирҙарынан тәүгеләрҙән булып ер-һыуҙарыбыҙҙың яҙмышы мәсьәләһен күтәреп сыға:

Балапан һәм Кесе Талпаҡ
Яталар миҫле* аҡ ҡалпаҡ.
Ағастары бөгөн ваҡ-ваҡ,
Улар ҙа һәм һирәкләнгән.

Әгәр күл булһа ағасһыҙ,
Шулай ил ҡала башһыҙ.
Йә булһа ауыҙың тешһеҙ,
Ни файҙа шул ирендәрҙән!

Көйөрһөң һәм тирәк өсөн,
Табалмаһаң кәрәк өсөн.
Бөгөн, ахыр, ярағы өсөн,
Көйөрһөң, булһаң ирҙәрҙән.

Башҡорт ерҙәренең колонизаторҙар тарафынан аяуһыҙ таланыуы «Шикайәт» шиғырында айырыуса әсенеү тойғоһо менән бәйән ителә:

Заманында бай булған был ерҙәрҙә
Тулы урман менән ҡорт, мал-тыуар ҙа,
Күмәк ғәскәр һәм закон ярҙамында
Ҡарар тапты сауҙагәрҙәр сауҙаһында.

Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстрханға уҙҙы.
Унын артынса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тағ** кеби ағас тауары.

«Ишек төбөндә» исемле шиғырҙа замандың социаль йөҙө асыҡ сағыла биреп ҡуя:

Байлыҡ-муллыҡ ишегенә ҡаҡтым мин оҙаҡ,
Төштө тәҙрәнән алдыма ярты тин аҙаҡ.

Үтә алманым мәрхәмәттең тупһаһын атлап,
Унда бик күптәр сират торалар, һаҡлап.

Шағирҙың был һүҙҙәре осраҡлы әйтелмәгәйне, әлбиттә. Ул үҙенең тормошо, яҙмышы менән дә шундай юлдарҙы яҙырға хаҡлы ине.

М. Өмөтбаев ижадында, Ә.И. Харисов һүҙҙәре менән әйтһәк, «үҙенең этнографик мәғлүмәт биреү өҫтөнлөгө менән» айырылып торған «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы» тигән шиғыр ғәйәт ҡыҙыҡлы. Әҫәр хәҙер инде онотолоп бөткән йола күренештәрен – башҡортта ҡыҙ оҙатыу тәртиптәрен йәнле һәм мауыҡтырғыс бер тамаша итеп халыҡсан тел менән тасуирлап биреүе айҡанлы этнографтар өсөн генә түгел, киң ҡатлам уҡыусылар, шулай уҡ туған тел уҡытыусылары өсөн дә үҙенсәлекле бер сығанаҡ булараҡ әһәмиәт ҡаҙана.

Жанрҙар йәһәтенән М. Өмөтбаев поэзияһы шулай уҡ үҙенсәлекле: унда лирик шиғырҙар ҙа, шикайәт тә, элегия, шулай уҡ мәҫәл дә бар. Уның «Ҡайыш илә Йүкә» исемле мәҫәле әҙәбиәтебеҙ тарихында киң билдәле. Ә.И. Харисов был мәҫәлде «һүҙ сәнғәтенең шаҡтай камил әҫәре» тип атаған.

М.И. Өмөтбаевтың тарихи-этнографик хеҙмәттәре араһында «Башҡорттар», «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар», «Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре», «Кесе табын халҡының бабалары һәм унан айырылған йомран-табын ере», «Әй башҡорттарының нәсәбнамәһе», «Башҡорттар һәм торғауыт ҡалмыҡтары тураһында бер нисә һүҙ», «Аҡташ хан», «Ағиҙел буйындағы ғөләмә үә мәшәйехтәр» тигән очерктары һәм мәҡәләләре Башҡортостан һәм башҡорт тарихын өйрәнеүҙә баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле мәғлүмәттәр тупланған булыуы менән оло баһаға лайыҡ.

Ғалим һәм әҙип башҡорт халҡының фольклоры, көнкүреше, йолалары, ғөрөф-ғәҙәте, халыҡ медицинаһы буйынса бай материал йыйыуы менән дә ҙур фәнни өлөш индерҙе. Ғилми хеҙмәттәрендә, публицистик ижадында һәм ижтимағи эшмәкәрлегендә ул үҙ халҡының яҙмышында мөһим урын тотҡан социаль, мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат мәсьәләләрен күтәреп сыҡты, башҡорт ерҙәрен талауҙы фашлап сығыш яһаны, башҡорттарҙы туған телендә уҡытыу талабын алға ҡуйҙы. Уның был идеялары беҙҙең заман өсөн дә көн ҡаҙағына һуғырлыҡ мәсьәлә булып ҡала.

«М. Өмөтбаев-шағирҙың башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтен үҫтереүҙәге роле ҙур, — тип билдәләне академик Ғайса Хөсәйенов. — М. Өмөтбаев ғалим һәм әҙип йөҙөндә яңы типтағы башҡорт ғилеменең һәм әҙәбиәтенең күтәрелеше асыҡ күренә, ул милли тормошобоҙҙа Көнбайыш менән Көнсығыш мәҙәниәтенең, ғилеменең иң яҡшы традицияларын берләштереүҙә һәм артабан

үҫтереүҙә оло хеҙмәт күрһәтте»[5].

Эйе, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев барса ғүмерен, талантын, киң белемен туған халҡына хеҙмәт итеүгә арнаны, башҡорттар тураһында төрлө уйҙырмалар таратыусы яуыз йәндәргә ҡаршы сыҡты, милләтебеҙҙең рухи бөйөклөгөн яҡлап һәм һаҡлап, арымай-талмай ижад итте. Ул ысын мәғәнәһендә оло аҡыл эйәһе, үҙ халҡының тоғро күңелле арҙаҡлы эшмәкәре булды. Ғалим һәм әҙиптең бик күп фекерҙәре һәр заманға ауаздаш, һәр быуындың рухи ынтылыштарына йүнәлеш биреп торорҙай. Үҙе тарих һәм этнография фәненең тәрәндәге ҡатламдарына күҙ һалып, үҙ халҡы күҙлегенән ул ошондай һығымтаға килде: «Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — … риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү».

Ул йәшәгән дәүерҙә башҡорттарҙы өйрәнеү фәне әле яңы башланып ҡына тора ине. Уның ваҡытында ла, унан һуң да башҡорт тарихын боҙоп күрһәтеү аҙ булманы. Шуның өсөн дә М.И. Өмөтбаевтың: «Һәр халыҡтың тарихы өйрәнелһен өсөн уның үҙ Карамзины булыуы шарт», тигән мәшһүр һүҙҙәре бөгөнгө көн өсөн дә әһәмиәтле. Иншалла, киләсәктә лә үҙ Карамзиндарыбыҙ булыр, улар үҙ халҡын яратып, уның олонан да оло тарихы менән ғорурланып, фәнебеҙҙе артабан да шул тарихҡа һәм шул халыҡҡа торошло итеп үҫтереү хәстәрлеген күрерҙәр.

* * *

*Миҫле — төҫлө, кеүек.

** Тағ — тау.

[1] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990. 232-се бит.

[2] Фәхретдинов Риза. Аҡмулла Уфа шәһәрендә // XIX быуат башҡорт әҙәбиәте тарихынан: Мәҡәләләр, материалдар. Өфө, 1989. 131—132-се биттәр.

[3] Шунда уҡ.

[4] Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 366-сы бит.

[5] Хөсәйенов Ғ.Б. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев // Шоңҡар. 1993, № 1, 123-сө бит.

* * *

Әҫәрҙәр: Йәдкәр. Казан, 1897; Өфө, 1984.

Әҙәбиәт: Харисов А.И. Литературное наследие башкирского народа: XVIII—

XIX вв. Уфа, 1973; Кунафин Г.С., Вильданов А.Х. Башкирские просветители-демократы XIX века. М.: Наука, 1981; Хөсәйенов Ғ.Б. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Өфө, 1991; Ҡунафин Ғ.С. Мәғрифәтсе, ғалим һәм әҙип Өмөтбаев. Өфө, 1991; Описание научного и творческого наследия Мухаметсалима Уметбаева. Сост. М.Х. Надергулов. Уфа, 1993; Уметбаев М.И. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Әбүбәкер Диваев
(1855—1933)



Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваев — бөтөн ижад ғүмерен Урта Азия, Ҡаҙағстан халыҡтарының: ҡаҙаҡтарҙың, ҡарағалпаҡтарҙың, ҡырғыҙҙарҙың, үзбәктәрҙең фольклорын, этнографияһын, телен, тарихын өйрәнеүгә арнаған атаҡлы ғалим һәм мәғрифәтсе, башҡорттарҙан тәүге профессорҙарҙың береһе. Ул 1855 йылдың 6 (18) декабрендә Ырымбурҙа затлы башҡорт дворяны Әхмәтйән Шаһиморат улы Диваев ғаиләһендә донъяға килгән. Әбүбәкер ғаилә шарттарында һәйбәт тәрбиә ала, бер аҙ ваҡыт Төркөстан ҡалаһында өйәҙ башлығы булып торған ағаһында тәрбиәләнә. 1876 йылда Ырымбур кадетлыҡ корпусының Азия бүлексәһен тамамлап, 21 йәшлек Әбүбәкер Диваев Ташкентта хәрби хеҙмәтен башлап ебәрә. Ошо ваҡыттан Ә.Ә. Диваев Урта Азия һәм Көньяҡ Ҡаҙағстандың күп кенә өйәҙҙәрендә хеҙмәт итә. 1881 йылда ул Ташкентҡа, Һырдаръя губернаһының хәрби губернаторы канцелярияһына, хеҙмәткә күсерелә. 1906 йылда штаб-ротмистр званиеһында отставкаға сыға, артабанғы ғүмерен тулыһынса ғилми-тикшеренеү эштәренә арнай. Теп-теүәл 30 йылға һуҙылған хәрби хеҙмәт дәүерендә офицер Ә.Ә. Диваев 2-се һәм 3-сө дәрәжә Изге Анна, Изге Станислав, Фарсы арыҫланы һәм ҡояшы, Бохара Алтын йондоҙо ордендары һәм башҡа наградалар менән бүләкләнә.

Әбүбәкер Диваевҡа, хәрби чиновник йомоштарын үтәп, Урта Азия һәм Көньяҡ Ҡаҙағстан буйлап меңәрләгән саҡрым ерҙәр үтергә, Шымкент, Төркөстан, Перовский, Казалинск, Әүлиә-Ата, Ташкент һ.б. өйәҙҙәрҙе арҡырыға-буйға йөрөп сығырға, урындағы халыҡ вәкилдәре менән осрашырға насип була. Хәрби хеҙмәтенең тәүге осоронда уҡ ул халыҡ ижады, халыҡтарҙың тарихы, тормош-көнкүреше, археология, эпиграфика, иҫке яҙма ҡомартҡылар менән ныҡлап ҡыҙыҡһына. Ә.Ә. Диваевтың фольклор һәм этнография материалдарын йыйыу һәм өйрәнеү менән бәйле ғилми эшмәкәрлеге 1883

йылда, Һырдаръя губернаһы хәрби губернаторының тәржемәсеһе вазифаһын башҡарған осорҙа, башланған тип иҫәпләнелә. Әммә унының 1880 йылда уҡ Шымкент ҡалаһында, өйәҙ башлығының ярҙамсыһы булып эшләгән сағында, тәү башлап ҡаҙаҡтар араһында этнографик материалдар йыйнау эшенә тотонғанлығы ла билдәле. Махсус академик белем алырға тура килмәһә лә, тәбиғи талант һәм хеҙмәт һөйөүсәнлеге, үҙенең яңы шөғөлөнә ҡарата тәрән мөхәббәт һәм мауығыусанлыҡ арҡаһында ул фольклор, этнография һәм төрки телдәре өлкәһендә ҙур мәғлүмәтле ғалим булып етешә. Эшмәкәрлегенең был дәүерендә, 1894 йылда ул, мәҫәлән, Төркөстан ҡалаһындағы изге Әхмәд Йәсәүи мавзолейының яҙмаларын күсереп алыу эшен ойоштора. Һырдаръя өлкәһендә, Һырдаръя яры буйында төрки донъяһының легендар һәм изге шәхесе Ҡорҡот-ата ҡәберлеген тикшереү менән шөғөлләнә. 1900 йылда, аңлатмалар биреп, Ташкент ҡалаһына нигеҙ һалыныуға бәйле риүәйәтте баҫтыра. Әйтергә кәрәк, Әбүбәкер Диваевтың тынғыһыҙ тикшеренеү эшмәкәрлеге сағыштырмаса тиҙ арала ғилми йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итә һәм юғары баһалана. 1896 йылда уҡ әле, мәҫәлән, күренекле шәрҡиәтсе академик В.В. Бартольд йәш ғалим Ә.Ә. Диваев тарафынан Һырдаръя өлкәһендә йыйып, баҫтырып сығарған этнографик һәм фольклор материалдарына ҡарата махсус рецензия менән сығыш яһай. 1915 йылда матбуғатта Әбүбәкер Диваевтың 60 йәшлек юбилейы билдәләп үтелә. Шул айҡанлы үҙе лә яңы ғына ғилми эшмәкәрлеген башлаған Әхмәтзәки Вәлиди «Тормош» гәзитендә «Диуаев юбилейы рус йәмғиәтендә» һәм «Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенә егерме биш йыл тулыу мөнәсәбәте менән» тигән мәҡәләләр баҫтыра. Башҡорттоң был ике арҙаҡлы шәхесе ул ваҡытта бер-береһе менән яҡшы уҡ таныш булған. Дөрөҫөрәге, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең Урта Азияла инде киң билдәле һәм абруйлы милләттәше Әбүбәкер Диваев менән Төркөстанға 1914 йылғы беренсе ғилми сәйәхәте ваҡытында осрашып дуҫлаша, йөрөгән ерҙәрендә йыш ҡына унының исеменә таянып эш итә. Был хаҡта ул үҙе ошолай тип иҫкә ала:

«Был сәйәхәтемдә мин Ташкент, Фирғәнә, Сәмәрҡәнд һәм Бохарала байтаҡ яңы дуҫтар таптым. Күбеһе миңә ошо ваҡыттан башлап Төркөстан мәҙәниәтенә, һуңыраҡ сәйәси хәйәткә хеҙмәт итеүемдә файҙалы булды һәм улар менән дуҫлығым иҫемдә күп татлы хәтирәләр ҡалдырҙы. Шуларҙың береһе, батша ғәскәре офицеры, полковник, сығышы менән башҡорт Әбүбәкер Диваев ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡтарының этнографияһы буйынса күп файҙалы әҫәрҙәр нәшер итте. Ул мине Ташкентта шулай уҡ батша ғәскәрендәге башҡорт офицерҙарынан Көсөков һәм татарҙан генерал Еникеев, Сәмәрҡәндтә ҡырғыҙҙар — генерал Колчанов һәм Мирбәдәлев, башҡорт Аҡөмбәтов менән таныштырҙы. Ҡайҙа ғына барһам да, унда Әбүбәкер ағайҙың мине таныҡкан

һәм тәҡдим иткән хаттары килеүен күрҙем»[1].

1923 йылдың 2 мартында Урта Азияның — ул саҡтағы Төркөстан республикаһының — ғилми йәмәғәтселеге Ә.Ә. Диваевтың ғилми эшмәкәрлегенең 40 йыллыҡ юбилейын тантаналы билдәләп үтә. Уның исеменә Совет иленең төрлө тарафтарынан, шул иҫәптән Советтарҙың Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетынан ҡотлау телеграммалары килә. Юбилярҙың ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге, Урта Азия халыҡтарының фольклорын, этнографияһын, көнкүрешен өйрәнеүгә индергән өлөшө юғары баһалана.

Әбүбәкер Диваевтың 1906 йылда, хәрби хеҙмәтен түңәрәкләп, отставкаға сыҡҡандан һуңғы сирек быуат ғүмер эсендәге ғилми-ижтимағи эшмәкәрлеге өр-яңы ҡаҙаныштар менән билдәләнә. Йәмәғәт эшмәкәре булараҡ танылған ҡаҙаҡ сәйәсмәне һәм әҙип Әхмәт Байторсонов менән бергә ул Төркөстан (хәҙерге Ташкент) дәүләт университетын ойоштороуҙа туранан-тура ҡатнаша, университеттың һәм Төркөстан Көнсығыш институтының профессоры булараҡ, Урта Азия халыҡтарының этнографияһы буйынса лекциялар уҡый. Ташкентта тыуған яҡты өйрәнеү музейының этнография һәм археология бүлектәренә етәкселек итә. Музейҙа этнографик һәм археологик тупланмаларҙы системалаштыра, ғилми тасуирламалар, материалдар йыйыу өсөн программалар төҙөй. Оло йәшкә етеүенә ҡарамаҫтан, ул этнографик экспедициялар ойоштора, был экспедицияларҙан этнография, археология, фольклор буйынса бай материалдар алып ҡайта. Мәҫәлән, 1920 йылда Етеһыу өлкәһендә уҙғарылған экспедиция ваҡытында Әбүбәкер Диваев йыйған материалдарҙың күләме ике мең биш йөҙ биткә етә. Атаҡлы яҡташыбыҙҙың тырышлығы менән йыйылған бындай материалдар Урта Азия һәм Көнъяҡ Ҡаҙағстан халыҡтарының рухи мәҙәниәт тарихын өйрәнеү өсөн хәҙер ҙә ҡиммәтле сығанаҡ иҫәпләнә.

Ә.Ә. Диваев үҙе йыйған фольклор материалдарын һәр халыҡтың үҙ телендә һәм руссаға тәржемә итеп баҫтырып сығарыу өлкәһендә ҙур хеҙмәт күрһәтә. Ул яҙып алған ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, үзбәк эпик ҡомартҡылары, әкиәттәр, әйтемдәр, йомаҡтар тупланмалары, аҡындар ижадының өлгөләре ғәйәт ҙур фәнни-текстологик әһәмиәт ҡаҙана. Уның хеҙмәттәре Ташкентта һәм Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм Ырымбурҙа, Ҡазанда, Верныйҙа төрлө баҫмаларҙа донъя күрә. Ул төрлө ғилми йәмғиәттәрҙең ағзаһы итеп һайлана.

1923 йылдың 22 мартында Ташкент ҡалаһында атаҡлы фольклорсы һәм этнограф, профессор Әбүбәкер Диваевтың; ғилми эшмәкәрлегенә ҡырҡ йыл тулыу айҡанлы ҙур юбилей кисәһе үткәрелә. Юбилей тантанаһында Урта Азия республикалары һәм Ҡаҙағстандың хөкүмәт етәкселәре, ғилми ойошмалар, юғары уҡыу йорттары, киң ҡатлам йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнаша. Юбиляр

исеменә Мәскәүҙән, Петроградтан, Өфөнән, Ҡазандан, Семипалатинскиҙан һәм бүтән тарафтарҙан ҡотлау телеграммалары килә. Тантанала ҡатнашыусылар Ә.Ә. Диваевты төрки донъяһының бөйөк ғалимы һәм педагогы, абруйлы йәмәғәт эшмәкәре булараҡ баһалайҙар һәм тәбрикләйҙәр. Өфөнән Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты ебәргән телеграммала иһә башҡорттарҙың шундай арҙаҡлы улы булыуы менән ғорурланыу хаҡында хәбәр итәләр.

Беҙҙең данлыҡлы милләттәшебеҙ, оло талант эйәһе Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваев 1933 йылдың 5 февралендә Ташкент ҡалаһында 78 йәшендә вафат була. Уның бай һәм үҙенсәлекле ғилми мираҫы башҡорт ғалимдары араһынан да үҙенең ентекле тикшеренеүсеһен көтә.

* * *

[1] Вәлиди Туған Ә. Хәтирәләр // Ағиҙел, 1991. № 4, 133-сө бит.

* * *

Әҙәбиәт: Зарифов Х.Т. Неутомимый ученый и просветитель А.А. Диваев // ИАН Каз. ССР. № 55. Серия литературная. Вып. 6. Алма-Ата, 1948. 74—77-се биттәр; Диваев Абубакир Ахмеджанович // Большая советская энциклопедия, том 14. М., 1952. 314-се бит; Диваев Абубакир Ахмеджанович // Краткая литературная энциклопедия, том 2. М., 1964. 672—673-сө биттәр; Лунин Б.В., А.А. Диваев как археолог-краевед // ИАН УзССР, Серия обществ. наук. Ташкент, 1957. № 1. 73—77-се биттәр; Валиханов Г.Н. Этнография казахского народа в трудах А.А. Диваева // Советская этнография. М., 1958. № 5; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990, 128, 134, 179, 513-сө биттәр; Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Хәтирәләр. // Ағиҙел. 1991, № 4. 133-сө бит; Батыршин А. Неизвестный в Отечестве. // Замандаш. 1993, № 3; Хөсәйенов Ғ.Б. Әбүбәкер Диваев мырҙа // Ватандаш. 1996, № 3, 178—191-се биттәр; Диваев А.А. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996. Байтанаев Б.А. А.А. Диваев: Очерк жизни и деятельности. Чимкент, 2004.

Ризаитдин Фәхретдинов
(1859—1936)



Башҡортостанда XIX быуаттың икенсе яртыһы — XX быуат башында ижтимағи фекер үҫеше һәм мәғрифәтселек тарихында Мирсалих Биксурин, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән йәнәш Ризаитдин Фәхретдиновтың исеме ғәйәт ҙур урында тора.

Ризаитдин Фәхретдин улы Фәхретдинов 1859 йылдың 4(16) ғинуарында элекке Һамар губернаһы Бөгөлмә өйәҙенең Кисеүсат исемле башҡорт ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. (Хәҙер ул ауыл Татарстан Республикаһының Әлмәт районына ҡарай.) Р.Ф. Фәхретдиновтың милли асылы тураһында төрлө уйҙырмаларҙы сикләр өсөн шуны әйтеп үтергә кәрәк: ғалим һәм әҙип үҙенең башҡорт булыуын һәр ваҡыт ап-асыҡ билдәләр булған. Был уның автобиографияһында ла күрһәтелгән. Архивта Р.Ф. Фәхретдиновҡа 1906 йылдың 12 декабрендә бирелгән паспорттың күсермәһе һаҡланған. Был документта ла шул уҡ мәғлүмәт хатта ике тапҡыр теркәп ҡуйылған[1]. Был тәбиғи ҙә, сөнки элекке Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәре боронғо Башҡортостандың көнбайыштағы төбәктәре булған. Был ике өйәҙҙә 1897 йылғы иҫәп-хисап ваҡытында 280 мең башҡорт йәшәгән. (Бындағы йөҙәрләгән башҡорт ауылы XX быуатта ассимиляцияға дусар ителде.)

Ризаитдин Фәхретдинов тәүҙә ата-әсәһенән, артабан күршеләге Түбәнге Шилселе ауылы мәҙрәсәһендә белем ала. Бында ул ун йылға яҡын уҡый, ғәрәп, фарсы, төрөк телдәрен уңышлы өйрәнә, китап күсереү, конспектлап өйрәнеү менән мауыға. Ошонан һуң бер нисә йыл Бөгөлмә өйәҙенең Илбәк ауылы мәҙрәсәһендә мөҙәррис, хәлфә һәм мулла булып тора. Үҙ алдына уҡып, шәреҡ телдәрен өйрәнеүҙе дауам итә, аҙағыраҡ рус телен һәм мәҙәниәтен үҙләштереү буйынса ла етди эшләй. Нәҡ ошо осорҙа унда ғилем менән шөғөлләнеү дәрте лә уяна. 1887—1888 йылдарҙа Ҡазанда Ризаитдин Фәхретдиновтың бер-бер артлы

өс китабы баҫылып сыға: «Китабе әт-тәсриф: Ғилме сарыф», «Китабе мәҡәддимә: Әт-тәхрирел мосфа...», «Китабел иғтибар».

1891 йылда Р.Ф. Фәхретдинов Өфөләге Диниә назаратына ҡазый итеп һайлана, шул айҡанлы ул Өфөгә күсеп килә һәм ошонан ары барлыҡ ғүмерен Башҡортостан, Ырымбур төйәге менән бәйләй. Бында ул тәүге осорҙа, төп хеҙмәте буйынса вазифаларын үтәү менән бергә, Диниә назаратында тупланған бай ҡулъяҙмалар фондын өйрәнеп, яҙыласаҡ «Аҫар» тигән күп томлығына материалдар йыйнай. Шуны ла әйтеп үтәйек: 1894 йылда, илгиҙәр шағир Аҡмулла менән осрашып, мөфти Солтанов ҡатнашлығында сәй мәжлесе ойоштора, унда М. Өмөтбаев менән М. Аҡмулла араһында, башҡорт традицияһы буйынса, Өфө зыялылары өсөн һис көтмәгәндә шиғыр әйтеше башланып китә. Оло бер байрамға әйләнгән был мәжлес тураһында Р.Ф. Фәхретдинов һуңынан тәрән ихтирам һәм һоҡланыу тойғоһо менән «Аҡмулла Өфө шәһәрендә» тигән ғәйәт ҡиммәтле йәҫтәлеген яҙа. 1899 йылда Ҡазанда, 1903 йылда Ырымбурҙа уның мәғрифәтселек идеялары менән һуғарылған «Сәлимә, йәки Ғиффәт» һәм «Әсмә, йәки Ғәмәл үә яза» исемле повестары донъя күрә. Был повестар шул дәүер башҡорт мәҙәни тормошонда яңы бер күренеш булараҡ баһалана. 1900—1908 йылдар эсендә Ҡазанда һәм Өфөлә иң ҙур күләмле һәм әһәмиәтле «Аҫар» библиографик йыйынтыҡтарының 15 киҫәктән торған 1-се һәм 2-се томдары нәшер ителә. (Хеҙмәттең ҡалған ике томы ҡулъяҙма хәлендә тороп ҡала.) Р.Ф. Фәхретдиновтың Өфөлә йәшәгән ғүмеренең тәүге осоронда ул уҡыу-уҡытыу, этика, тәрбиә мәсьәләләренә арналған дәреслектәр, популяр брошюралар, фәнни-методик хеҙмәттәр яҙып, донъяға сығара. Бына шул баҫмаларҙың бер нисәһе: «Тәрбиәле ана» (1898), «Тәрбиәле ата» (1898), «Тәрбиәле бала» (1898), «Тәрбиәле ҡатын» (1898), «Шәкертлек әҙәбе» (1899), «Әҙәбе тәғлим» (1902), «Ғаилә» (1902), «Нәсихәт I» (малайҙарға, 1903), «Нәсихәт II» (ҡыҙҙарға, 1903), «Нәсихәт III» (өлкәндәргә, 1903). Йәнә «Ҡөрьән үә табәкат» («Ҡөрьән үә уның баҫмалары» (1900), «Исмәғил сәйәхәте» (1903), «Ибне рөшд» (1905) һ.б. китаптарын баҫтыра.

1906-1918 йылдарҙа Риза Фәхретдинов Ырымбурҙа йәшәй, башта «Ваҡыт» гәзитенең икенсе мөхәррире була. 1908 йылда уны бер туған Закир һәм Шакир Рәмиевтәр үҙҙәре иҫәбенә сығарыласаҡ әҙәби һәм фәнни-публицистик «Шура» журналына баш мөхәррир итеп саҡыра. Ошо вазифаны ғалим ун йыл буйы арыу-талыуһыҙ башҡара, үҙе лә журнал биттәрендә боронғо тарих, этнография, фән һәм атаҡлы ғалимдар, әҙәбиәт һәм әҙиптәр, тәрбиә мәсьәләләре буйынса мәҡәләләр баҫтыра. Мәҫәлән, тел тураһында фекер алышыуға арналған «Шура»ның тел ярышы» (Ырымбур: «Ваҡыт», 1910) исемле йыйынтыҡ йәмәғәтселек аңында тәрән эҙ ҡалдыра. Унда Ғарифулла Кейеков һымаҡ

илһөйәр рухлы башҡорт әҙиптәре, туған телебеҙҙе яҡлап, ихлас сығыш яһай.

«Шура»ның 1-се һанынан башлап иң һуңғы сығарылышына тиклем баш мөхәррир булып эшләгәндән һуң, 1918 йылда, Риза Фәхретдинов Өфөгә ҡайта. Бында уны ҡазый, бер аҙҙан һуң, 1922 йылда, мөфти итеп һайлап ҡуялар. Уға Диниә назаратына, яңы властарҙың дин эштәренә тупаҫ тығылып, илдә аллаһыҙлыҡ хөкөм һөргән фажиғәле йылдарҙа етәкселек итергә тура килә. Был бурысты ул, тотҡан юлынан һис кенә лә тайпылмайынса, ысын инанғанлыҡ һәм түҙемлелек менән үтәй. Ауыр һәм ҡатмарлы шарттарҙа эшләүенә ҡарамаҫтан, Башҡортостанда һәм бөтөн мосолман илдәрендә дин тәғлимәтенең тәрән белгесе, Рәсәйҙең ғилми даирәләрендә киң белемле шәрҡиәтсе-ғалим булараҡ оло хөрмәт ҡаҙана, Өфөлә элек башлаған ғилми эштәрен дауам итә. «Ибн-Фаҙландың Болғарға килеүе» исемле бәләкәйерәк күләмле хеҙмәтен, «Аҫар»ҙың яңы киҫәктәрен яҙа, үҙенең күп йылдар буйы йыйылған архивын барлап, тәртипкә килтереп, шуларҙың бер өлөшөн, академик А.Н. Самойловичтың мөрәжәғәтенә яуап итеп, 1930 йылда Петербургка, СССР Фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институтына ебәрә. (Ул ҡульяҙмалар хәҙерге көндә Рәсәй фәндәр академияһы Санкт-Петербург бүлегенең Ғилми архивында һаҡлана). Диниә назаратында күп йылдар буйы йыйылып килгән ҡиммәтле архив материалдарын һаҡлап алып ҡалыуҙа оло фиҙаҡәрлек күрһәтә. Уның үҙенең 40 томлыҡ ҡульяҙмалар йыйынтығы ла назараттың архивында тороп ҡала һәм баһалап бөткөһөҙ был хазина һуңынан, 1966, 1980 йылдарҙа, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Ғилми архивына тапшырыла.

Р.Ф. Фәхретдинов 1936 йылдың 12 апрелендә Өфөлә вафат була.

* * *

[1] Кутушев Р.Р. Материалы к биографии Ризы Фахретдинова // Творчество Ризы Фахретдинова: Исследования, материалы. Уфа, 1988. 58-се бит.

* * *

Әҫәрҙәр: Сәлимә, йәки Ғиффәт. Ҡазан, 1899; Әсмә, йәки Ғәмәл үә яза. Ырымбур, 1903; Әсмә, йәки Ғәмәл үә яза. // Башҡорт әҙәбиәте: XX быуат башы. 2-се китап. Өфө, 1984. 19—47-се биттәр; Жәвамигулькәлим шәрхе. Казан, 1989; Болгар үә Казан төрекләре. Казан, 1993; Казан ханнары. Казан, 1995; Алтын Урда ханнары. Казан, 1996.

Әҙәбиәт: Творчество Ризы Фахретдинова: Исследования, материалы. / Отв.

редактор Р.З. Шакуров. Уфа, 1988. 136 бит; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 2-се том. Өфө, 1990. 267—292-се һ.б. биттәр; Баишев Ф.Н. Общественно-политические и нравственно-этические взгляды Ризы Фахретдинова. Уфа, 1996; Фахретдинов Р.Ф. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Хөсәйенов Ғ. Ризаитдин бин Фахретдин. Өфө, 1997.

Мөхәммәтхан /Мстислав/ Ҡулаев
(1873—1959)



XX быуаттың тәүге яртыһында башҡорт халҡының рухи тормошонда, башҡорт тел ғилеме үҫешендә, шулай уҡ Октябрь революцияһынан һуңғы осорҙа Башҡорт автономияһы өсөн көрәш тарихында ғәйәт үҙенсәлекле урында торған алдынғы ҡарашлы уҡымышлыларыбыҙҙың береһе.

Мөхәммәтхан Сәхипкирәй улы (Мстислав Александрович) Ҡулаев 1873 йылдың 7 февралендә Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Үҫәргән олоҫо (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы) Ейәнсура ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Уның ата-бабалары — боронғо үҫәргән ҡәүеме башҡорттары. Мөхәммәтхан башта үҙ ауылындағы мәҙрәсәлә уҡый, артабан земство рус-башҡорт мәктәбендә белем ала. 1895 йылда Ырымбур гимназияһын алтын миҙал менән тамамлай. Шул уҡ йылдың йәйендә тыуған ауылына ҡайтып, ата йортонда йәшәй башлай. Тиҙҙән уға Аҡбулаҡ ауылынан кәләш әйттерәләр. Мөхәммәтхан, Көнһылыу исемле ҡыҙға өйләнеп, крәҫтиән тормошо менән йәшәй башлай. Әммә бер йыл самаһы ваҡыт үтеү менән, уның тормош юлында ҡырҡа боролош билдәләнә. Мөхәммәтханға көтмәгәндә гимназия буйынса һабаҡташтарының береһенән хат килеп төшә. Һабаҡташы уға, Ҡазанға барып, алдан һөйләшеп ҡуйыуҙары буйынса, университетҡа уҡырға инергә йыйыныуы тураһында хәбәр итә. «Һин нишләйһең? Әллә алтын миҙалды, белемде ергә күмергә йыйынаһыңмы?» — тип сәменә тейә. Мөхәммәтхан башта икеләнә, сөнки, өйләнгәс, донъя көтөргә кәрәк, ата-әсәһе лә ҡартайған. Әммә атаһы улының университетта уҡыу теләгенә һис кенә лә ҡаршы төшмәй. «Мин ҙур белем алыуыңа бик ризамын. Беҙ йәшәрбеҙ әле. Киленде үҙ балабыҙ кеүек ҡарарбыҙ», — ти.

Мөхәммәтхан бер ай буйы имтихандарға әҙерләнә. Ниһайәт, июль урталарында атаһы уны, пар ат егеп, 150 саҡрым юл үтеп, Ырымбурға алып

бара. Ошонан Мөхәммәтхан, әлеге Сәләх тигән дуҫы менән осрашып, Ҡазан ҡалаһына юлға сыға. Имтихандарҙы уңышлы тапшырып, егеттәр икеһе лә уҡыуға ҡабул ителә. Мөхәммәтхан Ҡулаев, шулай итеп, Ҡазан университетының медицина факультеты талибы булып китә. В.Ш. Псәнчин яҙыуынса, бында ул «Башҡорт стипендияһы»на уҡый. Нәҡ бына университетта уҡыған йылдарҙа Мөхәммәтхандың тормошонда ҙур ғына үҙгәрештәр булып үтә. Был хаҡта ул үҙе яҡташы Гәрәй Ярлыҡаповҡа ошоларҙы һөйләп ҡалдырған...

Өсөнсө курста уҡыған ваҡытта ҡапыл ғына Мөхәммәтхандың атаһы вафат була. Ул атаһын ерләргә ҡайта алмай, сөнки ҡустыһы был хаҡта хәбәр итмәгән була. Бер-ике ай үтеүгә ҙур ҡайғынан әсәһе лә донъя ҡуя. Ҡустыһы шунан һуң ғына Мөхәммәтханға хат яҙа. Мөхәммәтхандың ваҡытында хәбәр итмәгән ҡустыһына бик асыуы килә. Ул ауылға ҡайтмай башлай. Ҡустыһы һуңыраҡ еңгәһе Көнһылыуға өйләнә. Мөхәммәтхандан тыуған Әмирхан исемле баланы ла үҙ улы итеп тәрбиәләй. Ата-әсәһе үлгәс, ҡустыһынан ярҙам килмәй башлай. Мөхәммәтхандың тормошо ауырлаша. Ошо ваҡытта ул хәлле генә бер рус ҡыҙы менән таныша, уларға йыш ҡына барып йөрөй. Оҙаҡламай өйләнешергә булалар. Әммә шундай шарт ҡуйыла: сиркәүҙә никахлаштырыу өсөн ул христиан диненә күсергә тейеш. Мөхәммәтхан үҙен Мстислав Александрович тип атарға ризалыҡ бирә. Ошо ваҡыттан рәсми документтарҙа ла ул Мстислав Александрович Ҡулаев исеме менән йөрөй башлай. (Был урында, әлбиттә, Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың «Хәтирәләр»ендә М.А. Ҡулаев тураһында: «Бәләкәй сағынан рус миссионерҙары ҡулына эләгеп, христиан мөхитенә йәлеп ителеп, христианлаштырылған бер башҡорт», — тигән һүҙҙәрен дә иҫкә төшөрөргә тейешбеҙ.)

1902 йылда, университетты уңышлы тамамлау менән, М.А. Ҡулаев, үҙ халҡына хеҙмәт итергә ниәтләнеп, Ырымбур һәм Өфө губернаторҙарына Башҡортостанға ҡайтырға рөхсәт һорап мөрәжәғәт итә. Әммә рөхсәт бирелмәй. Ул, Ҡазан губернаһының Тәтеш өйәҙе Кесе Илсекәй ауылына земство врачы итеп тәғәйенләнә, бер йылдан һуң, Ҡазанға килеп, Александр ҡала больницаһында штаттан тыш ординатор, артабан университеттың ауырыуҙар диагностикаһы кафедраһында ординатор булып эшләй. 1910 йылда медицина докторы дәрәжәһенә имтихандар тапшыра, диссертация өҫтөндә эшләй башлай, әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында был хеҙмәтен ваҡытында тамамлап өлгөрә алмай. 1913 йылда ул, Юл эштәре министрлығының тәҡдиме менән, Варшава округына – Варшава ҡалаһына эшкә күсерелә. 1914 йылдың октябрендә уға 275-се ялан госпиталенең баш врачы вазифаһы йөкмәтелә. М.С. Ҡулаев госпиталь етәксәһе сифатында Көньяҡ-Көнбайыш фронтында ике йыл

буйы оҙон һуғыш юлы үтә. 1917 йылда ул, госпиталде Украина хөкүмәтенә тапшырып, Ҡазанға ҡайта һәм ҡәҙимге врачлыҡ эшенә тотоноп китә. Әммә күпмелер ваҡыт үтеүгә, илдә барған ваҡиғалар өйөрмәһе уны үҙ эсенә алып инеп китә. Мөхәммәтхан Ҡулаевҡа сағыштырмаса ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙенең туған башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәтенең нәҡ уртаһында булыу, мөһим тарихи мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә туранан-тура ҡатнашыу насип була. Сөнки был йылдарҙа инде М.А. Ҡулаев башҡорт халҡының илһөйәре һәм арҙаҡлы бер эшмәкәре сифатында ҙур абруй ҡаҙанып өлгөрә. Ул, бер яҡтан, тәрән белемле врач һәм медицина хеҙмәткәре булып танылһа, икенсе яҡтан, башҡорт теленең рус-грек графикаһы нигеҙендәге милли алфавитының тәжрибә өлгөһөн төҙөп, 1912 йылда уҡ айырым китап итеп баҫтырып сығарыуы[1] менән йәмәғәтселектең оло ихтирамын яулай. Әйткәндәй, Мөхәммәтхан Ҡулаевтың башҡорт телен ғилми өйрәнеү теләге рус-башҡорт мәктәбендә һәм Ырымбур гимназияһында уҡыған йылдарында уҡ тыуа, был эште ул артабан, врачлыҡ вазифаларын атҡарыу менән бер рәттән, үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, эштән бушаған ваҡыттарында, бөтөн ғүмере буйы дауам итә. 1912 йылғы «Азбука»һын артабан камиллаштырып, 1919 йылда йәнә «Әлепей»[2] тигән китабын баҫтыра.

М.А. Ҡулаевтың башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашауы түбәндәге шарттарҙа башланып китә. Үҙенең биографияһында яҙғанса, ул 1918 йылдың аҙағында, тыуған йортона ҡайтып, туған-тыумасаларын күреп китеү ниәте менән, бер айлыҡ отпуск алып, Ырымбурға юллана. «Ул көндәрҙә, – тип яҙа М.А. Ҡулаев, – большевиктар Ҡазанға ҡаты һөжүм алып бара ине. Имен-аман ғына Ырымбурға килеп еттем. Шул рәүешле мин фронт артында ҡалдым, ә Ҡазан – икенсе яҡта. Ул ваҡытта Башҡорт халыҡ хөкүмәте Ырымбурҙа ине. Мине хөкүмәт врачы итеп тәғәйенләнеләр. Шул рәүешле мин дә хөкүмәт составына инеп киттем...» Тиҙҙән уны Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп һайлап ҡуялар. М.А. Ҡулаев Советтар яғына сығыу маҡсатында большевиктар менән һөйләшеү һәм килешеү төҙөү эшендә Башҡорт хөкүмәте делегацияһына етәкселек итә, бының өсөн, фронт һыҙығы аша сығып, Өфөгә[3], Өфөнән Сембергә, Семберҙән Мәскәүгә юл тота, ниһайәт, делегация 1919 йылдың 20 мартында Үҙәк Совет хөкүмәте менән Килешеүгә ҡул ҡуйыуға һәм Советтар тарафынан автономиялы Башҡорт республикаһының иғлан ителеүенә өлгәшә.



**БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ**

**СОСТАВЛЕННЫЙ М.А.КУЛАЕВЫМ В 1910–12 ГОДАХ.**

(ИЗ ЕГО КНИГИ: „ОСНОВЫ ЗВУКО-ПРОИЗНОШЕНИЯ И АЗБУКА ДЛЯ БАШКИР" Г. КАЗАНЬ 1912 Г.)

| №№ п/п | ПЕЧАТНЫЕ БУКВЫ | РУКОПИСНЫЕ БУКВЫ | СОВРЕМЕННЫЙ БАШКИР. АЛФАВ. | №№ п/п | ПЕЧАТНЫЕ БУКВЫ | РУКОПИСНЫЕ БУКВЫ | СОВРЕМЕННЫЙ БАШКИР. АЛФАВ. |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | А а | А а | а | 18 | М м | М м | м |
| 2 | А а | А а | ә | 19 | Н н | Н н | н |
| 3 | Б б | Б б | б | 20 | Ҥ ң | Ҥ ң | ң |
| 4 | Г г | Г г | г | 21 | Ѡ ѡ | Ѡ ѡ | о (ошо) |
| 5 | Ғ ғ | Ғ ғ | ғ | 22 | Ѳ ѳ | Ѳ ѳ | ө (өө) |
| 6 | Д д | Д д | д | 23 | П п | П п | п |
| 7 | Ъ ъ | Ъ ъ | ы | 24 | Р р | Р р | р (р) |
| 8 | Ь ь | Ь ь | э (е) | 25 | С с | С с | с |
| 9 | Ж ж | Ж ж | ж | 26 | Ҫ ҫ | Ҫ ҫ | ҫ |
| 10 | Ӡ ӡ | Ӡ ӡ | е | 27 | Т т | Т т | т |
| 11 | З з | З з | з | 28 | У у | У у | у |
| 12 | Ҙ ҙ | Ҙ ҙ | ҙ | 29 | Ү ү | Ү ү | ү |
| 13 | И и | И и | и | 30 | Ф ф | Ф ф | ф |
| 14 | J j | J j | й | 31 | Х х | Х х | х |
| 15 | К к | К к | к | 32 | Һ һ | Һ һ | һ |
| 16 | Ҡ ҡ | Ҡ ҡ | ҡ | 33 | Ш ш | Ш ш | ш |
| 17 | Л л | Л л | л | 34 | › | › | звук смыкания голосовых связок |

ПРИМЕРЫ:

Бъ башһорт алыпыјын јаһшъ бьльб алған кышь уһыҙа јаҙала бълысак. Бъ алыпыј бік јыңьл. Башһорттъң һајтъ-гъна һуҙь бусала бъалаьпыјға тәшәнган кышь уһыҙа јаҙала бълысак.

Һар кьмга иң ауал ҙуҙ тьльнсә уһъј јаҙа бьльу тъјьш

/. стр. 17 - 18 /.

Килешеүгә В.И. Ленин, М. Владимирский менән бергә Башҡорт хөкүмәте яғынан М.А. Ҡулаев ҡул ҡуя. М.А. Ҡулаевтың ошо өс ай самаһы ваҡыт эсендә алып барылған сәйәси эшмәкәрлеге башҡорт халҡының, Башҡортостандың яҙмышы өсөн бик мөһим роль уйнай, ә ул ваҡиғалар уның үҙен милләтебеҙҙең күренекле тарихи шәхестәре кимәленә күтәрә. Халҡыбыҙҙың бөйөк аҡыл эйәһе, Башҡорт автономияһының атаһы Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең көрәштәше М.А. Ҡулаев тураһында: «Намыҫлы бер зат. Мосолман булмаһа ла, башҡортлоғона һәм төркилегенә тоғро булды. Рустарҙың ҡаты бәғерлелеген һәм оятһыҙлығын яратмай ине. Себер төркиҙәре тураһында рус баҫмаларын уҡыған...» — тип, бик йылы хистәр менән иҫкә алған.

Мәскәүҙә Килешеүгә ҡул ҡуйғандан һуң М.А. Ҡулаев юл ыңғайы, Ҡазанға туҡталып, ғаиләһенең хәлен белеп китмәксе була. Әммә Ҡазанда ҡаты ауырып китә, ә инде, һауыға төшкәс, уға эшкә урынлашырға тура килә. Ошо ваҡыттан башлап ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем (ул 1959 йылда Ҡазан ҡалаһында донъя ҡуя) Ҡазандың Александр больницаһында врач һәм баш врач булып

эшләй. 1928, 1930 йылдарҙа уның башҡорт теленең өндәр системаһына, ҡылым төрҙәренә арналған өс китабы донъя күрә[4]. М.А. Ҡулаевтың ҡулъяҙма хәлендә ҡалған ҙур күләмле хеҙмәттәре араһында «Башҡортса-русса һүҙлек», «Башҡорт теленең һүҙбәйләнеше (синтаксис)», «Үҫәргән һөйләшендә һүҙбәйләнеш системаһы» тигән тикшеренеүҙәре, башҡорт теленең фонетикаһы, морфологияһы, синтаксисы, лексикологияһы буйынса тупланған ҡиммәтле материалдары һәм күҙәтеүҙәренең фәнни һәм ғәмәли әһәмиәте бик ҙур. Шуныһы характерлы: Мөхәммәтхан Ҡулаев үҙенең тикшеренеүҙәренә башлыса башҡорт теленең көньяҡ диалектын, үҫәргән башҡорттарының һөйләү телен нигеҙ итеп алған, бөтөн хеҙмәттәрен дә ул тик үҙе төҙөгән алфавитты ҡулланып яҙған. Тел белеме өҫтөндә эшләү менән бергә, халыҡ ижады буйынса ла материалдар йыйған.

М.А. Ҡулаев — башҡорт халҡының һәм башҡорт теленең оло патриоты. Уның раҫлауынса: «Һәр кем үҙ телендә уҡый-яҙа белергә тейеш»; «Белемде ныҡ урынлаштыра торған тел — әсәй теле, ана теле, әсәйҙең өндәшеүе. Башҡорттарға белем алыр өсөн үҙ теле кәрәк — әсәй теле».

Талантлы мәғрифәтсе ғалим, табип, дәүләт эшмәкәре Мөхәммәтхан Ҡулаевтың тормош юлын, ғилми мираҫын ентекләп өйрәнеү башҡорт ғалимдары алдында торған бурыс булып ҡала әле.

* * *

[1] Ҡулаев М.А. Основы звукопроизношения и азбука для башкир. Казань, 1912, 18 бит.

[2] Ҡулаев М.А. Әлепей. Баҫылған урыны күрһәтелмәгән. 1919, 35 бит.

[3] М.А. Ҡулаевтың, был һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашып, ниндәй мөһим роль уйнағанлығы ошондай документта айырыуса асыҡ күренә: Протокол переговоров представителей правительства РСФСР с делегацией Башкирского правительства в г. Уфе. Образование БАССР (сборник документов.) Уфа, 1959. 209-213-се биттәр.

[4] Кулаев М.А. О звуках башкирского языка. Казань, 1928, 60 стр.; Твердый алфавит башкирского языка. Казань, 1928. 16 стр.; О глаголах башкирского языка. Казань, 1930. 103 стр.

* * *

Әҙәбиәт: Ураҡсин З.Ғ. Телсе-ғалим һәм врач // Совет Башҡортостаны. 1963, 24 ноябрь; Псәнчин В.Ш. Ҡулаев М.А. — хәҙерге башҡорт алфавитына нигеҙ

һалыусыларҙың береһе // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1964, № 3. 51—53-сө биттәр; Псәнчин В.Ш. Атайҙар һүҙе — аҡылдың үҙе // Башҡортостан. 1993, 6, 9 февраль; Аҙнағолов Р.Ғ. М. Ҡулаев — диалектолог һәм лексикограф // Совет Башҡортостаны. 1973, 7 февраль; Ярлыҡапов Г. Көслө шәхес // Ленинсы. 1989, 23 март; Ярлыҡапов Г. Халыҡҡа арналған ғүмер / Ҡулъяҙма /; Кулаев М.А. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Мансур Солтанов
(1875—1919)



Башҡорт халҡының музыкаль-поэтик ижадын йыйыу һәм өйрәнеү тарихы ике быуаттан ашыу дәүерҙе үҙ эсенә ала. Был тарихта оло бер милләттең бихисап йыр-моң хазинаһын мәңгеләштереүгә үҙ өлөшөн индергән күп кенә ҡәҙерле исемдәр бар. Улар араһында XIX быуат аҙағы — XX быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында йәшәгән С.Г. Рыбаков (1867—1921), Ғайса Еникеев (1864—1931), И.А. Козлов (1878—1933), Ғәзиз Әлмөхәмәтов (1895—1937) һымаҡ музыка эшмәкәрҙәре ҙур хөрмәт ҡаҙанды. Башҡорт һәм татар халыҡтарының музыка фольклорын йыйыусы һәм өйрәнеүсе башҡорт Мансур Солтановтың исеме лә ошо уҡ арҙаҡлы шәхестәр менән бер рәттә тора. Дөрөҫ, әлеге көндәргә тиклем уның килеп еткән ғилми-ижади мираҫы күләм яғынан ҙур түгел, ләкин шәхес һәм юғары әҙерлекле белгес булараҡ та, иң тәү башлап үҙ халҡының йыр-моң байлығын профессиональ кимәлдә өйрәнеүсе сифатында ла ул тарихыбыҙҙа лайыҡлы урын алырға хаҡлы.

Мансур (тулы исеме — Мөхәммәтмансур) Ислам улы Солтанов 1875 йылдың 25 апрелендә элекке Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе Мәстей ауылында башҡорт дворяны ғаиләһендә донъяға килгән. (Был ауыл беҙҙең дәүнрҙә Татарстандың Аҡтаныш районында тороп ҡалған.) Мансурҙың атаһы Ислам Солтанов үҙ заманында билдәле башҡорт эшмәкәре, Өфөләге Диниә назаратының мөфтие Мөхәммәтйәр Солтанов менән бер туған була. Ислам Солтановтың икенсе ҡатынынан ике ҡыҙ, дүрт малай үҫә. Солтановтар асылда Өфөлә йәшәй, ә йәйге мәлдәрҙә тыуған ауылдарына ҡайтып, ҡымыҙ эсеп, йыр, ҡурай моңдары тыңлап, ырыуҙаштары менән аралашыу Мансурҙың күңелендә онотолмаҫлыҡ яҡты иҫтәлектәр ҡалдыра. Ғаиләлә белемгә ынтылыш, башҡорттоң милли йолаларына тоғролоҡ, музыка менән ҡыҙыҡһыныу көслө була. Ислам Солтановтың өс улы — Шәйех, Әмир һәм Яҡуп — Ырымбур кадетлыҡ корпусында, ҡыҙҙары Зөһрә менән Әминә Өфөлә гимназияла уҡый. Мансур

Өфө реаль училищеһына уҡырға керә. Был йылдарҙа ул Өфө музыка һөйөүселәр йәмғиәте ағзаһы дирижер С.П. Копылов етәкселегендәге уҡыусылар оркестрының сығыштарында ҡатнаша. Училищены тамамлау менән, ғаилә традицияһы буйынса һәм, әлбиттә, дворян балаһы булараҡ, Ырымбурҙағы кадетлыҡ корпусына уҡырға инергә тейеш була. Әммә Мансур Солтанов үҙенең ғүмерен музыкаға арнарға ҡарар итә. 1897 йылда Мәскәү консерваторияһына уҡырға инә. Бында ул профессор В.В. Крейчмандың флейта класында шөғөлләнә. Консерваторияла Мансур шулай уҡ С.И. Танеев, Г.Э. Конюс, Н. М. Ладухин, Ф.Ф. Кенеман етәкселегендә төплө музыкаль-теоретик әҙерлек ала. Студент йылдарында ул сағыу оҫталыҡҡа өлгәшкән виртуоз флейтасы булараҡ танылыу таба, яуаплы концерттарҙа сығыш яһай. Уҡыуҙың һуңғы өс йылында исемле (И.И. Маслов исемендәге) стипендия ала. Консерваторияны 1903 йылда көмөш миҙал менән тамамлай. Ошо уҡ йылда Мансур Солтанов Мәскәү ҡыҙы Т.А. Фувакинаға өйләнә һәм, ҡатынының сәләмәтлеге насар булыу сәбәпле, Ҡырымға китергә мәжбүр була. Әйткәндәй, 1906 йылда ул конкурс буйынса Мәскәүҙең Ҙур театры оркестрына ҡабул ителә. Әммә Мәскәүҙә урынлашырға тура килмәй. Ҡырымда М. Солтанов ун йылдан артыҡ симфоник оркестр составында флейтасы булараҡ сығыш яһай. Унда шулай уҡ һуңынан башҡорт халыҡ йырҙарын өйрәнеүҙә һәм башҡорт профессиональ музыкаһын үҫтереүҙә билдәле эҙ ҡалдырасаҡ А.А. Эйхенвальд (1875—1952) етәкселегендәге симфоник оркестр концерттарында ҡатнаша.

1912 йылда Мансур Солтановты Һарытау консерваторияһына уҡытыусылыҡ эшенә саҡыралар. Уның артабанғы эшмәкәрлеге тулыһынса ошо уҡыу йорто менән бәйле. Консерваторияла М. Солтанов флейта, музыка теорияһы һәм сольфеджио буйынса дәрестәр алып бара, ҡаланың мәҙәниәт тормошонда ҡатнаша, флейтасы булараҡ симфоник оркестр, тынлы музыка ҡоралдары квартеты составында концерттарҙа сығыш яһай. Уға ҡала симфоник оркестрында атаҡлы композитор А. Глазунов етәкселегендә лә сығыш яһарға тура килә. Замандаштары уны етди холоҡло, яҡшы тәрбиәле кеше, талапсан педагог һәм нескә күңелле, илһамлы музыкант булараҡ хәтерләйҙәр. Уның уҡыусыларынан И.В. Салтыҡов һуңынан башҡорт, сыуаш, татар көйҙәрен йыйыусы музыка белгесе булараҡ киң танылыу таба. Мансур Солтанов кесе йәштән үк халыҡ көйҙәренә, ҡурай моңона оло мөхәббәт тойғоһо менән йәшәй. Тыуған яҡҡа ҡайтҡан саҡтарында, ҡурайсылар менән осрашып, йылдың-йылы бик күп көйҙәр яҙып ала. Күренекле башҡорт тел белгесе, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре Закир Шакиров уның тураһында, мәҫәлән, ошолай тип иҫкә ала:

«Мансур Ислам улы Солтановты мин тәүге тапҡыр әллә 1914, әллә 1915

йылда Аҡкүл пристанендә күрҙем. Беҙ пароход көтә инек, миңә Ҡазанға, ә уға Һарытауға китергә кәрәк ине. Беҙ Кама тамағына тиклем бергә барҙыҡ. Ул башҡорттар араһынан сыҡҡан күтәренке күңелле, мәҙәниәтле матур кешеләрҙең береһе ине. Юлда барғанда ул флейтанан айырылмаҫ булды. Мин уның һеңлеләре Әминә һәм Зөһрә менән яҡындан таныш инем... Һеңлеләре һөйләүенсә, Солтанов халыҡты, уның йырын, моңон бик яратҡан. Унда башҡорт йырҙарын һәм инструменталь көйҙәрен йыйыу менән шөғөлләнгән. Был эштә уға Сәлимгәрәй Йәнтүрин булышлыҡ иткән»[1].

Шулай итеп, Мансур Солтановтың ҡулында бик күп халыҡ көйҙәренең яҙмалары туплана. 1916 йылда ул ошо яҙмалар нигеҙендә тәүге йыйынтығын баҫтырып сығара. Йыйынтыҡтың титул битендә рус һәм төрки телдәрендә: «Башҡорт һәм татар көйләре. Нотаға салды Саратов консерваториясының мөғәллиме Мансур Султанов» тигән һүҙҙәр яҙылған. «Беренсе баҫма» тип тә билдәләнгән. Тимәк, бәләкәй күләмле айырым-айырым баҫмалар серияһы итеп уйланылған булып сыға. Әммә, үкенескә ҡаршы, тиҙҙән донъялар үҙгәреп китә, ә 1919 йылдың 19 декабрендә М.И. Солтанов тиф ауырыуынан вафат булып ҡала. Ауыр заманаларҙа унан ҡалған ҡулъяҙмалар юҡҡа сыға. Өҫтәүенә Мансур Ислам улының ижади эшмәкәрлеге бик һүңлап өйрәнелә башлай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙың күренекле фольклор белгесе Л.П. Атанованың тырышлығы менән 60—70-се йылдарҙа М. Солтанов тураһында аҙмы-күпме фактик материалдар йыйнала (иҫтәлектәр яҙып алына, архивтарҙан документаль сығанаҡтар өйрәнелә) һәм тәү башлап күренекле милли музыка белгесе һәм эшмәкәренең ижадын һәм тормош юлын яҡтыртҡан мәкәләһе донъя күрә.[2]

Мансур Солтановтың «Башҡорт һәм татар көйҙәре» йыйынтығы үҙ ваҡытында рус, башҡорт һәм татар музыка йәмәғәтселеге иғтибарын йәлеп итә. Уның хаҡында «Русская музыкальная газета» (СПб., 1916, № 7) һәм «Тормош» (Өфө, 1916, 4 март) гәзите яҙып сыға. Йыйынтыҡҡа индерелгән ун көйҙөң тәүге икеһе — «Салауат» тураһындағы башҡорт халыҡ көйҙәренең киң танылған варианттары. Артабан тарихи башҡорт халыҡ көйө «Каруанһарай» (№ 3), дүртенсе итеп «Көйөргәҙе» көйө урынлаштырылған. 5-се көй «Ҡарлығанҡай» тип атала. Был әҫәр «Ҡарғалы көйө» (№ 9) һәм «Омский» (№ 10) тигән көй менән бер үк типта булһа кәрәк. 6-сы көйҙөң исемен «Кәбән өҫтө» тип уҡырға мөмкин. 7-се көй — «Уңған ирҙәр». Л.П. Атанова уны жанр йәһәтенән марш тип атай һәм башҡорт халҡының тарихи «Бүгәсәү» йәки «Оло юл» («Оло юлдың туҙаны») көйҙәре менән оҡшаш, тип иҫәпләй. «Еҙнәкәй» (№ 8) иһә, шул уҡ авторҙың фекеренсә, башҡорттоң етеҙ темплы типик ҡыҫҡа көй өлгөһө.

«Мансур Солтанов, — тип билдәләй Л. П. Атанова, — үҙенең барлығы ун

ғына көйҙән торған кескенә йыйынтығында үҙ дәүерендәге инструменталь халыҡ музыкаһының репертуар өлгөһөн биреүгә өлгәшкән. Халыҡ көйҙәрен һәм уларҙы башҡарыу үҙенсәлеген билдәләү йәһәтенән М. Солтанов юғары профессиональ культураға өлгәшкән музыка белгесе һәм башҡарыусы булараҡ күҙ алдына баҫа. Йыйынтыҡҡа ингән көйҙәр, жанр күҙлегенән төрлө һәм яңғыраштары менән индивидуаль булыуҙарына ҡарамаҫтан, күбеһенсә дөйөм интонацион-ритмик үҙенсәлектәре, башҡарыу манераһының уртаҡлығы йәһәтенән айырылып тора. Шуның өсөн дә М. Солтановтың йыйынтығы XX быуат баштарындағы башҡорт музыка фольклорының ҡиммәтле бер ҡомартҡыһы иҫәпләнә».

Бынан бер быуат элек үк махсус юғары белемле күренекле профессиональ музыкант, халҡыбыҙҙың музыкаль фольклорын йыйыусы булып танылған Мансур Ислам улы Солтановтың исеме милли мәҙәниәтебеҙ тарихында ғәйәт күркәм урында тора.

* * *

[1] Атанова Л.П. Собиратели и исследователи башкирского музыкального фольклора. Уфа, 1992. 140-сы бит.

[2] Народное творчество башкир. Өфө, 1976. 160—167-се биттәр.

* * *

Әҙәбиәт: Атанова Л.П. Собиратели и исследователи башкирского музыкального фольклора. Уфа. 1992, 138—144-се биттәр; Юмагузин В. Мансур Солтанов — первый профессиональный музыкант из башкир // Ватандаш. 1996, № 2, 168—173-сө биттәр.

## Һибәтулла Мәсәғүтов
(1880—1933)

Һибәтулла Мәсәғүтов — Башҡортостандың 20—30-сы йылдар тарихында күренекле урын алған легендар халыҡ ҡаһарманы. Ябай крәҫтиән ғаиләһенән сыҡҡан, быуат башындағы рус-япон, һуңынан беренсе донъя һуғышы ялҡындарында сыныҡып, үҙенең артабанғы ғүмерен тулыһынса туған халҡына фиҙаҡәр хеҙмәт итеүгә арнаған шәхес.

Һибәтулла Ғибаҙулла улы Мәсәғүтов 1880 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Мораптал олоҫо (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы) Яҡут ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ғаиләлә биш малай, бер ҡыҙ үҫә. Ир балаларҙың иң олоһо — Һибәтулла. Барыһы ла ауыл мәҙрәсәһендә белем ала. Яҙға сығыу менән, оҙон йәйҙән алып ҡара көҙгә тиклем, билде биштән быуып, ауыр крәҫтиән хеҙмәте менән йәшәйҙәр. Һомғол буйлы, зирәк аҡыллы, уйсан тәбиғәтле һөйкөмлө егет булып үҫеп етә Һибәтулла. 1903 йылда ата-әсәһе Һибәтуллаға Түбәнге Мотал ауылынан кәләш әйттерә. 1904 йылда япон һуғышы сығып, өйҙәренә килен төшөрөргә лә өлгөрмәҫтән, Һибәт Мәсәғүтов һалдатҡа алына, Порт-Артурҙағы һәләкәтле һуғыштарҙа ҡатнаша. 1905 йылда, үҙе һуғышта саҡта, ҡыҙы тыуа. Фронтта алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы башҡорт Шәриф Манатов менән дуҫлаша. Ҡаты яраланғас, уны Һибәт Мәсәғүтов үлем хәленән ҡотҡара. Һуғышта йөрөгәндә бик яҡшы итеп рус телен өйрәнеп ала.

1906 йылда һуғыштан ҡайта. Ҡатыны Хөббөниса Түбәнге Моталда үҙен аҫрап үҫтергән ағаһы йортонда торған була. Ҡатынын, үҙе киткәс тыуып, инде тәпәй баҫҡан ҡыҙын Яҡутҡа алып ҡайта. Матур ғына донъя көтә башлайҙар. Баш балалары Ғәлимәнән һуң бер-бер артлы тағы ла Ғәлиә, Сайма исемле ҡыҙҙары тыуа. Артабан уның ҡыҙы Ғәлиә Мәсәғүтованың иҫтәлектәренә мөрәжәғәт итәйек:

«Шулай һәйбәт кенә ғүмер иткәндә, 1914 йылда герман һуғышы ғәрәсәте ҡупты. Бер өй эсенән өс ағай-эне китте: атайым, Ғарифулла ағайым, Сафиулла ағайым, йәғни атайымдың бер туған энеләре. Улар китте, бай малайҙары ҡалды. Аҡ билет бирелгән, тинеләр.

Өс бала менән ҡалды әсәйем. Атайым киткәс, тағы бер һеңлебеҙ тыуҙы... Әсәйем ҡыш буйы ауылдың һалдаткаларына кейем тегеп (уҡыу-яҙыуға ла, һәр төрлө һөнәргә лә оҫта кеше ине), беҙҙе нисек етте шулай туйындырып торҙо.

Аҙаҡ, һуғыш тураһында һораша башлаһаҡ, атайым беҙгә бер ваҡиға тураһында һөйләр ине: «Мына бер урынға барып туҡтағас, командир: анауында бәрәңге үҫеп ултыра, алып килегеҙ, ти. Киттек бер иптәш белән. Беҙ барып, күп

итеп бәрәңге алып, инде әйләнһәк, беҙҙең ҡалған иптәштәр өҫтөнә снаряд килеп төштө лә барыһы ла ҡырылдылар ҙа бөттөләр. Мына мин һеҙҙең бәхетегеҙгә ҡайттым», — тигән булыр ине.

Атайымдың ике энеһе лә — Сафиулла ағайым да, Ғарифулла ағайым да — әйләнеп ҡайта алманы. Сафиулла ағайым бик шәп гармунсы ине. Һуғышҡа кергәс, бер стражниктың гармунын алып, уйнап йөрөгән, һалдаттарҙың күңелен асҡан. Мин үҙем дә гармунда уйнайым. Беҙҙең нәҫел - гармунсылар».

1916 йылда Һибәт Мәсәғүтов, ҡаты яраланып, Ырымбурға госпиталгә оҙатыла. Аҙмы-күпме һауығып, хәл йыйыу менән, тағы фронтҡа китә. Ун етенсе йылдың февраль инҡилабын ул окоптарҙа ҡаршылай. Октябрь көндәрендә Петроградта була. Аҡ гвардиясыларға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша.

1918 йылда Һибәт һалдат винтовкаһы, туп-тулы патронташы менән тыуған ауылына ҡайтып төшә. Ярлылар, батрактар, байҙарҙың ҡотҡоһона, ҡурҡытыуҙарына ҡарамаҫтан, Яҡутта ауыл Советы ойошторалар. Уның беренсе рәйесе итеп Һибәтулла Мәсәғүтовты һайлап ҡуялар. Властар алмашынып торған ул заманда ниндәй генә хәүефтәр янамай халыҡҡа. 1918 йылдың аҙаҡтарында ауылға аҡтар килеп, Советтарҙа эшләүселәрҙе тотоп ата башлай. Һибәт Мәсәғүтов урам аша мулла ҡарттың аҙбарына йәшенеп, ҡотолоп ҡала. 1920 йылда кооперацияға ойошалар. Күпме хәстәрлектәр, борсолоуҙар төшә кооперация етәксеһенә. Халыҡ тоҙға, шырпыға, кәрәсингә интегә. Тирә-яҡта — дутовсылар. Бер мәлде, ана шул кәрәк-яраҡты табып булмаҫмы, тип, ат егеп, Орскиға китәләр. Һибәт Мәсәғүтовты дутовсылар тотоп, ултыртып ҡуялар. Ике ай төрмәлә ултырып, өҫ-башы туҙып, хәлдән тайып ҡайтып керә. Ул атырға хөкөм ителгән була. Ҡалаға ҡыҙылдар килеп кермәһә, ҡотола алмаған булыр ине.

Тормош бер аҙ тыныҫланыу менән, Һибәт Мәсәғүтов ил, халыҡ мәнфәғәте өсөн тағы ла ең һыҙғанып эшкә тотона. Бер мәлде ауылға Ғөбәй Дәүләтшин килеп төшә. Уҡытыусылар кәрәк, үҙебеҙҙең яңы дәүер уҡытыусылары, өҫ-башығыҙҙы ҡарайбыҙ, ашатабыҙ, тип йәштәрҙе уҡырға димләй. Һибәт Мәсәғүтов, ауыл йәштәрен йыйып, уҡытыусылар курсына ебәрә. Улар араһында үҙенең ике ҡыҙы — Ғәлимә менән Ғәлиә лә була. Шул уҡ йылдың көҙөндә улар Ырымбурҙың Каруанһарай бинаһында урынлашҡан Башҡорт халыҡ мәғарифы институтына (артабан — Башҡорт педагогия техникумы) барып урынлаша.

«1921 йылда ҡот осҡос ҡоролоҡ булды, — тип хәтерләй Һибәт ағайҙың ҡыҙы Ғәлиә Мәсәғүтова. — Халыҡтың сәсергә орлоғо, һөрөргә аты ла юҡ. Аслыҡ башланып китте. Ауыл халҡы, бала-саға ҡырыла. Яҡутта өс йөҙ йорттан яртыһы буш ҡалды. Йәйен алабута, кесерткән менән туҡланып, көҙөн булған ғына малдың уныһын да ашап бөттөк. Бына шул саҡта хөкүмәт ауылда ашхана асып,

атайымды мөдир итеп ҡуйҙылар. Иҫән ҡалғандарҙы астан үлтермәҫ өсөн бөтөн көсөн һалды атайым. Үҙенә бер грамын да алмаҫ ине. Һәр кемде норма менән ашатып, аслыҡтан һаҡлап алып ҡалды».

1922 йылда Һибәт Мәсәғүтовты олоҫтоң үҙ-ара ярҙам кассаһы рәйесе итеп ҡуялар. Ирҙәре һуғышта һәләк булған һалдаткаларға ул бик күп матди ярҙам күрһәтә. Ул йылда иген ишелеп үҫә. Һибәтулла Мәсәғүтовтың да шатлығы ҙур: уның биләмәһендә уңыш айырыуса юғары була. Алдынғы крәҫтиәнде Мәскәүгә, илдең беренсе ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ебәрәләр. Был ваҡиға ябай ауыл эшсәненең тормошона һәм яҙмышына көтөлмәгән үҙгәрештәр алып килә. Күргәҙмәлә Совет хөкүмәте етәкселәре менән осраша. Оҙон буйлы, киң күкрәкле, ҡалын ҡара мыйыҡлы, күк күҙле, аҡыллы ҡарашлы башҡорт крәҫтиәне Мәсәғүтов М.И. Калининдың иғтибарын йәлеп итә. Тәүге осрашыуҙа уҡ бик ҡыҙыҡлы әңгәмә булып ала. Калинин Башҡортостанда крәҫтиәндәрҙең нисек йәшәүе тураһында һораша, Һибәт һалдаттың һуғышта ҡайһы фронттарҙа йөрөүе менән ҡыҙыҡһына. Үҙенең дә крәҫтиән ғаиләһенән булыуы, балалары тураһында һөйләй. Күргәҙмәнән ҡанатланып, өр-яңы хыялдар менән илһамланып ҡайта Һибәтулла Мәсәғүтов. Унан ҡайтыуы ауыл халҡы өсөн дә оло байрамға әйләнә. Уға, халыҡҡа ярҙам ит, тип, сәскес, косилка, ат тырмаһы биреп ҡайтаралар. Ошо ваҡиғаларҙан һуң Һ.Ғ. Мәсәғүтов бөтөн тирә-яҡта халыҡ араһында тағы ла ҙурыраҡ абруй ҡаҙана. Ә оҙаҡламай Советтарҙың V Бөтөн Башҡортостан съезында уны Советтарҙың III Бөтөн Союз һәм XII Бөтөн Рәсәй съездарына делегат итеп һайлайҙар. Һибәт һалдатты тормош юлдары яңынан Мәскәүгә алып килә. Унда Һибәтулла Мәсәғүтов Рәсәй Федерацияһының һәм СССР-ҙың иң юғары власть органдарына ағза итеп һайлап ҡуйыла. Бына ул хаҡта архив материалдары нигеҙендә билдәләнгән мәғлүмәттәр:

Һ.Ғ. Мәсәғүтов 1925—1927 йылдарҙа Башҡорт республикаһынан XII саҡырылыш Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетының ағзаһы булды;

Һ.Ғ. Мәсәғүтов 1925—1927 йылдарҙа РСФСР-ҙан СССР-ҙың III саҡырылыш Үҙәк Башҡарма Комитетының ағзаһы булып торҙо.

Документтар йәнә шуны хәбәр итә:

1925 йылдың декабрендә Һ.Ғ. Мәсәғүтов Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетының һайлау комиссияһының эшендә ҡатнаша. 1926 йылдың 30 июнендә ул Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитеты Ойоштороу бүлегенең инструкторы итеп раҫлана. Шул уҡ йылдың 5 авгусында Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетына эшкә ҡайта. 1927 йылда Мәскәүҙән уны, СССР-ҙың Үҙәк Башҡарма Комитеты ағзаһы буларaҡ, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһенә командировкаға ебәрәләр. Мөһим хөкүмәт йөкләмәһен үтәү өсөн ярты йыл

буйы алһыҙ-ялһыҙ эшләй Һибәтулла Мәсәғүтов.

Үкенескә ҡаршы, Һибәт һалдаттың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында документаль сығанаҡтар аҙ һаҡланған. Әммә бик тә ҡәҙерле, ысын-ысынында тарихи фоторәсем ҡалған: унда Совет дәүләтенең күренекле эшмәкәре, Бөтөн Союз старостаһы Михаил Иванович Калининдың эргәһендә илебеҙҙең юғары дәүләт органында Башҡортостан крәҫтиәндәренең вәкиле булған Һибәтулла Ғибаҙулла улы Мәсәғүтов төшкән. Был тарихи фото 1926 йылда төшөрөлгән. М.И. Калинин башҡорт халҡының был һоҡланғыс вәкиленә ҙур хөрмәт билдәһе йөҙөнән бергә төшкән ул фотоға.



Һ.Ғ. Мәсәғүтов һәм М.И. Калинин. 1926 йыл.

Һибәт Мәсәғүтов үҙенең эшмәкәрлеге менән ысын-ысынында халыҡтың мөхәббәтен ҡаҙана. Ә уның киң күңеллеге, ихласлығы тураһында Яҡут ауылында оҙаҡ ваҡыттарҙан һуң да һағынып һөйләйҙәр.

Мәскәүҙән ҡайтып төшһә, иң элек бала-сағаны йыйып алыр була. Уҡыу китаптары, ручкалар, ҡәләмдәр, дәфтәрҙәр — уҡыусыларға уның бүләге. Яҡутта Һибәт һалдаттың ике йәшник тултырып яулыҡтар тейәп ҡайтып, әбей-һәбейгә, ҡыҙ-кырҡынға таратып биреүе тураһында ла хәтерләйҙәр. Ә бына 1928 йылда булған бер эпизод. Ауылдың мәктәбенә мейес сығартырға кәрәк. Мәктәптең аҡсаһы юҡ. Һибәт Мәсәғүтов, ике апайға үҙенең танаһын биреп, мейес сығарттыра. Байрамғолова Разия һәм Дауытова Ғәзизә апайҙар был хаҡта аҙаҡ бик йыш иҫкә ала торған булалар.

Үҙе ҡайҙарға ғына барып, ниндәй генә яуаплы эштәр атҡарып ҡайтмаһын, уның ҙур ғаиләһе тыуған ауылында хәләл тирҙәрен түгеп, крәҫтиән тормошо менән йәшәй. Етмәһә, ауыл Советы рәйесенә ниндәй генә михнәттәр күрергә тура килмәй ул йылдарҙа. Егерме етенсе йылда хаслыҡ көсәүселәр Мәсәғүтовтарҙың аранына ут төртөп, малдарын яндыра. «Һарығы-ние беләнбарыһы ун ике баш мал, ҡаҙлар, тауыҡлар — бер нәмә ҡалмай янып бөттө, — ти Ғәлиә апай. — Икенсе йылда өйөбөҙгә ут төртөп, бөтөн китап, документларыбыҙҙы яндырҙылар».

Бер ваҡыт Һибәт Мәсәғүтов күрше рус ауылы Разномойкала сход үткәрә. Оҫта оратор булараҡ, һәр ике телдә — башҡортса булһынмы, руссамы — һыу кеүек ағылып ҡына тора уның телмәре. Халыҡҡа Советтарҙың Бөтөн Союз һәм Бөтөн Рәсәй съездарының ҡарарҙары тураһында һөйләй. Төнөн ҡайтырға сығалар. Бына шунда ҡараңғы мөйөштән уға һөжүм итәләр. Халыҡ йыйылып,

ҡотҡарып алғансы, Һибәт һалдатты ҡанға туҙҙырып туҡмап өлгөрәләр. Милиция килеп, ғәйеплеләрҙән дүрт кешене ҡулға ала. Икенсе көндө үк олоҫ үҙәгенән милиция, прокурор, судья килеп етеп, енәйәтселәр хөкөмгә тарттырыла. Уларҙың һәр береһенә яза ваҡыты билдәләнеп, судья приговор уҡығандан һуң, Һибәт Мәсәғүтов тороп, былай тип белдерә: «Мин Бөтөн Союз Үҙәк Башҡарма Комитетының ағзаһы булараҡ был кешеләрҙе ярлыҡауҙы һәм ирекка сығарыуҙы һорайым, сөнки мин үҙем дә крәҫтиән, ә улар наҙанлыҡ арҡаһында енәйәт юлына баҫҡандар. Мин иҫән-һау ҡалдым. Әйҙә улар илебеҙгә тоғролоҡ менән үҙҙәрен аҡлаһындар». Судтан һуң хөкөм ителеүселәр ирекка сығарыла. Уларҙың ҡатындары, балалары Һибәт Мәсәғүтовҡа илаша-илаша рәхмәт уҡыйҙар.

Оло һәм Бәләкәй Юшатыр, Көйөргәҙе буйҙарында ғына түгел, бөтөн яҡын-алыҫ яҡтарҙа Һибәт Мәсәғүтов тураһында халыҡ тәрән хөрмәт менән яратып һөйләр була. Инде хәҙер уны Һибәт һалдат түгел, бәлки, ҙурлап, Һибәт батша тип йөрөтә башлайҙар. Ләкин дан һәм хөрмәт башын әйләндермәй Һибәт һалдаттың. Был тәңгәлдә Һибәт Мәсәғүтов менән хатта мәҙәк кенә хәлдәр ҙә килеп сыға. Бер ваҡыт Ырымбурға хөкүмәт ағзаһы Мәсәғүтовтың килеүе тураһында хәбәр итәләр. Ҡаланың йәмәғәтселеге, Башҡорт педагогия техникумы студенттарын ойоштороп, лозунгылар, флагтар тотоп, вокзалға ҡаршы алырға баралар. Һибәт Мәсәғүтов Ырымбурға етмәҫ борон поездан төшөп ҡалып, йәйәүләп Крәҫтиәндәр йортона барып урынлаша, кисен техникумға килеп, студенттар менән осраша һәм былай тип аңлата: «Мин ябай крәҫтиән балаһы, Тыуған илемә ҡулымдан килгәнсә хеҙмәт итәм, әммә ул тиклем үк ҙурлап ҡаршы алыуға мин лайыҡ түгелмен».

Мәсәғүтовтар ғаиләһенең бер нисә ай Мәскәүҙә, шулай уҡ Аҡтүбәлә йәшәгән ваҡыттары тураһында айырым-асыҡ һөйләп үтмәһәк, беҙҙең хикәйәт тулы булмаҫ. Бына Сайма Һибәт ҡыҙы Мәсәғүтованың иҫтәлеге:

«Атайым 1925 йылда Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетының Һайлау комиссияһында эшләгән осорҙа әсәйем менән беҙҙе үҙе янына саҡырып алды. Ғәлимә апайым ауылда кейәүҙә, ә Ғәлиә апайым рабфакта уҡый ине, ул инде Өфөлә тороп ҡалды. Баш ҡалала беҙҙе Советтар йортоноң етәксе хеҙмәткәрҙәр ятағына урынлаштырҙылар. Өс ай йәшәнек беҙ унда. Кис һайын тип әйтерлек Советтар йортона М.И. Калинин, Н.К. Крупская килә. Улар үҙҙәренең иғтибарлы булыуҙары, ихлас мөнәсәбәттәре менән айырыуса хәтерҙә ҡалған. Надежда Константиновна ентекләп хәл-әхүәлде һорашыр, кәңәштәр бирер ине. Әсәйем, русса белмәһә лә, ғәжәп, уның һүҙҙәрен бик яҡшы аңлай торғайны. Мин инде ул ваҡытта комсомолка, русса аҙ-маҙ һупалаған булам. Н.К. Крупская әсәйемә йомшаҡ ҡына итеп кәңәш бирә:

— Хөббөниса әхирәт, һеҙҙең балаларығыҙға мотлаҡ уҡырға кәрәк. Бына Сайманы комсомол Үҙәк Комитетының курстарына уҡырға бирәйек. Әйҙә пионерҙар менән эшләргә өйрәнеп ҡайтһын, — ти».

Сайма Мәсәғүтова бер ай буйы пионер эштәре буйынса курсҡа йөрөй. Аҙаҡ ул үҙенең тыуған ауылында беренсе пионер отряды ойоштора.

Мәсәғүтовтар Мәскәүҙә төрлө иҫтәлекле урындарҙы күрәләр, СССР-ҙың Ҙур театрында «Евгений Онегин», «Сорочинск йәрминкәһе» һымаҡ спектаклдәр ҡарайҙар.

1927 йылда Һибәт Мәсәғүтов һәм Хөббөниса апай бәләкәй балалары менән алты ай буйы Аҡтүбә ҡалаһында йәшәй. Ғәлиә Мәсәғүтованың иҫтәлектәренән: «Ғәлимә апайым буденныйсы Ирназар еҙнәм белән ауылда йортто ҡарап торҙолар. Мин — Өфөлә. Атайым, әсәйем егерме һигеҙенсе йылдың башында ҡайтып, ауылда йәшәй башланылар».

Тыуған ауылы Яҡутта беренсе булып колхоз ойоштороу миссияһы ла Һибәт һалдаттың өлөшөнә төшә. Ошонда ул ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем арымай-талмай эшләй. 1933 йылда, 53 йәшендә, данлыҡлы башҡорт крәҫтиәне Һибәтулла Ғибаҙулла улы Мәсәғүтовтың йөрәге тибеүҙән туҡтай.

Бына шундай ғүмер юлы. Кешеләр күңелендә яҡты бер нур, күркәм хикәйәт, легенда булып ҡала Һибәт һалдаттың исеме һәм эштәре. Һибәт һалдаттың иҫтәлеге уның тыуған яғында һәр кемдең күңел түрендә йәшәй. Яҡут ауылында уның хөрмәтенә мемориаль таҡта ҡуйылған.

Һигеҙ бала үҫтерә Һибәтулла ағай һәм Хөббөниса апай: үҙҙәренең биш ҡыҙы, өс ир балалары, йәнә ауылда йәтим ҡалған Ильяс, Ғиниәт, Заһри, Ғәббәс исемле малайҙар. Был дүрт бала, Бикбаевтар, үҫеп етеп, дүртеһе лә Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк була. Ғәлимә апай вафат инде хәҙер. Ғәлиә, Сайма — Һибәтулла ағайҙың ҡылған сәсле ҡыҙҙары, шулай уҡ Асия, Мәмдүдә хәҙер пенсияла. Ғәлиә Мәсәғүтова бөтөн ғүмере буйы суд һәм прокуратура органдарында эшләй, Башҡорт АССР-ы Верховный судының ағзаһы була.

Ысын мәғәнәһендә халыҡ мәнфәғәттәре өсөн фиҙаҡәр хеҙмәткә арнай үҙ ғүмерен атаҡлы башҡорт крәҫтиәне һәм дәүләт эшмәкәре Һибәтулла Мәсәғүтов. Уның исеме ысын-ысынында юғары әхлаҡлылыҡ һәм инсафлыҡ, һәр ерҙә лә халыҡтан килгән оло аҡыллылыҡ һәм егәрлелек менән эш итә белеү өлгөһө булараҡ яңынан-яңы быуындар хәтерендә йәшәргә хаҡлы. Әгәр ҙә балаларыбыҙ һәм ейәндәребеҙ беҙҙән: «Башҡорттарҙың әхлаҡи йөҙөн кемдәр билдәләй?» – тип һораһалар, бүтән арҙаҡлы һәм хөрмәтле шәхестәребеҙ араһында, һис икеләнмәйенсә, уны ла милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе саф күңелле һәм оло аҡыллы шәхестәр рәтендә телгә алырға тейешбеҙ.

* * *

Әҙәбиәт: Филиппова М. Чтобы счастья хватило на всех // Революцией призванные. Уфа, 1985, 111—116-сы биттәр; Шәкүр Рәшит. Һибәтулла Мәсәғүтов // Шоңҡар. 1994, № 6, 140—141-се биттәр.

Таһир Байышев
(1886—1974)



Арҙаҡлы башҡорт лексикографы һәм диалектологы, халҡыбыҙ яҙмышы өсөн йән аямай көрәшеүсе оло йөрәкле патриот, һоҡланғыс интеллигент Таһир Ғәлләм улы Байышевты уның ғүмеренең һуңғы бер ун йыл эсендә миңә күреп, белеп йөрөргә, һирәкләп кенә осрашырға ла тура килгеләне. Иң ныҡ хәтерҙә ҡалғаны — минең 1965—1969 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһындағы осрашыуҙарым. Бер мәлде, мин әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире булып эшләй башлағас, ағайыбыҙ бер-бер артлы мәҡәләләр тотоп килә башланы. Редакцияла, әлбиттә, уның ниндәй кеше икәнлеген яҡшы беләләр, партияның Башҡортостан өлкә комитетында ла ҡайһы бер идеологтар Байышевҡа ғына түгел, беҙҙең һымаҡ йәштәргә лә милләтсе ярлығын тағып ҡуйған ине. Әммә таҡһа тағалар инде, уның ҡарауы, беҙ ҙә бит уларҙың ысын йөҙө ниндәй булғанлығын белеп торабыҙ. Шөкөр, яңы ғына Хрущев йылытыуы (хрущевская оттепель) тигән ҡыҫҡа бер осорҙо ла күреп өлгөргәнбеҙ. Уйында, фекереңдә, үҙ-ара серләшкән ваҡытта ғына булһа ла, милләтеңде яҡлау тойғоһо — ул бит иман һымаҡ. Байышев ағайҙың нәҡ ана шул, иҙелгән халыҡтың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәтен яҡлап, иң юғары инстанцияларға хаттар яҙыуы, 1957 йылдың 27 майында өлкә комитет бюроһында уның Үҙәк комитетҡа яҙған хаттарының береһе буйынса ултырыш үткәрелеп, хат авторының үҙ позицияһын яҡлап, ике сәғәт буйы сығыш яһауы һәм, ниндәй генә ышаныслы аргументтар килтереүенә ҡарамаҫтан, фекер алышыу ваҡытында япа-яңғыҙ тороп ҡалыуы, ләкин бынан һуң да, үҙенең иманына һәм инаныуҙарына тоғро ҡалып, оҙаҡ йылдарға һуҙылған тиңһеҙ көрәшен дауам итеүе тураһында ишетеп беләбеҙ. Дөрөҫ, ул күтәргән проблемаларҙың береһен дә, хатта төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теле, диалекты һәм шул региондағы башҡорттарҙы башҡорт телендә уҡытыу мәсьәләһенә арналған мәҡәләләрҙе лә был йылдарҙа әле бер генә мөхәррир ҙә гәзит битенә сығарырға баҙнат итмәҫ

ине. Әммә Таһир Байышев иң элек һәм бөтөн булмышы менән – телсе-лексикограф, диалектолог бит әле. Ғүмеренең иң ҙур өлөшөн халыҡтың һүҙ байлығын йыйыуға, өйрәнеүгә, ҙур-ҙур һүҙлектәр төҙөүгә, башҡорт теленең һөйләштәре һәм диалекттары өлкәһендә тикшеренеүҙәргә арнаған кеше. Таһир ағайҙың телгә, туған телебеҙҙең һүҙ байлығына арналған ҡыҙыҡлы мәҡәләләре гәзитебеҙ өсөн кәрәкле лә, ваҡытлы ла булып сыҡты. Нәҡ шул мәҡәләләр менән «Тел хикмәттәре» тигән рубриканы башлап ебәрҙек. Бына мәҡәләләренең береһен Таһир ағай халыҡ араһында телде өйрәнеү маҡсатында командировкала йөрөгән саҡтары тураһында мауыҡтырғыс юлъяҙма алымын ҡулланып яҙған. Ошондай эпизод та бар. Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында, Бөрйән районында булһа кәрәк, ауылдан ауылға күбеһенсә йәйәүләп тел өйрәнеп, һүҙ байлыҡтарын йыйып йөрөй ағайыбыҙ. Бына бер ауылдан икенсе ауылға уны бер үҫмер малай юл күрһәтеп, оҙатып бара. Бер тау йылғаһының суйыр таштар араһынан сылтырап ағып ятҡан һай урынына еткәс, аяҡ кейемдәрен сисеп, балаҡтарҙы төрөп, кисеп сығырға булалар. Йылғаның бындай урынын русса «перекат» тип йөрөтөлөүен ул белгән була. Әммә башҡортсаһы нисек? «Йылғаның бындай урындарын нимә тип атайҙар?» — тип һорай ул оҙатып килеүсе үҫмерҙән. «Беҙ бындай урынды «шаршы» тип атайбыҙ», — тип яуап бирә Бөрйән малайы. «Таптым бит: шаршы, шаршы!» — тип юл буйынса ҡабатлап барҙым», — тип иҫенә төшөрә Таһир Ғәләм улы. Был һүҙҙе лә, дөрөҫөрәге, географик терминды, лексикограф артабан шул көйөнсә русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлектәргә индереп ебәрә.

Мин әле был эпизод һәм, ғөмүмән, Таһир ағайҙың алда әйтеп үткән осорҙа «Совет Башҡортостаны»нда баҫылған мәҡәләләре тураһында махсус рәүештә хәтергә генә таянып һөйләйем. Ғәжәпләнеп тә ҡуям: дүрт тиҫтә йыл самаһы элек уҡып, унан һуң меңәрләгән бит текстарҙы мөхәррирләгәнмен, ә шул ҡулъяҙмалағы күп нәмәләр бөгөнгөләй хәтерҙә ҡалған. Әлеге мәҡәләгә мин, Вафа Әхмәҙиевтең шиғыр юлдарын файҙаланып, «Күңелебеҙ тулы нур ине» тигән исем ҡуйҙым, шул көйөнсә ул гәзит битендә донъя күрҙе. Күп ваҡыт үҙенә яҡлау таба алмай йөрөгән ағайыбыҙ өсөн был бик ҡыуаныслы булды. Ә бына «Урта быуаттарҙа уртаҡ яҙма телдәр» тигән мәҡәләлә Таһир Ғәләм улы иҫке төрки теленең, бүтән төрки халыҡтар менән бергә, дөйөм яҙма тел булғанлығын дәлилләп сыҡты. Был концепция һуңынан дөйөм танылыу һәм раҫлау тапты. Башҡорттарҙа яҙма тел, яҙма әҙәби тел һәм хатта әлифба ла, йәнәһе, Октябрь революцияһының емеше ул тигән иҫке ҡараштарҙан беҙ хәҙер тулыһынса ҡотолдоҡ. Ә совет осоронда ундай раҫлауҙар рәсми документтарҙа нығытылғайны. Әллә күпме ҡаршылыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, шундай шарттарҙа тел тураһында мәҡәләләрҙе яҙыу ҙа, гәзит битенә сығарыуға өлгәшеү

ҙә, һис һүҙһеҙ, ҙур ҡыйыулыҡ ине. Ә бит ул ваҡытта һикһән йәше тулып, туғыҙынсы тиҫтәһе менән барған өлкән йәштәге кеше, ысын мәғәнәһендә ил ғәмдәре менән йәшәгән ил ағаһы ине Таһир ағай.

Йәш тураһында һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтергә кәрәк. Таһир Ғәләм улы һаулыҡты һаҡлау йәһәтенән дә ысын-ысынында юғары тәрбиәле, сәләмәт тормош рәүешен һаҡлап йәшәүсе кеше ине. Һикһәнде уҙғас та ул йылына дүрт-биш ай буйы Ағиҙелдә һыу инә торған булған. Минең өсөн иһә уның йәшәгән еренең таҙалығын, бөхтәлеген, үҙенең иһә һәр ваҡыт ыҫпай, таҙа кейенеп йөрөүен күреү ҙә оло фәһем булды. Ул ваҡытта Таһир Ғәләм улы Дан бульвары тирәһендә, бәләкәй генә бер бүлмәле фатирҙа яңғыҙы йәшәй ине. Шунан ул оҙон баҫҡыс буйлап көн дә Ағиҙелгә төшөп йөрөй торған булған. Үкенескә ҡаршы, шул баҫҡыс буйлап төшкән сағында, тайып йығылып, имгәнгән ағайыбыҙ, шунан һуң ҡабат аяҡҡа баҫа алманы. Яҡты донъя менән хушлашҡанда уға 88 йәш ине.

Шулай итеп, хөрмәтле Таһир ағайҙы миңә уның ғүмеренең һуңғы бер ун йылы эсендә белеп, күреп йөрөргә, аҙмы-күпме аралашырға насип булды. Был ваҡытта инде ул оҙон һәм ҡатмарлы тормош юлы үткән кеше ине. Бына биографияһының төп моменттары:

Таһир Ғәләм улы Байышев 1886 йылдың 15 авгусында Өфө губернаһы Златоуст өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Дыуан районы) Хәлил ауылында тыуған. Ғәрәпсә хәреф танырға атаһынан һәм ағаларынан өйрәнә. Ауыл мәҙрәсәһен тамамлай. 1906—1909 йылдарҙа күршеләге Арый ауылы мәҙрәсәһендә башланғыс синыфтарҙа мөғәллим булып эшләй.

1909 йылда хәрби хеҙмәткә алына һәм Иркутск ҡалаһындағы артиллерия часына барып эләгә. Бында ул хәрби-фельдшерлыҡ мәктәбендә, артабан рота фельдшеры вазифаһында хәрби хеҙмәтен дауам итә. 1914 йылда башланған империалистик һуғыш фронттарында уға ла бик күп ыҙа сигергә тура килә. 1915 йылдың февралендә, яраланған һәм контузия алған хәлдә, һалдат Байышев әсирлеккә эләгә. Тиҙҙән ҡасып ҡотолоп, шул уҡ йылдың йәйендә тыуған ауылына ҡайтып төшә. Әммә 1916 йылдың башында йәнә яу ҡырына — был юлы Кавказ фронтына оҙатыла. 1917 йылдың Февраль һәм Октябрь революцияларын Иранда ҡаршылай. Ниһайәт, 1918 йылдың мартында тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайта.

Тормошоноң был осоро тураһында ул үҙе аҙаҡ ошолай тип яҙа: «...армия хеҙмәтенә минең йәш ғүмеремдең туғыҙ йылға яҡыны сарыф ителде. Был осор эсендә мин күп илдәрҙә — Монголияла, Польшала, Латвияла, Литвала, Германияла, Грузияла, Әзербайжанда, Әрмәнстанда булдым, ҡырҡтан артыҡ халыҡтың тормошо, мәҙәниәте һәм теле менән таныштым». Шул уҡ йылдар уға

рус телен өйрәнеү өсөн ысын тормош мәктәбенә әйләнә, буласаҡ тел белгесенең киң ҡарашлы, эрудициялы шәхес булып формалашыуына булышлыҡ итә.

Хәрби хеҙмәттән ҡайтыу менән Таһир Ғәлләм улы яңынан уҡытыусылыҡ эшенә тотона. 1925 йылда уҡытыусыларҙың Беренсе Бөтөн Союз съезына делегат итеп һайлана. Съездан һуң — Мәсәғүт кантоны халыҡ мәғарифы идаралығына, ярты йыл үтер-үтмәҫтән Башҡорт АССР-ы Халыҡ мәғарифы комиссариатына инспектор итеп үрләтелә.

1933 йылда (47 йәшендә) Т.Ғ. Байышев К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлексәһен тамамлай. Шул уҡ йылда Башҡортостан милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институтына ғилми хеҙмәткәр итеп эшкә саҡырыла. Бында ул (1951 йылдан — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты), 1957 йылда пенсияға сыҡҡанға тиклем, бөтөн ғүмерен фән, ғилем эшенә арнай, күренекле лексикограф һәм диалектолог булып танылa, 1950 йылда башҡорт диалектологтары араһында иң беренсе булып кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Т.Ғ. Байышев 1918 йылда уҡ, тыуған яғында яңынан уҡытыусылыҡ эшенә тотонғас, башҡорт теле һәм фольклор буйынса материалдар йыя башлай. Дөрөҫ, бигерәк тә уға милли мәктәптәр өсөн, башҡорт теле һәм әҙәбиәте менән бергә, тәбиғәт белемдәре, агрономия, география буйынса дәреслектәр әҙерләүҙә ҡатнашырға, руссанан башҡортсаға бихисап уҡытыу-методик ҡулланмалар тәржемә итергә — асылда, үҙе әйткәнсә, универсал булырға тура килә. Шул айҡанлы төрлө фән тармаҡтары буйынса терминдар эшләү һәм уларҙы тәү башлап әҙәби телгә индереп ебәреү бурысы ла төшә уның иңенә.

Институтта сирек быуатҡа яҡын ғилми хеҙмәткәр булып эшләү осоронда Таһир Байышевтың ғилми эҙләнеү һәм тикшеренеүҙәре төп ике йүнәлештә дауам итә һәм ғәйәт ҙур ҡаҙаныштар менән билдәләнә. Был — башҡорт тел белеменең лексикография һәм диалектология тармаҡтары. Ул йәмғеһе ун бер лингвистик экспедицияла ҡатнаша, экспедицияларҙың күбеһенә үҙе етәкселек итә. Уның үҙ ҡулы менән төҙөгән «Лингвистик экспедициялар картаһы»нан[1] күренеүенсә, 1928 йылдан алып 1946 йылға тиклем башҡорт телселәре 15 экспедиция ойоштorған. 1928—1929 йылдарҙағы тәүге лингвистик-фольклор экспедициялары, башҡорт тел белеменә нигеҙ һалыусы атаҡлы лингвист, профессор Н.К. Дмитриев етәкселегендә үткәрелгән. Был картала әле Т.Ғ. Байышев етәкселек иткән 1954 йылғы экспедиция күрһәтелмәгән. 1954 йылда башҡорт диалектологтары махсус рәүештә республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш районларындағы башҡорт ауылдарында фронталь тикшеренеү эштәре үткәрәләр һәм шул ваҡытта йыйылған материалдар артабан башҡорт диалектология фәненең үҫешендә мөһим роль уйнай.


ДИАЛЕКТОЛОГИЧЕСКАЯ КАРТА
СОВРЕМЕННОГО РАЗГОВОРНОГО ЯЗЫКА
БАШКИР,
составленная Т.Г. Баишевым
СССР


Т. Г. БАИШЕВ
БАШКИРСКИЕ ДИАЛЕКТЫ В ИХ ОТНОШЕНИИ К ЛИТЕРАТУРНОМУ ЯЗЫКУ
Издательство
Московского Университета
1955

Т.Ғ. Байышев башҡорттарҙың һәм типтәрҙәрҙең йәнле һөйләү телен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнә, экспедицияларҙа йыйылған материалдарҙы тик үҙенә генә хас ентеклелек менән эшкәртеп, системалаштырып бара. Һөҙөмтәлә башҡорт теленең һөйләштәр һәм диалекттар системаһын тәү башлап бөтөн тулылығында классификациялай һәм башҡорт теленең тулы диалектологик картаһын төҙөй. Был карта хәҙерге ваҡытта ла үҙенең ғилми әһәмиәтен юғалтмаған. 1940 йылда ул «Башҡорт теле диалекттары әҙәби телгә мөнәсәбәттә» («Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку») тигән монография яҙып бөтә. 1950 йылдың мартында шул монография нигеҙендә Мәскәү дәүләт университетында кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. (Ғилми етәксеһе СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, профессор Н.К. Дмитриев була.) Был күренекле хеҙмәт 1955 йылда МДУ типографияһында айырым китап булып баҫылып сыға. Башҡорт теленең диалекттарын автор ике төрлө принциптан сығып классификациялай: фонетик билдәләр буйынса ул ете территориаль һөйләш (шиүә, русса ул «наречие» тигән термин ҡуллана) бар тип күрһәтә. Улар: һ—ç һөйләше, ç һөйләше, һ һөйләше, ҙ—ç һөйләше, с һөйләше, ҙ һөйләше, п—т һөйләше; морфологик билдәләр буйынса башҡорт теленең көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш, йәғни өс диалекттан торғанлығын билдәләй.

Әйтергә кәрәк, башҡорт тел белемендә диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе классификациялау принциптары артабанғы осорҙарҙа үҙгәрешһеҙ ҡалманы. Беҙ хәҙер диалекттарҙы классификациялау мәсьәләһен фонетик йәки морфологик үҙенсәлектәрҙе айырым-айырым ҡулланып түгел, бәлки фонетик, морфологик һәм лексик билдәләрҙе комплекслы билдәләү нигеҙендә хәл итәбеҙ. Ләкин Т.Ғ. Байышевтың һөйләштәргә хас фонетик билдәләрҙе, шулай уҡ өс диалекттың да морфологик һыҙаттарын дөрөҫ һәм аныҡ күрһәтеүе фәндең үҫеше өсөн барыбер әһәмиәтле. Ә иң мөһиме — беҙҙең фәнебеҙҙә дүрт тиҫтә йыл буйы, йәнәһе, башҡорт теле ике генә диалекттан тора тигән хата ҡараштар өҫтөнлөк итеп килгәндән һуң, хәҙер бына яңы дәүерҙә, ниһайәт, Т.Ғ. Байышев билдәләгән өс диалект концепцияһы өр-яңы кимәлдә ғилми нигеҙләнде һәм ныҡлы яҡлау тапты. Хатта терминдар ҙа шул көйөнсә үк тип әйтерлек ҡабул ителде: көнсығыш диалект, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар тип атайбыҙ хәҙер. Был диалекттарҙың һәр береһе махсус рәүештә монографик планда тикшерелде. Т.Ғ. Байышев идеяларын дауам итеп, филология фәндәре докторы С.Ф. Миржанова 1970 йылдар аҙағында — «Башҡорт теленең көньяҡ диалекты»[2], 1990 йылдар башында «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты»[3] тигән монографик хеҙмәттәр баҫтырып сығарҙы. Унан аҙ ғына алдараҡ филология фәндәре докторы Н.Х. Мәҡсүтованың «Башҡорт теленең

көнсығыш диалекты»[4] исемле монографияһы донъя күргәйне. Профессор Н.Х. Ишбулатов та, ниһайәт, 2000 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «Башҡорт теле һәм уның диалекттары» тигән хеҙмәтендә башҡорт теленең өсөнсө — төньяҡ-көнбайыш диалектын яҡтыртыуға ҙур ғына урын бүлгән.

Хәйер, һуңғы осорҙа татар телселәре араһында башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын танымаҫҡа өндәп сығыш яһаусылар ҙа күренгеләп ҡалды ҡалыуын. Ләкин уларҙың ынтылышы көн кеүек асыҡ: нисек тә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын ассимиляциялауҙы дауам итмәксе улар. Беҙ үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙҙы асыҡтан-асыҡ билдәләгәнбеҙ: ҡайһы тарафта йәшәүенә, ниндәй диалектта һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, башҡорт барыбер башҡорт булып ҡала, уларҙың барыһын да беҙҙең милли әҙәби телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, рухиәтебеҙ, тарихи тамырҙарыбыҙ берләштереп тора.

Арҙаҡлы ғалим Таһир Байышев уҙған быуаттың 40—50-се йылдарында уҡ башҡорт теленең нәҡ бына ошо өс диалекттан торғанлығын яҡлап сыҡты һәм күп йылдар буйы халҡыбыҙҙың көнбайыш (хәҙергесә әйтһәк — төньяҡ-көнбайыш) диалектында һөйләшеүсе төбәктәрҙә башҡорт балаларын башҡорт телендә уҡытыу өсөн көрәш алып барҙы. Мәсьәләне хәл итеүҙең тағы бер варианты буларaҡ, ул башҡорт теленең өсөнсө диалекты нигеҙендә икенсе әҙәби тел булдырыу идеяһын тәҡдим итеп ҡараны. Һәр хәлдә, нисек кенә булмаһын, төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүсе башҡорттарға әлдән-әле йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итергә тырышты. Халҡыбыҙҙың милли әҙәби тел нигеҙендә консолидацияланыу идеялары, ниһайәт, яңы дәүерҙә, мөстәҡиллек шарттарында, бойомға ашырыла башланы. Ә инде диалектология фәнендә беҙ нәҡ ана шул Т.Ғ. Байышев билдәләгән өс диалект идеяһына таянып эш итәбеҙ. Был иһә башҡорт милләтенең тел һәм рухиәт йәһәтенән бер бөтөн булып ойошоп йәшәүе һәм үҫеүе өсөн нигеҙ булып тора.

Т.Ғ. Байышевтың башҡорт лексикографияһын үҫтереүгә индергән хеҙмәт өлөшөн тулыһынса баһалап бөтөү мөмкин дә түгелдер, моғайын. Ҙур милли һүҙлектәрҙе төҙөү, ғәҙәттә, тел белгесенең, кәм тигәндә, тиҫтәләрсә йылдар ваҡытын алған ғүмерлек эшенә әйләнә. Боронғо төркиҙәрҙә Мәхмүт Ҡашғари, рустарҙа В.И. Даль һымаҡ, быуаттарҙан быуаттарға ҡалырлыҡ бөйөк һүҙлектәр төҙөп, фән тарихында үҙҙәренең исемдәрен ысынлап та мәңгеләштергән атаҡлы лексикографтар бар. Ундай шәхестәр тарихта, әлбиттә, һирәк күренеш. Ләкин шулай ҙа Таһир Байышев тураһында нәҡ ана шул Ҡашғари, Даль тибындағы лексикограф булған тип әйтә алабыҙ. Сөнки уның өсөн һүҙлек төҙөү, халыҡ араһында йөрөп, һүҙ байлыҡтарын йыйыу һәм туплау — намыҫ эше, оло бер миссия, милләткә, милли рухиәтте үҫтереүгә хеҙмәт итеү ынтылышы. Бер генә

түгел, совет осорондағы иң беренсе ике ҙур лөғәтте — «Русса-башҡортса» һәм «Башҡортса-русса» һүҙлектәрҙе төҙөүҙә төптән егелеп ҡатнаша Таһир Ғәлләм улы. Уларҙың тәүгеһе — 1948, икенсеһе 1958 йылдарҙа нәшер ителә. Заманында республикабыҙҙың мәҙәниәт тормошондағы әһәмиәтле ваҡиға булараҡ баһалана был һүҙлектәрҙең донъяға сығыуы.

Һүҙлектәр беҙҙең дәүерҙә, билдәле булыуынса, коллектив хеҙмәт булараҡ, күмәк көс менән барлыҡҡа килтерелә. Әле атап үткән лөғәттәр өҫтөндә лә төҙөүселәр коллективы эшләгән. Йәнә килеп, һүҙлекте әҙерләүҙә редакцион коллегия, мөхәррирҙәр ҡатнаша, рецензенттар ҡалын-ҡалын ҡулъяҙмаларҙы уҡып, тикшереп, рецензиялар яҙа. Әммә, шулай булғанда ла, мисәүҙәге аттар араһындағы кеүек төптән егелеп тартыусыһы ла кәрәктер шул инде. Был ике ҙур лөғәтте төҙөүҙә, мөхәррирләүҙә һәм донъяға сығарыуҙа Т.Ғ. Байышев нәҡ ана шундай үҙәк фигура булған тип иҫәпләргә тулы нигеҙ бар. Әйтәйек, 960 биттән торған 1948 йылғы «Русса-башҡортса һүҙлек»тә ул төҙөүселәрҙең береһе һәм, Н.К. Дмитриев, Ҡ.З. Әхмәров менән бергә, редколлегия ағзаһы тип күрһәтелгән. Ләкин бына китапты баҫып сығарыуға әҙерлек осоронда булып үткән драматик ваҡиғалар Т.Ғ. Байышевҡа, төҙөүсе һәм мөхәрририәт ағзаһы ғына түгел, бәлки һүҙлекте төҙөү осоронда үҙе халыҡ араһында йөрөп йыйып алып, индереп ебәргән һүҙ байлығын һаҡлап алып ҡалыу, йәғни үҙенең принциптарын яҡлау өсөн ауыр көрәш юлын үтеүе тураһында ла һөйләй. Ул хаҡта Таһир Ғәлләм улы үҙенең күп һанлы хаттарының, мөрәжәғәттәренең береһендә бәйән ҡыла. «Башҡортостанда тел төҙөлөшөнөң ҡайһы бер мәсьәләләренә ҡарата» («К некоторым вопросам языкового строительства в Башкирии») тип аталған рус телендә яҙылған хеҙмәттә Т.Ғ. Байышев менән бергә һүҙлекте төҙөүҙә ҡатнашыусы Ҡ.З. Әхмәров, уны башҡорт телен архаизмдар менән сыбарлауҙа ғәйепләп, фаш итмәксе була. Мәсьәлә, әмәлгә ҡалғандай, өлкә комитетҡа барып етә. Ә өлкә комитет ундай ваҡытта һиҙгерлек күрһәтмәй ҡаламы һуң! Ғалимдарҙың береһенә, баҫырға әҙерләнеп ятҡан ҡулъяҙма менән танышып, уның яҙмышын хәл итеү бурысы йөкмәтелә. Ҡушҡанды үтәй өлкә комитет эмиссары: Мәскәүҙә бер ай буйы ятып, «Һүҙлеккә Байышев хәҙерге башҡорт телендә булмаған бик күп һүҙҙәрҙе индергән», «ғөмүмән, һүҙлек үтә насар төҙөлгән, шулай уҡ үтә насар мөхәррирләнгән», «был эштә партиялы ҡараш үткәрелмәгән, сөнки уның мөхәррирҙәренең береһе лә партиялы түгел», «шул сәбәпле һүҙлекте был көйөнсә донъяға сығарырға ярамай, уны кире ҡағырға һәм яңы һүҙлек төҙөй башларға кәрәк» тигән һығымта яһай. Ләкин, бәхеткә, нәшриәт мөхәррирҙәре Башҡортостан өлкә комитетының эмиссарына ышанмайҙар һәм Н.К. Дмитриевҡа мөрәжәғәт итергә булалар. Башҡортостанды һәм башҡорт халҡының яҙмышын яҡшы

белгән, Т.Ғ. Байышевты телсе булараҡ юғары баһалаған Николай Константинович был хәлде бик тиҙ аңлап ала. «Мин Байышевҡа ышанам. Ул башҡорт теленең үҙ урынында бер Дале. Даль үҙенең «Аңлатмалы һүҙлегенә» индергән һүҙҙәр уның ваҡытында бер ниндәй ҙә архаизм булмағандар. Һүҙлеккә Байышев индергән һүҙҙәр ҙә беҙҙең дәүер өсөн бер ниндәй ҙә архаизм түгелдәр... Шуға күрә... Байышев индергән һүҙҙәрҙе алып ташламағыҙ, «Русса-башҡортса һүҙлек»те тулы күләмендә сығарығыҙ», – тип яуап бирә Н.К. Дмитриев. Мөхәррирҙәр һүҙлекте нисек әҙерләнгән, шул көйөнсә донъяға сығаралар. Хеҙмәткә, әйткәнебеҙсә, юғары баһа бирелә. Кемдер архаизм, иҫкелек ҡалдығы тип ғәйепләргә тырышҡан һүҙҙәр әҙәби телебеҙҙең дөйөм байлығына әйләнә.

1958 йылда донъя күргән «Башҡортса-русса һүҙлек Т.Ғ. Байышев өсөн айырыуса ҡәҙерле хеҙмәттәрҙең береһе булғандыр тип иҫәпләйем. Һүҙлекте төҙөүҙә ул Ҡ.З. Әхмәров, Ә.М. Бикмурзин, У.М. Ҡәйүмова, Б.С. Сөйәргәлиев, Р.П. Тереғолова менән бергә эшләй. Һүҙлек ғәжәп бай күркәм килеп сыға. Барлығы 22000 һүҙ – башҡортсанан русаға тәржемә ителгән һүҙлек өсөн ул заманда был бик күп, әлбиттә. Совет осоронда бындай типтағы иң тәүге, ғәйәт тулы лөғәт була ул. Бик оҙаҡ – ярты быуатҡа яҡын — халҡыбыҙға хеҙмәт итә 1958 йылғы һүҙлек. 32000 һүҙҙән торған, хәҙерге осорҙа иң яңы «Башҡортса-русса һүҙлек» 48 йыл үткәс, 1996 йылда баҫылып сыҡты.

Бында әле беҙ айырыуса күренекле ике ҙур лөғәт тураһында ғына һүҙ алып барҙыҡ. Унан тыш, күпме терминологик һүҙлектәр төҙөүҙә ҡатнаша, күпмеһенең ғилми мөхәррире була Т.Ғ. Байышев. Йөҙҙәрсә табаҡ күләмендәге дәреслектәр, уҡыу әсбаптары тәржемә итеүен, башҡорт диалектология фәненә ғилми нигеҙ һалыу юлында күрһәткән хеҙмәттәрен һәм башҡаларҙы иҫәпкә алғанда, тау хәтлем эштәр атҡара Таһир Ғәлләм улы. Мәшһүр тел белгесе Н.К. Дмитриевтың уны Даль менән сағыштырыуы ла аңлашыла. Ундай шәхестең, үҙ фәне менән генә сикләнмәйенсә, милләт яҙмышы өсөн борсолоп, бик нескә иҫәпләнгән милли мәсьәлә сфераһында үҙ фекерен белдерергә, ил һәм республика етәкселеге алдына үҙенең талаптарын ҡуйырға тулыһынса мораль хоҡуғы булғанлығына инанаһың.

Таһир Байышевты беҙ талантлы һәм киң ҡарашлы ғалим, халҡыбыҙ мәнфәғәттәре өсөн көрәштә оло фиҙәкәрлек күрһәткән үҙенсәлекле бер фекер эйәһе булараҡ хөрмәт менән иҫкә алабыҙ. Ғалим үҙ ваҡытында Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1949), Башҡорт АССР-ы Юғары Советының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнде.

* * *

[1] Баишев Т.Г. Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. М., 1955: ҡушымта.

[2] Миржанова С.Ф. Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979.

[3] Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа, 1991.

[4] Мәҡсутова Н.Х. Восточный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1976.

* * *

Әҫәрҙәр: Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Под редакцией члена-корреспондента АН СССР, профессора Н.К. Дмитриева. М.: Изд-во Московского университета, 1955; Поговорим о топонимике и топонимических названиях // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1961, № 4. 38—41-се биттәр; Саратов һәм Куйбышев өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттарҙың һөйләше буйынса ҡайһы бер материалдар // Вопросы башкирской филологии. М., 1959.

Әҙәбиәт: Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Баш мөхәррире Р.З. Шәкүров. Өфө, 1997; Шафиков Г. Непокорное одиночество научного Робинзона // Дыхание жгучее истории. Уфа: Китап, 1998. 100—144-се биттәр; Курманаева А. Непризнанный патриот // Истоки. 2005, 10 август.

## Нуриағзам Таһиров
## (1888—1938)

Башҡорт халҡының 1917—1920 йылдарҙағы бөйөк милли-азатлыҡ хәрәкәте осоронда, донъяның ут эсендә ҡалған хәүефле бер дәүерендә, тарих аренаһына береһенән-береһе талантлыраҡ һәм арҙаҡлыраҡ, изге башҡорт илен, ғәзиз милләтебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу өсөн йәнен-тәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған тотош бер плеяда дәүләт, хәрби һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, оло аҡыл эйәләре күтәрелеп сыға. Был дәүерҙең атаҡлы тарихи шәхестәре хаҡында һүҙ барғанда беҙ, ғәҙәттә, иң элек Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин, Әбделҡадир Инан, Мөхәммәтхан (Мстислав) Ҡулаев һымаҡ исемдәрҙе телгә алабыҙ. Әммә ошо атаҡлы эшмәкәрҙәр менән бергә, иңгә-иң терәп, Башҡортостандың ирке, азатлығы өсөн көрәшеп һәләк булған тағы ла күпме аҫыл заттарыбыҙ тарих төпкөлдәрендә онотолоп ҡалыуға дусар ителгән. Ә бит, әйтәйек, Сәғит Мираҫ йәки бына Нуриағзам Таһиров башҡорт автономияһы өсөн көрәштә лә, аҙаҡ, Совет власы урынлашҡас, милләтебеҙҙең телен, мәҙәниәтен үҫтереү юлында, республикала фәнде, ғилми-тикшеренеү эштәрен башлап ебәреүҙә лә ҡаһармандарса хеҙмәт күрһәткән күренекле эшмәкәрҙәр. Башҡортостан мәҙәниәтендәге был йондоҙҙарҙы яңынан асаһы, уларҙың эштәренә өр-яңы юғарылыҡтан сығып баһа бирәһе бар әле. Үкенескә ҡаршы, беҙ улар хаҡында әле һаман да бик аҙ беләбеҙ.

Башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре, атаҡлы тел һәм ил белгесе, хоҡуҡ һаҡлаусы Нуриағзам Таһиров — нәҡ ана шундай оло тарихи шәхестәребеҙҙең береһе.

Нуриағзам Таһир улы Таһиров 1888 йылдың 9 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙер Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Ҡужа (хәҙер русса Левашево тип йөрөтөлә) ауылында тыуған. Тыуған ауылында рус-башҡорт мәктәбен тамамлай, 1906 йылға тиклем Троицкиҙа «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Бында ул шәкерттәрҙең ҡәҙимселек хәрәкәтенә ҡушыла, 1906 йылда иһә, Рәсәйҙең Беренсе Дәүләт Думаһына һайлауҙар ваҡытында мәҙрәсәлә уҡыусы йәштәрҙең митингыһын ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, полиция эҙәрлекләүенә эләгә һәм башта Силәбегә, унан алыҫ Себер төбәгендәге Иркутскиға ҡасып китә. Артабан ул — Өфөнөң киң билдәле «Ғәлиә» мәҙрәсәһе шәкерте. Бында ул Ғәлимйән Ибраһимов, Хәбибулла Ғәбитов, Сәғит Мираҫ һымаҡ буласаҡ башҡорт һәм татар эшмәкәрҙәре менән аралаша. 1911 йылда, мәҙрәсәне тамамлап, тыуған төбәге — Арғаяш яҡтарына уҡытыусы булып ҡайта. Уҡытыу эшендә шул уҡ йәдитселек идеяларын алға һөрә, яңы мәктәптәр асыуға өлгәшә. Нәҡ ошо ваҡытта уға (аҙаҡ Башҡортостан тарихында

башҡорт халҡының милли-территориаль автономияһына ҡаршы эштәре менән таныласаҡ) ишан Ғөбәйҙулла Ҡорбанғәлиев төрлөсә аяҡ сала башлай. Ниһайәт, Н. Таһиров бөтөнләй ситкә сығып китергә мәжбүр була.

1917 йылдың майында ул йәнә тыуған төйәгенә әйләнеп ҡайта. Яҡташтары Нуриағзам Таһировты июль аҙағында Ырымбурҙа уҙғарыласаҡ 1-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайына кәңәш биреү хоҡуғы менән делегат итеп һайлайҙар. Ошо ваҡиғанан башлап ул тулыһынса башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең алғы сафтарына баҫа. Ҡоролтайҙа Ғ. Ҡорбанғәлиевтең йоғонтоһо көслө булыуға ҡарамаҫтан, көн тәртибендәге ер һәм халыҡ мәғарифы һымаҡ төп мәсьәләләр буйынса Ә. Вәлиди, Н. Таһиров, С. Мираҫ, Ғ. Мутин, Х. Ғәбитов, Х. Йомағоловтар тарафынан башҡорт халҡының милли мәнфәғәттәренән сығып тәҡдим ителгән ҡарарҙар ҡабул ителә. Ҡоролтай Башҡорт өлкә шураһын һәм уның Башҡарма комитетын һайлай. Ҡоролтайҙың ҡарары менән Н. Таһиров, Яхия Сәлихов һәм Әмиров Башҡарма комитеттың эшенә ярҙам итеүселәр итеп билдәләнә. Н. Таһировҡа Пермь губернаһы буйынса 2-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайына әҙерлек алып барыу эше йөкмәтелә.

Н. Таһиров артабан 2-се һәм 3-сө ҡоролтайҙарҙың эшендә актив ҡатнаша. 2-се Ҡоролтайҙа ул Башҡорт үҙәк шураһына ағза, ә инде Башҡортостандың үҙ аллылығын (автономияһын) иғлан иткән 3-сө Ҡоролтайҙа 22 кеше составындағы Башҡорт хөкүмәтенең ағзаһы итеп һайлап ҡуйыла. Ҡоролтай тамамланыу менән, Нуриағзам Таһиров Башҡорт республикаһының административ-идара ҡоролошон бойомға ашырыу буйынса эшкә ҡушыла. Уның етәкселегендә Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш төбәгендә Арғаяш, Дыуан-Ҡошсо, Ялан кантондары ойошторола. 1918 йылдың 30 ғинуарында Арғаяшта 1-се кантон съезы үткәрелә. Съезд Совет власын урынлаштырыу тураһында иғлан итә, 11 кешенән торған кантон башҡарма комитетын раҫлай. Уға Хафиз Ҡушаев, Ғәбделхәй Иркәбаев, Ғариф Мөхәмәтйәровтар менән бергә Нуриағзам Таһиров та һайлана. Шул уҡ йылдың апрелендә Н. Таһировты Силәбе чекистары ялған донос буйынса ҡулға алалар. Был хаҡта аҙаҡ Әбделҡадир Инан ошолай тип иҫкә ала:

«Арғаяш кантоны идараһы Арғаяш станцияһында урынлашҡайны, ерләшә алманы, Мәтәл олоҫо үҙәгенә күсте. Беҙҙең идара ағзаларынан Нурый Таһиров менән арҡаҙаштары Силәбе татар коммунистарының доносы арҡаһында Силәбе чекистары тарафынан ҡулға алынды».[1]

1918 йылдың 27 майында Арғаяшты аҡ чех отрядтары баҫып ала. Улар менән бергә аҡ гвардиясылар ротаһы, аҡ казактар отряды ла була. Ҡулға алыуҙар, тентеүҙәр, атыш-ҡырылыш башлана. Хафиз Ҡушаев, Мансур Мәғәсүмов, Нуриағзам Таһировтар ҙа ҡулға алына. Әммә уны, бәхеткә, Башҡорт хөкүмәте

ағзаһы һәм Ә. Вәлидиҙең көрәштәше булараҡ, тиҙҙән иреккә сығаралар. Н. Таһиров башҡорт хәрби формированиеларын ойоштороу эшенә тотона. 1918 йылдың 10 июлендә ул, Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге эргәһендәге Хәрби совет рәйесенең урынбаҫары булараҡ, Ә. Вәлиди менән бергә аҡ ғәскәрҙәрҙең Ырымбур хәрби округы һәм Башҡорт хөкүмәтенең Башҡортостанды большевиктар власынан һаҡлау өсөн башҡорттарҙы хеҙмәткә саҡырыу тураһында 288-се фарманына ҡул ҡуя. 1918 йылдың октябрендә Н. Таһиров Ырымбурҙағы башҡорт ғәскәрҙәренең 2-се уҡсы полкына мулла итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың февралендә, Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сыҡҡанға тиклемге арала, уның исеме Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында хәрәкәт итеүсе башҡорт ғәскәрҙәренең командирҙары араһында күренеп ҡала. Шул уҡ йылдың 21 февралендә 1-се Бөтөн Башҡорт хәрби съезында (Темәс ауылы) Н. Таһиров Революцион комитет ағзалығына кандидат итеп һайлана.

1919 йылдың майында, башҡорт ғәскәрҙәре Көньяҡ фронтҡа ебәрелгәс, Н. Таһиров полк комиссары, артабан Айырым башҡорт кавалерия дивизияһының комиссары итеп билдәләнә. Сентябрь аҙағында башҡорт ғәскәре Петроград фронтына күсерелә. Н. Таһиров бында Юденич ғәскәрен тулыһынса тар-мар иткәнгә тиклем фронттың алғы һыҙығында була. Нуриағзам Таһиров хәрби батырлыҡтары өсөн ВЦИК рәйесе М.И. Калинин исеменән затлы эйәр менән бүләкләнә. Ҡурҡыу белмәҫ башҡорт комиссары Граждандар һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. 1920 йылдың апрелендә, ауырыу сәбәпле, Н. Таһировты Башҡортостанға ҡайтаралар. Дауаланыу өсөн тыуған төйәгенә ҡайта, унда Арғаяш кантонының ревком рәйесе итеп һайлап ҡуялар. 1920 йылдың июлендә Үҙәк Совет власының Башҡортостандың автономияһын сикләүгә йүнәлтелгән ҡарарына протест йөҙөнән, Башҡорт хөкүмәте ағзалары тулы составында үҙҙәренең вазифаларын ташлап китә. Илдән китеүселәр араһында Н. Таһиров та була. Әммә 1921 йылдың 18 июнендә ул республиканың шул саҡтағы мәркәз ҡалаһы Стәрлетамаҡҡа әйләнеп ҡайта, 2-се Бөтөн Башҡортостан Советтары съезында ҡатнаша, съезд тамамланыу менән, июль башында, ул БАССР Халыҡ мәғарифы комиссариатының коллегия ағзаһы итеп раҫлана. Бер йыл үтеүгә Н. Таһировты Башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын, телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса ғилми йәмғиәттең рәйесе итеп ҡуялар.

Н.Т. Таһировҡа, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең Башҡортостанда тороп ҡалғандары араһынан, сталинсы репрессияларҙы иң беренселәрҙән булып кисерергә тура килә. 1929 йылдың 12 июнендә уны ҡулға алалар. Ошо көндән башлап ғүмеренең аҙағына тиклем тиерлек уға төрмәләрҙә, концлагерҙарҙа ыҙа сигергә тура килә. Әммә 1921—1929 йылдар эсендә генә лә

ул Башҡорт республикаһында үҙен фән, мәғариф, хоҡуҡ һаҡлау өлкәһендә атаҡлы белгес һәм эшмәкәр итеп танытып өлгөрә. 1922 йылдың 4 мартында Бөтөн Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты Президиумы «Таһиров Нуриағзам, Сөләймәнов Ғабдулла, Мирасов Сәғит иптәштәрҙе мәғарифтың күренекле эшсәндәре тип иҫәпләргә» тигән ҡарар сығара. 1924 йылдың йәйендә Н. Таһиров Башглавсуд эргәһендәге хоҡуҡ һаҡлаусылар коллегияһы ағзаһы итеп һайлана. 1926 йылда Ҡазанда, 1927—1928 йылдарҙа Урта Азияла адвокатлыҡ эше менән шөғөлләнә.

Нуриағзам Таһиров, лингвист булараҡ, башҡорт тел белеме үҫешенә ғәйәт ҙур өлөш индергән ғалимдарыбыҙҙың береһе. Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында уның «Башҡорттарҙың тарихи ҡомарткыларын йыйыу һәм өйрәнеү буйынса ҡулланма» (Стәрлетамаҡ, 1922), «Башҡорт әлифбаһы» (Өфө, 1924), «Башҡортса яҙыу ҡоралы» (Өфө, 1924, авторҙашлыҡта), «Башҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр» (Өфө, 1924, авторҙашлыҡта), «Башҡорт теленең сарфы» (Өфө, 1925, авторҙашлыҡта) кеүек китаптары һаҡлана. 1926 йылда уның «Башҡорт лөғәте» исемле китабы баҫылып сыға. Уның йәнә «Аҡһаҡ ишан» исемле пьесаһы булғанлығы ла билдәле. Ғилми-ижади эшмәкәрлек өсөн әсе яҙмыш тарафынан уға ни бары 5—6, күп тигәндә 7—8 йыл ғына ваҡыт бирелә. Әммә ошо ғына мөмкинлекте лә Н. Таһиров, бөтөн тулылығында файҙаланып, башҡорт тел белеме өлкәһендә ғәйәт ҡиммәтле һәм айырыуса практик йәһәттән әһәмиәтле хеҙмәттәр ижад итеүгә өлгәшә. Уның улы Тойғон Таһиров хәтерләүенсә, Н. Таһиров Өфө төрмәһендә ултырғанда, «Башҡорт теленең тарихы» тигән хеҙмәтен яҙып, ҡулъяҙмаһын йәшерен рәүештә ирекка сығарған. Үкенескә ҡаршы, ул хеҙмәт хәҙер инде эҙһеҙ юғалған.

1929 йылда ҡулға алынып, Н. Таһиров ун йылға Соловец утрауҙарына сәйәси тотҡондар өсөн тәғәйенләнгән концлагерға ебәрелә. Туғыҙ йыл самаһы ваҡыт үтеүгә уны ирекка сығаралар. Ул башта Өфөгә ҡайта, аҙаҡ, Арғаяшта аҙмы-күпме булып, ҡапыл ғына Урта Азияға сығып китә. Унан ғаиләһенә Ҡырғыҙстандың район үҙәктәренең береһендә йәшәүе һәм эшкә урынлашыуы тураһында хәбәр итә. Әммә шул хәбәрҙән һуң уның эҙе бөтөнләй ғәйеп була.

Шуны ла әйтергә кәрәк: Нуриағзам Таһиров, ҡулға алынғас, ауырыу булыуына ҡарамаҫтан, бар төрлө ғәйепләүҙәрҙе лә кире ҡаға, тәфтиш ваҡытында үҙ-үҙен яҡлап, аслыҡ иғлан итә. Тормоштоң иң аяныслы ваҡыттарында ла ул үҙен ҡаһармандарса тотоуы менән айырыуса һоҡланыу тыуҙыра.

Башҡорт донъяһының аҫыл бер заты, Граждандар һуғышы геройы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, ғалим һәм публицист Нуриағзам Таһир улы

Таһировтың исеме республикабыҙ тарихында ғәйәт әһәмиәтле урында тора.

* * *

[1] Әбделҡадир Инан. Төркиәгә килгәндән алдағы тормошомдан бәғзе хәтирәләр. // Ағиҙел. 1994, № 1, 104-се бит.

* * *

Әҙәбиәт: Насиров Рәүеф. Кәртәле юлдар // Башҡортостан. 1995, 18—20 ғинуар; Псәнчин Вәли. Ил йөрәгенә яҙылған исем // Башҡортостан. 1995, 15, 16 март; Байым Берйән. Был тормошта беҙҙең үҙ юлыбыҙ // Башҡортостан. 1995, 14, 15 апрель; Таһиров Нуриағзам Таһир улы // Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Баш мөхәррире Шәкүров Р.З. Өфө, 1997; Шәкүр Рәшит. Нуриағзам Таһиров // Шоңҡар. № 5, 69—73-сө биттәр, Тагиров Туйгун. Одна из первых жертв репрессий // Ватандаш. 1999, № 8, 92—106-сы биттәр; Әхмәҙиев Юныс. Ике ут араһында // Башҡортостан. 2001, 17 ғинуар; Тагиров Туйгун. Суровая проза жизни. Уфа: Китап, 2004.

Мөхәммәтша Буранғол
(1888—1966)



XX быуат башҡорт рухи донъяһында иң күренекле, үҙәк урында торған шәхестәрҙең береһе. Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, шағир, драматург, фольклорсы, Башҡортостандың халыҡ сәсәне. Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһының Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын олоҫо (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы) Үрге Ильяс (Тәңес) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Туғыҙ йәшкә еткәндә атаһыҙ, ун икенсе йәшендә әсәһеҙ ҡалып, үкһеҙ етемлектә ағалары тәрбиәһендә үҫә. Күршеләге Иҫке Юлдаш ауылында земство мәктәбен тамамлай. 1901 йылда Ырымбур ҡалаһына сығып китә, йәйге каникул көндәрендә төрлө эштәрҙә йөрөп, ҡыштарын Ҡарғалының 7-се мәсет янындағы мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Бер йәйҙә Ырымбурҙа Баязит байҙың сәйханаһында — официант, 1903, 1904, 1905 йылдарҙың йәйге айҙарында Ҡаҙағстандың Аҡтүбә ҡалаһында Фәткулла Зәбиров тигән кешенең тирмәнендә иген ҡабул итеүсе булып эшләй, 1906 йылдың йәйендә Аҡтүбә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. 1907, 1908 йылдарҙың йәйге айҙарында тәржемәсе сифатында башҡорттар араһында өҫтәмә иҫәп-хисап эштәрендә ҡатнашып, Башҡортостан буйлап оҙон юлдар үтә. Был эште ул башҡорт фольклорын йыйыу маҡсатында ла файҙалана. Ошо ваҡытта, 1908 йылда, ул Башҡортостандың Урал аръяғында башҡорттоң атаҡлы сәсәне һәм ҡурайсыһы Ғәбит Арғынбаев менән таныша. Меңәр юллыҡ ҡобайырҙарҙы һөйләүсе Ғәбит сәсән менән осрашыу М. Буранғоловҡа тәрән йоғонто яһай, уның артабанғы эшмәкәрлегенә өр-яңы йүнәлеш бирә. 1908 йылда Ғәбит Арғынбаевтан яҙып алынған фольклор материалдарын Ырымбурҙа Риза Фәхретдиновҡа күрһәтеп, ихлас күңелдән әйтелгән бик ҙур баһаға лайыҡ була. 1910 йылда иһә Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенең шәкерте, 22 йәшлек Мөхәммәтша

Буранғол башҡорт рухиәте тарихында мәңгелек урын алырҙай хеҙмәт күрһәтә — Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтов сәсәндәрҙән ул бөйөк «Урал батыр» эпосын яҙып ала. 1911 йылда «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамлап, 1916 йылға тиклем үҙенең тыуған яғы — Туҡ буйы башҡорт ауылдарында балалар уҡыта. 1914 йылда, беренсе бөтөн донъя һуғышы башланыу менән, М. Буранғолов уҡытыусы булып эшләгән Ҡайыпҡол ауылы халҡы, мобилизациянан алып ҡалыу ниәте менән, сходҡа йыйылып, уны мулла итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар сығара һәм, хәрби хеҙмәткә алмауҙы һорап, хөкүмәт органдарына хат менән мөрәжәғәт итә. М. Буранғолов бер аҙ ваҡыт мулла булып тора. Үкенескә ҡаршы, аҙаҡ, тоталитар режим осоронда, быны, элекке мулла, тип, уға ҡаршы ғәйепләү факты итеп файҙаланалар.

1916 йылда М. Буранғолов, үҙ төйәгенең өйәҙ үҙәге Быҙаулыҡ ҡалаһына күсеп, халыҡ мәғарифы бүлегенең милли мәктәптәр инспекторы булып урынлаша. 1917 йылдың 18—20 декабрендә М. Буранғолов Быҙаулыҡ өйәҙе башҡорттарының вәкиле сифатында Ырымбурҙа Бөтөн башҡорт халыҡ ҡоролтайының (съезының) эшендә ҡатнаша. Ҡоролтайҙан һуң Быҙаулыҡ өйәҙе Туҡ-Соран кантоны составына индерелә. М. Буранғолов кантон башҡарма комитетының мәғариф бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың февраленән 1920 йылдың декабренә тиклем ул — Туҡ-Соран кантон башҡарма комитетының рәйесе. 1921 йылдан 1937 йылға тиклем Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә мәктәптәрҙә һәм техникумдарҙа уҡытыусы булып эшләй. Ситтән тороп, К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. 1937 йылда уҡыуҙан сығарылғанға тиклем дүртенсе курсты тамамлап өлгөрә. 1938 йылда Өфөгә килеп, бер нисә йыл буйы Башҡортостан Тел һәм әҙәбиәт (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт) ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр, бер аҙ ваҡыт Башҡорт дәүләт драма театрында әҙәби консультант вазифаһын башҡара. Был осор эсендә фольклорсы ғалим булараҡ та, шағир һәм драматург сифатында ла ғәйәт ҙур эштәр башҡара: ошоғаса йыйнап килгән бихисап фольклор материалдарын барлап, системаға килтереп, төрлө йыйынтыҡтар төҙөй, пьесалар, либреттолар яҙа, күләмле поэтик әҫәрҙәр ижад итә. 1944 йылда уға Башҡортостандың халыҡ сәсәне тигән юғары исем бирелә. Әммә ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» 1945 йылдың 27 ғинуарында ҡабул иткән ҡарарында нахаҡҡа буржуаз милләтселектә ғәйепләнгәндән һуң быға тиклем дә эҙәрлекләүгә дусар ителгән әҙиптең исеме лә, ижады ла оҙаҡ ваҡыттар буйы тыйылып һәм быуылып тора. Үҙ ғүмерендә ул биш тапҡыр ҡулға алына. Беренсе мәртәбә 1918 йылдың майында Ҡазанда үткәрелгән Бөтөн Рәсәй педагогия йыйынында

ҡатнашҡан өсөн аҡтар тарафынан ҡулға алына һәм, күп тә үтмәй, ҡыҙыл партизан отрядтары менән тимер юлсылар дружинниктары тарафынан ҡотҡарып сығарыла. Артабан, 1920 йылда ул, Әхмәтзәки Вәлидиҙең эштәрен хуплаусы булараҡ, Ильяс Алкин, Ғариф Хужаев, Хәлим Әмиров менән бергә Мәскәүҙең Бутырка төрмәһенә ябыла. Бынан улар Совет хөкүмәтенең етәксеһе В.И. Ленинға дүртәүләшеп хат яҙғандан һуң азат ителә. 1929 йылда йәнә ҡулға алынып, бер аҙ ваҡыт һаҡ аҫтында тотоп сығарыла. 1937 йылдың 23 декабренән башлап был юлы ете ай буйы Өфө төрмәһендә тотҡонлоҡта ятып сыға. Ошонан һуң уға бер аҙ ваҡыт теймәй торалар. Ләкин, алда әйткәнебеҙсә, 1945 йылдың ғинуарынан әҙиптең баш осонда ҡара болоттар торған һайын нығыраҡ ҡуйыра. 1946 йылдың 25 октябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының М. Буранғол һәм Б. Бикбай ижадын тикшереүгә арналған киңәйтелгән ултырышы М. Буранғолдоң, йәнәһе «бөтөн ижади эшмәкәрлеге осоронда идея яғынан тотанаҡлы бер генә әҫәр ҙә тыуҙыра алмауын» билдәләп үтә һәм әлеге шул милләтселектә ғәйепләй. Башҡорт халҡының дошмандары атаҡлы әҙипте, ялған ғәйептәр тағып, Яҙыусылар союзынан сығарыуға, халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм итеүгә, ниһайәт, 1950 йылда һөргөнгә оҙаттырыуға өлгәшәләр. М. Буранғолов СССР Дәүләт именлеге министрлығы эргәһендәге Махсус кәңәшмәнең ҡарары менән халыҡ дошманы тип ғәйепләнеп, ун йылға алыҫ Себерҙәге Тайшет лагерына оҙатыла. Айырым китап булып сыҡҡан әҫәрҙәре юҡ ителә, пьесаларын сәхнәгә ҡуйыу тыйыла. 6 йылдан һуң, СССР Юғары Советы Президиумының 1955 йыл 3 сентябрь Указы нигеҙендә 1956 йылдың 12 майында ирекккә сығарылып, Башҡортостанға ҡайта. Әммә ғәҙелһеҙлек, шәхесте быуып тотоу бының менән дә бөтмәй әле. М. Буранғоловҡа, ирекккә сыҡҡан хәлдә лә, ысын ижад ирке менән йәшәү насип булмай. Уға ғүмеренең һуңғы йылдарына ҡәҙәр үҙ-үҙен яҡлап, граждандлыҡ һәм яҙыусылыҡ хоҡуҡтары өсөн ауыр көрәш алып барырға тура килә. Дөрөҫ, уның Яҙыусылар союзы ағзалығын һәм Башҡортостандың халык сәсәне тигән исемен тергеҙмәйенсә булдыра алмайҙар. Әммә Башҡортостанда ул йылдарҙа иң элек республиканың төп халҡына ҡаршы алып барылған сәйәсәтен М. Буранғолға бөтөн тулылығында үҙ башынан үткәрергә тура килә. Халыҡ яҙыусыһы, 78 йәшкә етеп, 1966 йылдың мартында Өфөлә вафат була. Уға үҙе иҫән саҡта әҫәрҙәренең бер генә тулыраҡ баҫмаһын да, хатта йәш сағында, быуат башында яҙып алған «Урал батыр» эпосының да донъяға сығыу бәхетен күрергә насип булмай. («Урал батыр» тәү башлап бары тик 1968 йылда «Ағиҙел» журналы биттәрендә донъя күрә.)

Мөхәммәтша Буранғолдоң ижади эшмәкәрлеге айырыуса фольклористика һәм драматургия өлкәһендә оло ҡаҙаныштар менән билдәләнә. Ул 18—20 йәштәрҙәге егет ҡоронан алып бөтөн ғүмере буйы алһыҙ-ялһыҙ башҡорттоң

йыр-моң байлыҡтарын, йыр риүәйәттәрен, легендаларҙы, туй йолаларын, эпик ҡомартҡыларҙы йыйыу, пропагандалау, сәсәндәр ижадын һәм тормошон өйрәнеү менән шөғөлләнә. М. Буранғолдоң ҡулъяҙма мираҫындағы «Башҡорт халыҡ поэзияһы», «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәттәр, йырҙар йыйынтыҡтары башҡорт фольклористикаһының ғәйәт ҡиммәтле сығанаҡтары һанала. Рухи мәҙәниәтебеҙ тарихы өсөн уҙған быуаттарҙа йәшәгән бик күп атаҡлы башҡорт сәсәндәренең биографияһына ҡараған мәғлүмәттәр фәҡәт уның хәстәрлеге арҡаһында һаҡланып ҡалған.

Драматург булараҡ, М. Буранғол иң элек башҡорт тарихы, фольклоры, башҡорттоң рухи донъяһы менән бәйле. Уның пьесаларының күбеһе — башҡорт йыр-көй тарихтарына нигеҙләнгән фольклор-этнографик пландағы әҫәрҙәр. Бында әҙиптең фольклорсылыҡ эшмәкәрлеге менән драматургик ижады араһында хатта тышҡы бәйләнештәр ҙә күҙәтелә. Мәҫәлән, 1915 йылда ул «Шура» журналының 13-сө һанында «Ашҡаҙар» көйөнөң тарихын баҫтырып сығара. 1917 йылда иһә М. Буранғол «Ашҡаҙар» исемле пьесаһы менән драматургияла тәүге аҙымын яһай. Әйткәндәй, 1919 йылда тәү башлап ошо пьесаны сәхнәгә ҡуйып, Башҡорт драма театры үҙ тарихының тәүге битен асып ебәрә.

М. Буранғол үҙ ғүмерендә утыҙҙан артыҡ ҙур күләмле сәхнә әҫәре ижад итә. Шулар араһында «Шәүрәкәй» (1925, 1948), «Башҡорт туйы» (1926— 1943) театр сәхнәләрендә айырыуса ҙур уңыш ҡаҙана. М. Буранғолдоң ижади мираҫында «Ҡараһаҡал» (1930—1939) драмаһы, «Иҙеүкәй һәм Мораҙым» трагедияһы (1940—1943) мөһим урында тора. Уның йәнә «Зәңгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Алпамыша» (1922), «Сәлим-кантун» (1923), «Ялан-Йәркәй» (1923—1926), «Ҡара юрға» (1924), «Әбйәлилдәр шайкаһы» (1926—1929), «Гөлсәсәк» (1939), «Таштуғай» (1938—1959) һ.б. пьесалары булғанлығы билдәле. Драматург тәүге башҡорт опералары өсөн либреттолар ижад итә: «Мәргән» (1939), «Туҡтар менән Гөлнур» (1944—1947).

М. Буранғолдоң сәсәнлек-шағирлыҡ ижады башҡорт поэзияһында боронғо ҡобайыр традицияһын дауам итеү йәһәтенән ғәйәт ҡыҙыҡлы. Был йәһәттән уның 1942 йылда айырым китап булып баҫылып сыҡҡан «Ватан һуғышы» ҡобайыры айырылып тора. Әҙиптең шәхси архивында проза әҫәре — «Сәлимә» исемле повесы һаҡланған булып сыҡты. М. Буранғол ижадының тәүге осоронан уҡ публицистика менән дә шөғөлләнә.

1988 йылда Башҡортостан йәмәғәтселеге халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолдоң тыуыуына 100 йыл тулыу көнөн тантаналы билдәләп үтте. Юбилей айҡанлы уҙғарылған ғилми конференция ҡарары нигеҙендә уның күп яҡлы ижади мираҫынан ике томда әҫәрҙәр йыйынтыҡтары әҙерләнде.

М. Буранғол әҙип һәм шәхес булараҡ башҡорт халҡының иң уҙаман, иң бөйөк улдарының береһе, үҙ милләтенең рухи ныҡлыҡ сағылышы.

* * *

Әҫәрҙәр: Ашҡаҙар: пьеса. Ырымбур, 1923; Башҡорт туйы: пьеса. Өфө, 1929; Батырҙар тураһында эпос. Өфө, 1943; Таштуғай: пьеса. Өфө, 1994; Сәсән аманаты. Өфө, 1995.

Әҙәбиәт: История башкирской советской литературы, М.: Наука, 1977; Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек һәм әҙәби эшмәкәрлеге. Өфө, 1992, 121 бит; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 4-се том. Өфө, 1993. 75—94-се биттәр; Башҡорт әҙәбиәте. 10-сы синыф өсөн уҡыу китабы. Өфө, 1995; Бурангулов М.А. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Әбделҡадир Инан
(1889—1976)



Халҡыбыҙҙың донъя күләмендә дан ҡаҙанған бөйөк эшмәкәрҙәре һәм ғилем эйәләре араһында Әбделҡадир Инандың исемен ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә алабыҙ. Ғүмеренең тәүге осоронда, 1920 йылға тиклем, үҙенең аҫыл ватаны — Башҡортостан азатлығы өсөн көрәштә ҡатнашып, күренекле сәйәсмән, мөхәррир һәм талантлы яҙыусы булып танылған был зат, 1920—1923 йылдарҙан һуң эмиграцияға китеп, тиҙ арала алыҫ ерҙәрҙә атаҡлы ғалим, төрки халыҡтарының этнографияһы, фольклоры, төрки телдәре һәм әҙәбиәттәре өлкәһендә күренекле белгес булып таныла. Уның фәнни эшмәкәрлеге дөйөм алғанда алты тиҫтә йылға һуҙыла, шул дәүер эсендә ул 350 ғилми хеҙмәт баҫтырып сығара, XX быуат төркиселек фәнендә иң абруйлы ғалимдарҙың береһенә әйләнә.

Әбделҡадир Инан (Фәтхелҡадир Мостафа улы Сөләймәнов) 1889 йылдың 29 ноябрендә Пермь губернаһы Екатеринбург өйәҙенең (хәҙер Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы) Шығай (икенсе исеме Һары Күлмәк) ауылында тыуған. Ә. Инандың иҫтәлектәрендә әйтелеүенсә, башҡорттарҙың оло ҡатай ҡәбиләһе ялан-ҡатай ырыуына ҡараған был ауыл Екатеринбургтан 90 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Фәтхелҡадир кесе йәштән үк әсәһенең тылсымлы әкиәттәрен, башҡорт иле тарихтарын, боронғо төрки һәм ғәрәп хикәйәттәрен тыңлап үҫә. Уның бала сағында, 1895 йылдарға тиклем, Урал аръяғы башҡорттары йәйге мәлдәрҙе «иҫке тирмә-йорттарҙа йәйләүҙәрҙә үткәргәндәр», «Өсәйемдең атаһы бик матур боронғо тирмәһен амбарында һаҡлай ине. Уны күргән һайын, әсәйем: «Һай донъя! Ниндәй матур йәшәнек борон», — ти торғайны. Өсәйемдең йәйләү тормошон идеаллаштырып иҫкә алыуы миңә бик тәрән йоғонто яһаны. Боронғо башҡорт тормошо хаҡында яҙғанда һәр саҡ уның йоғонтоһо аҫтында булдым», — тип хәтергә ала һуңынан Ә. Инан. «Атайым иһә, — тип дауам итә

ул, — боронғо заманды бик иҫкә алмай торғайны, ул реалист ҡарашлы булды. Миңә хисап ғилемен, дин дәрестәрен, рус әлифбаһын өйрәтергә тырышты». Буласаҡ атаҡлы ғалимдың атаһы яғынан олаталарының Пугачев – Салауат Юлаев күтәрелештәрендә ҡатнашып, башҡорт ғәскәрендә вазифа биләгән булыуҙары, йәнә шул дәүерҙә йәшәгән Бикҡол исемле олатаһының Йәсәүи тәриҡәте шәйехтәренең береһе булып, ишанлыҡ дәрәжәһенә өлгәшеүе тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә ғәйәт ҡыҙыҡлы. Унан ҡалған ҡулъяҙма китаптарҙың береһендә: «Был мөбәрәк китапты 85 йәшемдә күсереп яҙҙым. Балаларыма мираҫ булһын», — тигән һүҙҙәр һаҡланған. Бикҡол ишан бөтөн ғүмере буйы китап күсереү эше менән мәшғүл булған.

Күренеүенсә, Фәтхелҡадир Сөләймәнов (Әбделҡадир Инан) үҙ халҡының бай һәм үҙенсәлекле рухи мәҙәниәт донъяһында, күркәм милли традициялар ерлегендә тәрбиәләнеп үҫә. Уның шул замандағы күренекле мәҙрәсәләрҙә белем алыуы, йәш сағынан уҡ ғилми эҙләнеүҙәр, әҙәби ижад эше менән мауығыуы шәхес булараҡ формалашыуында ғәйәт әһәмиәтле роль уйнай. Фәтхелҡадир үҙенең тыуған ауылында олатаһы Мөхибулла хәҙрәттең ҡыҙына өйләнгән Ғәлим әфәнденең йәдитселек ысулы менән эшләүсе мәктәбендә башланғыс белем ала. «Ғәлим әфәнде яңыса фекерләгән ғилемле әҙәм ине. Китапханаһында иң һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан бик күп әҫәрҙәр тупланғайны», — тип яҙа был хаҡта Ә. Инан.

Ошо ауыл мәктәбендә уҡыған йылдарҙа ул Ризаитдин Фәхретдинов, Заһир Бигиев кеүек әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен, йәғни, үҙе әйткәнсә, «яңы әҙәбиәткә ҡараған китаптарҙы» уҡый башлай. Артабан ул Ғәлим әфәнденең һәм атаһының теләге буйынса Силәбеләге ахун Хәким хәҙрәт мәҙрәсәһенә барып инә. Үҙенең Хәким хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡыған йылдары тураһында иҫкә алып, Ә. Инан унда иҫкесә уҡытыу һәм тәрбиә хөкөм һөрөүе, ошо мәҙрәсә ҡаршыһында Силәбе ҡалаһының алдынғы фекерле сауҙагәрҙәре һәм байҙары тарафынан төҙөлөп, йәдит ысулы менән уҡытыу индерелгән мәктәптең мөғәллимдәре менән күрешеп, уларҙан уҡыу өсөн китаптар алып тороуы тураһында яҙа.

1904—1905 йылдарҙағы рус-япон һуғышы осоронда Фәтхелҡадир нәҡ ошо Силәбе ҡалаһында була. Бер мәлде, һуғышта еңелеп, үҙ төйәктәренә ҡайтып барыусы рус һалдаттары уны күреп ҡалып: «Был көсөк япон балаһы ҡайҙан килеп сыҡҡан бында?» — тип, тотоп алып туҡмап ташлайҙар. «Японларҙан еңелеүҙәренең үсен минән алырға булды былар. Мине улар ҡулынан полиция аралап алды. Был япон балаһы түгел, тип аңлатты. Йөҙөм монгол ҡиәфәтле булғанлыҡтан, һалдаттар мине япон балаһы тип уйлаған», — тип хәтерләй Әбделҡадир. Тиҙҙән Силәбелә, Рәсәй ғәскәренең һуғышта еңелеүе сәбәпле, забастовкалар, демонстрациялар булып үтә, революцион хәрәкәт бер килке

көсәйеп ала. Бындай ваҡиғалар, үҫмер йәштә генә булһа ла, уға ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Рәсәй йәмғиәтендә барған үҙгәреш елдәре уның күңеленә лә килеп ҡағыла. Был хаҡта ул үҙе лә: «Йәшем бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, мәҙрәсәләге тынғыһыҙҙарҙың лидеры инем», — тип иҫенә төшөрә.

Силәбенән һуң (1905 йылдың аҙағында булһа кәрәк) Фәтхелҡадир Троицк ҡалаһындағы ул ваҡытта инде киң билдәле «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә барып урынлаша. Йәнә Ә. Инандың иҫтәлектәренә мөрәжәғәт итәйек:

«Был мәҙрәсәнең рәсми етәксеһе — башҡорт, түңгәүер ырыуының ғөләмә кешеһе шәйех Зәйнулла. Ул заттың сәйәси ҡарашы рус идараһына ышанысһыҙ күренеп, бер заман Рәсәйҙең мосолмандар булмаған вилайәтенә һөрөлдө, бер ни тиклем ваҡыттан Троицкиға ҡайтты, ҡаланың сит бүлеге булған Мамуриә мәхәлләһендә ҙур мәҙрәсә бинаһы төҙөтөп, шәкерттәр тупланы. Бында шәкерттәр башлыса башҡорт һәм ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ өлкәләренән йыйылғайны. Зәйнулла хәҙрәт был өлкәләрҙең мәшһүр шәйехенә һәм мөҙәрисенә әүерелде. Бөйөк исламсы Шиһабетдин Мәржәни һәм бөйөк төрөксө Исмәғил Гаспринскийҙың фекерҙәше һәм хөрмәт итеүселәре иҫәбенән булды, уларҙың хеҙмәттәрен шәкерттәренә тәҡдим итә торғайны». «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә был йылдарҙа шәйех Зәйнулланың улы, алдынғы ҡарашлы хәҙрәт Ғабдрахман Рәсүли мөдир булып тора. Троицкиҙа уҡыған йылдар Фәтхелҡадирҙың донъяны танып белеүендә мөһим роль уйнай, ошо уҡ ваҡытта ул, 1908—1910 йылдарҙа, ваҡытлы матбуғат биттәрендә тәүге публицистик һәм этнографик мәҡәләләрен баҫтыра. Миҫал өсөн «Ваҡыт» гәзитендә донъя күргән «Башҡорттарҙа тупраҡ мәсьәләһе», «Башҡорт ғөләмәһе», «Ҡырғыҙ сәхрәләренән» тигән мәҡәләләрен атап үтергә мөмкин. Ижадының ошо башланғыс осоронда автор үҙен, М.Х. Нәҙерғолов билдәләүенсә, «халыҡ яҙмышына битараф булмаған, ғилем һәм мәғрифәтте юғары баһалаған, тормош һөм заман тураһында ярайһы уҡ киң фекер йөрөткән шәхес итеп таныта». 1909 йылдың йәйге айҙарында Тубыл буйындағы ҡаҙаҡтар араһында бер бейҙең балаларын уҡыта. Был иһә уға ҡаҙаҡтарҙың тормошо, көнкүреше, йолалары менән аҙмы-күпме танышырға мөмкинлек бирә. Алда телгә алған мәҡәлә лә нәҡ шуның һөҙөмтәһендә ижад ителә. Һуңынан уға үҙенең әлеге «Ҡаҙаҡ сәхрәләренән» тигән мәҡәләһенең Ырымбурҙағы «Ваҡыт» гәзитенән Истанбулда нәшер ителгән «Таариф-и мөслимин» журналының 1910 йыл 12 һанында күсереп баҫылған булыуы тураһында мәғлүм була.

1914 йылда Фәтхелҡадир «Рәсүлиә» мәҙрәсәһен тамамлай, мөғәллимлек итә, күпмелер ваҡыт, армияға алынып, хәрби хеҙмәттә йөрөп ҡайта. 1915 йылда Өфөлә мосолмандарҙың ул саҡтағы Ырымбур Диниә назаратында дин ғилемдәренән имтихан тотоп, мөҙәррис дәрәжәһенә таныта ала. 1914—1916

йылдарҙа «Шура» журналында бер нисә шиғыры, «Башҡорт йәйләүендә», «Ил өсөн», «Ҡасҡын», «Үләт» тигән хикәйәләре донъя күрә. 1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң үҙе хеҙмәт иткән гарнизон һалдаттары уны Екатеринбургтағы Урал өлкәһе эшсе, крәҫтиән һәм һалдаттар Советының II съезына делегат итеп һайлай. Унда ҡатнашыуы хаҡында Инандың «Хәтирәләр»ендә ошондай мәғлүмәттәр бар: «Сафаров тигән әрмән, Крестинский, Тунтул кеүек коммунистар съездың етәксе комитеты ағзалары ине. Был ваҡиғанан һуң өс йыл үткәс, Мәскәүҙә Кремль һарайында осрашҡан Ҡазан татары коммунист Сәйетғәлиев менән тап ошо Екатеринбург съезында танышҡайным. Ул да Екатеринбургта торған бер полкта һалдат булып хеҙмәт итә икән. Был съезда күпселекте большевиктар тәшкил итте. Урал өлкәһе эшселәр өлкәһе булыуы менән мәшһүрлек ҡаҙанғайны». 1917 йылдың сентябрендә үҙенең тыуған яғында — Арғаяш төбәгендәге Иштебай ҡәрйәһенә мөғәллим итеп һайлана. 1914 йылда уҡ Әхмәтзәки Вәлиди кәңәше менән башлаған ғилми-тикшеренеү эшен — алтай, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк һәм төрки халыҡтарының фольклорын, этнографияһын, динен, милли ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙ аллы өйрәнеүҙе дауам итә. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡорт мәркәз өлкә (үҙәк) шураһы Башҡорт автономияһын иғлан иткән көндән башлап Фәтхелҡадир үҙ төбәгендә тулыһынса башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Урал аръяғының башҡорттар йәшәгән олоҫтарында халыҡ йыйылыштарын ойоштороуҙа ҡатнаша, ҡыҙылдар тарафынан ҡулға алынып, Советтарҙың Екатеринбургта үткәрелгән съезында делегат булып ҡатнашыуы тураһындағы танытмаһын күрһәтеп, ҡотолоп ҡала. («Командир мине азат итте, арҡаҙаштарымды Екатеринбургка алып китте. Уларҙы бер аҙнанан ебәрҙеләр. Екатеринбургта большевик етәкселәре мәҙәниәтле кешеләр ине».) 1918 йылдың яҙ башында, Мәтәл олоҫонан Силәбелә үткәреләсәк Урал өлкәһе мосолмандарының съезына делегат итеп һайланып, уның эшендә ялан-ҡатай башҡорттарынан Ғәлимйән Таған менән бергә ҡатнаша. «Башҡорттарҙан ни бары 10 кеше инек. Съездың башҡа делегаттарының барыһы ла Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы булған татарҙарҙан һайланғайны», — тип хәтерләй аҙаҡ Ә. Инан. Шул көндәрҙә граждандар һуғышы тарихында киң билдәле чехословактар күтәрелеше ҡубып китеп, Силәбе тулыһынса уларҙың ҡулына күсә, башҡорт хәрәкәтенә хаслыҡ ҡылыусы әлеге татар коммунистарын чех һалдаттары, ҡулға алып, төрмәгә ултыртып ҡуя. Шуның артынса уҡ ваҡытында Ырымбурҙан большевиктарҙың золомлоғо арҡаһында ҡасып китергә мәжбүр булған Башҡорт хөкүмәте һәм уның юлбашсыһы Әхмәтзәки Вәлиди Силәбегә килеп урынлаша. Башҡорт хөкүмәте, йыйылыш үткәреп, мөһим ҡарарҙар ҡабул итеп, үҙенең эшмәкәрлеген яңынан йәйелдереп ебәрә,

башҡорт ғәскәрен ойоштороу дауам итә.

Барса был ваҡиғалар булып үткән ул көндәр Фәтхелҡадирҙың, бик нығ арығанлығы арҡаһында, арҡаҙаштарынан рөхсәт алып, 15 көнгә әсәһенең тыуған ауылына ял итергә киткән ваҡытҡа тура килә. Әммә, Силәбегә килеү менән, ул Башҡорт хөкүмәтенең эшенә ҡушылып китә. («Силәбелә беҙҙекеләр сиктән тыш көсөргәнешле эшмәкәрлектә ине. Мин ял итеп ятҡан көндәрҙә бер нисә аҙна элек хыялыбыҙға ла кермәҫлек бөйөк ваҡиғалар булған. Ике аҙна эсендә башҡорт полктары ойошторолған, минең тыуған ауылым янында ҙур һуғыштар ҙа булып үткән, башҡорт ғәскәренең батырлығына һәм ҡаһарманлығына чехословактар хайран ҡалған һәм юғары баһалаған. Башҡорт хөкүмәте татар коммунистарының «Урал» гәзите урынына «Башҡорт» гәзитен сығарырга ҡарар иткән, баш һәм яуаплы мөхәррир итеп мине тәғәйенләгән».) Теүәл бер йыл элек Ырымбурҙа баҫыла башлап, артабан большевиктар тарафынан туҡтатылған «Башҡорт» гәзите, шулай итеп, 1918 йылдың 18 июнендә үҙенең йәшәүен яңынан дауам итеп алып китә. Фәтхелҡадир Сөләймәнов шул уҡ йылдың авгусына тиклем ошо гәзитте мөхәррирләү эше менән мәшғүл була. Сентябрҙә Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре менән бергә Ырымбурға юллана. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәри идара был ваҡытта атаҡлы Башҡорт халыҡ йорто Каруанһарайҙа урынлашҡан була. Уның иҫтәлектәренән күренеүенсә, Ә. Инандың ҡайһы бер биографтарының «1917 йылғы Февраль буржуаз-демократик революцияһын Ф. Сөләймәнов Ырымбурҙа ҡаршылай» тип раҫлауы дөрөҫлөккә тап килмәй. Асылда унда 1918 йылдың сентябрь аҙағында ғына бара, «Хәтирәләр»ҙә нәҡ ошо хаҡта ул: «Ырымбурҙы беренсе тапҡыр күреүем булды. Был ҡала тураһында ғаиләмдә бик күп хикәйәләр ишеткәйнем. Ҡаланың башҡорт ҡаны һәм һөйәктәре өҫтөндә төҙөлгәнлеге хаҡында бәләкәйҙән белә инем», — тип яҙа. 1918 йылдың ноябрь аҙағында Фәтхелҡадир йәнә үҙенең тыуған төбәгенә әйләнеп ҡайта. Үҙе ул ошо хаҡта: «1919 йылдың ҡышын мөғәллим булып үткәрергә ҡарар иттем. Үҙебеҙҙең хөкүмәттән хәбәр ала алмай инек», — тип хәтерләй. Нәҡ ошо ваҡытта Себерҙә, Омск ҡалаһында генерал Колчак Рәсәйҙең «Юғары хакимы» («Верховный правитель») тип иғлан ителә. Колчак Башҡорт ғәскәрен тарҡатыу тураһында махсус фарман сығара. Башҡорт хөкүмәте ике ут араһында тороп ҡала. Ниһайәт, 1919 йылдың мартында Совет хөкүмәте менән Килешеү төҙөп, Башҡорт хөкүмәте ҡыҙылдар яғына сығырға мәжбүр була. Әммә был ваҡиғалар хаҡында мәғлүмәт Колчак диктатураһы аҫтында ҡалған төбәктәргә тиҙ генә барып етмәй. Фәтхелҡадир 1919 йылдың яҙғы-йәйге айҙарына тиклем Арғаяш төбәгендә (Башҡорт автономияһы тураһында Килешеү төҙөлгәндән һуң — Арғаяш кантоны) мөғәллимлек эшен дауам итә, Колчак ғәскәре сигенгән

ваҡытта, ҡыҙылдарҙан ҡурҡып Себергә күсергә йыйынып бөткән яҡташтары араһында халыҡты атай-олатайҙар төйәгенән ҡуҙғалмаҫҡа өндәп, милләтебеҙ яҙмышы өсөн мөһим эштәр башҡара. Төбәк Колчак ғәскәренән азат ителгәс, Арғаяшта кантон идараһы ойошторола, Фәтхелҡадир Сөләймәнов кантондың ревком рәйесе итеп тәғәйенләнә. Тиҙҙән Фәтхелҡадир Арғаяш кантоны хәрби комиссары Хафиз Ҡушаев менән бергә Башҡорт хөкүмәтенең саҡырыуы буйынса Стәрлетамаҡҡа килә. Бында ул Башҡорт Автономиялы Советы Республикаһы Мәғариф комиссариатының ғилми комиссияһына етәкселек итә. 1919 йылдың аҙағы – 1920 йылдың баштарында Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә Советтарҙың Мәскәүҙәге XII съезында, мөһим кәңәшмәләрҙә ҡатнаша. Шул уҡ осорҙа күпмелер ваҡыт Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡан Башҡорт дивизияһы составында булып, сәйәсәт бүлегендә «Салауат» исемле гәзиттең мөхәрририәт ағзаһы вазифаһын башҡара. Мөмкинлектән файҙаланып, Петроград китапханаларында фән менән шөғөлләнеү форсатын да таба. Петроград ҡала Советы тарафынан дивизияға бүләк ителгән китаптар һәм Башҡортостан хаҡындағы архив материалдарын алып ҡайтып, республиканың ғилми әҙәбиәт фондын ойоштороу хәстәрлеген күрә. Бер үк ваҡытта ғилми-әҙәби ижад эшмәкәрлеген дә дауам итә. Стәрлетамаҡта сағында, «Аҡшан батыр» драмаһы сәхнәгә ҡуйылғанда, бер ҡаһармандың ролен үҙе уйнай. Уның әҙәби мираҫында шул уҡ йылдарҙа ижад ителгән «Салауат батыр» исемле биш шаршаулы тарихи драмаһы һаҡланып ҡалған. Милли әҙәбиәтебеҙҙә был Салауат образына арналған тәүге күләмле әҫәр иҫәпләнә.

1920 йылдың 19 майында Үҙәк Совет власының «Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының дәүләт ҡоролошо тураһында»ғы билдәле ҡарарынан һуң, Башҡорт республикаһының хоҡуҡтарын ҡыҫыу сәйәсәтенә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп, Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәре Башҡортостандан китергә мәжбүр була. Башҡорт лидерҙары башта Урта Азияла большевиктарға ҡаршы көрәшеүсе баҫмасылар хәрәкәтендә ҡатнаша. Ф. Сөләймәнов Ташкентта мәктәп директоры, уҡытыусы була, «Аҡ юл» гәзитендә Әбделҡадир Йылҡыбай имзаһы менән төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы, фольклорына арналған мәҡәләләр баҫтыра. «Төркөстан йәшерен Милли берлеге комитеты» йөкмәтеүе буйынса Ташкенттан Сәмәрҡәндкә барып, большевиктарға ҡаршы һуғыш хәрәкәте алып барған партизандар төркөмөндә ҡатнаша. Артабан да мөһим хәрби заданиеларҙы үтәп, ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәтә. 1923 йылдың февралендә, Төркөстанда милли-азатлыҡ хәрәкәте уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң, Әхмәтзәки Вәлиди һәм Фәтхелҡадир Сөләймәнов, иң элек Иранға сығып, Афғанстанда (1923), Һиндостанда (1924) туҡталып, Европа ҡалаларынан Марсель (1924), Париж,

Берлин (1925) аша үтеп, 1925 йылдың июлендә Төркиәгә етеп, Истанбул ҡалаһында урынлаша. Ошо ваҡыттан башлап уның бөтөн ҡалған ғүмере Төркиәлә үтә, унда теүәл ярты быуат буйы төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы, фольклоры менән шөғөлләнеп, үҙенең бөйөк замандашы Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә ул фән һәм ғилем майҙанында исеме бөтөн донъяға дан ҡаҙанған атаҡлы ғалим булып танылa. Бында ла тормош юлы тип-тигеҙ һәм еп-еңел булмай, әлбиттә. Әммә ғүмеренең аҙағына хәтлем фәнгә, ғилемгә тоғро булып ҡалды, иң ауыр ваҡыттарҙа ла төшөнкөлөккә бирелмәне, бөтөн донъя төркиәтендә оло әһәмиәт ҡаҙанған хеҙмәттәр ижад итте. Истанбулға барыу менән, уны иң элек профессор Фуат Көпрүлү ярҙамында Төркиәт институтына төркиселек ассистенты итеп эшкә алалар. Бында килгәнсе, Германияла саҡта яҙған «Китабы дедеи Ҡорҡот хаҡында» тигән күләмле мәҡәләһе Төркиәт мәжмүғәһенең беренсе томына урынлаштырыла.

Төркиәлә ул тәүге осорҙа төрлө журналдарҙа Төркөстанлы, Төрөкмән, шулай уҡ Әбделҡадир, Иҙел уғлы һымаҡ псевдонимдар аҫтында мәҡәләләр баҫтырып] сығара. (Уның йәнә Ә. Башҡорт, Олоҡатай уғлы тигән псевдонимдар менән дә мәҡәләләр баҫтырыуы тураһында мәғлүмәттәр бар. 30-сы йылдар уртаһында ул Әбделҡадир Инан булараҡ киң танылыу таба.) 1927 йылда Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә «Яңы Төркөстан» журналын ойоштороп, уның өсөн күп кенә мәҡәләләр яҙа. 1928 йылда арҡаҙаштары менән бергә «Халыҡ белгеһе* хәбәрҙәре» мәжмүғәһен нәшер итә. 1929-1930 йылдарҙа «Төркиә халыҡ белгеһе берекмәһе» танытмаһы менән Хәсәнҡала, Эрзерум, Эрзинжан ҡалаларында һәм уларҙың әйләнә-тирәһендә, Ғазиантеп виләйәтендә фольклор материалдары йыйнау менән шөғөлләнә. Шул тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә ғәйәт ҡиммәтле ғилми мәҡәләләре донъя күрә. 1933 йылдың февралендә Анкараға саҡырылып, Төрөк тел ҡоромоноң («Түрк дил ҡурумы») махсус кәтибе вазифаһына тәғәйенләнә. Шул уҡ йылдың көҙөндә Төрөк Республикаһының президенты Кемаль Ататөрк тарафынан ҡабул ителә. Төрөк профессоры Хикмәт Танйу әйтеүенсә, Ататөрк Әбделҡадирҙың ғилми әҙерлекле, киң мәғлүмәтле, егәрле булыуын, өлгө алырҙай ғалим икәнлеген бик тиҙ аңлай һәм юғары баһалай. Президенттың уға күрһәткән илтифаты, Ә. Инанға профессор исеме бирелеү менән бәйле ошондай ваҡиға хаҡында бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле иҫтәлек һаҡланған:

«1935 йылда Ататөрк, төрөк милли мәҙәниәтен уртаға ҡуйып өйрәнеүҙе ойоштороу өсөн Анкарала тел, әҙәбиәт һәм география факультеты булдырырға ҡарар иткәс, унда эшләйәсәк ғалимдарҙан хәтеренә иң башта Әбделҡадир Инан килә. Уны янына саҡыра, яҡын күреп, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән:

— Һин был факультетта Шәреҡ төрөк телдәрен тикшереү менән

шөғөлләнерһең һәм дәрес бирерһең, һине профессор итербеҙ, — тигән.

Әбделҡадир Инан рәхмәт белдерә.

— Дипломымды һуғыш барышында юғалттым. Хәҙер ҡулымда дипломым юҡ, — мәғәнәһендә яуап бирә.

— Мин һинән диплом һорамайым. Дәүләт рәйесе сифатында был хоҡуҡты һиңә мин бирәсәкмен. Мәҙәниәт министры Саффет Арыҡан да риза булыр. Ғилми әҫәрҙәре булмаған бер нисә профессорҙың дипломдары бар. Мин диплом түгел, ғилми әҫәр һәм фәнни ысулға таянған тикшеренеүҙәр күрергә теләйем, — ти Ататөрк һәм шунан мәғариф министрына Әбделҡадир Инанды профессор итеп тәғәйенләргә телдән әмер биреп, тәҡдимдәр яһай. Шулай итеп, Әбделҡадир Инан 1936 йылдың 18 ғинуарында, 5320-се һанлы танытма алып, мәғариф министры Арыҡан имзаһы нигеҙендә профессор вазифаһын башҡара башланы»[1].

Анкара университетында ул алтай, тува, хакас, яҡут (саха) һ.б. телдәр буйынса дәрес бирә. Әбделҡадир Инан, бөтөн төрки телдәре менән бер рәттән, ғәрәп, фарсы, рус, немец телдәрен бик яҡшы белә, үҙенең ғилми хеҙмәттәрендә шул телдәрҙә сыҡҡан материалдар һәм сығанаҡтар менән иркен эш итә. Уның ғүмеренең 1936 йылдан алып 1944 йылға тиклем 9 йыл буйы Анкара университетының тел, тарих, география факультетында профессор вазифаһын башҡарған дәүере айырыуса емешле була. Ошо ваҡыт эсендә уның төрки халыҡтарының фольклорына, боронғо ырым-йолаларына, тел, музыка, художестволы әҙәбиәт ҡомартҡыларына арналған 100-ҙән артыҡ хеҙмәте баҫылып сыға. Ул төрки халыҡтарының эпосы, айырыуса ҡырғыҙҙарҙың «Манас» әҫәре буйынса ҙур белгес булараҡ абруй ҡаҙана. Төрки һәм монгол халыҡтарында мосолман диненә тиклемге ышаныуҙар, шул иҫәптән шаманлыҡ ҡалдыҡтары мәсьәләһен тикшереү өлкәһендә ҙур белгес булып таныла. Башҡорттар һәм Башҡортостанға арналған «Башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡаршы көрәш тарихы» (1933), «Башҡорт туйы» (1943), «Башҡорт-рус һуғышы» (1943) тигән мәҡәләләре донъя күрә. Әммә 1944 йылда, фашистик Германияның еңелә барыуы айҡанлы Төркиәлә сәйәси йүнәлеш ҡырҡа үҙгәреп, милли хәрәкәт, дөйөм төрки берҙәмлек идеялары ҡыҫымға алына. Әхмәтзәки Вәлиди, ҡулға алынып, төрмәлә ултырып сыға. Уның яҡын арҡаҙашы булараҡ, Ә. Инанды ла дәрәжәһенән һәм биләгән вазифаһынан мәхрүм итәләр. Ғалим ауыр хәлдә тороп ҡала, уға факультетта тәржемәсе, өйрәтеүсе кеүек вазифа бирелеп, аҙ ғына эш хаҡына элекке дәрестәрен дауам итергә тура килә. 1955 йылдан алып, факультетта эшләү менән бергә, Төрөк тел ҡоромонда баш белгес булып хеҙмәттәшлек итә. 1964 йылдан 1971 йылда (82 йәшендә!) пенсияға киткәнгә ҡәҙәр Төрөк мәҙәниәте институтында эшләй. «Был институтта эшләгән сағында

айына ни бары 500 лира эш хаҡы ала торғайны», – тип яҙа Хикмәт Танйу. Әммә, нисек кенә булмаһын, институттың баҫма органы — «Төрөк мәҙәниәте» мәжмүғәһендә, йыллыҡ йыйынтыҡтарҙа бер-бер артлы ғилми мәҡәләләре донъя күрә. 1968 йылда иһә иң мөһим баҫмаларының береһе — «Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр» исемле китабының беренсе киҫәге нәшер ителә.

Әбделҡадир Инандың ғилми эшмәкәрлеге, дөйөм алғанда, алты тиҫтә йыл буйы дауам итә. (Был эште күп ваҡыт, ниндәй вазифа биләүенә ҡарамаҫтан, үҙ алдына һәм үҙенең фәнгә бирелгәнлеге арҡаһында алып бара.) Уның 350 ғилми хеҙмәте баҫылып сыға. Алда билдәләп үтелгәндәрҙән тыш, Йософ Баласағунлының «Ҡотадғу белек», Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуани лөғәт әт-төрк» әҫәрҙәрен, «Кодекс куманикус» һәм «Сыңғыҙнамә» һымаҡ ҡомартҡыларҙы өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәре төркиәтселек фәнен үҫтереүҙә ғәйәт ҙур өлөш булып иҫәпләнә.

Башҡорт халҡының бөйөк улы, данлыҡлы төркиәтсе ғалим Әбделҡадир Инан (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) 1976 йылдың 1 ноябрендә 87 йәшендә Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала яҡты донъя менән хушлаша.

Аҙаҡ килеп, шуны әйтергә кәрәк: милләтебеҙҙең был арҙаҡлы улы тураһында заманында һис тә хәҡиҡәткә тура килмәгән, асылда ялған хәбәрҙәр таратылды. Йәнәһе, ул үҙенең башҡорт булыуын онотҡан, үҙ халҡы менән ҡыҙыҡһыныуы ла шул хәтлем генә һ.б. тип яҙыусылар булды. (Хәйер, тоталитар режим осоронда бүтән төрлө яҙырға ла ярамағандыр.) Әммә был бөйөк шәхес һәм ғалим үҙенең булмышында ла, ғилми эшмәкәрлегендә лә бер ҡасан да үҙ халҡы, үҙенең тыуған Уралы тураһында онотмаған. Был хаҡта ошондай һүҙҙәрҙе килтереп үтеү урынлы булыр:

«Ватанын һағыныуы һис бер ваҡыт һүрелмәне, ундағы тормошон ҡабат-ҡабат иҫенә төшөрөр ине. 1912 йылда баҫылған шиғыры быға иң гүзәл үрнәк:

Йөрәккәйем яна, йәнем һыҙлай,
Урал, һиндә дошман кургәндә.
Зекерем һин, Урал, тәсбихем һин,
«Урал» тирем, гүргә кергәндә.[2]»

Әбделҡадир Инан тураһында ошо уҡ авторға тағы бер ҡат мөрәжәғәт итәйек:

«Төркиәлә ғилми тикшеренеү эшен вафатына тиклем дауам итеп, — ти ул, — китапханаларыбыҙҙа иҫәпһеҙ әҫәрҙәр һәм сығанаҡтар ҡалдырҙы. Ҡырғыҙҙарҙың илебеҙҙә бик аҙ билдәле булған «Манас» дастанын да был бөйөк инсан арҡаһында беләбеҙ... Библиографик мәғлүмәте шул тиклем киң булды,

унын янында белешмә китабы асып тороуҙың кәрәге булмай торғайны».

Ғалимдың донъя төркиәтселек фәнендә ҙур урын алған бай ғилми мираҫын үҙ халҡына ҡайтарыу эше алда торған бурыс булып ҡала әле. Ә инде был мираҫты өйрәнеү, Ә. Инандың тормош юлын һәм ғилми эшмәкәрлеген төрлө яҡлап тикшереү эштәре хәҙер йылдан-йыл киңәйә бара.

Ә. Инандың хәҙерге ваҡытта Төркиәлә бер улы һәм бер ҡыҙы иҫән-һау йәшәп ята. Улы урман инженеры, ҡыҙы – уҡытыусы. Бөйөк заттың нәҫел ағасы дауам итә.

* * *

*Белге — «фольклор» мәғәнәһендә.

[1] Хикмәт Танйу. Профессор Әбделҡадир Инан // Ағиҙел. 1994, № 2, 155-се бит.

[2] Сәғиҙә Арыҫланбәк. Профессор Әбделҡадир Инан // Ағиҙел, 1994, № 2, 159-сы бит.

* * *

Әҫәрҙәр: Тарихта үә бөгөн шаманлыҡ. Материалдар һәм тикшеренеүҙәр. Анкара, 1954; 2-се баҫма. Анкара, 1972 (төрөк телендә); Ҡөрьән Кәримдең төрөксәгә тәржемәләре тураһында бер тикшеренеү. Анкара, 1961; Мифтар һәм уларҙың килеп сығыуы. Анкара, 1962; Башҡорт төрөктәрендә шаманлыҡ ҡалдыҡтары. Анкара, 1965; Мәҡәләләр үә тикшеренеүҙәр. Анкара, 1968; 2-се баҫма. 1-се киҫәк. Анкара, 1987; 2-се киҫәк. Анкара, 1991; «Манас» дастаны. Ҡыҫҡартып Төркиә төрөксәһенә тәржемә иткән: Әбделҡадир Инан. Истанбул, 1972; Төркиәгә килерҙән алдағы тормошомдан бәғзе хәтирәләр // Ағиҙел. 1994, №№ 1—2; Башҡорт йәйләүендә: Һайланма әҫәрҙәр. (М. Нәҙерғоловтың баш һүҙе.) Өфө: Китап, 1996.

Әҙәбиәт: Харисов Ә.И. Босфор ике ағымлы // Рухи тамырҙар: Әҙәбиәт һәм фольклор мәсьәләләре. Өфө, 1984; Хөсәйенов Ғ.Б. Фәтхелҡадир Сөләймәнов — Абдулҡадир Инан // Ағиҙел. 1990, № 1; Насиров Р.Х. Инаныу // Башҡортостан. 1993, 11—13 август; Хикмәт Танйу. Профессор Әбделҡадир Инан // Ағиҙел. 1994, № 2. 149—158-се биттәр; Ураксин З.Г. Абдулкадыр Инан (Фатхелькадыр Сулейман) // Судьба и наследие башкирских ученых-эмигрантов. Уфа, 1995. 109—118-се биттәр. Инан Абдулкадыр // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Библ.: Абдулкадыр Инан: Библиографический указатель. Уфа, Гилем, 1996.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған
(1890—1970)



Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының бөйөк тарихи шәхестәре галереяһында, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин, Мөхәммәтша Буранғол, Һәҙиә Дәүләтшина һымаҡ, милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы, рухи ҡиблаһы булырҙай айырыуса балҡыу һәм сағыу исемдәр бар. Атаҡлы ғалим һәм дәүләт эшмәкәре, 1917—1920 йылдарҙа Башҡорт милли хәрәкәтенең арҙаҡлы етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди — нәҡ бына ошондай аҫыл заттарыбыҙҙың береһе. Исеменә һәм эштәренә нахаҡ яла яғылыу арҡаһында, буласаҡ бөйөк ғалим, әҙип һәм фекер эйәһе, 1920 йылда тыуған Башҡортостанынан эмиграцияға китеп, ҡалған ғүмерен ғәзиз Ватанынан ситтә үткәрергә мәжбүр булды. 1925 йылда боронғо ҡәрҙәштәребеҙ — Төрөк иле уны үҙенә һыйындырҙы. Ошо ваҡыттан Ә. Вәлиди тормошонда, бик күп ауырлыҡтар һәм ҡатмарлыҡтар аша үтеп, шәрҡиәтселек, йәғни Көнсығышты өйрәнеү фәне өлкәһендә иң күренекле белгестәрҙе таң ҡалдырырҙай асыштар һәм тәрән йөкмәткеле ғилми хеҙмәттәр менән билдәләнгән яңы бер дәүер башланды. Уның исеме XX быуаттың бөтөн донъяға танылған иң күренекле шәрҡиәтсе ғалимдары рәтендә урын алды. Шул уҡ ваҡытта 1969 йылда, «Хәтирәләр» тигән ҙур күләмле мемуар әҫәрен баҫтырып, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең туған халҡына мәңгелек ҡомартҡы булырҙай, фәнебеҙҙә һәм милли әҙәбиәтебеҙҙә ҡабатланмаҫ күренеш тип баһаланырҙай һоҡланғыс бер әҫәр ҡалдырҙы.

Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы Вәлиди (Вәлидов) 1890 йылдың 10 (22) декабрендә элекке Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Көҙән ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Боронғо ата-бабалары — Юрматы ҡәбиләһенең Илсек-Тимер тармағына ҡараған суҡлы-кай ырыуы башҡорттары. Ә. Вәлиди үҙе яҙғанса, Көҙән ауылының нигеҙен тәшкил иткән ырыуҙаштары 1800 йылдарҙа «Көҙәндең һәм Баҡының ерендәге ике түбәлә һәм Яҡуптың ерендәге һаҙлыҡ башында тырым-

тырағай ултырған 12 йорттан ғибәрәт булған». Әммә, XVIII быуаттағы башҡорт хәрәкәттәренән һуң, 1860 йылда, яуҙа һәләк булған аҫабаларҙың ерҙәренә батша хөкүмәте Көнбайыш Башҡортостандың Минзәлә төбәгенән крәҫтиән төркөмдәрен килтереп, айырым мәхәллә хәлендә ерләштерә. Шул сәбәпле Көҙән типтәр ауылдары исемлегенә кереп китә. Буласаҡ дәүләт эшмәкәре, ғалим һәм әҙип ҙур уҡымышлы һәм тәрбиәле башҡорт ғаиләһендә үҫә. Атаһы Әхмәтшаһ Вәлит улы Көҙәнов донъя хәлдәре тураһында яҡшы уҡ хәбәрҙар булған, боронғо дастан һәм риүәйәттәрҙе белгән, ауылда мәҙрәсә тотҡан. Ул үҙенең хаж сәйәхәте тураһында «Әл-Хижазға сәфәр» һәм «Һатлыҡ улының тормошо» исемле ике китап яҙа. «Атайымдың мәҙрәсәһе дүрт бинала урынлашты, йөҙ илле-ике йөҙ самаһы шәкерте булды. Был шәкерттәрҙең күбеһен тау башҡорттары, алыҫтан килгән балалар тәшкил итте», — тип хәтерләй аҙаҡ Ә. Вәлиди. Ошо мәҙрәсәлә ул атаһынан ғәрәпсәгә өйрәнә, дин дәрестәре ала. Бында йәнә фарсы, рус телдәре һәм математика уҡытыла. Әхмәтзәкиҙең әсәһе – мөғәллимә, оҫтабикә Өммөлхаят фарсы һәм иҫке төрки телдәрендә бихисап шиғырҙарҙы хәтерендә һаҡлаған, улына ла Аттар, Руми, Науаи, Йәсәүи, Аллаһияр кеүек боронғо классик шағирҙарҙың китаптарын уҡыта һәм шиғырҙарын ятлата. «Намаҙ ниәттәрен дә әсәйем фарсы телендә өйрәтә торғайны», — ти Вәлиди һәм һуңынан «Урта һәм Яҡын Шәреҡтең тормошон бик яҡшы өйрәнеү, ул илдәрҙә күп эскерһеҙ дуҫтар ҡаҙаныу мөмкинлеге биргән фарсы телен ихлас өйрәткәне өсөн» әсәһенә ғүмер буйы рәхмәтле була. Ә. Вәлидиҙең әсәһе хаҡында ошондай һүҙҙәре лә үтә фәһемле: «Бик дини булды. Намаҙын һис тә ҡалдырмаҫ һәм, атайым кеүек үк, таң атыуҙан тороор ине. Әсәйемдең һөйләшеүе бик кинәйәле һәм зауыҡлы булды, һәр саҡ шиғыр ҡушып, һәр йөмләһен боронғолар һүҙе менән нығытып, тапҡыр мәҡәлдәр әйтеп һөйләшә торғайны». Йәнә шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Әхмәтзәки Вәлиди күп балалы ғаиләлә үҫә. Улар өс ҡыҙ, биш ир бала булалар. Шуға күрә ғалимдарҙың, Әхмәтзәкиҙең әсәһе күп балалы барлыҡ төрки ҡатындары өсөн дә үрнәктер, тип әйтеүе бик урынлы.

Ә. Вәлидиҙең атаһы яғынан олатаһы тураһында ошондай һүҙҙәр бар: «Ҡартатам Вәлит байҙың өйө XIX быуаттың беренсе яртыһында ҙур йыйылыштар, мәжлестәр ойошторола торған тирә-яҡтың бер үҙәге булған, шуға күрә башҡорт кантон башлыҡтары, рус генералдары, губернаторҙар, шөһрәтле муллалар һәм шәйехтәр уның мосафиры була». Әхмәтзәкиҙең фамилияһы — бына ошо ҡартатаһының исеменән. Аҙаҡ, эмиграцияла йәшәгәндә, 1935 йылда, ул үҙенә йәнә, бишенсе быуын ҡартатаһы Иштуған хөрмәтенә, Туған тигән үҙенсәлекле мәғәнәле исем-тахаллус һайлай.

1902 йылдың көҙөндә Ә. Вәлидиҙе Көҙәндән ун дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы

Үтәк ауылына, әсәһе яғынан бабаһы Хәбибназар әл-Үтәкиҙең мәҙрәсәһенә уҡырға илтәләр. Бында ул бигерәк тә ғәрәп теле һәм әҙәбиәте буйынса белемен камиллаштыра, тарих, фәлсәфә, география, математиканан Үтәктә, йәнә Маҡар ауылында шәхси дәрестәр ала. Олатаһы Хәбибназар үҙ ваҡытында, Ҡазанға барып, күренекле ғалим-реформатор, тарихсы һәм фекер эйәһе Шиһабетдин Мәржәниҙең шәкерте, һуңыраҡ уның мәҙрәсәһендә «шөһрәтле бер хәлфә, йәғни мөҙәррис ярҙамсыһы булған», ислам тарихына арналған әҫәрен төркисә яҙып баҫтырған, ислам метафизикаһына һәм фәлсәфәһенә бағышланған мәҙрәсә китаптарына ғәрәпсә аңлатмалар яҙған. Хәбибназар әл-Үтәкиҙең сәйәси мәсьәләләрҙә төплө фекер йөрөтөүе, Ҡырымда 1883 йылда сығарыла башлаған «Тәржемән» гәзитен шул ваҡыттан уҡ алдырып, Төркиәнән китаптар ҡайтартып уҡып барыуы, башҡорттоң атаҡлы дин эшмәкәре шәйех Зәйнулла Рәсүлевкә бик яҡын тороуы һәм, ғөмүмән, уның даирәһе Вәлидигә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Ул асылда, төрөк профессоры Тунжер Байҡара әйткәнсә, «Вәлидиҙе» тарихсылыҡ юлына этәргән» шәхестәрҙең береһе була.

Әхмәтзәки Вәлиди шәхесенең формалашыуында йәнә үтә мөһим фактор — уның кесе йәштән үк тау башҡорттарының боронғо йәйләү тормошон, йыр-моңдарын, тарихи риүәйәт һәм ҡобайырҙарын, илаһи ҡурай тауышын тыңлап, ошо мөхиттең юғары рухиәтен, ыҙан-йолаларын, әхлаҡ һәм әҙәп-ҡанундарын, ниһайәт, халыҡтың хәтерендә һәм ҡульяҙма ҡомартҡыларҙа быуындан быуынға тапшырыла килгән тарихын күңеленә һеңдереп үҫеүе. Атаһы Әхмәтшаһтың, Ә. Вәлиди яҙғанса, бөтөн бәйләнештәре көнсығыш башҡорттарына тоташҡан була. Сөнки Көҙән ауылына нигеҙ һалған суҡлы-ҡай башҡорттары, йәнә һәнәкле-ҡай, йөрәктау-ҡай, таулы-ҡай тармаҡтарын берләштергән ҡай йәки ҡайлы ырыуының бер өлөшө булып, хәҙерге урынға килеп ултырырҙан алда, әүәлерәк, Тубыл буйындағы Ерҡарағай тигән ерҙә, бынан һуң Көнсығыш Уралдың Ирәндек һәм Сыбаркүл буйҙарында, бөрйәндәр араһында, йәшәгәндәр, ә Көнсығыш Уралдағы Көҙөй һәм Нуғай ауылдары иһә, элегерәк Көҙән менән күрше булып, һуңғыраҡ дәүерҙәрҙә яңынан Урал тауҙарының арғы яғына — Ирәндек итәктәренә күскәндәр. Әммә был ауылдар араһында ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, ҡоҙалашыу мөнәсәбәттәре, ике арала, Көҙәндән йөҙ саҡрым самаһы алыҫлыҡта, Урал ҡуйынында ятҡан Аҡбейек йәйләүҙәренә бергәләп йәйләүҙәргә сығыу йолаһы XX быуат башында ла дауам иткән. Был хаҡта Ә. Вәлидиҙең «Хәтирәләр» әҫәрендә ошондай тулҡынландырғыс юлдарҙы уҡыйбыҙ:

«Мин дә, ун дүрт йәшемдән алып Ирәндектәге Көҙөй һәм Нуғай ауылдарында бик күп тапҡырҙар булып, иҫке дуҫтарыбыҙ һәм өлкән апайҙарыбыҙҙа ҡалып, Төркиәлә лә билдәле булған «Мораҙым»ды («Иҙеүкәй»)

яҙып алдым һәм башҡа риүәйәттәрҙе йыйҙым. Минең иң тәүге ғилми хеҙмәттәремдең береһе — шул дастанға бағышланып, 1911 йылда баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрем. Беҙҙең йылҡыларыбыҙ яҙын ата-бабаларыбыҙ заманынан бирле йәйләгән Аҡбейек йәйләүҙәренә күтәүсеһеҙ ҙә үҙҙәре барыуы, көҙөйҙәрҙең дә яҙын эҫе көндәрҙә, йылҡыларын ҡыуып, Аҡбейеккә китеү ғәҙәттәрен миңә һөйләй торғайнылар һәм шул дәүерҙән йәшәп килгән йырҙарҙы ишеттерерҙәр ине». Ә. Вәлиди башҡорттоң ана шул иркен йәйләү тормошон һағынып йырлаған йырҙарының береһен иҫкә төшөрөп үтә:

Аҡбейеккәй тауҙы Тәңре биргән,
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйлә, тип.
Үрешеңдән уйнап ҡолон килә,
Ҡороҡһоҙ уҡ елә, бәйлә, тип.

Бына ошо йәнгә яҡын йәннәттәй Урал тәбиғәте араһында, саф йылғаларҙың һыуын эсеп, яҡшы аттарҙа бәйгеләрҙә ҡатнашып, ҡымыҙ мәжлестәрендә йыр-көйҙәребеҙҙе һәм сәсәндәрҙең хикмәтле һүҙҙәрен тыңлап, халҡыбыҙға, ысынлап та, Тәңренән бирелгән изге тыуған тупраҡтан көс һәм ҡеүәт алып үткәргән бала сағы, йәшлек йылдары хаҡындағы иҫтәлектәр ғүмере буйына Әхмәтзәки бабабыҙҙың күңелен яҡтыртып, хатта иң ауыр мәлдәрендә лә ҡайғы-һағыштарын таратып, йәненә рухи таяныс булып торған.

1908 йылдың 29 июнендә Вәлидиҙең тормошонда өр-яңы дәүер башлана. Йәйҙең йәмле ошо көнөндә ул, атаһы менән әсәһе күрше ауылға ҡунаҡҡа киткән бер ваҡытта, атаһына, «уҡырға теләйем, өйләнмәйем», тип хат яҙып, асыуланмауҙарын, риза булып доға ҡылыуҙарын үтенеп, йәйәүләп тыуған төйәгенән алыҫ юлға сығып китә. Башта Ырымбурҙа туҡтала, артабан, ураУ-урау юлдар үтеп, Ҡазанға ҡарай йүнәлә.

Ҡазанға барыу менән, Әхмәтзәки Вәлиди ең һыҙғанып фән, ғилем, ижад эшенә тотона. Ҡаланың уҡымышлылар, әҙиптәр, нәшерҙәр даирәһендә тиҙ арала танылыу таба. Ғабдулла Туҡай менән таныша. Бында ул «Ҡасимиә» мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Мөғәллим Фәтих Мөхәммәтйәровтың математика дәрестәренә йөрөй, шулай уҡ ғәрәп теленән дәрестәр ала, рус теле мөғәллимлегенә имтихан тапшырыуға әҙерләнә, бер аҙ ваҡыт ислам дине һәм мәҙәниәтенең нигеҙен билдәләгән Ҡөрьән һәм «Фиҡыһ»тың русса тәржемәләрен ғәрәпсәһенә сағыштырып өйрәнеү менән шөғөлләнә. Үҙ алдына Шиһабетдин Мәрйәниҙең баҫылмаған әҫәрҙәрен, шул иҫәптән «Вафиятел-әсләф» тигән һигеҙ томлы ғәрәпсә тарих китабын уҡып сығып, хатта шул хеҙмәттең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен бер томлыҡ итеп яҙып ҡуя. 1915 йылда, Ш.

Мәржәнизең тыуыуына 100 йыл тулған көндәрҙә, Ҡазан университетының Тарих, археология һәм этнография йәмғиәте, ошо «ҡыҫҡартманан ҡыҫҡартма яһап», бер мәҡәлә итеп эшләп, рус телендә баҫтырып сығара. Ҡазанда Вәлиди шулай уҡ ғәрәп әҙиптәренең әҫәрҙәрен яратып уҡый, төрөк тарихы менән ныҡлап мауығып китә. Бында йәшәүсе күренекле шәрҡиәтсе ғалимдарҙан Н.И. Ашмарин һәм Н.Ф. Катанов менән танышыуы ла бик файҙалы була. Ҡазанға барыуының тәүге йылында ул ваҡытлы матбуғат биттәрендә әҙәбиәт һәм тарих буйынса мәҡәләләр баҫтыра.

1909—1910 уҡыу йылының ҡышында Ә. Вәлиди «Ҡасимиә» мәҙрәсәһендә төрки тарихынан һәм ғәрәп әҙәбиәте тарихынан мөғәллим итеп тәғәйенләнә. Тотороҡло дәреслек кәрәк булғанлыҡтан, лекциялары өсөн «Төрк тарихы» әҫәрен яҙа башлай. Шуның менән бергә сит ҡәүем* мәктәптәрендә рус телен уҡытыу хоҡуғы алыу өсөн имтихан бирә.

1910—1911 уҡыу йылына, профессор Н.Ф. Катановтың кәңәше менән, Ҡазан университетының филология факультетында ирекле тыңлаусы булараҡ лекцияларға йөрөй башлай. Шәрҡиәт, дөйөм һәм рус филологияһы, дөйөм тарих буйынса профессорҙар Н.Ф. Катанов, В.А. Богородицкий, М.М. Хвостов һәм К.В. Харламповичтарҙың лекцияларын тыңлай. Үҙе мәҙрәсәлә төрки тарихы дәрестәрен, шул уҡ темаға китап яҙыуын дауам итә. Этнографтар һәм шәрҡиәтселәр Н.Я. Аристов, В.В. Радлов, Г.Н. Потанин хеҙмәттәрен төплө өйрәнә. Университетта семинарҙар алып барыусы профессор Богородицкий менән берлектә «Башҡорт һәм татар һөйләштәрендә тон һәм вибрация» тигән ғилми этюд баҫтырып сығара. 1911—1912 уҡыу йылында ла Ә. Вәлиди университетта лекциялир тыңлай, гимназия курсы буйынса имтихандарға әҙерләнә, Европа шәрҡиәтселәренең ғәрәп, фарсы, төрки әҙәбиәттәренә арналған хеҙмәттәрен уҡый. Француз һәм немец телдәрен өйрәнеү менән шөғөлләнә. 1912 йылдың аҙағында Ҡазандың «Милләт» матбағаһында «Төрк тарихы» китабы «Төрк үә татар тарихы» тигән исем менән баҫылып сыға. Авторҙың ҙур күләмле был тәүге хеҙмәте уға көтөлмәгәндә ысын мәғәнәһендә шөһрәт килтерә. Әҫәрҙе юғары баһалап, атаҡлы шәрҡиәтсе В.В. Бартольд уның менән самими бәйләнеш урынлаштыра. Ә. Вәлидиҙең был атаҡлы ғалим менән бәйләнештәре һәм дуҫтарса мөнәсәбәте аҙаҡ Бартольд вафат булғанға тиклем дауам итә. Әҫәрҙе баһалау йөҙөнән Ҡазан университетының Тарих, археология һәм этнография йәмғиәте Ә. Вәлидиҙе үҙенә ағза итеп алып, уға тантаналы рәүештә диплом тапшыра. 1913 йылда «Шура» журналының 19-22 һандарында баҫылып сыҡҡан «Бөрйән башҡорттары» тигән мәҡәләләр циклы иһә Башҡортостанда ғәйәт ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

1913—1914 йылдарҙа Ҡазан университетының Археология, тарих һәм

этнография йәмғиәте һәм Рәсәй Фәндәр академияһы, Урта Азияны һәм Алыҫ Көнсығышты өйрәнеү буйынса Халыҡ-ара йәмғиәт Ә. Вәлидиҙе Төркөстандың Фирғәнә виләйәтенә һәм Бохара ханлығына оҙайлы ғилми командировкаларға ебәрә. Был сәфәрҙәрҙән ғалим уға тиклем фәндә билдәһеҙ бик ҡиммәтле боронғо шәреҡ ҡулъяҙмаларын (шул иҫәптән Ҡөрьәндең X быуатҡа ҡараған төркисәгә тәржемәһен) табып алып ҡайта, ошо сәйәхәттәренең һөҙөмтәләре тураһында Петербургта, Ҡазанда, Ташкентта ғилми баҫмаларҙа хәбәрҙәр бирә. Икенсе сәйәхәт ваҡытында табылған ҡиммәтле ҡомартҡылар араһында Йософ Баласағунлының (XI быуат) «Ҡотаҙғу белек» исемле бөйөк поэмаһының яңы бер нөсхәһе лә була.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең, ошо эштәр менән мәшғүл булыу арҡаһында, Ҡазанда университетта белем алыу эше туҡталып ҡала. Был бурысты уға һуңыраҡ, 30-сы йылдарҙа, Вена ҡалаһында түңәрәкләп ҡуйырға тура килә. 1914 йылда башланып киткән беренсе донъя һуғышы уның яҙмышында тағы бер боролош яһарға мәжбүр итә. Ә. Вәлиди, сит ҡәүемдәр мәктәптәренең рус теле уҡытыусыһы танытмаһы алыу айҡанлы, батша указы менән хәрби хеҙмәттән азат ителә. Шул уҡ йылдың аҙағында ул Өфөгә ҡайта һәм «Ғосмания» мәҙрәсәһендә төрки тарихын уҡыта башлай. Ошо уҡ осорҙа, 1914—1915 йылдарҙа, «Төрки тарихы»ның икенсе киҫәге өҫтөндә эшләй. Өфөлә ул шулай уҡ китаптың баҫылып сыҡҡан өлөшөн ҡайтанан ҡарап сыға, нәшриәттә ҡыҫҡартылған урындарын яңырта, «XVIII быуатта Фирғәнә хандарының тарихы» тигән бүлек өҫтәй. Өфөлә сәйәси мәсьәләләргә нығыраҡ ылыға, уның 1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда көнсығыш халыҡтарының территориаль автономияға хоҡуғын яҡлап сығыш яһаусы атаҡлы башҡорт адвокаты Ғәлиәскәр Сыртланов, ҡаҙаҡ хандарының ейәне Сәлимгәрәй Йәнтүрин кеүек билдәле кешеләр менән аралашыуы ла эҙһеҙ үтмәй. 1915 йылдың аҙағында Өфө губернаһы мосолмандарының йыйылышы Ә. Вәлидиҙе Думаның мосолман фракцияһына үҙҙәренең вәкиле итеп һайлайҙар һәм тағы ла көтмәгәндә уның тормошонда өр-яңы дәүер башлана. Тиҙҙән ул Петроградҡа китә һәм 1916 йылдың башынан ҡайнап торған сәйәси тормош эсенә сума, уға 1923 йылға тиклем, уттар-һыуҙар кисеп, алһыҙ-ялһыҙ милли-азатлыҡ хәрәкәттәренең алғы сафында барырға насип була.

1915—1916 йылдарҙа ул сәйәси эшмәкәрлеккә күп ваҡыт бирә, әммә Петроградта, Дәүләт Думаһының эшендә ҡатнашыу менән бергә, шәрҡиәтсе ғалимдар менән хеҙмәттәшлеген дә туҡтатмай. Ул башлыса Азия музейы һәм Император география йәмғиәтендә ғилми эҙләнеү эштәре менән шөғөлләнә.

1917 йылдың 27 февраль иртәһендә, йәғни Февраль революцияһы башланған көндө, Вәлиди Петроградта була. Был тарихи ваҡиғаны ул: «Йә раббым, ошоноң

менән минең милләтемә лә бер ҡотолоу юлы ас», — тип Аллаға ялбарыу һүҙҙәрен әйтеп ҡаршылай. 1917 йылдың 7 майында Мәскәүҙә Рәсәй мосолмандарының дөйөм конгресы асылырға тейеш була. Был йыйын алдынан Вәлиди, Ташкентта үткәрелгән ике конгреста ҡатнашып, шулай уҡ Ырымбурҙа башҡорт зыялыларын йыйып, Мәскәүгә башҡорт халҡынан делегаттар ебәреүҙе ойоштороп, ғәйәт ҙур эштәр атҡара. Рәсәй мосолмандары конгресында (съезында) илдә төрки халыҡтарының дәүләт ҡоролошо мәсьәләһендә айырыуса принципиаль көрәш алып барырға тура килә. Бер яҡта — унитаристар, икенсе яҡта федералистар торған ҡапма-ҡаршы ике платформаны яҡлаусылар араһындағы хәл иткес бәрелеш була был. Федералистар һәм улар сафында Әхмәтзәки Вәлиди төрки халыҡтарының территориаль автономия һәм Рәсәйҙең федератив ҡоролошо идеяһын яҡлап сығыш яһайҙар. Әммә башында Саҙри Мәҡсүди, Ғаяз Исхаҡи торған татар эшмәкәрҙәре Рәсәйҙә унитар дәүләт ҡоролошо яғында торалар, территориаль автономиялы дәүләтселек өсөн көрәш фекерен ҡырҡа кире ҡағалар. Йыйында төрки халыҡтары вәкилдәренең күпселеге федерализм, автономиялы дәүләтселек идеяһын яҡлайҙар. Башҡорттар һәм әзербайжандар был конгреста хәл иткес күпселекте, төп нигеҙҙе тәшкил итеүселәр иҫәбендә була. Ә. Вәлиди унда «Рәсәй мосолмандарының этник сығыштары һәм уларҙың сәйәси тормошта әһәмиәте» тигән темаға бик тәьҫирле һәм асылда үҙенең көрәш программаһын билдәләгән телмәр менән сығыш яһай. Конгреста ике йөҙ етмеш бер ҡаршы, дүрт йөҙ ҡырҡ алты ыңғай тауыш менән мөхтәриәт һәм федерация платформаһы ҡабул ителә. Был еңеүҙең яҡын арала ҙур тиҙлек менән йәйелеп китәсәк башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте өсөн әһәмиәте бик ҙур була. Ошо уҡ конгреста ҡатнашҡан башҡорттар үҙҙәре йыйылып, мөхтәриәт һәм ер хаҡында һөйләшеү өсөн Ырымбурҙа үҙ аллы конгресс ойошторорға, тигән ҡарарға килә һәм, ҡаҙаҡтар менән дә аңлашып, конгресс үткәреүҙе бойомға ашырыу өсөн, Сәғит Мирасов, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Әхмәтзәки Вәлидиҙән торған өс кешелек комитет төҙөй. Ошо ваҡыттан һуң башҡорт милли хәрәкәтендә Рәсәйҙең барлыҡ төрки халыҡтары өсөн фәһемле мөһим ваҡиғалар булып үтә. Мәскәүҙәге мосолмандар конгресынан һуң аҙна-ун көн үтеүгә, әлеге өс кешенең инициативаһы менән, Ырымбурҙа Башҡорт өлкә шураһы төҙөлә, 20 июлдә Башҡорт ҡоролтайы уҙғарыласағы хаҡында иғлан ителә, «Башҡорт» исемле гәзит сығара башлайҙар. Был гәзиттең тәүге һанында Вәлиди ҡулы менән яҙылған имзаһыҙ мәҡәлә баҫыла, унда, әлбиттә, Башҡортостан мөхтәриәтен ҡороуҙың маҡсат итеп ҡуйылыуы, башҡорттарҙың Төркөстан менән Волга араһында бер күпер ролен уйнаясағы хаҡында әйтелә. Ә. Вәлиди 20 июлдә Ырымбурҙа асылған Беренсе Башҡорт ҡоролтайында ла, 28—29 августа Өфөлә

уҙғарылған Икенсе Башҡорт ҡоролтайында ла ҡатнаша, докладтар менән сығыш яһай. Беренсе ҡоролтайҙа башҡорт өлкә шураһы ойошторола (уның рәйесе итеп Шәриф Манатов һайлана). Унда ер, Рәсәйҙә дәүләт ҡоролошо һәм Башҡортостан менән идара итеү, уҡыу-уҡытыу һ.б., шулай уҡ XIX быуаттың 60-сы йылдарына тиклем йәшәп килгән башҡорт хәрби формированиеларын аяҡҡа баҫтырыу мәсьәләләре ҡарала. Икенсе ҡоролтайҙа Вәлиди Өфө, Ырымбур, Пермь губерналарынан Рәсәйҙең Учредительный йыйылышына кандидат итеп күрһәтелә. Башҡорт ҡоролтайынан һуң Өфө губернаһы мосолмандарының съезы асыла. Уның эшендә ҡатнашып, Вәлиди халыҡтарҙың үҙбилдәләнеш хоҡуғын тулыһынса яҡлауға өлгәшә. Съезд, уның үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, Саҙри Мәҡсүди кеүек татар унитаристарының тамам еңелеүенә сәбәп була. Вәлиди төрки һәм мосолман халыҡтары вәкилдәренең Мәскәүҙә, Петроградта, Ташкентта үткәрелгән тағы бер нисә съезында, кәңәшмәләрендә ҡатнаша, үҙенең тыуған яғында, башҡорт ауылдарында булып, Башҡортостан дәүләтселеге өсөн көрәшкә әҙерлек эштәре алып бара. Ошо уҡ 1917 йылдың 11 ноябрендә Башҡорт өлкә шураһы Ә. Вәлиди ҡулы менән яҙылған тарихи документ — «Беренсе һанлы фарман»ды нәшер итә. «Фарман»да большевиктарҙың ер мәсьәләһендәге сәйәсәте фашлана, сөнки, тип әйтелә унда, ул башҡорт крәҫтиәндәренең үҙ ерҙәренә хоҡуҡтарын юғалтыуға килтерә. 16 яңы стиль менән — 29) ноябрҙә Башҡорт өлкә шураһы Башҡортостанды автономиялы республика тип иғлан итә. Декабрҙә Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайы, Башҡорт автономияһын ҡанунлаштырып, үҙ аллы хөкүмәт төҙөй (хөкүмәт рәйесе итеп Юныс Бикбов һайланыла), милли ғәскәр ойоштороуҙы башлап ебәрә. Вәлиди хөкүмәт ағзаһы, эске һәм хәрби эштәр мөдире итеп раҫлана. Әммә был ваҡытта ул инде ысын мәғәнәһендә башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең идеологы һәм юлбашсыһы булып танылa. Граждандар һуғышы осоронда ул — Башҡорт ғәскәренең командующийы, 1919 йылдың мартында Башҡорт хөкүмәтенең Үҙәк Совет власы менән килешеүе нигеҙендә Башҡорт Автономиялы Совет Республикаһы төҙөлгәндән һуң – хәрби комиссар, Башревком рәйесе.

Башҡорттарҙың Советтар менән хеҙмәттәшлеге асылда 1919 йылдың 18 февраленән — Башҡорт хөкүмәтенең Совет власы яғына сығырға ҡарар иткән көнөнән башлана. Шул ваҡыттан Вәлиди большевистик етәкселәр менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Ленин, Сталин, Троцкий менән ҡат-ҡат осрашып, үҙенең позицияһын яҡлап, фекерләшә, бәхәсләшә. 1919 йылдың көҙөндә Башҡорт кавалерия бригадаһы Ленин телеграммаһы буйынса Петроградты яҡлау өсөн Юденичҡа ҡаршы яуға оҙатылғас, Әхмәтзәки Вәлиди Петроградҡа китә, унда Бартольд, Крачковский, Самойлович, Владимирцов һымаҡ атаҡлы ғалимдар

менән осрашып, уларға аҙыҡ-түлек менән ярҙам ойоштора. Үҙ сиратында Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡорт республикаһына ҡиммәтле китаптар, ҡала хакимиәте — Азия типографияһын бүләк итә. Вәлиди һәм уның көрәштәштәре, алда әйтелгән килешеүгә таянып, Башҡортостанда автономиялы дәүләтселек төҙөүгә өлгәшеүҙе, йәғни үҙенең армияһын, парламентын, хөкүмәтен, тышҡы бәйләнештәр бүлеген булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуялар. Әммә Совет хөкүмәте 1920 йылдың 19 майында Башҡорт автономияһын юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итә. Вәлидиҙе, Башҡортостан һәм башҡорт халҡы менән бәйләнешен өҙөү өсөн, Мәскәүгә саҡыртып алалар. Бындай шарттарҙа, артабан шовинизмға ҡаршы тороп була алмаясағын күреп, Башревком ағзалары тулы составта тиерлек үҙ вазифаларын ҡалдырып китергә ҡарар итәләр. Әхмәтзәки Вәлиди, үҙенең бер төркөм арҡаҙаштары менән, 1920 йылдың 29 июнендә Мәскәүҙән сыгып китә.

Өс йылға яҡын ул Төркөстан халыҡтарының милли хәрәкәтенә етәкселек итә. Үҙе бер нисә мәртәбә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Әммә көрәш бында ла уңышһыҙлыҡҡа осрай. Вәлиди, ауыр ҡайғы һәм юғалтыуҙар кисереп, 1923 йылдың мартында яҡын дуҫы Фәтхелҡадир Сөләймәнов (аҙаҡ профессор Әбделҡадир Инан) менән бергә Урта Азиянан бөтөнләй китергә мәжбүр була. Иң аяныслыһы — уға, юлдың һәм сик аша сығыуҙың хәүефле булыуы арҡаһында, һөйөклө ҡатыны Нәфисәне ҡалдырып китергә тура килә. Үкенескә ҡаршы, аҙаҡ улар бүтәнсә осраша алмайҙар. 1923 йылдың мартынан 1925 йылдың майына тиклем эмигранттар Иранда, Афғанстанда, Һиндостанда булып, ундағы архивтарҙа һәм китапханаларҙа эшләйҙәр, Көнбайыш Европаға күсеп, Париж, Берлин, Прага, Будапешт ҡалаларының иҫке китаптар һәм ҡулъяҙмалар фондтарын өйрәнәләр. Был осорҙа Вәлиди үҙ ғүмерендә мөһим урын алырҙай асыштарға юлыға: Ирандың Мәшхәд ҡалаһының «иң үҙәк хазинаһы булған Равза китапханаһын баштан аҙағына тиклем өйрәнеп сығып», IX һәм X быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән Ибн әл-Факиһ исемле мәшһүр ғәрәп географының «беҙгә килеп етмәгән тип иҫәпләнгән китаптарының бик тулы даналарын», Әхмәт ибн-Фаҙлан һәм Әбүдулаф исемле ике сәйәхәтсенең бергә ҡушып төпләнгән әҫәрҙәрен табыу бәхетенә ирешә. Артабан ул Ибн-Фаҙландың сәйәхәтнамәһен докторлыҡ диссертацияһы итеп әҙерләйәсәк. Был табыштар уның тормошона яңы йүнәлеш бирә — ошо 1923 йылдың март-апрель айҙарынан башлап ул үҙенең тормошон тулыһынса тиерлек ғилми эшмәкәрлеккә арнай. 1925 йылдың майында ул, Истанбулда туҡталып, Фуат Көпрөлө, Риза Нур һ.б. ғалимдар менән осрашып, китапханаларҙа Әл-Бируни, Рәшид әт-дин әҫәрҙәрен эҙләп табып, 1 июндә Анкараға барып, Төркиәлә төпләнеп ҡала. Ҡалған 45 йыл ғүмере башлыса ошо илдә ғилми тикшеренеүсе

һәм университетта төрки тарихы уҡытыусыһы, донъяға танылған шәрҡиәтсе профессор сифатында үтә. Үҙе әйткәнсә, бында ул иң элек «Осман дәүләтендә быуаттар буйы ҙур тырышлыҡ менән йыйылған тарихи сығанаҡтарҙы һәм документтарҙы баһалау менән» шөғөлләнә. Әммә фән, ғилем юлдары тап-таҡыр тип кем әйтер?! Бигерәк тә был юл тарих һәм тарихи ҡараштар менән бәйле булһа, көрәшһеҙ, ҡаршылыҡһыҙ ғына үҙ фекереңде раҫлау мөмкинме?

Вәлиди фән, ғилем өлкәһендә һәр ваҡыт яңылыҡҡа ынтылыусы ҡыйыу фекерле көрәшсе булып ҡала. 1932 йылда, университетта Тимурға арналған лекциялары айҡанлы төрлө ғәйептәр тағып, уның өҫтөнән Ататөркткөң үҙенә донос еткерәләр. Йәнә I Төрөк тарих конгресында Вәлидиҙең, бәғзе бер иҫкергән ҡараштарҙы кире ҡағып, бәхәскә кереүен оҡшатмайҙар. Уның тирәһендә атмосфера ҡуйыра бара һәм 1932 йылдың 8 июлендә Вәлидиҙе университетта уҡытыуҙан ситләштерәләр. Был ваҡиғанан һуң ул, Венаға барып, революцияға тиклем бүленеп ҡалған университет курсын тамамлап ҡуя. Ә 1935 йылдың йәйендә уны Бонн университетында мосолман фәндәре буйынса хөрмәтле профессор сифатында лекциялар уҡырға саҡыралар. Төркиәгә, мәғариф министрының саҡырыуын алғас ҡына, 1939 йылдың майында әйләнеп ҡайта һәм 1 сентябрҙән Истанбул университетында лекциялар уҡыу эшенә яңынан тотоноп китә, бында ул Төрөк дәүләтенең төрки тарихы кафедраһына етәкселек итә.

Вәлиди, эмиграцияға киткәндән бирле, Россияла ҡалған ҡатыны Нәфисәне үҙ янына килтерер өсөн тырышып ҡараһа ла, маҡсатына өлгәшеү юлдары бикле була. Ниһайәт, 1940 йылда ул румын нуғайҙары нәҫеленән Нәжмиә Үмәр ҡыҙы менән никахлаша. Улар бер ҡыҙ, бер ул үҫтерәләр (Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә Туған — тарих профессоры, улы Субидәй Туған – экономика фәндәре докторы, шулай уҡ профессор).

1944 йылдың 15 майында, Төркиә территорияһында Советтарға ҡаршы пантөркиселек эшмәкәрлегендә ғәйепләп, Әхмәтзәки Вәлидиҙе ҡулға алалар. Ул 17 ай һәм 10 көн буйы төрмәлә ултырып сыға. Ике тапҡыр суд булып, икенсеһендә аҡланһа ла, университеттағы эшен, төрлө ҡаршылыҡтар аша үтеп, 1948 йылдың июлендә генә дауам итеү мөмкинлеге бирелә. Уның ҡарауы, тотҡонда ултырған сағында ул «Ғөмүми төрк тарихына инеш» тигән китабын ҡайтанан эшләп, 1946 йылда яңынан нәшер итә. (Тәүге баҫмаһы 1940 йылда донъя күргән була.)

1948 йылдан һуң Вәлидиҙең тормошо сағыштырмаса тыныс шарттарҙа үтә, ғилми эштәре лә уға торған һайын күберәк уңыш килтерә. 1950 йылда ул «Тарихи ысул» исемле хеҙмәтен баҫтыра. 1951 йылда уның рәйеслегендә Истанбулда Шәрҡиәтселәрҙең XXI халыҡ-ара конгресы булып үтә. 1953 йылда

Исламиәт институтын асыуға өлгәшә һәм ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем уға етәкселек итә. Был дәүерҙә ул төрки халыҡтарының тарихын, тарихи географияһын һәм этнографияһын, яҙма тел ҡомартҡыларын, әҙәбиәт һәм мәҙәни мираҫын, бөйөк тарихи шәхестәр тормошон өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирә. Уны һәр ерҙә көтөп, хөрмәтләп ҡаршы алалар. Ғилми конференцияларҙа уның ҡатнашыуы бик ҙур мәртәбә иҫәпләнә, үҙе тере саҡта уҡ, 1950 йылдан башлап, ғалимдың юбилей даталарын уға арналған халыҡ-ара конференциялар үткәреп билдәләйҙәр. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ғалим «Төрки мәҙәниәте белешмәһе» тигән монументаль хеҙмәт өҫтөндә эшләй. 1969 йылда атаҡлы «Хәтирәләр» әҫәрен баҫтырып сығара. Уның ғилми хеҙмәттәр библиографияһы 400-гә яҡын исемдән тора. Был хеҙмәттәрҙең ҡырҡтан ашыуы — ҙур күләмле китаптар һәм монографиялар.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған 1970 йылдың 26 июлендә 80-се йәшендә яҡты донъя менән мәңгегә хушлаша. Профессор Карл Ян уның үлеменә ҡарата: «XIX быуат аҙағы — XX быуат башы рус тарихсылары мәктәбе йәшәүҙән туҡтаны, сөнки В. Бартольд менән В. Минорскийҙан һуң хәҙер Зәки Вәлиди Туған арабыҙҙан китте», — тип, бөйөк ғалимдың донъя шәрҡиәтселек фәненә индергән өлөшөнә бик юғары баһа бирә.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған тарихсы ғалим булараҡ та, легендар милли геройҙарыбыҙ менән бер тиң торорлоҡ тарихи шәхес сифатында ла беҙҙең аңыбыҙҙа күркәм бер фигура, ҡабатланмаҫ күренеш булып йәшәй. Сөнки ул, беренсенән, донъя йөҙөндә бөйөк тарих белгесе булып таныла, икенсенән, халҡыбыҙ яҙмышының һынылышлы бер осоронда үҙе шул тарихты тыуҙырыусы, тарихтың ижадсыһы, милли юлбашсы һәм азатлыҡ хәрәкәттәренең идеологы рәүешендә күтәрелә. Уның шәхес һәм ғалим булараҡ иң ҙур үҙенсәлеге лә бына шундалыр.

Тарихты өйрәнеүсе булараҡ, Вәлидиҙе биографтар иң элек киң профилле, универсаль характерҙағы ғалим-төркиәтсе һәм шәрҡиәтсе тип билдәләйҙәр. Европа ғалимдары уны хаҡлы рәүештә Европа менән Шәреҡ фәнен тоташтырып тороусы тип атайҙар.

«Ә. Вәлиди, — ти Ғ. Хөсәйенов, — дөйөм алғанда, фәндең өс йүнәлешендә — тарих (төрки халыҡтарының дөйөм тарихы), этнография, текстология өлкәһендә фронталь рәүештә тикшеренеүҙәр алып бара, был йүнәлештәрҙең һәр береһендә донъя төркиселегенө һәм шәрҡиәтселегенә баһалап бөткөһөҙ ҙур өлөш булырҙай фундаменталь хеҙмәттәр яҙа».

Ә. Вәлиди, дөйөм төрки мәҙәниәте өлкәһендә икһеҙ-сикһеҙ белемгә эйә булыусы, уның төп йүнәлештәрен һәм проблемаларын билдәләй белеүсе ғалим булыу менән бергә, тарих методологияһының бөйөк остазы булараҡ оло абруй

ҡаҙана. Уның иң күренекле капиталь монографияларынан «Ғөмүми төрк тарихына инеш» һәм «Тарихи ысул» иң әүәл нәҡ бына шул йәһәттән ҙур ғилми әһәмиәткә эйә. «Ғөмүми төрк тарихына инеш» китабы төрки донъяһының иң боронғо дәүерҙәренән алып XIV—XV быуаттарға тиклемге тарихын тикшереүгә арналған. Был хеҙмәт донъяның төрки халыҡтарының алыҫ ата-бабалары, боронғо һәм урта быуаттар ҡәбилә союздары һәм төрки дәүләттәре, боронғо әҙәби һәм фольклор ҡомартҡылары, Орхон-Йәнәсәй руна яҙмалары, ырыуҙар тарихы, төрки халыҡтарының материаль һәм рухи мәҙәниәте буйынса төплө тикшеренеү өлгөһө була ала.

Ә. Вәлиди, төркиәтселек һәм шәрҡиәтселектең, алда әйткәнебеҙсә, бер юлы бер нисә йүнәлешендә ҡолас йәйеп эшләүсе ҙур ғилем эйәһе булараҡ та, Хоҙайҙан бирелгән тәбиғи таланты һәм фекерләү ҡеүәһе менән дә ысын мәғәнәһендә энциклопедист ғалим ине. Был ғәжәйеп белем һәм хәтер, ҡараштар һәм дөйөмләштереүҙәр киңлеге уның ижадының тәүге осоронда ап-асыҡ күренеп тора. Әммә шуныһы характерлы: был күренеш йылдан йылға, хеҙмәттән хеҙмәткә балҡыуыраҡ һәм сағыуыраҡ була бара, һәм, ниһайәт, Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлеге бөтөн донъя төркиәтселек фәнендә иң маҡтаулы урындарҙың береһен ала.

Алда әйткәнсә, Ә. Вәлиди теүәл 50 йыл буйы тыуған ерҙән алыҫта, эмиграцияла йәшәй, ошо ярты быуат ваҡыт эсендә уға бер генә мәртәбә булһа ла Башҡортостан тупрағына ҡайтып аяҡ баҫырға мөмкинлек бирелмәй. Әммә ғүмер буйына үҙ ере һәм үҙ моңо, үҙ милләтенең һәм үҙ мәмләкәтенең яҙмышы тураһындағы мөҡәддәс уй-тойғолары уның күңел түрендә йәшәй. Ә инде ҡурай һәм башҡорт халыҡ йырҙары мәңгелек бер йыуанысына әйләнә. Ә. Вәлидиҙең ҡыҙы профессор Иҫәнбикә Туған иһә атаһының ҡурайҙа иң йыш уйнаған бер көйө беҙҙең мәшһүр «Илсе Ғайса» йыры булғанлығын хәбәр итә. «Иң яҡын дуҫы Ғәлимйән Таған үлгәс (1948), мәмләкәтендәге тау-урмандарға оҡшатҡан Болу тауҙарында йырҙар йырлап иланы», — тип яҙа ул «Атайымды иҫкә алған саҡта» тигән мәҡәләһендә.

Ә. Вәлидиҙең Төркиәләге уҡыусыларынан береһе профессор Әнүәр Ҡонуҡсы: «Уны үҙ мәмләкәте хәсрәтенән һис бер ваҡыт тынысландыра алманыҡ», — тигән. Ә инде Иҫәнбикә Туған, атаһының был тиклем дә ғәзиз күргән халыҡ араһында уны бер мөғәллим сифатында хәтерләүҙәренә иғтибар итеп һәм шуға ҙур әһәмиәт биреп, ошондай бер һөйләшеүҙе иҫенә төшөрә. Әсәйем бер ваҡыт, ти ул: «Йәнем, һин был ҡәҙәр, мәмләкәтем, мәмләкәтем, тиһең, хәҙер унда ҡайтһаң, һине ҡабаттан дәүләт башлығы итерҙәр инеме икән?» — тип һораған. Атайым иһә: «Юҡ, Нәжмиәкәйем, мин, ҡайтһам, ауылымда ҡалып, мөғәллим булыр инем», — тип яуап биргән. Ә бит ул хәҙер,

оло мәғәнәһендә, халыҡтың Мөғәллиме, милләтебеҙҙең ауыр һынауҙарға дусар ителгән оҙон тарих юлдарында аҡыллы кәңәшсеһе булып та, ҡыйыу һәм тәүәккәл юлбашсы һынында ла күҙ алдына килеп баҫа.

* * *

*Ҡәүем — халыҡ, милләт.

* * *

Әҫәрҙәр: Ҡом ҡаплаған ун ете ҡала һәм Саҙри Мәксүди бей. Истанбул, 1934 (төрөк телендә); Ибн-Фаҙландың юлъяҙмалары. Лейпциг, 1939 (немец телендә); Бируниҙың донъяны күҙ алдына килтереүе. Дели, 1940 (инглиз телендә); Ғөмүми төрк тарихына кереш. Истанбул, 1946 (төрөк телендә); Тарихта ысул. Истанбул, 1950 (төрөк телендә); Хәтирәләр. Истанбул, 1969 (төрөк телендә), Өфө: Китап, 1994 (Беренсе китап, рус телендә), Өфө: Китап, 1998 (Икенсе китап, рус телендә), Өфө, 1996 (башҡорт телендә), М., 1997 (рус телендә); Уғыҙ дастаны. Истанбул, 1972 (төрөк телендә); Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы Өфө: Китап, 1994 (башҡорт телендә); Сөйөмбикә манараһынан ғына ҡарамайыҡ (Зәки Вәлиди архивынан) // Башҡортостан. 1995, 23 декабрь; Әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1996.

Әҙәбиәт: Проф. доктор Тунджер Байҡара. Зәки Вәлиди Туған. Культур Баҡанлығы Яҙмалары, 1989; Шафиков Г.Г. Сын народа, отец автономии // Крючья под ребро. Уфа: Китап, 1993. 164—203-сө биттәр; Тунджер Байкара. Заки Валиди Тоган. Уфа: Китап, 1993; Иҫәнбикә Туған. Атайымды иҫкә алған саҡта // Башҡортостан. 1994, 8—9 октябрь; Юлдашбаев А.М. Ахметзаки Валиди Тоган / Ученый, политик, личность // Судьба и наследие башкирских ученых-эмигрантов. Уфа, 1995; Валидов (Валиди) А.А. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Уфа, 1996; Хөсәйенов Ғ.Б. Зәки Вәлиди Туған. Өфө: Башҡорт энциклопедияһы, 2000; Юлдашбаев А.М. Известный и неизвестный Заки Валиди (В памяти своих современников). Уфа: Китап, 2000; Салихов А.Г. Научная деятельность А. Валидова в России. Уфа: Гилем, 2001.

Библ.: Материалы к библиографии Ахмет-Заки Валиди Тогана. Уфа, 1995; Уфа, 1996 / Сост. Р.М. Булгаков./

Муса Мортазин
(1891—1937)



Башҡортостандың ҡаһарман улдары һәм ғәскәр башлыҡтары — данлыҡлы Алдар батыр Иҫәнгилдин, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә һымаҡ легендар шәхестәребеҙҙең береһе, атаҡлы полководец, граждандар һуғышы геройы, күренекле дәүләт эшмәкәре Муса Мортазиндың исеме башҡорт халҡының йөрәгендә ысын-ысынында мәңгелек урын алған. Уның ғүмер юлы — халыҡ бәхете өсөн көрәш һәм халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, милләтебеҙҙең XX быуат тарихында уны, еңелеү белмәҫ халыҡ полководецын, яңы дәүерҙең Салауаты тип атарға хаҡлыбыҙ.

Муса Лут улы Мортазин 1891 йылдың 20 февралендә Ырымбур губернаһы Верхнеурал (Үрге Яйыҡ) өйәҙе Күбәләк-Тиләү олоҫоноң (хәҙерге Башҡортостан республикаһының Учалы районы) Көсөк ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. (Ҡайһы бер документтарҙан күренеүенсә, Муса Мортазиндың атаһының тулы исеме Лотфулла булырға тейеш. Әммә ул үҙен, ғәҙәттә, ҡыҫҡартып, Муса Лут улы тип йөрөткән, 1937 йылда үҙ ҡулы менән яҙылған анкетаға ла шул килеш кергән.) 1911 йылға тиклем ауыл мәҙрәсәһендә уҡый. Шул уҡ ваҡытта, архив материалдарынан күренеүенсә, 16 йәшенән алып 1912 йылда батша армияһына алынғанға ҡәҙәр байыраҡ ауылдаштарының береһендә батраклыҡта йөрөгәнлеге лә билдәле. Тимәк, көҙгө-ҡышҡы айҙарҙа мәҙрәсәлә уҡып, йылдың башҡа миҙгелдәрендә, уҡыуҙан буш ваҡытта, эшләп, ғаиләлә бер таяныс булырға тура килгәндер. Сөнки, ул үҙе яҙғанса, 1908 йылда атаһы кулактар тарафынан үлтерелә, ә мөлкәте түләнмәгән һалымы өсөн һатыла. «Минең бөтөн тормошом ауыр батрак һәм ҡара эшсе тормошо булып үтте. Мин ялсы инем, урман ҡырҡтым, шахталарҙа эшләнем»[1], — тип яҙа ул 1930 йылдың 18 авгусында «Красная звезда» гәзитендә «Редакцияға хат» тигән баш аҫтында баҫылып сыҡҡан мәҡәләһендә.

1912 йылдың ноябрендә хәрби хеҙмәткә алынып, ике йыл буйы Алыҫ Көнсығышта уҡсылар артиллерия бригадаһында хеҙмәт итә. Тәүге йылда өйрәнсектәр командаһында уҡып, бомбардир исемен ала.

1914 йылдың сентябренән 1917 йылдың майына тиклем фронтта йөрөй, кесе фейерверкер итеп үрләтелә. 1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң, үҙе әйткәнсә, «төрлө съездарҙа ҡатнаша, һәр ваҡыт һул өлөштә була». Был «төрлө съездар» тигәндә, әлбиттә, Рәсәйҙә 1917 йылдың май-июнь айҙарында әүҙемләшеп киткән дөйөм мосолман һәм милли хәрәкәттәрҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. М.Л. Мортазин, мәҫәлән, 1917 йылдың май айында Мәскәүҙә, 1917 йылдың аҙағында — 1918 йылдың башында Ҡазанда Беренсе һәм Икенсе Бөтөн Рәсәй мосолмандар съездарында, 1917 йылдың июль, август, декабрь айҙарында Ырымбурҙа, Өфөлә һәм йәнә Ырымбурҙа булып үткән Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙарының өсөһөндә лә ҡатнаша. Бер ыңғай, тарихи дөрөҫлөк хаҡына, шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Муса Мортазин башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә, халыҡтың иҙелгән ҡатламдары араһынан сыҡҡан эшмәкәр булараҡ, асылда һул көстәр яғында булып, баштан уҡ совет платформаһында инанғанлыҡ менән Башҡортостандың һәм башҡорттарҙың азатлығы өсөн көрәш юлына баҫа. Әммә ләкин нәҡ бына шул инаныуҙары күп тапҡырҙар уны төңөлөүҙәргә килтерә, өмөттәрҙең аҡланмауы күңел ғазаптары тыуҙыра, ниһайәт, аҙаҡ үҙе үк хәләл көсө менән ҡатнашып, яулап алынған шул уҡ властың ҡорбанына әйләнә. 20-30-сы йылдарҙа бик күп тарихи шәхестәребеҙҙең башынан үтә был фажиғәләр.

1918 йылдың мартында, Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, М.Л. Мортазин Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советына ағза итеп алына (кооптациялана), тыуған яғына ҡайтып, Верхнеурал өйәҙенең Тамъян-Ҡатай төбәгендә милиция органдары, ауыл һәм олоҫ Советтары ойоштора. 1918 йылдың апреленән авгусына тиклем башҡорт партизан отрядына етәкселек итеп, атаман Дутов һәм Анненковҡа ҡаршы һуғыша. Башҡорт милли ғәскәрендә эскадрон командиры, полк командиры сифатында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҙур ҡыйыулыҡтар күрһәтә. «1918 йылдың ноябренән 1919 йылдың февраленә тиклем, — тип яҙа ул үҙе, — Башҡорт кавалерия полкының башында торған хәлдә Баймаҡ, Түбә рудниғы, Таһир, Нурғәле, Шаҙығай ауылдары тирәһендә Дутовтың каратель отрядтарына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаштым»[2]. Ошо дәүерҙә М.Л. Мортазин үҙе етәкселек иткән Башҡорт кавалерия полкының һәм башҡорт частарының Советтар яғына сығыуын тиҙләтеү өсөн эш алып бара. Әммә, ит изгелек, көт яуызлыҡ, тигәндәй, 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәтенең Үҙәк Совет власы менән килешеү төҙөп, ҡыҙылдар яғына сығырға тигән ҡарарға килеүен күпселек ҡыҙыл

командирҙар башҡорт ғәскәрҙәрен ҡоралһыҙландырыу, халыҡты мыҫҡыл итеү, башҡорт һалдаттарын, тыныс кешеләрҙе атыу, ғөмүмән, башҡорт милләтенә ҡарата геноцид үткәреү өсөн файҙалана башлайҙар. Нәҡ шул көндәрҙә, 1919 йылдың 28 февралендә, Йылайырҙа рус шовинистары, рус частары күренекле башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич һәм талантлы йәш шағир Әбделхай Иркәбаевты, ҡыҙылдар яғына сыҡҡан башҡорт һалдаттарын бер ниндәй хөкөмһөҙ атып йә язалап үлтерәләр. Ошондай вәхшилек шарттарында М.Л. Мортазин бер-береһенә ҡара-ҡаршы торған хәүефле ике ут араһында тороп ҡала.

Был фажиғәле көндәрҙә Муса Мортазиндың ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге башҡорт милли-азатлыҡ көрәшенең, тотош милләтебеҙҙең яҙмышында хәл иткес роль уйнай, тип әйтергә була. Сөнки, беренсенән, ҡыҙылдар яғына сыҡҡанда М.Л. Мортазин, ҡоралһыҙландырыуға юл ҡуймайынса, үҙенең ҡул аҫтындағы полкты һәм, шуның менән, үҙ һалдаттарының һәм офицерҙарының ғүмерен һаҡлап алып ҡала. Икенсенән, артабан уның командалығында хәрәкәт иткән Башҡорт кавалерия бригадаһы һәм, ғөмүмән, башҡорт ғәскәрҙәре мәкерле Совет етәкселәре алдында байтаҡ ваҡыт Башҡорт автономияһының хоҡуҡтарын яҡлаусы көслө фактор булып тора.

1919 йылдың был драматик ваҡиғаларына ентекләберәк туҡталып үтәйек. Шулай итеп, 1919 йылдың 18 февралендә, ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, М.Л. Мортазин 1-се армияның 20-се дивизияһы составында 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә. Әммә Башҡортостанда ҡайһы бер ҡыҙыл частар тарафынан башҡорттарға ҡарата йәйелдерелгән террор башҡорт батырын үҙ халҡын яҡлау өсөн көтөлмәгән ҡырҡа хәрәкәттәр яһарға мәжбүр итә. Был мәсьәлә уның үҙенең юғарыла телгә алынған «Редакцияға хат» тигән аңлатмаһында асыҡтан-асыҡ әйтеп бирелгән. Шул осорҙағы ваҡиғаларҙың тарихи ҡиммәтен иҫәпкә алып, М.Л. Мортазиндың шаһитлыҡ итеүен тулыраҡ килтереп үтергә булдыҡ. Ул бына ниҙәр яҙа:

«1919 йылдың башында 1-се Башҡорт кавалерия полкы башында торған хәлдә Ҡыҙыл Армияға ҡушылдым. 1919 йылдың февраленә тиклем үк әле полк бер нисә тапҡыр Дутовтың Башҡортостан территорияһында эш алып барған казак каратель отряды менән бәрелешкәйне. 1919 йылдың февраленән апреленә тиклем, Ҡыҙыл Армияға ҡушылғас, 20-се Пенза дивизияһының 1-се бригадаһы составында Колчакка ҡаршы фиҙаҡәр һуғыштыҡ. Комбриг Зеленков йөҙөндә бригада командованиеһы, бригада килгәс уның яғына сыҡҡан урындағы кулак (рус) колонизаторҙары элементтарының йоғонтоһона бирелеп, башҡорт ҡыҙылармеецтарын «әсир» итеп һанап, башҡорт частарына ҡарата ышанмаусылыҡ шарттары тыуҙырҙы һәм һәр төрлө баш-баштаҡлыҡтарға,

мыҫҡыллау һәм кәмһетеүҙәргә юл ҡуйҙы. Башҡорт ярлыларының яуыз дошмандары һәм эксплуататорҙары — кулактар, башҡорттарҙың иң яҡшы ерҙәрен баҫып алыусылар — көс ҡуллана, талай, башҡорт ярлыларын һәм яралы башҡорт ҡыҙылармеецтарын ата башланылар. Бригада командованиеһы килеп тыуған хәлде аңламаны, был баш-баштаҡлыҡты туҡтатманы, бригаданы кулактарҙан таҙартманы, киреһенсә, беҙҙең полктың ҡорал һалыуын талап итте. Беҙ сиктән тыш ауыр хәлдә тороп ҡалдыҡ, өҫтәүенә, бригада командованиеһы полкка ҡарата ике йөҙлөлөк сәйәсәте үткәрә ине. Аҡтар беҙгә һөжүм иткән осорҙа бригада командованиеһы беҙҙе һуғышҡа ебәрҙе, һуғыш тынып торған араларҙа ҡоралһыҙландырыу тураһында мәсьәлә күтәрҙе. Аҙаҡ килеп, апрель айында комбриг Зеленковтың бойороғо менән Смоленск полкы беҙҙең полкты ҡоралһыҙландырырға тырышып ҡараны, беҙ ҡоралы ҡаршылыҡ күрһәттек, шул уҡ ваҡытта Колчакка ҡаршы ла һуғыш алып барҙыҡ. Ахыр, ике яҡтан да ҡыҫылғас, Башҡорт полкы Тамъян-Ҡатай кантоны территорияһына, Колчактың тылына, китте»[3].

Һәр бер фразаһы, һәр бер һүҙе ҡат-ҡат үлсәп, дөрөҫөн әйткәндә, тарих бизмәненә һалып яҙылған был аңлатмаға ул утлы-дауыллы замандың күпме йән тетрәткес хәл-ваҡиғалары, фажиғәле яҙмыштар, күпме ҡайғылар, бинахаҡҡа ҡойолған күпме ҡан һәм күҙ йәштәре һыйған. Ҡәһәрле һәм һәләкәтле 1919 йылдың 18 мартында иң мөҡәддәс ниәттәр менән ҡыҙылдар яғына сығып, теүәл ике ай эсендә М.Л. Мортазиндың Башҡорт кавалерия полкы яугирҙарына, дөрөҫөрәге, ике яҡтан да — аҡтар һәм ҡыҙылдар тарафынан ҡыҫымға алынған тыныс башҡорт халҡына ниндәй ҡот осҡос ғәҙелһеҙлектәр күрергә тура килә ул көндәрҙә.

Мортазинсылар нисә тапҡыр тар-мар ителеүҙән ҡотҡарып алып ҡалыуға, ихлас ярҙам ҡулы һуҙыуға ҡарамаҫтан, 20-се Пенза дивизияһының Смоленск полкы, яу яланында түгел, ә башҡорт ауылдарында ҡоралһыҙ кешеләргә ҡарата «батырлыҡ» күрһәтеүҙәрен туҡтатмай. Бына бер ваҡыт, 28 мартта, Башҡорт кавалерия полкы, бригада командованиһының бойороғон үтәп, Смоленск полкы торған тирәго йәнәш Билал ауылына барып урынлаша. Смоленсылар Башҡорт полкын «хас дошман һымаҡ күреп ҡаршыланы», ти М.Л. Мортазин. Артабанғы ваҡиғаларҙың кульминацияһы ошо урында ҡуйырып китә лә инде. Был хаҡта беҙ тағы ла М.Л. Мортазиндың үҙенә — хәҙер инде уның күренекле хеҙмәте — «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән китабына мөрәжәғәт итәбеҙ.

«Башҡорт полкы бында уларҙың урындағы халыҡты йәберләүенең бик күп миҫалдарына шаһит булды. Тағы ҡотороноп конфискация үткәреүҙәр, контрибуция һалыуҙар башланды. Смоленсылар, бәйһеҙ шашынып, халыҡты

ҡан илатты».

Смоленсылар менән Башҡорт кавалерия полкының араһы көндән-көн көсөргәнешлерәк була бара. Өҫтәүенә, нәҡ ошо ваҡытта 20-се Пенза дивизияһының 1-се бригада командованиеһы Башҡорт кавалерия полкын, «үҙ эскадрондарығыҙҙы беҙҙең полктарға бирергә» тигән бойороҡ ебәреп, асылда уны юҡҡа сығарырға ынтылыш яһай. Башҡорт полкы, 20-се Пенза дивизияһы командованиеһынан ярҙам һорап, Стәрлетамаҡҡа 10 кешелек делегация ебәргәс, уларҙың уныһын да юлда тотоп ата.

«Ниһайәт, смоленсыларҙың баш-баштаҡлыҡтары тураһындағы хәбәр тағы Үҙәккә барып етте, һәм 1-се армия командиры Гай, башҡорттарҙы йәберләүҙе туҡтатырға талап итеп, ашығыс телеграмма һуҡты». Телеграммала командарм «Ҡыҙыл Армия хәрби хеҙмәткәрҙәренең башҡорттарға ҡарата түҙеп торғоһоҙ хәл тыуҙырыуҙары»н танырға мәжбүр була.

«Ләкин, — ти М.Л. Мортазин, — смоленсылар приказға буйһонманы. Башҡорт яугирҙары смоленсыларға хеҙмәтсәндәр мәнфәғәттәре өсөн көрәшеүсе ҡыҙыл частар тип ҡарай алмай ине. Башҡорт кавалерия полкы һәм башҡорт халҡы уларҙың ҡыланыштарын ғәҙәти бандитлыҡтан айырманы.

Башҡорт кавалерия полкы смоленсыларға ҡорал һалырға тәҡдим итте... Уға смоленсылар ут менән яуап бирҙе… 7-се апрелдән 8-енә ҡаршы төндә Башҡорт кавалерия полкы, һуғышып барып, Смоленск полкын ҡоралһыҙландырҙы. Артиллерия тулыһынса Башҡорт полкына күсте...»

М.Л. Мортазин, был акцияны үтәү менән үк, 20-се Пенза дивизияһы штабына: «Полк смоленсы бандиттарҙы ғына ҡыуып таратты, үҙе Советтарға хеҙмәтен дауам итә, казактарға ҡаршы фронт тотоп тора һәм сираттағы оператив приказды көтә», — тигән хәбәр менән тағы ла делегация ебәрә.

«Әммә бригада командованиеһы Смоленск полкының паникаһына бирелде һәм үҙ частары менән 40 саҡрымға тылға — Ҡананикольскиға күсте. Башҡорт кавалерия дивизияһынан ебәрелгән делегация атылды, полкка ҡаршы һөжүм башланды».

Артабанғы ваҡиғалар нисек һәм ни рәүешле дауам итеүен аңлатыр өсөн М.Л. Мортазиндың йән әрнеүе менән әйтелгән бер генә һүҙен килтереү ҙә етә: «Улар менән һөйләшеп килешеү мөмкин түгел ине». «Улар менән» тигәндә, был вәхшиҙәрҙең ысын йөҙөн әйтеп бирер өсөн ниндәй генә һүҙҙәр ҡулланһаң да аҙ һымаҡ. Беҙ, башҡорттар, тыныс һәм киң күңеллебеҙ ҙә бит, әммә тарихтың асы һабаҡтары беҙҙе кем менән ниндәй мөнәсәбәттә булырға ла, нисек эш итергә лә өйрәтеп тормаймы һуң?

Шулай итеп, Башҡорт кавалерия полкына ҡыҙылдар менән араны өҙмәйенсә һис бер сара ҡалмай. Бер ыңғай ике фронтҡа — аҡтарға ла, ҡыҙылдарға ла

ҡаршы тороп, күпме һуғышырға мөмкин? Ниһайәт, 15 апрелдә, өс көн буйы барған һөйләшеүҙәрҙән һуң килешеү төҙөлөп, полк аҡ казактар яғына сығып китә. Ошо ваҡыттан алып 23 августа тиклем, 4 ай ҙа 10 көн самаһы, мортазинсылар Колчак армияһы сафында хәрәкәт итеп, таң ҡалырлыҡ сынығыу юлы үтәләр, ауыр шарттарҙа өр-яңы көс-ҡеүәт туплап, еңелеү белмәҫ хәрби берләшмәгә әйләнәләр. Эш шунда: аҡтар яғына сығып, яугирҙарына бер аҙ ял биреү менән, полк командиры башҡорттарҙы үҙ янына йыйыу, уларҙы өйрәтеү эшен башлап ебәрә. «Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт итергә теләүселәр Мортазинға ағылды. Улар ҡоралдарын, аттарын, кәрәк булһа, ғүмерҙәрен дә биреп, тоғро хеҙмәт итергә ант иттеләр. Улар менән әңгәмәнән шул асыҡланды: аҡ казактар полктарында хеҙмәт итеүсе башҡорттар Башҡорт кавалерия полкына сығырға теләй, тик Мортазиндың ризалығын ғына көтә».

Полк командиры, шарттарҙы баһалап, «бөтөн мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып, үҙ полкын бригада кимәленә ҡәҙәр ҙурайтырға» ҡарар итә. Шул маҡсатта полк командиры аҡтарҙың башҡорттар хеҙмәт иткән барлыҡ полктарына, башҡорттарҙы милли ғәскәргә берләшергә саҡырып, үҙенең агенттарын ебәрә. «Беҙ үҙ хәрби көсөбөҙҙө тупланыҡ, — тиҙәр полк агитаторҙары. — Беҙ казактар һеҙгә бер ваҡытта ла бирмәйәсәк милли үҙбилдәләнешебеҙ өсөн көрәшәбеҙ».

Һанаулы ғына көндәр, асылда ике-өс аҙна эсендә, Башҡорт кавалерия полкы, бер кемдән һорап тормайынса, аҡ командованиенан йәшерен рәүештә, бригада кимәленә үҫтереп еткерелә. М.Л. Мортазин бригадаға командалыҡ итеүҙе үҙ ҡулына ала, бригада штабын төҙөй, полктарға (1-се һәм 2-се полк) командирҙар тәғәйенләй. Июнь аҙағына 4000 кешелек Башкорт кавалерия бригадаһы ойошторолоп бөтөп, 23 августа тиклем ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштар алып бара.

Билдәле тарихи шарттар арҡаһында М.Л. Мортазинға үҙе ойошторған Башҡорт кавалерия бригадаһы менән 1919 йылдың 23 августында яңынан ҡыҙылдар яғына сығырға тура килә. Сентябрь, октябрь, ноябрь айҙарында ул 1-се һәм 4-се армиялар составында 1-се Башҡорт бригадаһы командиры сифатында Урал фронтында аҡтарға ҡаршы алһыҙ-ялһыҙ һуғыш хәрәкәттәре алып бара. Декабрь аҙағында бригада, ниһайәт, оҙайлы ялға сыға. 1920 йылдың апреленә тиклем мортазинсылар Ырымбур эргәһендәге Ҡарғалы биҫтәһендә ялда тора. Апрель аҙағында, Главкомдың приказына ярашлы, Башҡорт бригадаһы Польша фронтына оҙатыла. Алда башҡорт яугирҙарын яңы һуғыш хәрәкәттәре, оҙон һәм шанлы юлдар көтә. М.Л. Мортазин унда 12-се армия составындағы Башҡорт бригадаһы, армияның кавалерия төркөмө командиры сифатында аҡ поляктарға ҡаршы һуғышып, Ҡыҙыл Армияның легендар ҡаһармандары рәтендә мәңгелек дан ҡаҙана.

М.Л. Мортазиндың граждандар һуғышындағы батырлыҡтары, уның тормошо һәм драматик яҙмышы – ҡалын романдар, эпопеялар, төплө ғилми хеҙмәттәр темаһы. Хәйер, бөйөк полководецыбыҙ һәм дәүләт эшмәкәре тураһындағы тәүге повестар һәм романдар донъя күрә башланы ла инде. Муса Мортазиндың, кавалерия частары командиры булараҡ, хәрби оҫталығы элегерәк илебеҙҙең Генераль штабы Академияһы дәрестәрендә лә өйрәнелгән. Был очеркта иһә мин үҙ ваҡытында Мортазин бригадаһында (һәм кавалерия төркөмөндә) һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнашҡан башҡорт яугиры Солтан Хәлимовтан яҙып алған иҫтәлектәргә туҡталып үтәсәкмен. Мин уның менән 1962 йылдың 9 июлендә Башҡорт дәүләт университетында уҡыған бер төркөм студент иптәштәрем менән бергә Ҡорған өлкәһе Әлмән районының Байгенә (Әфисәр) ауылында осраштым. Солтан ағай ул ваҡытта 62 йәштә ине. Тимәк, тыуған йылы 1900 булып сыға.

«1919 йылдың октябрь айында Мортазин бригадаһына барып ҡушылдым, — тип башланы һүҙен ветеран. – Шунан киттек беҙ 1920 йылдың май айында Польский фронтҡа. Беҙ тәүҙә барып төштөк Киевҡа, поляктарҙы ҡыуып сығарып». Артабан ул, кәйефе күтәрелеп, боевой командиры тураһында һөйләп алып китте:

«Мортазиндай геройҙы күргәнем булманы. Бер ваҡытта ла артҡа бармаҫ ине. Ауылдан ауылға барабыҙ. Провожатый алабыҙ ғуй. Ауылының исемен һорамай торғайны ул. Совет власына ҡаршы кешеләр күп ине бит. Картанан ҡарап ала ла, урманмы ул, ниме, – ашанан-аша сыға ла китә. Фронтта ул туры йөрөмәй торғайны. Бер эт юлына төшөп ала ла, бер ун саҡрым урап, тылға бара ла сыға».

Солтан Хәлимов пулемет командаһы һалдаты сифатында М.Л. Мортазин бригадаһы менән Буг йылғаһын кисеп, Варшава эргәһенә тиклем һуғыш юлдарын үтә. Әсир төшөп, ғүмере ҡыл өҫтөндә ҡалған саҡтар ҙа була. Дошман алып китеп барғанда, беҙҙең 1-се полк өҫтөнә килеп сығып, уны ташлап, үҙе ҡасып китә. М.Л. Мортазин үткәргән ҡайһы бер хәрби операцияларҙың уртаһында була.

Киевты ташлап ҡасҡас, Польша ғәскәрҙәре Буг йылғаһына тиклем туҡталмай сигенәләр. Буг буйына етеп, йәйәүле һәм атлы ғәскәрҙәр ярҙамында фронт тотоп яталар. «Унда бер ун биш көн һуғыштыҡ беҙ, – тип дауам итә Солтан ағай. — Бер урында. Ни улар, ни беҙ китә алмай торҙоҡ. Шунан Мортазин әйтте, был ерҙә рәт булмаҫ, китәбеҙ икенсе яҡҡа, тип. Икенсе яҡҡа бер егерме биш саҡрым китеп, Бугты кисеп сыҡтыҡ аттар менән. Төндә кисеп сығып, шул уларҙың тылына барып кереп, Бугка бер ун саҡрымдай ерҙә ятҡан ғәскәрҙе ҡапыл ҡамап алып, әсир иттек. Ике йөҙ һыбайлы, бер полк пехота һалдатын бер юлы баҫып алдыҡ. Шул урындан киттеләр улар беҙҙән кире

ҡарап, бүтәнсә бер ерҙә лә фронт тота алманылар. Варшауға бер ун ике километр ерҙә ғәскәр йыйып ятҡандар икән.

Беҙҙең артта пехота юҡ. Беҙ хәҙер 60 саҡрым артҡа сигендек. Беҙгә шул тапҡырҙа дүрт полк пехота килде лә беҙ пехотаны алға һалып алдыҡ та тағы киттек. Шулай ҙа Варшауға ебәрмәй тоттолар фронтты. Күренеп кенә торҙо Варшау, ҡаланың түбәләре. Шул урында фронт тотоп ятҡанда беҙҙекеләр менән Польша пандары һуғышты туҡтатыу тураһында килешеү төҙөнөләр. Беҙ унан кире ҡайтып киттек. Шунан аҙаҡ Украинала бандит булды ла китте шул. Волынь, Подольск губерналары, Тирасполь өйәҙе — уларҙың барыһын да алдыҡ беҙ. Мортазин Башҡортостанда беренсе батыр булды ул».

Бында мин мортазинсы яугир Солтан Хәлимовтың иҫтәлектәренән өҙөктәр килтереү менән генә сикләндем. Әммә ошонда ла башҡорт полководецының тере һыны, данлы хәрби ҡаһарманлыҡтары ғәйәт сағыу булып күҙ алдына баҫа. Дөрөҫ, Муса Мортазиндың тормошон һәм хәрби эшмәкәрлеген тулыраҡ белер өсөн, уның үҙенең алда телгә алынған «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән мәшһүр китабын ентекләп өйрәнергә кәрәк. Беҙгә иһә биографик очеркты, бөйөк эшмәкәребеҙ тураһында дөйөм мәғлүмәттәр килтереп, ошо урында йомғаҡлау һүҙе әйтергә лә ваҡыт булһа кәрәк.

Иң әүәл — геройҙың хәрби наградалары һәм юғары исемдәре тураһында. 1920 йылда М.Л. Мортазин граждандар һуғышындағы батырлыҡтары өсөн бер-бер артлы өс тапҡыр иң маҡтаулы бүләктәр һәм награда (июндә – 12-се армияның Хәрби-Революцион Советының алтын сәғәте, августа — яҙыулы көмөш ҡылыс, ноябрҙә – Ҡыҙыл Байраҡ ордены) менән билдәләнә. 1921 йылдың декабрендә икенсе тапҡыр иң юғары хәрби наградаға — Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. 30-сы йылдар урталарында уға өсөнсө мәртәбә Ҡыҙыл Байраҡ ордены бирелә[4]. Был иһә, хәҙергесә әйткәндә, өс тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә тиң тигән һүҙ.

1935 йылдың 2 декабрендә легендар командир М.Л. Мортазинға рәсми рәүештә комбриг дәрәжәһе бирелә.

20-се йылдар башынан 1937 йылда, нахаҡҡа ғәйепләнеп, хөкөм ителгәнгә тиклем Муса Мортазин Башҡорт республикаһының «иң күренекле һәм һирәк осрай торған эшмәкәрҙәренең береһе»[5] булып таныла. Ул бер нисә тапҡыр Советтарҙың Бөтөн Рәсәй съездарына, 1922 йылдың декабрендә СССР Советтарының I, 1924 йылдың ғинуарында II съездарына делегат итеп һайлана. 1924 йылдың июнендә уны Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты Рәйесе итеп һайлап ҡуялар. 1924-1927 йылдарҙа Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияһын тамамлай. 1937 йылда

тултырылған анкетаһынан күренеүенсә, ул саҡта Муса Лут улының биш ҡыҙы, бер улы була. Әммә ҡәһәрле репрессия атаҡлы башҡорт полководецы һәм дәүләт эшмәкәре М.Л. Мортазиндың ғәзиз ғүмерен ҡыйып үтә. Шул уҡ йылдың 31 майында ҡулға алына, 27 сентябрҙә СССР Юғары Судының Хәрби коллегияһы уны үлем язаһына хөкөм итә.

1956 йылдың 14 июлендә СССР-ҙың шул ук юғары органы, енәйәт эше булмағанлыҡтан, хөкөм ҡарарын юҡҡа сығара һәм геройҙың исеме тулыһынса аҡлана. Тағы ла 11 йылдан һуң, 1967 йылдың 11 июлендә, наградаларға хоҡуғы ҡайтарыла.

Репрессия йылдарында М.Л. Мортазиндың ғаиләһе күргән йәбер-золомдоң, ҡайғы-хәсрәттәрҙең иге-сиге бармы икән? Геройҙың ҡыҙы Шәүрә Мортазина, бөтөн ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығып, башҡорт сәнғәтенең данлыҡлы оҫтаһы булып танылды. Мәскәүҙә А.В. Луначарский исемендәге Дәүләт театр сәнғәте институтын тамамлап, ул оҙаҡ ваҡыт (1948—1977 йылдарҙа) Башҡорт дәүләт академия театрының режиссеры булып эшләй. Ш.Л. Мортазинаға РСФСР-ҙың (1970) һәм БАССР-ҙың (1957) атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән исемдәр бирелә, ул — РСФСР-ҙың К.С. Станиславский исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты (1967).

Бары шуныһы йыуаныс: бөйөк баһадирыбыҙҙың яҡты исеме, Башҡортостан автономияһы, башҡорт халҡы хаҡына, ниһайәт, шул уҡ Рәсәй иленең именлеге өсөн күрһәткән тиңһеҙ батырлыҡтары хаҡына иҫтәлек булып, беҙҙең рухи донъябыҙға әйләнеп ҡайтты. М.Л. Мортазин илебеҙ тарихында, милләтебеҙ хәтерендә мәңгелек урын алды.

* * *

[1] Мортазин М.Л. Редакцияға хат // Әҫәрҙәр. Өфө, 1994. 268-се бит.

[2] Мортазин М.Л. Һуғышсан эштәрем // Әҫәрҙәр, 288-се бит.

[3] Мортазин М.Л. Һуғышсан эштәрем // Әҫәрҙәр. 269—270-се биттәр.

[4] СССР Юғары Суды Хәрби коллегияһының 1937 йыл 27 сентябрҙә ҡабул ителгән хөкөм ҡарарында ошондай һүҙҙәр бар: «Граждандар һуғышы йылдарындағы хәрби батырлыҡтары өсөн Мортазин өс тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены, көмөш ҡылыс һәм алтын сәғәт менән бүләкләнә». (Мортазин М.Л. Әҫәрҙәр. 298-се бит.)

[5] Мортазин М.Л. Әҫәрҙәр. 293-сө бит.

* * *

Әçәрҙәр: Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. Л., 1927; В Красной Башкирии. М. — Л., 1929; Әçәрҙәр: Очерктар, повесть, документтар һәм фотолар. Өфө, 1984.

Әҙәбиәт: Муса Лутович Муртазин: Буклет. Ответственные за выпуск: Г.М. Мугаттаров, Н.А. Канафин. Уфа, 1991; Шафиков Г.Г. Для ратных дел рожденный // И совесть, и жертвы эпохи. Уфа, 1991; Солтангәрәев Р.Ғ., Хамматов Я.Х., Ямалетдинов М.Б. Муса Батыр: Повестар, роман. Өфө, 1992; Муртазин М.Л. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Йомабай Иҫәнбаев
(1891—1943)



1991 йылдың 22—23 июнендә Хәйбулла районы хакимиәте һәм «Матрай» совхозы етәкселеге республика күләмендә ҙур Ҡурай байрамы үткәрҙе. Был күркәм тамаша башҡорт халҡының бөйөк музыканты, арҙаҡлы ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы ойошторолдо. Республикабыҙҙың ул саҡтағы Юғары Советы Президиумы нәҡ ошо юбилей алдынан халыҡ музыканты Йомабай Мотиғулла улы Иҫәнбаевҡа «Башҡорт АССР-ының халыҡ артисы» тигән маҡтаулы исем (үлгәндән һуң) биреү тураһында Указ сығарҙы.

Бөйөк ҡурайсының ҡатмарлы тормош юлы һәм илһамлы ижады — айырым бер китап темаһы. Ауыр һәм болғауыр заманаларҙа йәшәп, бик күп һынауҙар аша үтергә тура килгән уға. Мин 1987 йылда Йомабай Иҫәнбаевтың улы Сәлихйән Иҫәнбаев менән осрашып, унан атаһы тураһында мәғлүмәттәр яҙып алып ҡалыуыма әле булһа ҡыуанып бөтә алмайым.

Иң элек Сәлихйән ағайҙың үҙе менән таныштырып үтәйем. Ул инде минең өсөн дә өлкән быуын вәкиле ине: 1920 йылдың 18 декабрендә тыуған. Дүрт йыл буйы Бөйөк Ватан һуғышында башынан аҙағынаса ҡатнаша.

1946 йылда демобилизацияланып, тимер юл төҙөлөштәрендә эшләй башлай. Аҙаҡ ҡатыны Гөльямал апайҙың тыуған төйәге — Белорет районының Абҙаҡ ауылында төпләнәләр. Өс ул, бер ҡыҙ үҫтерәләр, 1989 йылда ҡарт яугирҙың донъянан китеүе тураһында хәбәр алдым.

«Атайым 1891 йылдың 6 августында хәҙерге Хәйбулла районының Үрге Смаҡ ауылында тыуған, – тип яҙҙырған Сәлихйән ағай. — Әсәйем Сафия Әбделнасир ауылынан төшкән. Атайым 1943 йылда Воронеж фронтында һәләк булды».

Иғтибар итегеҙ: 1943 йыл, Воронеж фронты. Был мәғлүмәт Йомабай Иҫәнбаевтың биографияһы өсөн ифрат мөһим. Сөнки ул 1940 йылда, нахаҡҡа ғәйепләнеп, ҡулға алынған була. 1991 йылда баҫылып сыҡҡан «Йомабай

Иҫәнбаев: Башҡорт халҡының мәшһүр ҡурайсыһы» тигән буклетта әйтелгәнсә, мәҫәлән, уның һуңғы хәбәре 1941 йылда Ульяновск ҡалаһынан фронтҡа китеп барыуы тураһында яҙған хаты була.

«Ғаиләлә улар өс бала үҫә: Йомабай, уның ҡустыһы Ғәлимйән, һеңлеһе Зөбәйҙә. Атайымдың атаһы Мотиғулла. Улар ҙа өсәү: Хисмәт, Ғиззәт, Мотиҡ, — тип дауам итә Сәлихйән ағай. — Ырыуыбыҙ — түңгәүер, Түңгәүер башҡорттары булабыҙ. Нәҫелебеҙҙе һыбайҙар тиерҙәр ине. Сөнки ағай-олатайҙар бик эре булған. Ана шул Ғиззәт ҡартты туғыҙ өйөр йылҡы араһында (һәр береһендә ҡолонло 40-ар бейә) бер саптар ғына алып йөрөгән. Ҡеүәтле ат булған».

Йомабай Иҫәнбаев тураһындағы мәҡәләләрҙә уның буйы, һынына ҡараған анығ мәғлүмәттәрҙе осратҡаным юҡ ине. Сәлихйән ағайҙың бына был һүҙҙәрен мин уның ауыҙынан сыҡҡан көйөнсә теркәп ҡуйғанмын: атайым ауырлыҡҡа 145 килограмм, йәғни 9 бот ярым, буйы 2 метрлы бәһлеүән кәүҙәле уҙаман ине, мин уның яурынынан ғына була торғайным, тип шаһитлыҡ итте ул. Атаһының күрше Әбделнасир ауылы мәҙрәсәһендә Яңыбай хәлфәнән һабаҡ алғанлығы, аҙаҡ үҙ алдына уҡып, белемен тәрәнәйтеүе тураһында һөйләне.

Кесе йәштән йыр, моң тыңларға әүәҫ булып, йыр-көй тарихтарын хәтеренә һеңдереп үҫә Йомабай. Ҡурайсылыҡ таланты иртә асыла. Ҡурайға иң элек ауылдашы Һибәтулла Ҡотошовтан, Ғәббәс, Ғәниулла тигән ике туған ағаларынан өйрәнә. Сәлихйән ағайҙың: «Башҡорт көйҙәренең бөтөнөһөн дә белә ине», — тигән һүҙҙәре дөрөҫкә яҡындыр шул. Уның 17 йәшендә үк йөҙҙән ашыу башҡорт халыҡ көйөн ҡурайҙа уйнауы, ә ғөмүмән 150 көйҙө яратып башҡарыуы тураһында мәғлүмәттәр һаҡланған.

Сәлихйән ағай атаһының тормошонда 1918 йылда булып үткән ваҡиғалар тураһында ғаиләлә һаҡланған ошондай бер риүәйәтте мәғлүм иткәйне:

– Ул йылда атайым, ялсылыҡта йөрөп, Мөхәммәҙиә Кәримовтың йылҡыһын көткән. Ҡурай уйнап та йөрөгән унда. Шул ваҡытта уны һәм Ғәлимйән ағайҙы аҡтар алып киткән, мобилизация менән. Атайым Орскиҙан ҡасып ҡайта. Бер ҡаҙаҡты яллап, арбаға тиреҫ тейәтеп, тиреҫ аҫтына ятып, Яйыҡ аша был яҡҡа сығарта — часовойҙан үтергә кәрәк бит. Ҡайтып, ат егеп, ҡабат бара Ғәлимйән ағайҙы ҡотҡарырға. Юҡ, һин ҡотолдоң, мин хаҡ яҙғанды күрермен инде, тип тороп ҡала. Аҙаҡ, бер ҡоҙоҡ ағыуланған була, шунан ағыулы һыу эсеп ҡырыла улар.

Йомабай ағайҙың энеһе Ғәлимйән Иҫәнбаев, шулай итеп, ваҡытһыҙ үлеп ҡала. Шунан инде уның үҙенең, ҡулына мылтыҡ тотоп, башта аҡтарға ҡаршы унан «бандитизм» менән көрәштә ҡатнашыуы, 1920 йылдан Коммунистар партияһы сафына инеүе, ауыл Советы рәйесе, олоҫ башҡарма комитеты ағзаһы

(2-се Түңгәүер олоҫо), олоç, кантон күләмендәге йыйылыштарҙа үҙенең ялҡынлы һүҙе менән дә, ҡурай моңо менән дә һәр эштең уртаһында булыуы яҡшы аңлашыла. Әммә совет дәүере сәйәсәтенең мәкерле, ике йөҙлө яҡтары ла булғанлығын хәҙер яҡшы беләбеҙ. Яңы тормош төҙөйбөҙ тип, яңы власҡа ихласлыҡ белдереп, бар булмышын илгә, халыҡҡа хеҙмәткә арнаған күпме саф күңелле кешеләр эләкмәне шул мәкер тоҙағына. Был яҙмышты Йомабай Иҫәнбаев та тулыһынса үҙ башынан кисерә. Тәүге тапҡыр уны 1921 йылдың декабрендә аҙыҡ-түлеккә һалым (продналог) йыйыуға ризаһыҙлыҡ белдереүҙә һәм советҡа ҡаршы өгөт-нәсихәт алып барыуҙа» ғәйепләйҙәр. Бәхеткә, 1923 йылдың 28 ноябрендә амнистияға эләгеп, аҡланып ҡайта.

Юғарыла телгә алынған иҫтәлектәрҙән күренеүенсә, Йомабай ағай 1919 йылда Стәрлетамаҡҡа барып, үҙенең ҡурай менән халыҡ алдында танылып йөрөгән булып сыға. Нәҡ Стәрлетамаҡта үҙенең һөнәрен күрһәтеүе лә аңлашыла: ул осорҙа Башҡортостандың мәркәзе була ла баһа Стәрле ҡалаһы. Ә инде 1923 йылдың аҙаҡтарында уны бик йыш Өфөгә саҡырып ала башлайҙар. Ул йылдар — сәхнәләрҙә Йомабай ҡурайының айырыуса сағыу яңғыраған, уның ижад йондоҙо балҡып ҡабынған бер осор. «1923—1924 йылдарҙан атайым Өфөлә йөрөнө, бер өс-дүрт йыл. 1925 йыл Парижға, 1927 йыл Берлинға барҙы, — тип һөйләне Сәлихйән ағай. — Швециялағы фотолары бар ине. Унда Германияға барған йылы йөрөп ҡайтҡан. Уның менән Ҡаҙағстандан бер аҡын бергә булған. Ҡурайға ла йырлаған ул». Уныһы инде, әлбиттә, Әмре Ҡашаубаев.

Йомабай Иҫәнбаевтың 1925, 1927 йылдарҙа Европа ҡалаларындағы триумфаль сығыштары тураһында матбуғатта күп яҙылды. Был хаҡта мәшһүр ҡурайсы үҙе ошоларҙы һөйләп ҡалдырған:

«1925 йылда Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетына Мәскәүҙән Мәғариф халыҡ комиссары А.В. Луначарскийҙың телеграммаһы килеп төшә. Телеграммала Парижда асыласаҡ Бөтөн донъя демократик сәнғәт күргәҙмәһенә ебәрергә ҡурайсы кәрәклеге хаҡында әйтелә. Шул уңай менән Йылайыр кантонына мөрәжәғәт иткәндәр. Кантон башҡарма комитет рәйесе Аймулла Бикбов мине саҡыртып алды ла: «Йомабай ҡустым, Парижға бараһың, Наполеонды еңеп, атай-олатайҙар йөрөгән Париж урамдарынан һин дә йөрөп ҡайт әле», — тине»[1].

Артабан ул дәртләнеп-канатланып ауылға ҡайтыуы, тау битләүендә аҡ сәскә атып ултырған ҡурайҙы күреп, Франция ерендә был юҡтыр, моғайын, тип, уны тамыры менән ҡаҙып, үҙе менән алып китеүе, сит илгә кемдәр менән барыуы тураһында һөйләп бирә. Ҡурайсыны икенсе көндө үк Өфөгә саҡыртып алалар. Унан, изге теләктәр теләп, Мәскәүгә оҙаталар[2].

Архив материалдары араһында БАССР Халыҡ мәғарифы комиссариатының

1925 йылдың 21 майында Мәскәүгә, Башҡортостандың РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге Вәкәләтлегенә Й. Иҫәнбаевты Парижға ебәреү айҡанлы яҙылған хаты һаҡланған. Был документта, юл сығымдарына ҡағылған мәсьәләләр менән бер рәттән, Йомабай ҡурайсыға, «уның үҙенең күрһәтмәһе һәм инструкцияһы буйынса, ҡоростан йәки көмөштән яңы ҡурай эшләү өсөн саралар күреү»[3] тураһындағы үтенес белдереүе ғәйәт ҡыҙыҡлы. Әле күрһәтеп үтелгән йыйынтыҡты төҙөүселәр китаптың аңлатмалар өлөшөндә (331-се бит), документаль сығанаҡтарға таянып, ҡурай ике данала Мәскәүҙә эшләнгән, тип яҙалар. Үкенескә ҡаршы, Йомабай Иҫәнбаев өсөн махсус әҙерләнгән ул ҡурайҙар хаҡында әлегә бүтәнсә бер ни ҙә билдәле түгел. Ә инде башҡорт милли кейеменә килгәндә, уны Мәскәүҙә, Ҙур театрҙың мастерскойҙарында теккәндәр.

Мәскәүгә Париждағы концерттарҙа ҡатнашыу өсөн йәнә ҡаҙаҡ, үзбәк, әзербайжан, әрмән халыҡтарының йыр һәм музыка оҫталары араһынан талантлы вәкилдәр саҡырылған була. Гастролгә тип әҙерләнгән программа ике тапҡыр Мәскәү тамашасыһына күрһәтелә. Йомабай Иҫәнбаев «Урал», «Буранбай», «Перовский» көйҙәрен башҡара. Уның өсөн Урал тәбиғәтен кәүҙәләндергән декорация эшләнә.

Артистар, халыҡ башҡарыусылары делегацияһы 1925 йылдың июль башында Мәскәүҙән Парижға юлға сыға. Концерттарға билеттар алдан уҡ һатылып бөткән була. Унда совет артистары барлығы ун бер концерт ҡуя.

Париждың ҙур театрҙарының береһе тамашасылар менән шығырым тула. Йомабай ағай, аҙаҡ үҙе һөйләгәнсә, тәүҙә сәхнә артында «Урал» көйөн уйнай. Әкрен генә шаршау асылыуға ул, башҡорт милли кейемен кейгән килеш, ҡурайһыҙ ғына сәхнәгә килеп сыға. Ә сәхнәнең бер ситенә, йәнәһе, ағас төбөнә тупрағы менән әлеге тыуған Хәйбулла төбәгендә үҫкән ҡурайҙы килтереп ултыртып ҡуйған була. Меңәрләгән тамашасының күҙ алдында ул таҡыя башлы ҡурай үләнен һаҡлыҡ менән ҡырҡып ала, шунда уҡ тишектәр тишеп, «Байыҡ» көйөн уйнап ебәрә. Көйҙө уйнап бөтөүе була, зал уны геү килеп алҡыштарға күмә. Концерттарҙа һәр музыка ҡоралына берәр генә номер биреү күҙ уңында тотолған булһа ла, ҡурайсыны, алҡышлап, ҡат-ҡат сәхнәгә сығаралар.

Парижда ҡурайҙы, Уралдан алып килгән көпшәле үләнде, сәхнәлә киҫеп алып, илаһи бер моң һәм оҫталыҡ менән уйнап күрһәтеп, тамашасыны таң ҡалдырып, шул сағында уҡ легендаға әйләнһә, концерттарҙа тағы ла ғәжәп хәлдәр булып ала. Бер концерт ваҡытында, Йомабай Иҫәнбаевты бер нисә тапҡыр саҡырып сығарғандан һуң, бер ханым сәхнәгә күтәрелеп, ҡурайсыны ҡотлап, ҡулын ҡыҫа һәм үҙенең алтын балдағын уның бармағына кейҙерә.

Йомабай ағайҙың Парижда булған көндәре тураһында һөйләгәндә тағы бер

иçтәлекле ваҡиға иғтибарҙы йәлеп итә. Сорбонналағы фонография кабинеты мөдире профессор Перно башҡорт ҡурайсыһы Й. Иҫәнбаев менән ҡаҙаҡтың йыраусыһы һәм думбырасыһы Ә. Ҡашаубаевты ҡунаҡҡа саҡыра һәм уларҙың йыр-көйҙәрен фонограф таҫмаһына яҙып ала. Йомабай ҡурайсы аҙаҡ ул саҡта «Урал», «Буранбай», «Байыҡ», «Ҡара юрға» көйҙәрен яҙҙырыуы тураһында иҫкә алып һөйләй торған булған.

Париждағы концерттарҙың барышын, ғәҙәттә, ундағы гәзиттәр ентекләп яҡтыртып барған, тип яҙалар. Ул материалдар ҙа тулыраҡ өйрәнеүҙе көтәләр тигән уйҙамын. Ә инде үҙ ваҡытында француз телендә ташҡа баҫылған ошондай һүҙҙәр, мәҫәлән, беҙҙең өсөн хәҙер ниндәй әһәмиәтле:

«Беҙгә ысын халыҡ сәнғәтен — башҡорт, ҡаҙаҡ, үзбәк халыҡтарының музыкаһын ишетергә тура килде... Тәбиғилеге, моңға бай булыуы менән улар музыканың хәҙерге ҡуйылышынан бөтөнләй айырылып тора, аңлатыу мөмкин булмайынса, үҙҙәренең эске сере, сихри моң-зарҙары менән ғәжәпләндерә... Беҙҙең алдыбыҙҙа тикшерелмәгән яңы, бай моң донъяһы ята...

Ваҡыты менән ошо музыка ҡоралдары тауышына һағышлы, наҙлы ҡурай моңо килеп ҡушыла — был ғәжәп башҡорт музыканты Иҫәнбаев художестволы һәм әсир иткес арияларын ҡурайҙа шулай уйнай. Ҡурай көйҙө үҙенең ниндәйҙер һағышлы моң монарына уратып биреүе менән айырылып тора...»[4]

Парижда күрһәтелгән концерттарҙа арҙаҡлы француз яҙыусылары Ромен Роллан, Анри Барбюс, мәшһүр рус йырсыһы Федор Шаляпин була. Улар халыҡ таланттарының сығышына ҙур әһәмиәт бирәләр.

Ошо гастролдән ҡайтҡас, Йомабай Иҫәнбаев ике йыл самаһы башҡорт драма театрында ҡурайсы-артист булып эшләй, «Салауат батыр», «Ашҡаҙар», «Ҡарағол», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Шәүрәкәй» спектаклдәрендә ҡатнаша. Театрҙа улар өс ҡурайсы булып китә. Йомабай Иҫәнбаев, Ғиниәт Ушанов, Хәмит Әхмәтов Өфөлә һәм Башҡортостандың башҡа төбәктәрендә гастролдәрҙә йөрөгәндә, халыҡтың аҫыл моңдарын ҡурайҙа башҡарып, дан ҡаҙана. Был ҡурайсылар триоһы Мәскәүҙең Ҙур сәхнәһендә лә сығыш яһап ҡайта.

Йомабай Иҫәнбаевтың ижади биографияһында уның 1927 йылғы сит ил гастролдәре мөһим урын тота. Шул йылдың йәйендә ул, Германияның Майндағы Франкфурт ҡалаһында уҙғарылған Беренсе Бөтөн донъя музыка күргәҙмәһендә ҡатнашып, «Сәлимәкәй»ҙе, «Сыңрау торна»ны уйнай, көслө ҡул сабыуҙар аҫтында йәнә өс тапҡыр сәхнәгә сығып, «Аҡмәсет», «Байыҡ», «Ҡара юрға» көйҙәрен башҡара. Бынан һуң совет артистары төркөмө, Берлинға килеп, биш концерт ҡуя. Ошо ваҡыттан концерт төркөмөнөң Европа буйлап биш айға һуҙылған оҙайлы гастролдәре башлана. Башта Гамбург, Росток, Ганновер,

Кельн, Лейпциг, Шверин, Мюнхен ҡалаларында, унан Швецияның баш ҡалаһы Стокгольмда, йәнә Гётеборгта, Вестероста, Венерсборгта — барлығы 22 ҡалала булалар. Биш ай эсендә 54 концертта ҡатнашып, 55 боронғо башҡорт халыҡ көйөн уйнай Йомабай Иҫәнбаев.

Майндағы Франкфуртта ойошторолған Халыҡ-ара музыка күргәҙмәһендә Йомабай Иҫәнбаев СССР халыҡтарының йырҙарын һәр ҡайһыһын уларҙың үҙ телендә башҡарыусы данлыҡлы йырсы Ирма Яунзем менән бергә сығыш яһай. Ирма Петровна, Йомабайҙың ҡурайына ҡушылып, башҡорт телендә башҡорт халыҡ йырҙарын башҡара. Башҡорт йырҙарын йырлағанда ул сәхнәгә башҡорт кейемендә сыға торған була. Һуңынан, 1973 йылдың 16 декабрендә, Ғата Сөләймәновҡа хатында ул мәшһүр башҡорт ҡурайсыһы тураһында тәрән хөрмәт менән яҙа. Бына уның хатынан өҙөктәр:

«Ул бик матур кеше ине, оҙон ғына буйлы, ҡарағусҡыл, мөләйем йөҙлө, аҡыллы ҡарашлы. Мин уның менән 1927 йылда Германияға, Беренсе Халыҡ-ара Бөтөн донъя музыка күргәҙмәһенә, барыр алдынан таныштым.

Беҙҙең концерттар Майндағы Франкфурттың Ҙур опера театрында барҙы — Йомабай ҡурайҙа башҡорт көйҙәрен уйнаны. Һәм ул иҫ киткес булды! Ғәжәп саф, яңы һәм һоҡландырғыс! Селтәрҙе хәтерләткән башҡорт моңо уның башҡарыуында иҫ китерлек матур биҙәктәр төшөрҙө, ул икһеҙ-сикһеҙ даланы ла, һабан турғайы моңон да, ҡыҙыу ҡояшты ла хәтерләтеп, ҡолаҡты иркәләне... Был гүзәллектән айырылыу мөмкин дә түгел».

Артабан Ирма Яунзем ошолай тип дауам итә: «Залдағы туп-тулы сит ил тамашасыларының ошо һоҡланғыс һәм илаһи рәссамға арналған алҡыштарын, уның оло уңыштарын яҡшы хәтерләйем. Минең үҙемә лә Йомабай менән бергә сығыш яһау бәхете тейҙе. Ана шул концерттарҙа ике башҡорт халыҡ йырын ятлап йырлағайным. Улар «Ҡурай» һәм «Абдрахман» йыры, уны Иҫәнбаев юғары оҫталыҡта музыкаль яҡтан биҙәне.

Ул саҡта Йомабай Иҫәнбаев менән сығыш яһау минең өсөн ысын музыка байрамына әйләнә ине. Ошо тойғо тамашасыға ла күсә, ул беҙҙе өҙлөкһөҙ алҡыштарға күмә.

Дәртле, талантлы ҡурайсы-музыкант Й. Иҫәнбаев менән булған концертты мин яҡты музыка байрамы итеп күңелдә һаҡлайым. Уны онотоу мөмкин түгел»[5].

1929 йылда Йомабай ҡурайсы, тыуған ауылына ҡайтып, колхоз төҙөүҙә ҡатнашып, тулыһынса крәҫтиән тормошо менән йәшәүен дауам итә. Хәйер, уның күп балалы ғаиләһе, үҙе сит ерҙәргә сығып, оҙайлы гастролдәрҙә йөрөгәндә лә, Башҡорт драма театрында эшләгән сағында ла Үрге Смаҡтағы йорттоң усағын һыуытмай. Үҙҙәре үҫтергән Йомағәле тигән бер етем егет була.

Утын-бесән әҙерләргә ул ярҙамлашып тора. (Йомабай ағай менән Сафия апай, Сәлихйән ағайҙан алда тыуып, сабый саҡтарында донъя ҡуйған өс баланан тыш, биш бала үҫтерәләр. Шуларҙың икеһе – Фәриғә менән Рәфиғә апайҙар — әле иҫән-һауҙар.)

Ауылда колхоз ойоштороп (уға «Һарыкүл» тигән исем бирәләр), башта ул үҙе рәйес булып тора. Аҙаҡ сельпола, колхозда ревизор вазифаһын башҡара. Саҡырған саҡта Өфөгә барып ҡайта торған булған, йылына бер-ике мәртәбә төрлө концерттарҙа ҡатнаша.

– 1936, 1937 йылдар тирәһендә ауыл һайын, һәр береһен уйнатып ҡарап, ҡурайсылар йыйып йөрөнө, — тип хәтерләй Сәлихйән ағай. Артабан уның иҫтәлектәрендә ошондай әһәмиәтле деталдәр бар: «Мин бала саҡта беҙҙән кеше өҙөлмәй торғайны. Килмәгән кеше булмағандыр. Солтан Фәйзуллин тигән ағай — ул саҡта ГПУ начальнигы — улай үтһә лә, былай үтһә лә керер ине (Баймаҡ районы 2-се Этҡолдоҡо. Атайымдың Францияла ҡурай менән төшкән бер фотоһы ла унда ине). Килгән бер кеше ҡурай, йыр, тарих өйрәнергә килә. «Ағай, был көйҙөң тарихы нисек әле?» — тип һорашып ала.

1940 йыл атайымды, Зәки Вәлидигә бәйләп, алып киттеләр. Омскиҙа ултырҙы. Һуғыш ваҡытында мин фронтта инем, Омскиҙан хат яҙҙы, батальон ҡабул итеп алам, һуғышҡа китәбеҙ, тип. 1942 йылдың июнь айҙары ине был. 1943 йыл Орел-Курск дуғаһынан хат яҙҙы. Балам, беҙ йәнәш кенә, мин Воронеж эргәһендә, тип яҙҙы, тиҙҙән һөжүмгә күсәбеҙ, тип. Шунан һуң хат ала алманым. Ул 1-се Украина фронтында, Ватутинда ине».

Иҫтәлектә Йомабай ағайҙың 1942 йылдың йәйендә, үҙе теләптер, күрәһең, фронтҡа китеүен, 1943 йылға тиклем фронтта булып, ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашыуын дәлилләү бик мөһим. Ошонан сығып, атаҡлы ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаевтың 1943 йылда яу яландарында башын һалғанлығы тураһында раҫларға мөмкин. Өҫтәүенә, уның үҙенең «батальон ҡабул итеп алам» тигән һүҙҙәре лә иғтибарҙы йәлеп итә.

Һуғыш йылдарында Иҫәнбаевтарҙың Үрге Сматағы йорт-ере лә, асылда, ҡараусыһыҙ ҡала. Ғаиләнән өс кеше — Йомабай ағай үҙе һәм ике улы (Сәлихйән һәм Сабирйән) фронтҡа китеп, бары тик Сәлихйән Иҫәнбаевҡа ғына яу яландарынан әйләнеп ҡайтыу насип була. 1944 йылда Сафия апай вафат була. Күп кенә фотолар, хаттар шул осорҙа юҡҡа сығып бөтә.

Йомабай Иҫәнбаев — халҡыбыҙҙа ҡурай сәнғәтенең меңәр йылдарҙан килгән тәжрибәһен һәм серҙәрен тәрән белеп һәм тойоп ижад иткән, Башҡорт иленең үҙендә генә түгел, бәлки донъя йөҙөндә һирәк осрай торған бөйөк халыҡ музыканты, халыҡтың йыр-көй тарихсыһы. Быуаттарҙан быуаттарға күсеп, изге төйәгебеҙ Урал күгендә мәңге балҡып торасаҡ был исем.

* * *

[1] Аралбай Ҡ. Мәшһүр ҡурайсы // Совет Башҡортостаны. 1991, 14 июнь.

[2] Сөләймәнов Ғ. Ҡурайсылар уҙаманы // Ағиҙел. 1978. № 9. 106-сы бит.

[3] Культурное строительство в Башкирской АССР: Документы и материалы. 1917—1941. Уфа, 1986. 150-се бит.

[4] Париж аҙналығы. 1925, 31 июль.

[5] Башҡортостан. 1991, 14 июнь.

* * *

Әҙәбиәт: Аралбай Ҡ. Мәшһүр ҡурайсы // Совет Башҡортостаны. 1991. 14 июнь. Шәкүр Рәшит. Бөйөктәрҙең бөйөгө // Сыңрау торналар иле: Мәҡәләләр һәм очерктар. Өфө, 1996; Исянбаев Ю.М. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Шәриф Манатов
(1892—1936)

Күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, талантлы педагог, ғалим һәм публицист Шәриф Манатовтың исеме айырыуса башҡорт халҡының 1917 йылғы революция һәм граждандар һуғышы осорондағы милли автономия өсөн көрәш тарихында хөрмәтле урындарҙың береһен алып тора. Ш.Ә. Манатов ғәйәт ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы тормош юлы үтә. Ул үтә ауыр һәм ҡырҡыу бер дәүерҙә — 1917 йылдың авгусында II Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт өлкә шураһының тәүге рәйесе итеп һайлана. (Әхмәтзәки Вәлиди был ваҡытта уның ярҙамсыһы, Шәйехзада Бабич — шураның сәркәтибе итеп раҫлана.) Ҡоролтайҙа сығыш яһап, Рәсәйҙә унитар дәүләт өсөн көрәшеүселәргә, милләттәрҙең үҙбилдәләнешен танырға теләмәүселәргә ҡаршы тора. 1917 йылдың 16 ноябрендә Башҡорт өлкә шураһының Башҡорт автономияһын иғлан иткән тарихи фарманы ла Шәриф Манатов ҡултамғаһы менән матбуғатта донъя күрә. Йәғни башҡорт хәрәкәтенең был осорҙағы эшмәкәрлеге уның исеме менән айырылғыһыҙ бәйле була. Әммә, үкенескә ҡаршы, Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең «Хәтирәләр»ендә Ш.Ә. Манатов тураһында: «Авантюрист тәбиғәтле, сәйәси эшмәкәрлегендә тотороҡло түгел», — тип кире ҡылыҡһырлама бирә. Шәриф Манатовҡа, 1917 йылдың ноябрендә Ырымбур губернаһынан Учредительный (Ойошторои) йыйылышына депутат итеп һайланыу айҡанлы һәм РСФСР хөкүмәте менән Башҡортостан автономияһы проекты тураһында һөйләшеүҙәр алып барыу маҡсатында, 1918 йылдың ғинуар башында Петроградҡа китергә һәм артабан Башҡорт хөкүмәтенең эшенән ситләшергә тура килә. Әммә, ҡайҙа ғына булып, ниндәй генә вазифалар башҡарһа ла, ул һәр ваҡыт үҙ халҡының мәнфәғәттәренә тоғро ҡала, хатта нәҡ бына шул тоғролоғо өсөн бик күп ғәҙелһеҙлектәргә дусар ителә. Совет власының шәхес культы шарттарындағы ике йөҙлөлөгө, йәбер-золомдары алдында ла ул рухын һүндермәй, оло күңелле кешеләргә хас булғанса, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем атына һәм затына тап төшөрмәй.



Ш. Манатов ҡатыны Ғәйшә менән.

Шәриф (Шәрифйән) Әхмәт улы Манатов 1892 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Ҡатай олоҫо (хәҙерге Ҡорған өлкәһе Әлмән районы) Манатау ауылында тыуған. (Башҡорт халҡының ялан-ҡатай ырыуына ҡараған был ауыл, ваҡ ауылдарҙы бөтөрөү сәйәсәте арҡаһында, 70-се йылдарҙа таралып бөттө.) Шәриф 5 йәшендә әсәнән етем ҡала. 1905 йылда 13 йәшлек был зирәк малай алыҫ юлға сыға: Өфөгә килеп, башҡорттар араһынан уҡымышлы кешеләргә юлыға һәм уларҙың ярҙамы менән «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаша. Артабан, мәҙрәсәне тамамлау менән, Семипалатинскиға барып, уҡытыусылар семинарияһына имтихан тота. Уҡыу осоронда уға, төрлө эштәрҙә эшләп, үҙен үҙе ҡарау хәстәрлеген күрергә, бынан һуң да тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татырға тура килә. 1910 йылда Петербургка юл тота, бында ул Бехтерев институтының тарих-филология факультетына ҡабул ителә. Шәриф Манатовтың сәйәси эшмәкәрлеге нәҡ ошо осорҙа башланып китә. Ул, аҙмы-күпме аҡса табыу өсөн, шәхси дәрестәр бирә, Петербургта һәм Өфөлә сыҡкан мосолман гәзиттәрендә, батша Рәсәйенең милли сәйәсәтен фашлап, мәҡәләләр баҫтыра, студенттар хәрәкәтендә ҡатнаша, халыҡты бөлгөнлөккә төшөрөүсе империалистик һуғышҡа ҡаршы сығыш яһай. 1914 йылда, охранканың эҙәрлекләүенән ҡасып, уҡыуын тамамламайынса, эмиграцияға сығып китә. Швейцарияның Цюрих, Берн ҡалаларрында йәшәй, аҙаҡ Женевала урынлашып, шоколад фабрикаһында үлсәүсе булып эшләй. Бында ул үҙ алдына белем алыуын дауам итә, эмиграциялағы рус революционерҙары менән таныша, В.И. Лениндың сығыштарын тыңлай, уның менән һөйләшеп, әңгәмәләшеп ултыра. Эмиграцияла үткәргән өс йыл ваҡыт эсендә Шәриф Манатов йәнә инглиз, немец, француз, ғәрәп телдәрен өйрәнә, сәйәси әҙәбиәт менән ныҡлап мауығып китә. Һөҙөмтәлә, 1917 йылдың ғинуарында РСДРП (меньшевик-интернационалистар) сафына ағза булып керә. Был осор уның ижтимағи-сәйәси

ҡараштары формалашыуында мөһим роль уйнаған булырға тейеш. Шәриф Манатовтың артабан Әхмәтзәки Вәлиди менән бик үк яҡын мөнәсәбәттә булмауы ла, нигеҙҙә, шунан килгәндер, күрәһең, һәр хәлдә, Ш.Ә. Манатовты, Әхмәтзәки Вәлидиҙән айырмалы рәүештә, милли һәм социаль мәсьәләләрҙе, шул иҫәптән Башҡорт автономияһын, фәҡәт Совет власына, социализм идеяларына таянып һәм һыйынып хәл итеүгә ысын күңелдән инанып йәшәгән эшмәкәрҙәрҙең береһе тип иҫәпләргә булалыр.

1917 йылғы Февраль революцияһынан һуң Шәриф Манатов, илгә ҡайтып, Өфөлә «Тормош» гәзите редакцияһына эшкә урынлаша. Нәҡ ошонда ул, 25—30 августа, II Башҡорт ҡоролтайында ҡатнашып, милли-азатлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе булып китә лә инде. Башҡорт өлкә шураһы 1917 йылдың август — декабрь айҙарында Шәриф Манатов етәкселегендә Башҡорт автономияһын бойомға ашырыу юлында мөһим эштәр атҡара. Был дәүерҙә көрәштең тәүге осоро, «Ваҡытлы хөкүмәттең ҡаршы тороуына ҡарамаҫтан, Башҡортостанды буржуаз-демократик автономиялы республика тип иғлан итеү, империалистик һуғышты дауам итеүгә ҡаршы һәм, ниһайәт, ислам флагы аҫтында мосолман халыҡтары өҫтөнән үҙҙәренең гегемонияһын урынлаштырырға ынтылыусы татар буржуазияһына һәм руханиҙарына ҡаршы көрәш менән характерлы була»[1]. Шәриф Манатовтың биографтарының береһе Рәүеф Насиров һүҙҙәре менән әйтһәк, был, әлбиттә, аҙ түгел. Иң мөһиме, өлкә шураһы Башҡорт милли дәүләтселеген ойошторроуҙа хәл иткес аҙымдарҙы яһай. 15 ноябрҙә Башҡорт автономияһын иғлан итеү тураһында фарман ҡабул итә, ә 8—20 декабрҙә III Башҡорт ҡоролтайы Башҡорт хөкүмәтен һайлай.

Алда әйтелгәнсә, 1918 йылдың 6 ғинуарында Шәриф Манатов Петроградҡа барып төшә. Шул уҡ көндө ВЦИК Учредительный йыйылышты таратыу тураһында ҡарар ҡабул итә. 17 ғинуарҙа М. Вахитов, Ғ. Ибраһимов, Ш. Манатов составында (өсөһө лә элекке Учредительный йыйылыш ағзалары) Милләттәр эше буйынса халыҡ комиссариаты эргәһендә Мосолман эштәре комиссариатын ойоштороу тураһында декрет баҫылып сыға. Уның комиссары итеп М. Вахитов, комиссарҙың иптәштәре сифатында Ғ. Ибраһимов һәм Ш. Манатов раҫлана. Шәриф Манатовтың Башҡорт хөкүмәте эштәренән ситләшеп, ошо комиссариат ағзаһы булараҡ эшмәкәрлеге 1918 йылдың майында ҡапыл өҙөлөп ҡала. Бының төп сәбәбе – Ш.Ә. Манатовтың Ғәлимйән Ибраһимов һәм Мулланур Вахитов менән һүҙгә килешеүе. Был мәсьәләгә асыҡлыҡ индергәнгә тиклем ошонан алда булып үткән ваҡиғаларға туҡталып үтергә кәрәк. Дөрөҫ, Ш. Манатов, Вахитов һәм Ибраһимов Ырымбурҙағы Каруанһарайҙы — башҡорттарға, Ҡазандағы Сөйөмбикә манараһын татарҙарға ҡайтарып биреү тураһында дөйөм фекергә киләләр, был мәсьәлә буйынса әҙерләнгән декрет проекты менән 1918 йылдың

20 ғинуарында В.И. Ленинға керәләр. Ләкин ошонан һуң юлдар айырыла башлай. 1918 йылдың 12 мартында «Яңы ваҡыт» гәзите хәбәр итеүенсә, Петроградта большевистик хөкүмәттә эшләүсе Шәриф Манатов әфәнде Башҡорт автономияһын ойоштороу буйынса ҙур эш алып бара. Әммә шул уҡ ваҡытта Мулланур Вахитов етәкселегендәге Мосолман эштәре буйынса комиссариат, Ш.Ә. Манатовтың фекере менән иҫәпләшмәйенсә, Татар-Башҡорт республикаһы тураһында положение проектын эшләй, апрель һәм май айҙарында төрлө кимәлдә кәңәшмәләр ойоштороп, башҡорттарҙың позицияһын һанға һуҡмайынса, шул проектты хуплаусы ҡарарҙар сығарыуға өлгәшә. Был кәңәшмәләрҙә Шәриф Манатов фәҡәт үҙ аллы Башҡорт автономияһын булдырыуҙы яҡлап сығыш яһай. Ниһайәт, май айында ул Ғәлимйән Ибраһимов менән бергә Өфөгә килә һәм көтмәгәндә, бер ниндәй сәбәпһеҙ, төрмә рәшәткәһе артына барып эләгә. Был хаҡта ул үҙе, И.В. Сталинға хат менән мөрәжәғәт итеп, ошолай тип яҙа:

«Хөрмәтле Сталин иптәш! Өфөгә килеү менән, мине өйәҙ Крәҫтиәндәр Советының — унда барыһы ла С. Р. ағзалары... — ҡарары менән Ғәлимйән Ибраһимов төрмәгә яптырҙы. Унан беҙҙе Сарапул ҡалаһына оҙаттылар... Минең төрмәлә интегеүемә тиҙҙән ике ай була. Өфө следствие комиссияһы тарафынан һорау алыуҙар үткәрелмәне. Шулай уҡ ғәйепләү ҙә булғаны юҡ.

Мин, һис шикһеҙ, С. Р. флагы аҫтында эш итеүсе татар шовинистарының яла яғыу һәм шәреҡсә интрига ҡорбанына әйләндем»[2]. Ә Ш.Ә. Манатов нәҡ бына ошо ҡулға алыу алдынан, 1918 йылдың 20 майында, Мәскәү ҡала ойошмаһы тарафынан коммунистар сафына алынған була! Хат, күренеүенсә, 1918 йылдың июль баштарында яҙылған. Әммә ошонан һуң ярты йыл буйы Шәриф Манатовтың ҡайҙа булғанлығы бөтөнләй билдәһеҙ. 1919 йылдың ғинуарынан 1920 йылдың октябренә тиклем ул Төркиәлә була, унда Төрөк Компартияһының Анкара комитеты президиумы ағзаһы итеп һайлана, төрөк телендә «Яңы донъя» гәзитен ойоштора һәм мөхәррир вазифаһын башҡара.

1920 йылдың 21 декабрендә Ш.Ә. Манатов Халыҡ Комиссарҙары Советының декреты менән РСФСР-ҙың Милли мәсьәләләр буйынса халыҡ комиссариатының БАССР хөкүмәте эргәһендә тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп билдәләнә. Шул уҡ декрет нигеҙендә ул бер үк ваҡытта Башҡорт республикаһының Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советында кәңәш биреү хоҡуғы менән ағза булып тора.

1921 йылдың октябренән Ш.Ә. Манатов — Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатында Башҡортостан вәкиле, уның Коллегия ағзаһы, 1923 йылдың мартынан ул — Төркөстан Совет Республикаһы Мәғариф халыҡ комиссариатының Коллегия ағзаһы. 1924 йылдың ғинуарында йәнә

Башҡортостанға ҡайта һәм шул уҡ йылдың көҙөнә тиклем Мәғариф халыҡ комиссариатының Академик үҙәгенә етәкселек итә. Әммә тиҙҙән, әлегә асыҡланып бөтмәгән сәбәптәр арҡаһында, Башҡортостандан бөтөнләй сығып китә, 1925—1932 йылдарҙа Ярославль педагогия институтында уҡыта, Баҡыла Әзербайжан Компартияһы ҮК-ның матбуғат бүлеге мөдире, аҙ ғына ваҡыт педагогия институты ректоры, Тбилисиҙа партия эшендә була, Ҡырымда Комвузда тарих буйынса лекциялар уҡый. 1932—1934 йылдарҙа ул СССР Фәндәр академияһы аспиранты, 1934 йылдан – Ҡырғыҙ дәүләт педагогия институтының дөйөм тарих буйынса профессоры. Хәле насарайғас, ул тыуған яҡтарына ҡайтырға ҡарар итә. Ул саҡта Силәбе өлкәһенең Миәс ҡалаһы янында Черновское тигән совхозда Смородиновка ауылында Ғәзизулла тигән ағаһы йәшәгән икән. Манатов Фрунзенан шунда ҡайтып төшә. Шәрифтең ҡатыны, өс балаһы артабан Өфөгә табан юл тота. 1936 йылдың көҙөндә ул ошо Смородиновка ауылында донъя ҡуя. Ш.Ә. Манатов Учалы районының Көсөк ауылы зыяратында ерләнә.

* * *

[1] Образование БАССР: Сборник документов. Уфа, 1959. 640-сы бит.

[2] Возвращенные имена. Уфа, 1991. 203—204-се биттәр.

* * *

Әҙәбиәт: Насиров Р.Х. Ҡул ҡуйҙы Манатов // Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997; Шул уҡ. От имени башкир // Возвращенные имена. Уфа, 1991. 191—211-се биттәр; Сәйфуллин С.Б. Шәриф Манатов хаҡында хәҡиҡәт // Башҡортостан. 1993. 20 февраль; Манатов Ш. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Ғәлимйән Таған
(1892—1948)



1917-1919 йылдарҙа Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә, Башҡорт ғәскәрендә ҡаһарман полк сардары булараҡ дан ҡаҙанған, аҙаҡ, сит илгә китеп, атаҡлы этнограф-ғалим, иҡтисад белгесе булып танылған доктор Ғәлимйән Тағандың исеме халҡыбыҙҙың донъяға билдәле арҙаҡлы шәхестәре галереяһында һоҡланғыс урындарҙың береһен алып тора.

Ғәлимйән Таған (Ғәлимйән Ғирфан улы Тағанов) 1892 йылда Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Ҡатай олоҫоноң (хәҙерге Ҡорған өлкәһенең Әлмән районы) Тәңрекүл исемле башҡорт ауылында хәлле һәм тәрбиәле ғаиләлә донъяға килгән. Үҙ ауылында мәҙрәсәлә уҡый, рус мәктәбен һәм мөғәллимдәр гимназияһын тамамлай. Рус урта мәктәбе уҡытыусыһы була. Һалдатҡа алынғас, Тифлиста (хәҙерге Тбилиси) хәрби мәктәптә уҡып сыға, беренсе бөтә донъя һуғышында батша армияһында офицер булараҡ ҡатнаша. 1917 йылда штабс-капитан чинында башҡорт милли хәрәкәтенә ҡушылып, 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сыҡҡанға тиклем Башҡортостан азатлығы өсөн көрәштең алғы сафында була. Бында ул башта 3-сө йәйәүле полктың, һуңыраҡ 2-се йәйәүле төмәндең (ун мең) сардары сифатында бик күп батырлыҡтар күрһәтә. Башҡорт ғәскәрендә полковник дәрәжәһенә өлгәшә. Әхмәтзәки Вәлиди Туған, уның хәрби эшмәкәрлегенә туҡталып, аҙаҡ ошолай тип яҙа: «3-сө башҡорт полкының иң ауыр, ҡыҫынҡылы ваҡыттарында һалдаттарға атай ҙа, арҡаҙаш та булып, ҡулдарынан етәкләп алып йөрөй белгән Таған һәм уның ғәскәре большевиктар тарафынан (1918—1919 йылдар) бер «үлем бәләһе» тип баһаланды. Бер ҡыҙыл офицерҙың «Көнсығыш фронтта башҡорттарға ҡапма-ҡаршы» исеме аҫтында нәшер иткән хәрби хәтирәләрендә: «Мең башы Тағандың саңғылы ғәскәрҙәре алдында ҡыш айҙарында тәрән ҡар кисеп көнбайышҡа тура ҡарап ҡасҡан ваҡытта татыған башҡорт ҡамсыһының әсеһен беҙ, ҡыҙылдар, һис онотмайбыҙ», — тип яҙыуын 1920 йылда эске Рәсәйҙә Пенза

виләйәтенең рәсми совет гәзитендә үҙем уҡыным»[1]. «Хәтирәләр» әҫәрендә иһә ул 1918 йылдың 15—18 авгусында Ғәлимйән Таған менән Ғабдулла Ғәмбәров командалығындағы 3-сө башҡорт полкының Өфөнән көнсығышта Иглин станцияһы янындағы Ырныҡшы тигән ерҙә (дөрөҫөрәге, Өфөнән көньяҡ-көнсығыш тарафта, хәҙерге Архангель районындағы Ырныҡшы ауылы булырға тейеш. — Р.Ш.) Кашириндар менән өс көн һуғышып, башҡорттарҙың уларҙы ҡаты еңелеүгә дусар итеүҙәре тураһында әйтеп үтә һәм ошондай иҫкәрмә лә яһай: «Әммә большевиктар унда үҙҙәренең саҡ-саҡ үлемдән ҡотолоп ҡалыуҙарын «Уралда граждандар һуғышы» исемле китапта 3-сө башҡорт полкының еңелеүе тип тасуирлай»[2]. Асылда хәл бөтөнләй икенсе төрлө була һәм, ғөмүмән, Ғәлимйән Таған етәкселек иткән ғәскәри бүлкәттәр, Муса Мортазин һымаҡ уҡ, Башҡортостан азатлығы өсөн барған һуғыштарҙа һис ваҡытта ла еңелеү белмәй.

1919 йылда, башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуына риза булмайынса, Ғәлимйән Таған эмиграцияға китә. Башта яҡташы Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән бергә ике йыл самаһы Японияла була, артабан, Токиола мадьяр шәрҡиәтселәре менән танышып, уларҙың ярҙамында Венгрияға барып урынлаша. Шул илдең Дебрецен ҡалаһында ауыл хужалығы университетын, аҙаҡ Будапештта Франц Иосиф техника университытының иҡтисад факультетын тамамлай, «Һуғыш ваҡытында һәм һуғыштан һуң Рәсәйҙең валютаһы» тигән хеҙмәт яҙып, мадьярса һәм француҙса нәшер иткәндән һуң, фән докторы дәрәжәһен алыуға өлгәшә. Әммә артабанғы ғилми эҙләнеүҙәрен ул тулыһынса этнография фәненә һәм музей эшмәкәрлегенә арнай. Хеҙмәттәренең төп темаһы — төрки халыҡтар, башлыса башҡорт һәм ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың матди мәҙәниәте. Быға венгр ғалимдары менән бергә Шәреҡ төркиҙәре, башҡорт һәм ҡаҙаҡ этнографияһы менән шөғөлләнеүсе рус ғалимы Харузов менән эмиграцияға тиклем таныш булыуы ла ярҙам итә. Будапештта ул Мадьяр дәүләт этнография музейының ислам һәм төрки бүлеге мөдире вазифаһын башҡара, шуның менән бергә Мадьяр этнография йәмғиәтенең сәркәтибе булып тора. 1932, 1937 һәм 1939 йылдарҙа ул ошо ике ғилми ойошманың йөкмәтеүе буйынса Төркиәгә барып, Көнъяҡ Анатолияла йәйләү тормошо менән йәшәүсе төрөктәрҙең көнкүрешенә арналған материалдар йыя, 1938, 1941 йылдарҙа Финляндияла һәм Эстонияла Урал-Алтай халыҡтарының сағыштырма этнографияһын өйрәнеү эше менән мәшғүл була. 30-сы йылдар уртаһынан 1945 йылға тиклем уның мадьяр журналдарында мадьяр телендә (француз һәм немец телдәрендә аңлатмалары менән) тиҫтәләрсә күләмле мәҡәләләре баҫылып сыға. Әхмәтзәки Вәлиди, мәҫәлән, үҙенең шәхси китапханаһында нөсхәләре булған хеҙмәттәренең ошондай исемлеген һанап

үтә: «Башҡорттоң тирмә йорттағы көнкүреше» (1934), «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ауырыуҙары һәм уны дауалау» (1936), «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ярыштары һәм байрамдары», «Ҡырғыҙҙарҙа ат урлауға ҡараған хоҡуҡи мәғлүмәт», «Башҡорттарҙа мал тамғалау ысулы», «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат тәрбиәләү ысулдары» (1936), «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа йөк ташыу һәм сәйәхәт итеү саралары» (1938), «Кесе Азия төрөктәрендә кәзә үрсетеү һәм йөн эшкәртеү» (1939), «Тороста Ҡаратепе төрөктәре этнографияһы» (1940) һәм «Торостың көньяҡ бүлегендә этнография тикшеренеүҙәре» (1942)[3].

Этнография менән шөғөлләнгәндә Ғәлимйән Таған матди мәҙәниәт ҡомартҡыларын фотоға төшөрөү һәм шуның менән фән өсөн ҡиммәтле материалдар йыйнау эшенә бик ҙур әһәмиәт биргән. Уның был эшмәкәрлеге этнографтар өсөн өлгө булып тора. Үҙенең тикшеренеүҙәре һәм ғилми сәйәхәттәре һөҙөмтәһендә ул төрки халыҡтарының матди этнографияһы буйынса меңәрләгән фоторәсем туплай һәм, Ә. Вәлиди һүҙҙәре менән әйткәндә, «Мадьяр музейы коллекцияһын был хосуста иң бай коллекция хәленә килтереүҙә бөйөк тырышлыҡ күрһәтә»[4].

Ә.Ә. Вәлиди үҙенең дуҫы һәм арҡаҙашы Ғәлимйән Таҡанды, башҡортҡа хас булғанса, йыр-моңға, бейеүгә һәләтле оло бер талант эйәһе тип ҡат-ҡат иҫкә ала, уның үҙен «тауышы бик матур булған доктор Таған башҡорт халыҡ йырҙарын һаҡлаусы йәнле музей ине»[5] тип атай. Ошо урында донъя әһәмиәтендә дан ҡаҙанған ғалимыбыҙ Ә. Вәлидиҙең «Хәтирәләр» китабындағы ҡыҙыҡлы бер эпизодҡа туҡталып үтәйек. Эмиграцияға китеп, Азия һәм Европа илдәре аша оҙон-оҙон юлдар үткәндән һуң, 1925 йылдың май айында Әхмәтзәки Вәлиди һәм Әбделҡадир Инан Будапештҡа етеп, унда шул замандың күренекле венгр ғалимдары һәм Ғәлимйән Таған менән осраша, Будапештта ҡунаҡтар хөрмәтенә күңелле мәжлестәр ойоштороло. Ә. Вәлиди, Ә. Инан һәм Ғ. Таған төн уртаһында рестрорандан сыҡҡанда башҡортса йыр башлайҙар. Йырҙы артабан Ғәлимйән Таған үҙе генә дауам итә. «Доктор Таған ғәжәп моңло итеп бер-бер артлы бик күп башҡорт йырҙарын йырланы. Мадьяр ҡатындары тәҙрәләрен асып тыңлай»[6]. Төн уртаһында Будапешт һынлы оло ҡалала, нисек әйтһәң дә, сит милләт ҡатындарының, һуҡраныу түгел, ә һоҡланып, тәҙрәләрен асып тыңларлыҡ булғас, башҡорттоң илаһи йыры ла, йырсыһы ла алыҫ илдәрҙә лә кешеләрҙең саф күңелдәрен таң ҡалдырырлыҡ, тип нисек әйтмәҫһең.

Ғәлимйән Тағандың йыраусылыҡ оҫталығы тураһында һөйләгәндә беҙҙең хәҙерге этнография фәне һәм фольклористика өсөн бик ҡиммәтле һәм көтөлмәгән хазина булырҙай бер факт иғтибарҙы йәлеп итә: мадьяр музыка белгестәре һәм Вена Фәндәр академияһының фонограмма архивы мөдире

профессор Роберт Лах уның был талантын юғары баһалайҙар һәм, әлбиттә, уның башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып алған булырға тейештәр. Ә инде Ә. Вәлидиҙең «Хәтирәләр»ендә хәбәр ителгәнсә, доктор Тағандың Веналағы дуҫы профессор Герберт Янски менән берлектә 1939 йылда «Башҡорттарҙың моңдары һәм йырҙары» тигән махсус бер том баҫып сығарыуы айырыуса әһәмиәткә эйә. «Был әҫәрҙә, — ти Ә. Вәлиди, — доктор Тағандың һәм беренсе донъя һуғышында әсир төшкән кешеләрҙең ауыҙынан яҙып алынған моңдар, йырҙар ноталары менән бергә яҙып нәшер ителгән. Әҫәрҙә профессор Янски доктор Тағандың тәржемәи хәлен дә яҙған»[7]. Был ҡиммәтле материалдарҙы ғилми әйләнешкә индереү алда торған бурыс булып ҡала әле.

Ә. Вәлиди, дуҫы Ғәлимйән Тағандың этнограф, фольклорсы һәм тел белгесе булараҡ торғаны менән тере сығанаҡ булыуын билдәләп, профессор Гюрфи Иштван доктор Тағанды «Будапештта бер үҙе бер Көнсығыш төрки колонияһы» тип баһалай торғайны, ти[8]. Ғәлимйән Таған оло рухлы, ҡаһарман йөрәкле, фәндә һәм тормошта үҙенең инаныстарына тоғролоҡло, күркәм тәбиғәтле, изге күңелле бер зат була. Ул үҙе «инсандарға файҙалы булыуҙан, уларға ярҙам ҡулы һуҙыуҙан зауыҡ таба ине», ти Ә. Вәлиди һәм уның был сифаты тураһында бик ҡыҙыҡлы иҫтәлектәр һаҡланыуы тураһында яҙа.

Ғәлимйән Тағандың ғаилә хәленә килгәндә, яҙмыш уны был йәһәттән бер ҙә иркәләмәй. 1918 йылда ул үҙенең тыуған төйәгендә Баҡай ауылынан (хәҙерге Ҡорған өлкәһенең Сафакүл районы) Мәғмүрә исемле ҡыҙға өйләнә. 1919 йылдың башында Хәҙисә исемле ҡыҙы тыуа. Шул уҡ йылда, Советтар яғына сығыуҙан баш тартып, сит илгә китергә мәжбүр була. Ҡатыны имсәк балаһы менән уға эйәрә алмай тороп ҡала. 1937 йылда Мәғмүрә ханым репрессия ҡорбанына әйләнә. Бәхеткә, ҡыҙы Хәҙисә Ғәфүрова иҫән ҡала. Хәҙисә Ғәфүрова ире Мөхәмәтғәлим менән биш бала үҫтерә. Ғәфүровтар ғаиләһе хәҙерге ваҡытта Ҡорған өлкәһе Әлмән районының Зәйнекәй ауылында йәшәй[9]. Ә инде Ғәлимйән Таған, сит илгә киткәс, яңынан өйләнмәй, ғүмеренең ҡалған өлөшөн яңғыҙ йәшәп үткәрә.

Эмиграцияла йәшәгәндә Ғәлимйән Таған сәйәсәткә ҡатнашмай, «һуғыш барышында мадьярҙарҙың һәм немецтарҙың сәйәси эшкә ҡушылырға тәҡдим итеүҙәренә яҡынлашмайынса»[10], ғилми эшмәкәрлегенә тоғро ҡала. Шул уҡ ваҡытта уға тыуған илебеҙ — ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙың, башҡорт халҡының яҙмышы тураһындағы уйҙар һис кенә лә тынғы бирмәй. Был йәһәттән тағы ла Ә.Ә. Вәлиди һүҙҙәренә мөрәжәғәт итмәйенсә булмай. «Доктор Таған, — ти ул, – ватанына бик фиҙаҡәр булғанлыҡтан, әгәр бер көн Россия ҡулы аҫтындағы милләттәрҙең халыҡ-ара кимәлдә вәкилдәре булыу талап ителһә, башҡорттарҙың вәкиле булырға әҙер ине һәм Төркөстан файҙаһына

эшмәкәрлек итеү өсөн Мадьярстанда ҡалды. Быға уның үҙен мадьяр ғалимдарының бик яратыуы һәм юғары баһалауҙары ла, шулай уҡ мадьяр милләтенең инсанлы күкрәгенә баҫып һөйөү хосусындағы даими рәүештә күҙәтелгән гүзәл сифаты ла сәбәп булды»[11].

1945 йылда Ғәлимйән Таған, совет ғәскәре Венгрияға барып кереү менән, НКВД агенттарының электән дә тынғы бирмәүенә хәүефләнеп, Төркиәгә китергә ынтылып ҡарай. Әммә был тырышлыҡ бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәй һәм уға Германияға ҡасыуҙан башҡа сара ҡалмай. Шул ваҡыттан алып ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем Гамбург университетында төркиәтселек лекторы вазифаһын башҡара. Унда ла ғилем эйәләре араһында хөрмәт ҡаҙана. Башҡорт халҡының, үҙ милләтенең мәнфәғәттәре өсөн көрәштең бөйөк ҡаһарманы, атаҡлы ғалим, оло талант эйәһе Ғәлимйән Таған алыҫ Алман илендә 1948 йылда яҡты донъя менән хушлаша. Уның илһамлы тормош юлын, бай һәм ҡиммәтле ғилми мираҫын ентекле өйрәнеү халҡыбыҙҙың фән һәм рухиәт донъяһын, һис шикһеҙ, өр-яңы табыштар менән байытасаҡ.

Әхмәтзәки Вәлиди, Әбделҡадир Инан, Ғәлимйән Таған һымаҡ бөйөк шәхестәребеҙҙең ғилми мираҫын өйрәнеү һәм ватаныбыҙға ҡайтарыу хәҙер республикабыҙҙа дәүләт әһәмиәтендәге мөһим бурыс кимәленә күтәрелде[12].

* * *

[1] Вәлиди Туған Ә.Ә. Доктор Ғәлимйән Таған // Шоңҡар. 1994. № 1. 72-се бит.

[2] Вәлиди Туған Ә.Ә. Хәтирәләр. Өфө: Китап, 1996. 234-се бит.

[3] Вәлиди Туған Ә.Ә. Доктор Ғәлимйән Таған // Шоңҡар. 1994, № 1. 70-се бит.

[4] Шунда уҡ.

[5] Шунда уҡ, 71-се бит.

[6] Вәлиди Туған Ә.Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 629-сы бит.

[7] Вәлиди Туған Ә.Ә. Доктор Ғәлимйән Таған // Шоңҡар. 1994, № 1. 71-се бит.

[8] Шунда уҡ.

[9] Вәлиев Д.Ж. Арҙаҡлы шәхес һәм мәшһүр ғалим // Башҡортостан. 1994, 13 октябрь; Валеев Д.Ж. Галимжан Таган – выдающийся этнограф и финансист // Судьба и наследие башкирских ученых-эмигрантов. Уфа, 1995. 119—123-сө биттәр

[10] Вәлиди Туған Ә.Ә. Доктор Ғәлимйән Таған // Шоңҡар. 1994, № 1. 72—73-сө биттәр.

[11] Шунда уҡ, 71-се бит.

[12] Был хаҡта ҡарағыҙ: О мерах по возвращению в Башкортостан научного наследия Ахмет-Заки Валиди Тогана, Абдулкадыра Инана, Галимьяна Тагана и

увековечению их памяти: Указ Президента Республики Башкортостан от 4 сентября 1996 года // Ведомости Государственного Собрания, Президента и Кабинета Министров Республики Башкортостан. 1996, ноябрь, № 11.

* * *

Әҫәрҙәр: Башкиры в Забайкалье // Ватандаш. 1997, №№ 8-10; Этнографические заметки о башкирах и других тюркских народах. Уфа: Гилем, 2005.

Әҙәбиәт: Вәлиди Туған Ә.Ә. Доктор Ғәлимйән Таған // Шоңҡар. 1994, № 1. 69—73-сө биттәр; Валеев Д.Ж. Галимжан Таган — выдающийся этнограф и финансист // Судьба и наследие башкирских ученых-эмигрантов. Уфа, 1995. 119—123-сө биттәр; Таган Г.Г. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Фархшатов М.Н. Галимжан Таган в эмиграции: Биографический очерк. Уфа: Гилем, 2003.

Дауыт Юлтый
(1893—1938)



XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтендә ғәйәт көслө һәм талантлы бер төркөм яҙыусылар күтәрелеп сыға. Улар араһынан Шәйехзада Бабич һәм Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров һәм Дауыт Юлтый һымаҡ әҙиптәрҙең ижады беҙҙең рухи мәҙәниәтебеҙ тарихында ысын мәғәнәһендә аҫыл һәм һоҡланғыс бер үҫеш этабын билдәләй. Был яҙыусыларҙың һәр береһе үҙенсә ҙур, үҙенсә ҡабатланмаҫ мираҫ ҡалдыра. Ошо илһамлы ижад мираҫында Дауыт Юлтыйҙың аһәңле йөрәк моңо әле бөгөн дә күңелдәргә һәм зиһендәргә үтеп инерлек булып яңғырап тора.

Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, талантлы шағир, прозаик һәм драматург, публицист һәм мөхәррир, күренекле мәҙәниәт һәм йәмәғәт эшмәкәре Дауыт Юлтый (Дауыт Исхаҡ улы Юлтыев) 1893 йылдың 18 апрелендә элекке Ырымбур губернаһы Йомран-Табын олоҫоноң (хәҙер Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районы) Юлтый тигән башҡорт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Буласаҡ яҙыусының бала сағы, батша Рәсәйе шарттарында йәшәгән ярлы ғаиләләргә хас булғанса, өҙлөкһөҙ мохтажлыҡ шарттарында үтә. Дауыт бәләкәйҙән үк ата-әсәһе, ағалары, апалары менән бергә йәйен-көҙөн күрше утарҙағы алпауытҡа ялланып эшләй, ураҡ урыуҙа, мал көтөүҙә ярҙамлаша. «Ашлыҡ бешкәс, беҙ өй эсебеҙ менән бер арбаға тейәлеп, баяр яланына ураҡ урырға китәбеҙ. Атайым мәрхүм ураҡты бурысҡа алмай торғайны. Сөнки ураҡ — йыл әйләнәһенә беҙҙең өй өсөн берҙән-бер йүнле кәсеп... Ашлыҡ үҫкән йылдарҙа ураҡ ҡыйбат була. Беҙҙең ғаилә дүрт баҙар араһы эшләһә, кәмендә йөҙ тәңкә йәки ашлыҡ эшләй. Беҙҙең өй эсе ураҡ мәлендә генә бер ҡат кейенеп, бер әҙәм рәтле ашап ҡала. Унан һуң ашлыҡ һуҡтырған саҡта бер аҙ кәсеп була». Бала сағын хәтерләп, шулай яҙа әҙип үҙенең «Автобиография»һында.

Дауыт Юлтыйҙың бала саҡ дуҫы уҡытыусы Зәкәриә Әбитәевтың

иҫтәлектәрендә был дәүер хаҡында ғәйәт ҡыҙыҡлы деталдәр бар. 1906 йылда уны Мәҙинә исемле апаһы Красиков тигән немец утарына Дауыт янына ҡунаҡҡа алып бара. Дауыт бында еҙнәһе Лотфой һәм ошо Мәҙинә апаһы менән бергәләп, йәйгелеккә ялланып, мал көтә икән. Кескеһен ул үҙенең «ауыл мәҙрәсәһендә уҡып йөрөүе, әкиәттәр, таҡмаҡтар яҙып бер дәфтәр тултырыуы хаҡында» һөйләй, үҙе сығарған шиғырҙа уҡып ишеттерә. Күренеүенсә, Дауыт Юлтыйҙа унының үҫмер йәшендә үк халыҡ ижадына, йыр-моңға, шиғриәткә әүәҫлек уянған.

Был хәл бер ҙә осраҡлы түгел. Буласаҡ яҙыусының атаһы Исхаҡ ағай, — тормоштоң ауырлығына ҡарамайынса, күңеле тулы яҡты өмөттәр һәм уй-хыялдар менән йәшәй белеүсе кеше. Профессор Ғайса Хөсәйенов әйткәнсә, «Дауыт Юлтыйҙың атаһы, батраклыҡ кәмһетелеүен үҙ башынан кисерергә тура килһә лә, бик артыҡ бойоҡмаҫ, киң һәм көр күңелле, үҙ алдына уҡырға, яҙырға өйрәнеп, заманына күрә «төрки таныған» һәм китап яратҡан кеше булған. Дауыт кесе йәштән үк атаһының «Мөхәммәҙиә», «Салсал», «Ғазый батыр», «Әбүғәлисина» кеүек китаптарҙы көйләп уҡығанын тыңлап үҫкән... Уға башлап хәреф таныҡкан, китаптар табышып биргән кеше лә шул атаһы була»[1].

Эйе, башҡорт халҡы, батша хөкүмәтенең милли-колониаль сәйәсәте арҡаһында ниндәй генә ауыр тормошҡа дусар ителмәһен, үҙенең алыҫ быуаттар төпкөлөнән килгән үҙенсәлекле рухи мәҙәниәт мираҫын һаҡлап, һәр ваҡыт аң-белемгә, мәғрифәткә, ижади эшкә ынтылып йәшәгән. Әгәр ҙә ул үҙенең тарихында айырыуса аяныслы XIX быуат шарттарында Мирсалих Биксурин, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев һәм, ниһайәт, яңы быуаттың тәүге йылдарында Шәйехзада Бабич, Мәжит Ғафури һымаҡ ҙур әҙиптәрҙе һәм уҡымышлыларҙы үҫтерә алған икән, артабан инде был халыҡтың рухи донъяһы, рухи энергияһы нәфис мәҙәниәт майҙанына, әлбиттә, яңынан-яңы ижади көстәрҙе алып сығырға әҙер булған.

Д. Юлтыйҙың мираҫында урын алған тәүге шиғырҙың аҫтына: «1908 йыл, Юлтый ауылы» тип яҙылған. Шиғырҙың исеме — «Башҡорт хәле». Икһеҙ-сикһеҙ Ырымбур далаһында ятҡан бәләкәй генә Юлтый ауылының 15 йәшлек Юлтый исемле шағиры шуның менән үҙ ижадының бер сифатын — саҡ уянып килеүсе поэтик тауышының туған башҡорт халҡы хаҡына фиҙаҡәр хеҙмәт итеүгә тәғәйен булыуын баштан уҡ белдереп һәм билдәләп ҡуя. Бында әле ауыл мәҙрәсәһенең йәш кенә шәкертенән донъяға ҡарашының һәм ижтимағи фекеренең тулыһынса асыҡ һәм формалашҡан булыуын көтөүе лә ауыр, әлбиттә. Әҙәбиәт фәнендә билдәләнгәненсә, Юлтый был шиғырҙа, халыҡты алдаусы «ҙур салмалы кәбән баштарҙы», илде бөлгөнлөккә төшөрөүсе, «йөҙ меңдәрсә дисәтинә ерҙе һатып», бәрәкәтте ебәреүсе бай түрәләрҙе фашлап,

революцион-демократик ҡараштарға яҡын торһа, икенсе яҡтан, милли әҙәбиәтебеҙҙең тарихында билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың элекке патриархаль-ырыу көнкүрешен идеаллаштырыу юлына төшөп китә[2]. Әммә бында шағирҙың башҡорт халҡының үткәндәренә мөрәжәғәт итеүен әлеге «идеаллаштырыу» шауҡымына ҡайтарып ҡалдырыу урынлы булмаҫ ине. Мәсьәлә бер аҙ етдиерәк тә, ҡатмарлыраҡ та булһа кәрәк. Миңә ҡалһа, Башҡортостанда һаман көсәйә барған капиталистик эксплуатация һәм башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талау, шуның менән халыҡтың аслыҡҡа, яланғаслыҡҡа дусар ителеүе шарттарында әүәлге «ниһайәһеҙ сахраларҙа, урмандарҙа тирмә менән күсеп йөрөгән замандарҙы» иҫкә алыуҙың патриархаль-ырыу тәртиптәрен идеаллаштырыу менән әллә ни уртаҡлығы ла юҡ. В.И. Ленindың ошо уҡ дәүерҙә яҙылған «Рәсәйҙә капитализмдың үҫеше» тигән хеҙмәтендә батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы колониаль сәйәсәтенең «немецтарҙың теләһә ҡайһы Африка илендәге теләһә нindәй вәхшилектәре» менән сағыштырырлыҡ булыуы тураһындағы һүҙҙәрен иҫкә төшөрһәк, йәш башҡорт шағирының был кәйефен аңлау һис тә ауыр түгел. Был, дөйөм алғанда, XIX быуатта һәм XX быуаттың башында бөтөн Рәсәйгә шаулаған башҡорт ерҙәрен талау проблемаһының бер сағылышы. Һәм әгәр ҙә шағир:

Эй, башҡорттар, ер-һыуығыҙ, малдарығыҙ,
Ҡайҙа китте ер һелкеткән дандарығыҙ?
Арыҫландай йөрәкле батыр булып,
Дошмандарға яу сапҡан шаңдарығыҙ?
Аҙ ғына шул хәлдәрҙе иҫкә алып,
Ҡалай һеҙҙең ғазапланмай йәндәрегеҙ? —

тип әрнеү менән халыҡҡа мөрәжәғәт итә икән, был һүҙҙәрҙә ысын тарихи дөрөҫлөк тә, үҙен борсоған һорауҙарға яуап эҙләү ҙә бар. Был проблеманың шул уҡ ваҡытта Юлтыйға тиклемге башҡорт мәғрифәтселәренең ижадында урын алған булыуын да әйтеп үтергә мөмкин. Шуның бер миҫалы — Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың «Шикайәт» шиғыры:

Аяҡлы мал тамами бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстерханға уҙҙы,
Унның артынса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тау кеби ағас тауҙары.

Дауыт Юлтый, тимәк, ижадының тәүге аҙымдарынан уҡ, Аҡмулла һәм

Өмөтбаев, Туҡай һәм Ғафури ижады традицияларында тәрбиәләнеп, мөһим социаль проблемаларға мөрәжәғәт итергә ынтыла. Уның ошо тәүге осор шиғырҙары уҡ ил ғәмдәре, халыҡтың ауыр яҙмышы өсөн тәрән борсолоу мотивтары менән һуғарыла. Әммә Юлтый, үҙенең остаздары Туҡай, Ғафури һымаҡ уҡ, халыҡтың киләсәгенә өмөт һәм ышаныс менән ҡарай, әрнеп һәм һыҙланып, уның яҡты көндәре килеүен көтә.

Тиҙҙән беренсе донъя һуғышы башланып китә һәм илдәр, халыҡтар өҫтөндә ҡупҡан был зилзилә алыҫтағы башҡорт ауылынан егерме бер йәшлек шағир Юлтыйҙы ла үҙ эсенә тартып ала. 1914 йылдың 22 октябрендә, һуғыштың бигерәк тә ҡыҙған бер мәлендә, уны тирә-яҡ ауылдарҙағы бик күп йәштәр менән бергә Ырымбур губернаһының Ивановка ауылына ғәскәри хеҙмәткә саҡыралар. Ә 1915 йылдың ғинуар баштарында Дауыт Юлтый фронтҡа оҙатыла һәм өс йылдан артыҡ ғүмерен ул алғы һыҙыҡта үткәрә, империалистик һуғыштың бөтөн фажиғәләрен үҙ күҙе менән күрә[3].

Ҡан ҡойғос донъя һуғышы фронтында крәҫтиән массалары араһынан сыҡҡан ябай бер һалдат ул, әлбиттә, бер ҡараһаң, ғәрәсәт диңгеҙендәге тапсыҡ һымаҡ ҡына. Әммә, йәш булыуына ҡарамаҫтан, Дауыт был ауыр һынау йылдарын ҙур ғына тормош юлы үткән һәм етди тормош аҡылы туплаған ир-егет булараҡ ҡаршы ала. Ул быға тиклем, Сорокин мәҙрәсәһен тамамлап, үҙенең тыуған ауылында уҡытыусы булып эшләй, Аҡмулла, Ғафури үткән юлдарҙы ҡабатлап, ҡаҙаҡ араһында балалар уҡытып ҡайта. Уның ижад баҡсаһында «Йәйге таң», «Эҙләнеү», «Йыйылығыҙ, хөр иптәштәр!», «Туғайҙа йәйге кис», «Фәҡир көндәрем», «Төнгө моң», «Үрләрем», «Әйтмәһендәр», «Ҡәләмгә», «Һандуғасҡа» кеүек, берсә мәғрифәтселек ҡараштарын алға һөрөүсе, берсә демократик пландағы фекерҙәрҙе күтәреүсе, әле төшөнкөлөк, өмөтһеҙлек, тәрән борсолоуҙар, әле хыял, өмөт, ышаныс яҡтыһы менән һуғарылған бер нисә тиҫтә шиғыры бар. Был осорға инде ул йәнә образлы фекер, поэтик оҫталыҡ йәһәтенән күркәмлек өлгөләре булырҙай шиғырҙар ижад итеүсе шағир булып етешә.

Тәрән йылға аға тауышһыҙ,
Һай йылғалар аға сылтырап.
Дошман аҡыллыһы хәүефһеҙ,
Иҫәр дуҫтарыңдан бул йыраҡ!

Ошондай афористик юлдар менән башлана, мәҫәлән, 1913 йылда ижад ителгән «Әсәйемдең өгөтө» исемле шиғыр. (Аҙаҡҡы ике юлды Аҡмулланың «Ахмаҡ дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ» тигән һүҙҙәре менән сағыштырып

үтергә лә мөмкин.)

«Мин – халыҡ, халыҡ — мин» булып ижад итергә ынтылыусы, «йырҙарым шул иң түбән халҡым йөрәгенән аға» тип белдереүсе йәш шағир утлы, михнәтле һәм күҙ йәшле һуғыш ғәрәсәттәре аша үткән йылдар эсендә инде синфи аңы үҫкән, революция идеяларына инанып, халыҡ бәхете өсөн көрәш юлына баҫкан шәхес булып формалаша. Ошо 1915—1916 йылдарҙа ул һуғышҡа ҡаршы протест белдереүсе, империалистик һуғышты тоҡандырыусы ҡара көстәрҙе фашлаусы атаҡлы «Сумка», «Ҡан баҙары» шиғырҙарын яҙа. 1917 йылдың Февраль революцияһы алдынан революцион йөкмәткеле «Төнгө йырҙар», «Туп заводында» шиғырҙары ижад итеlә.

Октябрь көндәрен Дауыт Юлтый Украинаның Полтава ҡалаһында ҡаршылай. Унда үҙ ирке менән Ҡыҙыл гвардия сафына инә. Украинала, Петроград фронтында йәш Совет Республикаһы өсөн һуғыштарҙа ҡатнашып, 1918 йылдың февралендә шағир тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Туҡ-Соран буйҙарында ул Совет власын нығытыу өсөн көрәштең алғы һыҙығында була. Советтарҙың Быҙаулыҡтағы беренсе өйәҙ съезында, Ырымбурҙағы беренсе губерна съезында делегат булып ҡатнаша.

1919 йылдың мартынан Дауыт Юлтый Беренсе революцион армияның сәйәси хеҙмәткәре, артабан — «Ҡыҙыл йондоҙ» хәрби гәзитенең сәркәтибе, мөхәррире. Ошо уҡ йылдан ул — Коммунистар партияһы ағзаһы.

Дауыт Юлтыйҙың Совет власы йылдарында башҡарған вазифалары, эшләгән эштәре ғәжәп күп тә, яуаплы ла. «Башҡортостан» гәзите тарихында ул – иң абруйлы мөхәррирҙәрҙең береһе. Әҙиптең тормошонда тағы әллә күпме эштәр, вазифалар була: Мәскәүҙә Ҡыҙыл профессура институтында уҡыу, нәшриәт, гәзит, журналдарҙың мөхәррире, Милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институтының хеҙмәткәре, Башҡортостан Яҙыусылар союзын ойоштороусыларҙың береһе, республика мәҙәниәтен күтәреүҙә, башҡорт халҡының яңы, милли әҙәби телен үҫтереүҙә туранан-тура ҡатнашыу. Ә бит был эштәр барыһы ла көсөргәнешле ижади хеҙмәт, поэзияла, прозала, драматургия һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә ҙур күләмле әҫәрҙәр һәм мөһим темаларға арналған мәҡәләләр яҙыу менән бергә алып барылған.

Дауыт Юлтыйҙың совет осорондағы ижад ғүмере ни бары ике тиҫтә йыл ғына дауам итә. Ләкин ошо ҡыҫҡа дәүер эсендә ул башҡорт әҙәбиәтенең алтын хазинаһын биләрлек бик күп әҫәрҙәр ижад итеп өлгөрә.

Революциянан һуңғы тәүге йылдарҙа башҡорт поэзияһына яңы ысынбарлыҡты художество саралары менән сағылдырыу мәсьәләһендә тәжрибә туплау, традицион алымдарҙы яңыртыу осорон үтәү өсөн бер килке ваҡыт кәрәк ине. Был эҙләнеү дәүере Юлтыйҙың ижади яҙмышын да ситләтеп үтмәй.

Дөрөҫ, ул «Ирек тауышы», «Атлан, батыр!», «Урал ҡыҙына» кеүек шиғырҙарында революцион көрәш һәм ижтимағи үҙгәрештәр романтикаһын уңышлы сағылдырыуға өлгәшә. Граждандар һуғышы дәүерендә агитацион шиғыр булараҡ яҙылған «Атлан, батыр!» әҫәре, ғөмүмән, башҡорт совет поэзияһы тарихында шул замандың рухын билдәләүсе поэтик ҡомартҡы булып ҡала.

Атлан, батыр, атҡа, тот һөңгөңдө!
Әйҙә саптыр яуға — дошманға!
Сәс ғәйрәтең дошман сафтарына,
Ауаздарың ашһын асманға!..

Бында шағирҙың күңел тойомлауы, тәбиғи таланты традициялы романтик образдар ярҙамында революцион йөкмәткене уңышлы асып биреүгә килтерә. Ләкин поэзияла һәр ваҡыт тойомлау менән генә эш ителмәй. Бында инде яңы ысынбарлыҡҡа ярашлы образдар системаһын эшләмәйенсә булмай ине. Дауыт Юлтыйҙың «Урал моңдары» тигән тәүге поэтик йыйынтығы (Стәрлетамаҡ, 1921), шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «гиперболизм, абстракция, айҙар, ҡояштар, йондоҙҙар, нурҙар, фәрештәләр, ожмах, йәһәннәмдәр, баллы шишмәләр менән эш күреү, шуларҙы ҡулланыу» арҡаһында тәнҡиткә эләгә. Юлтый шиғырҙарында, был осорҙағы бүтән шағирҙарға хас булғанса, натурализм күренештәре лә сағылып ҡала. Ләкин был етешһеҙлектәрҙән арына барған башҡорт поэзияһында егерменсе йылдар башында социализм төҙөүсе совет халҡының тормошон, яңы кешенең образын һынландырыуға арнап, юғары идея-художество кимәлендәге әҫәрҙәр ижад ителә. Был йүнәлештә Дауыт Юлтыйҙың «Шәрәф» поэмаһы уңышлы бер тәжрибә була. Шағир ижады ил тарихы, социалистик биш йыллыҡтар менән бергә үҫә, төрләнә, байыға бара. Д. Юлтыйҙың «Һуҡа бабай, ситкә кит...» тигән шиғырындағы:

Һуҡа бабай, ситкә кит!
Ана килә трактор!
Зинһар, бабай, йыраҡ тор!
Ташла эште, боҙма ерҙе,
Ситтән генә ҡарап тор! —

тигән һүҙҙәре хәҙер шул шанлы йылдарҙа беҙҙең ауылдарыбыҙҙа барған үҙгәрештәрҙең үҙенсәлекле бер символы рәүешендә ҡабул ителә.

Яңы тормошто һүрәтләү ҡеүәһе Д. Юлтыйҙың «Ҡомартҡыларым»

йыйынтығында (1924), «Мәйсәрә» (1930), «Нефть тураһында әкиәт» (1932), «Айһылыу» (1933) поэмаларында тағы ла тәрәнерәк асыла.

30-сы йылдар башҡорт прозаһы үҫешенә Дауыт Юлтый иң элек үҙенең киң билдәле «Ҡан» романы менән бик ҙур өлөш индерҙе. Был әҫәр өҫтөндә әҙип 30-сы йылдарҙа эшләй, үҙе иҫән саҡта башҡорт һәм рус телдәрендә беренсе китабы ғына баҫылып сыға. Икенсе китабы, яҙылып бөткән булһа ла, күп ваҡыттар үткәс, алтмышынсы йылдарҙың икенсе яртыһында, уның рус теленә тәржемә ителгән ҡулъяҙмаһын (машинкала баҫылған хәлдә) Мәскәүҙән, СССР-ҙың Үҙәк әҙәбиәт һәм сәнғәт дәүләт архивынан әҙәбиәт белгесе Суфиян Сафуанов табып алып ҡайта. Шул русса варианттан әҫәр (икенсе китап) Фәрит Иҫәнғолов тарафынан башҡортсаға ҡайтарыла. Шулай итеп, романдың икенсе өлөшө уҡыусы һәм әҙәбиәтебеҙ өсөн өс тиҫтә йылдан һуң яңынан тыуҙы һәм хәҙер «Ҡан» романы халыҡ араһында киң танылыу тапты.

«Ҡан» — үҙенең идея-тематик йөкмәткеһе менән башҡорт прозаһында ҡабатланмаҫ әҫәр. Уның төп пафосын миллионлаған кешеләрҙең ғүмерен өҙөүсе, ҡан ҡойоусы империалистик һуғышҡа ҡаршы ҡәтғи ризаһыҙлыҡ белдереү, һуғыш уты тоҡандырыусыларҙы фашлау проблемаһы билдәләй. Романдың төп геройҙары — ябай һалдаттар, уларҙың ошо мәхшәр эсендәге йылдар буйына һуҙылған «тормошо». Ғәжәп хәл: һуғышта үлем, ҡайғылар менән күҙмә-күҙ осрашып торғанда ла, кеше күңеле барыбер бер генә минутҡа ла үҙенең эске донъяһы менән йәшәүҙән туҡтамай. Ошо шарттарҙа беҙҙең алда һалдаттарҙың көндәлек ауыр тормошо, һәр төрлө мажаралары, күңел асыуҙар, уй-хыялдары, ҡыуаныс һәм йыуаныстары, хатта мөхәббәт менән осрашыу шатлыҡтары оҫта рәссам теле менән һүрәтләнгән картиналар аша үтеп китә. Беҙ Байғужа, Буранбай, Индрил, Новиков, Булаттарҙың яҙмышы һәм ошо образдар аша күп милләтле һалдат массаларында революцион аң үҫешен йотлоғоп күҙәтәбеҙ. Әҫәр үҙенең тарихи дөрөҫлөгө менән дә, мауыҡтырғыс мажаралыҡ планында яҙылыуы менән дә бик үҙенсәлекле. «Ҡан» диологияһын, уның төп проблематикаһы күҙлегенән ҡарағанда, прогрессив Көнбайыш әҙәбиәтендәге фәҡәт Анри Барбюстың «Ут» романы менән бер кимәлдә торған әҫәр тип иҫәпләргә була.

Атаҡлы әҙиптең ижади мираҫында, бынан тыш, хикәйәләр һәм повестарҙың әһәмиәте ҙур. 1919 йылда уҡ әле Д. Юлтый тарихи-революцион темаға «Бәләкәй Ҡотош» тигән хикәйә яҙа. Хикәйәнең төп геройҙары – революция эше өсөн көрәшеүсе Ҡотош ағай һәм бәләкәс Ҡотош. Яҙыусының «Тимеркәй фәлсәфәһе» (1924), «Хәлкәй артист» (1926), «Өмөт» (1926) хикәйәләре, «Әлимә һәм Мырҙаш ҡарт туйы» повесы — егерменсе йылдар башҡорт прозаһы үҫешендә мөһим роль уйнаған әҫәрҙәр. Шуның менән бергә, Д. Юлтый прозаһы, ғөмүмән,

бөгөнгө көндә лә иң юғары зауыҡтарҙы ҡәнәғәтләндерерлек ысын художество күренеше ул.

Дауыт Юлтый — үҙ заманында башҡорт совет драматургияһы үҫешенә лә ошондай уҡ йоғонто яһаған әҙип. Уның «Ҡарағол» драмаһы (1920) был жанрҙа тарихи теманы үҙләштереүҙең классик өлгөһө була. Утыҙынсы йылдарҙа «Салауат», «МаҡтымҺылыу» исемле драмалары сәхнәгә ҡуйыла һәм тамашасыларҙың мөхәббәтен яулай. Д. Юлтыйҙың «Аҡшан батыр» тигән тарихи драма яҙғанлығы ла билдәле.

Ҙур яҙыусы очерк һәм публицистика жанрында эшләүгә лә даими иғтибар бүлә. Уның әҙәби тәнҡит һәм ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге лә күп яҡлы һәм тәрән йөкмәткеле. Был планда Д. Юлтый башҡорт әҙәбиәтенең тарихы һәм теорияһы, театр тәнҡите менән шөғөлләнә, үҫмер сағынан күңелендә йәшәгән халыҡ ижады әҫәрҙәренә һәр ваҡыт ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу һаҡлай. Егерменсе йылдарҙа «Башҡорт шағиры Аҡмулла тураһында» тигән мәҡәлә баҫтырып, был бөйөк шағирҙың мираҫын туплау мәсьәләһен ҡуя. Үкенескә ҡаршы, бөтөн был йүнәлештәрҙә Дауыт Юлтый тарафынан йыйылған ҡиммәтле материалдар фажиғәле рәүештә юғалып ҡала.

Дауыт Юлтый — ифрат ҙур һүҙ оҫтаһы. Яҙыусы булараҡ, ул донъяға башҡорт халҡының ялҡынлы һәм моңло йөрәк хистәрен үҙенең күкрәгендә дөрләтеп килеп сыҡты һәм һәр ваҡыт халыҡ йөрәгендә йәшәй торған аҫыл китаптар яҙып ҡалдырҙы.

* * *

[1] Хөсәйенов Ғ.Б. Дауыт Юлтый: Тормошо һәм ижады. Өфө, 1963. 5-се бит.
[2] История башкирской советской литературы. М.: Наука, 1977. 120-се бит.
[3] Дауыт Юлтый тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1980. 14- 17-се биттәр.

* * *

Әҫәрҙәр: Ҡан: Роман. Өфө, 1934, 1970; Һайланма әҫәрҙәр, 2 томда, Өфө, 1934—1935; Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1982.

Әҙәбиәт: Хөсәйенов Ғ.Б. Дауыт Юлтый: Тормошо һәм ижады. Өфө, 1963; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 3-сө том. Өфө, 1991; Башҡорт әҙәбиәте: 10-сы синыф өсөн дәреслек. Өфө, 1995; Юлтый Д.И. // Башкортостан // Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов
(1895—1938)



Башҡорт халҡының йыр-моң донъяһында, милләтебеҙҙең рухи үҫеш тарихында бихисап ҡәҙерле исемдәр бар. Шул исемдәр араһында Ғәзиз Әлмөхәмәтов йондоҙо айырыуса яҡты һәм сағыу булып, илебеҙ һәм күңелдәребеҙ киңлегендә балҡып тора. Беҙҙең рухиәтебеҙҙә уның урыны иң элек, әлбиттә, башҡорттоң кешелек донъяһында тиңе булмаған илаһи йыр-моңдарының ҡабатланмаҫ бөйөк оҫтаһы һынында, дәүерҙәрҙе иңләп, ҡалҡып тора. Эйе, ул ысын мәғәнәһендә башҡорт йырының ҡаһарманы, башҡорт моңоноң даһийы, мәғрур Уралдың XX быуаттағы йырсы Буранбайы. Шуның менән бергә ул, әлбиттә, милли музыка тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырған композитор, башҡорт профессиональ сәнғәтен башлап ебәреүгә ғәйәт ҙур өлөш индергән, уның нигеҙ таштарын һалыуҙа баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт күрһәткән арҙаҡлы бер эшмәкәр. Йәнә әйтеп үтәйем: беҙҙең быуынға, беҙҙең дәүергә Ғәзиз Әлмөхәмәтов тигән исем алыҫ-алыҫтан, таш зиндандарҙың биктәре һәм сиктәре аша йөрәктәрҙе тетрәтерлек моң булып килеп етте. Был һоҡланғыс шәхес тураһында иҫтәлектәр тыйылыуҙарға ҡарамаҫтан, беҙ йәш саҡта уҡ һоҡланғыс легендаға әйләнгәйне инде. 60-сы йылдар уртаһында уның иң тәүге юбилей кисәләренең береһендә ҡатнашыуым әле булһа хәтеремдә. Ғәжәпкә ҡаршы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында, әммә уның Ленин урамы яғында (уң яҡтағы ишек) урынлашҡан бәләкәй генә ярым подвал бүлмәлә үткәрелде ул хәтер кисәһе. Һүҙҙәр, әлбиттә, ҡат-ҡат уйлап, үлсәп кенә һөйләнде. Ғәзиз ағайҙың замандаштары, уның хәләл ефете ап-аҡ сәсле Мәстүрә ханым ҡатнашты. Иҫтәлектәр беҙҙең өсөн үтә лә фәһемле һәм тәьҫирле булды. Бигерәк тә Батыр Вәлидтең сығышы күңелгә уйылып ҡалды. Уға инде, зәғиф кешегә, артыҡ һағайып тормаһа ла ярағандыр, күрәһең. Атаҡлы халыҡ йырсыһының фажиғәле яҙмышы хаҡында әрнеп, уны һағынып, исемен тергеҙеү, мәңгеләштереү зарурлығы тураһында тәҡдимдәр менән сығыш яһаны

Батыр ағай. Артабан барыбер боҙ ҡуҙғалды, яңы дәүергә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың даны һәм моңо әйләнеп ҡайтты. Уның башҡарыуында грампластинкаларға яҙылған бер нисә генә йыр һаҡланып ҡалған булып сыҡты. Шул йырҙар, шул йөрәккә үтеп инерҙәй илһамлы тауыш яңынан радио тулҡындары аша һирәгерәк булһа ла яңғырай башланы. 1968 йылда милли йыраусылыҡ сәнғәтендә әһәмиәтле ваҡиға булып үтте — йәш таланттарҙы асыу маҡсатында Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге призға йырсылар конкурсының иң беренсе бәйгеһе уҙғарылды. Хәҙерге быуын талантлы йырсыларыбыҙҙың күпселеге нәҡ ошо конкурстар аша оло сәнғәткә тәүге аҙымдарын яһаны. Үкенескә ҡаршы, был традиция һуңғы ваҡытта һүнеп ҡалды. Әммә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың башҡарыу оҫталығы башҡорт халыҡ йырының, беҙҙең аҫылдан да аҫыл оҙон көйҙәребеҙҙең үҙ дәүерендә өлгөһө, эталоны тип ҡабул ителгән икән, уның исеме менән бәйле конкурстарҙы мотлаҡ дауам итергә тейешбеҙ.

1995 йылдың көҙөндә мәшһүр башҡорт йырсыһы Ғ.С. Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 100 йыл тулыу көндәрен республикабыҙ хөкүмәте һәм халҡыбыҙ тантаналы рәүештә билдәләне. Ниһайәт, был юлы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының төп залында ошо датаға арналған юбилей кисәһе үткәрелде. Матбуғат биттәрендә бөйөк шәхестең тормошо һәм ижадына арналған мәҡәләләр баҫылды. Шулай ҙа Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормошо һәм яҙмышы үҙенең егәрле тикшеренеүселәрен, ижадсының талантына бәрәбәр ҡәләм оҫтаһын көтә әле. Был осраҡта иһә беҙ, биографик очерк жанры талаптарынан сығып, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ғүмер юлы һәм ижади эшмәкәрлегенең иң мөһим мәлдәренә һәм һыҙаттарына туҡталып үтмәксебеҙ.

Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙер Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы) Мораптал исемле (хәҙерге Иҫке Мораптал) башҡорт ауылында донъяға килә. Ғаиләлә алты малай үҫә: Абдулла, Абдрахман, Ғәзиз, Фәтих, Ғәлирахман, Хәйбрахман. «Ғәзиздең әсәһе Ғәлимә бик моңло тауышлы ине. Уның «Мөхәммәҙиә»не һәм башҡа дини китаптарҙы уҡыуы хәтеремдә. Ғәзизгә тауыш матурлығы әсәһе тарафынан бирелгәндер», — тип яҙа йырсының ҡатыны Мәстүрә Әлмөхәмәтова. Ғаилә фотоларының береһендә Ғәзиздең әсәһе Ғәлимә апайҙың һөйкөмлө, һоҡланғыс, эске бер нур бөркөп торған күркәм йөҙөн күреп, таң ҡалаһың. Ғәзиз үҙенең төҫө, холҡо менән дә әсәһенә тартым булғандыр, күрәһең. Мәстүрә ханым уның портретын: «Урта буйлы, киң яурынлы, ҡуңыр сәсле, көләс йөҙлө кеше ине», — тип һүрәтләй. Ә бына ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипованың иҫтәлеге: «Атайым һәйбәт холоҡло, туған йәнле, кешелекле кеше ине. Ярлы башҡорт ғаиләһендә тыуып үҫкән. Туғандарына ғүмере буйына ярҙам итте. Абдулла ағайға ай һайын аҡса ебәреп

торҙо, ул сирле генә кеше ине. Хәйбрахманды 1922 йылда үҙе менән алып китә, ул беҙҙең ғаиләлә үҫте. Абдрахман ағайҙың ете балаһы булды, Рауза исемле ҡыҙы беҙҙә ҙурайҙы, хәҙер Ташкентта йәшәй. Ул минән өс йәшкә олораҡ ине, беҙгә кейемде лә бер иштән тегеп кейҙерәләр, игеҙәктәр кеүек йөрөнөк. Ғәли ағайҙы ла уҡытты атайым. Фәтих ағайҙы, сирләгәс, шифахананға ебәрҙе. Шулай итеп, барлыҡ туғандары хаҡында ла хәстәрлек күрә ине. Өләсәйҙе (Ғәлимә әбейем) ихтирам итте, беҙгә килһә, матур итеп кейендерер ине».

Ғәзиз тыуған ауылда ете йәштән мал ҡарап, ата-әсәһенә бесән, ураҡ эштәрендә ярҙамлашып үҫә. Әммә уға ата йортонан бик иртә сығып китергә тура килә. 1909 йылда Ғәзиздең өлкән ағаһы Абдрахман, бәхет эҙләп, Ташкентҡа сығып китергә ҡарар итә. Ғәзиз унын менән бергә китмәксе була. Әсә кешегә нисек кенә ауыр булмаһын, ризалығын бирмәйенсә сара ҡалмай — ғаиләләге алты баланың тамағын нисек туйҙырмаҡ кәрәк. Шулай итеп, Ғәзиз ун дүрт кенә йәшлек үҫмер сағынан үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫа. Ғәзиз йәйҙәрен ағаһы менән ялланып йөҙөм баҡсаларында эшләй, ҡышҡы осорҙа мәҙрәсәлә уҡый. Әйткәндәй, Ташкентҡа барып йәшәй башлаған тәүге йылда уҡ ул йәштәр, йыр һөйөүсе яҡташтары араһында башҡорт йырҙарын бик моңло итеп башҡарыуы менән ныҡлы танылып өлгөрә. Был хаҡта Троицкиҙа сыҡҡан «Аҡмулла» журналының хәбәрсеһе М. Бөдәйле бик ҡыҙыҡлы хәтирәләр яҙып ҡалдыра. Ташкенттың бай бер сауҙагәре үҙенең баҡсаһында бер мәлде байрам ойоштора. Бына шунда ҡунаҡтарға самауыр ҡуйып, байға хеҙмәт итеп йөрөгән ун дүрт йәшлек ҡаҡса ғына башҡорт малайының үҙ алдына «Ҡуңыр буға» көйөнә йырлауын ишетеп, ғәжәпкә ҡала. Йырсыны осратып, ниндәй йырҙар йырлауы, ҡайҙа йырларға өйрәнеүе тураһында һорауҙар бирә. «Ҡунаҡтар дастарханға йыйылғас, мин Ғәзиздең йырлауын тыңларға тәҡдим иттем, – , ти М. Бөдәйле. — Ул беҙгә үҙенең халҡының йырҙары «Ҡолой кантон»ды, «Һаҡмар»ҙы, «Шәүрә»не йырлап күрһәтте. Унын һандуғас тауышындай моңло йыры һәр кемдең күңел түренә үтеп инде»[1].

Ун һигеҙ йәшенә тиклем Ғәзиз шулай йәйҙәрен эшләп, ҡыштарын уҡып, Ташкентта йәшәй. Йыр, әлбиттә, унын иң тоғро юлдашына әйләнә. Тыуған яғын, Башҡортостанды һағынған саҡтарында башҡорт йырҙары унын йәненә, йөрәгенә үҙе бер дауа була. Ғәзиздең тауышы ла үҙгәрә. «Малай саҡтағы яңғырауыҡлы альт көслө, сағыу һәм шул уҡ ваҡытта йомшаҡ тенорға әйләнә», — тип билдәләй музыка белгесе Л.П. Атанова. Бына ошо көслө, сағыу һәм тетрәндергес милли моң менән яңғыраған был илаһи тауыш артабан меңәрләгән кешеләрҙең күңелен яулай — Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың йыраусылыҡ сәнғәте ысын-ысынында оҙон көйлө башҡорт йырҙарын башҡарыуҙың эталонына әйләнә. Ташкентта ул «Шишмә» исемле татар-башҡорт йәштәр

клубы ойошторған концерттарҙа сығыш яһай. 1914 йылдан иһә 19 йәшлек йырсы егет үҙ аллы концерт эшмәкәрлеген башлай, Урта Азия ҡалаларында – шул уҡ Ташкентта, йәнә Бохарала, Сәмәрҡәндтә, Кокандта сығыш яһай, гастролдәр менән Башҡортостанға ҡайта, Татарстанға бара. Үзбәкстанда йәшәгән йылдарында үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡ моңдары менән таныша. Артабан ул, әлбиттә, рус музыкаһын, бөйөк рус йырсыларының башҡарыу оҫталығын да ихлас өйрәнәсәк, һәр ваҡыт үҙенең белемен камиллаштырыу, ижади фекерләүен киңәйтеү өҫтөндә эшләйәсәк. «Әммә, төрлө халыҡтарҙың йыр-моңон тыңлап, уларҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен үҙенә һеңдерә барып, Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙен иң элек башҡорт йырсыһы итеп тоя. Бәлки, үҫмер йәшенән йәненә тынғы бирмәгән тыуған ерҙе һағыныу хисе Ғәзиздә тыуған моңдарға ҡарата айырыуса мөхәббәт тойғоһо уятҡандыр... Уның талантын баһалаусылар йырсының вокаль оҫталығына — тын алышының киңлегенә, тауыш күркәмлегенә, фразировканың нескәлегенә таң ҡала. Ғәзизгә йыш ҡына, ҡайҙа уҡының, кемдән өйрәндең, тип һорау бирәләр. «Мин үҙ туған халҡымдан йырларға өйрәндем», — тип яуап биргән ул»[2].

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың биографияһында 1917-1918 йылдарҙа Шәйехзада Бабич менән бергә Өфөлә, Ырымбурҙа тамашалар ойоштороуы, башҡорт моңоноң һәм башҡорт шиғриәтенең был ике бөйөк эшмәкәренең ижади хеҙмәттәшлеге айырыуса әһәмиәт ҡаҙана. Дөрөҫ, Ш. Бабич менән Ғ. Әлмөхәмәтов бынан алдараҡ уҡ таныш булғандар, тип иҫәпләргә урын бар. Мәҫәлән, «Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр» китабында урынлаштырылған фотола бер төркөм милли интеллигенция вәкилдәре араһында алғы рәттә Ш. Бабич менән Ғ. Әлмөхәмәтовты күрәбеҙ. Әгәр ҙә датаһы дөрөҫ билдәләнгән булһа, фотоның аҫтындағы текст иғтибарҙы йәлеп итә. Унда: «1916 йылдың йәйендә Өфөлә»[3], — тип яҙылған. Ә бына шул уҡ йыйынтыҡта Сәйфи Ҡудаш үҙенең иҫтәлектәренән «Ике талант» тигән бүлексәһендә (китаптың 124-се бите) Ғ. Әлмөхәмәтовтың 1917 йылдың июлендә Өфөлә Ш. Бабич менән бергә үткәргән концерттары тураһында шаҡтай ентекле итеп яҙып ҡалдырған.

«Өфөгә ҡайтҡас, Бабич бик күп яҙҙы һәм кисәләрҙә бик күп сығыштар яһаны. Ошо бер-бер артлы үтеп торған концерттарҙың алҡыштары тынып та өлгөрмәгән ине әле. Ырымбурҙан йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов килеп төштө һәм концерт бирергә әҙерлек күрә башланы. Күп тә үтмәне, Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Бабичтың 25 июлдә концерты буласағын белдереп, Өфө урамдарында афишалар барлыҡҡа килде». С. Ҡудаштың атаҡлы шағир менән йырсының бергә сығыш яһаған ошо концерты хаҡындағы тәьҫораттары ла ғәйәт ҡыҙыҡлы. «Әгәр ҙә Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Бабич һәр ҡайһыны айырым-айырым ғына

кисә үткәрһә, минеңсә, улар, бына шулай бергәләшеп яһалған концерттарҙағы кеүек, ҙур уңышҡа өлгәшә алмаған булырҙар ине. Сөнки талантлы йырсы менән талантлы шағир икәүләшеп концерт биргән саҡта тыңлаусыларҙың түбәләре күккә тейә. Улар бер-береһен тулыландыра, бер-береһенә үҙенең матурлығын өҫтәй ине. Мәҫәлән, Ғәзиздең йырынан һуң сәхнәлә бер аҙ моң болоттары ҡуйырып ҡала. Шаян тәбиғәтле Бабич сәхнәгә кинәт килеп бәргән өйөрмә һымаҡ булып сыға ла үҙенең көлкөләре менән шул болоттарҙы бик тиҙ таратып ебәрә. Йәки ул бөтөнләй киреһенсә була. Бабич артыҡ ныҡ көлдөрөүҙән бер ни тиклем тарҡауланыбыраҡ, ғәмһеҙләнеберәк киткән күңелдәрҙе Ғәзиз, сығып, үҙенең моңһоу йырҙары менән һиҫкәндереп һәм нәфисләндереп ебәрә ине».

«Шул кисәнән һуң, — ти С. Ҡудаш, — Бабич, Ғәзиз Әлмөхәмәтов һәм «Ҡармаҡ» журналын сығарыусыларҙың береһе булған Дәминев Мәскәүгә киттеләр». Мәскәүҙә улар йәнә берлектәге концерт программаһы менән сығыш яһарға йыйынған булалар. Ошонан һуң Бабич, билдәле булыуынса, «Ҡармаҡ» журналы мөхәрриренең саҡырыуы буйынса Ырымбурға юллана.

1917 йылдың ҡышында, Октябрь революцияһынын һуңғы көндәрҙә, Ғәзиз Әлмөхәмәтов Ырымбурҙың данлыҡлы Башҡорт халыҡ йорто Каруанһарай бинаһында, һалдаттар йәшәгән казармаларҙа Исмәғил Һилалов тигән атаҡлы татар мандолинсы музыканты менән бергә концерттар бирә. 1918 йылда беҙ уны йәнә Бабич менән бергә Ырымбур сәхнәләрендә күрәбеҙ. «1918 йылдың йәйендә Ырымбурҙың ҡала театры бинаһында Ғәзиз концерт номерҙары менән сығыш яһай, — тип яҙа Л.П. Атанова. — Концертты Шәйехзада Бабич алып бара. Тыңлаусылар уларҙы башҡорт йырсыһы һәм шағирының оҫталығы һәм таланты менән һоҡланып, Бабичтың үткер һүҙенә һәм Ғәзиздең илһамлы йырына берҙәй үк таң ҡалып, оҙон кис буйы сәхнәнән төшөрмәйҙәр»[4].

Ә бынан саҡ ҡына алдараҡ, 1918 йылдың 17 февралендә Ырымбурҙа, Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы ойошторола һәм башта уның составына Ғ.С. Әлмөхәмәтов та индерелә. Әммә ул, сәйәси эшкә әҙерлеге етмәүгә һәм дәүерҙең ҡатмарлы хәлдәрен аңлап бөтмәүенә һылтанып, БВРС составынан сығарыуҙарын һорай. БВРС уның үтенесен ҡәнәғәтләндерә һәм, йырсыға стипендия тәғәйенләп, Ырымбур музыка училищеһында уҡырға направление бирә. Бынан һуң сәйәси ваҡиғаларҙың ҡырҡа боролоштары арҡаһында Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ул уҡыу йортонда, моғайын, уҡырға тура килмәгәндер. Ләкин был мәғлүмәттәр шул яғы менән әһәмиәтле: Ғәзиз Әлмөхәмәтов, күренеүенсә, 1917—1918 йылдарҙа йә күпселеген Ырымбурҙа йәшәгән, йә, Ташкенттан бөтөнләй үк күсеп ҡайтмаған булһа ла, күп ваҡытын Ырымбурҙа, асылда үҙенең тыуған яҡтарында үткәргән. (Йырсының был йылдарҙағы тормошон ентекләберәк өйрәнәһе, тормошондағы

күп кенә ваҡиғаларҙы асыҡлайһы бар әле.) Уның 1919—1920 йылдарҙа Исмәғил Һилалов менән бергә «Өфө тирәһендә концерттар ҡуйып уҙҙырыуы» тураһындағы мәғлүмәт тә бар.[5] Хәйер, был ваҡытта инде ул бөтөн Рәсәй күләмендә, барлыҡ төрки халыҡтары араһында киң танылған популяр йырсы булып етешә. Ошо уҡ осорҙа ул үҙе лә йырҙар ижад итә башлай. Башҡортостанда беренсе донъя һәм граждандар һуғышы килтергән ҡайғы һәм аһ-зарҙарҙы, аҡтарҙың һәм ҡыҙылдарҙың башҡорт халҡына ҡарата ҡылған рәхимһеҙлек һәм яуызлыҡтарын күреп, уның күңелендә ошо хаҡта йыр, моң теле менән һөйләп биреү теләге тыуа. Тиҙҙән шағирә С. Биксурина һүҙҙәренә «Шомло ел» исемле матәм йыры — тәрән трагизм тойғоһо менән һуғарылған баллада ижад итә. Был әҫәрҙе музыка белгестәре юғары баһалай, ул йырсының репертуарында ныҡлы урын ала.

1920 йылда Баҡылағы гастролдәре ваҡытында Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа әзербайжан театрында музыкаль спектаклдә ҡатнашырға тәҡдим итәләр. Музыка белгестәренең фекеренсә, ошо ваҡиға йырсының күңелендә үҙебеҙҙә милли опера тыуҙырыу хыялын тыуҙыра. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормош юлында артабан нәҡ шул идея иң мөһим, иң мөҡәддәс ижади маҡсатҡа әйләнә.

Ташкентҡа ҡайтыу менән ул, башҡорт һәм татар көйҙәренә нигеҙләнеп, «Сания» тигән операның либреттоһын һәм музыкаһын яҙыу эшенә тотона. Операның беренсе картинаһын хатта һәүәҫкәр артистар үҙешмәкәрлек сәхнәһендә уйнап та күрһәтәләр.[6] Әммә был башланғыс әлегә ысын мәғәнәһендә опера жанрынан бик йыраҡ тора. «Был төҙөк музыкаль әҫәр түгел, ә музыкаға ҡоролған пьеса»[7], — тиеүе менән Ю.Н. Иҫәнбәт хаҡлылыр, моғайын. Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ысын мәғәнәһендә опера һымаҡ ҡатмарлы жанрҙа эшләү өсөн белем дә, тәжрибә лә етмәй әле. Шуның өсөн дә 1922 йылдың башында бергәләп опера яҙыу тәҡдиме менән Солтан Ғәбәшигә мөрәжәғәт итә. Ошо уҡ йылда ул, Ташкенттағы дуҫтарының кәңәшен тотоп, бергәләп опера өҫтөндә эшләү хыялы менән, Ҡазанға күсеп килә. Бер йылдан һуң Солтан Ғәбәши уның инициативаһын тулыһынса хуплай һәм өсөнсөгә Василий Виноградов менән ижади хеҙмәттәшлек урынлаштырыу хаҡында тәҡдим индерә. 1923 йылдың икенсе яртыһында улар өсәүләп эшкә тотоналар[8]. 1924 йылдың яҙында Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Солтан Ғәбәши, эште дауам итер өсөн, Башҡортостандың ул саҡтағы Арғаяш кантоны (хәҙер Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Яңы Субыл ауылына ҡымыҙ дауаханаһына китәләр. Бында улар көндөҙ ижад итәләр, кистәрен ял итеүселәр менән аралашып үткәрәләр. Ауылда уларға башҡорт туйын күреп, башҡорт туй йолаһы менән яҡындан танышырға насип була. Яңы Субылда ике ай буйы эшләп һәм ял итеп, операның күпселек өлөшөн яҙып бөтөп ҡайталар[9].

«Сания» операһы 1925 йылдың июненә тамамлана, ул тәү башлап Татарстан АССР-ының 5 йыллыҡ юбиллейын байрам иткән көндәрҙә сәхнәгә сығарыла.

Шуны ла әйтергә кәрәк, татар матбуғаты һәм татар белгестәре «Сания» әҫәрен бер тауыштан фәҡәт татар операһы тип кенә атарға ғәҙәтләнгәндәр. Әммә «Сания» иң элек башҡорт ерлегенә, башҡорт донъяһына яҡын булыуын инҡар итеп буламы? Уның музыкаһы башҡорт йыр һәм көйҙәренә нигеҙләнгән, уны ижад итеү башланғысы башҡорт йырсыһының эшмәкәрлеге менән бәйле. Унда беҙҙең бөйөк йырсыбыҙҙың да йөрәк моңо һалынған. Опера спектаклендә премьерала төп партияны ла ул башҡарған. Шулай булғас, башҡорт операһының да башланғысы ошо әҫәргә барып тоташа тип иҫәпләү урынлы түгелме? Был хаҡта башҡорт музыка белгестәре үҙҙәренең фекерен әйтергә тейештәр.

«Сания» операһының уңышы менән ҡанатланып, Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши һәм В. Виноградов М. Ғафури либреттоһына «Эшсе» операһын яҙырға тотоналар. Опера 1930 йылда Мәскәүҙә милли театрҙар олимпиадаһында күрһәтелә һәм татар профессиональ музыкаһы үҫешендә ҙур ваҡиға булараҡ баһалана.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың Ҡазанда йәшәгән йылдары концерт-башҡарыу йәһәтенән дә емешле була. Был дәүерҙәге афишаларҙан, белдереүҙәрҙән, рецензияларҙан күренеүенсә[10], ул Ҡазанда күренекле татар йырсылары һәм музыканттары менән бергә сығыш яһай, элеккесә, Мәскәүҙә, Ташкентта, Ленинградта гастролдәрҙә йөрөй. Афишалар ғәҙәттә уның менән «Башҡорт халыҡ йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтов», «Атаҡлы башҡорт йырсыһы», «Башҡортостандың халыҡ йырсыһы», «Башҡортостандың рәсми халыҡ йырсыһы» тип таныштыра. 1927 йылдың ғинуар-февраль айҙарында Ғәзиз Әлмөхәмәтов һәм виртуоз мандолинсы Исмәғил Һилалов Өфө, Троицк, Ҡустанай, Свердловск (хәҙер Екатеринбург) ҡалаларына оҙайлы гастролгә сыға. Ыңғайҙа Арғаяшта туҡтап, бер генә концерт ҡуйып китәләр. Ғәзиз Әлмөхәмәтов репертуарында төп урынды боронғо башҡорт халыҡ йырҙары алып тора: «Урал», «Зөлхизә», «Таштуғай», «Буранбай», «Ялан Йәркәй», «Сибай кантон», «Ҡолой кантон», «Шәүрәкәй», «Арғужа», «Эскадрон», «Һаҡмар», «Һандуғас», «Ҡуңыр буға», «Миңлебикә», «Ирәндек», «Байыҡ» — башҡорт халҡының йыр-моң классикаһының был аҫыл өлгөләре Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡарыуында кемде генә әсир итмәгән! Ул шулай уҡ «Сания» операһынан Зыя арияһын, Хәбибулла Ғәбитовтың «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» драмаһына яҙылған йырҙарын, үҙе яҙған «Шомло ел», «Сайҡалалар кәмәләр», «Ағиҙел ярында», «Йырҙар яҙам», «Көтөүсе», Сәлих Сәйҙәшевтең «Монтерҙар йыры»н, Мәсәлим Вәлиевтең «Аҡ ҡайын»ын, Хәбибулла Ибраһимовтың «Салауат маршы»н,

аҙағыраҡ «Эшсе» операһынан Ниғмәт арияһын ҙур дәрт, илһам, оҫталыҡ менән башҡара.

Ҡазанда 1928, 1929 йылдарҙа В.И. Виноградов уның башҡарыуы буйынса «Байыҡ», «Зөлхизә», «Халҡым өсөн», «Шәүрәкәй», «Ҡаһым түрә», «Сибай кантон», «Ҡолой кантон», «Таштуғай», «Арғужа» исемле башҡорт халыҡ йырҙарын һәм ноталарын баҫтырып сығара.

1929 йылда, Башҡорт АССР-ының ун йыллыҡ юбилейына арнап, Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши һәм В. Виноградов «Башҡортостан маршы»н яҙалар. Марш тантаналы кисәлә тынлы оркестр тарафынан башҡарыла. Сәхнәлә тәүге тапҡыр оркестрҙа башҡорт музыкаһы яңғырай! Советтарҙың VII Бөтөн Башҡортостан съезы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа халыҡ артисы исемен бирергә һәм уның үҙен Башҡортостанға ҡайтарырға тигән ҡарар сығара. Ошо ваҡиғанан һуң бөйөк йырсы Өфөгә күсенеп ҡайта[11].

1929—1937 йылдар Ғәзиз Әлмөхәмәтов ижадының һәм эшмәкәрлегенең өр-яңы һәм айырыуса емешле осоронa әйләнә. Ул, әлбиттә, концерт эшмәкәрлеген дауам итә, алыҫ гастролдәрҙә йөрөп ҡайта. Башҡорт ауылдарында йыр-көйҙәребеҙҙе йыйыу, фольклор материалдарын туплау эше менән шөғөлләнә. Йәй һайын тыуған төйәгенә ҡайтып, туғандарын, яҡташтарын йыр-моңдары менән һөйөндөрөп китә. Алыҫ ауылдарҙа талантлы башҡорт йәштәрен табып, уҡырға урынлаштыра.

Ниһайәт, ул илдә беренсе булып 1932 йылда Мәскәү дәүләт консерваторияһында милли студия астырыуға өлгәшә. Башҡорт студияһында уҡып сыҡҡан йырсылар, композиторҙар — Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Рәйеф Ғәбитов һ.б. — профессиональ башҡорт сәнғәтенең төп көстәренә әйләнә. Ошо быуын йырсылары яуаплы һәм абруйлы бурыс атҡара. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына нигеҙ һала.

1933 йылда йырсының «Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәштә» тигән брошюраһы баҫылып сыға. Үҙ ғүмерендә уның бер нисә йөҙ башҡорт халыҡ йырын яҙып алғанлығы билдәле.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙенең репертуарын рус һәм Европа классик операларынан ариялар, итальян йырҙары иҫәбенә байытыуға ла бик ҙур тырышлыҡ һалған. Иғтибар итегеҙ: был арияларҙы ул, һүҙҙәрен үҙе тәржемә итеп, башҡорт телендә башҡарған. Шулар иҫәбендә – Ленский (П. Чайковскийҙың «Евгений Онегин» операһы), Дубровский ариялары (Э. Направниктың «Дубровский» операһы), герцог йыры (Дж. Вердиҙың «Риголетто» операһы), йәнә А. Бородиндың Алыҫтағы ил ярҙары» («Для берегов отчизны дальней») романсы һ.б. Үкенескә ҡаршы, был яҙмаларҙың береһе лә

һаҡланмаған булһа кәрәк. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтан һуң сит ил операларынан арияларҙы әлегә бер генә йырсының да беҙҙең үҙ телебеҙҙә йырларға кәрәклеге иҫенә лә инеп сыҡҡаны юҡ. Ғәзиз Әлмөхәмәтов нигеҙ таштарын һалышҡан милли опера һәм балет театрыбыҙ бар. Әммә унда ла сит ил классикаһын һис юғында һирәкләп кенә булһа ла башҡорт телендә ҡуйыу зарурлығын аңларға теләмәйҙәр. Ә бит быны беҙ бөйөк йырсыбыҙҙың мөҡәддәс бер аманаты итеп ҡарарға бурыслыбыҙ.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов биографияһында асыҡланып бөтмәгән бер мәсьәлә бар. Был уның юғары музыкаль уҡыу йортонда белем алыу-алмау мәсьәләһе. Ғәҙәттә уның хаҡындағы мәҡәләләрҙә был хаҡта йә бер һүҙ ҙә әйтелмәй, йә йырсыны үҙ алдына белем алған тип кенә әйтеп үтәләр. Әммә, тарих фәндәре кандидаты С.Б. Сәйфуллин яҙғанса, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың аҙмы-күпме ваҡыт эсендә Мәскәү дәүләт консерваторияһының талибы булғанлығын ситләтеп булһа ла раҫлай торған документ табылған[12]. «Аҙмы-күпме ваҡыт» тип әйтәм, сөнки ул ваҡытта инде бөтөн йәне-тәне менеән ижади эшмәкәрлеккә сумған киң таныулы йырсы һәм композиторҙың йылдар буйы консерватория бүлмәләрендә ултырырлыҡ форсаты ла, түҙемлеге лә, мөмкинлеге лә етмәгәндер, моғайын.

1937 йылғы золом, бик күп аҫыл заттарыбыҙ менән бергә, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың да ғүмерен ҡыйып үтте. Шул йылдың 12 декабрендә уны ҡулға алалар. Уға, һеҙ халыҡ йырҙарын йырлап, милли мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштерәһегеҙ, тип ғәйеп тағалар. Һорау алыу протоколында йырсыға: «Һеҙ үҙегеҙҙе ғәйепле һанайһығыҙмы?» — тигән һорау бирелгән. «Эйе, мин халыҡ йырҙарын — «Урал», «Сибай», «Буранбай»ҙы йырланым», — тип яуаплаған. Шуға өҫтәп, уның ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипованың һүҙҙәрен дә килтереп үтәйек: «Атайым ике тапҡыр Стәрлетамаҡта Зәки Вәлиди хөкүмәте алдында концерт биргән булған, шуны ғәйеп итеп, милләтсе мөһөрөн баҫҡандар».

Шағир Мөслим Маратҡа төрмәлә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һуңғы көндәрендә бергә ултырырға тура килә. Уның иҫтәлектәрен уҡып, бөйөк йырсыбыҙҙың бөйөк рухлы шәхес булғанлығына ла инанабыҙ. «Ул рәшәткә артындағы тотҡондар — тотош ил буйынса барған енәйәт ҡорбандары алдында йырланы. Һуңғы һулышына тиклем үҙенең ғәйрәтле ҡоралын — йырын ташламаны. «Урал»ды, «Буранбай»ҙы йырлағанда, аҙағынаса тамамлап ҡуйһын өсөн, башҡа тотҡондар надзирателдәрҙе тотҡарлап, уның эргәһенә ебәрмәй торҙо».

Уны һуңғы тапҡыр камеранан алып сығып киткәндә тотош камера йырлап оҙатып ҡала. Эйе, башҡорт йырын еңер көс донъяла юҡ һәм булмаҫ та!

1938 йылдың 10 июлендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов үлем язаһына хөкөм ителә һәм ул ҡарар шул уҡ көндө ғәмәлгә ашырыла. Ә ярты йыл үтеүгә, 14 декабрҙә,

Өфөлә ҙур тантана менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры асыла. Милли театрҙың тәүге спектаклендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов хәстәрлеге менән ойошторолған башҡорт студияһын тамамлап ҡайтҡан йырсылар сығыш яһай.

Уның исеме үҙе үк моңло йыр, яҡты йондоҙ булып, туған халҡының күңел түрендә йәшәй.

* * *

[1] Атанова Л.П. Жизнь как песня: Творческий портрет Газиза Альмухаметова. Уфа, 1973. 4-се бит.

[2] Атанова Л.П. Күрһәтелгән хеҙмәт. 7-се бит.

[3] Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр // Төҙ.: Р. Бикбаев. Өфө, 1994, 286-сы бит.

[4] Атанова Л.П. Күрһәтелгән хеҙмәт. 10-сы бит.

[5] Фәйзи Йәүҙәт. Виртуоз мандолинсы // Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1994. 284-се бит.

[6] Газиз Салихович Альмухаметов. К 100-летию со дня рождения. Буклет. Автор-составитель Э.М. Давыдова, Уфа, 1995.

[7] Газиз Альмухаметов и Султан Габаши в Казани. Уфа: «Каданс», 1995, 16-сы бит.

[8] Газиз Альмухаметов и Султан Габаши в Казани. 17-се бит.

[9] Шунда уҡ. 21—22-се биттәр.

[10] Газиз Альмухаметов и Султан Габаши в Казани. 162—170-се биттәр.

[11] Давыдова Э.М. Йыр булып ҡайтырмын // Башҡортостан. 1995, 25 октябрь.

[12] Сайфуллин С. Оборванная мелодия // Вечерняя Уфа. 1995, 9 ноябрь.

* * *

Әҙәбиәт: Атанова Л.П. Жизнь как песня: Творческий портрет Газиза Альмухаметова. Уфа, 1973; Альмухаметов Г.С. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Шәһит Хоҙайбирҙин
(1896—1924)



1917 йылдың октябрь көндәре Ер шарының алтынан бер өлөшөндә, донъяның аҫтын өҫкә түңкәреп, илгә-көнгә бығаса күрелмәгән ел-дауылдар, ғәрәсәттәр булып килеп инә. Ҡап уртаға, ҡара-ҡаршы торған ике яҡҡа, ике ярға бүленгән Рәсәйҙә тиҙҙән үлемесле алыш-тартыш — граждандар һуғышы башланып китә. Бер ил, бер үк милләт, хатта ҡайһы берҙә бер үк ғаилә кешеләре баррикаданың төрлө яғына баҫып, һәр ҡайһыһы үҙ дөрөҫлөгөн дөрөҫкә ҡуйып, бер-береһенең күкрәгенә мылтыҡ терәп, ҡанлы көрәшкә күтәрелә. Тарихтың был ғәрәсәте бер кемде лә, бер милләтте лә аямайынса, үҙенең ҡатлы-ҡатлы өйөрмәләре эсенә алып инеп китә. Башҡорттоң бер даһийы: «Беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел. Беҙ бары тик башҡорттар ғына», — тип милләттең тарихта үҙ мәнфәғәттәре булыуын, үҙ аллы дәүләтселек ҡороп йәшәргә ынтылышын яҡлап ҡарай ҙа бит, ҡайҙа ул! Илде ҡармап алған большевиктар власы ул һүҙҙәрҙе оҙаҡ ваҡытҡа онотторорға, онотторорға ғына түгел, ундай фекерҙәр өсөн ҡан ҡоҫтороп тәүбәгә килтерергә мәжбүр итә. Ә бит ниндәй генә власть килмәһен, барыбер халыҡҡа йәшәргә, үҙ яҙмышын хәстәрләргә, үҙенең хоҡуҡтары өсөн көрәшергә, үҙенең булмышын да, илен, ер-һыуҙарын, туған телен, рухи һәм милли бөтөнлөгөн һаҡлап алып ҡалырға кәрәк. Хәҙер бына, XXI быуат башында, шул хәҡиҡәт беҙҙең алдыбыҙға яңынан килеп баҫманымы ни юғиһә?!

Хәҙерге дәүерҙең тағы бер үҙенсәлеге шунда: бөгөнгө көн күҙлегенән беҙ үткәндәрҙе кисәге кеүек бер яҡлы ғына түгел, ә тәрәнерәк аңларға, төплөрәк һәм күп яҡлыраҡ фекер йөрөтөргә, ғәҙелерәк баһаларға өйрәнеп киләбеҙ, буғай. Шунан сығып, оло шәхестәребеҙҙең дә тарихта тотҡан урынын ҡылған эштәренә, илгә һәм миргә күрһәткән хәләл хеҙмәт өлөштәренә, хеҙмәт емештәренә ҡарап билдәләү зарурлығы килеп тыуа. Тарихыбыҙҙың 1917 йылдан башланған боролош дәүерҙәренә һәм шул замандың ҡаһарман

шәхестәренә баһа бирергә ынтылғанда ла беҙ инде хәҙер фәҡәт аҡ йәки ҡара төҫтәр, аҡтар һәм ҡыҙылдар, фәҡәт синфи көрәш позицияһынан ғына тороп эш итә алмайбыҙ. Башҡортостандың күренекле дәүләт эшмәкәре, граждандар һуғышы геройы, яҙыусы-публицист, башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Шәһит Хоҙайбирҙин тураһында яҙғанда ла беҙ ошо фекерҙәрҙе күҙ уңында тотабыҙ, әлбиттә.

Уға яҡты донъяла ни бары 28 йыл ғүмер итергә насип була. Әммә, әҙәбиәтебеҙҙә үҙ ваҡытында революция һәм граждандар һуғышының башҡорт ерендәге фажиғәләрен яҡтыртырлыҡ М. Шолохов йәки Л. Толстой һымаҡ әҙиптәребеҙ булһа, Ә. Вәлиди, М. Мортазин, Ш. Бабич һәм, әлбиттә, Ш. Хоҙайбирҙин һымаҡ бөйөк милли ҡаһармандарыбыҙ иҫтәлеге йән тетрәткес романдарҙа, эпостарҙа мәңгелеккә урын алыр ине. Сөнки Шәһит Хоҙайбирҙиндең уттар-һыуҙар аша үткән тормош юлы ысын роман геройҙарының тормошон һәм яҙмышын хәтерләтә.

Милләтебеҙҙең бик күп ҡаһарман шәхестәре кеүек үк, Шәһит батырҙың да ғүмер юлы төпкөлдәге киң, иркен тәбиғәт ҡосағындағы башҡорт ауылынан башлана. Элекке Өфө губернаһының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Бесәнсе ауылында 1896 йылдың 9 (22) октябрендә ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә Шәһит. Бесәнселә рус-башҡорт башланғыс мәктәбендә белем ала. Әммә, ун беренсе йәше менән барғанда етем ҡалып, уҡыуын туҡтатырға, ғүмер-ғүмергә ауыл байҙарына эшләп көн күргән олатаһы, атаһы һөнәрен дауам итеп, көтөүселеккә ялланырға тура килә. 13 йәшендә ул 150 саҡрым ерҙе йәйәүләп үтеп, Ырымбур ҡалаһындағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә барып урынлаша. Мәҙрәсә хужаһы Хөсәйеновта малайлыҡта йөрөп, йәйҙәрен алпауыт хужалыҡтарында батраклыҡҡа яллыанып, үҙ көнөн үҙе күреп йәшәй. Уҡыуға тырышлығы, зирәклеге менән айырылып тора. Әммә, бындағы ҡаты режимға ризалашмайынса, «Беҙ» тигән сатирик ҡулъяҙма гәзит ойоштороп, уҡытыу-тәрбиә эштәрен тәнҡитләп яҙғаны өсөн уны 1914 йылда мәҙрәсәнән ҡыуып сығаралар. Шәһиткә бер аҙ ваҡыт постоялый дворҙа урам һепереүсе булып эшләргә тура килә.

Тиҙҙән беренсе донъя һуғышы башланып китә. Шәһит армия сафына алына һәм, шул уҡ Ырымбур ҡалаһында ойошторолған ҡыҫҡа ваҡытлы фельдшерҙар курсын тамамлап, рота фельдшеры вазифаһында фронтҡа оҙатыла. Ике йылға яҡын империалистик һуғышта ҡатнашып, фронттың алғы һыҙығында ысын-ысынында һалдат сынығыуын үтә. Ш. Хоҙайбирҙиндең был дәүерҙәге яҙмышы күп йәһәттән Дауыт Юлтыйҙың үҙенең һәм уның атаҡлы «Ҡан» романы геройҙарының башынан үткәндәрен хәтерләтә. 1916 йылда Австрия фронтында Санок тигән ҡала эргәһендәге һуғышта яраланып, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле

Өфө госпиталенә ебәрелә. 1917 йылдың Февраль революцияһы көндәрендә ул инде яңынан сафта — 144-се полктың 1-се ротаһы һалдаты. Ошо ваҡыттан революцион көрәш ваҡиғалары, дәһшәтле бер өйөрмә һымаҡ, Шәһит һалдатты ла үҙ эсенә алып инеп китә. Империалистик һуғыш, ҡанлы бәрелештәр, йылдар буйы һуҙылған окоп тормошо аша үткән һалдат массалары, тарихтан белеүебеҙсә, Советтар яҡлы була. Ярлы крәҫтиән балаһы Шәһит Хоҙайбирҙин ысын эске инанғанлыҡ, киләсәк хаҡында яҡты өмөт һәм ышаныстар менән илдәге нәҡ ошо Совет власы өсөн көрәш платформаһын яҡлаусылар сафына баҫа. Шуның менән ул да, әлбиттә, үҙ халҡына, үҙенең асыл ватанына ысын ирек, бәхетле тормош яулап булыр тигән хыял менән йәшәй. Бына бит ул донъяның икегә бүленгәнлеге, йәғни синфи көрәш ғәләмәте нимәгә килтерә: ошо уҡ Февраль революцияһы башланған көндәрҙе буласаҡ милли хәрәкәт лидеры Әхмәтзәки Вәлиди Петербургта үҙ туған халҡына ниндәй изге теләктәр менән ҡаршы алһа, баштан уҡ Советтар яҡлы Шәһит Хоҙайбирҙин дә оло тарихи ваҡиғалар аренаһына, социалистик революционер булыу менән бергә, үҙ милләтенең ҡаһарман бер вәкиле булып сыға. «Һуғыштың әсеһен-сөсөһөн үҙ елкәһендә татыған егет Февралдән Октябргә тиклем үҙе бер ғүмергә торошло оло юл үтә»,[1] — тиеүе менән Ризуан Хажиев бик тә хаҡлы, әлбиттә. Үкенескә күрә, Ш. Хоҙайбирҙиндең ике революция араһындағы был ауыр һәм болғауыр дәүерҙәге сәйәси эшмәкәрлеге лә, Октябрҙән һуңғы тормошо ла яңыса күҙлектән һәм мөмкин тиклем тулыраҡ өйрәнелгән тип әйтеп булмай әле. Нимәһе хаҡ һәм нимәһе хата — быны әйтер өсөн үҙеңде шул утлы өйөрмәләр эсенә ҡуйып ҡарамайынса мөмкин дә түгел.

Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: һине үҙ ағымына алып кереп киткән сәйәсәт тә, хатта тотош дәүләт ҡоролошо ла ниндәй генә булыуына ҡарамаҫтан, намыҫ тигән айырыуса һиҙгер үлсәм бар был донъяла. Ул йәһәттән Шәһит ағайыбыҙҙың биографияһы намыҫына тап төшөрөрлөк булмағандыр, моғайын. Уның инаныуҙары һәм донъяға ҡарашы күҙлегенән, әлбиттә. Саҡ ҡына алғараҡ күҙ ташлап, шуны бигерәк тә һыҙыҡ өҫтөнә алып үткем килә: Ш. Хоҙайбирҙиндең 1920 йылдың июлендә Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хөкүмәте Башҡортостанды ташлап киткәндән һуңғы бер нисә йыл буйы дауам иткән сәйәси, ижтимағи һәм дәүләт эшмәкәрлеге, минеңсә, ысын батырлыҡ өлгөһө булараҡ айырыуса юғары баһаға лайыҡ. Сөнки нәҡ ошо осорҙа башҡорт халҡы бөтөнләй тип әйтерлек яҡлаусыһыҙ тороп ҡала, республикала, йәнәһе, вәлидовсылыҡҡа ҡаршы көрәш тигән булып, рус һәм татар шовинизмы асылда башҡорт халҡын бөтмәҫ-төкәнмәҫ йәберләү, ҡыйырһытыу юлына баҫа. Илдә аҙсылыҡта ҡалған башҡорт эшмәкәрҙәренән күпме аҡыл һәм ихтыяр көсө, күпме тырышлыҡ һәм активлыҡ талап итеә ул

осорҙа! Өҫтәүенә Үҙәк Совет властының республикабыҙ 1917—1919 йылдарҙа, автономия яулаған осорҙа өлгәшкән хоҡуҡтарҙы ҡыҫыуына ҡулдан килгәнсә генә булһа ла ҡаршы торорға кәрәк.

Февралдән Октябргә тиклемге күсөргәнешле осор иһә Шәһит батырҙың революция һалдаты булараҡ өлгөрөү дәүерен билдәләй. Ул Өфө гарнизонындағы башҡорт һәм татар һалдаттары, ҡалалағы эшселәр, интеллигенция араһында ялҡынлы оратор булараҡ та, матбуғатта баҫылып торған мәҡәләләре менән дә тиҙ арала танылыу таба. 1917 йылдың майында ойошторолған Өфө Мосолман хәрби советының, уның башҡарма комитетының һәм президиумының ағзаһы итеп һайлана, хәрби частарҙа империалистик һуғышты туҡтатыу, власты эшсе, һалдат һәм крәҫтиән депутаттары Советына биреү өсөн агитация алып бара. 1917 йылдың 29 октябрендә Мосолман хәрби советы ултырышы Советтарҙың II Бөтөн Рәсәй съезының Рәсәйҙә властың Советтарға күсеүе тураһындағы белдереүен ҡотлап, ҡарар ҡабул итә. Был ултырышта Шәһит Хоҙайбирҙин рәйеслек итә. 30 ноябрҙә иһә ул эшсе, һалдат һәм крәҫтиән депутаттары Советының III Өфө губерна съезында делегат булып ҡатнаша. Ш. Хоҙайбирҙин Советтарҙың губерна Башҡарма комитетының ағзаһы итеп һайлана. 13 декабрҙә губерна революцион комитеты тарафынан ойошторолған революцион трибунал ағзаһы итеп тәғәйенләнә. Шул уҡ ваҡытта уға Өфө губерна ревкомы эргәһендә ойошторолған башҡорт эштәрен башҡарыу комиссариаты рәйесенең урынбаҫары вазифаһы йөкмәтелә. 1918 йылдың башынан ул — Өфө губернаһының милли эштәр буйынса комиссар урынбаҫары. Уның иңенә хәҙер инде һалдаттар араһында эш алып барыу ғына түгел, бөтөн губерна күләмендә яңы власты нығытыу өсөн үтә яуаплы эштәрҙе атҡарыу, халыҡ массаларын ойоштороу, көн һайын, сәғәт һайын тыуып торған ҡатмарлы проблемаларҙы хәл итеү бурысы төшә. Ошо осорҙа ул, сәйәси һәм дәүләт эшмәкәрлеге менән бергә, ҡулына тағы ла бер үтемле ҡорал — публицист ҡәләмен ала һәм матбуғатта, халыҡҡа төбәп, үҙе ҡатнашҡан һәр мөһим ваҡиға, илдә барған оло үҙгәрештәр айҡанлы мәҡәләләр менән сығыш яһай башлай. 1917 йыл аҙағында уҡ әле уның Ғәлимйән Ибраһимов редакторлаған «Беҙҙең юл» («Безнең юл») гәзитендә «Башҡортостан» тигән пафослы публицистик шиғыры баҫылып сыға. Артабан ул ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем, ниндәй генә шарттарҙа йәшәргә һәм эшләргә тура килеүенә ҡарамаҫтан, ҡулынан ҡәләмен төшөрмәй. Көн ҡаҙағына һуҡҡан актуаль мәҡәләләр яҙа, үҙ халҡына Совет властының сәйәсәтен төшөндөрә, иҫтәлектәр, һирәкләп очерктар ижад итә. Ш. Хоҙайбирҙиндең публицистикаһы Башҡортостандың 20-се йылдар башы ижтимағи тормошонда айырыуса ҡиммәтле һәм мөһим бер күренеш булараҡ баһаланырға хаҡлы. Был ижадтың

беҙҙең хәҙерге дәүер өсөн дә әһәмиәтле һыҙаттары тураһында һүҙҙе аҙағыраҡҡа ҡалдырып, яңынан Шәһит батырҙың тормош юлына әйләнеп ҡайтайыҡ.

Шәһит Хоҙайбирҙинден 1917 йылдың октябренән һуңғы тормошонда, дөйөмләштереп ҡарағанда, төп ике осорҙо билдәләп күрһәтергә мөмкин. Беренсенән, 1917 йыл аҙағынан 1919 йылдың аҙағына тиклемге ваҡыт эсендә уның башынан үткәндәрҙе, ул башҡарған яуаплы эштәрҙе бәйнә-бәйнә теҙеп сығыу ғына ла уттар-һыуҙар аша ҡаһарман һынын күҙ алдына баҫтыра. Шул уҡ ваҡытта Шәһит батыр илдә барған ваҡиғаларҙа хәҙер инде беҙҙең милли ғорурлығыбыҙға әйләнгән башҡорт азатлыҡ хәрәкәтендә түгел, ә бәлки баштан-аяҡ фронттың бирге яғында, Советтар платформаһында, эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армия сафында тороп ҡатнаша. Нисәлер ай буйы һул эсерҙар партияһында торғандан һуң 1918 йылдың 7 мартында ул РКП(б) ағзаһы итеп алына. Шул уҡ йылдың 9 июнендә Ш. Хоҙайбирҙин Өфө губревкомының мосолман бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Уға аҡ чехтарға ҡаршы көрәшеү өсөн башҡорттарҙан һәм татарҙарҙан революцион отряд төҙөү бурысы йөкмәтелә. Һанаулы ғына көндәр эсендә ул 200 кешенән торған отряд төҙөп, 5 июлдә ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән бергә Өфөнө ҡалдырып китә. Ошо отряд менән командалыҡ итеп, Бөгөлмә янындағы һуғыштарҙа ҡатнаша. Чехтарҙың һөжүменән сигенеп барып, Шишмә (Сишмә) пристане аша Сарапулға, унан Пермгә барып етеп, регуляр Ҡыҙыл Армия сафына ҡушылалар. Отрядтың командирына иһә, яраланып, ҡалалағы госпиталгә ятырға тура килә. Бынан уңы дауаланыу өсөн Мәскәүгә оҙаталар. Яраһы уңала биреп, аяҡҡа баҫыу менән Шәһит Хоҙайбирҙинде Мәскәүҙә Үҙәк мосолман комиссариатының комиссия ағзаһы, башҡорт бүлеге мөдире итеп ҡуялар. Әммә тиҙҙән беҙ уны тағы граждандар һуғышы ваҡиғаларының алғы һыҙығында күрәбеҙ. Ул Көнсығыш фронттың 5-се армияһы политбүлегенең мосолман бүлексәһе әҙәбиәт-нәшриәт секцияһы етәксеһе, «Ҡыҙыл яу» гәзите хеҙмәткәре вазифаларын башҡара. 1918 йылдың декабренән – Өфө губернаһының Минзәлә ҡалаһында өйәҙ хәрби комиссары урынбаҫары, комиссариаттың тәьминәт бүлеге мөдире. 1919 йылдың февралендә Башҡортостан һәм башҡорт халҡының яҙмышында һынылышлы тарихи ваҡиға булып үтә — Башҡорт хөкүмәте һәм башҡорт ғәскәрҙәре, Үҙәк Совет власы менән килешеү нигеҙендә, ҡыҙылдар яғына сыға. Был ваҡытта Ш. Хоҙайбирҙинде Өфөгә саҡыртып алалар. Апрелдә инде ул — Башҡортостандың көньяғында хәрәкәт итеүсе башҡорт ғәскәрҙәре составында 1-се башҡорт кавалерия дивизионының, артабан — 2-се башҡорт кавалерия полкының комиссары. 2 июндә Ш. Хоҙайбирҙингә, нығытылған Стәрлетамаҡ Революцион хәрби ағзаһы булараҡ, үтә яуаплы вазифа йөкмәтелә. Ул Өфө губернаһында хәрби көстәрҙе ойоштороу буйынса халыҡ араһында сәйәси өгөт-нәсихәт

эштәрен башҡара. Тиҙҙән, 9 июлдә, ҡыҙыл ғәскәрҙәр Өфөнө алыу менән, Ш. Хоҙайбирҙин Ваҡытлы Өфө губревкомы ағзаһы һәм уның мосолман бүлеге мөдире итеп билдәләнә. Ең һыҙғанып, губернала Совет органдарын тергеҙеү эшендә ҡатнаша. Өфөнө алыу менән, бер-бер артлы «25-се дивизияның сәйәси шөғбәһе Хәбәрҙәре» һәм «Ҡыҙыл юл» исемле гәзиттәр сығарыуҙы ойоштора. Бер үк ваҡытта ул — 25-се дивизияның сәйәси бүлеге эргәһендә Башревком вәкиле. Шул сәбәпле уға, 25-се дивизия һәм 5-се армия менән бергә, башта полк, унан дивизия политкомиссары вазифаһында, Колчакты эҙәрлекләп, алыҫ Петропавловскиға тиклем барып етергә тура килә. Бер аҙ ваҡыт дивизия командиры булып тора. 1919 йылдың декабрендә, Башревкомдың юллауы буйынса, ул саҡтағы Бәләкәй Башҡортостанға ҡайтарыла. Нәҡ ошо ваҡыттан уның тормошонда Башҡортостан, Башҡорт АССР-ы тарихында онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырған, күп михнәттәр күреп, республикабыҙ мәнфәғәтендә оло хеҙмәттәр күрһәткән яңы бер осор башлана.

Башҡортостанға ҡайтыу менән, 1919 йылдың декабрендә, уны Бөрйән-Түңгәүер кантонына яуаплы эштәргә ебәрәләр. Бында уға бер юлы кантон башҡарма комитеты рәйесе, РКП(б)-ның кантон комитеты сәркәтибе, кантондың аҙыҡ комиссары вазифалары йөкмәтелә. 1920 йылдың июль башында Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә, Үҙәккә протест белдереп, Башҡорт хөкүмәте ағзаларының Башҡортостандан китеүе республикала бик күп ығы-зығылар тыуҙыра, башҡорттарға ҡарата репрессив саралар ҡулланыу көсәйгәндән-көсәйә. Нәҡ бына ошондай шарттарҙа, 1920 йылдың йәйендә, кантон үҙәге Темәскә Стәрлетамаҡтан РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты исеменән, йәнәһе, «партиялы иптәштәрҙе тикшереү өсөн» тигән булып, ҡораллы отряд менән Поленов тигән бер рус барып төшә. Был әҙәм унда тәүге көндән үк үҙен законлы власть органдарынан өҫтөн ҡуйып, хатта кантон башҡарма комитетына бойороҡтар бирә башлай. Уға тиклем килеп, Ҡапҡаев тигән шундай уҡ бер вәкил тарафынан ҡулға алынған башҡорт эшмәкәрҙәрен үҙ белдеге менән Баймаҡҡа оҙата. «Был эштәрҙең тейешһеҙлеген белеп, — тип хәтерләй һуңынан Ш. Хоҙайбирҙин, – беҙ Поленов мәсьәләһен кантисполкомда ҡарайбыҙ. Күп фекер алышҡандан һуң минең тарафтан: Поленовтың яңылыш хәрәкәттәрен хәҙер үк туҡтатырға ҡаты саралар күрергә, ҡаршы килһә, ҡулға алырға, тигән тәҡдим индерелә».[2] Президиумда, үкенескә ҡаршы, был тәҡдим ҡабул ителмәй. Шуның менән Поленовтың баш-баштаҡлығы үҙ ваҡытында туҡтатылмай. Ә ул әҙәм аҡтығына, әйтерһең, шул ғына кәрәк. Поленов, йәнәһе, баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәш һылтауы менән, асылда ҡоралһыҙ халыҡты бер ниндәй хөкөмһөҙ язалай, ҡанға батыра, башҡорт ауылдарын талау, туҙҙырыу, ир-атты атыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләү хат-тин аша. Урал аръяғында,

сыҙар әмәл ҡалмағас, баш күтәреүселәр хәрәкәте йәйелеп китә. Ш. Хоҙайбирҙин әйтеүенсә, «был башланған хәрәкәт октябрь, ноябрь айҙарына тиклем тасуир итә алмаҫлыҡ ныҡ көсәйә».

Шуны ла әйтергә кәрәк: августың ундарында «Һуңғы съезд тарафынан БашЦИК председателенең урынбаҫары итеп һайланған Ф.С. Мансыров иптәш» Темәскә, Баймаҡҡа барып, «тикшереү» үткәреп китә. Уға, әлбиттә, кантисполком етәкселәре Поленовтың вәхшилектәре тураһында һөйләп, сара күреүен һорап мөрәжәғәт итә. Аҙаҡ ул әҙәмдең иһә (БашЦИК рәйесенең урынбаҫары!), сара күреү урынына, Поленовтың эштәрен хуплап киткәнлеге беленә. Етмәһә, «съезд тарафынан һайланып ҡуйылған кантон башҡарма комитетын таратып ебәреп, уның урынына яңы состав билдәләп ҡуйып китте»[3]. Ш. Хоҙайбирҙиндең баш күтәреүселәр хаҡында ошондай тасуирламаһына иғтибар итәйек: «Барыһы ла атлы, ҡоралды. Ҡорал, әлбиттә бөтөнөһөндә лә мылтыҡ түгел, бәлки күбеһе тимер башлы таяҡ, балта, лом, суҡмар кеүек нәмәләр менән ун биш йәшлек малайҙан башлап ап-аҡ һаҡаллы ҡарттарға тиклем булған һыбай кешеләр һөжүм итәләр». Ә бит ун биш йәшлек малайҙарҙан алып аҡ һаҡаллы ҡарттарға тиклем күтәрелеп сығырлыҡ булғас, халыҡта түҙемлектең ниндәй сиккә еткәнлеген аңлау ҡыйын түгелдер, моғайын.

Ә хәҙер, ошо фажиғәне күреп тә, белеп тә, законлы кантон башҡарма комитеты һәм уның рәйесенең ниндәй хәлдә ҡалыуын күҙ алдына килтереү өсөн йәнә Шәһит Хоҙайбирҙиндең иҫтәлектәренә мөрәжәғәт итәйек.

«Беҙ Мансыров иптәштең приказы буйынса кескәй кеше булып ҡалғас, — тип яҙа ул, — беҙҙең менән хисаплашыу түгел, үҙебеҙҙе «зәкиселәр» тип, Баймаҡтан бер ҡайҙа ла сығармайынса, ҡарау-күҙәтеү аҫтында ғына йөрөй торған итеп, Поленов отрядында рядовой һалдат яһап, ҡулға мылтыҡ тоттороп, көҙгө ҡараңғы ямғырҙа төндәр буйы күпер һаҡлап тора торған булып ҡалдыҡ. Бөрйәндә булған был ваҡиғаларҙы яҙыр өсөн беҙҙең тупаҫ ҡәләм, әлбиттә, етмәй. Быны яҙыр өсөн художниктар, шағирҙар кәрәк».

Шәһит ағайҙы аңларға мөмкин. Ул күргәнде, ул кисергәнде әле хәҙер ҙә яҙып та, тасуирлап та бөтөп булмай торғандыр. Ш. Хоҙайбирҙиндең кантондағы хәлдәрҙе аңлатыр өсөн мәркәзгә барырға тырышлығы ла барып сыҡмай. Унда хәбәр барып еткәнсе нисәмә ай ваҡыт үтә, күпме ҡан ҡойола, ғәйепһеҙгә күпме кешеләрҙең аҫыл ғүмерҙәре өҙөлә. «Һуңынан, мәркәз хәлдең асылын белгәс, Стәрленән комиссия килеп төшә. Комиссия ағзалары араһында Мәркәз Башҡарма комитеты ағзаһы Мостовенко иптәш тә бар ине. Комиссия, бындағы хәрәкәт менән танышып, һуғыш хәрәкәттәрен ташлап, килешеү юлын тәҡдим итте. Баш күтәреүселәр ҙә, быға риза булып, бер нисә пункттан торған договор яҙышып, һәр ике яҡтан ҡул ҡуйышып, килешеү булды... Һуғыш туҡталды».

Шулай итеп, кантонда аҙмы-күпме тыныслыҡ урынлаштырыла. Поленовтың яуызлыҡтарына, һуңлап булһа ла, сик ҡуйыла һәм тейешле яза ла бирелә. Кантон башҡарма комитеты, Баймаҡтан яңынан Темәскә күсерелеп, үҙенең эшмәкәрлеген дауам итә. Әммә көсөргәнешлек бының менән генә бөтмәй әле. Бер сетерекле мәсьәлә хәл ителеүгә, икенсеһе килеп тыуа: Ҡананикольскиҙа, Юлыҡта, Маяҡлыла рустар аҙыҡ развёрсткаһына ҡаршы баш күтәрәләр. Башҡорттарҙан Хажиәхмәт Унасов шул хәрәкәткә ҡушылып китә. Кантон башлығына тағы ла башын ут эсенә тигәндәй илтеп тыҡмайынса сара ҡалмай. Шәһит Хоҙайбирҙин, һөйләшеп, килешеү юлын табыу өсөн, баш күтәреүсе Унасовтың штабына уҡ барып керә. Уның был ваҡиғалар эсендә ҡатнашыуын төрлөсә баһаларға була торғандыр. Әммә уның үҙ-үҙен аямайынса, былай ҙа күп бәлә-ҡазалар күргән халыҡты нисек тә мөмкин тиклем аҙыраҡ юғалтыуҙар менән тынысландырырға тырышыуы барыбер ҙур батырлыҡ. Сөнки белеп тора: баш күтәреү туҡталмаһа, совет режимы рәхимһеҙ, илде тағы ла ҡанға батырыуҙан тартынып тормаясаҡтар.

1921 йылдың мартында Шәһит Хоҙайбирҙин Советтарҙың беренсе Бөтөн Башҡортостан съезында һәм РКП(б)-ның беренсе Бөтөн Башҡортостан конференцияһында ҡатнаша. Уны БашЦИК Президиумы һәм РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ағзаһы итеп һайлайҙар. 1921 йылдың мартында РКП(б)-ның X съезы Кронштадтта Совет власына ҡаршы баш күтәреүселәрҙе баҫтырырға 300 делегаттан отряд ойоштора. Бәләкәй Башҡортостан делегаттары араһынан өс кеше – Н. Алиев, С. Тизанов һәм Ш. Хоҙайбирҙин съезд залынан туп-тура Кронштадтҡа йүнәлә. Ҡәлғәләге форттарҙы штурмлағанда ҡаты яраланып, контузия алып, оҙаҡ ҡына боҙ өҫтөндә ятҡандан һуң Петроградтағы ҙур бер лазаретҡа оҙатыла. Башҡортостанға ул апрель аҙаҡтарында, күкрәгенә Ҡыҙыл Байраҡ ордены тағып, ҡайтып төшә. Шул уҡ көндәрҙә уны Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе итеп һайлап ҡуялар. Әммә, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, бер аҙҙан рәйес урынбаҫары булып күсергә тура килә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт (1921 йылдың 9 декабренән 1922 йылдың апреленә тиклем) ул республикала иң юғары партия етәксеһе — РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының яуаплы сәркәтибе була. 1922 йылдың сентябренән Ш. Хоҙайбирҙин — республиканың ер эштәре халыҡ комиссары урынбаҫары, 1923 йылдың августынан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем ул — Башҡорт АССР-ының эске эштәр халыҡ комиссары.

Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре буларак Шәһит Хоҙайбирҙиндең Башҡортостанда һәм РСФСР-ҙа, СССР-ҙа абруйы бик ҙур була. Ул РКП(б)-ның Бөтөн Рәсәй конференцияһы, Советтарҙың IX Бөтөн Рәсәй, Бөтөн Союз съездары делегаты була, 1924 йылда СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты ағзаһы,

СССР Үҙәк Башҡарма Комитетының Милләттәр Советы ағзаһы итеп һайлана, Шәһит Әхмәт улы 1922 йылдан башлап Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының Административ комиссия рәйесе булараҡ бик ҙур һәм мөһим эштәр башҡара. Ул Оло Башҡортостандың сиктәрен һаҡлап, Башҡортостан ерҙәренә күрше өлкәләрҙең нигеҙһеҙ дәғүәләренә ҡаршы һәр ваҡыт принципиаль позицияла тора. Уның был мәсьәләләргә ҡараштары «Оло Башҡортостан һәм уны кантондарға бүлеү», «Оло Башҡортостанды йәнә кантондарға бүлеү мәсьәләһе», «Башҡортостан һыҙыҡтары тураһында» тигән мәҡәләләрендә ап-асыҡ әйтеп бирелгән. Ул мәҡәләләр беҙҙең хәҙерге заман өсөн дә әһәмиәтен юғалтмаған.

Шәһит Хоҙайбирҙин беҙҙең тарихыбыҙҙа тағы бер мөһим мәсьәлә — башҡорт теленә дәүләт теле статусын яулап алыуҙа шундай уҡ принципиаль позициянан тороп эш иткән ҡыйыу фекерле һәм оло йөрәкле дәүләт эшмәкәрҙәребеҙҙең береһе. Уның Башҡорт телен ғәмәлгә ҡуйыу комиссияһы рәйесе булараҡ башҡарған эштәре лә телебеҙҙең һәм милләтебеҙҙең үҫешенә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Ысын-ысынында оло дәүләт һәм йәмәғәт эштәре менән мәшғүл булыуына ҡарамаҫтан, Ш. Хоҙайбирҙиндең башҡорт милли әҙәби теленең грамматик нормаларына ҡарата хәҙер ҙә иғтибарҙы йәлеп итерлек «Нисек яҙырға?» тигән проблемалы мәҡәлә менән сығыш яһауы уның, әлбиттә, киң ҡарашлығынан һәм мәғлүмәтлелегенән килә.

Шәһит Әхмәт улы Хоҙайбирҙин 1924 йылдың 21 декабрендә Мәскәүҙә ауыр операциянан һуң вафат була. Мәрхүмде республикабыҙ хөкүмәтенең хәстәрлеге менән Өфөгә алып ҡайтып, хөрмәтләп һуңғы юлға оҙаталар.

* * *

[1] Хажиев Р. Шәһит Хоҙайбирҙин — большевик // Ватандаш. 1996, №3, 193-сө бит.

[2] Хоҙайбирҙин Ш. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, 1956. 119-сы бит.

[3] Шунда уҡ. 122-се бит.

* * *

Әҫәрҙәр: Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, 1958. / Р.У. Ҡузыевтың баш һүҙе менән; На ветрах революции: Публицистика. Воспоминания. Художественные произведения. Уфа, 1986. / Вступ. статья Марселя Гафурова.

Әҙәбиәт: Ҡузыев Р.У. Шәһит Хоҙайбирҙин. Өфө, 1961; Хажиев Р. Шәһит Хоҙайбирҙин — большевик // Ватандаш. 1996, № 3; Шагит Худайбердин: 100 лет

со дня рождения: Буклет. Уфа, 1996; Худайбердин Шагит Ахметович // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Миңлеғәле Шайморатов
(1899—1943)



Башҡортостандың халыҡ геройы, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы, атаҡлы 112-се (һуңынан 16-сы Чернигов гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор Миңлеғәле Минһаж (Минһажетдин) улы Шайморатовтың исеме республикабыҙ тарихында айырыуса ҡәҙерле урындарҙың береһен алып тора. 1999 йылда Башҡортостан халҡы үҙенең данлы улының тыуыуына 100 йыл тулыу көнөн билдәләп үтте.

М.М. Шайморатов 1899 йылдың 15 (27) августа элекке Өфө губернаһының Өфө өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ҡырмыҫҡалы районы) Биштәкә ауылында батрак ғаиләһендә бишенсе бала булып донъяға килгән. (Был ауыл хәҙер Шайморатов ауылы тип атала.) Шайморатовтар нәҫеле Биштәкәгә 1764 йылда Исәт провинцияһынан, Урал заводтарындағы ҙур бола баҫтырылғандан һуң күсеп килгән, сығыштары менән әйле башҡорттарынан. Был хаҡта Миңлеғәле үҫмер сағында атаһынан һорашып белгән була, ә һуңынан ул үҙе ата-бабаларының телдән килгән тарихын архив материалдарын эҙләп табып дөрөҫләй. «Граждандар һуғышы тамамланғас, Мәскәүҙә академияла уҡығанда, архивтан атайым һүҙҙәрен дөрөҫләүсе документты табып алдым. Боронғо атай-олатайҙар иҫке Исәт провинцияһының ҡайһы тирәһендәрәк йәшәгәндәрен белгем килгәйне минең», — тип һөйләп ҡалдырған боевой генерал дивизияның политбүлек начальнигы урынбаҫары С.Р. Ҡадировҡа[1].

Миңлеғәленең тыуған ауылында 1907 йылда дүрт синыфлы беренсе баҫҡыс земство мәктәбе асыла. Ул ошо мәктәптә өсөнсө синыфҡа тиклем белем ала, русса уҡырға, яҙырға өйрәнә. Әммә уҡыуын ташлап китергә тура килә. Был ваҡытта, ҡыш миҙгелендә, Миңлеғәленең атаһы Минһаж ағай, оло ағаһы Әхмәтгәрәй үҙ ауылдарына егерме саҡрымдар тирәһендәге Булгаков утарында тирмәнсе байға ялланып, ылауҙа йөрөй. Ул да, ололарҙың ҡул араһына кереп,

ылаусылыҡ эшенә тотоноп китә. 15—16 йәштәрҙә инде ул мыҡты кәүҙәле, көслө, аҡыллы егет булып үҫеп етә, тирмәндә йөк тейәүсе булып эшкә төшә. Уның хаҡында, дүртәр ботло тоҡтарҙы туп урынына осороп уйната торғайны, тип хәтерләй замандаштары. Был йылдарҙа Миңлеғәленең әсәһе лә, атаһы ла үлгән була. Ул ауылға туғандары янына ҡайтып йөрөй, хужалыҡ эштәрендә ярҙамлаша. Ауылдаштарын ул айырыуса бәләкәйҙән ат йәнле булыуы, һабантуйҙарҙа ҡатнашып, беренселекте алыуы менән дә, бил бирмәҫ көрәшсе булараҡ та һоҡландырған. 1915 йылда Стәрлетамаҡта уҙғарылған һабантуйҙа еңеп, бүләккә көмөш самауыр күтәреп ҡайтыуы хаҡында ла иҫтәлек һаҡланған. Шул уҡ йылдың йәйендә Миңлеғәле Өфөнөң «Д.Д. Якимов һәм уның вариҫтарының тауар-пассажир пароходствоһы»нда йөк тейәүсе булып эшләй башлай. Бында уның көрәшсе булараҡ даны тағы ла киңерәк тарала. Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә ҡаланың Ушаков баҡсаһында бәһлеүән ҡаҙаҡ батыры Сәрсән менән алышҡа сыға ун алты йәшлек башҡорт егете Миңлеғәле. Майҙанға сығып, аҙмы-күпме көрмәкләшеп, ул-был иткәнсе Миңлеғәле әзмәүерҙәй ҡаҙаҡ батырын баш аша сөйөп тә ебәрә. Был еңеүе өсөн уны тальян гармун менән бүләкләйҙәр. Йыр, моң яратҡан егет аҙаҡ та гармундан айырылмай. Өфөлә йәшәгән йылдарында көмөш телле гармуны менән һәр ваҡыт йәштәр араһында була. Ҡыуғын миҙгеле етеү менән, Ағиҙел үренән, уға ҡушылған тау йылғаларынан һал ағыҙып ҡыуғынсылар төшә. Сафронов пристаненең тирә-яғында ял сәғәттәрендә йыр, ҡурай моңдары яңғырай. Уларға Миңлеғәленең гармун тауыштары ҡушыла. 1917 йылдың октябрь көндәрен ул әлеге пароходствола «Урал» пароходының матросы булараҡ ҡаршылай, эшселәр хәрәкәтендә ҡатнаша. Шул уҡ йылдың декабрь аҙағында тыуған ауылы Биштәкәгә ҡайта. Ауыл сходтарында Советтарҙы яҡлап сығыш яһай. 1918 йылдың август урталарында, аҡтар үткәргән мобилизациянан ҡасып, ауыл егеттәре, Миңлеғәле Шайморатов етәкселегендә, В.К. Блюхерҙың был ваҡытта Белореттан сығып Архангелгә килеп еткән Көньяҡ Урал партизандар армияһына барып ҡушыла. Шул көндән алып ғүмеренең һуңғы сәғәтенәсә, егерме биш йыл буйы, дауам иткән хәрби тормошо башлана.
Шайморатовсылар төркөмө разведка эскадронына беркетелә. Тиҙҙән улар Эҫем һыуын кисер алдынан, уңышлы разведка үткәреп, батырлыҡ күрһәтәләр, М.М. Шайморатовҡа командарм яугирҙар сафы алдында рәхмәт белдерә. Блюхер армияһы, тау һәм йылғалар аша аҡ гвардиясылар тылына 1500 километр юл үтеп, 12—14 сентябрҙә Өфө губернаһының төньяғында, хәҙерге Пермь өлкәһенең Төй-Озерское ауылы эргәһендә, Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең Көнсығыш фронты 3-сө армияһына барып ҡушыла. Тиҙҙән партизандар ғәскәре 3-сө армия составында 4-се Урал дивизияһы итеп үҙгәртелеп, регуляр хәрби берәмек булып

китә. М.М. Шайморатов ошо дивизия сафында Колчак ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың июнендә, Петроград фронтында хәлдәр ҡырҡыулашыу арҡаһында, Көнсығыш фронттан ҡайһы бер частарҙы ашығыс рәүештә Петроград эргәһенә күсереү кәрәкле тип табыла. Петроградҡа оҙатылған батыр яугирҙар араһында М.М. Шайморатов та була. 1919 йылдың август аҙаҡтарынан 1920 йылдың яҙғы айҙарына тиклем эскадрон командиры М. М. Шайморатов Төркөстан фронтының 1-се армияһы составындағы 1-се Айырым башҡорт-татар кавалерия бригадаһы сафында Ырымбур эргәһенән алып Каспий буйҙарына тиклем, артабан Ҡаҙағстандың Уйыл буйҙары, Төркөстан сүллектәре, Фирғәнә, Етеһыу аша һуғыша-һуғыша меңәрләгән километр юл үтеп, Совет-Ҡытай сигенә барып етә. 1920 йылдың июнь баштарында М.М. Шайморатов хеҙмәт иткән хәрби часть Киев эргәһенә — Көньяҡ-Көнбайыш фронтының 12-се армияһына күсерелә. Бында ул үҙенең яҡташтары — М.Л. Мортазин командалығындағы Айырым башҡорт кавалерия бригадаһының эскадрон командиры сифатында аҡ пандарға ҡаршы батырҙарса һуғыша. Алда телгә алынған китапта С.Р. Ҡадиров ошондай бер ваҡиға тураһында яҙа. «Был һуғыштарҙа, — ти ул, – М.М. Шайморатовтың эскадроны айырыуса ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Пенязевич тигән бер утарҙан дошман отряды ҡыҙылдар тылына сапҡын яһарға йыйыныуын ишетеп, Шайморатов үҙенең эскадроны менән көтмәгәндә уларҙы барып баҫа, ҡаушап ҡалған поляктар аҡ флаг күтәрә, 815 һалдат һәм офицер, 931 ат ҡыйыу егеттәр ҡулына төшә».

1920 йылдың август аҙағында М.М. Шайморатов яңынан 1-се Айырым башҡорт-татар кавалерия бригадаһына күсерелә. Бында Бохара ҡалаһы үҙәгендәге әмир резиденцияһын алған ваҡытта тағы батырлыҡ күрһәтә. Сентябрь аҙағында М.М. Шайморатов эскадроны С.М. Буденныйҙың 1-се атлы армияһының О.И. Городовиков командалығындағы 2-се кавалерия корпусы составында Дондағы Ростов ҡалаһын, аҙаҡ Ростов өлкәһен Врангель армияһынан азат итеүҙә ҡатнаша. Артабан йыйылма кавалерия бригадаһы сафтарында Перекопты штурмлауҙа батырлыҡтар күрһәтә. Ошонда ҡаты яралана. Яраһы уңалыу менән, полк командованиеһы уны мосолман һуғышсылары өсөн Ҡазанда асылған хәрби мәктәптең кавалерия курстарына уҡырға ебәрә. Ни бары бер йыл самаһы ваҡыт эсендә М.М. Шайморатов үҙен һәр яҡтан да һәләтле, тәрән белемгә ынтылыусан курсант итеп күрһәтә. Волга буйы кавалерия курстары араһында хәрби уйындарҙа ул, граната ырғытыу, трамплиндан һикереү, сабып барған ат өҫтөндә ҡылыс айҡау кеүек ярыштарҙа ҡатнашып, беренсе урынды ала.

1921 йылдың октябрендә М.М. Шайморатов яңынан граждандар һуғышы

фронтында. Ул С.М. Буденныйҙың Кавказ фронтында хәрәкәт итеүсе 1-се атлы ғәскәрендә яңынан эскадрон командиры. Ошонда күрһәткән батырлыҡтары өсөн командарм уға исеме яҙылған көмөш ҡылыс тапшыра.

Ниһайәт, ил өҫтөнә ҡанлы ҡырау булып төшкән граждандар һуғышы тамамлана. М.М. Шайморатовтың иң беренсе теләге, — әлбиттә, форсаттан файҙаланып, уҡыуҙы дауам итеү, хәрби белемде камиллаштырыу. 1922—1924 йылдарҙа тәүҙә Тамбовта хәрби, унан Мәскәүҙә ВЦИК эргәһендәге Юғары дөйөм ғәскәри училищены тамамлай. 1924—1931 йылдарҙа — Кремлде һаҡлау буйынса эскадрон командиры, полк командиры һәм ВЦИК эргәһендәге училищела уҡытыусы.

1931 йылда М.М. Шайморатов М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияға ҡабул ителә. Академияла, бүтән фәндәр менән бер рәттән, көнсығыш һәм Европа телдәрен өйрәнеү бурысы ҡуйыла. Ул ҡытай телен өйрәнеүҙә айырыуса тырышлыҡ күрһәтә. Һәм шул йәһәттән ҙур уңышҡа өлгәшә. Был иһә һуңынан унын биографияһында мөһим роль уйнай. Спорт өлкәһендә лә ярыштарҙа ҡатнаша, диск ырғытыуҙа алдынғылыҡты бирмәй. Академияны М.М. Шайморатов 1934 йылда алтын миҙал менән тамамлай. 1934 йылдың көҙөнән бер йыл буйы Төркиәлә хәрби атташе булып тора. 1935 йылдың аҙағында, Төркиәнән саҡыртыа алып, Ҡытайға хәрби атташе итеп билдәләйҙәр. Унда бер үк ваҡытта Кантон ҡалаһында юғары хәрби училищела уҡыта, марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен ҡытай теленә тәржемә итеү эшенә лә булышлыҡ итә. 1936 йылда М.М. Шайморатовҡа полковник званиеһы бирелә. Был ваҡытта ул инде Ҡыҙыл Армияның яҡшы әҙерлекле, абруйлы, һәләтле офицерҙары иҫәбендә була. 1938 йылда ул Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. (Икенсе тапҡыр уға Ҡыҙыл Байраҡ ордены – 1941 йылда, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены 1943 йылда тапшырыла.) 1940 йылдың декабренән 1941 йылдың августына тиклем полковник М.М. Шайморатов йәнә Кремлде һаҡлау буйынса полк командиры, шулай уҡ Ҡыҙыл Армия Генштабының бүлек начальнигы урынбаҫары.

М.М. Шайморатовтың хәрби биографияһында әлегә бик аҙ яҡтыртылған осор — уның Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары. 1941 йылдың августында ул үҙенең полкы менән фронтҡа китә һәм генерал-майор Л.М. Доваторҙың кавалерия төркөмөнә (артабан — кавалерия корпусы) барып ҡушыла. Фронт һыҙығына барып етеү менән, Смоленск өлкәһендә, дошман тылына рейдҡа инергә приказ бирелә. Шайморатов полкы, командованиеның приказын намыҫ менән үтәп, рейдтан әйләнеп ҡайта. Икенсе тапҡыр Волоколамск йүнәлешендә, йәнә дошман тылына үтеп инеп, ҡаты һуғыштар алып барырға тура килә.

Нәҡ бына ошо ваҡытта, Мәскәүҙе һаҡлау өсөн ҡаты һуғыштар барғанда, Өфөгә СССР Дәүләт оборона комитетынан Башҡортостанда бер юлы ике милли кавалерия дивизияһын ойоштороу тураһында телеграмма килеп төшә. Башҡортостан партия ойошмаһы һәм республика хөкүмәте ең һыҙғанып ойоштороу эштәренә тотона. Тиҙ арала республика хеҙмәтсәндәре иҫәбенә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторола. (Икенсе дивизия иһә, команда составы етерлек булмау сәбәпле, тәүгеһе өсөн резерв хеҙмәтен үтәй.) Декабрь урталарында фронттан полковник М.М. Шайморатов ҡайтып төшә һәм ойошторолоп ятҡан дивизияны ҡабул итеп ала. Тәжрибәле офицерҙар: майорҙар Гәрәй Нафиҡов, Ғариф Маҡаев, Таһир Кусимов полк командирҙары итеп тәғәйенләнә. Дивизия составында шул осорҙа 82 процент башҡорттар, ҡалған 18 проценты татарҙар, рустар һәм башҡа милләт вәкилдәре була[2].

Республика халҡы ҡулынан килгәндең бөтөнөһөн дә эшләй: дивизия 13355 ат, 12311 амунициялар комплекты, меңәрләгән тонна аҙыҡ-түлек һәм фураж менән тәьмин ителә. Өс ай буйы алһыҙ-ялһыҙ хәрби әҙерлек үткәрелә. М.М. Шайморатов тәүге көндәрҙән үк үҙен талапсан, белемле һәм хәстәрлекле командир итеп күрһәтә. С.Р. Ҡадиров унын дивизияға килеп төшкәндән һуң тәүге көндәре тураһында бына нисек иҫкә ала:

«Уны дивизия һуғышсылары шатланып ҡаршы алды. Дивизияның өлкән офицерҙар составы йыйылды, полковник уларҙы үҙенең биографияһы менән таныштырҙы, дивизия алдында торған төп бурыстар хаҡында асыҡ итеп һөйләне. Беҙҙең күңелдәрҙә ул тәүге күреүҙән үк тәрән эҙ ҡалдырҙы, һәммәбеҙҙә уға ҡарата ышаныс тойғоһо уянды.

М. Шайморатов башҡорт халҡының хәрби традицияларын яҡшы белә, һуғышсыларҙы шул традицияларҙы үҫтереү, байытыу маҡсатында тәрбиәләргә ынтыла. Ваҡыт тар булыуға һәм ҡышҡы һыуыҡтарға ла ҡарамаҫтан, уның тынғыһыҙ хәстәрлеге арҡаһында дивизияның һалдаттары һәм офицерҙары тиҙ арала тейешле хәрби белемгә эйә булды»[3].

Ниһайәт, фронтҡа оҙатыу ваҡыты килеп етә. Башта ике тәүлек буйы дивизияның әҙерлек кимәленә смотр үткәрелә. Дәүләт оборона комитеты ағзаһы Советтар Союзы Маршалы хәрби әҙерлеккә юғары баһа бирә.

«22 март көнө. Дивизия тарихында был бик хәтирәле, гүзәл көндәрҙең береһе булып ҡалыр, — тип яҙа үҙенең көндәлектәрендә дивизия ветераны С.Р. Әлибаев һәм былай тип дауам итә: — Бөгөн дивизияға Башҡортостан хөкүмәтенең байрағы һәм халыҡтың наказы тапшырыла...[4]»

12 апрелдә дивизия тулы составында, эшелондарға тейәлеп, юлға сыға. Ул көндө, ул сәғәттәрҙе ентеклерәк күҙ алдына килтереү өсөн тағы ла полк комиссары С.Р. Әлибаевтың көндәлектәренә мөрәжәғәт итәйек:

«9 апрель... Бөгөн беренсе эшелон бирелде. Тейәлеү 11 апрелдә 12 сәғәттә башланды. Башта, билдәле, беҙҙең полк (1-се полк — Р.Ш.) тейәлде.

Тиҙҙән башҡа эшелондар ҙа бирелде. Тәүге өс эшелондың береһендә полковник Шайморатов һәм уның штабы китте. Күсимов — алдағы, мин — дүртенсе эшелонда. 12 апрель көнө 18 сәғәттә ҡуҙғалдыҡ.

Тыуған Башҡортостан беҙҙе изге теләктәр менән оҙатып ҡалды:

— Иҫән йөрөп, еңеп, һау ҡайтығыҙ!

— Еңербеҙ, әлбиттә! Ләкин барыбыҙ ҙа кире әйләнеп ҡайта алмабыҙ шул. Кемдәрҙер яу яландарында ятып ҡалыр».

Бына бит нисек йырлаған башҡорт борон-борондан:

Алыҫтарҙан ғына, ай, куренә
Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы;
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр курмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

«Азамат» йырының аҙағы тетрәткес:

Ир-егеткәй яуҙа ятып ҡалһа,
Тыуған Уралына ат ҡайтыр.
Атҡайы ла уның ятып ҡалһа,
Мәңге үлмәй торған дан ҡайтыр.

Эйе, үҙҙәренең ҡайнар ҡандарын түгеп, бик күптәре ғәзиз йәндәрен биреп, мәңгелек дан ҡаҙанды башҡорт уҙамандары. Илде фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарған батыр яугирҙарҙың изге иҫтәлеге халҡыбыҙ күңеле түрендә йәшәй. Әммә танкыларға, минометтарға ҡаршы, ҡулдарына ҡылыс тотоп ат өҫтөндә барған һыбайлыларыбыҙ, асыҡ далаларҙа туҡтауһыҙ бомбаға тотҡан дошман самолеттарының һөжүменән ышыҡ таба алмайынса һәләкәткә осраған кавалерия частары тураһында уйлағанда, ғорурлыҡ менән бергә йөрәктә әсенеү тойғолары ла кисерәһең... Һуғыштың законы ҡәтғи — унда бары тик юғарынан тороп хәл ителә яҙмыштар һәм булмыштар. Әммә, нисек кенә булмаһын, республика, халыҡ намыҫына тап төшөрмәне башҡорт һыбайлылары һәм уларҙың бәһлеүән командиры. Дон буйынан Эльба ярҙарына тиклем меңәрләгән саҡрым һуғышсан юл үтеп, мәңгелек дан ҡаҙанды 112-се башҡорт кавалерия (аҙаҡ 16-сы Чернигов исемендәге кавалерия) дивизияһы. Совет хөкүмәте уны Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм 2-се дәрәжә Кутузов ордендары менән наградланы. Илдең баш ҡалаһы Мәскәү дивизияның

батырлыҡтары хөрмәтенә 15 тапҡыр салют бирҙе. Дивизияның 78 һуғышсыһы Советтар Союзы Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булды. Өс меңдән артыҡ һалдат һәм офицер ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнде. Геройҙар һаны буйынса Совет Армияһында бүтән бер генә дивизияны ла башҡорт кавалерия дивизияһына тиңләрлек түгел ине.

Үкенескә ҡаршы, уға, бүтән бик күп яуҙаштары һымаҡ, Бөйөк Еңеүҙе күрергә, еңеү шатлыҡтарын кисерергә насип булманы. 1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылындағы оҙайлы рейдтан һуң фронт һыҙығы аша сыҡҡан ваҡыттағы тиңһеҙ һуғыштарҙа башҡорт халҡының баһадир улы гвардия генерал-майоры М.М. Шайморатов Ворошиловград өлкәһе Ивановка районының Штеревка утары янында батырҙарса һәләк була. Генералдың мәйете 1947 йылда Штеревканан шул уҡ райондың Петровка эшселәр поселогының баҡсаһына күсереп ерләнгән. Уның ҡәбере өҫтөнә мәрмәр таштан һәйкәл ҡуйылған. Ҡәбер ташына алтын хәрефтәр менән: «Бында 112-се башҡорт кавалерия дивизияһының командиры генерал М.М. Шайморатов ерләнде», — тип яҙылған.




Халыҡ геройы Миңлеғәле Шайморатовтың дивизия менән фронтта үткән яу юлдарына туҡталып үтәйек. Башҡорт һыбайлылары Өфөнән ҡуҙғалып киткәндән һуң 15 тәүлек үтеүгә, 1942 йылдың 25 апрелендә Брянск өлкәһенең Сафоновка станцияһына барып төшөп, резервта торған 8-се кавалерия корпусы составына ҡушыла. Ошонда, Брянск фронтының оборона һыҙығында яҡташтарыбыҙ 1 Май көнөн байрам итәләр. Дошман менән йөҙгә-йөҙ осрашыр алдынан хәрби оҫталыҡты камиллаштырыр өсөн тағы ла ике ай форсат тейә. Әммә бына 2 июль көнө етә. Дивизия был ваҡытта Липецк өлкәһенең Тербуны районы Олымь йылғаһы буйында оборонала тора. Фашистар ҡоторонop һөжүмгә күсә. Тәүге еңеүҙәр, тәүге батырлыҡтар һәм юғалтыуҙар. Был көндәрҙә

айырыуса Гәрәй Нафиҡовтың полкы бик ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Лобановка тигән ауыл өсөн барған һуғыштарҙа полк командиры үлемесле яра ала. Әммә ул ғүмеренең һуңғы сәғәтенә, минутына тиклем полк менән командалыҡ итеүен дауам итә. Яу яланында ҡулы яраланыуына ҡарамаҫтан, Таһир Күсимов алыш менән етәкселек итеүен туҡтатмай.

Дивизия оҙон йәй буйы оборона һуғыштары алып бара. Шул осорҙа, 25 июлдә, башҡорт атлылары янына «Красная звезда» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, яҙыусы Константин Симонов килеп төшә, уларҙың батырлыҡтары менән таныша. 31 июлдә гәзиттә уның башҡорт дивизияһы яугирҙарына арналған очеркы баҫылып сыға.

Ауыр һуғыш шарттарында ла тыуған республика менән бәйләнеш өҙөлмәй. Фронтта аҙ ғына тынлыҡ булғанда, ял ваҡыттарында частарҙа йыр, моң, ҡурай тауыштары яңғырай. Ошо уҡ 1942 йылдың йәйендә атаҡлы хореограф Фәйзи Ғәскәров, дивизияға килеп, художестволы үҙешмәкәрлек ансамбле ойоштора.

Дивизияла М.М. Шайморатовтың абруйы әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур була. Һалдаттар һәм офицерҙар уның етәкселегендә һуғышыуҙы үҙҙәре өсөн ҙур мәртәбә тип иҫәпләйҙәр. Оҙайлы походтарҙа, хатта ҡатмарлы һуғыштар барышында ла ул үҙенең ҡул аҫтындағыларға, дивизия яугирҙарына ҡарата хәстәрлекле мөнәсәбәттә була, бүтән командирҙарҙан да шуны т талап итә. Шуның өсөн башҡорт атлылары бик күп ауыр һынауҙар, хәрби операциялар ваҡытында ғәжәп ҙур сыҙамлылыҡ һәм батырлыҡ өлгөләре күрһәтә. 1942 йылдың октябрь урталарынан, мәҫәлән, дивизия, элекке позицияларын бүтән частарға ҡалдырып, Сталинградҡа табан биш йөҙ километрлыҡ марш яһарға тейеш була. Атлыларға фәҡәт төнгө сәғәттәрҙе генә файҙаланырға тура килә. Тәғәйенләнгән урынға улар ваҡытында имен-аман барып етәләр. 8-се кавалерия корпусы, шул иҫәптән башҡорт дивизияһы, Сталинградтағы фашист ғәскәрҙәре группировкаһының тәьминәт юлын киҫеү өсөн Шыр (русса: Чир) йылғаһына табан хәрәкәт итергә тейеш була. Атлы ғәскәр бер ай буйы бер ышыҡһыҙ асыҡ туң далала танктар, самолеттар менән ҡоралланған дошман частарына ҡаршы һуғыштар алып бара. Көстәр тигеҙ түгел, юғалтыуҙар күп. Әммә атлылар барыбер алға бара, тиҫтәләрсә ауылдарҙы, ҡалаларҙы азат итә. Ҡаршы яҡта торған дошман һалдаттары һәм офицерҙары араһында танкыларҙан да, артиллериянан да, пулеметтарҙан да ҡурҡмай торған дивизия тураһында хәбәр тарала.

1943 йылдың 6 февралендә 8-се кавалерия корпусына фронт һыҙығы аша фашистарҙың тәрәндәге тылына үтеп, Ворошиловград — Дебальцево тимер юлын өҙөп, 3-сө гвардия армияһы частарына Ворошиловградты азат итеүҙә булышлыҡ итеү бурысы ҡуйыла. Шулай итеп, дивизия тарихында ҙур

батырлыҡтар һәм бик күп юғалтыуҙар менән билдәле оҙайлы рейд башланып китә. Өҫтәүенә, башҡорт дивизияһына, һәр ваҡыттағыса, рейдҡа кергәндә лә, ҡамауҙа ҡалып, дошман ҡулсаһын аша сыҡҡанда ла бүтән частарға юл ярып, гел генә корпустың алдынан барырға тура килә. Был юлы ла шулай була. Ике аҙна буйы, тәрән ҡар ярып, дошман тылында хәрәкәт итә кавалеристар. 10 февралдә Дебальцево — Ворошиловград тимер юлын өҙөүгә өлгәшәләр. Фашистар кавалерия корпусына ҡаршы яңынан-яңы көстәрен ташларға мәжбүр була. Был иһә, алдан уйлағанса, Ворошиловградты тиҙ арала азат итергә мөмкинлек тыуҙыра. Шул көндәрҙә 8-се кавалерия корпусына — 7-се, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына — 16-сы гвардия дивизияһы тигән исемдәр бирелә. Дивизия составындағы 275-се, 294-се, 313-сө полктар 58-се, 60-сы, 62-се гвардия полктары тип үҙгәртелә. Башҡорт кавалерияһы сафтары был ваҡытҡа инде күп төрлө милләт вәкилдәре менән тулыландырыла. Дивизия ауылдарҙы, станцияларҙы фашистарҙан азат итеп, халыҡты подполье һәм партизандар көрәшенә күтәреү буйынса ла мөһим эш алып бара.

Рейдта командованиеның корпус алдына ҡуйылған заданиеһы тулыһынса үтәлә. Фронт һыҙығы аша нисек тә үҙебеҙҙең яҡҡа йырып сығырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта фашистар корпусты ҡыҫҡандан-ҡыҫа бара. Бына 23 февраль иртәһе. 5 сәғәт 30 минутта атлы эскадрондар алға ынтыла. Дивизия, корпусҡа юл ярып, дошмандың оборона һыҙығын йырып үтергә тейеш. Үкенескә ҡаршы, бик ҡиммәткә төшә рейдтың был һуңғы операцияһы. Меңәрләгән яугирҙар яу яланында ятып ҡала. Ошо ут эсендә легендар кавалерия командиры, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың да ғүмере өҙөлә.

Шайморатовсылар үҙҙәренең һөйөклө командирының иҫтәлеген һәр саҡ йөрәк түрҙәрендә һаҡлай. Уның исеме башҡорт кавалерияһының борондан быуындан быуынға килгән батырлыҡ символына әйләнә. Уның ҡәҙерле образы йырҙарҙа, шиғырҙарҙа, романдарҙа, драмаларҙа, картиналарҙа мәңгеләштерелә. Халыҡ геройы хаҡында Заһир Исмәғилевтең Ҡадир Даян һүҙҙәренә яҙылған «Шайморатов генерал» йыры башҡорт халҡының иң яратҡан патриотик йырҙарының береһенә әйләнде. Геройҙың тыуған ауылы Биштәкәгә, Өфө урамдарының береһенә Шайморатов исеме бирелде. Ағиҙел йылға пароходствоһында «Генерал Шайморатов» исемле пароход бар.

Ҡаһарман командир генерал-майор М.М. Шайморатов тураһындағы яҡты иҫтәлек халҡыбыҙҙың йөрәк түрендә йәшәй.

* * *

[1] Ҡадиров С.Р. Урал бөркөтө. Генерал М.М. Шайморатов тураһында

биографик мәғлүмәттәр. Өфө, 1981. 12—13-сө биттәр.

[2] Белов Г.А. Путь мужества и славы. Уфа, 1967, 14-се бит.

[3] Ҡадиров С.Р. Урал бөркөтө, 48-се бит.

[4] Әлибаев С.Р. Көндәлек биттәренән. Комиссар яҙмалары. Өфө, 1971. 20-21-се биттәр.

* * *

Әҙәбиәт: Белов Г.А. Путъ мужества и славы. Уфа, 1964. 224-се бит; Әлибаев С.Р. Көндәлек биттәренән (Комиссар яҙмалары). Өфө, 1971. 188-се бит; Сагитов Т.Б. Шли лихие эскадроны // Особые добровольческие. М., 1975. 216—232-се биттәр; Ҡадиров С.Р. Уттар-һыуҙар аша: фронт яҙмалары. Өфө, 1977. 224-се бит; шул уҡ. Урал бөркөтө. Өфө, 1981. 176-сы бит.

Рабиға Ҡушаева
(1901—1937)



Халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың 1917—1937 йылдар осорондағы тарихында туранан-тура ҡатнашып, шул дәүер эсендәге ҡатмарлы социаль-ижтимағи, рухи-мәҙәни үҫеш һәм үҙгәрештәр юлында баһалап бөткөһөҙ бөйөк эштәр атҡарып, халҡыбыҙ йөрәгендә һис ваҡыт онотолмаҫ яҡты эҙ ҡалдырған тотош бер быуын бөйөк шәхестәребеҙ бар. Башҡорт халҡы нәҡ бына ошо осорҙоң тәүге мәлдәрендә ерле милли автономия хоҡуғы өсөн көрәшкә күтәрелә һәм Рәсәйҙә иң беренсе булып үҙенең автономиялы республикаһын төҙөүгә өлгәшә. Был көрәш тарих аренаһына батша заманында хоҡуҡтары бик ныҡ ҡыҫылған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла алып сыға. Милләтебеҙҙең икенсе яртыһы ижтимағи тормошта, асылда, ирҙәр менән типә-тиң тороп ҡатнашыу юлына баҫа. Дөрөҫ, хәҙерге ваҡытта Октябрь революцияһы ҡаҙанышы булараҡ барлыҡҡа килгән ҡатын-ҡыҙ эмансипацияһының, ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлығының кире яҡтарының һөҙөмтәһен дә күрә башланыҡ. Ҡатын-ҡыҙ үҙенең тәбиғәт менән билдәләнгән — бала табыу, бала үҫтереү, йорт ҡарау, ғаилә усағын һүндермәй тороу кеүек бурыстарынан торған һайын ныҒыраҡ ситләште. Йәғни был мәсьәләне инде яңы шарттарҙа өр-яңы позициянан сығып, аҡыллыраҡ хәл итеү мәнфәғәте килеп тыуҙы. Әммә, дөйөм алғанда, ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлылығы — беҙҙең яңы дәүерҙең иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе.

Ғәжәп хәл: был проблеманы башҡорттар араһында иң тәүгеләрҙән булып 1917 йылдың июлендә үк әле Ырымбурҙа үткәрелгән I Башҡорт йыйынында 16 йәшлек ауыл уҡытыусыһы күтәреп сыға һәм, күп кенә ҡаршылыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләһе буйынса йыйында ҡарар ҡабул иттереүгә өлгәшә. Ул — Һамар губернаһы Пугачев өйәҙенән, Ырғыҙ буйҙарынан делегат итеп һайланған Рабиға Йомағолова исемле йәш кенә бер ҡыҙ була. Рабиғаның был йыйында ҡатын-ҡыҙҙарҙан берҙән-бер делегат булараҡ ҡатнашыуы ла, унда яһаған сығышы ла, үҙенең тәҡдимдәрен нигеҙләп әйткән

төплө фекерҙәре лә оло бер ваҡиға булып ҡала. Хикмәт йәнә шунда: йыйын иғлан ителәсәк Башҡорт автономияһының дәүләт ҡоролошо, уға идара итеү, шулай уҡ ер, мәғариф һәм белем биреү, милли ғәскәр төҙөү кеүек көнүҙәк мәсьәләләрҙе ҡарай. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар мәсьәләһе көн тәртибендә бөтөнләй ҡаралмаған була. Рабиға Йомағолова йыйындың ойоштороу комитетына был мәсьәләне лә индереүҙе һәм шуның буйынса ҡарар ҡабул итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Ә докладсы булып үҙе сығыш яһарға әҙер булыуын белдерә.

Бына, Башҡорт автономияһын ойоштороу менән бәйле көнүҙәк мәсьәләләрҙе ҡарағандан һуң, Рабиға Йомағоловаға һүҙ бирелә. Рабиға башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ирҙәр менән тиң граждандыҡ һәм сәйәси хоҡуҡтарын яҡлап, ялҡынлы телмәр менән сығыш яһай. Бының өсөн ошондай конкрет талаптар ҡуя:

— шәриғәт буйынса ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тиң хоҡуҡлы;

— ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар сәйәси һәм ижтимағи эштәрҙә тиң хоҡуҡлы, шуның өсөн улар һайлауҙа ла ҡатнаша ала;

— ҡатын-ҡыҙҙар тиң хоҡуҡлы булған милләт кенә үҫә һәм юғары мәҙәниәткә өлгәшә ала, бының өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтары тураһында закон ҡабул иткәндә уларҙың үҙҙәренең ҡатнашыуы зарур;

– никах уҡығанда ике яҡ та — егет тә, ҡыҙ ҙа — ҡатнашырға тейеш;

– ғаилә тормошонда уңмаған осраҡтарҙа ҡатын кешенең айырылырға хоҡуҡлы булыуын танырға;

– ҡыҙҙарҙы туған телдә һәм рус телендә уҡытыуҙы мотлаҡ тип иҫәпләргә.

Рабиға шулай уҡ ҡыҙҙарҙы йәшләй (17 йәшкә тиклем) кейәүгә биреүгә, ирҙәрҙең күп ҡатын алыуына ҡырҡа ҡаршы сыға. «Йәшәһен милләттең яртыһын алып торған һәм уның үҫеүендә, сәскә атыуында ҙур көс булған ҡатын-ҡыҙҙар! Ҡатын-ҡыҙҙар — милләтебеҙ әсәләре, шуны аңларға ваҡыт!» — тип тамамлай Рабиға үҙенең телмәрен. Ошо көндән уның үҙен дә «Милләт әсәһе» тип йөрөтә башлайҙар. Был оло һәм тәрән мәғәнәле исемде ул бөтөн ғүмере, ил, милләт хаҡына фиҙаҡәр эштәре менән аҡлай.

Рабиғаның телмәре һәм тәҡдимдәре йыйында ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуҙыра. Күп кенә делегаттар, шул иҫәптән Мөхәммәтша Буранғолов, Сәғит Мирасов та уны хуплап ҡаршы алмайҙар. Ни хәл итәһең, тормошта яңылыҡты раҫлау бер ҙә еңел бирелмәй шул инде. Әммә иң мөһиме — йыйын Рабиға Йомағолованың тәҡдиме буйынса ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһенә арналған ҡарар ҡабул итә. Был ҡарар Башҡортостанда ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмғиәттәге статусын билдәләүҙә тәүге закон акты булараҡ әһәмиәтле.

Рабиға Йомағолова 1901 йылда Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Имел олоҫоноң Хәсән ауылында старшина Янғол Йомағол улы Йомағолов ғаиләһендә

тыуған. Янғол старшина балаларын уҡытыр өсөн Һамарҙан уҡытыусылар саҡыртыр булған. Рабиға ла өйҙә уҡып, һәйбәт белем һәм тәрбиә ала. Кесе йәштән етди, ҡыҙыҡһыныусан, уйланыусан бала булып үҫә, уҡытыусы булырға хыяллана. Әйткәндәй, әҙәбиәтебеҙҙең классигы мәшһүр яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина ла ошо уҡ Хәсән ауылы ҡыҙы. Уларҙың араһы — дүрт кенә йәш. Һәҙиә менән Рабиға бәләкәйҙән бер-береһе менән яҡындан аралашып йәшәгән. «Һәҙиә беҙҙең ғаилә менән бик дуҫ булды. Күрше торғас, беҙгә бик йыш килде», — тип хәтерләй Рабиға Йомағолованың ике туған һеңлеһе Мәрйәм Ғабдрахманова.

Рабиға ла, Һәҙиә лә бик йәшләй уҡытыусы булып китә, икеһе лә, милләтебеҙ тарихында яҡты эҙ ҡалдырып, бик күптәр өсөн түҙемлелек һәм батырлыҡ өлгөһө булырҙай ғүмер юлы үтәләр.

Рабиғаның атаһы менән бер туған ағалары Харис һәм Ғиләж Йомағолов замандың алдынғы ҡарашлы, белемле һәм һәләтле кешеләре була, улар икеһе лә Һамар губернаһында һәм Башҡортостанда революцион эшмәкәрлектә ҡатнаша, башҡорт халҡының арҙаҡлы эшмәкәрҙәре булып таныла.

1916 йылда, 15 кенә йәшендә, Рабиға, Ғиләж ағаһының кәңәше менән, атаһы риза булмауға ҡарамаҫтан, күршеләге Бөрйән ауылында уҡытыусы булып эш башлай. Ауыл халҡы алсаҡ күңелле, балаларға ли, ололарға ла иғтибарлы уҡытыусы ҡыҙҙы ярата, хөрмәт итә. 1917 йылда Ырғыҙ буйы башҡорттары уны башҡорт халҡының оло йыйынына делегат итеп һайлай.

Йыйындан ҡайтып, Рабиға уҡытыусылыҡ эшен дауам итә. Октябрь революцияһынан һуң, олоҫ революцион комитеты рәйесе ағаһы Ғиләж Йомағоловтың заданиеһын үтәп, халыҡ араһында Совет власының маҡсаттарын аңлатыу эшенә тотоноп китә. Тиҙҙән ул, Ырымбурға барып, атаҡлы Бағбостан мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаша. Ырымбурҙа уҡытыусылыҡ эше менән дә шөғөлләнә. 1919 йылда, кейәүгә сығып, Стәрлетамаҡҡа күсеп килә. Әммә 1922 йылдың яҙында, ире үлеп китә, яңғыҙ тороп ҡала. 1919—1922 йылдар — Рабиғаның тормошонда Стәрлетамаҡта ал-ял белмәй эшләп, бер яҡтан, ҡатын-ҡыҙҙар араһында, икенсе яҡтан, республикала приюттар, балалар йорттары эшен яйға һалыу буйынса ҙур йәмәғәт эшмәкәре булып таныла барған бер осор. Был йылдарҙа ул РКП(б)-ның Стәрлетамаҡ кантон комитетында, Башҡортостан өлкә комитетында ҡатын-ҡыҙҙар менән эшләү бүлеге мөдире булараҡ, бихисап эштәр башҡара. 1920 йылдың сентябрендә эшсе һәм крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙарының беренсе Бөтөн Башҡортостан конференцияһын әҙерләүҙә һәм үткәреүҙә ҡатнаша, 1921 йылдың ноябрендә уның инициативаһы менән һәм уның мөхәррирлегендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн «Азат ҡатын» исемле гәзит сыға башлай. (Был гәзит Башҡортостанда тәүге ҡатын-ҡыҙҙар баҫмаһы

булараҡ тарихҡа инеп ҡала.) 1921 йылдың ноябрендә уны БАССР Үҙәк Башҡарма Комитетының икенсе сессияһында Советтарҙың IX Бөтөн Рәсәй съезына делегат итеп һайлайҙар. Съезд көндәрендә беҙҙең яҡташтар өсөн иҫтәлекле ваҡиға булып үтә: Башҡортостан делегацияһын Совет хөкүмәтенең етәксеһе В.И. Ленин ҡабул итә. Рабиға был осрашыуға башҡорт милли кейемен кейеп бара. В.И. Ленин Рабиғанан ҡатын-ҡыҙҙар араһында ниндәй эштәр алып барылыуы тураһында һораша, уның яуаптарын ҡыҙыҡһынып, диҡҡәт менән тыңлай. Рабиға өсөн осрашыу ғүмерлек иҫтәлек булып ҡала, был хаҡта ул, ҡайткас, тулҡынланып һөйләй торған була.

1922 йылдың майында ул республикабыҙҙың күренекле дәүләт эшмәкәре Хафиз Ҡушаевҡа кейәүгә сыға. Хафиз Ҡушаев был ваҡытта Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының Рәйесе була. Шул уҡ йылдың йәйендә, оло Башҡортостан ойошторолоу айҡанлы, республика хөкүмәте Стәрлетамаҡтан Өфөгә күсә. Ҡушаевтар ғаиләһе Өфөлә ул осор башҡорт интеллигенцияһы мөхитендә ҙур хөрмәт ҡаҙана. Хафиз Ҡушаев республикабыҙҙа мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә һәр ваҡыт принципиаль ҡарашта тора. Уның тырышлығы менән шул йылдарҙа уҡ «БАССР-ҙың Ер кодексы» эшләнеп, ғәмәлгә индерелә. Башҡорт телен үҫтереү, дәүләт аппаратын башҡорт телен белгән кешеләр менән нығытыу мәсьәләһендә лә Хафиз Ҡушаев бик ҙур ныҡышмалылыҡ күрһәтә. Кешеләргә, халыҡтың ихтыяждарына иғтибарлы булыуы арҡаһында тормошонда шатлыҡтар ҙа күрергә, ҡайғылар ҙа кисерергә тура килә. Өфөлә уларҙың ике ҡыҙы тыуа. Әммә 1923 йылда тыуған Миңһылыу исемле ҡыҙҙары ун биш кенә айлыҡ сағында дифтериянан үлеп ҡала. Рабиға был юғалтыуҙы бик ауыр кисерә. Ә инде 1925 йылда тыуған икенсе ҡыҙҙары Динә (аҙаҡ ул Таңһылыу Ҡушаева булып йөрөй), Ленинградта Ваганова исемендәге хореография училищеһын тамамлап, Пермь дәүләт опера һәм балет театрының солисткаһы булып китә, уға РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы тигән юғары исем бирелә.

Ләкин әле беҙ Ҡушаевтар яҙмышының иң фажиғәле йылдары хаҡында һөйләп китергә тейешбеҙ. Уға тиклем — Ҡушаевтар тормошонда Өфө осоро тураһында һүҙҙе тамамлайһы. Ете йыл буйына Өфөлә йәшәй улар. Рабиға Ҡушаева был дәүерҙә республика ҡатын-ҡыҙҙар хәрәкәтенең үҙәгендә була. Уны Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортона мөдир итеп ҡуялар. Ошонда ул 1929 йылда Өфөнән киткәнгә тиклем етем балаларҙы тәрбиәләү эшенә бөтөн көсөн, йөрәк йылыһын биреп хеҙмәт итә. Ә инде 1929 йылда, Үҙәк аппаратҡа үрләтеү һылтауы менән, Хафиз Ҡушаевты Мәскәүгә, Бөтөн Союз Үҙәк Башҡарма Комитетына яуаплы эшкә күсерәләр. Рабиға Ҡушаеваға иһә партияның Замоскворецкий район комитеты ниндәй эш таба тиерһегеҙ –

агитация-пропаганда эштәре алып барыу өсөн, имеш, уны туҡыма фабрикаһына швея-мотористка булып урынлаштырырға задание бирә. Ниһайәт, уның теләгеп үтәп, РСФСР-ҙың Мәғариф халыҡ комиссариатына эшкә алмаҡсы булалар. Бында ул Н.К. Крупская етәкселегендә Рәсәй Федерацияһының Балалар йорттары идаралығы инспекторы булып эшләй. 1937 йылға тиклем ул ошо вазифаны башҡара, әлеге идаралыҡ аппаратында бөтмәҫ-төкәнмәҫ чиновник эштәре менән мәшғүл була. Быны инде, милләт әсәһенең, үҙ иленән айырылып, ситлектәге бөркөт һымаҡ, талпынып та, оса алмайынса зарығып йәшәгән йылдары тип иҫәпләргә була торғандыр. Мәкерле Совет етәкселеге бер Хафиз һәм Рабиға Ҡушаевтарҙы ғына түгел, Башҡортостандың күпме аҫыл дәүләт эшмәкәрҙәрен ул йылдарҙа Мәскәүҙәге Үҙәк аппаратҡа күсергән булып, үҙ мөхитенән, үҙ халҡынан, үҙ тамырынан айырып алды. Муса Мортазин, Муллаян Халиков, Харис Йомағолов, Әхмәҙулла Бейешев һымаҡ үҙ милләтенең, республикаһының мәнфәғәттәренә тоғро ҡалған күпме арҙаҡлы эшмәкәрҙәребеҙҙе Мәскәүҙең йырып сыҡҡыһыҙ ваҡ һәм уртаса чиновниклыҡ аппараттарына илтеп тыҡтылар ул йылдарҙа. Әммә был аппарпт уйынын да оҙаҡҡа еҫәрмәнеләр. Сөнки алда 1937 йыл бар ине.

1937 йылдың йәйендә Ҡушаевтар ғаиләһе Мәскәү эргәһендәге дачала йәшәгән ваҡытта була был хәл. (Хафиз Ҡушаевҡа, ВЦИК-тың яуаплы хеҙмәткәре булараҡ, хөкүмәт дачаһында айырым коттедж бирелә.) Рабиға Ҡушаева Калинин ҡалаһында балалар йорттарының эшен тикшереү буйынса сираттағы командировканан һуңғы электричкала ҡайтып төшөп, киске сәғәт ун берҙә дача ҡаласығын уратып алған ҡойма буйындағы һуҡмаҡ буйлап килгән сағында уны, сикәһенә төбәп атып, үлтереп китәләр. Янында булған аҡсаһына ла, документтарына ла, бер генә әйберенә лә теймәгәндәр. Үлтереүсене эҙләүсе лә, табырға ынтылыусы ла булмай. Бер ай үтер-үтмәҫтән, Хафиз Ҡушаевты ҡулға алалар һәм 1937 йылдың сентябрендә, «халыҡ дошманы» тигән ғәйеп тағып, атырға хөкөм итәләр.

Ҡушаевтарҙың биш йәшлек улы Иректе Мәскәүҙәге студент туғандары, ҡарарға бер ниндәй ҙә мөмкинселектәре булмағанлыҡтан, балалар йортона бирергә мәжбүр була. Үкенескә күрә, аҙаҡ Ирек Ҡушаевты улар бер ҡайҙан да эҙләп таба алмайҙар. Ә инде ата-әсәһенән ун ике йәштә үкһеҙ етем ҡалған Динә (Таңһылыу) Ҡушаеваға Ленинградта уҡыуын имен-аман дауам итергә насип була.

Бер ғаилә фажиғәһе... Ә, бәлки, милләтебеҙҙең бер ғаилә яҙмышы аша үткән мәңге уңалмаҫ йөрәк яраһылыр. Шул йөрәк яралары үҙҙәренең бөтөн ғүмерҙәрен халҡыбыҙ өсөн изгелекле хеҙмәткә арнаған бөйөк шәхестәребеҙҙең исемдәрен һәр саҡ иҫкә төшөрөп тора. Улар араһында аҫылдарҙан-аҫыл,

ҡаһарман рухлы башҡорт ҡатыны — милләтебеҙ әсәһе тигән илаһи исем менән танылған Рабиға Янғол ҡыҙы Ҡушаева ла бар. Был ҡаһарман шәхестәребеҙҙең иҫтәлегенә һәм изгелекле эштәренә ҡарата күңелдәребеҙҙә мәңгелек хөрмәт һәм рәхмәт тойғоһо йәшәй.

* * *

Әҙәбиәт: Насиров Р., Сөләймәнова Р. Милләтебеҙ инәһе // Башҡортостан. 1993 йыл, 20—22 октябрь; Сулейманова Р. Рабига Кушаева // Ватандаш. 1997, № 3. 169—176-сы биттәр; Насиров Р. Уҙамандарҙы әҙләйем. Өфө: «Китап», 1997. 212—252-се биттәр.

Ғәли (Ғәлимйән) Ишмырҙин
(1903—1942)



Ауырғазы районы Мораҙым ауылының әргәһендәге тумалаҡ ҡына тау башында, ысын самолетты бейеккә күтәреп, һәйкәл ҡороп ҡуйғандар. Алыҫтан, ҡанаттарын киреп, бына-бына осоп китерҙәй булып күренгән һәйкәл Өршәк буйының бөркөт йөрәкле ир-уҙамандары — хәрби летчиктар Ғәли Ишмырҙин менән Мөҙәрис Аҡбулатов хөрмәтенә ҡуйылған. Беренсе башҡорт летчигы Ғәли Мөхәмәтйән улы Ишмырҙиндың тыуыуына йөҙ йыл тулған көндәрҙә, 2003 йылдың йәйендә, Башҡортостан РОСТО советы рәйесе генерал Таңғатаров тырышлығы арҡаһында ҡоролдо был самолет-һәйкәл.

Ғәли Ишмырҙин тураһында һөйләр алдынан Мөҙәрис Аҡбулатов тураһында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт биреп үтәйем. М. Аҡбулатов та, Ғ. Ишмырҙин һымаҡ уҡ, хәрби летчик, дөрөҫөрәге, һынаусы летчик. Ошо уҡ Ауырғазы районы Уҫман (Ҡаҙморон) ауылында тыуып үҫкән башҡорт егете. Ул да, өлкән милләттәше, ырыуҙашы Ғ. Ишмырҙин һымаҡ уҡ, йәштән авиацияға ғашиҡ егет була, хәрби летчиктар училищеһын тамамлай, майор званиеһына тиклем хеҙмәт юлы үтә һәм, үкенескә ҡаршы, отставкаға сығырға тип кенә йөрөгән сағында, самолетта һәләкәткә осрай. Нихәл итмәк кәрәк, хәүефле шул инде ул летчик һөнәре. Әйткәндәй, минең ғаилә альбомымда бер туған ағайым Урал Шәкүровтың 1954 йылда Мөҙәрис Аҡбулатов менән бергә төшкән фотоһы һаҡлана. Урал ағайым ул ваҡытта хәрби летчиктар училищеһы курсанты ине. Йәйге хәрби уҡыуға барғас, күрше частағы башҡорт егеттәрен эҙләп барған һәм үҙебеҙҙең Өршәк буйы егете Мөҙәристе осратып, иҫтәлеккә фотоға төшкәндәр. Һанаулы ғына сәғәттәр эсендә улар шулай осрашып хушлашҡандар. Зәңгәр күк киңлектәре тураһында хыялланып йәшәгән яҡташыбыҙ менән уның тәүге һәм һуңғы осрашыуы шулай булған. Мөҙәрис Аҡбулатовтың ғаиләһе иһә, үҙе һәләк булғас, Өфөгә ҡайтып төпләнгән. Уның улы Илдар Аҡбулатов тарихсы һөнәрен һайланы, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләне,

байтаҡ йылдар Башҡортостан Республикаһы Милли музейының генераль директоры вазифаһын башҡарҙы. Хәҙер ҙә ул ғилми эш менән шөғөлләнә. Бөркөт йөрәкле яҡташым Мөҙәрис Аҡбулатов тураһында әйтәһе һүҙем әлегә шул ғына.

Был яҡты донъяла ни бары 39 йыл ғүмер кисереп, республикабыҙ тарихында онотолмаҫ яҡты эҙ ҡалдыра меркет-мең башҡорттарының ҡыйғыр бөркөтө Ғәли Ишмырҙин.

Башҡорттарҙан һәм Башҡортостандың беренсе летчигы, хәрби осоусы, республикала авиацияға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Ғәли (тулы исеме Ғәлимйән) Мөхәмәтйән улы Ишмырҙин 1903 йылдың 15 мартында элекке Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Өршәк-Мең олоҫо Иҫке Мораҙым (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Ауырғазы районы) ауылында тыуған. 1916 йылда тыуған ауылында башланғыс мәктәп тамамлай. 1917—1919 йылдарҙа ауылда йәшәй, крәҫтиән хеҙмәте менән шөғөлләнә. 1920 йылда үҙ теләге менән Ҡыҙыл Армия сафына баҫа һәм айырым Башҡорт уҡсылар бригадаһында хеҙмәт итә башлай. 1921—1922, 1922—1923 йылдарҙа — 1-се Башҡорт бригадаһында, 6-сы уҡсылар полкында ҡыҙылармеец. 1925 йылда — Баҡыла ҡыҙыл командирҙар курсын, 1928 йылда летчиктарҙың хәрби-теоретик мәктәбен тамамлай. Хәрби летчик званиеһын ала.

1934 йылдың 17 декабрендә Ғәли Ишмырҙин, республика хөкүмәтенең юллауы буйынса һәм СССР оборона халыҡ комиссарының фарманы менән Өфө аэроклубы етәксеһе итеп тәғәйенләнә. Оҙаҡ та үтмәй, Башҡорт АССР-ы Осоавиахимының авиация бүлеге етәксеһе вазифаһы ла йөкмәтелә.

Авиацияла инде хәрби осоусы булараҡ ҙур абруй ҡаҙанған, бик күп тормош һынауҙары үткән, һәр йәһәттән яҡшы әҙерлекле яҡташыбыҙ, тиҙ арала йыйынып, юлға сыға һәм 1935 йылдың ғинуарында Өфөгә ҡайтып төшә. Ҡайтыу менән, ең һыҙғанып, республикала авиацияны ойоштороу эшенә тотоноп китә. Уға тиклем Өфөлә Ҡыҙыл Һауа Флоты дуҫтарының Башҡортостан йәмғиәте эшләп килә, авиация тураһында ғәйәт киң пропаганда эше йәйелдерелгән була. Ул ҡайтырҙан алдараҡ, 1934 йылдың 5 майында, Өфөлә аэроклуб асыла. Әммә, ойоштороу менән генәме ни, уны бит юлға һалырға кәрәк. Ишмырҙинды Өфө аэроклубы тип аталған ойошма ташландыҡ сиркәү рәүешендә ҡаршы алды, тип яҙа, мәҫәлән, «Бөркөт осмай түҙәме» тигән очеркында билдәле журналист Фәрит Вахитов һәм артабан ошолай тип дауам итә: «Бер нисә самолет ҡайтарылған, парашют вышкаһы ҡуйылған, осоу-планер станцияһы бар. Әммә былар бөтөнөһө лә ҡыҙғаныс хәлдә. Ағиҙел аръяғындағы аэродром тигән урын, Хоҙай нисек яралтҡан, шулай: соҡор-саҡыр, ҡыуаҡлыҡ. Ундағы бина ла шул уҡ ташландыҡ сиркәү булып сыҡты. Эште саң борҡоп

торған шарттарҙа башларғамы? Уҡырға теләүселәр күп, ләкин кластар юҡ…»

Аэроклубтың яңы етәксеһе осһоҙ-ҡырыйһыҙ ойоштороу эштәренә сума. Уға тиклем бында берәр урынлы ике планер, алты парашют һәм бер У-2 уҡыу самолеты ғына була. Аэроклубтың ангары ла, осоусы кадрҙары ла булмай әле. «1938 йылда бында ҡырҡ биш самолет бар ине, ә һуғыш алдынан уларҙың һаны алты тиҫтәнән артып китте», — тип яҙа элекке летчик-инструктор, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Глеб Баранов. Ғәли Ишмырҙин етәкселек иткән осорҙа республикабыҙ баш ҡалаһындағы аэроклуб илебеҙ оборонаһын нығытыу йүнәлешендә таң ҡалырлыҡ ҡаҙаныштар яулай. Бында әгәр ҙә 1935 йылда 14 осоусы әҙерләнгән булһа, 1940 йылда Ҡыҙыл Армияның Хәрби Һауа Көстәренә — 849, һуғыш алдынан иһә 1149 летчик әҙерләп сығарыла. Өфө аэроклубы Союз күләмендә иң алдынғы урындарҙы биләй. Өфөнән тыш, Ғ.М. Ишмырҙин Стәрлетамаҡта, Белоретта аэроклубтың филиалдарын ойоштора, уларҙың эшенә лә етәкселек итә. Ләкин дан ҡаҙанып өлгөргән летчик һәм етәксе Ғәли Мөхәмәтйән улына ла ҡәһәрле 1937 йылдың ауыр һынауҙары аша үтергә тура килә. Шул йылдың октябрендә ул ялған донос буйынса ҡулға алына һәм ярты йыл буйы төрмәлә ултырып сыға. Бер туҡтауһыҙ ҡабатланып торған һорау алыуҙар, язалауҙар һаулығын ҡаҡшата. Төрмәнән сыҡҡас, тыуған ауылына, ата йортона ҡайтып, ауылдаштарының ихлас ярҙамы, ата-әсәһенең хәстәрлеге менән аяҡҡа баҫа һәм яңынан элекке эшенә ҡайта. Ул юҡ саҡта етәкселек төрлө үткенселәр, карьеристар ҡулына ҡалып, бөтөн эш тырым-тырағай килтерелгән була. Ғәли Ишмырҙинға күп нәмәне аяҡҡа баҫтырырға, яңынан башларға кәрәк була. Йәштәрҙә теләк, энтузиазм кәслө. Ғәли шуға ышана, ғәҙелһеҙлеккә, яуызлыҡҡа ҡарап, рухын төшөрмәй. 1938 йылдың 18 авгусында тәү башлап Авиация көнө үткәрелә. Ғәли Ишмырҙин шул айҡанлы республика йәштәренә мөрәжәғәт менән сығыш яһай. «Йәштәр — самолетҡа!» тигән өндәмә тарата. Үҙе кеүек үк күкте, бейеклекте һөйгән Башҡортостан йәштәрен ул осоусы һөнәренә өйрәтте, уларҙың күңелендә ҡыйыулыҡ, батырлыҡ сифаттарын тәрбиәләне, көтөлмәгән ҡатмарлыҡтар, ҡурҡыныс хәлдәр алдында юғалып ҡалмаҫҡа күнектерҙе. Өфө аэроклубы яңынан ил күләмендә алдынғылар рәтенә сыҡты. Һанаулы ғына йылдар эсендә Өфөлә хәрби осоусыларҙың Ишмырҙин мәктәбе формалашты. 1939 йылдың 18 авгусында «Красная Башкирия» гәзитендә хәбәр ителеүенсә, мәҫәлән, Ғ.М. Ишмырҙин эшләгән өс йыл ваҡыт эсендә осоусылар әҙерләү 15 тапҡырға, самолеттар һаны 26 мәртәбәгә арта, ә парашюттан һикереү йылына бер меңдән артып китә. Уның уҡыусылары йыл һайын хәрби училищеларға юллана. Башҡортостан планеристары ярыштарҙа Бөтөн Союз һәм донъя рекордтары ҡуя. Өфө аэроклубын тамамлаусылар 1939—1940 йылдарҙа уҡ әле, Хәсән күле һәм Халхин-Гол райондарында, шулай

уҡ аҡ финдар менән һуғыштарҙа ҡатнашып, юғары хәрби әҙерлек өлгөләре күрһәтәләр. Стәрлетамаҡ аэроклубы эш һөҙөмтәләре буйынса 1940 йылда илдә — икенсе, Белорет аэроклубы иһә 1941 йылда Бөтөн Союз Ярыштарында беренсе урынды алыуға өлгәшә. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән аэроклубтың курсанттары һәм инструкторҙарҙың күбеһе фронтҡа китә. Ғәли Ишмырҙин һәм уның менән бергә бер төркөм авиация белгестәре, осоусылар һәм парашютистар әҙерләүҙе дауам итер өсөн, Өфөлә ҡалдырыла.

Ғ.М. Ишмырҙиндың ҡул аҫтында тәрбиәләнеп сыҡҡан йөҙҙәрсә летчиктар, авиация техниктары, механиктар яу ҡырында батырҙарса алыша. Уларҙың барыһы ла тип әйтерлек ордендар һәм миҙалдар менән наградлана, ә инде Өфө аэроклубын тамамлаған 14 кеше Советтар Союзы Геройы тигән исемгә лайыҡ була. Шул иҫәптән Муса Гәрәев бөйөк Еңеү көнөн күкрәгендә ике Алтын Йондоҙ менән ҡаршы ала.

Ғәли Ишмырҙин 1940 йылда Башҡорт АССР-ы Юғары Советының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнә. 1942 йылда уға авиация майоры званиеһы бирелә. Әммә шул уҡ йылдың 9 авгусында данлы хәрби осоусы, Башҡортостан хәрби летчиктарының остазы һәм тәрбиәсеһе Ғ.М. Ишмырҙиндың ғүмере фажиғәле рәүештә өҙөлөп ҡала. Ғәли Ишмырҙин асылда халҡыбыҙға дошман әҙәмдәрҙең яуыз эштәре һөҙөмтәһендә һәләк була. Ул фажиғә көнөндә Ғәли Ишмырҙин самолетта Стәрлетамаҡ янындағы аэродромдан күтәрелә. Әммә, ергә ултырыу ваҡыты еткәс, боролош яһаған ваҡытта машина кинәт түбәнгә табан шыҡыйып төшә башлай һәм, хужаһына буйһонмай, бер нисә секунд эсендә ергә ауып төшә. Летчик: «Тәрәнлек руле эшләмәне», – тип әйтеп өлгөрә. Ә авария сәбәптәрен тикшереү өсөн ойошторолған рәсми комиссия билдәләүенсә, әлеге тәрәнлек руленең тростары игәп ҡуйылған булып сыға. Бындай осраҡтар, йәғни самолеттарҙың идара итеү тростарын өҙөлөр-өҙөлмәҫ кенә хәлгә еткереп игәп ҡуйыу, унан алда ла булған да бит. Үкенескә ҡаршы, самолетты осорға әҙерләүселәр һиҙгерлек күрһәтмәй. Шулай һәләкәткә осрай Башҡортостандың беренсе летчигы Ғәли Мөхәмәтйән улы Ишмырҙин.

Һуғыштан һуң Өфө аэроклубы спортсы-летчиктар һәм парашютистар әҙерләй. Унда тәрбиәләнеүселәр күп кенә йылдар буйы Бөтөн Союз, Европа һәм халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашып, призлы урындарҙы алыуға өлгәшә.

Ғәли Ишмырҙин Борисоглебск ҡалаһында летчиктарҙың хәрби-теоретик мәктәбендә уҡыған саҡта Вера Павловна Васильева тигән ҡыҙға өйләнгән була. Ҡатыны Ғәли Мөхәмәтйән улы һәләк булғандан һуң береһенән-береһе бәләкәй өс бала менән тороп ҡала. Һөйөклө тормош юлдашынан тороп ҡалған өс баланы ла ул, матур итеп тәрбиә биреп, аяҡҡа баҫтыра. Өлкән улдары ауыл хужалығы институтын тамамлай, икенсе улдары шофер булып эшләп, пенсияға

сыға. Ҡыҙҙары Наилә йәш сағында мылтыҡтан атыу буйынса спорт мастеры исемен ала, республика ярыштарында күп тапҡыр призлы урындарҙы яулай. Башҡорт дәүләт университетының биология факультетын тамамлай.

Башҡортостан шоңҡары, республикабыҙ авиацияһының рыцары Ғәли Ишмырҙиндың исеме халҡыбыҙҙың йөрәк түрендә йәшәй.

* * *

Әҙәбиәт: Булатов Ғ. Беренсе башҡорт летчигы // Совет Башҡортостаны. 1967, 15 ноябрь; Баранов Г. Рыцарь башкирской авиации // Известия Башкортостана. 1997, 17 сентябрь; Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Баш мөхәррире Шәкүров Р.З. Өфө, 1997; XX быуат башҡорто: Ғәли Ишмырҙин // Йәшлек. 2003, 3 апрель; Дилмөхәмәтова Д. Беренсе башҡорт осоусыһы // Аманат. 2003, № 4; Ишмурзин М. Обнимая небо крепкими руками. К 100-летию со дня рождения Галея Ишмурзина // Республика Башкортостан. 2003, 14 май; Вахитов Ф. Бөркөт осмай түҙәме... (Республика Хәрби дан музейында башҡорттарҙан беренсе осоусы Ғәли Ишмырҙин тураһында бай материал һаҡлана) // Башҡортостан. 2004, 8—11 декабрь.

Билал Йосопов
(1904-1999)



Башҡортостан Республикаһының нәҡ урта тошонда, дала ерҙәрен. көньяҡтан төньяҡҡа ҡарай иңләп аҡҡан Өршәк йылғаһы буйында, өршәк-мең башҡорттарының Мерәç тигән боронғо бер ауылы урынлашҡан. Заманында уҡымышлылығы менән абруй ҡаҙанған Лоҡман кантон, уның тарафынан уллыҡҡа алынып, 1836 йылда 84 йәшендә донъя ҡуйған атаҡлы шағир Ғәбдерәхим Усмандың исемдәре менән бәйле был ауыл. Уҙған XX быуатта ла Мерәçтән ижад, ғилем донъяһына ынтылған йәштәр үçеп сыға. Шундайҙар араһында атаҡлы ғалим, нефть геологияһы, гидрогеология һәм тектоника өлкәһендә күренекле белгес, Татарстанда тәү башлап нефть ятҡылығын асыусы Билал Мөғтәсим улы Йосоповтың исеме айырым урында тора.

Геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Б.М. Йосопов 1904 йылдың 25 декабрендә Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Дәүләкән районы) Мерәç ауылында донъяға килә.

1926 йылда, Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң, Ҡазан дәүләт университеты эргәһендәге рабфакка уҡырға ебәрелә. 1935 йылда, шул уҡ университеттың геология факультетын тамамлап, инженер-геолог һөнәренә эйә була. Йәш белгес Татарстан геология тресына йүнәлтмә ала һәм тулыһынса ғәмәли эшмәкәрлеккә — геология-эҙләнеү эштәренә сума. Һуңыраҡ был уның ғалим булып формалашыуында, фәндә өр-яңы теорияларҙы нигеҙләүендә бик мөһим роль уйнай. Татгеолтреста ул 1935—1946 йылдар эсендә ябай геологтан партия начальнигы, управляющий вазифаларына тиклем үçеш юлы үтә.

Билал Мөғтәсим улы Йосоповтың ғилми-производство эшмәкәрлегенең тәүге этабы гидрогеология өлкәһендәге тикшеренеүҙәр, төҙөлөш материалдары, һоро күмер, яна торған сланец ятҡылыҡтарын эҙләү эштәре менән бәйләнгән. Татгеолтрест управляющийы булараҡ Б.М. Йосопов

Татарстандағы Аҡсубай, Нурлат, Ялан, Ромашкин майҙандарында нефткә разведка эштәрен ойоштороу эштәре менән туранан-тура шөғөлләнә. Шөгөр районындағы беренсе нефть ятҡылығы уның етәкселегендә асыла. Ошо уҡ осорҙа ул Татарстандың минераль һыуҙарын комплекслы өйрәнеү менән дә шөғөлләнә. Күрше республикалағы «Шифалы һыу» минераль һыу ятҡылығын асыу ҙа Б.М. Йосопов етәкселегендә бойомға ашырыла. Билал Мөғтәсим улы, производствола эшләү менән бергә, туҡтауһыҙ белемен камиллаштырырға ынтыла, аспирантура тамамлай. 1947 йылда «Түбәнге Кама буйы минераль һыуҙарының формалашыу шарттары» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Татарстандың шифалы һыуҙары хәҙерге ваҡытта ғәйәт киң билдәле. Ер аҫты һыу ятҡылыҡтарын ғилми өйрәнеүҙе башлап ебәреүселәрҙең береһе лә талантлы башҡорт геологы Билал Йосопов була.

1947 йылда, СССР Фәндәр академияһы Ҡазан филиалының Геология институтына күсеү менән, Билал Мөғтәсим улы артабанғы ғүмерен тулыһынса фәнгә, ғилми-тикшеренеү эшенә арнай. Нәҡ шул осорҙа, 1948 йылда, Татарстанда нефть запастары буйынса бик ҙур перспективалы Ромашкин ятҡылығының асылыуы был йүнәлештә ғилми-тикшеренеү эштәренең әһәмиәтен бермә-бер арттырып ебәрә. Татарстанда девон һәм ташкүмер дәүерҙәре ҡатламдарының нефткә перспективалығын асыҡлау, ҡара алтынға эҙләнеү-разведка эштәренең алымдарын һәм методикаһын нигеҙләү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә әйләнә. Билал Мөғтәсим улы ҙур дәрт, илһам менән, күп йылдар буйы туплаған тәжрибәһен, күҙәтеүҙәрен дөйөмләштереп, нефть геологияһы өлкәһендә ғилми эшкә тотона. 1958 йылда ул «Татарстандың геологик төҙөлөшө һәм нефть ятҡылыҡтары» («Геологическое строение и нефтеносность Татарии») тигән темаға докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. СССР Фәндәр академияһының Ҡазан филиалы Геология институтында егерме йыл (1947—1967 йылдар) эшләү дәүерендә Б.М. Йосопов (бында ул өлкән ғилми хеҙмәткәр, лаборатория мөдире вазифаларын башҡара) нефть геологияһы фәнен үҫтереүгә ғәйәт ҙур өлөш индерә. Татарстандың нефть ятҡылыҡтары формалашыуы мәсьәләһендә ул өр-яңы теоретик тәғлимәттәрҙе нигеҙләй. Нефть ятҡылыҡтары бында көнсығыш тарафтан, тәрәндәге төпкөл ҡатламдарҙан миграция һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тигән һығымтаға килә ул. «Беҙ нефтте кристаллы нигеҙҙә лә эҙләйәсәкбеҙ әле», — тип белдерә ғалим. Был идея ул дәүер өсөн фәндә ысын мәғәнәһендә сенсация була, әлбиттә. Ләкин тормош уның ғилми эҙләнеүҙәренең хаҡлы булыуын күрһәтә. 1960 йылда Б.М. Йосопов «Кристаллы нигеҙҙе өйрәнеү мәсьәләһе тураһында» тигән монографияһын тамамлай. Был иһә, донъя фәне ҡаҙаныштарын дөйөмләштереп һәм Татарстанда быраулау эштәре һөҙөмтәләренә таянып,

нефть һәм газ ятҡылыҡтарын эҙләүҙә яңы теорияны эшләүгә алып килә. Уның етәкселегендә нефть геологияһы лабораторияһында был проблема өҫтөндә эштәр әүҙем дауам итә, ер ҡабығының кристаллы нигеҙендә эҙләнеү перспективаһыҙ тигән ҡараштар кире ҡағыла һәм шул тәрән ҡатламдарҙа нефттең булыуына ышаныс тыуа. Яңы теория буйынса, Татарстанда һәм, әлбиттә, Башҡортостанда ла нефть ятҡылыҡтарын артабан кристаллы нигеҙҙән эҙләү мәсьәләһе алға килеп баҫа. Шул маҡсат менән ул Татарстанда тәрәнгә скважина быраулау һәм кристаллы нигеҙҙең төҙөлөшөн, составын, үҙенсәлектәрен өйрәнеү эшен юлға һалыуға өлгәшә. Был тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыу өсөн үҙе етәкселек иткән нефть геологияһы лабораторияһына танылған белгестәрҙе йәлеп итә.

1967 йылда беҙҙең яҡташыбыҙ, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының эксперты, Һиндостанда нефть һәм газ буйынса кәңәшсе итеп тәғәйенләнә. 1968 йылда уны Өфөгә саҡыралар. Бында ул алты йыл буйы СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Геология институты директоры, бер үк ваҡытта институттың нефть һәм газ лабораторияһы мөдире булып эшләй. Б.М. Йосопов бер төркөм Башҡортостан геологтарының тектоника һәм ер ҡабығының төҙөлөшө өлкәһендәге үҙ ваҡытында бик күп бәхәстәр тыуҙырған эштәрен хуплап ҡаршы ала, яңы йүнәлештәге эҙләнеүҙәрҙең ғилми йәмәғәтселек араһында танылыу табыуына булышлыҡ итә. Тәрән әҙерлекле, киң ҡарашлы ғалим һәм етәксе булараҡ ҙур абруй ҡаҙана. Геология институтының Ғилми советы рәйесе, Башҡорт дәүләт университетының, Башҡортостан нефть ғилми-тикшеренеү һәм проектлау институтының (БашНИПИнефть) Ғилми советтары ағзаһы, Геология һәм геофизика буйынса Республика координацион советы рәйесе була.

Пенсияға сыҡҡандан һуң да Б.М. Йосопов ғилми эштәрен дауам итә, ер ҡабығында, тәрәндә метан сфераһы булыуы тураһындағы идеялар өҫтөндә эшләй. Илдең нефть һәм газ потенциалын һиҙелерлек арттырыуға хеҙмәт итәсәк был ғилми фекер тәү башлап уның тарафынан әйтелә. Ниһайәт, 90-сы йылдар башында ҙур күләмле теоретик хеҙмәтен — шул темаға арналған «Метаносфера» тигән монографияһын баҫтырып сығара.

Татарстанда һәм Башҡортостанда кристаллы нигеҙҙә нефть ятҡылыҡтарының урынлашыу законлыҡтарын өйрәнеүҙә һәм перспективаларын билдәләүҙә профессор Б.М. Йосоповтың ғилми идеялары хәҙер ҙә актуаль булып ҡала. Уның илебеҙ нефть байлыҡтарын табыуға һәм геология фәнен үҫтереүгә индергән фиҙакәр хеҙмәт өлөшө оло баһаға лайыҡ.

Геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Б.М. Йосопов 100-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт, шул иҫәптән 6 монография авторы. Геология фәнен

үҫтереүҙәге уңыштары өсөн ул «Маҡтау Билдәһе» («Знак Почета») (1958), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1964) ордендары һәм миҙалдар менән наградлана. Уға Татарстан АССР-ының атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре (1964), Өфө ҡалаһының Маҡтаулы гражданы тигән исемдәр бирелә.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында профессор Б.М. Йосопов Ҡазанда йәшәй. 1999 йылда 95-се йәшендә вафат була.

* * *

Әҫәрҙәр: Юсупов Б.М., Веселов Г.С. Размещение нефтяных месторождений Татарии. М.: Наука, 1973. 191 бит; Юсупов Б.М., Яруллин К.С., Ищерская М.В. Структура и нефтеносность стратиграфических комплексов Западной Башкирии. М.: Наука, 1974. 163 бит; Юсупов Б.М. Новая концепция проблемы происхождения нефти и природного горючего газа: Препринт доклада. Уфа, 1982. 45 бит.

Әҙәбиәт: Йосопов Б.М. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Р.З. Шакуров. Уфа, 1996; Кавеев И.Х. Жизнь в поиске // Геология. 2002, № 8. 107—111-се биттәр.

Һәҙиә Дәүләтшина
(1905—1954)



Үҙенең ижады һәм тормошо менән быуындарҙан быуындарға тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәткән Һәҙиә Дәүләтшина — башҡорт әҙәбиәтенең һәм башҡорт милләтенең оло ғорурлығы, халҡыбыҙҙың рухи көсөн, ҡеүәтен, яҡты талантын раҫлаусы күркәм шәхестәребеҙҙең береһе. Шәхес культы, тоталитар режим осоронда нахаҡҡа хөкөм ителеп, күп йылдар буйы михнәт һәм ғазап сигеп йәшәргә дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, үтә ауыр шарттарҙа ул башҡорт әҙәбиәтендә иң яҡшы ҡаҙаныштарыбыҙҙың береһе тип баһаланырҙай аҫыл әҫәр — «Ырғыҙ» романын тамамлай һәм шуның менән ил алдында оло ихтирам яулай. Билдәле рус яҙыусыһы Леонид Соболевтың Рәсәй Федерацияһы яҙыусыларының Беренсе съезында һөйләгән докладында (1958) ошо мәшһүр әҫәр хаҡында әйткән һүҙҙәрен бөгөн дә үҙебеҙгә иҫкәрмә итеп ҡарайыҡ. «Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын белмәй тороп, — тине ул, — башҡорт халҡының тормошон аңлау мөмкин түгел». Атаҡлы ҡаҙаҡ яҙыусыһы, Ҡаҙағстан Фәндәр академияһы академигы Сабит Моҡанов Һәҙиә Дәүләтшинаны үҙ ваҡытында Шәреҡ ҡатын-ҡыҙҙары араһынан сыҡҡан беренсе талантлы романсы тип атаны һәм уның, үҙ яҙмышындағы ҙур ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, халыҡ тормошо тураһында монументаль роман тыуҙырыуын ысын мәғәнәһендә ижад батырлығы тип баһаланы. Сабит Моҡанов әйтеүенсә, «шуның менән яҙыусы үҙенә мәңгелек һәйкәл ҡойоп ҡалдырҙы». Ғәҙел һәм хаҡлы баһа. Әйткәндәй, һоҡланғыс ижады һәм бөтөн ғүмере менән үҙ халҡының рухи бейеклеген билдәләгән әҙиптәр тарихта айырыуса хөрмәткә лайыҡ. Һ. Дәүләтшина шәхесе һәм таланты башҡорт донъяһында М. Аҡмулла, Ш. Бабич, М. Буранғол һымаҡ фажиғәле яҙмышҡа дусар ителгән бөйөк әҙиптәр һәм бөйөк шәхестәр менән бер рәттә тора. Уның яҡты исеме халҡыбыҙҙың йөрәк түрендә урын алды.

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 5 мартында (иҫке стиль менән 21 февралендә) Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Имел олоҫоноң (хәҙерге

һамар өлкәһе Оло Чернигов районы) Хәсән ауылында ярлы крәҫтиән Лотфулла Ильясов ғаиләһендә тыуған. Һәҙиә зирәк аҡыллы һәм теремек бала булып үҫә. Үҙенең бала сағын хәтерләгәндә, яҙыусы бәләкәйҙән өләсәһенең тылсымлы әкиәттәрен йотлоғоп тыңлауын айырыуса йылы хистәр менән иҫкә ала. «Ана әле миңә ете-һигеҙ йәш, — тип яҙа Һ. Дәүләтшина «Бәхет ҡошо» тигән әҫәрендә, — мин йыш ҡына әсәйемдең әсәһе — ҡартәсәйем янына барып йөрөйөм. Ул үҙенең туҡалаҡ балсыҡ өйөндә Һуҡа башы кешеләргә ямау ямап, тамаҡ туйҙырырлыҡ эш эшләй... Уның ун биш йәштән бирелгән ирен, баяр имениеһына төшкән өсөн, әллә ни тиклем иптәштәре менән Себергә оҙатҡандар. Унан һуң уны өсөнсө бисәлеккә биргәндәр. Уның унда ҡағынды-һуғындыла ғүмере үткән. Бына ул ҡарсыҡ, яр башында япрағын ҡойоп яңғыҙ ултырған ҡарт өйәңке һымаҡ, бер үҙе зарланып йәшәй...» Бына ошо яңғыҙ ҡалған зарлы ҡарсыҡ ейәненә бәхет ҡошо Һомай тураһында таң ҡалдырырлыҡ яҡты хыялдар менән һуғарылған тылсымлы әкиәт һөйләй. «Һауала, күктең иң бейегендә, нисәмә мең йылдарҙан бирле Һомай ҡош тигән бер бәхет ҡошо йәшәй икән, ти. Ул донъяла бер генә ҡош та осоп менә алмаҫлыҡ бейектә оса икән. Уны бер генә кеше лә үҙ күҙе менән күрә алмай икән... Бына шул ҡоштоң үҙен түгел, күләгәһен генә ерҙә күреп ҡалған кеше лә сикһеҙ бәхетле булып йәшәй ти ҙә баһа». Кескәй Һәҙиә лә, әлбиттә, бәхет ҡошо тураһында хыяллана: «Уны күргем, себешен тотоп яратҡым килә, бик бәхетле булғым, ҡартәсәйемде лә бик бәхетле, ҡайғыһыҙ иткем килә», — ти ул.

Илаһи бәхет ҡошо хаҡындағы хыялдар буласаҡ яҙыусының донъяға ҡарашына, уй-тойғоларына өр-яңы йүнәлеш бирә, уның күңелендә изгелек саҡкыларын тоҡандыра, яҡын кешеләренә ҡарата ярҙамсыл, мәрхәмәтле булыу теләген тыуҙыра. Әйтергә кәрәк, Һ. Дәүләтшина үҙенең был сифаттарына ғүмер буйы тоғро булып ҡала. Шуға күрә лә замандаштары уны, оло рухлы, ҙур талантлы яҙыусы булыуы менән бергә, мөләйем, алсаҡ йөҙлө, сабыр, тыйнаҡ, тыныс тәбиғәтле, һылыуҙан һылыу башҡорт ҡатыны итеп хәтерләйҙәр.

Һ. Дәүләтшина башта ауылдағы ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә уҡый, ә инде Хәсән ауылының Янғол исемле байы балаларын уҡытыу өсөн ҡаланан мөғәллимә алдыртҡас, уның янына йөрөп, дәрестәр ала. Октябрь революцияһынан һуң ауылда асылған яңы мәктәптә уҡыуын дауам итә. Ошо осорҙа ул яҙма әҙәбиәт өлгөләре менән таныша, «Таһир — Зөһрә», «Буҙъегет» һымаҡ төрки телендәге боронғо дастандарҙы, Ғ. Туҡай, М. Ғафури шиғырҙарын мауығып уҡый.

1919 йылда атаһы Лотфулла ағай тиф ауырыуынан донъя ҡуя. Әсәһе Гөлйәүһәр апай, Һәҙиәнән тыш, тағы ла өс бала менән ярҙамсыһыҙ тороп ҡала. «Мин, арала иң өлкәне һәм ул ваҡытта мәктәптең 1-се баҫҡысын тамамлаусы булараҡ, ғаиләнең башлығы һәм ҡараусыһы булырға тейеш инем», — тип яҙа

ул аҙаҡ. 1920 йылда, ун биш кенә йәшлек үҫмер көйөнсә, ошо уҡ Ырғыҙ буйындағы Диңгеҙбай ауылына уҡытыусы итеп ебәрелә. 1921 йылдың аҙағында, был төбәктә аҡтрҙың хәрәкәте көсәйеп китеү сәбәпле, урындағы совет органдарының тәҡдиме менән Һәҙиә, Һамар ҡалаһына китеп, башҡорт-татар педагогия техникумына уҡырға керә. Тиҙҙән, 1922 йылда, партия хеҙмәткәре, буласаҡ яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшингә кейәүгә сыға. Ғ. Дәүләтшинде Мәскәүгә, ә 1923 йылдың көҙөндә Өфөгә күсерәләр. Шул ваҡыттан башлап Дәүләтшиндәр ғаиләһе 1937 йылда аяуһыҙ репрессия ҡорбанына әйләнгәнгә тиклем Өфөлә, 1933—1935 йылдарҙа Баймаҡ районының БАССР-ҙың Х йыллығы исемендәге (хәҙерге Йылайыр) совхозында йәшәй. Ғөбәй Дәүләтшин, күп кенә юғары вазифалар, шул иҫәптән республиканың мәғариф министры бурысын атҡарып, ҙур дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре һәм бер үк ваҡытта башҡорт телен камил белгән талантлы яҙыусы булып танылa. Һәҙиә Дәүләтшина өсөн Өфөгә килеү, бөтәһенән бигерәк, башҡорт әҙәбиәте менән яҡындан танышыу, Д. Юлтый, А. Таһиров, М. Ғафури, Т. Йәнәби, Б. Ишемғол кеүек әҙиптәр менән аралашыу йәһәтенән ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Ошо осорҙа ул, һаулығы насарайыуға ҡарамаҫтан, белем алыуын дауам итә: 1924—1925 йылдарҙа педагогия институты рабфагында уҡый, 1935 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына кереп, уның ике курсын бик яҡшы билдәләр менән тамамлай. 1936 йылда талибә Һ. Дәүләтшина Өфө ҡалаһы Ленин район Советына депутат, Советтарҙың ғәҙәттән тыш Х Бөтөн Башҡортостан съезына делегат итеп һайлана. Иң мөһиме, ул үҙенең белемен арттырыу өҫтөндә эҙмә-эҙле һәм ныҡышмалы эшләй, рус һәм классик әҙәбиәтте уҡый, ижад серҙәренә төшөнөргә, әҙәби оҫталыҡҡа өйрәнергә ынтыла, илһамланып яңынан-яңы әҫәрҙәр яҙа. Һәҙиә Дәүләтшинаның тәүге проза әҫәре — «Һылыуҡай — пионерка» тигән хикәйәһе 1926 йылда «Башҡортостан йәштәре» гәзитенең 12 март һанында донъя күрә. Ә 1930 йылда «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналында баҫылып сыҡҡан «Айбикә» повесы менән яҙыусы ҙур уңыш яулай. Әҫәр, ғөмүмән, бөтөн башҡорт әҙәбиәтенең мөһим бер ҡаҙанышы тип баһалана. Повесть, рус теленә тәржемә ителеп, 1936 йылда Өфөлә айырым китап булып нәшер ителә. «Айбикә» — колхозлашыу осоронда яңы тормош төҙөүҙә алғы сафҡа баҫҡан башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының рухи үҫешен, күмәк, берҙәм хеҙмәтте, шул дәүер башҡорт ауылындағы ижтимағи яңырыу барышын, башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен тәрән һөйөү һәм инаныу тойғоһо менән поэтиклаштырыусы әҫәр. «Айбикә» повесында, — тип яҙҙы әҙәбиәт белгесе Марат Минһажетдинов[1], — яҙыусы үҙ заманының тормошсан мәсьәләләрен күтәреп сыға, уны йәнле образдар, бай һүрәтләү саралары менән хәл итә, замандаштарының образын кәүҙәләндереүгә,

уларҙың рухи-әхлаҡи йөҙөн асыуға, дәүеренең һулышын биреүгә өлгәшә. Әҫәрҙәге тема, мотивтар замандың мөһим процестарына бәйләнгән. Повестың төп көсө тормош дөрөҫлөгөндә».



Һәҙиә Дәүләтшина.
Ҡырым. *Ливадия.*
1936 йыл, 20 май.

1932 йылда, хәҙер инде колхоздарҙың хужалығын нығытыу, М. Минһажетдинов билдәләгәнсә, «яңы ауылдың яңы рухи-әхлаҡ йөҙөн, яңы психологияһын асыу»ҙы маҡсат итеп ҡуйған «Башаҡтар тулҡыны» исемле күләмле хикәйәһен яҙа. Шул уҡ йылда «Ялҡынлы йылдар» тигән хикәйәнән бер киҫәк» тигән иҫкәрмә менән «Партизан» исемле әҫәрен баҫтыра. 1934 йылда Һ. Дәүләтшина башҡорт яҙыусылары делегацияһы составында совет яҙыусыларының I съезында ҡатнаша, унан ҙур рухи күтәренкелек һәм дәрт менән ҡайта. 1935 йылда «Һырға һабағы» исемле һоҡланғыс хикәйәһе баҫыла. Был әҫәр менән ул ҙур проза оҫтаһы булараҡ ныҡлы танылыу таба. «Ялҡынлы йылдар» әҫәре иһә артабан яҙыусының атаҡлы «Ырғыҙ» романы булараҡ киң эпик полотно итеп үҫтерелә. Был хаҡта Һ. Дәүләтшина үҙе 1939 йылдың декабрендә: «Октябрҙең XX йыллығына «Ялҡынлы йылдар» исемле роман әҙерләнем», — тип яҙа. Әммә, үкенескә ҡаршы, тап ана шул Октябрҙең XX йыллығын башҡорт халҡының бик күп аҫыл заттарына ҡара ҡайғылар эсендә ҡаршы алырға тура килә. 1937 йылдың 20 ноябрендә яҙыусыны, йәнәһе, Ватанға хыянат итеүсенең ғаилә ағзаһы тип ғәйепләп, ҡулға алалар һәм НКВД Айырым кәңәшмәһе тарафынан 5 йылға иркенән мәхрүм итәләр. (Бынан бер нисә ай элек Ғөбәй Дәүләтшин ҡулға алынған була. 1938 йылда ул нахаҡҡа үлем язаһына хөкөм ителә һәм атып үлтерелә.) Һ. Дәүләтшина 1942 йылдың октябренә тиклем Мордовияның Темников лагерҙарында ултырып сыға. Башына төшкән был бәхетһеҙлекте ул үҙе «көн үҙәгендәге төн ҡараһы», «яуыз

яҙмыш» тип атай. Башҡортостанға ҡайтҡас, яҙыусы башта Өфөлә ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтына төнгө ҡарауылсы булып урынлаша. Ошо ваҡытта ул 1937 йылда ҡулға алыныу арҡаһында бүленеп ҡалған романы өҫтөндә эшен дауам итә. Яҙыусы ижад өсөн ғәҙәттә ҡарауылда үткәргән төнгө сәғәттәрен файҙалана. Әммә, Өфөлә йәшәргә рөхсәт ителмәгәнлектән, уға Бөрө ҡалаһына күсеп китергә тура килә. Артабанғы тормошо ошо Бөрө ҡалаһы һәм бер аҙ ваҡыт Силәбе өлкәһендәге Һилиә (Сулея) станцияһы менән бәйле була. 1942—1952 йылдарҙа Һ. Дәүләтшина, һаулығының көндән-көн ҡаҡшай барыуына ҡарамаҫтан, аҡтыҡ көсөн биреп, «Ырғыҙ буйҙарында» романының бер нисә вариантын яҙа. Ниһайәт, төрмәлә, лагерҙа заяға үткәргән биш йыл ғүмерҙе иҫәпләмәгәндә лә, 15 йылға һуҙылған был бөйөк хеҙмәт — хәҙер ул «Ырғыҙ» тип атала — тамамлана. Ләкин, Башҡортостан Яҙыусылар союзының, ул саҡтағы «Әҙәби Башҡортостан» журналының ишек тупһаларын күпме генә тапаһа ла, өлкән вазифалы әҙәбиәт чиновниктарына инәлеп-ялбарып мөрәжәғәт итһә лә, бөйөк әҙибәгә үҙенең иң ҡәҙерле әҫәренең һис юғы бер генә бүлегенең дә баҫылып сыҡҡанын күрергә насип булмай. Һәҙиә Дәүләтшина 1954 йылдың 5 декабрендә, 50-се йәшендә, Бөрө ҡалаһында үпкә ауырыуынан вафат булды. «Ырғыҙ» романын нәшер итеүгә уның рухи ҡорҙашы, яҡташы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти әҙерләне. Әҫәр тәү башлап 1957 йылда донъя күрҙе, артабан ул тиҙ арала рус теленә, шулай уҡ башҡа телдәргә тәржемә ителде, башҡорт уҡыусыларының иң яратҡан әҫәренә әйләнде, бөтөн ил күләмендә киң танылыу яуланы. 1967 йылда Һәҙиә Дәүләтшинаға «Ырғыҙ» романы өсөн (үлгәндән һуң) Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелде. Ә 2005 йылда Башҡортостан Республикаһы Президенты балалар һәм үҫмерҙәргә тәғәйенләнгән иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге Дәүләт премияһын биреү тураһында указ ҡабул итте.

Һ. Дәүләтшина тураһындағы иҫтәлектәрҙең береһендә мәшһүр яҙыусының ошондай һүҙҙәре килтерелә: «Мине яҡшыраҡ белгегеҙ килһә, «Ырғыҙ» романымды уҡығыҙ. Минең бөтөн йәнем, саф йөрәгем шул романда». Эйе, башҡорт халҡының изге һәм саф күңелле, героик характерлы ҡыҙы, ысын-ысынында халыҡ яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаның йәне лә, йөрәк тибеше лә — уның һөҡланғыс әҫәрҙәрендә, халыҡ тормошоноң һәм яҙмышының икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен айҡаған илһамлы «Ырғыҙ» романында.

* * *

[1] Минһажетдинов М. Һәҙиә Дәүләтшина: Тормошо һәм ижады. Өфө, 1966.

* * *

Әҙәбиәт: Минһажетдинов М. Ступени жизни народной // Дружба народов. 1962, № 5. 248—251-се биттәр; Минһажетдинов М. Һәҙиә Дәүләтшина. Тормошо һәм ижады. Өфө, 1966; шул уҡ. Һәҙиә Дәүләтшина. Тормошо һәм ижады // Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. Өфө: Китап, 1995. 14—108-се биттәр. Вахитов Ә. Таланттың асылы. Өфө, 1972. 137—244-се биттәр; Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1983; Шафиков Г. Виновной себя не признала (Дело Хадии Давлетшиной) // Крючья под ребро. Уфа, 1993. 377—391-се биттәр; Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 5-се том. Өфө, 1994; Башҡорт әҙәбиәте. 10-сы синыф өсөн уҡыу китабы. Өфө, 1995; Давлетшина Х.Л. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Ғабдулла Амантай
(1907—1938)



Шағир, ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре, оло талант эйәһе Ғабдулла Амантай Башҡортостандың 20—30-сы йылдарҙағы әҙәбиәт, мәҙәниәт, фән һәм йәмғиәт тормошонда ғәйәт ҙур урын алған шәхестәрҙең береһе. Уның ғүмере һәм ижад юлы бик ҡыҫҡа булды: 1937 йылдың октябрендә, ялған донос буйынса ҡулға алынған саҡта, уға ни бары 30 йәш була. Ә инде 1938 йылдың июлендә Амантайҙы, йәнә шул уҡ ялған ғәйеп тағып, үлем язаһына хөкөм итәләр. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә лә ул башҡорт халҡының рухи донъяһында юйылмаҫ яҡты эҙ ҡалдыра.

Буласаҡ шағир һәм ғалим Ғабдулла Сәхипгәрәй улы Амантаев (Табулдин) 1907 йылдың 23 декабрендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Үрге Ҡунаҡбай ауылында алдынғы ҡарашлы ярлы хәлфә ғаиләһендә тыуған. Сәхипгәрәй Табулдин ғәйәт киң белемле, уҡымышлы кеше була. Бигерәк тә атаһының йоғонтоһонда Ғабдуллала кесе йәштән аң-белемгә ынтылыш, китап менән ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уяна. Алты йәштә ул уҡырға-яҙырға өйрәнә, ун икелә рус телен үҙләштерә, күп кенә шиғырҙарҙы яттан һөйләй торған була. Ун өс йәшендә ул комсомолға инә, ә 1921 йылда инде комсомолдың Туҡ-Соран кантон комитетының сәркәтибе итеп һайлана. Шул уҡ йылдың июнь айында «Башҡортостан» гәзитендә уның «Беҙ» тигән тәүге шиғыры баҫылып сыға.

Ил өсөн сыҡтыҡ хәҙер беҙ,
Йәш күңелдәр, ашҡынып,
Ярлы бәхете, йәш күңелдәр
Донъяһына талпынып.

Беҙ ҡаҙарбыҙ ал әләмде

Ныҡ, батыр, йәш ҡул менән.
Елберҙәр ул Ер шарында
Ал-ҡыҙыллы нур менән.

Ҡулына тәүләп ҡәләм алған дәртле йәш йөрәкле ил улының тормошҡа ҡарашы бына ниндәй булған. Әйтергә кәрәк, был ҡараш, был позиция, шул дәүергә хас юғары пафос, революция романтикаһы, илдә үҙгәртеп ҡороуҙарға инанғанлыҡ һәм тоғролоҡ ул быуын комсомол шағирҙары ижадының иң мөһим һыҙаттарын билдәләй. Ғ. Амантайҙың поэтик ижады, ғилми-әҙәби һәм ижтимағи эшмәкәрлеге, бөтөн тормош юлы үҙенең төп йөкмәткеһе менән шул замандың Ғ. Сәләм, М. Хәй һымаҡ ялҡынлы комсомол шағирҙарының яҙмышы менән уртаҡ.

Ғәжәп ынтылышлы, бик һирәк кешеләрҙә осрай торған ярһыу һәм емешле ижад юлы үтә Ғабдулла Амантай. Ғүмеренең ҡайһы ғына дәүерен алма, ул һәр саҡ алғы сафта, ваҡиғаларҙың иң уртаһында, ул халыҡ менән һәм халыҡ араһында. Өлкән журналист Ҡасим Аҙнабаев иҫтәлектәренән белеүебеҙсә, 1921 йылда, Туҡ-Соранда комсомолдың кантком сәркәтибе булған осорҙа, мәҫәлән, Амантай ҡатнашлығында, уның төп вазифаһынан тыш, тағы ла бына ниҙәр эшләнә: унда «Ярлы еле» тигән гәзит сығаралар, ул ЧОН отрядтары ағзаһы, үҙешмәкәрлек түңәрәктәрендә ҡатнаша, спектаклдәр ҡуя, бик оҫта бейей. (14 йәшлек Ғабдулланың шул саҡта, өҫтөнә шинель, башына буденовка кейеп, наган тағып төшкән фотоһы ла һаҡланған).



Ғ. Амантай С. Агиш менән.
1923 йыл.

1921 йылдың аҙағында Ғабдулла Амантай, Сәғит Агиш менән бергә Ырымбурға барып, Каруанһарайҙағы Башҡорт халыҡ мәғарифы институтына

(артабан — Башҡорт педагогия техникумы) уҡырға инә. Унда уҡырға урынлашҡас та, Амантай ҡаланың бөтөн интеллигенция вәкилдәре менән танышып сыға, тиҙҙән уны комсомолдың губерна комитетының башҡорт-татар-ҡаҙаҡ йәштәре менән эшләү бүлеге мөдире итеп ҡуялар. 1924 йылда Амантай комсомолдың Башҡортостан өлкә комитетына эшкә саҡырыла. Шул уҡ йылда ВЛКСМ-дың Арғаяш кантон комитеты сәркәтибе итеп һайлана. Арғаяшта ул ни бары йылдан артығыраҡ эшләй. Әммә шул ваҡыт эсендә генә лә кантон йәштәре араһында ҙур абруй ҡаҙана. Был йәһәттән бер генә миҫал: Ғ. Сәләмдең ағаһы Лоҡман Ғәлимов хәтерләүенсә, йәштәр үҙҙәрен, етәкселәре менән ғорурланып, Амантай комсомолдары тип йөрөтәләр.



Ғ. Амантай — комсомолдың Ырымбур губерна комитетының башҡорт-татар-ҡаҙаҡ йәштәре менән эшләү бүлеге мөдире, Муса Йәлил — уның урынбаҫары. 1921—1922 йй.

«Амантайҙың һүҙе һәр ерҙә үтә торғайны», — тип һөйләй Ҡасим Аҙнабаев. Шуның менән бергә, Амантай бик тиҙ арала киң эрудициялы, тәрән фекерле ғалим һәм әҙип булып таныла. 1925 йылдың урталарынан алып 1928 йылға тиклем ул Өфөлә күп төрлө яуаплы вазифаларҙы башҡара: ВЛКСМ өлкә комитетының бүлек мөдире, бюро ағзаһы, артабан «Йәш юкһыл», унан һуң «Башҡортостан йәштәре» гәзиттәренең мөхәррире була. Ошо уҡ осорҙа, 1926 йылда, партия сафына алына.

1928—1931 йылдарҙа ул — Ленинград Философия һәм лингвистика институтының көнсығыш телдәре факультеты талибы. Амантай бында йәнә бер талантлы йәш башҡорт шағиры Мөхтәр Байымов менән бергә уҡый. Улар икеһе лә факультеттың йәмәғәтселек эшендә ҡатнашалар, партбюро ағзалары итеп һайланалар. Институтты тамамлағас, Амантай ҙа, Байымов та аспирантурала ҡалдырыла. 1932 йылда Ғ. Амантай, беҙҙең хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтын (ул ваҡытта — Башҡортостан милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү

институты) ойоштороу эштәре айҡанлы, командировка алып, бер нисә айға Өфөгә ҡайта, ә инде 1933 йылда аспирантураны тамамлағас, уны ошо институттың директоры итеп тәғәйенләйҙәр һәм ул 1937 йылға тиклем ҙур дәрт, илһам менән ошонда эшләй. Хәйер, бер үк ваҡытта йәнә Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт әҙәбиәте кафедраһы доценты, Башҡортостан Яҙыусылар союзы етәкселәренең береһе булараҡ та яуаплы эштәр атҡарырға өлгөрә. Партияның Башҡортостан өлкә комитеты ағзаһы итеп һайлана.

Ғ. Амантайҙың күп яҡлы ижади һәм ғилми мираҫы, үкенескә ҡаршы, әлегәсә тейешенсә өйрәнелмәгән. Әммә был мираҫтың беҙгә билдәле өлөшө генә лә уны талантлы һәм киң ҡоласлы филолог-ғалим, үҙенсәлекле шағир булараҡ күҙ алдына баҫтыра. Уның шиғриәте төп ике йүнәлештән тора. Беренсеһе — Октябрь ҡаҙаныштарын, яңы тормош төҙөлөшөн, комсомол йәштәр романтикаһын данлаусы шиғырҙар һәм поэмалар. Икенсеһе — кескәйҙәр өсөн яҙылған шиғырҙар һәм әкиәттәр. Ғ. Амантайҙың поэтик оҫталығы нәк бына шул балалар шиғриәте өлкәһендә балҡып асылып китә. «Бәпес уйнатҡанда», «Сыйырсыҡ» һымаҡ шиғырҙары бик тә халыҡсан. Бына «Бәпес уйнатҡанда» шиғырында ниндәй йырлап торған юлдар бар:

Һәтес-һәтес-һәтес тә!
Бигерәк матур бәпес тә!
Кем ҡарамаҫ, кем һоҡланмаҫ
Бындай матур бәпескә?!
Һуп-һуп, тағы ла!
Ҡара, ниндәй ҡағына.
Осҡан ҡоштай талпына ла,
Юҡ шул ҡанатҡай ғына.
Ҡара-ҡара, атаһы!
Ҡара, ниндәй һикерә!
Талпынып та йылмайып,
Һөймәҫ ерҙән һөйҙөрә.

«Күгәрсен йыры», «Сыйырсыҡ» һымаҡ шиғырҙарҙа ла әллә күпме аллитерациялар, һығылмалылыҡ, музыкаллек, тас балаларса һүҙ уйнатыуҙар, балҡып торған рифмалар осрай. «Сыйырсыҡ»та, мәҫәлән:

Әһем-әһем-әһемсек,
Ҡайтып етте сыйырсыҡ.
Матур итеп өҙөлөп һайрай,

Ваһап, тиҙерәк йүгереп сыҡ!
Ҡыйыҡҡайын ҡыйғаслап,
Яһап ҡуйҙым оясыҡ.
Сыйырсығым, матурсығым,
Ҡунаҡ булып инеп сыҡ.

Йәки:

Сыйыр-сыйыр сыйырсыҡ
Сиҙәм араларында.
Сырлай-сырлай емдәр йыя
Сибәр балаларына, —

кеүек юлдарҙы кинәнес менән уҡыйбыҙ. Ғ. Амантайҙың кескәйҙәр өсөн яҙылған «Йомаҡтар» шәлкеме лә халыҡсан һәм ҡабатланмаҫ күренеш. Йомаҡтар дүрт юллыҡ төп өлөштән һәм ике юллыҡ һорауҙан тора. Бына шунан бер миҫал:

Өлкөм-өлкөм төрөлөп,
Матур булып күренеп,
Үҫә, күҙҙе ҡыҙҙырып,
Ҡыҙыл булып бөрөлөп.
Йә, һин уйлап тап әле,
Нимә булыр яуабы? —

рәүешендә балаға, һорау биреп, шул уҡ урында уйлап табырға ҡушып та ҡуя.

Амантайҙың тормошон һәм ижадын өйрәнеүҙә күп хеҙмәт күрһәткән яҙыусы һәм ғалим Берйән Байымдың: «Ғәмәлдә ул башҡорт балалар әҙәбиәтенә нигеҙ һалды. Уға тиклем беҙҙә балалар өсөн махсус яҙған әҙиптәр юҡ ине», — тигән һүҙҙәрендә лә дөрөҫлөк бар. Ә иң мөһиме: Ғабдулла Амантайҙың 20-се йылдар аҙағында риторикаға өҫтөнлөк бирелеп яҙылған был шиғырҙары беҙҙең дәүерҙә лә аһәңле яңғырай, улар ысын-ысындан халыҡсан һәм талантлы шиғриәт өлгөләре тип баһаланырға хаҡлы.

Ғабдулла Амантай башҡорт фольклористикаһы, әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт белеме өлкәһендә хәҙерге көн өсөн дә ғәйәт ҡиммәтле хеҙмәттәр ҡалдырған. Ул туған телде нескә белеүсе, төплө теоретик әҙерлекле филолог-ғалим булараҡ абруй ҡаҙана. СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, профессор Н.К. Дмитриев уны, Ғабдулла Ғисмәти, Мәжит Билалов менән йәнәш, шул заман башҡорт лингвистарының иң күренеклеләре рәтенә ҡуйған.

Әҙиптең мираҫында түбәндәге хеҙмәттәр айырыуса мөһим. Беренсенән, уның башҡорт фольклорын өйрәнеүгә арналған «Нимә ул фольклор? Ни өсөн беҙ уны өйрәнәбеҙ?» тигән мәҡәләләр циклында ошондай мәсьәләләр ҡуйыла: фольклорҙың синфи характеры, әһәмиәте, фольклор һәм әҙәби тел, фольклор һәм художестволы әҙәбиәт, башҡорт фольклорындағы жанрҙар, башҡорт әкиәттәре, башҡорт мәҡәлдәре һ.б. Фольклорҙы өйрәнеүҙең иң мөһим принциптары һәм уны йыйыу өсөн тотош программа бирелгән бында. Быларҙан тыш, ғалимдың ҡулъяҙмала ун биш табаҡ күләмендә «Башҡорт фольклоры», шулай уҡ башҡа тикшеренеүҙәре булғанлығы хаҡында мәғлүмәт бар. Дөйөм алғанда, ул хеҙмәттәрҙә башҡорт совет фольклористикаһының ғилми нигеҙҙәре һалынған.

Икенсенән, Ғ. Амантайҙың әҙәбиәт белеменә индергән өлөшө бөтәһенән дә бигерәк «Милли әҙәбиәтте билдәләү принциптары» тигән мәҡәлә менән баһалана. Был мәҡәләлә башҡорт әҙәбиәтенең боронғо дәүерҙәрҙән алып совет осорона тиклемге тулы тарихын өйрәнеү эшенең бик күп әһәмиәтле теоретик положениелары әйтеп бирелгән. Ғ. Амантайҙың башҡорт яҙма әҙәби теле тарихында элекке төрки әҙәби тел һәм шул нигеҙҙә формалашҡан хәҙерге милли әҙәби тел дәүерҙәрен күрһәтеүе лә фән өсөн ҡиммәтле һәм көнүҙәк дәлил.

Ҡыҫҡа ғүмер эсендә бик күпте эшләп өлгөрә, янып-ялҡынланып ижад итә, Тыуған илгә һәм туған халыҡҡа тоғро хеҙмәте менән йөрәктәрҙә яҡты эҙ ҡалдыра әҙип һәм ғалим Ғабдулла Амантай.

* * *

Әҫәрҙәр: Милли әҙәбиәтте билдәләү принциптары // Октябрь. 1934, № 4. 1—7-се биттәр; Башҡорт мәҡәлдәре. Өфө, 1936; Йомаҡтар. Өфө, 1936; Һайланма әҫәрҙәр. (Ғәли Зөлҡәрнәевтең баш һүҙе.) Өфө, 1960; Стихи // Поэты Башкирии: Антология. Кн. 1-я. Уфа, 1980.

Әҙәбиәт: Ғабдулла Амантай // Совет Башҡортостаны яҙыусылары: Биобиблиографик белешмә. Өфө, 1988; Амантай Габдулла // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Зәйнәб Биишева
(1908—1996)



«Төн. Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып, йымылдап торған аяҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыкта һандуғастар сутылдаша. Тирәк башында кәкүк саҡыра. Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы, үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә, бер өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға...»

Ошондай шиғри картина менән башланып китә Зәйнәб Биишеваның «Яҡтыға» исемле трилогияһы. Иң элек ана шул гүзәл яҙғы төндәрҙең береһе, Оло Эйек буйында ултырған башҡорт ауылы, бәләкәс кенә, ләкин зирәк аҡыллы, яҡты күңелле Емеш һәм уның ата-әсәһе, туғандары менән танышып, беҙ инде артабан ҙур тарихи ваҡиғалар эсенә, революция һәм граждандар һуғышы дәүерендә халҡыбыҙҙың яҙмышын һәм көрәшен, ҙур уй-хыялдарын һәм ынтылыштарын һүрәтләгән образдар донъяһына инеп китәбеҙ. «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш» тигән романдарҙы берләштереүсе был киң ҡоласлы трилогияны кемдәр генә белмәй ҙә, кемдәр генә яратып уҡымай! Был әҫәрҙәр, хәҙер күп тапҡырҙар башҡортса һәм русса ҙур тираждар менән баҫылып сығып, Бөтөн Рәсәй китап һөйөүселәренең иғтибарын һәм ихтирамын яуланы. Трилогия ҙур талант эйәһе Зәйнәб Биишеваның башҡорт милли прозаһын үҫтереүгә индергән ҡиммәтле ижад емеше, ижад ҡаҙанышы булды.

Эйе, «Яҡтыға» — әҙәбиәтебеҙҙең ысын мәғәнәһендә күркәм бер ҡаҙанышы. Ләкин яҙыусының алты тиҫтә йылдан ашыу дауам иткән ижад юлы бынан башҡа тағы ла әллә күпме илһамлы артылыштар менән билдәләнгән. Сөнки иң элек үҙенең эпик романдары менән танылһа ла, Зәйнәб Биишева асылда киң диапазонлы, киң һулышлы әҙибә: прозаик, драматург, шағирә. Зәйнәб Биишева һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы бик йыш ишетәбеҙ. Уның шиғырҙары һәм шиғри

драмалары «Әҫәрҙәр»енең айырым бер томының төп өлөшө булараҡ донъя күрҙе. «Серле йөҙөк», «Гөлбәҙәр», «Тылсымлы ҡурай» тигән драма әҫәрҙәре үҙебеҙҙә лә, республиканан ситтә лә театр сәхнәләрендә уңыш менән барҙы.

Зәйнәб Биишева проза жанрының бөтөн төрҙәрендә лә күп һәм уңышлы ижад итте, ысын мәғәнәһендә классик өлгөләр биреүгә өлгәште. Ижадының тәүге осоронда ул хикәйәләр, әкиәттәр, нәҫерҙәр, очерктар яҙа һәм даими рәүештә матбуғатта көнүҙәк темаларға публицистик мәҡәләләр менән сығыш яһай.

Уның ижади үҫешендә повестар һәм хикәйәттәр ҙә шаҡтай ҙур урын ала. Илленсе йылдар уртаһында донъяға сыҡҡан «Дуҫ булайыҡ» повесы менән яҙыусы үҙен башҡорт балалар әҙәбиәтенең күренекле оҫтаһы итеп таныта. Алтмышынсы йылдар башында Зәйнәб Биишева, мөһим әхлаҡ проблемаларына мөрәжәғәт итеп, бер-бер артлы «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар...», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?» исемле хикәйә һәм повестар ижад итә. Был әҫәрҙәр үҙҙәренең социаль үткерлеге, әхлаҡ һәм тәрбиә мәсьәләләренең етди ҡуйылышы менән шул осор башҡорт прозаһы үҫешенә ғәйәт ҙур йоғонто яһаны.

Бөйөк яҙыусының ижад һандығында, күләм яғынан бигүк ҙур булмаһа ла, идея-художество ҡиммәте менән айырылып торған тылсымлы һәм ғәжәп фәһемле әҫәрҙәр — «Һөнәрсе менән Өйрәнсек», «Мөхәббәт һәм нәфрәт» исемле хикәйәттәр бар. Боронғо башҡорт тормошонан алынған тетрәндергес мөхәббәт фажиғәһе артабан «Зөлхизә» исемле драматик поэмаға нигеҙ итеп алынған. Был әҫәрҙең эмоциональ-поэтик йөкмәткеһе бөгөнгө уҡыусыны тәрән тәьҫирләндерә, уның күңелендә юғары зауыҡлы тойғолар тәрбиәләй.

Зәйнәб Биишева — ысын мәғәнәһендә халыҡ яҙыусыһы. Уның ҙур һәм күп яҡлы ижады үҙе генә лә илебеҙҙә башҡорт милли һүҙ сәнғәтенең күркәм бер каүҙәләнеше тип иҫәпләнергә хаҡлы. Сөнки ул үҙе лә — быуаттар буйы азатлыҡ өсөн йән аямай көрәшеп, 1917—1919 йылдарҙа милли автономиялы булған һәм бөтә һәләттәрен, таланттарын үҫтереүгә киң мөмкинселектәр алған башҡорт халҡының тоғро күңелле, яҡты фекерле бер ҡыҙы. Шуның өсөн дә уның барлыҡ ижады халҡыбыҙҙың рухи бөйөклөгөн раҫлауға йүнәлдерелгән.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева оҙон һәм фәһемле, яҡты һәм емешле ижад ғүмере үткән оло талант эйәһе ине. Ул 1908 йылдың 2 (яңы стиль менән 15) ғинуарында элекке Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Бөрйән-Ҡыпсаҡ олоҫо (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Туйөмбәт ауылында алтынсы бала булып донъяға килә. Кесе йәштән әсәһеҙ ҡалып, бала сағында бик күп михнәттәр күрә. 1919 йылдың көҙөндә, әҙибәнең үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, оҙаҡ ваҡыт һуҙылып килгән үпкә ауырыуынан атаһы ла

түшәккә йығыла һәм оҙаҡламай ауырыу уны ҡара ер ҡуйынына алып китә. Шул сәбәпле буласаҡ яҙыусы 1924 йылдың йәйендә бары тик ун алты йәшендә генә ауыл мәктәбенең дүртенсе синыфын тамамлай. Зирәк Зәйнәпте шул уҡ йылда олоҫ үҙәге Ташлы ауылына ике айлыҡ әҙерлек курсына уҡырға ебәрәләр. Унда техникумдарға инеү өсөн әҙерлек үткән үҫмерҙәрҙең бер төркөмөн Өфөгә, Ленин мәктәбенә алып барып урынлаштыралар, икенсе төркөм иһә Ырымбурға, Башҡорт халыҡ йорто Каруанһарайҙа яңы асылған Башҡорт педагогия техникумына барырға тейеш була. Зәйнәб Биишева икенсе төркөмгә эләгә.

«Техникум ике әҙерлек курсы һәм дүрт төп курстан тора, йәғни алты йыллыҡ ине, — тип хәтерләй аҙаҡ яҙыусы. — 1924/25 уҡыу йылының көҙөндә мин дә ошо техникумға барып индем. Мине башта беренсе әҙерлек курсына алдылар. Бер-ике ай уҡығас, икенсе әҙерлек курсына күсерҙеләр». Техникум, төплө белем, һәйбәт тәрбиә биреү менән бергә, ижади атмосфера, юғары маҡсаттарға инанғанлыҡ тойғоһо менән айырылып тора. Өҫтәүенә, ул ваҡытта уҡ бер быуатҡа яҡын тарихы булған данлы Каруанһарай бинаһында уҡыу үҙе генә лә ни тора. Йәнә килеп, шанлы 1917 йылда башҡорт халҡының иң тәүге ҡоролтайҙары ла нәҡ ошо тарихи бинала үткән, ошонда, өсөнсө ҡоролтайҙа башҡорт дәүләтселеге — Башҡорт автономияһы иғлан ителгән. Уҡытыусылар араһында Ырымбурҙа яңы булып үткән шул тарихи ваҡиғаларҙы ишетеп-күреп йөрөгән, Әхмәтзәки Вәлиди идеяларына теләктәш патриотик рухлы, заманының юғары мәҙәниәтле педагогтары ла була. «Ә инде әҙәбиәт дәресе минең өсөн оло байрам ине, — тип яҙа аҙаҡ Зәйнәб Абдулла ҡыҙы. — Беҙҙең әҙәбиәт уҡытыусыһы Ғәлим Айҙаров ысын мәғәнәһе менән үҙ эшенең оҫтаһы ине. Уның дәресендә һалҡын һәм ғәмһеҙ йөрәк менән ултырырға һис тә мөмкин түгел... Уның дәресе, икһеҙ-сикһеҙ гүзәл даръя булып, беҙҙең йәш йөрәктәрҙе эшкә, хеҙмәткә ярһыта, ил өсөн, халыҡ өсөн намыҫлы хеҙмәткә дәртләндерә, Тыуған илгә ҡарата йөрәктәрҙә сикһеҙ мөхәббәт тәрбиәләй ине». Эйе, Каруанһарай һәм шунда урынлашҡан Башҡорт педагогия техникумы Зәйнәб Биишеваға, шул йылдарҙа унда уҡыған бик күп башҡорт йәштәренә ысын мәғәнәһендә ҡанат ҡуя, уларҙы тормошҡа, ижадҡа, хеҙмәткә әҙерләп сығара. Сәғит Агиш, Баязит Бикбай, Ғәйнан Хәйри, Сабит Суфиянов (Әбүс), Төхфәт Морат, Ҡасим Аҙнабаев, Сәғит Әлибаев, Таңһылыу Рәшитова һымаҡ оло шәхестәргә нәҡ бына ошо Каруанһарай ҡанат ҡуя.

1929 йылда техникумды тамамлағас, З. Биишева: «Үҙемде эшкә иң алыҫҡа ебәреүегеҙҙе һорайым», — тип ғариза яҙып, Баймаҡ районы Билал ауылына эшкә китә. Ошо төпкөл ерҙәрҙә — Билалда, Темәстә ун ике йыл балалар уҡыта, йәмәғәт тормошонда еңһыҙғанып ҡатнаша, комсомолдың Темәс ойошмаһы

сәркәтибе итеп һайлана. 1930 йылда «Октябрь» журналында уның «Гөрләүектәр араһында» тигән хикәйәһе баҫылып сыға. 1929 йылда Билалда уҡытҡан саҡта ул аҙаҡ башҡорт әҙәбиәтендә классика булып таныласаҡ «Яҡтыға» трилогияһының тәүге әҫәре — «Кәмһетелгәндәр» романын яҙа башлай. (Был китап тәү башлап 1958 йылда баҫылып сыға һәм донъя күреү менән үк әҙәбиәтебеҙҙең ҙур ҡаҙанышы булараҡ оло баһаға лайыҡ була.) 1931 йылда Зәйнәб Биишева «Пионер» журналының мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Артабан ул бер аҙ ваҡыт Башҡортостан китап нәшриәтенең дәреслектәр бүлеге мөдире булып эшләй. 1934 йылда З. Биишева, был юлы инде ғаиләһе менән бергә, яңынан алыҫ районға китә. Йыл ярым самаһы ул Мәсетле МТС-ында «Ударник» гәзитенең, артабан, 1938 йылға тиклем, Салауат районы гәзитенең әҙәби хеҙмәткәре була. 1939 йылда Өфөгә ҡайтып, ун ике йыл «Ҡыҙыл Башҡортостан» республика гәзитенең әҙәби хеҙмәткәре, Башҡортостан радио комитетының әҙәби редакция мөхәррире, Башҡортостан китап нәшриәтенең балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире вазифаларын башҡара. 1951 йылдан әҙибә тулыһынса ижади эшкә күсә.

З. Биишеваның «Партизан малай» тигән тәүге китабы 1942 йылда нәшер ителә. Шул ваҡыттан һуң ул поэзия, проза, драматургия жанрҙарында бер-бер артлы күп һанлы әҫәрҙәрен яҙа, очерктар һәм публицистика өлкәһендә эше алға китә, рус әҙәбиәтенең классик әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итә. «Яҡтыға» трилогияһы» («Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш» романдары) иң яратып уҡылған әҫәрҙәргә әйләнә, был сериал яҙыусыға Рәсәй һәм донъя күләмендә оло дан һәм шөһрәт килтерә. Трилогия башҡорт һәм рус телдәрендә ҙур тираждар менән ҡабат-ҡабат баҫылып сыҡты. Яҙыусының һайланма әҫәрҙәре үҙе иҫән саҡта уҡ әле ҡат-ҡат донъя күрҙе.

1995-1996 йылдарҙа уның биш томдан торасаҡ яңы баҫмаһының тәүге ике китабы уҡыусылар ҡулына барып етте.

1968 йылда Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр» һәм «Уяныу» («Оло Эйек буйында») романдары республикабыҙҙың Салаут Юлаев исемендәге премияһы менән билдәләнде. 1990 йылда уға, лайыҡлыларҙың лайыҡлыһы булараҡ, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән юғары исем бирелде.

Зәйнәб Биишева, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ, бер нисә мәртәбә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының ағзаһы, Рәсәй Федерацияһы һәм СССР яҙыусыларының съездарына делегат итеп һайланды. Әҙәбиәт өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн ул өс тапҡыр «Почет Билдәһе» ордены, миҙалдар, Башҡорт АССР-ы һәм РСФСР Юғары Советтары Президиумдарының Почет грамоталары менән бүләкләнде.

Зәйнәб апай менән миңә заманында күп тапҡырҙар осрашырға, күңел биреп аралашырға, интервьюлар алырға насип булды. Ә инде 1971 йылда Мәскәүҙә

аспирантурала уҡыған саҡта миңә, Рәсәйҙең баш ҡалаһында яҡташтар ҡоро рәйесе булараҡ, ул саҡтағы СССР-ҙың Үҙәк дәүләт тарих китапханаһында Зәйнәб Биишеваның ижадына арналған уҡыусылар конференцияһын ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә ҡатнашырға тура килде. Башҡорт яҙыусыһының ижады буйынса Мәскәүҙә ундай саралар бик һирәк ваҡиға булһа кәрәк. Унда Зәйнәб апай үҙе лә ҡатнашты, баш ҡалала йәшәүсе улдары Юлай һәм Тельман Әминевтәр ойоштороу эштәренең уртаһында булдылар. Мәскәүҙә уҡыусы студенттарыбыҙ, аспиранттарыбыҙ, унда йәшәүсе яҡташтар өсөн дә был сара онотолмаҫлыҡ бер ваҡиғаға әйләнде. 1970 йылдарҙың тынсыу атмосфераһында, башҡорт әҙәбиәтендә ғәҙелһеҙлектәр йәшәп яткан дәүерҙә, оло яҙыусы ижадын ошо рәүешле баһалау акцияһы булараҡ ул конференция З. Биишеваның үҙе өсөн дә, әлбиттә, ғәйәт ҙур ҡыуаныс һәм йыуаныс булды.

1983 йылдың ғинуар башында, яҙыусыға 75 йәш тулған көндәрҙә, «Башҡортостан пионеры» (хәҙерге «Йәншишмә») гәзите мөхәрририәтенең үтенесе буйынса, Зәйнәб Абдулла ҡыҙы менән күрешеп әңгәмәләшеп, тағы бер интервью баҫтырып сығарҙым. Интервьюла яҙыусының тере һыны, уның һөйләгән һүҙҙәренең интонацияһы аҙ ғына булһа ла һаҡланып ҡалған булһа кәрәк. Шуға күрә был очеркты шул әңгәмә менән тамамламаҡсымын. Бына ул һөйләшеү:

— Зәйнәб апай! Һеҙҙең бала сағығыҙ тураһында беҙ, китаптарығыҙҙан уҡып, аҙмы-күпме беләбеҙ белеүен. Ләкин бала саҡ хәтирәләре мәңге шиңмәй торған шишмә һымаҡ бит. Шуға күрә ул хаҡта тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп үтһәк, һәйбәт булыр ине.

— Минең бала сағым хаҡында һорайһығыҙ. Уның хаҡында тотош бер әҫәр ҙә яҙып була. «Бала сағым бик ауыр шарттарҙа үтте», тип бер генә һөйләм менән дә сикләнергә мөмкин. Ләкин мин ауырлыҡһыҙ тормошто, иркәләнеп, осоноп йәшәүҙе белмәгәс, асылда сикһеҙ ауыр шарттарҙа үткән бала сағым, ғөмүмән, тормош юлым хаҡында зарланырға яратмайым. Минең өсөн йәшәү — ул эшләү, көс еткеһеҙ ауырлыҡтарҙы йырып сығыу, өҙлөкһөҙ көрәшеү, яныу-көйөү, ҡыуаныу, яҡтыға, яҡшыға ынтылыу. Шунан башҡа тормошто мин белмәйем.

Эйе, минең бала саҡ бына шундай үҙем кеүек ярлы, етем балалар өсөн хас булған ауыр, ләкин сәләмәт шарттарҙа үтте.

Балаларымдың тормошо иһә ҡаты һуғыш, һынау йылдарына тура килде. Балаларҙың атаһы Ғәзиз Ильяс улы Әминев һуғыштың тәүге көндәренән алып 1944 йылда хәрби сафтан сыҡҡанғаса фронтта булды. Орден һәм миҙалдар менән наградланды. Өс тапҡыр ҡаты яра, бер контузия алып госпиталдәрҙә оҙаҡ дауаланғандан һуң, икенсе группа инвалиды булып, өйгә ҡайтты. Миңә ул ауыр

йылдарҙа инвалид иремде, етем апайымды, туғандарымдың балаларын бер үҙем ҡарап, өс улымды аяҡҡа баҫтырыу еңел булманы.

Илебеҙ, халҡыбыҙ күргән ауырлыҡтарҙы мин дә күрҙем, мин дә күтәрештем. Балаларым, мин теләгәнсә, киң күңелле, һәр кемгә яҡты йөҙлө, ҡунаҡсыл һәм ихтирамлы булып үҫтеләр.

— Һеҙҙең ижадығыҙҙа, Зәйнәб апай, балалар өсөн яҙған әҫәрҙәрҙең урыны ниндәй?

— Балалар өсөн мин хикәйәләр ҙә, әкиәттәр ҙә, повестар ҙа яҙҙым. Рус классикаһынан һәм хәҙерге заман яҙыусыларынан иң яҡшы өлгөләрҙе тәржемә итеп тә сығарҙым. Үҙемдең әҫәрҙәремдә һайлағанда ла мин юғарыла әйтелгән тәрбиә принциптарынан сығып эш иттем. Шуға ла ул китаптарҙа таҫма телләнеү ҙә, ялған пафос та юҡ. Сөнки тормош уйынсыҡ та, тәтәй уйнатыу ҙа түгел. Бала етди маҡсат менән тәрбиәләнергә тейеш. «Дуҫ булайыҡ» повесымдағы Юлдаш менән Ҡыҙрасты йәки «Яҡтыға» трилогияһындағы Емеш, Байрас, Алеша, Шәүрә образдарын кем бала-саға ғына тип әйтә алыр? Балалар — уйланыусан, күҙәтеүсән, сағыштыра һәм үҙ аллы һығымта яһай белеүсе талапсан кешеләр улар. Балалар менән етди һәм ышаныслы һөйләшә белергә кәрәк...

Интервью тамам. Яҙыусы менән хушлашып, ҡайтырға сығам.

Кис. Өфө өҫтөндә, башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле аяҙ һәм яҡты күк йөҙөндә йондоҙҙар емелдәй. Айырма шунда ғына: һауала — ғинуар сафлығы, тирә-яҡта һәм аяҡ аҫтында — яңы яуған аҡ ҡар юрғаны. Мин яҡты, матур баш ҡалабыҙ урамдары буйлап атлайым. Ә күңелдә арҙаҡлы яҙыусы, башҡорт халҡының талантлы ҡыҙы Зәйнәб Биишеваның үткән тормош юлы һәм ижади хеҙмәт батырлығы менән ҡыуаныу һәм һоҡланыу тойғоһо йылыта.

* * *

Әҫәрҙәр: Һайланма әҫәрҙәр, 2 томда. Өфө, 1969; Әҫәрҙәр, 4 томда. Өфө, 1981—1982; Избранные произведения в 2-х томах. М., 1988; Әҫәрҙәр, 5 томда, 1, 2, 3-сө томдар. Өфө, 1995—1996 йй.

Әҙәбиәт: Вәлитов И.Ғ., Вахитов Ә.Х. Зәйнәб Биишева ижады. Өфө, 1980; Алибаева С.А. и др. Зайнаб Биишева: Жизнь и творчество. Уфа, 1993; Зәйнәб Биишева // Башҡорт әҙәбиәте: 10-сы синыф өсөн дәреслек. Өфө, 1995; Биишева З.А. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

## Таһир Күсимов
## (1909—1986)



Башҡорт халҡының легендар улы, Советтар Союзы Геройы генерал-майор Т.Т. Күсимовтың исеме илебеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышы йылъяҙмаһына, Башҡортостан тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған. Был данлы исем, милләтебеҙҙең мәртәбәһен, оло рухын, ҡаһарманлығын раҫлап, быуындарҙан быуындарға, быуаттарҙан быуаттарға күсеп, ватандаштарыбыҙҙың йөрәк түрҙәрендә йәшәйәсәк. Романдарға, поэмаларға торошло оҙон һәм ҡатмарлы тормош юлы үтә халыҡ ҡаһарманы Т.Т. Күсимов.

Таһир Күсимов, уның шәхси документтарында теркәлгәнсә, 1909 йылдың 14 февралендә Ырымбур губернаһының Верхнеурал өйәҙе Күсем ауылында (хәҙер Башҡортостан Республикаһының Әбйәлил районы) Тайып һәм Сәхипьямал Зиннуновтар ғаиләһендә донъяға килә. Кесе йәштән уның яҙмышына күп ыҙалар сигеп, тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә татып үҫеү өлөшө төшә. Сәхипьямал апай, береһенән-береһе бәләкәйерәк өс балаһын ҡалдырып, егерме генә йәшендә вафат була. Уның артынса Таһирҙың кесе туғаны Алпамыша, һеңлеһе Хәсибә яҡты донъя менән хушлаша. Тайып ағай ҡулға оҫта, һөнәрле кеше булһа ла, тормош уға аяулы булмай. Атай кеше икенсе тапҡырға өйләнә өйләнеүен, әммә бәләкәй Таһирҙың тыңлауһыҙ, үҙ һүҙле булыуы үгәй әсә өсөн тотош бер хәсрәткә әйләнә. 1914 йылда, беренсе донъя һуғышы башланыу менән, Тайып ағай хеҙмәткә алына, үгәй әсә иһә бер аҙҙан үҙҙәренең ауылына ҡайтып китә. Әле биш йәше лә тулмаған Таһирҙы атаһының өлкән ағаһы Йәнйегет үҙ ғаиләһенә һыйындыра. Таһирға ете йәш тигәндә уны Айыуһаҙы ауылынан Йәнйегеттең кейәүе Әхмәткирәй бай үҙҙәренә алып ҡайтып китә. Таһир бында, үҫә төшкәс, еҙнәһенең улы Дәүләткирәй менән байҙың йылҡы малдарын көтә башлай. Ошонда ул, егерменсе йылда атаһы һуғыштан ҡайтҡанға тиклем, йәйен-ҡышын, асылда, ат өҫтөндә үткәрә. Нәҡ ошо осорҙа уның күңелендә ат яратыу тойғоһо уяна, был тойғо буласаҡ геройҙың бөтөн

булмышына, тормошона, яҙмышына йоғонто яһай. Атаһы уны тыуған ауылына алып ҡайтҡас, Таһир Айыуһаҙында үҙенең тау-урмандарҙы, ялан-һыуҙарҙы гиҙеп, яҡшы аттарҙа елдереп йөрөгән мәлдәрен һағынып, юҡһынып бер була. Ауылында уға ни бары бер ҡыш мәҙрәсәлә уҡып, аҙмы-күпме һабаҡ алырға тура килә. Атаһы дегет ҡайнатып, күмер яндырып кәсеп итә, бәғзе ваҡытта кәсепкә улын да бергә йөрөтә. Әммә 1921 йылдың көҙөндә ул, берҙән-бер ҡола атын арбаға егеп, ил өҫтөнә килгән аслыҡтан ҡасып, улы менән ҡаҙаҡ далалары аша алыҫ Урта Азияға сығып китә. Ошо ваҡыттан башлап Таһирҙың тормошонда күп төрлө мажаралар менән тулы оҙон бер дәүер башлана. Ниҙәр генә күрмәй ҙә, ниндәй михнәт һурпаларын эсмәй Таһир ете йылға һуҙылған шул ил гиҙеүҙәр осоронда.

Башта улар, ҡаҙаҡ араһына етеп, Мырҙабай тигән ҡаҙаҡ байына ялсылыҡҡа ялланып, атты-арбаны ҡалдырыу шарты менән, ҡышҡылыҡҡа тороп ҡалалар. Яҙ етеү менән аталы-уллы хәҙер инде йәйәүләп юлдарын дауам итә. Диңгеҙҙәй йәйрәп ятҡан ҡаҙаҡ далаһынан оҙон-оҙон юлдар үтеп, ниһайәт, Төркөстанға, боронғо бер ҡаласыҡҡа һәм яңы дәүерҙәге тимер юл станцияһына, барып етәләр. Ошонда Асыҡбай исемле ҡаҙаҡ байында батраклыҡта йөрөп, далала мал көтөп, бер-ике йыл үтеүгә үҙҙәре лә эш хаҡы иҫәбенә тейгән малды инселәп, Ташкент ҡалаһына юл тоталар. Ҡайҙа барып морон төртөргә? Аслыҡтан, яланғаслыҡтан ҡасып, Ташкент — икмәкле ҡала тип, кем генә барып тулмай ул йылдарҙа был ҡалаға. Тимер юл вокзалында, йүгереп барып, килгән-киткәндәрҙең әйберен ташып тамаҡ туйҙырыу эшенә тотона Тайып улы менән. Кесе йәштән тәбиғәт ҡосағында сынығып үҫкән Таһирға был ваҡытта арыу уҡ көс ултыра, быуындары нығынып килгән була. Вокзалда уғрылыҡ менән кәсеп итеүсе шайка өсөн күп нәмәгә әле күҙе асылып бөтмәгән нәҡ шундай үҫмерҙәр ҡулай ҙа инде. Таһирҙы үҙҙәренең ауына эләктереп тә алалар. Бының ни менән барып бөтөрө билдәле, әлбиттә. Ата кешегә, улын бәләнән йолоп алыр өсөн, уны төнөн ҡаланан ҡасырып алып сығып китеүҙән башҡа сара ҡалмай. Улар, шулай итеп, тағы Асыҡбайға барып һыйына. Тайып ағай, инселәп киткән малдарын һатып, аҙмы-күпме аҡсалы булып ала. Илгиҙәрҙәр үҙҙәренә уңайлыраҡ урын эҙләп, Гавриленко тигән элекке байҙың утарына барып сығалар. Ошонда, һуңыраҡ «Пахта Арал» тигән совхоз ойошторолған ерҙәрҙә, Таһир бер нисә йыл мамыҡ баҫыуҙарында эшләй. Атаһы менән балсыҡтан кирбес һуғып, бәләкәй генә булһа ла өй һалып керәләр. Тайып ағай яңынан өйләнеп, өсәүләп матур ғына йәшәп алып китәләр. 1924 йылдың сентябрендә Таһир үҙенән күпкә кесерәк балалар менән бергә уҡырға төшә. Бер йыл эсендә башланғыс мәктәп программаһын үҙләштереп, етенсене бөткәнсе ошонда белем ала. Ул хәҙер инде оҙон буйлы, таҙа кәүҙәле, көньяҡ ҡояшында янып,

ҡарағусҡылланып, күрер күҙгә күркәм бер егет булып үҫеп килә. Нисәмә тел белә ул хәҙер — башҡортсаһы янына ҡаҙаҡсаһы, үзбәксәһе өҫтәлә, руссаға ла шымарып, оҫтарып ала. Эйе, күп нәмәгә өйрәтә Таһирға тормош мәктәптәре.

1928 йылдың көҙөндә Таһирҙы атаһы, күреп килергә тип, тыуған яҡтарына ҡайтарып ебәрә. Әммә донъя ғәжәп: ошо ваҡиғанан уның тормошонда уйламаған ерҙән өр-яңы боролош башланып китә. Граждандар һуғышы касафаттарынан, 1921 йылғы аслыҡтан һуң әле һаман аяҡҡа баҫа алмаған туған-тыумасаһы, ауылдаштары өсөн үҫеп буй еткергән Таһирҙың онотолоп бөткән ерҙән тигәндәй ҡайтып төшөүе оло шатлыҡҡа әйләнә. Етмәһә, күпме донъя күргән, тел белеүе лә бына тигән. Уны, яҡындағы Күсем руднигында таш аҡтарыусы булып эшкә урынлашҡан еренән, үҙ-ара кәңәшләшеп, ауыл советы секретаре итеп ҡуялар. Әммә — бына ниндәй яҙмыш! — берҙән-бер көндө Күсемгә ул саҡтағы Тамъян-Түңгәүер олоҫоноң хәрби комиссары килеп төшә. Ауыл советында һомғол буйлы бәһлеүән егет уның иғтибарын йәлеп итә. Өҫтәүенә, башҡортса ла, русса ла нисегерәк иркен һөйләшә бит әле.

— Ҡыҙыл Армияға барырға теләйһеңме? — ти комиссар был егеткә.

Барырға теләмәй буламы һуң. Был бит Таһирҙың күптәнге хыялы. Эйе, армия һәм мотлаҡ — кавалерия!

— Улай булһа, иртәгә һине Аҫҡарҙа көтәм! — ти комиссар.

Шулай итеп, ауыл советы башҡарма комитеты секретаре булып өс кенә көн эшләргә насип була Таһирға. Иртәгәһен ул, юллыҡ аҙыҡ һалынған тоҡсайын аҫып, олоҫ үҙәге Аҫҡарға сығып китә. Әммә уның ҡулында, комсомол билетынан тыш, бер ниндәй ҙә документ ишараты булмай. Олоҫ архивына барып, документ йүнәтергә ҡушалар. Ә ундағы архив материалдары буйынса армияға барырға йәше етмәй. Йәғни Таһир 1910 йылдың 14 февралендә тыуған тип теркәлгән булып сыға. Нисек итергә?

Үткер кеше булып сыға комиссар. «Ярар, бер йәш өҫтәйек, буйың да, һының да килгән — бирешмәҫһең», — ти ул Таһирға. Ә фамилияһы? «Атайым – Зиннунов», — ти Таһир. Был мәсьәләне лә комиссар бик оҫта хәл итте. Күсем ауылынан булғас, кем тип атарға? «Ошо көндән Таһир Күсимов булырһың. Ризаһыңмы?» Риза булмаҫҡа ни, бына тигән фамилия.

«Был ваҡиға 1928 йылдың сентябрендә булды. Әйткәндәй, ул йылдарҙа йәштәр араһында яңғырауыҡлыраҡ, матурыраҡ фамилия алыу йыш була торғайны», — тип яҙа Таһир Күсимовтың биографы, күренекле яҙыусы Рамазан Өмөтбаев. Артабан — кантон үҙәге Белорет, медицина комиссияһы. Әллә күпме призывниктар араһынан ни бары ике кешене — Таһир Күсимов менән Зиаф Таһиров тигән егетте Ҡазандағы берләштерелгән татар-башҡорт хәрби мәктәбенә ебәреү өсөн һайлап алалар. Башта егеттәрҙе мәктәптең бер йыллыҡ

әҙерлек курсына алалар. Унан һуң йәнә өс йыл уҡырға... Байтаҡ йылдар Ҡазан ҡалаһында үтә Таһир Күсимовтың йәшлек ғүмере. Хәрби мәктәпте ул беренсе категория менән, йәғни отличноға тамамлай һәм шунда уҡ взвод командирының урынбаҫары итеп ҡалдырыла. Ошонда ул үҙенең ғүмерлек юлдашын таба — Сәйҙә исемле һылыу ҡыҙға өйләнә, ғаилә ҡора.

Хәрби мәктәптә Т. Күсимов иң элек оҫта кавалерист, ал бирмәҫ спортсы булараҡ дан ҡаҙана. Ул йылдарҙа әле Ҡыҙыл Армияла кавалерияның шөһрәте ҙур була. Әммә кавалеристар, ат өҫтөндә йөрөү менән бергә, саңғы ярыштарында, марш-бросоктар үткәргәндә лә һынатмайҙар. Атыу буйынса ла мәргәнлек күрһәтәләр. Таһир Күсимов үҙенең спортҡа әүәҫлеге һәм һәләтлеге менән курсанттарҙы ла сәмләндерә, хәрби мәктәптә уның взводы һәр ваҡыт иң яҡшы әҙерлек күрһәтә. 1934 йылдан башлап Т. Күсимов взводы яугирҙары гарнизон, округ, бөтөн армия ярыштарында ҡатнашып, призлы урындарға сыға. Мәскәүҙә шундай ярыштарҙың береһендә судьялар коллегияһы составында легендар яҡташыбыҙ комбриг Муса Мортазинды күреү Таһир Күсимов өсөн айырыуса ҡыуаныслы була. Ә һыбай йөрөү оҫталығы буйынса (кавалерияла уны джигитовка тип атайҙар) Т. Күсимовҡа Ҡыҙыл Армияла һәр ваҡыт беренселекте алып килгән казак Иван Буш менән ике тапҡыр алышырға тура килә. Ярыштың икенсеһе 1937 йылда Мәскәүҙә үткәрелә. Ҡағиҙә буйынса, ярышыусы бер-береһенән ун икешәр метр арала ергә ҡаҙап ҡуйылған ҡабығы һыҙырып алынған тал сыбыҡтарын (улар барыһы ун биш бөртөк була) йән-фарманға сабып барған ыңғайы ат өҫтөнән эйелеп, ҡылыс менән бер-бер артлы сабып өҙөп сығырға тейеш. Сапҡан ваҡытта тал сыбыҡтары нәҡ ҡыялатып өҙөлгән урынынан ергә ҡаҙалып ултырһа ғына, уйын шартына еткерелгән тип иҫәпләнә. Тағы бер күнегеү — ерҙә ятҡан ап-аҡ ҡына түңәрәк сепрәк тегелгән мамыҡ бишмәттең ана шул аҡ түңәрәген пика менән сәнсеп, шуның артынса уҡ ҡылыстың осон алда торған ике ҡулсаға тура килтереп, күҙ асып йомған арала кире тартып алып өлгөрөргә кәрәк. Бына ошондай кавалеристарҙың да бик һирәгенең ҡулынан килгән ҡатмарлы ярышта Таһир Күсимов, әлеге Иван Бушты еңеп, Ҡыҙыл Армия буйынса беренселекте ала. Был ваҡытта инде ул эскадрон командиры итеп үрләтелгән була. 1936 йылдың көҙөнә Новочеркасскиҙа атлы ғәскәрҙәр командирҙары курсында тағы ла хәрби әҙерлек үтә. Унан ҡайтҡас, бер аҙ ваҡыт ТатЦИК исемендәге уҡсылар дивизияһында айырым кавалерия эскадроны командирының урынбаҫары була. Бында дивизия командиры Яҡуп Чанышев була. Шомло 1937 йыл... Хәрбиҙәр араһында ла ҡулға алыуҙар, ғәйепһеҙгә ғәйепләүҙәр кесе командирҙарға ла ауыр тәьҫир итә, әлбиттә. 1938 йылдың көҙөндә, ниһайәт, Т.Т. Күсимовты Кавказ арьяғы хәрби округына, 77-се Әзербайжан тау-уҡсылар дивизияһына махсус разведка

эскадронына командир итеп күсереү тураһында фарман килеп төшә.

Бәһлеүән башҡорт командиры, яңы урынға барыу менән, дивизияла хәрби әҙерлек йәһәтенән иң артта ҡалып килгән эскадронды тиҙ арала алдынғылар рәтенә сығара, йәш кавалеристар менән үҙенең бөтөн оҫталығы, тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлаша. Эскадронға дивизияның Күсмә Ҡыҙыл байрағы тапшырыла. Күсимовтың кавалеристары Баҡыла 7 ноябрь көнөндә хәрби парадта ҡатнашалар. Шул уҡ Әзербайжан Коммунистар партияһы Үҙәк Комитетының беренсе секретары Багиров, эскадрон командирын саҡырып алып, Үҙәк Комитет һәм республика хөкүмәте исеменән Лондон исемле уйнаҡлап торған, әлегә бер тапҡыр ҙа эйәр һалынмаған һомғол ат бүләк итә. Тиҙҙән Күсимовты полк командирының урынбаҫары, ә 1941 йылдың яҙында 11-се кавалерия дивизияһына полк командиры итеп тәғәйенләйҙәр. 1941 йылдың 22 июнь көнөн ул Кавказ аръяғы хәрби округының 24-се кавалерия дивизияһының 56-сы полкы командиры булып ҡаршы ала. Шул уҡ көндә, боевой тревога буйынса штабҡа барып инеүе була, Күсимовҡа сургуч мисәттәр менән мисәтләнгән папка тотторалар. Унда: «Һуғыш иғлан ителә ҡалһа, майор Т.Т. Күсимов 23-сө кавалерия дивизияһының 14-се кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә», тигән һүҙҙәр яҙылған була. Ни бары бер аҙна эсендә яңы полкты формалаштырып өлгөрәләр. Дивизия көньяҡҡа, Иран сиктәренә табан походҡа ҡуҙғала. Нахичеванға ун көн эсендә барып етәләр. Түҙеп торғоһоҙ эҫе көндәр тороуға ҡарамаҫтан, Күсимовтың һыбайлылары хәрби заданиены үтәүгә яҡшы әҙерлекле булыуҙарын күрһәтәләр. Дивизия, Аракс йылғаһын кисеп үтеп, Иран территорияһына барып инә. Совет хөкүмәте, Иран хөкүмәте менән 1921 йылғы килешеү буйынса, һуғыш сыҡҡан хәлдә, илдең төнъяғына, ә Англия — көньяҡҡа үҙенең ғәскәрен индерергә ҡарар итә. Иң элек сик буйынан йөҙ егерме саҡрым ерҙә урынлашҡан Резаи ҡалаһын алырға задание ҡуйыла. Иран шаһтарының тыуған төбәге Резаи ҡалаһына Таһир Күсимов штурмлаусы колонна башында иң беренселәрҙән булып барып керә. Дивизия штабы ошонда урынлашып ала, ә Күсимов полкы Иран һәм Төркиә сигендәге Урмиә ҡалаһына табан хәрәкәт итә. Урмиә — Ираҡтың курдтар йәшәгән ерҙәге ҡалаларҙың береһе. Полк командирының исемен ишетеү менән, курдтарҙың йөҙө яҡтырып китә торған була. Улар өсөн Таһир тигән исем нәҡ үҙҙәренсә, мосолманса булыуы менән бергә, командирҙың ҡыйыулығы, батырлығы, ғәҙел һәм тәүәккәл булыуы һоҡландыра. Тиҙ арала курдтарҙың башлығы имам Әбу әл-Вәлид менән айырыуса йылы мөнәсәбәттәр урынлаша. Урындағы халыҡ менән аралашыу тыйылған булһа ла, командир үҙ аҡылы менән эш итә. Ноябрь баштарында полкка Резаи ҡалаһына күсергә фарман килгәс, курдтар Таһир Күсимов һәм уның яугирҙарын күҙҙәренә йәш тулып оҙатып ҡалалар. Ә ноябрь аҙаҡтарында

маршал С.М. Буденный ҡултамғаһы менән майор Күсимовты Башҡортостанда ойошторолоп ятҡан 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына штаб начальнигы итеп тәғәйенләү тураһында приказ килеп төшә.

Ниһайәт, бына Өфө, Дим станцияһы. Дивизия командиры полковник М.М. Шайморатов кавалерия ғәскәрҙәрендә исеме күптән билдәле, баһадир кәүҙәле майор Күсимовты ихлас ҡаршы ала. Тәүге осрашыуҙа бер-береһен аңлашалар. Дивизия командиры, Күсимовтың һәр ваҡыт командир вазифаһында булғанлығын иҫәпкә алып, бында ла полк командиры булырға тигән теләген дә кире ҡаҡмай. Шул көндә, шул сәғәттә үк Таһир Күсимов ойошторолоп ятҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының 1-се полкы менән командалыҡ итә башлай. Был хәл 1942 йылдың ғинуар башында була.

Полкты һуғышҡа әҙерләү өсөн ҡыҙыу көндәр башлана. Ҡара таңдан ҡара төнгә ҡәҙәр Күсимов — һалдаттар араһында. Иң элек һәр ерҙә, һәр урында ҡаты тәртип урынлаштыра. Ә был эште ул ашхананан башлай. Хәрби-сәйәси әҙерлек иһә полк командирының төп хәстәрлегенә әйләнә. Шуның менән бергә, кавалерия, әлбиттә, бик ауыр көндәлек физик эш, күнегеүҙәр, аттарҙы тәрбиәләп тотоу, шул малҡайҙарҙы ла һуғыштағыса тәртиптәргә күнектереү талап итеүсе. Республика милли дивизияны әҙерләү өсөн мөмкин булғандың бөтөнөһөн дә эшләй. Башҡортостан етәкселегенең өндәмәһенә яуап итеп, 4000 кеше сафҡа баҫа. Дивизияның 5650 баш ат иҫәпләнгән ҙур һәм ҡатмарлы хужалығы барлыҡҡа килә. Кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, ҡорал, төрлө ҡорамалдар, аттар өсөн фураж, сбруй, пулемет тачанкалары, хәрби эйәрҙәр һ.б. — һәммәһен дә тәьмин итеүҙе үҙ өҫтөнә ала Башҡорт республикаһы. Дивизия политбүлек начальнигы, полктарға, эскадрондарға комиссарҙар итеп республика партия ойошмаһы үҙенең иң яҡшы кадрҙарын ебәрә. Таһир Күсимовҡа тәүге көндән үк күренекле мәғариф эшмәкәре Сәғит Әлибаев менән бергә булыу бәхете тейә. Сәғит Рәхмәт улына полк комиссары, аҙаҡ политик эш буйынса полк командиры урынбаҫары сифатында оҙон һуғыш юлдарын үтеп ҡайта, һуңынан оҙаҡ йылдар республиканың мәғариф министры, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты ректоры була, ғилми хеҙмәттәр яҙа, педагогия фәндәре кандидаты тигән дәрәжәгә диссертация яҡлай, ғөмүмән, республикала хөрмәтле кешеләрҙең береһе була. Шуныһы ла мөһим: ул, өлкән йәшкә еткәс, үҙе хеҙмәт иткән полктың яу юлдарын сағылдырған «Көндәлек биттәренән» тигән иҫтәлектәрен китап итеп баҫтырыу шатлығын кисерә. Был яҙмаларҙа полк командиры Таһир Күсимов хаҡында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар.

Дивизияны формалаштырыу тамамланған көндәрҙә, март уртаһында, Өфөгә маршал К.Е. Ворошилов килә, хәрби әҙерлеккә һәйбәт баһа бирә. 1942 йылдың 22 мартында, ул ваҡыттағыса, Башҡорт АССР-ының тыуған көнө алдынан, 112-се

Башҡорт кавалерия дивизияһына тантаналы шарттарҙа Ҡыҙыл байраҡ тапшырыла.

1942 йылдың 12 апрелендә Т.Т. Күсимов полкы тейәлгән эшелон, бөтөн әҙерлек эштәре тамамланып, беренсе булып ҡуҙғалып китә. Ике аҙна үтеүгә башҡорт атлылары Тула өлкәһенең Сафоновка станцияһына етеп, поездарҙан төшәләр. Фронтҡа килеп етеү менән, полктар яңы номерҙар менән билдәләнә. Таһир Күсимов полкы — 275-се, Ғариф Маҡаев полкы — 313-сө, Гәрәй Нафиҡов полкы — 294-се тип атала башлай. Был ваҡытта улар майор званиеһында кадровый офицерҙар, өсөһөнә лә дәһшәтле яу яландарында бик күп уттар-һыуҙар үтәһе, үҙ полктары менән командирлыҡ итеп, тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәтәһе бар әле. Дивизия командиры легендар генерал Шайморатовтың, полк командирҙары Маҡаевтың, Нафиҡовтың ғәзиз ғүмерҙәре һуғыш мәхшәрҙәре эсендә өҙөлөп ҡаласаҡ. Илде фашизмдан ҡурсалап, башҡорт халҡының хәрби традицияларына тағы бер мәртәбә һүрелмәç дан өçтәп, меңәрләгән аçыл ир-уҙамандарыбыҙ башын һаласаҡ. Бик ҡиммәткә төшә, асылда, милләтебеҙҙең генофондын имгәтеүгә, оҙаҡ ваҡыттар уңалмаçлыҡ яралар һалыуға килтерә баштан-аяҡ ҡоралланған дошманға ҡаршы ат өçтөндә ҡылыс тотоп һуғышыуҙар.

1943 йылдың февралендә рейдтан ҡанһырап сыҡҡандан һуң, артабан башҡорт ир-егеттәре менән тулыландырыу өсөн резерв та булмай башлай. Ә геройҙарса башын һалған генерал М.М. Шайморатовҡа Герой исеме бирелмәйенсә тороп ҡала.

Таһир Күсимов — данлыҡлы дивизияның, иçән-һау ҡалып, бөтөн ғүмерен Совет Армияһында хеҙмәт итеүгә арнап, генерал-майор исемен алыуға өлгәшкән бик һирәк яугирҙарының береһе.

1942 йылдың июнь аҙағы. Полк Олым йылғаһының уң яҡ яр буйында оборона тоторға приказ ала. Полкта дүрт атлы эскадрон, минометтарҙан торған өс батарея, эскадрондарҙа — 120—130 (барлығы 600-700) һуғышсы була. Оборона һуғыштары ваҡытында кавалеристар, әлбиттә, аттарынан төшөп, позицияла урын ала. Ә аттарҙы, артҡараҡ сығарып, ашатып-эсереп, ҡарап, һаҡлап торорға үҙенә айырым командалар билдәләнә. Был иһә шәхси составтың бер өлөшө (ҡайһы ваҡытта хатта дүрттән бере), теләһә-теләмәһә лә, яуҙа ҡатнаша алмай тигән һүҙ. Әле полк алты километрға һуҙылған фронт һыҙығында оборона тоторға тейеш була. Был норманан күпкә артығыраҡ. Өçтәүенә, ҡаршы яҡта өс-дүрт тапҡырға күберәк, пулеметтар, автоматтар менән ҡоралланған дошман ғәскәре тупланған. Ул яҡтан — артиллерия тын да алдырмай утҡа тота. Бындай шарттарҙа бары тик яҡшы хәрби әҙерлек, үлем менән йөҙгә-йөҙ килгәндә лә ҡаушамайынса, йәнеңде аямайынса һуғышыу ғына

ярҙамға килә. Ошо тәүге һуғыштарҙа Бәҙри Мәмбәтҡолов эскадроны немецтарҙың һөжүм итеп килгән колоннаһын, арыш баҫыуы аша көтмәгәндә өҫтөнә барып сығып, тар-мар итә. Был уңыш яугирҙарҙың рухын күтәрә, еңеүгә ышанысты арттыра. Вахитов эскадроны ауыр хәлгә ҡалғанды күреп, Күсимов дивизия командирына, эскадронды артиллерия уты менән ҡурсалауҙы һорап, телефон аша мөрәжәғәт итә, ә үҙе ярһыу аты өҫтөндә Вахитов янына сабып барып етеп, һалдаттарҙы атакаға күтәрә. Полктың хәле ауырлашҡандан-ауырлаша. Үкенескә, иң ҡырҡыу мәлдә эргәлә урынлашҡан уҡсылар бригадаһы, бер ни ҙә хәбәр итмәйенсә, артҡа сигенә. Күсимов һәм Маҡаев полктары бик күп юғалтыуҙар кисерә. Күсимовсылар ҡамалыу ҡурҡынысы аҫтында ҡала. Атака артынан атака туҡталмай. Дошман яңынан-яңы көс өҫтәп хәрәкәт итә. Дивизия командиры Шайморатов, полкты ҡамауҙа ҡалдырмау өсөн, бөтөн сараларҙы күрә, резервтағы көстән ярҙам ебәрә һала. Полк, батырҙарса һуғышып, дошман ҡулсаһын өҙөп сығыуға өлгәшә. Немецтарҙың һөжүме туҡтатыла. Күсимов полкы был һуғышта ла, унан һуң да күп ваҡыт оборона һыҙығының һәм һөжүм итеүсе көстәрҙең алдында хәрәкәт итә. 8-се кавалерия корпусы һәм уның составындағы Башҡорт кавалерия дивизияһы был көндәрҙә дошмандың өс меңдән артыҡ һалдатын һәм офицерын ҡыйрата.

Командование Башҡорт дивизияһын 2-се Тербуны тигән ергә күсерергә ҡарар итә. Немецтар нәҡ ошо урындан фронт һыҙығын өҙөп, төньяҡтан үтеп, Воронежды ҡулға төшөрмәксе булалар. Күсимов һәм Нафиҡов полктары шул уҡ төндә яңы позицияға күсә. Нафиҡов полкы Лобановка ауылын немецтарҙан таҙарта, әммә ҡыйыу командир үҙе ҡаты һуғыштарҙа һәләк була. Күсимов полкы Озерки ауылы йүнәлешендә хәрәкәт итә. Ошо һуғышта ҡулы яраланһа ла, шул көйөнсә ат өҫтөнән төшөргә лә уйламай.

Дивизия 1942 йылдың 15 октябренә тиклем ошо рубежда, Курск өлкәһенең Тербуны ауылы төбәгендә, оборонала тора. Июль айында башҡорт атлылары янына яҙыусы Константин Симонов килә. Дивизия командиры Симоновты иң элек Күсимов полкына алып бара. Тиҙҙән яҙыусының «Красная Звезда» гәзитендә «Башҡорт дивизияһында» тигән очеркы баҫылып сыға. К. Симонов башҡорт яугирҙарының батырлығын юғары баһалай, айырыуса командирҙары Нафиҡов һәм Күсимов тураһында һоҡланып яҙа. Ошо һуғыштарҙағы батырлыҡтары өсөн дивизияның йөҙгә яҡын һуғышсыһы ордендар һәм миҙалдар менән наградлана. Наградланыусылар араһында, әлбиттә, полк командирҙары Т. Күсимов, Ғ. Маҡаев, Г. Нафиҡов (үлгәндән һуң), комиссарҙар С. Әлибаев, Б. Сәйетғәлин, өлкән лейтенант С. Хәбировтар ҙа була.

Октябрҙең 15-дә Башҡорт кавалерия дивизияһына, Сталинградҡа табан биш йөҙ километр юл үтеп, фронттың яңы һыҙығында хәрәкәт итергә приказ

бирелә. Алғы һыҙыҡтан йыш ҡына ни бары 6—7 километр арала, тап-таҡыр дала буйлап, дошман самолеттарының туҡтауһыҙ бомбаға тотоуы аҫтында, дүрт меңдән артыҡ кешенән торған тотош бер дивизияның бындай марш менән үтеүе Бөйөк Ватан һуғышы тарихында уникаль ваҡиға булып ҡала. Көндөҙ һирәк-һаяҡ ҡыуаҡлыҡтар, соҡор-саҡырҙар араһында йәшеренеп, төндәрен генә юлға сығырға тура килә. Бер ай самаһы ваҡыт үтеүгә дивизия Хопер (Һабыр) йылғаһы Донға ҡойған ерҙә туҡтала. 8-се кавалерия корпусы хәҙер Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 5-се танк армияһы составында Сталинград эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнашасаҡ.

19 ноябрь иртәһе. Бөтөн фронт буйынса, туҡтауһыҙ бер геүелдәү булып артиллерия тауышы яңғырап тора. Башҡорт кавалерияһы тағы ла һөжүмдең төп йүнәлешендә, ә уның алдында — авангардта — Күсимов полкы. Мәмбәтҡолов эскадроны Блиновск утарына бәреп керә. Мөһим стратегик пункт иҫәпләнгән Обливская станцияһы өсөн алыш башланып китә. Күсимовсыларға 1-се румын танкылар дивизияһы ҡаршы торған булып сыға. Бына унлап танк полкты һул яҡлап урап үтмәксе була. Күсимов орудиеларҙы уларҙың ҡабырғаларына ҡаратып бороп ултыртырға ҡуша. Бына беренсе, икенсе, өсөнсө танкыны ут ялмап ала. Мәмбәтҡолов эскадронын дошман пехотаһы уратып ала, танкылар һөжүм итә. Бөтөн фронт буйынса көнө буйы аяуһыҙ алыш дауам итә. Ошо һуғышта эскадрон командиры Бәҙри Мәмбәтҡолов ҡаты яраланып, госпиталгә оҙатыла. Полк командиры подполковник Таһир Кусимов та сафтан сыға.

Дивизияның 1943 йылдың февраль айындағы дошман тылына тәрән рейды, рейдта башҡорт атлыларының тиңһеҙ батырлыҡтары һәм иҫәпһеҙ күп юғалтыуҙар тураһында тарихта яҡшы билдәле. Шуны ғына әйтеү ҙә етә: 4 мең кешелек дивизияла рейдтан сыҡҡанда өс йөҙ самаһы ғына кеше, ә Күсимовтың 275-се полкында иһә етмеш һуғышсы иҫән ҡала. Был инде һәр ун кешенән берәү тигән һүҙ. Башҡорт дивизияһы яугирҙары шул көндәрҙә үҙҙәренең һөйөклө командиры гвардия генерал-майоры М.М. Шайморатовты юғалтыу ҡайғыһын кисерәләр.

Күсимов, госпиталдә һауығып сығыу менән, яңынан үҙенең полкына әйләнеп килә. Был ваҡытта дивизия Ворошиловград, эргәһендә тулыландырыуға сығарылған була. Хәҙер ул 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы тип атала башлай. Күсимовтың 275-се полкы 58-се гвардия полкына әйләнә. Корпусҡа иһә 7-се гвардия кавалерия корпусы тигән исем бирелә.

7-се гвардия корпусына Украинаның Чернигов ҡалаһын азат итеү бурысы ҡуйыла. Тағы ла иң алда башҡорт атлылары — 16-сы гвардия дивизияһы, ә уның авангардында Күсимов полкы ҡуйыла. Полк бер-бер артлы Сосница, Баба

ауылдарын азат итә. Мена, Березна ҡалаларындағы дошман гарнизондарын селпәрәмә килтереп, Черниговҡа табан юл яра. 21 сентябрҙә 16-сы гвардия дивизияһы, бүтән частар менән бергәләп, Черниговты азат итә. Шул айҡанлы Мәскәүҙә еңеүселәрҙе 124 орудиенан 20 залптан торған салют хөрмәтләй. 16-сы дивизияға Чернигов дивизияһы тигән исем бирелә.

Алда — Днепр. Бында ла дивизия командиры Г.А. Белов Күсимов полкын авангардҡа ҡуя. Күсимовсыларға 600 метр киңлектәге был ҡеүәтле даръяны иң беренсе булып аша сығып, арғы яҡ ярҙа бүтән частар сыҡҡансы плацдарм булдырырға фарман бирелә.

Днепр эпопеяһы... Таһир Күсимовтың командирлыҡ таланты ошо операцияла бөтөн тулылығында асыла. Төндә иң элек десант ебәрергә ҡарар ителә. Был бурысты үтәү А.М. Рудой командалығында 4-се эскадрон яугирҙарына йөкмәтелә. Ҡул осонда нимә бар, һәммә нәмә һалдар яһау өсөн ҡулланыла. Тәүге десант көслө ут аҫтында арғы яҡҡа сығып етеү менән, икенсеһе, өсөнсөһө, ә таң алдынан полк командиры үҙенең штабы менән кәмәләрҙә йылға аша алға ынтыла. Ярға етергә бер илле метр ара ҡалғанда, снаряд ярсығы тейеп, Күсимов ултырған кәмәнең төбө тишелә. Һалҡын һыуға сумып, йөҙөп сығыуҙан башҡа сара ҡалмай. Ә был 1943 йылдың 27 сентябрь иртәһе була. Күсимовтың уң яҡ ярға сығыуы дошмандың ҡыҫымы аҫтында ҡалған һалдаттарға өмөт, дәрт өҫтәп ебәрә. «Күсимов бында!» — Был хәбәр һөжүм итеүселәр араһында бик тиҙ тарала. 27 сентябрҙең кисендә инде дивизия командиры Г.А. Белов үҙенең күҙәтеү пунктын уң яҡ ярға күсерә. Ете көн буйы, 2 октябргә тиклем, яуланған рубежды тотоп тора һәм шунан һуң ғына фронттың был һыҙығын уҡсы дивизияларға тапшыра.

Днепрҙы аша сығыу өсөн барған һуғыштарҙа беҙҙең яҡташтар Бөйөк Ватан һуғышы тарихында онотолмаҫлыҡ дан һәм шөһрәт ҡаҙана. 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының 60 яугирына, шул иҫәптән, әлбиттә, полк командиры Таһир Күсимовҡа, ошо операция ваҡытындағы батырлыҡтары өсөн Советтар Союзы Геройы тигән исем бирелә.

Дивизия һәм Күсимов полкы бынан һуң да бик күп батырлыҡтар күрһәтә. 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы үҙенең һуғыш юлын 1945 йылдың яҙында Германияның Эльба йылғаһы Премниц ҡалаһында тамамлай. Ә Күсимовҡа 1944 йылдың майында үҙенең полкташтары менән хушлашырға тура килә: маршал С.М. Буденныйҙың күрһәтмәһе буйынса уны Мәскәүгә, М.В. Фрунзе исемендәге хәрби академияға, уҡырға ебәрәләр. Еңеү көнөн ул ошо академияның тыңлаусыһы булып ҡаршылай. 1945 йылдың Хәрби парадында, Хәрби академияның колоннаһында иң алда байраҡ йөрөтөүсе булып, Ҡыҙыл майҙан аша үтә. 1947 йылда был уҡыу йортон ул алтын миҙалға тамамлай. 1951

йылда Генераль штаб академияһын да ул алтын миҙал менән тамамлап сыға. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа – кавалерия дивизияһының штаб начальнигы, тау-уҡсылар дивизияһының, мото-уҡсылар дивизияһының командиры, Төркөстан хәрби округында армия корпусы командирының урынбаҫары. 1963—1969 йылдарҙа – Башҡорт АССР-ының хәрби комиссары. РСФСР (1947—1951, 1951—1955), Төркмән ССР-ы (1959-1963), БАССР (1969—1971) Юғары Советтары депутаты итеп һайлана. Генерал Күсимов ике Ленин ордены, Ҡыҙыл Байраҡ, 1-се дәрәжә Ватан һуғышы, ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары менән наградлана. 1969 йылда генерал-майор Т.Т. Күсимов отставкаға сыға. Легендар милләттәшебеҙ 1986 йылдың 10 майында донъя ҡуйҙы. Өфөлә ул йәшәгән йортта мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Уның тыуған ерендә — Әбйәлил районының Күсем ауылында музей эшләй. Батыр һыны, батыр образы халҡыбыҙ хәтерендә, эпик геройҙарыбыҙ һымаҡ, мәңгелек урын алды. Халыҡ геройы тураһында шағир Ирек Кинйәбулатов «Арғымаҡта» балладаһында:

Уның һуңғы арғымағы
Ҡайҙарҙалыр ярһып тулай.
Яуҙар еңеп сыҡҡан батыр
Мәңгелеккә осто шулай.
Мин йыр яҙам, уның һыны
Арғымаҡта елеп үтте.
Ул саҡырған һуңғы оран
Йөрәгемде телеп үтте.
Оло юлда — оло халыҡ,
Нигә генә тарымаһын,
Башҡорттарҙың ҡаһарманлыҡ
Арғымағы арымаһын! —

тип яҙҙы.

Эйе, шулай булһын! Халҡыбыҙҙың рухын, данын донъя алдында күтәргән ҡаһарман ир-арыҫландарының исемен беҙ һәр ваҡыт оло хөрмәт һәм ғорурлыҡ менән хәтерҙә һаҡлаясаҡбыҙ.

* * *

Әҙәбиәт: Хакимов Р.Г. Сын Урала // Славные сыны Башкирии. Кн. I. Уфа, 1965. 113—120-се биттәр; Әлибаев С.Р. Көндәлек биттәренән (Комиссар яҙмалары). Өфө, 1971; Сотников И.В. В атаке конники. Уфа, 1983; Өмөтбаев Рамазан. Генерал Күсимов: Документаль повесть. Өфө, 1990; шул уҡ. Генерал

Кусимов: Документальная повесть. Уфа: Китап, 1995; Хамматов Яныбай. Башҡорттар китте һуғышҡа: Роман. Өфө, 1990; Кинйәбулатов Ирек. Арғымаҡта: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1998, 23—30-сы биттәр; Башҡортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Жәлил Кейекбаев
(1911—1968)



XX быуат башҡорт тел белемендә баһалап бөткөһөҙ оло мираҫ ҡалдырған, һәр береһе үҙ аллы ғилми мәктәп тыуҙырып, дөйөм төркиәтселек фәне үҫешенә ғәйәт ҙур өлөш индергән айырыуса ҡәҙерле бер нисә исем бар. Шул арҙаҡлы исемдәр араһында башҡорт теленең тәүге ғилми грамматикаһының авторы, СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, профессор Н.К.Дмитриев менән йәнәш иң элек уның талантлы шәкерте, атаҡлы лингвист һәм яҙыусы Ж.Ғ. Кейекбаевты ҙур хөрмәт менән иҫкә алабыҙ. Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев башҡорт тел белеменең бөтөн йүнәлештәрендә лә ҙур уңыш менән эшләне, төркиәтселек һәм урал-алтаистика фәнен өр-яңы теоретик ҡараштар менән байытты, ул хәҙерге башҡорт тел белеменә нигеҙ һалыусы булараҡ киң танылыу тапты.

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев 1911 йылдың 25 октябрендә элекке Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ғафури районы) Ҡаранйылға ауылында тыуған. Күршеләге Сәйетбаба ауылында башланғыс, Маҡарҙа крәҫтиән йәштәре мәктәбен тамамлай. 1929—1932 йылдарҙа Өфөлә педагогия училищеһында уҡый. 1937 йылда, 1-се Мәскәү дәүләт сит ил телдәре институтының герман филологияһы бүлексәһен тамамлап, бер уҡыу йылы Мәскәү өлкәһенең Рошаль ҡалаһында урта мәктәптә немец теле уҡытыусыһы булып эшләй. Башҡортостанға ҡайтып, төрлө мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында сит ил телдәрен уҡыта. 1943—1944 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтенең баш мөхәррире булып эшләй. 1948 йылда, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағандан һуң, Башҡорт дәүләт педагогия иститутына эшкә килә. Бында ул өлкән уҡытыусы, доцент вазифаларын башҡара, сит ил телдәре факультеты деканы була. 1951 йылдан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем Ж.Ғ. Кейекбаев ошо уҡыу йортонда (1957 йылдан башлап — Башҡорт дәүләт университеты) башҡорт тел белеме

кафедраһы мөдире, 1957—1961 йылдарҙа университеттың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса проректоры була. 1960 йылда СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтында докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1961 йылда уға профессор исеме бирелә.

Жәлил Кейекбаевтың ижади эшмәкәрлегенең тәүге осоро 30-сы йылдарға тура килә. Башта ул Ж. Табын тигән ҡушамат менән шиғырҙар баҫтыра. Мәскәүҙә инҫтитутта уҡыған йылдарында Гёте һәм Гейне шиғырҙарын, В. Бредель һәм Ф. Вольф әҫәрҙәрен, бер туған Гриммдарҙың әкиәттәрен немец теленән башҡортсаға тәржемә итеү менән шөғөлләнә. Шул уҡ осорҙа Мәскәү дәүләт консерваторияһының Башҡорт студияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. 1944 йылда Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғоловҡа арналған күләмле очеркы айырым китап булып баҫылып сыға. Хикәйәләр, ҡобайырҙар яҙа. Ижадының артабанғы осоронда ул балалар өсөн күп кенә әкиәттәр ижад итә, уның әкиәт йыйынтыҡтары кескәй уҡыусылар араһында киң танылыу таба.

1946 йылдың июлендә Жәлил Кейекбаев үҙенең ҙур күләмле проза әҫәрен — «Туғандар һәм таныштар» романын тамамлай. Әҫәр үҙ ваҡытында донъя күрмәй, бары тик әҙип үлгәс, 1975 йылда ғына тәү башлап баҫылып сыға һәм һуғыштан һуңғы осорҙағы башҡорт романистикаһының ҙур ҡаҙанышы тип баһалана. Роман башҡортса һәм русса бер нисә тапҡыр ҙур тираж менән баҫылып сыҡты. «Туғандар һәм таныштар» – XX быуат башында башҡорт халҡының тормошон, көнкүрешен, үҙенең хоҡуҡтарын яҡлау мәнфәғәтендә алып барған фиҙаҡәр көрәшен колоритлы картиналар, сағыу образдар аша ҙур художестволы оҫталыҡ менән тасуир итеүсе әҫәр. Уны белгестәр ысын мәғәнәһендә халыҡ романы һәм халыҡсан роман тип атаны.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың киң профилле төркиәтсе-лингвист булып формалашыуында бер нисә фактор айырыуса хәл иткес роль уйнай. Беренсенән, ғалим, әҙип һәм шәхес булараҡ, ул һәр ваҡыт тыуған тупраҡҡа, үҙ халҡының бай һәм үҙенсәлекле рухи-мәҙәни донъяһына, туған телгә таянып эш итә, шул сығанаҡтан һут һәм илһам алып йәшәй. Икенсенән, күңелендәге башҡортлоҡ рухын һаҡлап, ул ысын мәғәнәһендә европаса белем һәм әҙерлек алыуға өлгәшә, аҙаҡ ошо әҙерлек нигеҙендә үҙ туған телен өйрәнеүҙә заман һәм донъя фәне кимәлендә торған капиталь хеҙмәттәр ижад итә.

СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтында Н.К. Дмитриев етәкселегендә аспирантурала уҡыуы ысын мәғәнәһендә төркиәтсе-лингвист булып китеүендә хәл иткес роль уйнай. Аспирантураны уңышлы тамамлап, 1948 йылда ул Мәскәү дәүләт университетында «Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Был уның башҡорт

тел белеме үçешенә индергән тәүге үҙенсәлекле хеҙмәте була. 1968 йылда ул айырым китап булып баçылып сыға һәм башҡорт теленең орфоэпияһы өлкәһендә хәҙергә тиклем берҙән-бер һәм ғәйәт ҡиммәтле тикшеренеү булып ҡала.

1958 йылда Ж.Ғ. Кейекбаевтың «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыçҡаса инеш» тигән күләмле ғилми мәҡәләһе баçылып сыға. Был хеҙмәт башҡорт диалектологияһының артабанғы үçешенә ҙур йоғонто яһаны. Шул уҡ йылда Ж.Ғ. Кейекбаевтың «Башҡорт теленең фонетикаһы» тигән монографияһы нәшер ителә. Тиҙҙән, 1960 йылдың ғинуарында, ошо уҡ темаға ул СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтында докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1961 йылда уға профессорлыҡ дәрәжәһе бирелә, 1967 йылда Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән исемгә лайыҡ була.

Ғалимдың тел белеме өлкәһендәге тағы бер ҙур ҡаҙанышы – «Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы» (Өфө, 1966) тигән хеҙмәте. Бында туған телебеҙҙең лексик байлығы ғәйәт тулы һәм киң планда тикшерелә. Ғалим шулай уҡ фразеология, лексикография, стилистика мәсьәләләренә ентекләп туҡтала, башҡорт яҙмаһы һәм яҙма әҙәби тел тарихына ҡарата үҙ дәүере өсөн оригиналь ҡараштар менән сығыш яһай. Уның башҡорт әҙәби теленең фонетикаһы, лексикаһы, грамматикаһы, шулай уҡ башҡорт яҙмаһы һәм әҙәби тел тарихына арналған төп фекерҙәре тәү башлап 1966 йылда донъя күргән коллектив хеҙмәт — педагогия училищелары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегендә лә ғәйәт үҙенсәлекле сағылыш тапты. Ғалим башҡорт теленән юғары кимәлдәге мәктәп дәреслектәре әҙерләү эшенә күп көс һалды. Ауыр тоталитар режим йылдарында, асылда, Ж.Ғ. Кейекбаевтың тырышлығы һәм фиҙаҡәрлеге һөҙөмтәһендә башҡорт мәктәптәре өсөн тотороҡло, оҙаҡ ваҡыттар уңышлы ҡулланылып килгән дәреслектәр донъя күрҙе.

Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев хаҡлы рәүештә Башҡортостанда урал-алтай телдәрен сағыштырма-тарихи өйрәнеү мәктәбенә нигеҙ һалыусы тип иçәпләнә. Уның был йүнәлештәге мөһим хеҙмәттәренең береһе — «Урал-алтай тел белеменә инеш» тигән китабы, үкенескә ҡаршы, ғалим үлгәндән һуң, 1972 йылда ғына нәшер ителде. Ж.Ғ. Кейекбаевтың урал-алтаистика фәнен үçтереүгә индергән төп яңылыҡ — билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы. Нәҡ ошо теория нигеҙендә ғалим был телдәрҙең эске төҙөлөшөндә уртаҡ һыҙаттарҙы билдәләй, грамматик формаларының бер үк типта булыуын асыҡлай, шунан сығып, уларҙың алыç дәүерҙәрҙә ҡәрҙәш телдәр булғанлығын дәлилләй. Ҡәрҙәш һәм алыç ҡәрҙәш телдәрҙе өйрәнеүҙә Ж.Ғ. Кейекбаевтың билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһы хәҙер ҙә ышаныслы ғилми метод булараҡ киң

ҡулланыла. Жәлил Ғиниәт улының университетта башҡорт һәм төрки телдәренең тарихи грамматикаһына арналған лекциялары төркиәтсе ғалимдарҙың республикала өр-яңы быуынын үҫтереүгә булышлыҡ итте.

Ж.Ғ. Кейекбаев тел белеменең, ғилми әҙәби телебеҙ үҫешенең асылда барлыҡ өлкәләрендә лә һиҙелерлек эҙ ҡалдырҙы. Уның, мәҫәлән, кеше исемдәре, топонимика мәсьәләләренә арналған мәҡәләләре ваҡытында ҙур шаңдау тыуҙырҙы. 1956 йылда БДУ-ның «Ғилми яҙмалары»нда рус телендә баҫылып сыҡҡан «Башҡорт топонимикаһы мәсьәләләре» мәҡәләһе республикабыҙҙа фәндең ошо тармағы менән шөғөлләнеүселәр өсөн төплө ғилми тикшеренеүҙең өлгөһө булды.

Башҡорт тел белемендә Жәлил Ғиниәт улы күтәргән бик күп мәсьәләләр буйынса әлдән-әле тәрән йөкмәткеле тикшеренеүҙәр баҫылып тора. Диалектология, топонимика, башҡорт теленең грамматикаһы өлкәһендә фундаменталь хеҙмәттәр баҫылды.

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев фән донъяһында ҙур абруй ҡаҙанған атаҡлы лингвист, талантлы яҙыусы һәм педагог, саф күңелле, оло йөрәкле ҙур шәхес һәм эшмәкәр ине. Уның башҡорт фәненә һәм милли мәҙәниәте үҫешенә индергән хеҙмәттәрен халҡыбыҙ ҙа, хөкүмәтебеҙ ҙә юғары баһаланы. Ғалим Ленин (1967) һәм «Почет Билдәһе» (1961) ордендары менән наградланды. Дөрөҫ, был наградалар, исемдәр, вазифаларға ҡарап, арҙаҡлы ғалимдың тормош юлы еңел генә булған тип уйлау урынһыҙ булыр ине. Жәлил ағайыбыҙ башҡорт яҙмышы өсөн айырыуса ауыр йылдарҙа йәшәне. Уға әсеһен дә, сөсөһөн дә күп татырға тура килә. Ләкин ул бер генә көнөн дә, сәғәтен дә бушҡа үткәрмәй, үҙ алдына оло маҡсаттар ҡуйып, алһыҙ-ялһыҙ ижади хеҙмәт эше менән мәшғүл була. Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың тормошо — ватаныбыҙға оло мөхәббәт менән, дәртле һәм илһамланып йәшәү, фәнгә һәм халҡыбыҙға изгелекле хеҙмәт күрһәтеүҙең һоҡланғыс бер өлгөһө. Башҡорттоң рухи мәҙәниәт тарихында был исем ғүмер-ғүмергә балҡып торасаҡ.

* * *

Әҙәбиәт: Зәкиев М.З. Дәртле йыр: Ж.Ғ. Кейекбаевтың тормошо һәм эшмәкәрлеге. Өфө, 1974; Ғәйнуллин М.Ф., Хөсәйенов Ғ.Б. Совет Башҡортостаны яҙыусылары. Биобиблиографик белешмә. Өфө, 1988; Жәлил Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр. Төҙөүселәре Әнүр Вахитов, Әмир Әминев. Өфө, 1989; Профессор Дж.Г. Киекбаев: Тезисы докладов и сообщений научной конференции. Уфа, 1991; Киекбаев Дж.Г. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Зәйнуллин М.В. Кейекбаев

— ғалим // Ватандаш. 1997, № 1. 168—171-се биттәр.

Әҫәрҙәр: Введение в урало-алтайское языкознание. Уфа, 1972; Основы исторической грамматики урало-алтайских языков: Структурный анализ морфологического строя тюркских, монгольских, тунгусо-маньчжурских и угро-финских языков на основе теории определенности в языке. Научный редактор И.Г. Илишев. Уфа: Китап, 1996. 369 бит; Башҡорт теленең фонетикаһы. Өфө: БДУ, 2002. 212 бит; Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө: БДУ, 2002; Избранные статьи. Составители М.В. Зайнуллин, Р.Я. Хуснетдинова. Уфа: РИО БГУ, 2002.

Ҡадир Тимерғазин
(1913—1963)



Башҡортостанда нефть геологияһын башлап ебәреүселәрҙең һәм Волга менән Урал араһында (йәғни «Икенсе Баҡы»ла) девон нефтен асыусыларҙың береһе, атаҡлы нефтсе-геолог һәм йәмәғәт эшмәкәре, геология-минералогия фәндәре докторы (1958), профессор (1960), РСФСР-ҙың атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре (1957) Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин 1913 йылдың 5 февралендә элекке Пермь губернаһы Шадрин өйәҙе Әмин олоҫоноң (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы) Аҡ Сабаҡ (Сабаҡтыкүл) тигән башҡорт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған.

Ҡадир ғаиләлә һигеҙенсе бала була. Туғыҙ йәш тулғас та, ул ағаһы Вәхит менән ауыл көтөүен көтөргә яллана. Ҡыштарын Ҡадир биш саҡрымдағы күрше ауыл мәктәбенә йөрөп һабаҡ ала. 1926 йылда уны Әмин ауылы кулактарының береһенә ялсылыҡҡа бирәләр. 1927 йылдың эҫе йәйендә Әмингә землемер-топографтар килә. Улар әлеге кулактан арендаға ат алып торалар. Ә хужа күсер итеп йәй буйына ат йөрөтөргә Ҡадирҙы биреп ҡуя. Топографтар менән бергә үткәргән ул йәйге көндәр ун дүрт йәшлек үҫмерҙең артабанғы бөтөн тормошона тәрән йоғонто яһай. Ауылдан ауылға йөрөгән саҡта ул Арғаяш кантонының Тутняр ауылында башҡорт балалары өсөн интернат-мәктәп асылғанлығы тураһында ишетеп ҡала. 1927 йылдың сентябрь кистәренең береһендә Ҡадир, бер иптәш малайын ҡотортоп, кулактан ҡасып сығып китә һәм алыҫ юлдың күп өлөшөн йәйәүләп үтеп, ошо рус ауылында урынлашҡан II баҫҡыс Арғаяш башҡорт интернат-мәктәбенә барып, уҡырға керәләр. Ҡадир унда өс йыл уҡый. 1930 йылда уны, иң яҡшы уҡыусы булараҡ, Өфөгә Баһау Нуриманов исемендәге рабфактың әҙерлек курстарына ебәрәләр. Шул уҡ йылда Ҡ.Р. Тимерғазин, Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссариаты тәҡдиме буйынса, В.И. Ульянов-Ленин исемендәге Ҡазан дәүләт университетының

геология факультетына ҡабул ителә. 1935 йылда университетты тик бишлегә генә тамамлаған, Өфөгә ҡайтып, тулыһынса ғәмәли эшмәкәрлеккә сума. Бында ул ике йыл Башнефтекомбинаттың яңы ойошторолған Үҙәк ғилми-тикшеренеү лабораторияһында (ЦНИЛ) ғилми хеҙмәткәр, петрография кабинетында петрограф булып эшләй. 1937 йылда шул уҡ лабораторияның геология кабинеты начальнигы итеп тәғәйенләнә. Ҡадир Рәхим улы тәүгеләрҙән булып нефть ятҡылығына, Көньяҡ Уралдың көнбайыш битләүендәге Өфө ярусының ҡыҙыл төҫтәге Нөгөш ҡырҡылышына тасуирлама яһай. Ул Өфөгә ҡайтып эшкә урынлашҡандың тәүге йылында уҡ Туймазы районы геологияһын өйрәнеү эшенә ҡушылып китә. 1937 йылдың майында Туймазы майҙанында ташкүмер ҡатламының аҫҡы өлөшөндә нефть ятҡылығы табыла. Ҡ.Р. Тимерғазин 1939—1941 йылдарҙа Туймазы районының пермь, ташкүмер, девон ҡатламдарына эҙмә-эҙлекле һәм үҙ-ара бәйләнешле тикшереү үткәрә. 1940 йылда ул девондың терриген ҡатламдарына скважиналар быраулау буйынса тәкдимдәр эшләй. Ҡ.Р. Тимерғазин менән буласаҡ академик А.А. Трофимук Туймазы структураһының девон ҡатламдарының нефткә бай булыуы тураһында фараз бирҙеләр һәм бында разведкаға быраулау мәсьәләһен көн тәртибенә ҡуйҙылар. Билдәле.булыуынса, был фараз ил яҙмышы өсөн үтә яуаплы һәм ауыр 1944 йылдың көҙөндә ғәйәт ҙур ваҡиға — Туймазыла бай нефть ятҡылығын асыу менән раҫланды.

Ҡ.Р. Тимерғазин 1941 йылда уҡсылар дивизияһы тәфтишсеһе сифатында үҙ теләге менән һуғышҡа китә. Белоруссияны, Балтик буйын, Польшаны азат итеүҙә, Берлин өсөн барған алыштарҙа ҡатнаша. Яу яландарында күрһәткән батырлыҡтары өсөн уға 20 тапҡыр Юғары баш командующийҙың рәхмәте белдерелә, ул Ҡыҙыл Йондоҙ, II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, бер нисә миҙал менән наградлана.

1946 йылда Ҡ.Р. Тимерғазин армиянан демобилизациялана һәм, Өфөгә ҡайтыу менән, уны Башнефттең Үҙәк ғилми-тикшеренеү лабораторияһына директор итеп тәғәйенләйҙәр. 1946—1947 йылдарҙа ул, СССР Нефть сәнәғәте министрлығы һәм партияның Башҡортостан өлкә комитеты йөкмәтеүе буйынса, Үҙәк ғилми-тикшеренеү лабораторияһы нигеҙендә тармаҡтың өр-яңы ғилми ойошмаһы — Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институтын ойоштороу эшенә етәкселек итә. 1947-1951 йылдарҙа Ҡадир Рәхим улы ошо уҡ институттың литология һәм геохимия лабораторияһы мөдире, геология бүлеге начальнигы вазифаһында Туймазы һәм уға күрше районлдарҙа девон ятҡылыҡтарын өйрәнеү эшен дауам итә. 1949 йылда ул Баулы — Туймазы нефть районының девон ҡатламдарын тикшереүгә арналған хеҙмәте менән кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.

1951 йылдың 15 июлендә Ҡ.Р. Тимерғазин Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының ҡарары менән СССР Фәндәр академияһының яңы ойошторoласаҡ Башҡортостан филиалының Президиум ағзаһы итеп билдәләнә, уға филиал нигеҙендә Тау-геология институтын төҙөү бурысы йөкмәтелә. Ҡадир Рәхим улы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Тау-геология институтының ғилми коллективын формалаштыра һәм уның тикшеренеү эштәренең төп йүнәлештәрен билдәләү буйынса бик ҙур эш башҡара. 1953—1956 йылдарҙа ул СССР Фәндәр академияһының Нефть институтында докторантурала була, 1958 йылда башҡорттарҙан тәүгеләрҙән булып геология-минералогия фәндәре докторы ғилми дәрәжәһенә диссертация яҡлай. Был хеҙмәтендә Ҡ.Р. Тимерғазин Рус платформаһының көнсығышында девонға тиклемге ҡатламдарҙа нефть һәм газ ятҡылыҡтарын илдә беренсе булып һәр яҡлап өйрәнә һәм нигеҙләй. Аҙаҡ Тау-геология институтының нефть һәм газ геологияһы лабораторияһы мөдире булып эшләгән йылдарҙа ошо эҙләнеүҙәрен ул тағы ла тәрәнәйтә. 1960 йылда күренекле ғалим-геологҡа профессор исеме бирелә. Ҡадир Тимерғазин девон, девонға тиклемге, кембрийға тиклемге ҡатламдарҙа нефть һәм газ ятҡылыҡтары геологияһы өлкәһендә илдә иң күренекле белгестәрҙең береһе булараҡ дан ҡаҙана.

Ул барлығы 110 ғилми хеҙмәт яҙа. Шуларҙың 70-е баҫылып сыға.

50-се йылдарҙан башлап Ҡадир Рәхим улы Башҡортостанда һәм күрше өлкәләрҙә нефть һәм газ ятҡылыҡтарын асыу өсөн алып барылған ғилми тикшеренеүҙәр тарихын өйрәнеү менән дә шөғөлләнә. Был хеҙмәттәре, белгестәрҙең фекеренсә, нефть һәм газ геологияһының алтын фондында урын ала. Уның «Башҡорт нефтенең тарихы буйынса очерктар» (Өфө, 1956, рус телендә) һәм «Башҡорт нефте, уның тарихы һәм үҫеш перспективалары» (Өфө, 1959, башҡорт телендә) тигән китаптары шундай баҫмалар рәтендә.

Башҡорт халҡының талантлы улы, атаҡлы ғалим-геолог Ҡ.Р. Тимерғазин 1963 йылдың 4 апрелендә окоп нефриты тигән ауырыуҙан Мәскәүҙә Кремль больницаһында вафат була. Арҙаҡлы ғалим баш ҡалабыҙ Өфөнөң мосолмандар зыяратына ерләнде.

* * *

Әҫәрҙәр: Додевонские образования Западной Башкирии и перспективы их нефтегазоносности. Уфа, 1959; Терригенные отложения девона Бавлинско-Туймазинского нефтеносного района. Уфа: Гилем, 2000.

Әҙәбиәт: Профессор К.Р. Тимергазин в воспоминаниях современников. Уфа, 1984; Тимергазин К.Р. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор

Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Хөсәйен Әхмәтов
(1914—1993)



XX быуат башҡорт музыка сәнғәтенең күренекле вәкиле, атаҡлы композитор һәм музыка эшмәкәре, оло талант эйәһе Хөсәйен Фәйзулла улы Әхмәтов 1914 йылдың 6 ғинуарында Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Баймаҡ районы) Сыңғыҙ ауылында тыуған. Өс йәшендә атаһы вафат булып, әсәһе Ҡәнитә апай береһенән-береһе бәләкәйерәк алты бала менән тороп ҡала. Хөсәйенгә, ауыл мәктәбендә өс йыл уҡы ғандан һуң, ун йәштән һал ағыҙыу эшенә тотоноп, хеҙмәт юлын башларға тура килә. Ул яҙғы, йәйге айҙарҙа Һаҡмар, Йылайыр, Оло Эйек йылғаларының һыу юлдары буйлап күп тапҡырҙар ҡыуғын ҡыуып төшә, хеҙмәттең әсе тирен татып, йәшәүҙең тәмен дә, михнәтен дә күреп үҫә. Ошо һалсылыҡта йөрөгән йылдарҙа уға Урал аръяғының, күк Ирәндек буйҙарының бик күп йырсыларын, ҡурайсыларын ишетеп тә, күреп тә белергә, уларҙың йыр-моңон тыңлап, күңеленә һеңдереп, тиҙ арала үҙенең дә йыраусылыҡ таланты асылып китергә насип була. Буласаҡ композитор ошо үҫмер сағынан уҡ, йыр һөйөүсе яҡташтарын таң ҡалдырып, башҡорт халҡының «Бейеш», «Ғилмияза», «Буранбай», «Ашҡаҙар», «Һыр», «Сибай» кеүек классик йырҙарын ҙур оҫталыҡ менән башҡара. Хатта бер мәлде, 20-се йылдар башында, һалсылар Һаҡмар буйлап Ырымбурға барып етеп, ул ҡаланың иң күркәм йорто, башҡорт халҡының тарихи ҡомартҡыһы Каруанһарайҙа йырлаталар Хөсәйен Әхмәтовты. Был ваҡиға һәм һал өҫтөндә үткән оҙон-оҙон бормалы һыу юлдары, яр буйҙарында туҡтап, усаҡ яғып үткәргән серле кистәр, осраған бер ерҙә тирә-яҡ ауылдарының халҡы менән аралашыуҙар, йыр йырлау һәм йыр тыңлауҙар Хөсәйен ағайҙың күңелендә ғүмерлеккә үтә яҡты һәм ҡәҙерле иҫтәлек булып һаҡлана, тормоштоң ауыр йә болоҡһоу ваҡыттарында уға дәрт, илһам бирә, тыуған-үҫкән төйәгенә, яҡташтарына ҡарата оло һөйөү һәм ихтирам

тойғоларын уята.

1929—1930 йылдарҙа Хөсәйен Әхмәтов Баймаҡ тау-сәнәғәт мәктәбендә уҡый, алдағы йылында Ҡазан музыка техникумына барып керә. 1932 йылда, музыка техникумын тамамлағандан һуң, талантлы йәш йырсы Х.Ф. Әхмәтовты Башҡортостан хөкүмәте Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендә ойошторолған Башҡорт опера студияһына уҡырға ебәрә. Консерваторияла вокал буйынса белем алыу менән бер рәттән, 1936—1941 йылдарҙа Е.О. Месснер һәм Ю.М. Яцевич класында композиторлыҡҡа уҡый һәм үҙенең артабанғы яҙмышын тулыһынса ижадтың шул төрөнә арнай. Һуғыш башланғас, уҡыуын туҡтатып, Мәскәү ҡалаһының Красная Пресня районы истребителдәр батальоны сафында илдең баш ҡалаһын һаҡлауҙа ҡатнаша. Ауырып, хәрби хеҙмәттән бушатылғас, Өфөгә ҡайтып, 1942—1944 йылдарҙа Башҡортостан радиотапшырыуҙар редакцияһында эшләй. 1945 йылда профессор А.Н. Александров класында Мәскәү консерваторияһын тамамлай. 1945—1947 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының сәнғәт идаралығы эргәһендәге фольклор кабинетына етәкселек итә. Ошо осорҙа ул башҡорт халыҡ йырҙарын йыйыу һәм эшкәртеү эшенә ныҡлап тотона, был эшмәкәрлек уның артабанғы ижадында бик мөһим йүнәлеште билдәләй. 1946 йылдан алып 1974 йылға тиклем, 28 йыл буйы, композитор Хөсәйен Әхмәтов Башҡорт дәүләт филармонияһының художество етәксеһе вазифаһын башҡара. Шул уҡ ваҡытта 1948—1954 йылдарҙа ул Башҡортостан Композиторҙар союзына етәкселек итә, бер нисә мәртәбә СССР һәм РСФСР Композиторҙар союзы идараһына һәм секретариатына ағза итеп һайлана. Ул йәнә ике һайлауҙа халыҡ депутаттарының Өфө ҡала Советы депутаты була. 1959 йылда Прагала Бөтөн донъя Тыныслыҡ советының юбилей конференцияһында ҡатнаша. 1974 йылда пенсияға сыҡҡандан һуң да өлкән композитор ижтимағи эшмәкәрлеген дауам итте, күп йылдар буйы Башҡорт АССР-ы Хор йәмғиәтенең рәйесе, Бөтөн Рәсәй Хор йәмғиәтенең президиум ағзаһы булып торҙо.



Х. Әхмәтов замандаш композиторҙар араһында.

Хөсәйен Әхмәтов ижады — киң ҡоласлы, күп ҡырлы, һоҡланғыс һәм үҙенсәлекле сағыу бер күренеш. Ул музыка мәҙәниәтенең төрлө тармаҡтарында бик ҙур уңыштар һәм ҡаҙаныштар яулауға өлгәшә. Йырҙар, романстар, баллададар, хор, инструменталь һәм симфоник әҫәрҙәр, опера, балет, театр спектаклдәренә музыка — бына уның ижад диапазонын билдәләүсе жанрҙар. Ә ниндәй фольклорсы, халыҡ йырҙарын йыйыусы, ҙур оҫталыҡ һәм нескәлек менән эшкәртеүсе, баҫырға әҙерләүсе, юғары квалификациялы музыка мөхәррире ине ул! Бер нисә миҫал килтереп үтәйек: 50-се йылдарҙа йырсы-композитор 100-ҙән ашыу башҡорт халыҡ йырын үҙенең башҡарыуында нотаға яҙып ала. Был яҙмалар беҙҙең йыр мәҙәниәтебеҙҙең алтын фондына инерлек ҡиммәтле мираҫҡа әйләнә. 1954 йылда Х.Ф. Әхмәтов, Л.Н. Лебединский һәм Ә.И. Харисов менән бергә «Башҡорт халыҡ йырҙары» тигән ғәйәт ҙур китапты әҙерләп һәм мөхәррирләп, нәшер итә. Был баҫма үҙенең ғилми нигеҙлелеге, бай материалы, тулылығы менән оҙаҡ йылдар буйы берҙән-бер йырҙар йыйынтығы булып ҡала. 1978 йылда «Советский композитор» нәшриәте «Фольклорсы коллекцияһынан» серияһында Хөсәйен Әхмәтовтың «Башҡорт халҡының оҙон көйҙәре» исемле йыйынтығын баҫып сығарҙы. Китапҡа Хөсәйен Фәйзулла улы башҡарыуында классик йырҙарыбыҙҙың ҡушымта итеп бирелеүе халыҡ ижады өлгөләренең аҫылдан да аҫыл мираҫы булараҡ айырыуса ҙур әһәмиәт ҡаҙанды. Был ҡушымта Хөсәйен Әхмәтовтың башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыу оҫталығын өйрәнеү өсөн бер сығанаҡ булыуы, уның, йырсы булараҡ, тере тауышын һаҡлауы менән дә ҡиммәтле. Ошо урында атаҡлы композиторҙың ғәжәп үҙенсәлекле әҫәре — илаһи башҡорт халыҡ йыры «Буранбай» темаһына скрипка һәм фортепиано өсөн фантазияһы тураһында ла әйтеп үтергә мөмкин. Халыҡ рухында боронғоноң аманаты һәм беҙҙең дәүер кешеһенең киләсәккә

яҡты өмөт һәм хыялдары бергә ҡушылған, аҫыл бер бөтөнлөк барлыҡҡа килтерелгән бында.

Хөсәйен Әхмәтов, үҙе йыр ижадсыһы һәм фольклорсы булараҡ, башҡорт йыр мәҙәниәтен үҫтереүгә айырыуса ҙур өлөш индерҙе. Йырсы композитор булараҡ, халыҡсанлыҡ, милли моң тәрәнлеге йәһәтенән XX быуат башҡорт профессиональ музыка сәнғәтендә Х.Ф. Әхмәтов һирәк һәм ҡабатланмаҫ күренештәрҙең береһе. Уның ижад багажында бик күп шағирҙарҙың һүҙҙәренә яҙылған 250-нән артыҡ йыр иҫәпләнә. Ләкин эш һанда ғына түгел. Уның вокаль музыка өлкәһендәге ижады яңы асыштар менән билдәләнде. Ул һәр саҡ башҡорт халыҡ музыкаһына тоғро булды, шул уҡ ваҡытта халыҡтың музыка интонацияһын өр-яңы бейеклектәргә күтәреүсе ижадсы ла. Халҡыбыҙҙың милли художестволы фекерләүенә таянып, башҡорт һәм рус классик музыкаһы традицияларын файҙаланып, композитор үҙенә генә хас һүрәтләү стилен формалаштырҙы. Һөҙөмтәлә ул элекке СССР (хәҙерге Рәсәй һәм яҡын сит илдәр) халыҡтарының музыка сәнғәтендә заманыбыҙҙың классикаһы кимәлендә ижад итеү юғарылығына өлгәште. Йәш композиторҙар өсөн үҙебеҙҙең милли музыка интонацияһын, мелодиканы, ритмиканы үҫтереү планында Х. Ф. Әхмәтов мираҫы үҙе бер мәктәп.

Хөсәйен Фәйзулла улына милли музыка сәнғәтендә тәүбашлап вокаль баллада, вокаль поэма, вокаль этюд-картина, романс һымаҡ үҙенсәлекле жанрҙарҙы асыу һәм шул жанрҙарҙың һәр береһендә килер быуындар өсөн дә өлгө булырҙай әҫәрҙәр ижад итеү бәхете тейҙе.

Йырсы композиторҙың ижады тыуған еребеҙгә, изге төйәгебеҙ Уралға, республикабыҙға, халҡыбыҙҙың героик тарихына, арҙаҡлы улдарына һәм ҡыҙҙарына дан йыры булып яңғырай. Хөсәйен Әхмәтовтың тыуған еребеҙҙең күрке булған ауыл һәм ҡалаларыбыҙға арналған ғәжәп матур йырҙары бар. Ә уның үҙ һүҙҙәренә яҙылған «Тыуған ауылым» әҫәре ысын халыҡ йырына әйләнде. Баш ҡалабыҙ Өфө куранттарында тиҫтәләрсә йылдар буйы көн һайын Х.Ф. Әхмәтов яҙған көйҙөң яңғырауы, Өфөнөң был көйҙө үҙенең музыкаль символы тип ҡабул итеүе — композиторҙың шулай уҡ ижади уңышы.

1981 йылда атаҡлы башҡорт мәғрифәтсе шағиры Мифтахетдин Аҡмулла һүҙҙәренә яҙылған йырҙар циклы ғәжәп яғымлы, тәрән фәлсәфәле һәм милли колоритлы булыуы менән айырылып тора.

Композитор Х.Ф. Әхмәтовтың вокаль музыка ижадына монументаллекҡә, форма төрлөлөгөнә ынтылыу хас. Бөйөк Ватан һуғышына арналған балладалар циклы (17 әҫәрҙе берләштерә), Рәшит Назаров шиғырҙарына «Мөхәббәт ул — утлы йәшен» тигән йырҙар шәлкеме — композиторҙың был өлкәләге оло ҡаҙанышы.

Хөсәйен Әхмәтов ижадында йәнә «Пушкиниана» һәм Сергей Есенин һүҙҙәренә яҙылған «Фарсы моңдары» тигән циклдар башҡорт музыка сәнғәтенең рус поэзияһы классик өлгөләренә мөрәжәғәт итеүенең ғәйәт үҙенсәлекле күренеше был. Ул циклдарҙа башҡорттоң милли моң стихияһы тәбиғи рәүештә рус шиғриәтенең поэтикаһына үтеп инә, был ике стихия бер-береһе менән үрелеп үҫә һәм быға саҡлы булмаған музыкаль яңғырашты барлыҡҡа килтерә. Ирекһеҙҙән шуны уйлайһың: Пушкин әҫәрҙәре лә, бигерәк тә Есениндың Шәреҡ биҙәктәре менән нағышланған «Фарсы моңдары» ла музыкала үҙҙәренең ғәҙәттәгесә үк булмаған сағылышын табыр өсөн нәҡ Хөсәйен Әхмәтов һымаҡ милли үҙенсәлекле һәм киң диапазонлы, тәрән лирик һәм философ ижадсыны көткәндер, күрәһең.

Башҡорт инструменталь музыкаһында Хөсәйен Әхмәтов әҫәрҙәре үҙҙәренең сағыу моңо, милли һыҙатлы яҡты буяуҙары, һүнмәҫ рухы менән айырылып тора. Был сифаттар ҙа уның йыр оҫтаһы һәм йырсы композитор булыуы менән бәйле. Уның ҡыллы квартеты, фортепиано өсөн соната-фантазияһы музыка донъяһында иң талантлы әҫәрҙәр рәтендә урын алған.

Симфоник музыка — Хөсәйен Әхмәтовтың йыр һымаҡ уҡ илһамланып, ҡолас киреп ижад иткән өлкәләренең береһе. «Башҡорт лирик сюитаһы», «Урал батыр» симфоник картинаһы, ҡыллы оркестр, гобой, арфа һәм һуғып уйнау ҡоралдары өсөн сюита — был әҫәрҙәрҙең һәр береһе композиторҙың ижадында мөһим урын тота. Бигерәк тә «Башҡорт лирик сюитаһы» үҙенең тәрән лиризмы, юғары поэтикаһы менән күңелдәргә үтеп инә. Әҫәргә тыуған ер, тыуған халыҡ тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙар, башҡорт ҡобайырҙарындағыса эпиклыҡ, рухи бөйөклөк тойғоһо хас. «Урал батыр» симфоник картинаһы шул уҡ темаларҙы, уй-тойғоларҙы дауам итә, артабан үҫтерә, тәрәнәйтә.

Хөсәйен Әхмәтов башҡорт шағирҙарынан йәнә Шәйехзада Бабич, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Ҡадир Даян, Нәжиб Иҙелбай, Ғилемдар Рамазанов, Яҡуп Ҡолмой, Назар Нәжми, Мостай Кәрим, Абдулхаҡ Игебаев һүҙҙәренә күп кенә йырҙар, хор әҫәрҙәре ижад итте. Композитор музыка сәнғәтебеҙҙә хор жанрын үҫтереүгә ҙур һәм тос өлөш индерҙе.

1958 йылда Өфөлә башҡорт халҡының легендар улы, шағир һәм полководец Салауат Юлаев образына арналған «Тау бөркөтө» балетының премьераһы ҙур уңыш менән үтте. Башҡорт балеты үҫешендә билдәле ҡаҙаныш тип баһаланған был киң күләмле әҫәрҙе Хөсәйен Әхмәтов Хәләф Сафиуллин либреттоһына Нариман Сабитов менән берлектә ижад итте.

Композитор Х.Ф. Әхмәтов ижадының иң сағыу күренеше — уның «Замандаштар» операһы (Баязит Бикбай либреттоһы). Операның премьераһы

Өфөлә 1970 йылдың 11 декабрендә уҙғарылды. «Замандаштар»ҙа, исеме үк әйтеп тороуынса, беҙҙең дәүер кешеләре, башҡорт нефтен асыусылар, йәштәр, уларҙың уй-тойғолары, яҙмыштары, хеҙмәт романтикаһы, дуҫлыҡ, мөхәббәт тасуирлана. Әҫәр башҡорт милли сәнғәтенең алтын фондына инде. «Замандаштар» тулы көйөнсә 1978 йылда Мәскәүҙең «Советский композитор» нәшриәтендә баҫылып сыҡты.

Хөсәйен Әхмәтовтың 70—80-се йылдарҙағы ижады ла ғәйәт емешле булды. Шуның һоҡланғыс өлгөләре – композиторҙың вокаль поэмалары һәм «Урал күренештәре» исемле вокаль циклы. Бында авторҙың башҡорт музыка фольклорынан, оҙон көйҙәрҙән килгән моң, кисерештәр тәрәнлеге уның эҙләнеүе һәм табыштары менән бергә үрелгән. Белгестәр был вокаль әҫәрҙәрҙе башҡорт милли музыка интонацияһын үҫтереүҙә яңы бер ҡаҙаныш тип баһалай. Был ҡаҙаныштар композиторҙың аҡҡош йыры — «Нәркәс» операһында ғәйәт киң ҡулланылды, артабан да үҫтерелде.

Атаҡлы композитор, халыҡ ижады белгесе, музыка эшмәкәре Хөсәйен Фәйзулла улы Әхмәтовтың илһамлы ижади эшмәкәрлеген илебеҙ һәм халҡыбыҙ юғары баһаланы. Уға РСФСР-ҙың һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың халыҡ артисы тигән маҡтаулы исемдәр бирелде. Х.Ф. Әхмәтовҡа йыр һәм инструменталь музыка өлкәһендәге уңыштары өсөн 1968 йылда республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы тапшырылды. Уның Тыуған ил алдындағы фиҙаҡәр хеҙмәте Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, ике «Почет Билдәһе» ордендары һәм миҙалдар менән билдәләнде.

Композитор Х.Ф. Әхмәтов 1993 йылдың 8 ғинуарында, 79 йәшендә, Өфө ҡалаһында донъя ҡуйҙы.

Хөсәйен Әхмәтов ижады — башҡорт музыка сәнғәтенең ҡабатланмаҫ күренештәренең береһе, беҙҙең рухи донъябыҙҙың ысын мәғәнәһендә йәйғор балҡышы ул. Халҡыбыҙҙың бөйөк милли шағиры Шәйехзада Бабич һымаҡ уҡ, ғәләмгә яңғыратырлыҡ итеп: «Ал да нур сәс халҡыңа!» — тип әйтергә ул хаҡлы ине, әлбиттә. Ғәзиз тыуған еребеҙгә, туған халҡыбыҙға, быуындарҙан быуындарға аҫыл аманат булып тапшырыла килгән йыр-моңдарыбыҙға олонан да оло мөхәббәт һаҡлап, шул мөхәббәт хаҡына арымай-талмай ижад итеп, донъяла һирәк була торған бай һәм ҡабатланмаҫ мираҫ ҡалдырҙы Хөсәйен ағай Әхмәтов.

* * *

Әҙәбиәт: Шумская Н. Хусаин Ахметов. Уфа, 1968; Галина Г. Хусаин Ахметов:

Жизнь. Творчество. Время. Уфа: Китап, 1994; Шәкүр Р. Илһам алып тыуған төйәктән // Сыңрау торналар иле. Өфө: Китап, 1996. 284—289-сы биттәр; Ахметов Х.Ф. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Мәғәфүр Хисмәтуллин
(1915-2004)



Башҡорт халҡының йыр сәнғәтендә мәңгелек исемдәр, күңел киңлектәрендә мәңге балҡып торорҙай яҡты йондоҙҙар бар. Илаһи йыр оҫтаһы Мәғәфүр Хисмәтуллин — шундай сағыу һәм һирәк тыуа торған шәхестәрҙең береһе. Уның исеме күптән инде башҡорт йыр һәм моңоноң символына, башҡорттоң оҙон көйлө боронғо классик йырҙарын башҡарыуҙа ул үҙе бер оҫталыҡ мәктәбенә, ҡабатланмаҫ күренешкә әйләнде. Боронғо көйҙө ул юғары профессионаллек, опера сәнғәтенә хас фекерләү ҡеүәһе менән бергә бәйләне. Халыҡ йырына, йөрәк түренән сыҡҡан милли моңға башҡарыу оҫталығын ҡушып, опера йырсыһы булараҡ ул профессиональ сәнғәткә, милли операларыбыҙға башҡорт халыҡ моңоноң аһәңен алып килде, шуның менән йыр сәнғәтенең һәр ике төрөндә берҙәй үк уңышҡа, дан-шөһрәткә өлгәште. Уның бүтән талантлы йырсыларҙан айырмалы, үҙенсәлекле яҡтары һәм, ғөмүмән, ижадының ҡабатланмаҫ һыҙаттары ла иң элек нәҡ бына шул ике көслө башланғыстың берлегендә булһа кәрәк.

Халыҡ рухына, халыҡ моңона тоғролоҡ... Был фекерҙең ҡиммәтен һәм әһәмиәтен баһалап бөтөрҙәй ниндәй генә һүҙҙәр бар икән? Бөтөн йәшлеге, оҙон ижад ғүмере шәхес культы, тоталитар режим дәүерҙәре аша үткән милли йырсы һәм сәнғәт эшмәкәре өсөн уның мәғәнәһе бермә-бер ҡәҙерлелер, моғайын. Хәйер, кемдең генә тормош юлы тураһында һөйләргә булһаң да, һүҙ башы барыбер тыуған тупраҡҡа, быуын-быуын ата-бабалар ғүмер иткән, донъя көткән изге тыуған төйәккә барып тоташа.

Мәғәфүр Хисмәтулла улы Хисмәтуллин — мең ҡәүеменең ҡобау-мең ырыуы башҡорто. Ул 1915 йылдың 23 ғинуарында элекке Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Иглин районының) Яңы Ҡобау ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Атаһы империалистик һуғыш утында хәбәрһеҙ юғала. Әсәләре иһә ҡулында өс бала менән яңғыҙы тороп ҡала. Шуға

күрә Мәғәфүргә кесе йәштән ауыр крәҫтиән хеҙмәтенә егелеп үҫергә тура килә. Ҡыйындың ҡаймағын имерһең тигәндәй, аҙаҡ, ижад юлына аяҡ баҫҡас, уңғанлыҡ, эш һөйөүсәнлек уға бик күп ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға, яңынан-яңы бейеклектәргә артылырға ярҙам итә. Иң мөһиме — тыуған ер, тыуған тупраҡ йылыһы, әсәһенең моңло йырҙары, ауыл кистәре, Салауат эҙҙәрен һаҡлаған тауҙар, үҙәндәр, тау ҡыуышлыҡтары, башҡорт батырҙары тураһында риүәйәт һәм легендалар уның күңелендә һәм зиһенендә ғүмерлеккә урын ала, уйҙарына, хыялдарына ҡанат ҡуя. Үҫмер сағынан уҡ ул ҡулына гармун ала, йырға, бейеүгә әүәҫ була, мәктәптә һәм ауыл клубында художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәктәрендә ҡатнаша башлай. 1929 йылда башланғыс мәктәпте тамамлай, алдағы йылына, Өфөгә килеп, тимер юл курстарына. уҡырға инә, бер йыл тимер юлда эшләй. 1931—1934 йылдарҙа Башҡорт театр техникумының театр бүлексәһендә уҡый. Техникумда уҡыған осорҙа тәү башлап профессиональ сәхнәгә аяҡ баҫа: уны Башҡорт академия драма театрына эпизодик ролдәрҙә уйнарға саҡыралар. Йәйге гастролдәр ваҡытында театр труппаһы менән алыҫ райондарға сығыу, йырсылар, ҡурайсылар менән осрашыуҙар күңелен байыта, онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдыра. Артабан, Баймаҡ колхоз-совхоз театрында актер булып эшләгән аҙ ғына ваҡыт (1934 йылдың ноябренән 1936 йылдың авгусына тиклем) уның актерлыҡ ижадында бик ҡәҙерле бер миҙгелгә әйләнә. Бында ул, драма артисы булараҡ, Д. Юлтыйҙың «Ҡарағол», А. Таһировтың «Алатау», С. Мифтаховтың «Һаҡмар» әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙә уйнай. Бигерәк тә «Ҡарағол»да Әпкәләй, «Алатау»ҙа көтөүсе Әхмәр ролдәрен башҡарып, уңыш ҡаҙана. Әгәр ҙә театр уға сәхнә оҫталығын үҫтереү юлында бер баҫҡыс булһа, йырлы, моңло Баймаҡ төбәгендә, Урал аръяғында йәшәү буласаҡ йырсы өсөн айырыуса әһәмиәт ҡаҙана. Ошонда ул үҙенең ғүмерлек юлдашы, башҡорт халыҡ йырҙарын бөтөн нескәлектәренә тиклем белеп башҡарыусы йырсы ҡыҙ Сөйөмбикә Кулибаева менән осраша.

1936 йылдың авгусында нәҡ бына Баймаҡтың үҙенә Мәскәү дәүләт консерваторияһының Башҡорт бүлексәһенә йәш таланттарҙы һайлап алыу өсөн комиссия килеп төшә. М. Хисмәтуллин, комиссия алдында һынау тотоп, Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши һәм В. Виноградовтың М. Ғафури либреттоһына яҙылған «Эшсе» операһынан атаҡлы Ниғмәт арияһын башҡара. Йәш йырсының тауышын да, артислыҡ һәләтен дә, тауыш һәм ритм һиҙгерлеген дә юғары баһалайҙар. Шулай итеп, уның яҙмышында өр-яңы хыял киңлектәре асыла. Консерваторияла М. Хисмәтуллин тәжрибәле педагог, профессор Евгений Владимирович Енохович класында уҡый. Хоҙайҙан бирелгән талант янына тырышлыҡты ҡушыу, тауыш һәм актерлыҡ оҫталығын үҫтереү

йүнәлешендә айҙар, йылдар буйы алһыҙ-ялһыҙ эшләү үҙенекен итә. М. Хисмәтуллин ошо студент йылдарында уҡ, йәйге каникул көндәрендә Башҡортостанға ҡайтып, концерт бригадалары менән бергә сығыш яһай. «Консерваторияның дүртенсе курсынан һуң, 1941 йылдың ғинуарынан, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында эшләй башланым. Артабан вокал менән үҙ аллы шөғөлләндем, — ти үҙе тураһында Мәғәфүр ағай. — Яҡшы йырҙарҙы күп тыңланым, һәйбәт башҡарыусыларҙан Лемешев, Шаляпин халыҡ йырын нисек башҡарған, шулай йырлауҙы маҡсат итеп ҡуйҙым. Халыҡ көйҙәрен бельканто манераһында, Европалағыса яңғыратырға тырыштым»[1].

«Беҙҙең башҡорт халыҡ йыры классик операларҙың ариялары кимәлендә тора. Халыҡ йырын мин ынйы-гәүһәрҙәргә тиң фольклорҙан алып классик манераға күсереүем менән бәхетлемен», - ти М. Хисмәтуллин. Әйткәндәй, был фекер һәм был маҡсат беҙҙең бөгөнгө көн, хәҙерге йыр сәнғәтебеҙ өсөн дә үтә мөһим һәм көнүҙәк. Һәр быуын йырсылары, халҡыбыҙҙың тиңдәшһеҙ йыр мираҫы йәшәһен һәм бөтөн донъя күләмендә әленән-әле нығыраҡ танылаа барһын тиһәләр, нәҡ ана шул Хисмәтуллинса юғары башҡарыу оҫталығы, Европа классикаһы менән тиң кимәлгә өлгәшеү маҡсатын да ҡуйһалар икән.

Мәғәфүр Хисмәтуллин 1941 йылдың ғинуарынан алып 47 йыл ғүмерен Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына, башҡорт опера сәнғәтенә арнай. Үҙ ғүмеренең ярты быуатҡа яҡын был дәүере тураһында Мәғәфүр ағай Башҡортостан радиоһы тапшырыуҙарының береһендә: «Ҡырҡ ете йыл йырлаған ваҡытым гел байрам булып үтте», — тине. Ижад эше менән илһамланып, ҡанатланып, сәнғәткә, халыҡ йырына ысын-ысынында оло мөхәббәт һаҡлаған, үҙ хеҙмәтенән бәхет тә, шатлыҡ та табып йәшәй белгән талант эйәләре генә әйтә ала торғандыр был һүҙҙәрҙе. Ә бит сәнғәттә бер генә уңыш та үҙлегенән генә килмәй. Күпме тир түгә, эҙләнә, икеләнеүҙәр, борсолоуҙар аша үтә ижадсы. Мәғәфүр ағайҙың үҙенең театр, опера сәнғәте менән бәйле ошондай һүҙҙәре бар: «Ролдәремде мөмкин тиклем филигранлы итеп эшләргә тырыштым», — ти ул. Филигранлы итеп эшләү — тимәк, һәр бер ролде әҙерләгәндә бөтөн нескәлектәренә ҡәҙәр уйлап, һүрәтләү сараларын мөмкин тиклем ҡулланыуға өлгәшеү тигән һүҙ. Театрҙа эшләгән осорҙа ул рус һәм донъя классикаһы, туғандаш халыҡтар һәм башҡорт композиторҙары әҫәрҙәрендә илленән ашыу опера партияларын башҡара. Бында уның тәүге роле әзербайжан композиторы Үзәир Ғәджибековтың киң билдәле «Аршин-мал алан» исемле комик операһында Вәли роле була. 1940 йылда театрҙа тәүге башҡорт милли операларының береһе — Мәсәлим Вәлиевтең «Һаҡмар» әҫәрендә Фәхри образын тыуҙыра. Х. Заимов менән А. Спадавеккианың башҡорт халыҡ эпосы мотивтары буйынса яҙылған «Аҡбуҙат» операһында

(1942) һыу аҫты батшаһы Шүлгән, Н. Чемберджиҙың «Ҡарлуғас»ында (1944) Шатморат образдары унның ижади үҫешендә ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Көнбайыш һәм рус классик операларында башҡарған ролдәре менән дә М. Хисмәтуллин музыкаль йәмәғәтселектең юғары баһаһына лайыҡ була. Был ролдәр араһында мәктәп уҡытыусыһы (П. Чайковский, «Черевички»), Винокур (Н. Римский-Корсаков, «Май төнө»), Арлекин (Р. Леонковалло, «Паяцы»), Пантелей (И. Дзержинский, «Тымыҡ Дон») партиялары айырыуса иҫтә ҡалырлыҡ була. Әммә Мәғәфүр Хисмәтуллиндың опера сәхнәһендә иң ҙур ҡаҙанышы, иң бейек артылышы — ул, әлбиттә, Салауат образы! Заһир Исмәғилевтең милли геройыбыҙға, халҡыбыҙҙың азатлыҡ көрәшенә арналған был героик операһын театр Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәтенең 1955 йылда Мәскәүҙә уҙғарылған декадаһына әҙерләй. Әҫәр сәнғәтебеҙ үҫешендә уғаса булмаған ғәйәт ҙур ваҡиға, тулҡынландырғыс тамаша тип ҡабул ителә. Операға һәм төп образды башҡарыусы Мәғәфүр Хисмәтуллин ижадына үҙәк матбуғат, илдең күренекле сәнғәт эшмәкәрҙәре ҙур иғтибар бирә. Әҫәр ысын-ысынында оҙон ғүмерле була: театрҙа күп йылдар буйы һәр бер яңы сезонды нәҡ ошо опера менән асыу үҙенсәлекле бер традицияға әйләнә. Миңә лә 60-сы йылдар башында «Салауат Юлаев» әҫәрен ҡат-ҡат тыңларға, М. Хисмәтуллинды бөйөк батырыбыҙ образында күреп, бөтмәҫ-төкәнмәҫ уй һәм тойғолар кисерергә насип булды. Мәғәфүр Хисмәтуллиндың был образды башҡарыуы килер быуындар өсөн һоҡланып һөйләрлек бер легенда булып ҡалыр, күрәһең. Сөнки спектаклдә тәүге минуттарҙан алып аҙағына тиклем Салауат рухы (тимәк, азатлыҡ һәм башҡорт рухы), Салауат тойғоһо менән йәшәйһең. Бына, йөрәктәрҙе елкендереп, илаһи увертюра тамамланыу менән үк хозур Урал тәбиғәте ҡуйынына алыҫ быуаттар төпкөлөнән йәш бәһлеүән Салауат һыны килеп баҫа һәм күҙ алдында хәҙер инде һәр беребеҙгә тиерлек таныш ваҡиғалар башланып китә. Салауат, Әминә, Юлай старшина, Салауаттың әсәһе, дуҫтары — ниндәй яҡын һәм ҡәҙерле образдар. Ә ниндәй ариялар, ниндәй моң, алҡынып торған йөрәк хистәре унда!

Хуш, Уралым,
Көмөш йылғалар, хуш,
Мин китәмен һуғыш юлына...

Был — Салауаттың, тыуған еребеҙҙе ҡурсалап, ирек даулап, яу юлына сығыр алдынан әйткән хушлашыу һүҙе. Ә Әминә арияһы «Һүндергәндәр минең күҙ нурымды...» тигән тәүге юлы, тәүге аккордтары менән үк йәндәребеҙҙе тетрәндереп, зиһенебеҙҙе биләп алыуын нисек кенә әйтеп бирергә?! Был

музыка, был бөйөк образ, әлбиттә, иң элек Заһир Исмәғилев таланты менән тыуҙырылған. Әммә сәхнәлә уны Салауатыбыҙҙың тере һыны итеп кәүҙәләндереүсе һәм йөрәк моңо итеп яңғыратыусы иң беренсе Мәғәфүр Хисмәтуллин булды. Үкенескәме, ҡыуаныскамы, ләкин әле хәҙер ҙә операбыҙ сәхнәһендә Салауат образын бер генә йырсы ла уға тиңләшерҙәй бейеклеккә күтәргәне юҡ. Башҡорт халыҡ йыр классикаһында «Буранбай», «Урал» йырсының талант һәм оҫталыҡ кимәлен билдәләүсе критерий тип ҡаралһа, милли операбыҙҙа Салауат образын Мәғәфүр Хисмәтуллинға тиңләшерлек итеп башҡарыу ҙа башҡорт йырсылары өсөн күп ваҡыттарға үҙенсә бер ижади үҫеш билдәһе булып ҡалыр, моғайын.

Мәғәфүр Хисмәтуллиндың «Салауат Юлаев» операһында тыуҙырған Салауат образы тураһында шағир Хәсән Назарҙың ошондай һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп үтеү урынлы булыр: «Салауат һынында беҙ халыҡ образын күрҙек. Ул — Хисмәтуллиндың юғары ижад йондоҙо, опера сәхнәбеҙҙең тиңдәшһеҙ ғорурлығы»[2].

Атаҡлы йырсы һәм артистың ижад биографияһында Яппар (З. Исмәғилевтең «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы), Көбәк тархан (шул уҡ авторҙың «Шәүрә» операһы), Таһир (Х. Әхмәтовтың «Замандаштар» әҫәре) образдары шулай уҡ сағыу күренеш булараҡ урын алды. Айырыуса «Ҡоҙаса»ла ул комик артист булараҡ үҙенең тәбиғи һәләтен ғәжәп тулы һәм күп яҡлы итеп асыуға өлгәште.

Режиссура — Мәғәфүр Хисмәтуллин эшмәкәрлегенең тағы бер емешле йүнәлеше. 1959 йылда ул театрҙа З. Исмәғилевтең «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһын сәхнәләштерә, спектаклдә, әйткәнебеҙсә, үҙе лә характерлы ролдә сығыш яһап, сәнғәтебеҙ тарихында үҙенсәлекле эҙ ҡалдырырҙай Яппар ҡарт образын тыуҙыра. «Ҡоҙаса» башҡорт сәхнәһенең һоҡланғыс бер күренешенә әйләнә, ул оҙаҡ йылдар буйы репертуарҙа ныҡлы урын ала. 1963 йылда был әҫәрҙе ул Ҡазанда Татар дәүләт опера һәм балет театрында ҡуйып, шулай уҡ уңышҡа өлгәшә. 1961 йылда Өфөлә үзбәк композиторы С. Юдаковтың «Мәйсәрәнең мутлыҡтары» исемле комик операһын, айырыуса 1964 йылда З. Исмәғилевтең «Шәүрә» операһын сәхнәләштереп, ул үҙен һәр йәһәттән дә өлгөргән, ҙур тәжрибә туплаған режиссер итеп танытты. 1963 йылда М. Хисмәтуллин Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының баш режиссеры итеп тәғәйенләнә. Донъя опера классикаһына мөрәжәғәт итеп, 1964—1966 йылдарҙаул П. Чайковскийҙың «Пика дамаһы», Ж. Бизеның «Кармен», А. Бородиндың «Кенәз Игорь» опералары сәхнәгә ҡуя. Артабан, 1970 йылда, Х. Әхмәтовтың «Замандаштар» әҫәрен сәхнәләштереүе милли опера сәнғәтебеҙ үҫешендә йәм-биҙәк булып урын ала.

1966—1995 йылдарҙа М. Хисмәтуллин Өфө дәүләт сәнғәт институтының вокал бүлегендә педагог булараҡ йәш йырсыларҙы тәрбиәләүгә ғәйәт ҙур өлөш индерҙе.

Әммә Мәғәфүр Хисмәтуллин тигән исем милләтебеҙ өсөн, Салауат образы һәм, Салауат образы менән бергә, бөтөнөһөнән дә бигерәк йырсы, башҡорт халыҡ йыр классикаһын донъя классикаһы кимәлендә башҡарыусы бөйөк оҫта булыуы менән ҡәҙерле.

Йырла, егет, киреп киң кукрәгең,
Яңғыратып Уралдың буйҙарын.

Ниндәй тылсым көстәре, мәңгелек моң һәм мөғжизә һалынған М. Хисмәтуллин башҡарыуында бына ошо ҡөҙрәтле «Һандуғас» йырына! «Урал», «Азамат», «Шәүрә», «Илсе Ғайса» — был йырҙарҙы беҙ фәҡәт уның йырлауы, уның тауышы аша йөрәктәребеҙҙә мәңгелек моң ташҡыны тип ҡабул итәбеҙ. Мәғәфүр ағай бик күп композиторҙар әҫәрҙәренә лә ҡанат ҡуйҙы, шулар араһында Х. Әхмәтов, З. Исмәғилев, Т. Кәримов, Р. Мортазиндың йыр һәм романстары, рус һәм татар композиторҙарының әҫәрҙәре бар. Был йырҙарҙың башҡорт сәнғәтенең алтын фондында урын алыуында композитор менән бергә йырсының да хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.

Халыҡ йырсыһы Мәғәфүр Хисмәтуллинға халыҡтың ихтирамы, рәхмәте, мөхәббәте икһеҙ-сикһеҙ. Бына йыр һөйөүселәрҙең уға биргән баһаһын билдәләүсе хаттарҙың береһе.

«Мәғәфүр ағай Хисмәтуллиндың тауышы мине бигерәк тә әсир итте, был тауыш миңә сағыу ҡояш нурына тиң, — тип яҙа Салауат районы Арҡауыл ауылынан тарих уҡытыусыһы, танылған һәүәҫкәр йырсы Искәндәр Миһранов. — Уның тауышы тембры менән мәшһүр Энрико Карузо, Беньямино Джильи, Марио Ланцаларҙың тауыш кимәлендә тора», — ти хаттың авторы. Был хаттан тағы ла ошондай һүҙҙәрҙе килтереп үтмәйенсә булмай:

«Һай, Мәғәфүр ағайҙың «Урал» йыры! Күпме ир-егеттәрҙе йөрәкһетә был йыр, көрәшкә әйҙәй.

Хөрмәтле Мәғәфүр ағай! Һеҙ үҙ ижадығыҙ менән милләтебеҙгә көс-ҡеүәт өҫтәнегеҙ, халҡыбыҙҙа милли ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләнегеҙ һәм тәрбиәләйһегеҙ. Бының өсөн һеҙгә бөткөһөҙ рәхмәт!»

Был һүҙҙәргә беҙ ҙә ихлас күңелдән ҡушылабыҙ. Эйе, башҡорт халҡының илаһи йыр донъяһында, һис бер тиңе булмаған йыр сәнғәтендә Мәғәфүр Хисмәтуллин йондоҙо мәңге балҡып торор!

Очеркты тамамлар алдынан Мәғәфүр ағайыбыҙҙың яҡташы, ырыуҙашы,

шағир Ихсан Әхтәмйәновтың мәшһүр йырсыбыҙға арнап ижад иткән «Тауға ҡарап...» тигән шиғыры менән танышып үтәйек. Шиғырҙы, ике генә строфаһын ҡыҫҡартып, тулыһынса тиерлек килтерәм.

Йыр башланың...
Кинәт йыһан тынды,
Тынды күкрәктәге һулыштар.
Тынды туҫтаҡ сыңы табындарҙа,
Тынды ҡыйралышлы һуғыштар.
Барлыҡ ғаләм тыңлай ине был мәл
Ер аһ-зарын, Ватан оранын:
«Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын...»
Йыр ағыла күңел киңлегенән,
Аша тауҙар, аша даръялар,
Ҡитғаларҙы, тып-тын тыңлатырлыҡ
Бындайын йыр тағы ҡайҙа бар?!
Бындайын йыр...
Һәм шундайын йырсы!
Береһе өсөн береһе тыуғандай.
Ошо йырға — Урал шаңдауына —
Бар донъябыҙ хатта һыйғандай.
...Мәғәфүргә ҡарап, тау — тау булһын,
Кеше — кеше булһын. Шул етә.
Беҙ — мәңгелек, сая Салауаттар,
Мәғәфүрҙәр торһа Бейектә.

Мәғәфүр Хисмәтуллин ижадын илебеҙ хөкүмәте юғары баһаланы. Уға Башҡортостандың (1953) һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы (1965) тигән маҡтаулы исемдәр бирелде. Халыҡ йырсыһы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм «Почет Билдәһе» ордендары, миҙалдар менән наградланды. 1969 йылда уға концерт-башҡарыу эшмәкәрлеге өсөн республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы тапшырылды. Уның моңо, уның көмөштәй саф тауышы радио, телевидение тапшырыуҙары аша бөгөн дә миллионлаған йыр һөйөүселәрҙең, туған халҡыбыҙҙың күңел түрҙәренә үтеп инә, уй-хыялдарына ҡанат ҡуя.

* * *

[1] Әфләтунова Р. Йырсы фәлсәфәһе // Тамаша. 1993. 87-се бит.
[2] Назар Х. Моң даръяһы // Ағиҙел. 1985, № 3.

* * *

Әҙәбиәт: Хайруллин Р. Магафур Хисматуллин. Уфа, 1975; Шәкүр Р. Ҡайҙан килә быңдай илаһилыҡ... // Сыңрау торналар иле. Өфө, 1996; Хисматуллин М.Х. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Заһир Исмәғилев
(1917—2003)



Тау хәтлем кешеләр була. Һин уларҙы белеп, күреп, һирәкләп булһа ла күрешеп тә йөрөйһөң. Осрашҡан саҡта, үҙеңде тауға ҡарап тау менән һоҡланғандай хис итәһең, шуға күрә, яҡын күрһәң дә, бик үк яҡынлашырға ынтылып бармайһың, итәғәтлелек һаҡлайһың. Ә шулай ҙа яҡынданыраҡ ҡатнашырға, аралашырға тура килгән осраҡтар була ҡалһа, был инде һинең тормошоңда онотолмаҫлыҡ бер ваҡиғаға әйләнә...

Беҙҙең быуындың кумиры, беҙҙең бала саҡта уҡ «Салауат Юлаев» операһы менән дан ҡаҙанған атаҡлы композитор Заһир Исмәғилевте миңә уҙған быуаттың 60-сы йылдар башынан, студент саҡта уҡ белеп, танышып, ара-тирә күрешеп йөрөү бәхете тейҙе. Шуны ла әйтергә кәрәк: ул йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, көҙ етеү менән, һәр миҙгелде «Салауат Юлаев» операһы менән асыр ине. Беҙ миҙгел асылған һайын театрға барабыҙ. Салауат ролен, һәр ваҡыттағыса, Мәғәфүр Хисмәтуллин башҡарыуында ҡарап, Салауат арияларын тыңлап, күңелебеҙ тулы шатлыҡ һәм ғорурлыҡ тойғоһо кисереп ҡайтабыҙ. Хатта бер спектаклдә Мәғәфүр Хисмәтуллиндың — Салауаттың сәхнәгә аҡ ҡына ат өҫтөндә килеп сығып йырлап ебәргәне лә иҫтә ҡалған. Ул осор «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһының да театр сәхнәһендә гөрләп барған сағы ине. 1964 йылда булһа кәрәк, театр Заһир ағайҙың яңы әҫәре буйынса ҡуйылған спектакль — «Шәүрә» операһы менән ҡыуандырҙы. Нәҡ бына шул милли сәнғәтебеҙ үҫеше өсөн шатлыҡ кисереп йөрөгән мәлдә Ғәзим Шафиҡов үҙҙәренең Өфөләге Проломный тигән урамдағы бәләкәйерәк кенә, иҫке ағас өйҙәрендә ғәжәп бер мәжлес ойоштороп алды. Унда Заһир ағайҙы, Әхмәт ағай Лотфуллинды саҡырғайны. Эй ул осрашыу сәғәттәре! Халҡыбыҙ йырындағы «Алтын аҡса ҙур мал түгел, бер ултырыу үҙе бер ғүмер» тигән һүҙҙәр үҙе үк алтынға торошло икән шул. Заһир ағайҙың, әле ул саҡта яңы морон төртөп килгән йәш ижадсыларға, ваҡытын бүлеп, асылда фатихаһын биреп ултырыуы

беҙҙең ҡыҫылып, ҡыйырһытылып йәшәгән ул осорҙа айырыуса ҡәҙерле ине. Ана шул күңелле мәжлестән һуң Зәһир ағай ҙа, Әхмәт ағай ҙа, уларҙың илһамлы ижады ла миңә тағы ла яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк булып китте. Һуңыраҡ бер мәлде хатта Зәһир ағай беҙҙе, йәштәрҙе, саҡырып алып, үҙенең эш кабинетында фотоға төшөүҙе ойоштorҙо. Ул инде ғүмерлек иҫтәлек булып ҡалды. (Фотоның икенсе яғына 1965 йылдың 22 марты тип яҙып ҡуйғанмын.)



1967 йылдың ғинуарында Зәһир Исмәғилевтең 50 йәшлек юбилейы иғлан ителде. Был ваҡытта мин, «Совет Башҡортостаны» редакцияһында әҙәбиәт һәм сәнғәт мөдире булараҡ, иң элек гәзиттә тотош бер бит материалдар әҙерләү менән мәшғүл булдым. Юбилей кисәһенә бер-ике генә аҙна ваҡыт ҡалғанда күңелдә Зәһир ағайға арналған йыр һүҙҙәре тыуҙы. «Арнау» тип аталған ул шиғри тексты тотоп, Абрар Ғабдрахмановҡа барҙым. Моңло, яғымлы йыр килеп сыҡты. Нажия Аллаярова башҡарыуында ул йыр аҙаҡ радио аша бик йыш яңғыраны. Шуның менән беҙ Зәһир ағайға үҙебеҙҙең ихтирамыбыҙҙы, уның ижадын ололоҡлауыбыҙҙы белдерә алдыҡ булһа кәрәк. Бына ул йырҙың һүҙҙәре:

Сал Уралдың сая шоңҡары һин,
Салауаттың кесе туғаны,
Сылтыр ҙа ғына сылтыр көй шишмәһен
Саф көмөштән ҡоя торғаны.
Йырҙарыңда һинең — ер һулышы,
Ағиҙелдең алҡын ағышы,
Ут-һыуҙарҙы үтеп, үҙ илендә
Ирек алған халыҡ тауышы.

Ил ауазы, ил тауышы булып
Яңғыраһын аҫыл йырҙарың.
Салауаттың кесе туғаны һин,
Сал Уралдың сая шоңҡары.

Заһир ағайҙың ижад юлы беҙҙең быуын ғына түгел, киләсәк быуындар өсөн дә өлгө алырлыҡ. Ул бер ваҡытта ла өлгәшелгәндәр менән маһайыу, бер урында туҡтап ҡалыу тигән нәмәне белмәне. Уның баһалап бөткөһөҙ оло ижадын, башҡорт музыка сәнғәтен үҫтереүгә индергән бөйөк хеҙмәт өлөшөн күренекле яҙыусыбыҙ Рәшит Солтангәрәев Хазина тауы тип атаны. Ул образлы һүҙҙе яҙыусы 1997 йылда, Заһир Исмәғилевкә 80 йәш тулыр алдынан, әйткәйне. Ә бит шул ваҡыттан һуң атаҡлы композитор, инде туғыҙынсы тиҫтәнең өҫтөндә, республикабыҙҙың музыка тормошонда ваҡиға булырҙай тағы бер күләмле һәм күркәм әҫәре — «Ҡаһым түрә» операһы менән ҡыуандырҙы. Башҡорт музыка сәнғәтенең ысын ҡаһарманы, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың бөйөк йыр-моң ижадсыһы булды Заһир Исмәғилев.

Атаҡлы башҡорт композиторы, педагог, музыка һәм йәмәғәт эшмәкәре, СССР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Рәсәй Федерацияһының М.И. Глинка исемендәге Дәүләт премияһы, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы, Аҡмулла исемендәге премия лауреаты Заһир Ғариф улы Исмәғилев 1917 йылдың 8 ғинуарында Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Белорет районы) Үрге Сермән ауылында тыуған.

Ғаиләлә кинйә бала булыуына ҡарамаҫтан, Заһир кесе йәштән ата-әсәһенә ярҙамлашып, эшкә егелеп үҫә. Күркәм дә, ҡырыҫ та Урал тәбиғәте буласаҡ композиторҙың күңеленә бөтмәҫ-төкәнмәҫ тәьҫораттар һала. Ауылда ул саҡта оҫта йырсылар, ҡурайсылар күп була. Әсәһе халыҡ йырҙарына ғашиҡ кеше була, ә инде ағаһы Ҡаһирҙың ҡурайҙа уйнауы кескәй Заһирҙы айырыуса тулҡынландыра. Һигеҙ йәшендә уны ағаһы ҡурайҙа уйнарға өйрәтә, ә үҫә төшкәс, үҙе ауылда танылған ҡурайсы булып китә.

Заһирға ата мөхәббәтен татыу насип булмай. Атаһы кесе улын бер ҙә генә үҙ итмәй, яҡын күрмәй. Шул сәбәпле уға ата йортон ташлап сығып китергә тура килә. Белоретка ФЗО-ға барып урынлаша. Бер аҙ ваҡыт Инйәр урман техникаһы техникумында уҡып ала. Математиканан, физиканан артта ҡалыуы арҡаһында был уҡыу йортон да ташлап китә. Ни эшләргә белмәй аңҡы-тиңке килеп йөрөгән бер мәлде Белоретка Башҡорт дәүләт драма театры гастролгә килеп төшә. Был ваҡиға Заһирҙың тормошонда ҡырҡа боролош яһарға сәбәпсе була. Театр менән танышыу уға ғәйәт көслө йоғонто яһай. Бер мәлде данлыҡлы

ҡурайсы һәм артист Ғиниәт Ушанов ауырып китеү сәбәпле Заһирға унын урынына ҡурайсы булып спектаклдә сығыш яһарға тәҡдим итәләр. Йәш ҡурайсыны халыҡ яратып ҡаршы ала, ә театрҙың актеры, яҡташы Арыҫлан Мөбәрәков уны Өфөгә барып, етди рәүештә сәнғәт менән шөғөлләнергә димләй башлай. Шулай итеп, Заһир Исмәғилев Башҡорт дәүләт драма театры эргәһендәге студияла уҡый башлай. Бында ул ике йыл буйы сәнғәт серҙәрен өйрәнә, бер үк ваҡытта театрҙың спектаклдәрендә ҡурайсы булараҡ та, драма артисы сифатында ла сығыш яһай. Иң мөһиме, ошо осорҙа ул күңелен биреп баш ҡалабыҙҙың сәнғәт донъяһына инеп китә. Театр студияһының етәксеһе Булат Имашевтың, музыка дәрестәрен алып барыусы Мәсәлим Вәлиевтең йоғонтоһо ла ҙур була. Дан ҡаҙанған йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов иһә талантлы йәш ҡурайсыны үҙе менән гастролдәргә алып сыға. Ғәзиз Сәлих улы уға музыка менән етди шөғөлләнергә тәҡдим итә. Мәскәүҙән Өфөгә башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып алыу маҡсаты менән килгән композитор Н. Будашкин да Заһирҙы артабан музыка буйынса уҡырға дәртләндерә. Заһир уға, ҡурайҙа уйнап, күп кенә халыҡ көйҙәрен яҙҙыра. Шул ваҡытта үҙенең импровизация оҫталығын да күрһәтеп өлгөрә.

1937 йылдың 15 сентябрь көнө, П.И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһының башҡорт студияһына инеү өсөн имтихан биргән бер төркөм йәш таланттар менән бергә, Заһир Исмәғилевтең тормошонда ла ғүмергә онотолмаҫлыҡ ваҡиғаға әйләнә. Имтиханға ул, нота грамотаһын белмәгән урманса балаһы, ҡурайын тотоп бара. Композитор В. Белый уға уйнап күрһәтергә ҡуша. Уйнай Заһир. Оҡшаталар һәм тағы ла ҡабат-ҡабат уйнатып ҡарайҙар. Аҙаҡ, имтихан тамамланғас, Заһир ҙа үҙен башҡорт студияһына ҡабул ителеүселәр исемлегендә күрә. Бында ул композиторлыҡҡа Хөсәйен Әхмәтов, Халиҡ Заимов, Рәүеф Мортазиндар менән бергә уҡый. Студияла шулай уҡ буласаҡ күренекле йырсылар Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Баныу Вәлиева, Сәлих Хөсниәров белем ала.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында студияның эше туҡталып тора. 1941—1944 йылдарҙа Заһир Исмәғилев Өфөлә күп төрлө ижади эштәр менән шөғөлләнә. 1942 йылда уны Башҡортостан Композиторҙар союзына ағза итеп алалар һәм Союздың секретаре итеп һайлап ҡуялар. З. Исмәғилев башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып алыу һәм нотаға һалыу эшенә тотона. Концерт бригадалары менән фронтта хәрәкәт итеүсе частарға барып, ҡурайы менән яугирҙар алдында сығыш яһай, Өфөләге госпиталдәрҙә яралы һалдаттарға ҡурай моңдарын ишеттерә. Илебеҙ халҡының яуыз дошманға ҡаршы көрәштә батырлығын һәм фиҙаҡәрлеген данлаған йырҙар ижад итә. «Башҡорт батырҙары», Башҡорт кавалерия дивизияһының яугирҙарына арналған «Генерал Белов», «Байғужа»,

«Күсимов тураһында йыр», «Шайморатов генерал» тигән йырҙарҙа Ватанды һаҡлаусы ҡыйыу һәм батыр кешеләрҙең сағыу образдары һынландырыла. «Мин яратам һине», «Һин ҡайтманың» һымаҡ лирик йырҙар ҙа шул уҡ йылдарҙа тыуа.

1944 йылда башҡорт студияһында уҡыуын дауам итә, 1948 йылда иһә, студияны тамамлау менән, Заһир Исмәғилев консерваторияның төп курсына ҡабул ителә. Консерваторияла ул Ф.Г. Фере һәм А.Н. Александровтың композиция класында уҡый. Был йылдар Заһир Исмәғилев өсөн айырыуса күтәренке ижади үҫеш осорона әйләнә. Фортепиано өсөн өс пьеса, скрипка һәм фортепиано өсөн поэма, хор, солистар һәм симфоник оркестр өсөн кантата, сюиталар ижад ителә. Йәш композитор халыҡ йырҙары, халыҡ көйҙәренән айырылмай, сөнки әҫәрҙәрендә халыҡ моңона таянып фекер йөрөтөүҙең ниндәй уңышлы булыуын, рухи тамырҙары халыҡ донъяһында икәнлеген яҡшы аңлай. 1950 йылда, мәҫәлән, башҡорт халҡының «Салауат» һәм «Урал» көйҙәре нигеҙендә симфоник увертюра яҙа. «Башҡорт нефтселәре» тигән вокаль-хореографик сюитаның беренсе бүлегендә «Буранбай»ҙың моңо ишетелеп ҡалғандай була. Заһир Исмәғилев М. Буранғоловтың «Башҡорт туйы», Б. Бикбайҙың «Ҡаһым түрә» драмалары буйынса ҡуйылған спектаклдәргә музыка ижад итә, бында ла башҡорт халыҡ көйҙәре файҙаланыла.

Консерваторияны тамамлағанда, 1954 йылда, Заһир Исмәғилев диплом эше сифатында Баязит Бикбай либреттоһына яҙылған ҙур эпик әҫәр — «Салауат Юлаев» операһын тәҡдим итә. Тиҙҙән әҫәр сәхнәгә ҡуйыла һәм 1955 йылдың майында Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында Мәскәү тамашасыһына күрһәтелә. Опера үҙәк матбуғат биттәрендә юғары баһалана. Заһир Исмәғилевкә РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исем бирелә. «Салауат Юлаев» әҫәре башҡорт опера сәнғәтенең үҫешендә өр-яңы битте башлап ебәрә. «Салауат Юлаев» тиҫтәләрсә йылдар буйы сәхнәнән төшмәй. Операның дәһшәтле, ҡеүәтле, азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелгән халыҡтың көслө ихтыярын һүрәтләүсе увертюраһы, Салауаттың тыуған Уралға, тыуған еребеҙгә мәңгелек һөйөү йыры булып яңғыраған «Хуш, Уралым!» арияһы (беренсе күренештә), Әминәнең Салауатты һағынып йырлаған йырҙары (өсөнсө күренештәге речитатив һәм ария), Салауаттың дүртенсе акттағы арияһы («Үлтергәндәр минең күҙ нурымды...») кемдәрҙе генә тулҡынландырмай ҙа кемдең генә йөрәгенә үтеп инмәй!

«Салауат Юлаев» операһын башҡорт халҡының данлы көрәш тарихына һоҡланғыс һәм монументаль музыка һәйкәле тип атарға була. Ил һәм халыҡ тарихы, халыҡтың тарихи ҡаһарманлығы — Заһир Исмәғилев ижадының төп темаһы. «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы (1959), киң билдәле халыҡ йыры һәм

легендаһы нигеҙендә яҙылған «Шәүрә» операһы (1963; икеһендә лә — Б. Бикбай либреттоһы), «Ағиҙел тулҡындары» лирик драмаһы (1972, тәүге исеме «Гөлзифа», 1967, М. Кәрим либреттоһы), «Урал илселәре» тарихи-героик операһы (1982), «Аҡмулла» операһы (1985), ниһайәт, «Ҡаһым түрә» героик операһы (өсөһө лә И. Дилмөхәмәтов либреттоһына яҙылған) — башҡорт халҡы үткән бөйөк тарихи юлдың төрлө этаптарын сағылдырған мәшһүр әҫәрҙәр.

«Урал илселәре», «Аҡмулла», «Ҡаһым түрә» әҫәрҙәрендә композитор башҡорт халҡы тарихындағы боролошло оло ваҡиғаларға, бөйөк тарихи шәхестәр образдарына мөрәжәғәт итә. «Урал илселәре» спектакленең премьераһы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә 1982 йылда, Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуының 425 йыллығын билдәләгән көндәрҙә булып үтте. Тарихи-героик әҫәр булараҡ был опера «Салауат Юлаев»та башланған традицияны дауам итеүе менән әһәмиәтле. Спектаклдә Тыуған ил, тыуған Урал темаһы, халҡыбыҙҙың тыуған ергә һөйөү темаһы мөһим урында тора. Халыҡ үҙ яҙмышы өсөн көрәштә ғәйәт ҙур көс булараҡ тасуирлана. Башҡорт һәм рус халыҡтарының дуҫлығы темаһы төп лейтмотив булып үтә.

«Ҡаһым түрә» — башҡорт яугирҙарының 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтарын данлауға арналған тарихи-героик опера. Уның үҙәк геройҙарының береһе — Рәсәйҙән Наполеон яуын ҡыуып сығарыуҙа оло ҡаһарманлыҡ күрһәткән ғәскәр башлығы легендар Ҡаһым түрә. «Аҡмулла» операһында иһә композитор XIX быуатта йәшәгән бөйөк башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Мифтахетдин Аҡмулла образын мәңгеләштереүе менән халҡыбыҙҙың тарихын музыка саралары аша яҡтыртыуға ҙур өлөш индерҙе.

Заһир Исмәғилев үҙен иң элек опера композиторы тип иҫәпләне һәм был жанрҙа ул беҙҙә әлегә тиңе булмаған уңыштарға өлгәште. Әммә ләкин композитор музыкаль ижадтың бөтөн жанрҙарында ла тиерлек ҡолас киреп эшләне. Уның хор һәм симфоник музыка өлкәһендәге әҫәрҙәре киң танылыу тапты. Шулар араһында ике башҡорт халыҡ йырына симфоник увертюра (1950), «Әсә һүҙҙәре» исемле хор циклы (1972, Р. Назаров һүҙҙәре), «Россиянмын» кантатаһы (1972), «Үлемһеҙлек» вокаль-симфоник поэмаһы (1975, икеһе лә М. Кәрим һүҙҙәре), «Беҙ — еңеүселәр» ораторияһы (1975, А. Игебаев һүҙҙәре), «Байрам увертюраһы» (1979), оркестр менән фортепиано өсөн концерт (1986) һымаҡ әҫәрҙәр бар.

Композитор Заһир Исмәғилев шул уҡ ваҡытта — 200-ҙән ашыу йыр һәм романстар авторы. Ул яҙған йырҙарҙың күбеһе халыҡ йырҙарына әйләнде. Мәҫәлән, «Батырҙар йыры» (Н. Нәжми һүҙҙәре), «Шайморатов генерал» (Ҡ. Даян), «Ел, ерәнем!» (Н. Иҙелбай), «Дан һиңә, Башҡортостан» (Р. Ниғмәти), «Грузин сәйе, башҡорт балы» (С. Ҡудаш), «Һағынырмын Уралтау буйҙарын» (Г.

Зәйнәшева), «Былбылым» (Я. Ҡолмой), «Ғәзиздәрҙән ғәзиз әсәләр» (А. Игебаев) һымаҡ йырҙар бер нисә быуын йыр һөйөүселәренең күңел түрендә йәшәй. Нәҡ бына йыр жанры өлкәһендәге ижады өсөн Заһир Исмәғилевкә 1967 йылда Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы бирелде. Артабанғы йылдарҙа ул йәнә Мостай Кәрим һүҙҙәренә «Тыуған ер» тигән вокаль цикл, Салауат Юлаевтың «Минең атым», «Зөләйха», «Һандуғас», «Егеткә», «Уҡ», «Яу» исемле шиғырҙарына романстар циклы ижад итте.

Заһир Исмәғилев һәр ваҡыт ҙур маҡсаттар менән йәшәгән, һоҡланғыс тормош юлы үткән оло шәхес ине. 1954 йылда консерваторияны тамамлап ҡайтыу менән уны Башҡортостан Композиторҙар союзы идараһының рәйесе итеп һайлап ҡуялар. Был вазифаны ул 24 йыл буйы — 1978 йылға тиклем атҡара. БАССР Юғары Советына депутат итеп һайлана, Юғары Советтың VI—VIII саҡырылышы Рәйесе, Өфө дәүләт сәнғәт институтын ойоштороусы һәм уның тәүге ректоры була (1968— 1988). Бында ул, педагог булараҡ, композиция класын алып бара, яңы быуын композиторҙарын үҫтереү өсөн ҙур тырышлыҡ күрһәтә. 1977 йылда уға профессор исеме бирелә. Рим Хәсәнов, Абрар Ғабдрахманов, Нур Дауытов, Рафаил Ҡасимов, Рәшит Йыһанов, Айрат Ҡобағошов, Айрат Кәримов, Илшат Хәлилов һымаҡ күренекле композитор-педагогтар уның класында уҡып сыға. Уның уҡыусылары араһында Яҡут (Саха) республикаһынан, Татарстандан килгән талантлы йәштәр ҙә була. Улар ҙа Өфөнән, сәнғәт институтын тамамлап, композиторлыҡ танытмаһын алып ҡайталар. Өфө дәүләт сәнғәт институты эргәһендәге һәләтле балалар өсөн урта махсус музыка интернат-мәктәбе лә Заһир Исмәғилевтең тырышлығы арҡаһында асыла.

Халҡыбыҙҙың оло мөхәббәтен һәм ихтирамын яулаған бөйөк талант эйәһе Заһир Исмәғилевтең күп яҡлы эшмәкәрлеген хөкүмәтебеҙ юғары баһаланы. Ул Ленин (1971), Салауат Юлаев (2000), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1967), Октябрь революцияһы, Халыҡтар дуҫлығы (1977), «Почет Билдәһе» (1949), IV дәрәжә «Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн» (1997) ордендары һәм миҙалдар менән наградланған. Заһир Исмәғилевкә Өфө ҡала Советының ҡарары менән 1997 йылда баш ҡалабыҙҙың Маҡтаулы гражданы тигән исем бирелде.

Заһир ағай Исмәғилев, Хоҙайҙан бирелгән талантының ҡәҙерен белеп, бар булмышын, оҙон һәм илһамлы ғүмер юлын Тыуған иленә, тыуған халҡына хеҙмәт итеүгә арнаны. Ул беҙгә оло донъя — ҡөҙрәтле йыр-моң донъяһын бүләк итеп ҡалдырҙы. Ул үҙе лә тау хәтлем кеше ине һәм уның илаһи моң мираҫы, ул ижад иткән ҡанатлы йырҙар, романстар, хор әҫәрҙәре, кантаталар, сюиталар, симфоник музыка өлгөләре, опералар, башҡорт халҡының рухын сал Урал тауҙары бейеклектәренә, зәңгәр күктәргә күтәреп, бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт, көс,

илһам сығанағына әйләнде. Заһир Исмәғилев исеме, уның ижади мираҫы, милли мәҙәниәтебеҙҙең, Башҡортостаныбыҙҙың ҡото булып, беҙҙең менән йәшәй, халҡыбыҙ күңелендә ул ғүмер-ғүмергә йәшәйәсәк.

Заһир Ғариф улы Исмәғилев 87 йәшендә, 2003 йылдың 30 майында яҡты донъя менән хушлашты. Ҡәбере Өфө ҡалаһының мосолман зыяратында. Бөйөк композиторҙың исемен мәңгеләштереү маҡсатында республикабыҙ хөкүмәте ул үҙе ойоштороған һәм тәүге ректоры булып эшләгән Өфө дәүләт сәнғәт институтына (хәҙер — сәнғәт академияһы) Заһир Исмәғилев исемен биреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

* * *

Әҙәбиәт: Месягутов Ш. От курая до оперы. Уфа, 1997; Вопросы искусствоведения: Сборник статей о творчестве Загира Исмагилова. Уфа, 1986; Композиторы Советской Башкирии. Уфа, 1989; Солтангәрәев Р. Халыҡ күңеленән — халыҡ күңеленә // Яҙмыш. Өфө: Китап, 1991. 165—173-сө биттәр; Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Исламгулова Р. Святая к музыке любовь // Известия Башкортостана. 1997. 9 января; Минеев М.И. Парень из Серменева (Штрихи к портрету народного артиста СССР, композитора Загира Исмагилова). Уфа: Китап, 1997; Галина Г. Загир Исмагилов. Уфа, 1997; Шафиков Г. Хозяин своей судьбы // Дыхание жгучее истории. Уфа: Китап, 1998. 191—214-се биттәр.

Муса Гәрәев
(1922—1987)



Башҡорт халҡының данлы улы, легендар лётчик-штурмовик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтең исеме Бөйөк Ватан һуғышы тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған. Яу йылдарында ул, туған халҡының яугирлыҡ традицияларына тоғролоҡ күрһәтеп, совет хәрби авиацияһы тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. Уның һоҡланғыс тормош юлы, илебеҙ азатлығы өсөн көрәштә күрһәткән батырлығы яңынан-яңы быуындар өсөн өлгө булып тора. 1940 йылда Совет Армияһына алынып, сирек быуат хеҙмәт итеү осоронда ул хәрби мәктәп курсантынан авиадивизия командиры урынбаҫарына тиклем данлы юл үтә. Полковник званиеһында демобилизациялана.

Муса Ғайса улы Гәрәев 1922 йылдың 9 июлендә БАССР-ҙың Бәләбәй кантоны Саҡмағош олоҫо (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Илеш районы) Иләкшиҙе ауылында тыуған. Мусаға ете йәш тулғанда Гәрәевтәр ғаиләһе яңы нигеҙ һалынған Ташшишмә ауылына күсә. 1937 йылда күршеләге Бишҡурай ауылында ете йыллыҡ мәктәп тамамлағас, Өфөгә килеп, тимер юл техникумына уҡырға урынлаша. 1939— 1940 йылдарҙа, техникумда уҡыу менән бергә, Өфө аэроклубында шөғөлләнә. 1940 йылдың йәйендә тәүге осоштар яһай. Данлыҡлы башҡорт лётчигы Ғәли Ишмырҙин етәкселек иткән Өфө аэроклубы ул йылдарҙа лётчик булыу тураһында хыялланған бик күп һәләтле йәштәргә ысын мәғәнәһендә ҡанат ҡуя, артабан төплө әҙерлек үтер өсөн йүнәлеш бирә.

1940 йылдың 15 декабренән 1942 йылдың сентябренә тиклем Муса Гәрәев Энгельс ҡалаһындағы Хәрби-авиация пилоттар мәктәбе курсанты була. Тәүге хәрби һынауҙы һәм сынығыуҙы ул Сталинград фронтында үтә. Бында 1942 йылдың 11 декабрендә дошмандың алғы һыҙығын штурмға тотоу өсөн Ил-2 самолетында беренсе хәрби осош яһай. Ошо ваҡыттан башлап 1943 йылдың февраленә тиклем 11 хәрби осош яһап, «Батырлыҡ өсөн» һәм «Сталинградты

обороналау өсөн» миҙалдары менән бүләкләнә. Ошо уҡ осорҙа ул хеҙмәт иткән 26-сы штурмлау авиадивизияһына Сталинград дивизияһы тигән исем бирелә һәм М.Ғ. Гәрәевте 76-сы гвардия авиаполкына күсерәләр. Шунда ул гвардиясы антын бирә һәм Еңеү көнөнә тиклем үҙенең полкташтары менән бергә була. Сталинград янындағы һуғыштарҙан һуң Донбассты, Ҡырымды, Белоруссияны азат итеүҙә, Польша, Германия территорияһындағы алыштарҙа ҡатнаша. Һуғыш йылдарында штурмлаусы авиация полкының летчик-штурмовигы, звено командиры, эскадрилья командиры була. 1945 йылдың ғинуарында авиаполктың штурманы итеп тәғәйенләнә. Һауа һуғыштарында оҫталыҡ һәм ҡыйыулыҡ менән дан ҡаҙана. Оло яу йылдарында күрһәткән батырлыҡтары өсөн өс Ҡыҙыл Байраҡ (1943, 1944, 1945), өс Ҡыҙыл Йондоҙ (1943, 1944, 1944), ике 1-се дәрәжә Ватан һуғышы (1944, 1945), Александр Невский (1944), 3-сө дәрәжә Богдан Хмельницкий (1945), ике Ленин ордены (икеһе лә 1945 йылда) менән наградлана. (Һуғыштан һуң, 1973 йылда, хәрби наградалары янына Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены өҫтәлә.) 1945 йылдың 23 февралендә һәм икенсе тапҡыр шул уҡ йылдың 19 апрелендә уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Һуғыш ваҡытында Муса Гәрәев 250 хәрби осош яһай. Сержант званиеһында яуға ингән егет Еңеү көнөн майор булып ҡаршы ала. 1945 йылдың 24 июнендә уға Мәскәүҙә Еңеү парадында ҡатнашыу насип була.

Һуғыштан һуң легендар летчик 24 йыл буйы хәрби хеҙмәттә була. Хәрби-транспорт авиация берләшмәһенең эскадрилья командиры урынбаҫары (1946—1948), 4-се махсус тәғәйенләнештәге авиацияның полк командиры урынбаҫары, полк командиры (1951—1957), 2-се махсус тәғәйенләнештәге авиадивизия командиры урынбаҫары (1959—1964) вазифаларын башҡара.

Ул белемен арттырыу өҫтөндә даими эшләй, ике академия тамамлай: 1948—1951 йылдарҙа Фрунзе исемендәге Хәрби академияла, 1957—1959 йылдарҙа — СССР Хәрби Көстәренең Генераль штабы академияһында уҡый.

1946, 1950, 1954 йылдарҙа Муса Гәрәев СССР Юғары Советының II, III һәм IV саҡырылыш депутаты итеп һайланды. 1951 йылдың 17 июнендә тыуған төйәге — Илеш районының Иләкшиҙе ауылында уға бронзанан ҡойолған бюст асыу тантанаһы булып үтте. (1967 йылда был бюст Өфөгә күсерелде.) Муса Гәрәевтең скульптура портретының варианты илебеҙҙең Третьяков галереяһында һаҡлана. (Уның авторы — СССР-ҙың халыҡ художнигы Н.В. Томский.)

1964 йылда М. Гәрәев, һаулығы насарайыу сәбәпле, отставкаға сыға. Шул уҡ йылдың октябренән 1977 йылдың ғинуарына тиклем ДОСААФ-тың Башҡортостан өлкә комитеты рәйесе булып эшләй. 1967, 1971, 1975 йылдарҙа БАССР Юғары Советының VII, VIII, IX саҡырылыш депутаты итеп һайлана.

1987 йылдың 17 сентябре — Муса Гәрәевтең фани донъянан баҡыйлыҡҡа

күскән көнө. Илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың легендар геройы Өфөнөң Еңеү паркында ерләнде.

Муса Гәрәев ҡорос ихтыярлы, әммә нескә, саф һәм тоғро күңелле кеше, бөйөк Тыуған илебеҙҙең һәм үҙ милләтенең оло патриоты булды. Уның бай һәм күркәм рухи донъяһын яҡшыраҡ аңлар өсөн иң элек 1997 йылда (үкенескә ҡаршы, үҙе үлгәндән һуң) Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Йәшәйем һәм хәтерләйем» («Живу и помню») исемле мемуар әҫәрен уҡырға кәрәк. Бында ул үҙенең сағыу тормош юлы, шулай уҡ айырыуса иҫендә ҡалған, дөрөҫөрәге, үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашып, еңеп сығырға насип булған хәрби осоштары тураһында бәйән итә. Китаптың һәр бер битендә ул һуғыш юлдарын бергә үткән яуҙаштары тураһында оло хөрмәт тойғоһо менән яҙа.

Тәүге хәрби осошон 1942 йылдың 11 декабрендә Сталинград өсөн барған һуғыштарҙа яһай. «Сталинград өсөн алыш, ваҡыт күрһәтеүенсә, унда ҡатнашыусыларҙың барыһының да характерында һәм яҙмышында юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы», — тип хәтерләй автор. Ғәҙәттә, «Сталинградта иҫән ҡалған — тимәк, оҙаҡ йәшәйәсәк» йәки ҙур ышаныс күрһәтергә булһа: «Ул бит сталинградсы!» тип әйтер булғандар. Был тиңһеҙ алыштарҙа ҡатнашыусыларҙың армияла абруйы ғәжәйеп ҙур була. Шуның өсөн дә 226-сы штурмлау авиадивизияһына айырыуса ауыр һәм яуаплы заданиеларҙы йөкмәтер булалар. Дивизия, ысынлап та, армия командованиеһының ышанысын тулыһынса аҡлай. Уның байрағындағы биш орден һәм дивизияла 77 яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүе (уларҙың етеһенә — икешәр тапҡыр) шуны дәлилләп тора, ти Муса Гәрәев. Күренеүенсә, беҙҙең яҡташыбыҙ үҙе лә, ул хеҙмәт иткән авиадивизия ла (тимәк, уның яуҙаш дуҫтары ла) Совет Армияһында һирәк осрай торған күренештәр рәтендә тора. Һәр хәлдә, беҙ шул тиклем Советтар Союзы Геройҙарын биргән тағы бер генә дивизияны беләбеҙ: ул беҙҙең данлы Башҡорт кавалерия дивизияһы.

Муса Гәрәев һуғыштың кеше өсөн һәм, әлбиттә, ил өсөн ниндәй ауыр фажиғә булыуы тураһында йән әрнеүе менән бәйән ҡыла. Бына — Сталинград фронты. «Һәр ваҡыт, һуғыш мәхшәре эсенә ингән һайын, бейектән Волга өҫтөн тотош ут ҡаплап алғанлығын күреп, тетрәнә торғайным. Йәйрәп ятҡан ҡеүәтле йылғаның буйынан буйына йөҙҙәрсә урындан туҡтауһыҙ төтөн күтәрелә, нимәләр яна, нимәләр шартлай. Ҡаланы иһә ут-ялҡын ялмап алған, унда бер ниндәй ҙә тере йән юҡтыр, бер кем һәм бер нәмә тын ала алмайҙыр һымаҡ. Волга ла, уның уң яҡ яры буйлап һуҙылған ҡала ла гигант ут эсендә ҡайнай ине. Мин зенит снарядтары ярылып торған Сталинград өҫтөнән маневрҙар яһап осоп үттем. Осҡан саҡта, барлыҡ летчиктар һымаҡ уҡ, тулыһынса хәрби задание үтәү уйы биләп алған ине. Әммә, ергә төшкәс, был тамуҡ эсендә һәр

бер йорт, һәр бер этаж, ерҙең һәр аҙымы өсөн һуғышыусы совет яугирҙарының ниндәй түҙемлек һәм ҡаһарманлыҡ күрһәтеүҙәре тураһында уйламайынса булдыра алмай инем».

Илебеҙ халҡы фашистик Германияға ҡаршы көрәштә бик күп ҡорбандар бирҙе, бик күп юғалтыуҙар кисерҙе. Күпме аҫыл ир-егеттәребеҙ, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ яу ҡырында ятып ҡалды. Хәрби һауа көстәрендә лә юғалтыуҙар күп булған икән шул. «76-сы штурмлау авиаполкында мин хеҙмәт иткән осорҙа, летчиктар составы кәм тигәндә өс тапҡыр яңырҙы», — тип яҙа Муса Гәрәев. Бәхеткә, уның үҙенә һәм ул етәкселек иткән төркөмдәргә барлыҡ осоштарҙы ла аҙ юғалтыуҙар менән үткәрергә насип була. Ә бит фронтта үткән мең көнгә яҡын ваҡыт эсендә 250 хәрби осош тура килә уға. Штурмлау авиацияһы өсөн был үтә күп тип ҡабул ителә.

Хәрби осоштар мәсьәләһендә ошондай бер үҙенсәлекте лә билдәләп үтә автор. Баҡһаң, был иҫәпкә бары тик уңышлы үткән хәрби осоштар ғына инә икән дә баһа! Задание үтәлергә, хәрби запас тулыһынса ҡулланылырға тейеш — бына шундай талап. Шул айҡанлы автор ошондай ваҡиғаны иҫенә төшөрә:

«1943 йылдың 8 ноябрендә, ти ул, мин туй үткәргән көндөң иртәгеһенә, командирыбыҙ майор Семенов етәкселегендә тотош полк хәрби задание үтәү өсөн осошҡа юлланды, әммә, ҡуйы томан арҡаһында, Днепр аръяғында бомбаға тоторға тейешле урынды таба алманы. Был осош хәрби осоу иҫәбенә индерелмәне». Шулай уҡ самолеттарҙы авиазаводтарҙан, ремонт мастерскойҙарынан осороп алып килеү, бер аэродромдан икенсеһенә күсенеү, йәш летчиктарҙы осорға әҙерләүҙә ҡатнашыу, ағымдағы ремонттан һуң самолеттарға һынау үткәреү — быларҙың барыһы ла хәрби осоу иҫәбенән төшөп ҡала. Шунан уйлап ҡарағыҙ инде: ниндәйерәк көсөргәнешле эш ул һуғышта булған меңгә яҡын көн эсендә, бихисап бүтән төрлө хеҙмәт вазифаларын үтәү менән бергә, 250 хәрби осош яһау!

Муса Гәрәев фронтта илебеҙ летчиктарының үҙ-ара дуҫлығын, хәүефле шарттарҙа бер-береһен ҡотҡарырға әҙер тороуын күрһәтеүсе фәһемле хәл-ваҡиғаларҙы иҫкә алып үтә. «1939 йылдың йәйендә үк әле япон самурайҙары менән һуғышта совет летчигы С.И. Грицевец командирының самолеты дошман территорияһына ултырырға мәжбүр булыуын күреп ҡала һәм, уның янына төшөп, үҙенең бер урынлы самолетына ултыртып, ҡамап алырға тип йүгерешкән япон һалдаттарының күҙ алдында, танау төбөндә тиерлек күккә күтәрелеп китә. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы С.И. Грицевецтың батырлығы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында өлгөгә әйләнде. Бары тик беҙҙең 76-сы штурмлау авиаполкында был батырлыҡ өс тапҡыр ҡабатланды, ә бер тапҡыр баштан аҙағына тиклем минең күҙ алдында эшләнде», — ти Муса

Гәрәев.

Муса үҙенең хәрби оҫталығы, таҫыллығы, дуҫтарына яҡшы мөнәсәбәте, намыҫлы булыуы менән яуҙаштары араһында ҙур хөрмәт ҡаҙана. Уны юғары командование ла ихтирам итә, яҡын күрә. Бына һауа һуғышы барғанда булып үткән бер хәл.

Һауала һуғыштың ҡыҙыу бер мәлендә ул шлемофонының наушнигында эфирҙағы шатырлау тауыштары аша:

— Муса! Тыңла мине, Муса, мин — Тимофей Тимофеевич, — тигән һүҙҙәр ишетә. Был уға һауа армияһы командующийы Т.Т. Хрюкин шулай исеме менән өндәшә.

— Беҙ уны яратыу ғына түгел, фәрештә урынына күрә инек, уның приказын үтәүҙе мин бәхет итеп һанай инем, — тип хәтерләй Муса Ғайса улы. — Уның тауышы миңә өр-яңы көс биргәндәй булды, әйтерһең, атайым эргәмдә һымаҡ тойҙом. Тимофей Тимофеевичтың исемемде белеүе, минең ошо мәлдә һауала булыуымды күреп-күҙәтеп тороуы һәм минең, ул нимә әйтһә, барыһын да мотлаҡ эшләйәсәгемә ышаныуы — был үҙе үк оло хуплау, ауыр фронт тормошона йәм биреүсе бер байрам ине.

Был юлдарҙы уҡығанда күңелдә яҡты хистәр тыуа, ғорурлыҡ менән: «Булған бит аҫыл ил ағалары, булған бит илдә батырҙар!» — тип уйлайһың.

1943 йылда Муса Гәрәев тағы бер осоусы-ас, буласаҡ ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Әмәтхан Солтан менән таныша. Атаһы яғынан — дағстанлы, әсәһе яғынан — Ҡырым татары Әмәтхан һәм Муса оҙаҡ ваҡыт күрше полктарҙа хәрәкәт итәләр, бер үк аэродромдан осалар, йыш ҡына бер үк алыштарҙа ҡатнашалар һәм эфирҙағы тауыштар араһында бер-береһен бик тиҙ танып ала торған булалар. Уларҙың дуҫлығы ғүмерлеккә әйләнә. Һуғыштан һуң да улар күрешеп, аралашып торалар. Ғөмүмән, Муса Гәрәев үҙенең хәрби дуҫтарын онотмай, китабында уларҙың бик күптәре тураһында йылы тойғолар менән иҫкә ала, иҫән ҡалғандарының хат аша ғына булһа ла хәлдәрен белешеп тора. Был, әлбиттә, уның оло кешелек сифаттары тураһында һөйләй.

Полктағы дуҫтары, командирҙар Мусаның үҙенә лә хөрмәт менән ҡарай. Ә инде бер көндә ике Советтар Союзы Геройы Алтын Йондоҙо менән Ленин ордены тапшырылғас, уның ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуймаҫ өсөн, хәрби осоштарға ебәрмәү сараһын күрә башлайҙар. Был наградаларҙы уға 1945 йылдың 1 майында Көнсығыш Пруссиялағы Растенбург аэродромында һауа армияһы командующийы Т.Т. Хрюкин тапшыра. Муса, әлбиттә, хәрби заданиелар үтәү өсөн осмайынса түҙмәй. «Бындай хәлдә ҡалыуым арҡаһында мин иптәштәремдең күҙҙәренә тура ҡарай алмай башланым», — ти ул. Ә бер көндө, полк командирының рөхсәтенән тыш, штаб начальнигының урынбаҫары

майор Иван Шевчук менән бергә әле һаман да ҡаршылыҡ күрһәтеүсе дошман позицияларын разведкалау маҡсатында осош та яһай.

«Был минең һуңғы хәрби осошом булырын мин ул саҡта әле белмәй инем», — тип хәтерләй ҡаһарман летчик. Сөнки тиҙҙән, бик тиҙҙән Еңеү көнө иғлан ителә. Ә Муса Гәрәевте шул осош көнөндә, сәғәтендә үк полк командиры отпускыға оҙата. Аҙаҡ беленеүенсә, әлеге осош ваҡытында самолет теткеләнеп бөтә, М. Гәрәев менән И. Шевчук аэродромға көс-хәл менән килеп еткән булып сыға. 250-се хәрби осош бына шундай була.

Муса Гәрәев башҡорт халҡының барлыҡ күркәм һыҙаттарын үҙенә туплаған. Ул ҡыйыу ҙа, батыр ҙа, саф намыҫлы, ихлас күңелле кеше булыуы менән дә замандаштары араһында оло хөрмәт ҡаҙана. Бөйөк илдең ҡайнар йөрәкле патриоты булыу менән бергә, ул һәр ваҡыт үҙ милләте менән ғорурланып йәшәй. Автобиографияһында үҙ ҡулы менән: атайым да, әсәйем дә башҡорт, үҙем дә башҡорт тип һыҙыҡ өҫтөнә алып билдәләп үтә. Күренекле яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Рафиҡов уның хаҡында ошондай бер эпизодты иҫкә ала:

«Бер мәл февраль аҙаҡтарында Күгәрсен районынан ҡайтып киләбеҙ. Бер нисә көн йөрөнөк, бер нисә ауылда халыҡ менән осраштыҡ. Мораҡта ҙур кисәлә сығыш яһаныҡ. Ағайҙың кәйефе күтәренке, бер нисә тапҡыр: «Минең халҡым бар, шуға ышандым», — тип ҡабатланы». Шул ваҡыт ул Булат Рафиҡовҡа: «Булат, һин боронғо тарихты, ырыуҙарҙы яҡшы беләһең. Минең ырыуым ниндәй? Шуны асыҡларға ярҙам ит», — тип мөрәжәғәт итә. Яҙыусы архив документтары аша уның атаһы яғынан — гәрәй-ҡыпсаҡ, әсәһенең тамъян ырыуынан булыуын асыҡлай.

Китабында «Беҙ — Илеш башҡорттары тигәнде йыш ҡабатлай, ә үҙен ҡыпсаҡ тип атар ине», — тип хәтерләй аҙаҡ Булат Рафиҡов был турала.

Халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың даны булып йәшәй Муса Гәрәев беҙҙең күңелдәрҙә.

* * *

Әҫәрҙәр: Үҙем — ерҙә, күңелем — һауала // Ағиҙел. 1980, № 5—7; Штурмовики идут на цель. 5-е изд. Уфа: Китап, 1990; Живу и помню. Литературная запись ЮрияДеля. Уфа: Китап, 1997.

Әҙәбиәт: Люди бессмертного подвига. Кн. 1. М., 1965; Славные сыны Башкирии. Кн. 1. Уфа, 1965; Паль Р. Есть у неба земля. Уфа, 1975; Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996; Рафиҡов Б. Муса китабы // Башҡортостан. 1997, 8 июль.

Зекериә Аҡназаров
(1924—2000)



Зекериә Шәрәфетдин улы Аҡназаров — башҡорт халҡының һәм Башҡортостан Республикаһының күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, халыҡ араһында оло хөрмәт ҡаҙанған талантлы етәксе. Уның 38 йәшендә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы рәйесе итеп һайланып, 24 йыл буйы, пенсияға киткәнгәсә, шул яуаплы вазифаны ҙур уңыш менән башҡарыуы йөмһүриәтебеҙ тарихында бик һирәк һәм күркәм күренеш булараҡ баһалана.

З.Ш. Аҡназаров 1924 йылдың 22 авгусында Башҡорт АССР-ының Йылайыр кантоны (хәҙерге Баймаҡ районы) Ямаш утарында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 10-сы йылдарҙа, Столыпин реформаһы ваҡытында 1-се Этҡол ауылынан бүленеп сығып, урман төпкөлөнә барып ултырған был утарҙа йәшәүселәр урман эше, ҡул көсөн ҡулланып таҡта ярыу, бура бурау, йорт һалыу, әзбиз яндырыу менән көн күрә. 1931 йылда, бөтөн ил буйынса мәжбүри башланғыс белем биреү тураһында закон ҡабул ителеү айҡанлы, Ямаш утарында ла башланғыс мәктәп асыла. Зекериә Аҡназаров, ошо мәктәптә башланғыс белем алғандан һуң, 1935 йылда 1-се Этҡол ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыуын дауам итә. Бында ул Фатима Ғәниева, Шакир Мостафин, Мөхәммәт Әлибаев, Хәким Байназаров кеүек арҙаҡлы уҡытыусыларҙан һабаҡ ала. Зекериәгә уларҙың һәм, ғөмүмән, мәктәптә уҡыуға, белем алыуға ҡарата һәйбәт атмосфераның йоғонтоһо ҙур була. Нәҡ ошо осорҙа Фатима Ғәниева апайҙары СССР Юғары Советына депутат итеп һайлана (1937), Ленин ордены менән награддана. 1938—1941 йылдарҙа З.Ш. Аҡназаров ул ваҡытта бөтөн республикала дан тотҡан Темәс башҡорт педагогия училищеһында уҡый. Училищела ул дәүерҙә Сәлих Алсынбаев, Хәбир Фәритов, Ғәле Ғүмәров һымаҡ тәрән белемле, тәжрибәле педагогтар уҡыта. Педучилищены тамамлап, 1941—1942 уҡыу йылында Баймаҡ районы Мырҙа башланғыс мәктәбендә балалар уҡыта. 1942 йылдың авгусынан

1945 йылдың ноябренә тиклем Совет Армияһы сафтарында була. Бында ул автоматсылар полкында хеҙмәт итә, полк мәктәбен тамамлай, отделение командиры, взвод командирының ярҙамсыһы вазифаһын атҡара. 1945 йылда ВКП(б) ағзалығына ҡабул ителә. 1945 йылдың аҙағында, армиянан демобилизацияланып ҡайтыу менән, уны ВЛКСМ-дың Баймаҡ район комитетының икенсе секретаре итеп һайлап ҡуялар. Әммә тиҙҙән, 1946 йылда, З.Ш. Аҡназаровты Свердловскиға (хәҙерге Екатеринбург) ике йыллыҡ партия мәктәбенә уҡырға ебәрәләр. 1948 йылда партия мәктәбен тамамлағандан һуң ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетына пропаганда һәм агитация бүлеге инструкторы итеп тәғәйенләнә. Бында йәш, эшлекле комсомол етәксеһе ни бары өс йыл эсендә пропаганда һәм агитация буйынса секретарь, беренсе секретарь дәрәжәһенә тиклем үҫә. 1950 йылда, ситтән тороп, К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих бүлексәһен тамамлай. З.Ш. Аҡназаров беренсе секретарь булып эшләгән йылдар (1951—1954) Башҡортостан комсомолы тарихында һәйбәт эҙ ҡалдыра, был эш уның үҙе өсөн дә етди тормош мәктәбенә әйләнә. «Нәҡ бына комсомолда беҙҙең күптәребеҙ, — тип хәтерләй ул үҙе шул йылдар тураһында, — сәйәси сынығыу алды, йәмәғәт эшмәкәрлеге тәжрибәһе тупланы, хужалыҡ сослоғона өйрәнде».

1953 йылдың декабрендә Башҡортостанға күренекле совет партия һәм дәүләт эшмәкәре С.Д. Игнатьев икенсе тапҡыр КПСС өлкә комитетының беренсе секретаре булып эшкә килә (беренсе мәртәбә ул 1943—1946 йылдарҙа ошо уҡ вазифаны башҡара). Ике ай үтеүгә, С.Д. Игнатьевтың тәҡдиме менән, З.Ш. Аҡназаровты КПСС өлкә комитетының партия органдары бүлеге мөдире итеп раҫлайҙар. Был ваҡытта уға утыҙ йәш тә тулмаған була. «Партия органдары бүлегенә мин алты йыл — 1954 йылдан алып 1960 йылға тиклем етәкселек иттем, — ти Зекериә Шәрәфетдин улы. — Башта С.Д. Игнатьев, унан һуң З.Н. Нуриев етәкселегендә эшләнем». Ошо йылдар эсендә З.Ш. Аҡназаров ойоштороу эшенең бик күп нескәлектәренә төшөнә, үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, сәйәси эшмәкәрлек сфераһына ныҡлап инеп китә. 1960—1962 йылдарҙа ул Мәскәүҙә, КПСС Үҙәк Комитеты эргәһендәге Ижтимағи фәндәр академияһының аспирантураһында уҡый. Кандидатлыҡ имтихандарын тапшыра, диссертация өҫтөндә эшләй башлай. Әммә уның тормошонда тағы ла көтөлмәгән ҡырҡа боролош барлыҡҡа килә һәм пландарҙы үҙгәртергә тура килә. Эш шунда: 1962 йылдың ғинуар аҙаҡтарында уға КПСС өлкә комитетының беренсе сәркәтип З.Н. Нуриев шылтырата һәм Республика Министрҙар Советының рәйесе вазифаһына тәҡдим ителәсәге тураһында хәбәр итә. «Мин бындай юғары вазифаны башыма ла килтермәй инем», — тип иҫкә төшөрә З.Ш. Аҡназаров. Тиҙҙән, КПСС Үҙәк Комитетында тейешле төрлө һөйләшеүҙәр-

әңгәмәләр үткәрелгәндән һуң, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы сессияһы уны Башҡортостандың Министрҙар Советы рәйесе итеп һайлап та ҡуя. Ошо оло вазифаны З.Ш. Аҡназаров, әйткәнебеҙсә, сирек быуат буйы тиерлек, 1986 йылда пенсияға киткәнгә тиклем, башҡара. Ул республикабыҙҙың социаль-иҡтисади үҫешенә ҙур өлөш индерҙе, министрлыҡтар, халыҡ депутаттарының район һәм ҡала Советтары эшмәкәрлеген яҡшыртыу менән даими шөғөлләнде. З.Ш. Аҡназаров Министрҙар Советы рәйесе булып эшләгән осорҙа Башҡортостан Рәсәй Федерацияһында иң көслө региондарҙың береһенә әйләнә. Башҡорт АССР-ының етештереү күләме (ауыл хужалығының тулайым продукцияһы менән бергә) 17 миллиард һумға етте. Ун беренсе биш йыллыҡта республика сәнәғәт етештереү күләме һәм дәүләткә малсылыҡ продукттарын һатыу буйынса пландарҙы ваҡытынан алда үтәне, халыҡтың аҡсалата килемдәре 23 процентҡа етте, тауар әйләнеше йылына 4 миллиардтан артып китте. Был күрһәткестәрҙә, әлбиттә, республика Министрҙар Советының һәм уның рәйесенең хеҙмәт өлөшө бәхәсһеҙ.

З.Ш. Аҡназаров VI—IX саҡырылыш СССР Юғары Советы (1962—1980), X һәм XI саҡырылыш РСФСР Юғары Советы (1980—1986), IV—XI саҡырылыш БАССР Юғары Советы депутаты була. Ул ике Ленин ордены (1971, 1984), Октябрь революцияһы (1981), ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1957, 1966), Халыҡтар дуҫлығы ордендары, бик күп миҙалдар менән наградланған. 1994 йылдың 27 майында Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты уның 70 йәшлек юбилейын тантаналы билдәләп үтеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Юбилей айҡанлы З.Ш. Аҡназаровҡа Баймаҡ районы һәм Баймаҡ ҡалаһының маҡтаулы гражданы тигән исем бирелде. Ауыр һәм болғансыҡ замандарҙа исеменә тап төшөрмәйенсә, намыҫ менән йәшәп, иленә һәм халҡына ысын-ысынында тоғро хеҙмәт итеү өлгөһөн күрһәтеп, оло ил ағаһы булып танылды ул.

З.Ш. Аҡназаров 2000 йылдың 2 апрелендә вафат булды. Башҡалала ул йәшәгән йортҡа таҡтаташ ҡуйылды, бер урамға уның исеме бирелде.

* * *

Хеҙмәттәр: Время. Люди. Мысли. Уфа: Китап. 1994.

Әҙәбиәт: Галин С. Фәһемле хәтирәләр // Башҡортостан, 1994, 6 апр.; З.Ш. Аҡназаров — ил ағаһы // Башҡортостан, 1994, 4 июнь; Акназаров З.Ш. // Башкортостан: Краткая энциклопедия. Гл. редактор Шакуров Р.З. Уфа, 1996.

Йөкмәткеһе

Башҡорт хан (XII б.)
Ҡол Ғәли (1170 йй. тирәһе — XIII б. тәүге яртыһы)
Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди (XIII б. урталары — XIV б. аҙағы) һәм Насретдин әл-Насыри (XIII б. аҙағы — 1351)
Исмәғил Тасимов (XVIII б.)
Кинйә Арыҫланов (1723—?)
Юлай Аҙналин (яҡынса 1730—1798 йй.)
Салауат Юлаев (1754—1800)
Мирсалих Биксурин (1819—1903)
Мифтахетдин Аҡмулла (1831—1895)
Зәйнулла Рәсүлев (1833—1917)
Шаһимарҙан Ибраһимов (1841—1891)
Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев (1841—1907)
Әбүбәкер Диваев (1855—1933)
Ризаитдин Фәхретдинов (1859—1936)
Мөхәммәтхан Ҡулаев (1873—1959)
Мансур Солтанов (1875—1919)
Һибәтулла Мәсәғүтов (1880—1933)
Таһир Байышев (1886—1974)
Нуриағзам Таһиров (1888—1938)
Мөхәммәтша Буранғол (1888—1966)
Әбделҡадир Инан (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) (1889—1976)
Әхмәтзәки Вәлиди Туған (1890—1970)
Муса Мортазин (1891—1937)
Йомабай Иҫәнбаев (1891—1943)
Шәриф Манатов (1892—1936)
Ғәлимйән Таған (1892—1948)
Дауыт Юлтый (1893—1938)
Ғәзиз Әлмөхәмәтов (1895—1938)
Шәһит Хоҙайбирҙин (1896—1924)
Миңлеғәле Шайморатов (1899—1943)
Рабиға Ҡушаева (1901—1937)
Ғәли (Ғәлимйән) Ишмырҙин (1903—1942)
Билал Йосопов (1904—1999)
Һәҙиә Дәүләтшина (1905—1954)
Ғабдулла Амантай (1907—1938)

Зәйнәб Биишева (1908—1996)
Таһир Күсимов (1909—1986)
Жәлил Кейекбаев (1911—1968)
Ҡадир Тимерғазин (1913—1963)
Хөсәйен Әхмәтов (1914—1993)
Мәғәфүр Хисмәтуллин (1915—2004)
Заһир Исмәғилев (1917—2003)
Муса Гәрәев (1922—1987)
Зекериә Аҡназаров (1924—2000)

Рашит Шакур

(Шакуров Рашит Закирович)

Знаменитые Башкиры

**Научно-биографические очерки**

(на башкирском языке)

Редакция мөдире С.М. Рәхимова
Мөхәррире С.М. Рәхимова
Рәссамы Р.Р. Ниғмәтуллин
Биҙәлеш мөхәррире Ф.Ф. Ислахов
Техник мөхәррире Г.А. Янғужина
Корректорҙары Ә.И. Илекәева, Ә.Ғ. Теләмова

Йыйырға бирелде 26.10.05. Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.12.05. Ҡағыҙ форматы 84*108 1/32. Офсет ҡағыҙы № 1. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 11,75. Шартлы буяу отт. 20,16. Иҫәп-баҫма таб. 17,74. Тиражы 3000 дана. Заказ № 1. 01.19.05.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

КИТАП